МОСОЛМАНДЫҢ КҮҢЕЛ ДОНЪЯҺЫ



Нуриман МУСИН

IslamicBook
Make Room For The Life



Ғәли (раҙыйаллаһу ғәнһү) әйткән:

«Ҡәлбеңде нәсихәттәр менән йәнләндер, хикмәт менән яҡтырт»

«Хикмәт, хикмәтле кәлимәләр һәм ғәмәлдәр ярҙамында йөрәгегеҙгә ял биреҙ. Тән арыған, хәлһеҙләнгән кеүек, күңел дә арый»

«Кешеләргә хикмәтле, уйландыра, йөрәктәренә хозурлыҡ бирә торған торған һүҙҙәр һөйләгеҙ»

МӘСКӘУ - 2025

МОСОЛМАНДЫҢ КҮҢЕЛ ДОНЪЯҺЫ

Нуриман Мусин

Башҡорт теленә тәржемә итеүсе:
Әҙибә Ғәҙел

Дини мөхәррире:
Айҙар Хәбибуллин

Дизайн:
Джихангир Ташдемир

БӨТӨН ХОҠУҠТАРЫ ҺАҠЛАНА

ISBN: 978-5-6052169-5-7

МӘСКӘҮ — 2025

IslamicBook
Make Room For The Life

МОСОЛМАНДЫҢ КҮҢЕЛ ДОНЪЯҺЫ

Нуриман Мусин

IslamicBook
Make Room For The Life

ТӘҠДИМ

Фани донъянан иман менән китерменме, һуңғы һулышымды алғанда рухиәтем иман менән тулы булырмы – мосолманды иң төп борсоған мәсьәлә ошо булырға тейеш. Иманлы йөрәк – ислам менән формалашҡан йөрәк. Ул шул тиклем пак, уны ҡулға алып, былай тип әйтергә мөмкин: «Ҡарағыҙ, йәмәғәт! Бында һеҙгә ҡаршы булған бер нәмә лә юҡ!» Ундай йөрәк – Аллаһ Сүбәхәнә үә Тәғәләгә иң гүзәл бүләк, сөнки ул «Уның барса Исемдәре сағылыш тапҡан яҡты, таҙа, саф, пак һәм күркәм көҙгө кеүек». «Заманыбыҙ яһилиәте» быуатында берәүҙе лә үпкәләтмәгән һәм үпкәләмәгән, изге ғәмәлдәренә яуап итеп бер нәмә лә көтмәгән ундай йөрәк халәтенә күтәрелеү дөрләп ятҡан ҡуҙҙы ҡулға алыу кеүек үк ҡатмарлы эш.

Йөрәк хаҡында уның Аллаһ Исемдәрен зекер иткәндәге, аяттар уҡығандағы халәтенә ҡарап баһа бирергә мөмкин. Ҡәлбеңде пак тотоп, ошо халәтте һаҡлау ләзем. Паклығыңды һаҡлау – хашийә (хәүеф һәм өмөт) мөхитендә йәшәү тигән һүҙ. Тап шундай мөхит йөрәгеңде «тере» килеш һаҡларға мөмкинлек бирә. Хашийәнән мәхрүм йөрәк ҡата, ҡырыҫлана. Ҡатылыҡ – ҡәлбеңдең тейешле халәтен юғалтыуы, хатта ки ташҡа әйләнә барыуы хаҡында һөйләй.

Ҡөрьән рәхмәтенә таянып, мосолман ҡәлбе ҡараңғылыҡ упҡындарынан хашийә үрҙәренә күтәрелергә ынтыла. Был айырым бер халәт, уны һаҡлауҙан да мөһимерәк нәмә юҡ, сөнки «Раббыңа ҡайтырға ваҡыт» тигән илаһи саҡырыу теләһә ниндәй мәлдә килеүе һәм юлың өҙөлөүе ихтимал. Беҙ ул саҡырыуҙың ҡасан килеүен белмәйбеҙ икән, үҙебеҙ ынтылған халәткә тиҙерәк ирешеү һәм уны һаҡларға ынтылыу ләзем. Был халәткә билдәле шарттар, мөхит һәм атмосфера тыуҙырыу ярҙамында ирешелә. Белеүебеҙсә, йөрәк бер халәттән икенсе халәткә күсә торған ағза, шуға күрә кем һәм нисек уға йоғонто яһауы уғата мөһим. Быға айырыуса иғтибарлы булырға кәрәк.

Ризыҡтың тәмен һәм сифатын һаҡлау маҡсатында, уны йә эҫе, йә һалҡын килеш табынға ҡуйырға кәрәк булған кеүек, йөрәгегеҙ «ҡәлби сәлим (сәләмәт ҡәлб)» сифатын алһын һәм илаһи нәмәләргә һиҙгерлекте арттырһын өсөн дә шарттар кәрәк. Был шарттар айырым мөхит талап итә. Ул иһә – тәҡүәләр, салих заттар мөхите. Бынан тыш һәр йөрәк айырым иғтибарға ла мохтаж, сөнки уның үҙенә генә хас булған, йылытҡан һәм яндырған, көйҙөргән һәм йомшартҡан яҡтары бар. Ниндәй мөхит, ниндәй дуҫтар йөрәккә ыңғай йоғонто яһай? Ниндәй

шарттар уны кәрәкле халәткә күтәрә ала? Ниндәй офоҡтарҙы үҙенә йәшергән мосолман йөрәге?

«Мосолмандың күңел донъяһы» китабы ошо һорауҙарға яуап биреү маҡсатында яҙылды һәм төп иғтибарын мосолман ынтылырға тейешле ҡәлб халәтенә хас сифаттарға йүнәлтте. Хеҙмәт заманыбыҙҙың Аллаһ Илсеһе (салләллаһу ғәләйһи үә сәлләм) юлынан тайпылмай барған салих заттарҙың фекерҙәренә, ислам мәҙәниәте нигеҙҙәренә һәм бөтә мосолман өммәтенең дөйөм мираҫы булған илаһи танып белеү (ғирфан) принциптарына таянып яҙылды. Китапта мосолман ынтылырға тейешле йөрәк халәте сифаттары ҡарала. Ул сифаттар, бер папканы асырға уйлаһаң, йөҙҙәрсә яңыһы асылған һандар архивына оҡшаш. Быны иҫбатлар өсөн, хикмәтле бәйәндәрҙең бер нисәһенә туҡтау ҙа етер:

«Аллаһ Илсеһенең [шәхесен һәм тормошон] яҡшы белеү, уға хөрмәт һәм һөйөү хистәре баҒлау – был донъя дәрестәрендә беҙ эйә булырға тейешле иң мөһим ғилем. Аллаһ Илсеһе (салләллаһу ғәләйһи үә сәлләм) хаҡында һис ни белмәгән, был ғилемдән мәхрүм кеше (меңдәрсә китап уҡып сығып, бихисап мәғлүмәткә эйә булһа ла) – наҙан кеше».

«Тәсауф – пак ҡәлб менән шәриғәт ҡанундары буйынса йәшәргә ынтылыу».

«Тәсауф – донъяуи маҡсаттарға ирешеү өсөн, шәп булып күренергә тырышыу түгел. Киреһенсә, - ул, түбән теләктәрҙән ваз кисеп, йөрәгеңдән донъяны ғына һөйөүҙе алып ташлап, үҙеңдең зәғифлегеңде танып, Аллаһ ҡашына баҫалҡы рәүештә барып баҫыу. Үҙеңдең «көсһөҙ ҡол» булыуыңды таныу».

«Рауза әнәләре менән дуҫ булғаны һәм килешеп йәшәгәне өсөн камил һәм гүзәл. Икенсе төрлө әйтһәк, тап әнәләренә сабырлығы сәбәпле, ул күркәм һәм хуш еҫле. Әҙәм балаһы һынау һәм ауырлыҡтарға ниндәй кимәлдә сабыр булһа, паклығы һәм рухиәте лә шундай кимәлдә була».

Хөрмәтле уҡыусыларыбыҙ, беҙ ентекле әҙерләгән «Мосолмандың күңел донъяһы» китабыбыҙ рухи йәһәттән сәләмәт йөрәк - ҡәлб-и сәлимгә эйә булыу юлында һеҙҙең ярҙамсығыҙ булыуын теләйбеҙ. Был хеҙмәткә нигеҙ булған ҡиммәтле мәғлүмәт менән бүлешкәндәрҙең һәммәһенә лә рәхмәтебеҙҙе белдерәбеҙ, Аллаһ бойорһа, уларҙың ғүмере оҙон, хеҙмәттәре емешле булһын, тип доға ҡылабыҙ.

ИНЕШ ҺҮҘ

Үҙенең ҙәғиф ҡолдарын кешеләр итеп «иң гүзәл һүрәттә» бар ҡылған, иман нигмәте биреп, Әфәндебеҙ Мөхәммәт Мостафа (салләллаһу ғәләйһи үә сәлләм) өммәтенән ҡылған Раббыбыҙ Аллаһҡа сикһеҙ маҡтауҙарыбыҙ булһын!

Һуңғы Пәйғәмбәр булып килһә лә, Нуры иң беренсе булып бар ҡылынған, ғаләмгә Рәхмәт, барса кешелеккә иң күркәм үрнәк, илаһи мөғжизә булып килгән Әфәндебеҙгә (салләллаһу ғәләйһи үә сәлләм) һәм уның әһле-бәйтенә сикһеҙ сәләмдәр һәм бәрәкәттәр булһын.

Был ғаләмде - өнһөҙ Ҡөрьән, ә Изге Ҡөрьәнде бәйән итеүсе ғаләм менән сағыштырып булғанлыҡтан, барса ғаләмдән һәм Изге Ҡөрьәндән ағылған сер һәм яҡтылыҡ тап кешегә төбәлгән. Серле бер үрнәк булып бар ҡылынған әҙәм заты Ҡөрьән һәм Сөннәткә ярашлы йәшәгән тәҡдирҙә генә үҙенең юғары халәтен һаҡлап ҡала ала.

Исламдың иң төп бәрәкәте – йөрәк үҫеше (инкишаф). Шул сәбәпле кеше Ҡөрьәндең һүҙ менән һәм Ғаләм Китабы билдәләренең матди объекттары рәүешендә бирелгән нәсихәттәре хаҡында фекер йөрөтөп ҡарарға тейеш, сөнки Йәнәбе Хаҡ Үҙенең ҡолдарын ошо эске (анфуси) һәм тышҡы (афаки) сағылыштар мөхитендә мөхәббәткә, яҡынлыҡҡа, дуҫлыҡҡа саҡыра.

Уның был саҡырыуын тоя алған тәҡүәле һәм рухи хикмәт менән тулы ҡолдары күрә: кешегә үҙенең сағылышын күрә алырлыҡ көҙгө рәүешендә бүләк ителгән йондоҙ шәлкемдәре менән биҙәлгән был күктәр, йәм тулы ерҙәр, бихисап илаһи гүзәллектәр менән биҙәлгән мөһабәт Ғаләм ниндәйҙер мәғәнәһеҙ һәм осраҡлы нәмә түгел. Киреһенсә, үҙҙәренең йәшәйеше менән төшөнә алырҙай кешеләргә аңлатып торалар: уларҙың һәр бер өлөшөнә бихисап сер һәм мәғәнә йәшерелгән.

Асылда, барса үҫемлектәр, хайуандар, кешеләр, йәмғиәттәр, күҙәнәктәр, серле электрон, нейтрон, протон кеүек атом өлөшсәләре һәм әле табылмаған кваркалар, ғөмүмән, кәләш бүлмәһе һымаҡ биҙәлгән был Ғаләм илаһи Көс һәм Бөйөклөк кәүҙәләнеше. Яралтыу, ижад – Раббыбыҙға хас сифат.

Күрә, ишетә һәм тоя белгән йөрәктәр өсөн Ғаләмдәге бөтә нәмә илаһи Көс һәм Бөйөклөк кәүҙәләнеше булып тора. Улар фани донъяның матди билдәләре булған рауза, сөмбөл һәм һандуғастарҙың халәтен тоя. Улар һәр барлыҡта Ал-

лаһ Сүбхәнәһү үә Тәғәләнең әл-Бәри (Ғаләмдә тәртип һәм гүзәллек эсендә Яралтыусы) һәм әл-Мусаувир (Һәр барлыҡҡа айырым бер үҙенсәлек, бер һүрәт биргән Яралтыусы) Исемдәренең сағылыштарын күҙәтә, елдәрҙең, йылға һәм тауҙарҙың өнһөҙ һүҙҙәрен ишетә. Был иман эйәләре тормоштарындағы әрнеткес һәм ҡыуаныслы ваҡиғаларҙа илаһи Ихтыярҙы күрә. Уларҙың күрер күңел күҙҙәре үҙҙәре менән булған һәр ваҡиғала илаһи мөрәжәғәтте уҡый.

Аллаһ Тәғәләнең рухи хикмәткә эйә булған, йөрәк офоҡтары юғары булған ҡолдары Раббыбыҙ менән дуҫлыҡтың төрлө сағылыштарын тоя башлай. Аллаһ Тәғәлә уларҙың ҡайһы берҙәрен, Шаһ Нәҡшибәнд һымаҡ, илаһи мөғжизәләрҙең һәм серле ғилемдәрҙең (тасарруф) тиңһеҙ океаны кәүҙәләнешенә әйләндерә. Икенселәрен, Мәжнүн кеүек, мөхәббәт сүллеге буйлап сәфәргә оҙата, өсөнсөләрен – шаҡ ҡатырғыс үҙәндәр буйлап сәйәхәт итергә. Кемдер, Аллаһтың бөйөклөгөн күреп, өнһөҙ ҡала. Кемделер, Юныс Әмре шикелле, мөхәббәт һандуғасына әүерелә. Ә кемдер, Мәүләнә кеүек, йөрәгенән хикмәт ынйыларын тарата.

Мәғрифәтуллаһта (Аллаһты танып белеүҙә) уңыштар ҡазанған мөьминдәр, илаһи мөхәббәттең ғәҙәттән тыш сағылыштарын (тәджәлли) тойғанлыҡтан, һәр нәмәнән нәсихәт ала, тирә-йүндә булғандарҙың тәрән мәғәнәһен күрә.

Шуға күрә, ябай кешеләрҙән айырмалы рәүештә, улар тәбиғәт мөғжизәләрен ҡәҙимге бер нәмә тип ҡабул итмәй. Ысындан да, ябай кеше рәссамдарҙың тәбиғәткә оҡшатып һынландырылған картиналары менән һоҡлана, ә Йәнәбе Хаҡтың Ижадына битараф ҡала. Ғаләм тулы мөғжизәләр улар өсөн ғәҙәти күренеш. Әммә Аллаһ дуҫтарының йөрәге Хаҡ Рәссамға һәм Уның яратылмышарына һоҡланыу һәм һөйөү менән тулы. Илаһи ҡөҙрәт менән бар ҡылынған тәбиғәттең бихисап мөғжизәләренә улар оло хөрмәт менән ҡарай. Бер үк тупраҡта үҫкән төрлө төҫтәге япраҡтар һәм сәскәләр, төҫө, еҫе, тәме менән айырылып торған емештәр... Ғүмерҙәре бер-ике генә аҙналыҡ булған күбәләктәрҙең ҡанаттарындағы һоҡланғыс биҙәктәр... Ғәжәйеп күркәм кеше тәне... Күреү һәләте һәм мейе эшмәкәрлеге... Аллаһ ҡолдары бихисап ошондай илаһи мөғжизәләрҙә «халәт теле» (лисан-и хәл) тип аталған серле хитап, мөрәжәғәт күрә. Аллаһтың ундай ҡолдары өсөн бөтә Ғаләм уҡыуҙарын көткән китап кеүек.

Раббыбыҙ Аллаһ һәр мөьминдең был бөйөк тәртиптең һәм хикмәттең илаһи бөйөклөгөн, серен, хикмәтен, хәҡиҡи асылын танып белеүен теләй. Быға табан юл – Йәнәбе Хаҡтың әмер-тыйыуҙарын бөтә күңелең менән ҡабул итеп һәм, мөхәббәт, хозурлыҡ (вәжд) тулы күңел менән, илаһи һөйөүҙә (истиғраҡ) үҙеңде юғалтып, ислам буйынса йәшәргә ынтылыу.

Беҙҙең юғары динебеҙ ислам кеше эшмәкәрлегенең бөтә өлкәләрен яйға һала. Ул кеше ғүмеренең һәр мәлен илаһи принциптар менән бәйләй.

Мөьмин, диндә, ғибәҙәттәрендә, әхлағында, ғәмәлдәрендә, йәмғиәттә үҙен тотошонда, хоҡуҡ һәм ҡанундарҙа ошо принциптарҙы үтәп, исламдың үрнәк шәхесе кимәленә күтәрелә ала. Күңелгә йән өргән тышҡы (заһир) һәм эске (батын) ислам принциптарын ни кимәлдә үҙләштерһә, йөрәк һәм тән аһәңенә, рух һәм форма берлегенә ни кимәлдә ирешһә, камиллығы ла шул кимәлдә булыр. Бындай үҫешкә лайыҡ булыр өсөн, иман эйәһе үҙенең эске донъяһын, аҡылын һәм йөрәген Ҡөрьән һәм Сөннәт критерийҙарына ярашлы үҙгәртеп ҡорорға, илаһи хикмәт хаҡында уйланырға һәм һуңғы һулышына ҡәҙәр хәҡиҡәт юлынан барырға ынтылырға тейеш. Икенсе яҡтан, Раббыбыҙ Аллаһтан йырағайта торған барса яманлыҡтарҙан да йыраҡ тороу ләзем.

Имам Шафиғи (рәхмәтуллаһи ғәләйһи) әйткән:

«Әгәр хәҡиҡәт менән мәшғүл булмаһаң, һине ялған баҫып алыр».

Ә Мәүләнә былай тигән:

«Әгәр һинең уйҙарың рауза икән, һин рауза баҡсаһында. Әгәр уйҙарың энә икән (әгәр аҡылың һәм уйҙарың нәфесеңә буйһона икән), һин утта янасаҡ утын ғына».

Икенсе төрлө әйтһәк, илаһи, юғары нәмәләр тураһында уйланыу йөрәкте йомшарта, ғибәҙәттәрҙәге хошуғты арттыра, Аллаһ ҡолдарын нәфес һәүәҫлектәренән аралай, сер һәм хикмәт донъяһына йөрәктәргә юл аса. Киреһенсә, түбән, шайтан һөйгән нәмәләр тураһында уйланыу кешене ғәмһеҙлеккә этәрә һәм нәфес ҡолона әүерелдерә.

Бөгөн, ҡыҙғанысҡа ҡаршы, йәнә яһилиәт заманы килде, йөрәктәрҙе һәм зиһендәрҙе ағыулап, йәшәйешебеҙҙең асыл маҡсатынан йырағайтып, хаҡ юлдан тайшанырға, әхирәт тураһында оноторға мәжбүр итеп, беҙҙе һәр яҡтан гонаһтар уратып алды.

Телевидение, интернет, киң мәғлүмәт сараларының һәм материалистик, капиталистик һәм либераль ҡараштарҙы сағылдырған уҡыу системаһының кире йоғонтоһо кешелекте матди һәм әхлаҡи йәһәттән һәләкәткә илтә.

Йөрәктәрҙе илерткән, ғафилға әйләндергән заманыбыҙ гонаһтары хоҡуҡтан һәм хәҡиҡәттән мәхрүм кешеләрҙе ташҡындағы бүрәнәләр һымаҡ алып китә. Йығылғандар үҙҙәренең йығылыуын, абындырылғандар үҙҙәренең абыныуын аңламай. Әхирәттә ҙур ғазаптарға сәбәпсе буласаҡ ислам тыйған, кешенең тәбиғәтенә ҡаршы килгән ғәмәлдәр, һәүәҫлектәр, күңелле музыка һымаҡ, нәфескә ләззәт бирә.

Шул сәбәпле беҙ, иман эйәләре, үҙебеҙҙе һәм үҙебеҙҙең быуынды әхлаҡи бөтәү яра булып боҙолоуҙан, рухи тайпылыуҙарҙан һәм ялғансылар упҡынына

эләгеүҙән һаҡларға тейешбеҙ. Бөгөн юғары ҡиммәттәребеҙгә нығыраҡ тотоноу, хатта ки сат йәбешеү ләзем.

Был ҡиммәттәр Аллаһ Илсеһенең (салләллаһу ғәләйһи үә сәлләм) беҙгә һаҡлар өсөн бирелгән ике бөйөк мираҫы – Ҡөрьән һәм Сөннәте. Һуңынан – пак тормоштары менән Ҡөрьәндең һәм Сөннәттең тере тәфсире булған Аллаһ дуҫтарының, тәҡүә ғалимдарҙың һәм хикмәт эйәләренең хикмәт ынйылары.

Был китаптың маҡсаты – Аллаһ пәйғәмбәрҙәренең, дуҫтарының мәғрифәт, рухиәт тулы мөрәжәғәтен халыҡҡа еткереү. Хеҙмәтебеҙҙәге бөтә яҡшылыҡ рухиәт донъяһынан, ә хата-кәмселектәр – үҙебеҙҙән.

Хәҙистә әйтелә: *«Мөьмин бал ҡортона оҡшаш»*. Бал ҡорто һаҫыҡ урындарҙа осоп йөрөмәҫ, улар – гүзәл рауза баҡсаларында. Улар үҫемлек һеркәләрен күсерә, кәрәҙҙәрҙе тултырыр өсөн, бихисап сәскәләрҙең нектарын йыя һәм, кешеләргә файҙаланырға мөмкинлек биреп, уларҙы шифалы һәм тәмле балға әйләндерә.

Хөрмәтле уҡыусыларыбыҙ, был китапта беҙ һеҙгә фекерҙәребеҙҙе хәҡиҡәтте һөйөүселәрҙең, ғалимдарҙың һәм салих заттарҙың төйәктәренән йыйған хикмәт гөлләмәләре менән биҙәп тапшырырға тырыштыҡ.

Раббыбыҙ Аллаһ йөрәктәребеҙҙе һәр даим дөрөҫлөккә, яҡшылыҡҡа, хикмәткә һәм хәҡиҡәткә йүнәлтһен.

Һәр ваҡыт Ул беҙҙең хис-тойғоларыбыҙ һәм уйҙарыбыҙ, халәтебеҙ һәм әхлағыбыҙҙан ҡәнәғәт булһын.

Үҙебеҙҙе һәм киләсәк быуындарыбыҙҙы яһилиәткә төшөүҙән һәм хәйерселек баҙарында бәхет эҙләүҙән аралаһын.

Үҙенең киң рәхмәте һәм йомартлығы менән беҙҙе, Үҙенең зәғиф ҡолдарын, рәхмәтенә, рухи хикмәтенә, ризалығына, һөйөүенә лайыҡ булған ҡолдары араһында ҡылһын.

Амин!

Нуриман МУСИН

2021

ҒАЛӘМ СЕРЕ ҺӘМ ХИКМӘТЕН КҮҢЕЛ КҮҘЕ МЕНӘН УҡЫУ

Ғалəм көсө ағымдары – өнһөҙ һəм һүҙһеҙ илаһи шиғырҙар тиергə мөмкин. Ул шиғырҙы кеше йөрəк хисе ҡабул итə алған ҡəҙəр уҡый.

Əгəр ҙə ки кеше үҙенə күрə дəрес аудиторияһы булған был донъя буйлап, раузалар, сөмбөлдəр, һандуғастар, елдəр, шишмəлəр һəм тауҙар телен аңламай йөрөй икəн – тимəк, йөрəгe харабаға əйлəнгəн.

Был Ғалəм – Аллаһты танып белеү мəктəбе. Ул мəктəптең уҡыусылары – бөтə кешелек, ə уҡытыусылары – пəйғəмбəрҙəр. Пəйғəмбəрҙəр кешеларҙе Изге Яҙмаларҙы уҡырға, хикмəткə өйрəткəн, уларҙы паклаған һəм тəрбиəлəгəн.

Ул мəктəптең ике төрлө дəреслеге бар:

1. Һүҙле Китап – Ҡөрьəн-Кəрим.

2. Матди донъя китабы – Ғалəм.

❁

Ҡөрьəн һəм Ғалəм – бер-береһенең тəфсире булған илаһи үəхиҙең ике сағылышы. Аллаһ Тəғəлə Үҙенең Ғалəмдəге аяттарын Ҡөрьəн ярҙамында аңлата, ə Ҡөрьəн аяттарын – Ғалəм ярҙамында. Йəнəбе Хаҡ Ҡөрьəн аяттары кəлимəләре аша беҙгə нəсихəт биргəн, киҫəткəн кеүек, ара-тирə быны Ғалəмдең теге йəки был объект аяттары аша ла эшлəй. Шуға күрə Уның фани донъяға ебəрелгəн аяттарына ризаһыҙлыҡ белдерергə йəки уларға битараф ҡалырға ярамай, сөнки кеше өсөн Ҡөрьəн аяттарына ғəмһеҙ ҡалыу кеүек үк бəхетһеҙлек был.

❁

Аллаһ Тəғəлə Ҡөрьəндə 137 тапҡыр Ғалəмдəге бөйөклөк һəм илаһи ҡөҙрəт сағылыштары тураһында уйланырға саҡыра.

Ҡөрьән – һүҙ менән бирелгән бәйән итеүсе, нәсихәт биреүсе Ғаләм…

Кеше – Ҡөрьән һәм Ғаләм фокусы төбәлгән рухи мәғфирәт үҙәге һәм илаһи сағылыш (тәджәлли) дәлиле…

Ғаләм – илаһи исемдәрҙең матди сағылышы, ғәжәйеп аяттар менән тулы сер һәм хикмәт китабы, ул, әйтерһең дә, һүҙһеҙ Ҡөрьән…

❁

Рухиәт юғарылығына күтәрелгәндәргә һәм Ғаләмгә хикмәт күҙе менән баҡҡандарға зиннәтле гәлсәр кәндил ише күктәр илаһи серҙәр тәрәнлеген тойорға мөкинлек бирә…

Улар өсөн тупраҡ, һәр ағас һәм һәр япраҡ, усын асып, һоҡланыуҙан тетрәнеп, Раббыһына доға ҡыла…

Үлән – пәйғәмбәребеҙ Мөхәммәт (саллəллаһу ғəләйһи үə сəллəм) өммәте өсөн намаҙлыҡ, ә улар араһындағы сәскәләр, гүзәл өммәт һымаҡ, вәджд (Аллаһты мөкиббән китеп һөйөү) халәтендә тетрәнә…

Кескәй генә ҡоштарҙың Аллаһты юҡһынған остоҡ ҡына йөрәктәренән ағылған ғәжәйеп моң Раббыһына мәҙхиә булып ағыла…

Ҡөҙрәт дәлиле булған тауҙар, әйтерһең, Аллаһ ҡашында тора…

Болоттар – күктәрҙә гиҙгән бәрәкәт һәм ниғмәт сығанағы булған океандар ише…

Елдәр – серле илһам хәбәрселәре…

Йәшендәр – ҡурҡыу һәм өмөт билдәһе… Күк күкрәүе – Үҙенең мәхлүктәрен ҡөҙрәте һәм бөйөклөгө менән Буйһондороусының ғәмһеҙҙәрҙе әмер-тыйыуҙары менән менән киҫәтеүе…

Көн – Аллаһ яҡтылығының сағылышы ярсыҡтары, ә төн – илаһи серҙәр һәм хикмәттәр тураһында тәрән уйланыу мәле…

Тимәк, иң мөһиме - **«Һине юҡтан бар иткән Раббының исеме менән уҡый башла!»** (әл-Ғәләк (Яралғы тамсыһы), 1) илаһи әмеренә буйһоноп, иман эйәһең һәр даим ҡәлбе менән яңынан-яңы үрҙәрҙе яуларға ынтылыуы.

❁

Аллаһтың ризалығына ирешеү һәм Уға яҡынайыу юлы — йөрәктең мәхлүктәргә түгел, ә Раббыһына, сәбәптәргә түгел, шул Сәбәптәрҙе бар ҡылыусыһына, ризығына түгел, ә шул Ризыҡты биреүсеһенә уҡталырға тейешле халәте.

❁

Барса Ғаләм – Йәнәбе Хаҡтың илаһи Ҡөҙрәте һәм Бөйөклөгө аяты. Раббыбыҙ Аллаһ уны фекер йөрөтөргә, нәсихәт алырға һәләтле әҙәмдең ҡәлбе, мөхәббәт менән тулып, тәҡүәлеккә ирешә алырлыҡ итеп бар ҡылған.....

Ғаләмдәге ҡөҙрәт ағымдары – өнһөҙ һәм һүҙһеҙ илаһи шиғриәт тиергә була. Ул шиғырҙарҙы кеше йөрәге нескәлегенә бәрәбәр уҡый ала.

Йөрәк сәнғәте – илаһи бөйөклөк сағылыштарын уҡый алыу, ҡөҙрәт ағымдарын, һоҡланғыс илаһи матурлыҡтарҙы тоя белеү һәләте, Аллаһ ризалығын алыу ынтылышы...

❁

Йәшәйеште тәьмин иткән Ғаләмдәге камил экологик баланс бер нәмәне асыҡ күрһәтеп тора: нескә был тәртип осраҡлы тап килеүҙәр арҡаһында барлыҡҡа килмәгән. Шуға күрә Аллаһ Тәғәләнең Ҡөрьәндәге тәүге әмере шундай:

«Һине юҡтан бар иткән Раббының исеме менән уҡый башла!» (әл-Ғәләк (Яралғы тамсыһы), 1), йәғни:

– Ҡөрьәнде күңел күҙе менән уҡы!

– Ғәләк тамсыһынан барлыҡҡа килеүең тураһында уҡы, был турала фекер йөрөтөп ҡара!

– Формаһыҙ шыйыҡсанан барлыҡҡа килеп, камил килеш-килбәт алыуың хаҡында уҡы!

– Рухи тетрәнеү, хошуғ менән ғүмереңдең фани булыуын уҡы!

– Ниндәй яҡшы һәм яман ғәмәлдәр ҡылыуың тураһында уйлан, бөгөн үк һабаҡ алып, бер көн килеп, «Уҡы!» тип үҙеңә биреләсәк Ғүмер китабыңды уҡый башла.

❁

Ғаләмдәге һәр бер атом, Ҡөрьәндәге һәр бер хәреф, әҙәм тәнендәге һәр бер күҙәнәк – һис нәмә бушҡа ғына барлыҡҡа килмәгән. Бөтә барлыҡ үҙ телендә, үҙ халәте менән кешегә мөрәжәғәт итә. Әгәр ҙә ки кеше, наҙанлығына барып, башҡа мәхлүктәр кеүек былай ғына, маҡсатһыҙ ғына бар ҡылынғанмын, тип уйлай һәм һис бер яуаплылыҡ тоймай йәшәргә маташа икән, ул бик ныҡ яңылыша, илаһи хикмәтте һәм хәҡиҡәтте ситкә этәреп, үҙен-үҙе алдай!

❁

Барса Ғаләм ғәҙәттән тыш һиҙгер, бөйөк илаһи көс ағымдары ихтыярына буйһоноп йәшәй. Юғары зат, донъя йәме булған кеше, хисаплама биреүҙе уйла-

майынса, Изге Яҙмаларҙы уҡымайынса, һәүәҫлектәренә генә буйһоноп йәшәй аламы?

Аяттарҙа әйтелә:

«Былай ғына, эше булмағандан эш булһын, тип кенә беҙҙе яралтты һәм, ысынлап та, Ул беҙҙе Үҙ хозурына ҡайтармаҫ, - тип өмөтләнәһегеҙме?» (әл-Мөьминүн (Мөьминдәр), 115);

«Кеше үҙен һис бер сикләүҙәрһеҙ, күҙәтеүсеһеҙ йәшәргә хаҡлы, тип һанаймы әллә?» (әл-Ҡиәмәһ (Ҡиәмәт), 36).

❁

Йәә кеше! Тормошоңа һәм Ғаләмгә йомоҡ күңел күҙе менән баҡма! Һис нәмә алъюҫыҡҡа бар ҡылынмаған...

Раббыбыҙ Аллаһ, кеше төшөнһөн өсөн, күктәгеләрҙең һәм ерҙәгеләрҙең, инсандың үҙендә һәм тирә-йүндә булғандарҙың һәммәһен Аллаһтың Барлығына, Берлегенә, Ҡөҙрәтенә аяттар рәүешендә бар ҡылған һәм уларҙы фекерләп ҡарар өсөн материал иткән.

❁

Аллаһ Сүбхәнәһү үә Тәғәлә һәммәһен камил үлсәм менән бар ҡылған. Беҙ Ғаләмгә баҡһаҡ, шуны күрәбеҙ: атомдан алып йыһанға ҡәҙәр һәр нәмәлә илаһи тәртип һәм камиллыҡ.

«Хәҙер 21% кислород һәм 77% азот булған һауа составы иртәгә үҙгәреүе ихтимал», - тип берәйһе әйтә аламы? Ғаләмдәге һоҡланғыс илаһи тәртип арҡаһында, хатта ки атеист был донъяла йәшәй ала, әммә ләкин уның күңел күҙе һуҡыр, шуға күрә ул иман килтерә алмай.

❁

Илаһи Ҡөҙрәт арҡаһында, ике ут – Ер үҙәгендәге магма һәм күктәге Ҡояш араһында имен-аман йәшәгән кешеләргә күпме нәсихәт һәм киҫәтеү бар.

Шулай уҡ үҙебеҙҙә һәм тирә-йүндә бихисап вирустар һәм бактериялар булһа ла, Раббыбыҙ Аллаһ беҙгә һаулыҡ бүләк итә. Был ниғмәтте һәм рәхмәтте осраҡлы тап килеү тип иҫәпләү – иҫәрлек һәм күңел күҙенең тулы һуҡырлығы.

❁

Ғаләм – фекер йөрөтөү өсөн уҡыу аудиторияһы, иман лабораторияһы. Бында имандан йыраҡ булыу өсөн, аҡылың зәғиф, мисәтләнәгән, күңел күҙең һуҡыр булыуы кәрәк...

❁

Илаһи Ижад мөғжизәһе булған Ғаләмдәге сикһеҙ хикмәт һәм хәҡиҡәт тураһында уйлана белгән кеше яҡшы төшөнә: Ерҙә йән эйәләре ғүмер итә алһын өсөн, улар ҙур ғилем һәм ҡөҙрәткә эйә Заттың яҡлауына, һаҡлауына мохтаж. Илаһи мөғжизәләрҙе, ниғмәттәрҙе улар үҙҙәре бар ҡыла алмай. Быны аңлаған, аҡылы, выжданы булған, мантики ҡанундарҙы аңлаған бер әҙәм дә Ғаләмде Бар ҡылған Аллаһҡа ҡаршы сығырға йөрьәт итмәй.

❁

Үҙ-үҙеңә һорау биреү ләзем: «Беҙҙән ҡайҙан килдек, ҡайҙа юл тотабыҙ? Былар нимәгә кәрәк? Беҙ кем биләмәһендә йәшәйбеҙ? Беҙгә уны кем ышанып тапшырҙы һәм мөмкинлектәр бирҙе? Ул ниғмәттәр ниндәй маҡсат менән һәм ҡайҙан килде? Улар үҙенән-үҙе пәйҙә булдымы? Үҙенән-үҙе генә барлыҡҡа килгән нәмәләр бармы һуң?»

Бәндә, үҙенә ошо һорауҙарҙы бирһә, Раббыбына мохтаж икәнен ап-асыҡ күрер!

❁

Ғаләмгә баҡһаҡ, күрәбеҙ: һис ҡайҙа ғәмһеҙлек, ялҡаулыҡ, тотҡарлыҡ, һүлпәнлек юҡ. Ҡояш, ай, йондоҙҙар, күк, ер һәм барса йән эйәһе илаһи ихтыяр билдәләгән бурысты үтәй, шуға күрә донъялағы һәр нәмә туҡтауһыҙ әйләнә, эшләй, хәрәкәт итә. Микродонъяла ла шундай уҡ хәл һаҡлана: атомда протондар, нейтрондар, электрондар, кваркалар ядро тирәләй ғәләмәт ҙур тиҙлек менән әйләнә, даими хәрәкәт итә.

Әгәр кеше, илаһи тәртиптән ситләшеп, тырышманлыҡты ҡалдырһа, хеҙмәттән, изге ғәмәлдәрҙән туҡталһа, был инде наҙанлыҡ!

❁

Инсан тәфсире булған Ғаләмдә барсаһы һәр ваҡыт әүҙем - микродонъяларҙан макродонъяларға ҡәҙәр һәммәһе хәрәкәттә:

– Миллиардтарса галактикалар даимән әйләнеп тора. Ҡояш, ай һәм йондоҙҙар аҙнаһына хатта бер тапҡыр ҙа ял итмәй.

– Йөрәгебеҙ ҙә йыл һайын ял һорамай.

– Материяның иң кескәй өлөшө иҫәпләнгән атом ядроһындағы протондар, нейтрондар һәм ядро тирәһендәге электрондар иҫ киткес ҙур тиҙлек менән әйләнә. Водород атомындағы электрон ядро тирәләй секундына 2000 км тиҙлек менән әйләнә.

Былар һәммәһе беҙҙең өсөн, ғибәҙәттәребеҙ, Раббыбыҙға хеҙмәтебеҙ өсөн нәсихәт; алтын урталыҡты һайлауға, әммә һәр саҡ тырышлыҡ һалыуға нәсихәт, мөрәжәғәт.

Иҫтән сығармайыҡ, беҙгә күркәм үрнәк булған сәхәбәләр, ҡыйынлыҡтарға ҡарамайынса, ислам яҡтылығын таратыр өсөн, тәүәккәллек һәм тырышлыҡ менән донъяның төрлө мөйөштәренә юл тотҡандар; баштарҙы ҡырҡыусы йәлләттәр янында батшаларға Аллаһ Илсеһенең (салләллаһу ғәләйһи үә сәлләм) хаттарын уҡығандар, һис ҡасан бирешмәгәндәр, арыу-талыуҙы онотҡандар. Аллаһҡа һәм Аллаһ Илсеһе (салләллаһу ғәләйһи үә сәлләм) өммәтенә хеҙмәт ләззәте уларға көс биргән.

Мосолман өсөн оҙайлы ял ғүмер һуңында ғына, Аллаһ юлында хеҙмәттән һуң башлана һәм ҡәберҙә, әхирәттә дауам итә...

❁

Ғаләмдәге бер нәмә лә буштан-бушҡа яратылмаған. Ғаләм – фекер йөрөтөү китабы, уның илаһи серҙәрен һәм мәғәнәләрен күңел күҙе менән уҡырға, төшөнөргә мөмкин. Ә кешенең уны ниндәй кимәлдә уҡый алыуы уның ҡәлбе үҫеше дәрәжәһенә (инкишаф) бәйле.

Мәҫәлән, яҙ етеп, бар тирә-йүн дәрт, илһам менән тулғанда, билдәле үҫеш кимәленә (инкишаф) еткән Аллаһ ҡоло, гөлгә күмелгән ҡырҙарҙы, уңдырышлы ерҙе, шаулап-гөрләп аҡҡан шишмә-йылғаларҙы күрә һәм үҙе өсөн шундай һығымта яһай: «Мин дә шулай, илһамланып, ғүмерем маҡсаты – Аллаһ юлында тырышлыҡ күрһәтеүгә һәм ғибәҙәттәргә бағышларға тейешмен үҙемде...»

Көҙ еткәс, ул үҙе өсөн йәнә унда нәсихәт күрә: һарғайып ҡойолған япраҡтар ғүмеренең үтеп барыуын хәтергә төшөрә, елдә елберҙәп ултырған сәрүи ағастары алыҫ яҡтарҙан ҡул болғай һымаҡ, ә офоҡ артына яй ғына шылып барған Ҡояш ғүмеренең байыуы тураһында һөйләй кеүек. Ундай кеше һәр нәмәлә илаһи сағылышты тоя. Бер мөмкинлекте лә ҡулдан ысҡындырмайынса, ул күберәк ғибәҙәттә булырға, Раббыһының әмерҙәрен үтәргә, йомарт һәм физакәр булырға тырыша...

❁

Фил тиреһенә миллиондарса ҡырмыҫҡаны урынлаштырһаң да, ул йәнләнә алмаҫ. Әммә уның йәшәү эшмәкәрлеген тәьмин иткән ағзалар ҡырмыҫҡаларҙа ла, хатта ки уларҙан да бәләкәйерәк йән эйәләрендә лә бар. Раббыбыҙҙың ғилеме, ҡөҙрәте һәм оҫталығы микродонъяла ла, макродонъяла ла ни тиклем ҙур!

Йәнәбе Хаҡтың Үҙ яратылмыштарында сағылдырған ғилеме, хикмәте һәм ҡөҙрәте Уның Затының бөйөклөгөн һәм илаһи Ҡөҙрәт алдында әҙәм балаһының көсһеҙ һәм зәғиф булыуын иҫкә төшөрә.

Мәҫәлән, Аллаһ бар ҡылған һарыҡ үлән ашай, һыу эсә һәм улар һөткә әүерелә. Әммә ләкин, әгәр бәндә иң юғары технологияларҙы ҡулланып фабрика төҙөһә һәм агрегаттарға бер яҡтан үлән, икенсе яҡтан һыу ебәрһә, ул барыбер һарыҡ һөтө етештерә алмаясаҡ.

Донъя барлыҡҡа килгәне бирле төрлө йән эйәләренең ихтыяжын күҙ уңында тотоп бихисап табындар ҡоролоуында һәм Хисап көнөнә тиклем уның шулай дауам итеүендә күпме нәсихәт бар.

Белеүебеҙсә, Ерҙең дүрттән өс өлөшө һыу менән ҡапланған. Ҡоро ерҙең дүрттән бер өлөшөнән ашыуы ҡая таштарҙан һәм үҫемлек үҫмәгән сүллектәрҙән тора. Файҙаланырға мөмкин булған ерҙәр әҙ ҡала. Әммә ни ҡәҙәр ҡөҙрәтле Раббыбыҙ: ошо ерҙе ул донъя яратылғаны бирле барса йән эйәләрен ризыҡландырған бихисап бәрәкәттәр менән тулы ниғмәт сығанағы иткән...

❁

Кескәй генә орлоҡтан нисек ағас үҫеп сыға? Был ағас нисек тонналап емеш бирә? Орлоҡта бындай үҫештең планы һәм программаһы нисек һаҡлана?

Йомортҡанан нисек тере йән эйәһе килеп сыға? Йә булмаһа кеше? Нисек ул юҡ ҡына бер тамсынан үҫешә? Ниндәй көс бөтә ағзалары менән организмды ошо тамсыла һаҡлай?

Бер һүҙ менән әйткәндә, һәр бер йән эйәһе үҙенең мөғжизәле барлыҡҡа килеү сере менән бергә үҙендә илаһи көс һәм бөйөклөк мисәтен йөрөтә. Бының күрергә һәләтле булған күҙҙәр күрә.

❁

Һәр мәл тәнебеҙ өлөштәрендәге бихисап фабрикаларҙа мөкәммәл рәүештә миллиардтарса биохимик процесс бара, ә беҙ был турала уйлап та бирмәйбеҙ. Әгәр ҙә ки күҙәнәктәр, ағзалар менән идара итеүҙе бер генә сәғәткә булһа ла үҙебеҙгә тапшырһалар, беҙ бик күп тапҡыр мөшкөл хәлдә ҡалыр инек. Раббыбыҙ алдында ни ҡәҙәр зәғиф, ни ҡәҙәр Уға мохтаж булыуыбыҙҙы төшөнөр өсөн ошо миҫал да етә, бәс, шулай булғас, Уға итәғәтле, рәхмәтле булыу, Уның әмерҙәрен үтәү ләзем.

Раббыбыҙ Аллаһ аятта һорау бирә: **«Эй, әҙәм балаһы) нимәгә ҡыҙығып (алданып), һин сикһеҙ йомарт Аллаһтың ниғмәттәренән (сауаптан, ярлыҡаныуҙан, йәннәттән) ҡоро ҡалдың? Аллаһ һине юҡтан бир итте,**

сәләмәт ағзалар биреп (бөтә кәүҙәңде) тигеҙ, теүәл итте (уларҙы бер-береһенә яраҡлаштырып) бөтә яғыңды үлсәм менән камиллаштырҙы» (әл-Инфитар (Ярылыу), 6-8).

❁

Ун тонналы филде ун йәшлек кенә баланың Аллаһ ярҙамы менән теләгән урынына алып барыуында күпме нәсихәт бар. Икенсе яҡтан, күҙгә лә күренмәгән кескәй генә вирустың бәһлеүәндәрҙе лә аяҡтан йығыуын күреп, әҙәм балаһының ни тиклем зәғиф булыуын да күрәбеҙ!

Тимәк, кеше, Аллаһ бүләк итеп биргән көс һәм ҡөҙрәткә маһайып, һауаланырға, барса бәрәкәттәрҙең Хаҡ Хужаһын оноторға тейеш түгел. Киреһенсә, кеше рәхмәтле булырға, илаһи Бөйөклөк алдында үҙенең туҙандан да кескәй булыуын танырға, һәр ваҡыт Аллаһҡа һыйынырға тейеш

❁

Шейх Саади Ширази говорит:

«Сәғди Ширази шәйех әйтә:

«Йәнәбе Хаҡ, неҙ күреп, һиҙеп, тәмләп һәм зиһенегеҙ менән ләззәт кисерһен өсөн, ерҙән сәскәләр, ризыҡтар, төҫтәр һәм хуш еҫтәр бар ҡылған.

Ул (неҙгә һый өсөн) орлоҡтан - финик ағасы, ағасынан – емештәр, бал ҡорттары ярҙамында бал яралтҡан.

Ул энәләре араһында – раузаны, ғәзәл (антилопа) эсенән – мисек, ерҙән – алтын, ҡоро ботаҡтан йәш япраҡтар яралтҡан.

Үҙ ҡөҙрәте менән Ул йөҙөгөҙҙө күҙҙәр һәм ҡаштар менән биҙәгән.

Ул – сикһеҙ Ҡөҙрәт Эйәһе. Яҡшылыҡ һәм ниғмәттәр бүләк итеп, Ул ҡолдарын тәрбиә ҡыла.

(Яуап итеп) бөтә йөрәктән тел менән генә түгел, бөтә тән менән дә даимән рәхмәтебеҙҙе белдерергә тейеш түгебеҙме ни?»

❁

Раббыбыҙ Аллаһ илаһи бөйөклөк ҡашында тәрән фекер йөрөтөүебеҙҙе, бихисап йән эйәләренең йәшәйешенән нәсихәт алыуыбыҙҙы һәм, күңел күҙебеҙ менән ул аяттарҙағы илаһи мөрәжәғәттәрҙе уҡыуыбыҙҙы теләй.

Мәҫәлән, ер ғүмеребеҙҙең фани булыуын күрһәтеп тора. Беҙ йөрөгән ер меңәр йыл элек тә булған, тимәк миллиардтарса кешеләрҙең күләгәләре төшкән шул уҡ ерҙән йөрөйбөҙ. Икенсе яҡтан, ошо уҡ ерҙән һут алып, киләһе быуын-

дарҙың матди ҡабырсаҡтары ла пәйҙә буласаҡ. Йәғни, дөйөм алғанда, тәнебеҙ – бер ерҙән икенсе ергә бөйөк күсеш!

Ғаләмдәге илаһи ҡөҙрәт ағымдары хаҡында фекер йөрөтөп, ғәжәпләнмәү мөмкинме һуң? Мәҫәлән, көн һайын эскән бер стакан һыуыбыҙҙы ғына алайыҡ.

Һыу 2 атом водород 1 атом кислородтан ғибәрәт. Береһе – тиҙ тоҡанып китеүсе элемент, икенсеһе – яныуға булышлыҡ итеүсе. Әммә ләкин Аллаһ Тәғәлә барса йән эйәһенә һыу ярҙамында ғүмер бирә.

Ер барлыҡҡа килгәне бирле был стакандағы һыу ер менән күк араһында күпме күсеп йөрөнө икән? Ерҙә саҡта ул кешеләр, хайуандар тәне аша үтә, ҡанға ла, күҙ йәшенә лә, һейҙеккә лә, болғансыҡ, бысраҡ һыуға ла әйләнә. Ахыр килеп, Ҡояш эҫелеге аҫтында ул парға әйләнә, һәм елдәр уны күк буйлап йөрөтә. Шул рәүешле һыу фильтр аша үтә, паклана, ап-аҡ таҙа болотҡа әүерелә. Ҡайһы саҡ ул ямғыр тамсыһы, ҡайһы саҡ борсаҡ, ҡайһы саҡ ҡар рәүешендә Аллаһтың рәхмәте булып йәнә ергә төшә. Һәм ул йәнә бихисап заттар, ер, йәшелсә, емештәр аша үтә.

Стакандағы беҙ эскән һыу донъя барлыҡҡа килгәне бирле күк менән ер араһындағы был циклды күпме тапҡыр үтте икән? Бәндә быны асыҡлай алмай. Бер стакан һыуҙың үткән юлын яҙыу мөмкин булһа, уның тарихы бихисап томдарға һыйыр ине...

Хөрмәтле Мәүләнә, һыуҙың мажаралары тураһында бәйән итеп, шундай нәсихәт биргән: «Һыу мохтаждарҙы һәм етемдәрҙе туйындыра, сарсағандарҙың һыуһындарын ҡандыра. Әммә, ерҙә булып, тоноҡлоғон, сафлығын юғалтһа, беҙҙең һымаҡ хафалана һәм ялбара башлай: «Йәә Рабби! Һин миңә биргәндең барыһын да таратып бөттөм. Үҙем бер нәмәһеҙ ҡалдым. Байлыҡтарымдың һәммәһен тараттым, пакка ла, бысраҡҡа ла... Йәә ниғмәттәрҙе биреүсе Аллаһ, тағы ла күберәк бирсе миңә!».

Был ялбарыуҙарға яуап итеп, Аллаһ Ҡояшҡа әйтә: «Эҫелегең менән тиҙ генә уны күккә күтәр!» Шулай уҡ Ул елгә әмер бирә: «Йонсотмай ғына һыуҙы гүзәл урынға алып бар!»

Ул һыуҙы төрлө юлдар менән алып бара. Һыу күктә сафланғас, йәнә ергә йә ямғыр, йә ҡар, ә ҡайһы саҡ борсаҡ рәүешендә ебәрә һәм, ахыр килеп, ярҙары булмаған икһеҙ-сикһеҙ океанға алып килә».

Һыу мажараларындағы хикмәткә ишаралап, хөрмәтле Мәүләнә кешегә мөрәжәғәт итә: «Күктә һыу пакланған кеүек, Раббыбыҙға яҡынай һәм

үҙеңде нәфесең бысрағынан пакла. Ямғыр кеүек бул, фатиха һәм мәрхәмәт тарат!»

❁

Һыу – беҙ файҙаланған бихисап ниғмәттәрҙең береһе генә. Эскән һыуыбыҙ, һулаған һауабыҙ, ейгән ризығыбыҙ, йәғни беҙ белгән һәм белмәгән барса бәрәкәттәр – һәммәһе Аллаһ Сүбхәнәһү үә Тәғәләнең беҙ тейешенсә рәхмәтебеҙҙе әйтеп бөтөрә алмаған сикһеҙ бәрәкәттәре.

Иман эйәһе ул ниғмәттәрҙе бүләк итеп биргән Раббыбыҙ Аллаһты һәр саҡ иҫендә тота һәм әйтә: «Ярлыҡа, йәә Раббым!» Шул рәүешле ул, үҙенең көсһөҙлөгөн һәм зәғифлеген тойоп, һәр даим Аллаһҡа хәмед һәм маҡтауҙар әйтеп хеҙмәт итә.

❁

Ҡышын ябалаҡлап ҡарҙар яуа. Уның менән килгән аҡлыҡ, паклыҡ үҙ эсендәге мең дә бер хикмәт менән, кәләш бүлмәһен биҙәгәндәй, бар донъяны нурға күмә. Көн ҡыҫҡарып, оҙон төндәр башланғас, тирә-йүндәге сафлыҡ, матурлыҡ кешеләрҙе һоҡландыра, ҡыуандыра.

Күктән, емелдәп, өйөрөлөп, ҡар бөртөктәре төшә. Әгәр ҙә ки улар ҡан төҫөндәй ҡыҙыл йәки, матәмде һәм бысраҡлыҡты хәтергә төшөрөп, ҡара булһа, улар һағыш ҡына тыуҙырыр, кешеләр төшөнкөлөккә бирелер ине.

Йылы балаҫ һымаҡ ҡалын көрттәр ергә түшәлә, ул балаҫ аҫтында меңдәрсә төр йән эйәһе имен-аман ҡыш сыға. Яҙ етеп, ер ҡарҙан әрселгәс, барса мәхлүк тупраҡтан имен-аман килеп сыға, бер ерҙә лә үлеп ятҡан бөжәктәр күренмәй.

Бер һүҙ менән әйткәндә, әгәр тирә-йүнгә нәсихәт һәм хикмәт эҙләп баҡһаң, бөтә барлыҡ Аллаһтың бөйөклөгөнә шаһит булып тора.

❁

Күҙ һал әле сәскәгә. Нисек ерҙе тишеп сыҡҡан ул? Нисәмә колорист һәм дизайнерҙың нәфис хеҙмәт емеше ул? Кем өсөн яралтҡан уны Аллаһ Тәғәлә? Ниңә улар кеше йәшәмәгән башҡа планеталарҙа һәм йондоҙҙарҙа юҡ?

Бөтә барлыҡ – Ҡөҙрәтле Аллаһ Сүбхәнәһү үә Тәғәләнең аяттары. Әлбиттә, рухи ғирфан дәрәжәһенә эйә булғандар, фекерләй белгәндәр өсөн...

❁

Әгәр ҙә ки Аллаһ ярҙам бирһә, кескәй бала ла ҙур дөйә көтөүен көтә ала. Әгәр Аллаһ теләһә, микроскоптан ғына күренгән вирус кешеләрҙе лә, хатта

тотош дәүләттәрҙе лә юҡ итә ала. Былар нәсихәт ала белгәндәр өсөн Ғаләм китабында кәүҙәләнгән илаһи дәрестәр.

❁

Шәйех Сәғди әйтеүенсә, хикмәт һәм нәсихәт эҙләп, донъялағы ваҡиғаларҙы уҡый белергә кәрәк: «Һинең башыңа төшкәндәрҙән башҡалар һабаҡ алмаһын өсөн, башҡаларҙың башына төшкән бәләләрҙән һабаҡ ал».

❁

Бәлә-ҡазаларҙағы нәсихәттәргә иғтибарлы булыуға килгәндә, хөрмәтле Мәүләнә әйтә:

«Ғәрәсәт ғәд ҡәүемен нимә эшләтеүе тураһында ишетмәнеңме ни? Туфан ҡалҡҡас, донъя менән ни булғанын белмәйһеңме әллә?

Ҡыҙыл диңгеҙҙең Фирғәүенде һәләк итеүен, ә Ҡарунды ер йотоуын белмәйһеңме әллә?..

Ә әбәбил ҡоштарының фил ғәскәре менән ни ҡылғанын, кескәй генә бөжәктең үҙен илаһ тип атаған Нәмрудтың мейеһен ашауын?!..

Лут пәйғәмбәр (ғәләйһис-сәләм) ҡәүеменең гонаһкәрҙәре өҫтөнә таш яуыуын, уларҙың ҡара һәм үле күлдә күмелеп ҡалыуын ишетмәнеңме ни?

Йәнһеҙ тип иҫәпләнгән яратылмыштарҙың аҡыллы кешеләр кеүек пәйғәмбәрҙәргә ярҙам итеүе хаҡында бәйән итә башлаһам, «Мәснәүиҙәр» күләме шул тиклем артып китер һәм хатта ҡырҡ дөйә лә уларҙы күтәрә алмаҫ ине.

Әгәр күҙҙәреңә һине йонсоторға әмер бирелһә, улар йөҙҙәрсә юл табып һинән үс алыр ине. Әгәр тештәреңә һине язаларға әмер бирелһә, улар һине ҡот осҡос яфалар ине.

Медицина буйынса китапты ас һәм сирҙәр тураһында уҡы! Тәнең ғәскәре нисек алышҡанын шунан яҡшы күрерһең!

Һәр кемдең йәне – Аллаһ сере, шуға күрә Уға ҡаршы баш күтәреүҙән ҡурҡ! Һәм Уның әмерҙәренә буйһон!»

❁

Ҡөрьәндә, илаһи киҫәтеүҙән йөҙ сөйөрөп, илаһи язаға дусар булған халыҡтар тураһында бәйән ителә. Ул тарихтар – ябай ғына ваҡиғалар түгел. Ул наҙан халыҡтарҙың һәләкәте - Хисап Көнөнә саҡлы кешеләргә ҡаты киҫәтеү.

Ҡыҙғанысҡа ҡаршы, бөгөн донъя йәмғиәтендә ҡәһәрләнгән ул халыҡтарға эйәреүселәрҙең тауышы көсәйә бара. Улар золом, ғәҙелһеҙлек ҡыла. Көсһеҙҙәрҙе, йәберләнгәндәрҙе, иҡтисад тәгәрмәсенең бер өлөшө күреп, заман

ҡолдарына әүерелдерә, эксплуатациялай; гомосексуализм кеүек хаттин ашыуҙы «кеше хоҡуҡтарын һаҡлау» тип атай, ә быға ҡаршы сығыуҙы ул «енәйәт» тип тасуирлай.

Йәнәбе Хаҡ бер аятында әйтә:

«Ҡылған гонаһтарына күрә Аллаһ кешеләрҙе язалай барһа, Ер йөҙөндә бер генә йән эйәһе лә иҫән ҡалмаған булыр ине...» (Фәтыр (Яралтыусы), 45). Йәғни, илаһи һынау серенә ярашлы рәүештә, Аллаһ, башлыса, золом ҡылғандарға яза биреүҙе үҙенә генә мәғлүм ваҡытҡаса кисектерә килә.

Аллаһ, ваҡыты-ваҡыты менән, хаттин ашҡан тәкәбберҙәрҙе киҫәтеп, тейешле урындарына ултыртып ҡуя. Ул аҡһаҡ себен ярҙамында үҙен тәңре тип иҫәпләгән Нәмрудты юҡ итә. Аллаһ әбәбил ҡоштары ярҙамында Ҡәғбәне емерергә килгән Йәмән батшаһы Әбрәхәнең ҡеүәтле ғәскәрен орлоғо һуғып алынған һалам кеүек теткәләп бөтөрә.

2020 һәм 2021 йылдарҙа донъяла бығӑса күрелмәгәнсә таралған киҙеү нәсихәт ала торған ваҡиға булып тора. Вирус донъялағы бөтә тәртипте үҙгәртте, кешеләрҙе үҙҙәренең зәғифлеген күрергә мәжбүр итте. Ҡайһы бер осраҡтарҙа фән ҡаҙаныштары ла, юғары технологиялар ҙа, аҫса ла, власть һәм көс-ҡеүәт тә һис файҙа бирмәүен төшөндөрҙө.

❁

«Ҡайҙан килгән ул вирус? Кем ебәргән уны?» - тип кешеләр баш вата. Ә яуап ябай: Кем әбәбил ҡоштарын ебәрһә, вирусты ла Ул ебәргән.

Бөгөн донъя сиктән сыҡты. Касталар системаһы киренән әйләнеп ҡайтты, көслөләр көсһеҙҙәрҙе йәберләй. Донъя державалары золом ҡыла, матди файҙа алыр өсөн, көсһеҙ илдәрҙең территорияһында күпләп халыҡты ҡыра. Улар миллиондарса мосолманды йорттарынан ҡыуып сығарҙы һәм ҡасаҡтарға әйләндерҙе. Улар күңелдәрҙәге мәрхәмәтте юҡ итте, намыҫты үлтерҙе. Миҫал өсөн Сүриә, Мьянманы иҫкә алыу ҙа етә… Ислам донъяһының күп илдәре матәм еренә әүерелде.

Шуныһы иғтибарға лайыҡ: короновирус киҙеүе айырыуса көнбайыш донъяһының бәкәленә һуҡты, золом-зыян күргән региондарҙа бик көслө булманы. Бөйөк держава һаналған илдәр үҙҙәренең көсһеҙләгән таныны, ә ярлы һәм золом күргән илдәр, әйтерһең, илаһи яҡлау аҫтында булды.

Сүриә ҡасаҡтары таралған лагерҙарҙа вирус таралманы, ә бит унда гигиена һәм санитар талаптарҙы тейешенсә үтәү бик ауыр ине. Күреүебеҙсә, вирус ҡайҙа юл тоторға кәрәклекте яҡшы белә.

Был хәлдән ҡотолоу сараһы бармы? Сараһы - Аллаһ Тәғәлән гонаһтарҙы ярлыҡауҙы үтенеү; иртәнге намаҙҙан һуң, золом күргәндәр өсөн доға ҡылыу.

Йәбер-золом күргәндәргә йөрәгебеҙҙе ни тиклем киңерәк асһаҡ, улар өсөн борсолһаҡ һәм ярҙам итергә ашыҡһаҡ, Аллаһ та беҙгә, уларҙы сәбәпсе итеп, Үҙенең рәхмәтен, ярлыҡауын, ярҙамын насип итер, иншәАллаһ.

❁

Мөьмин үҙ тормошонда һәм Ғаләмдә булған ваҡиғаларҙы донъяны ғына уйлап фекер йөрөткәндәрҙең сикле аҡылы аша түгел, йөрәгенең иман бүләге булған киң офоҡтары күҙелегенән сығып баһалай белергә тейеш.

Кешеләр, үҙҙәренең рухи үҫеше кимәленә ҡарап, бар донъяны ялмап алған ер тетрәүҙәрҙә, һыу ташыуҙарҙа, янғындарҙа, башҡа тәбиғәт ҡазаларында һәм короновирус киҙеүендә төрлө мөрәжәғәтте күрә:

– Берәүҙәр өсөн – ул шәһит булыу мөмкинлеге;

– Икенселәр өсөн – гонаһтарҙың ярлыҡаныуы;

– Өсөнсөләр өсөн – рухи үҫеш сараһы;

– Кемгәлер – киҫәтеү;

– Кемгәлер – яза.

Ниндәйҙер матди характерҙағы ғәмәлдәр ҡылған кеүек, үҙ халәтен баһалап, әҙәм балаһы рухи пландағы саралар ҙа күргә һәм барса ваҡиғаларҙан нәсихәт алырға тейеш.

Әгәр ҙә шундай ваҡиғалар беҙҙе айырым шәхес булараҡ ҡылған хаталарыбыҙға, дөйөм йәмғиәтебеҙҙең хаталарына ҡарарға мәжбүр итһә, иғтибарһыҙлыҡтан арындырып, яҡшы һәм яман ғәмәлдәребеҙ, Раббыбыҙ алдындағы яуаплылығыбыҙ, һәр саҡ ярлыҡау һорап, доғалар ҡылып, саҙаҡалар биреп, Уға һыйыныу тураһында иҫкә төшөрһә, ул саҡта, иншәә Аллаһ, һөҙөмтәһе бәхет, именлек булыр.

❁

Мөьмин барса ваҡиғаларҙы иман күҙлеге аша баһаларға тейеш. Бәлә килһә, был тәүге нәүбәттә илаһи һынау икәнен онотмау лазым. Был осраҡта, матди саралар күреү менән бергә, Ҡөрьән һәм Сөннәт принциптарына нигеҙләнеп, рухи пландағы сараларҙы ла күреү кәрәк.

Изге аяттарҙа әйтелә:

«Хаҡтыр, һинән алда килгән өммәттәргә лә Беҙ пәйғәмбәрҙәр ебәрҙек һәм ул өммәттәрҙе лә) Беҙ яфаларға, ҡайғыларға һалдыҡ, (исмаһам, шул язаларҙан һуң улар Аллаһҡа) буйһонорҙар, тип. Уларға ғазаптар ебәргәндән һуң, Аллаһҡа ялбарһындар ине, исмаһам. Ләкин уларҙың күңелдәре ҡатҡан ине инде, шайтан уларҙың ҡылғандарын гүзәл итеп, биҙәп күрһәтте (яман эштәрен яҡшы, тип ышандырҙы)» (әл-Әнғәм (Мал-тыуар), 42-43).

Тимәк, бәлә-ҡазаларҙан имен булыуҙың төп сараһы – тәүбә ҡылып һәм ғәфү үтенеп, Аллаһ Тәғәләнән ярлыҡау һорау. Ә был иһә әҙәм балаһының илаһи Ҡеүәт һәм Бөйөклөк алдында үҙенең кескенә, зәғиф булыуын төшөнөү, үҙ урынын белеү, йомшаҡ күңел, һиҙгер йөрәккә эйә булып, Аллаһ юлында хеҙмәт итеү. Кем быға ирешә, нәсихәттәргә ҡолаҡ һалып, һабаҡ ала – бәлә-ҡазаларҙан яҡлау таба. Ҡыҙғанысҡа ҡаршы, ҡаты йөрәклеләр нәсихәттәрҙе ишетмәй, өҫтәренә бәләләр ябырылһа ла, тәүбә ҡылып һәм үкенеп, Аллаһ Тәғәләгә һыйынмай.

Шәйех Сәғдиҙең түбәндәге киҫәтеүе уғата мөһим:

«Әгәр һин нәсихәттәргә ҡолаҡ һалмаһаң, бер көн килеп үҙ аяғыңда бығау күрерһең»!

Һәр ваҡиғаның тышҡы сәбәптәрен асыҡлау лазым, әммә ләкин уларҙың артҡы планында торған йәшерен сәбәптәре барлығын да оноторға ярамай.

Аллаһ Сүбхәнәһү үә Тәғәләнең Ихтыяры буйынса, Ғаләмдең дөйөм йәшәйеше билдәле периодтарға ярашлы бара. Таң атырмы, ҡояш сығырмы, байырмы, ай ҡалҡырмы, атмосфералағы кислород һәм азот кимәле үҙгәрмәҫме тип берәү ҙә борсолмай, сөнки быларҙың һәммәһенең билдәле үҙ тәртибе, үҙ ваҡыты бар, һәм былар беҙгә тәбиғи нәмәләр кеүек күренә.

Шул уҡ ваҡытта Йәнәбе Хаҡ Үҙ хикмәте менән, кешелерҙе киҫәтеү өсөн, ҡайһы бер күренештәрҙе билдәле бер ваҡыт менән бәйләмәй. Был осраҡта Ул үҙенең Ҡөҙрәтен һәм Бөйөклөгөн, кешеләрҙең зәғиф һәм ярҙамға мохтаж булыуын иҫкә төшөрә, шул рәүешле һабаҡ алырға, уйланырға, тәүбәгә килергә һәм ғәфү үтенергә саҡыра.

Ысынлап та, әгәр Ғаләмдә бер япраҡ та Ҡөҙрәтле Аллаһ Ихтыяры буйынса өҙөлөп төшмәй икән, ҡапыл башланған көслө ташҡындар, еңеп сыға алмаҫлыҡ янғындар, ер тетрәүҙәр, диңгеҙ ҡойондары, киң таралған киҙеүҙәр осраҡлы рәүештә башланамы? Ҡыҫҡа ваҡыт эсендә бөтә донъяны ялмап алған вирус осраҡлы рәүештә барлыҡҡа килгәнме?

Хәҙистә әйтелә:

«Әгәр ҙә ки ниндәйҙер бер халыҡ әшәкелек ҡыла башлаһа, улар араһында мотлаҡ рәүештә элекке быуындарҙа булмаған тағун (чума) һәм сирҙәр тараласаҡ» (Ибн Мәжә, Фитан, 22; Хаким, IV, 583/8623; Байхаҡы, Шуаб, №, 197).

ВИЧ вирусы барлыҡҡа килгәс, шул арҡала таралған СПИДтан 30 миллиондан ашыу кеше һәләк булған. Ғиффәтлеген һаҡланған йәмғиәттәрҙә был ауырыу бөтөнләй юҡ тиергә мөмкин.

Медицина яңы сирҙән ҡотолоу юлдарын эҙләгән ваҡытта икенсе бер вирус пәйҙә булды.

Микроскоптан ғына күренгән кескәй генә вирус үҙе менән сағыштырғанда ғәләмәт ҙур кеүек булған тотош организмды аяҡтан йыға. Ҡурҡыу һәм хәүеф тыуҙырып, «беҙҙе һис кем еңә алмай» тип иҫәпләгән тотош илдәрҙе, иҡтисадтарҙы теҙ сүктерә. Проблемалар тыуҙырып, транспорттан алып сауҙаға ҡәҙәр, һаулыҡ һаҡлауҙан алып мәғариф өлкәһенә ҡәҙәр тормоштоң төрлө өлкәләрендә ҡаты саралар күрергә мәжбүр итә.

❁

Бөгөн, вирустарҙы йоҡтороуҙан хәүефләнеп, төрлө саралар күреп йөрөгәндә, бер заман мотлаҡ киләсәк үлемебеҙ хаҡында борсолабыҙмы икән? Хәҡиҡәт булған ҡәбер тормошобоҙ, әхирәт тормошобоҙ тураһында уйланабыҙмы? Унда ҡыйын хәлдә ҡалмаҫ өсөн, фани донъялағы тормошобоҙ өсөн үкенмәҫ өсөн ниндәй саралар күрәбеҙ? Заманыбыҙға хас булған аҙашыуҙарҙан, ялғандан, әмер-тыйыуҙарҙы боҙоуҙан үҙебеҙҙе, ғаиләбеҙҙе, туғандарыбыҙҙы аралау өсөн ниндәй тырышлыҡ һалабыҙ?

Шуны онотмайыҡ: матди вирустар ниндәйҙер зыян һалһа ла, был ер тормошона ғына ҡағыла, әммә рухиәтебеҙҙе емергән иманһыҙлыҡ һәм әхлаҡһыҙлыҡ вирусына ҡаршы саралар күрмәһәк, - Аллаһ һаҡлаһын – мәңгелек тормошобоҙ ғазап төйәгенә әйләнәсәк.

❁

Ер тетрәүҙәр, ҡоролоҡтар, ташҡындарҙың, саранчалар ябырылыуының, бигерәк тә һуңғы йылдарҙа таралған эпидемияларҙың матди һәм рухи сәбәптәре бар:

– Кешеләр, ерҙе, һыуҙы, һауаны, бөтә Ер шарын, хатта ки йыһанды ла бысратып, ҡомһоҙ рәүештә файҙаланып, әйтерһең, бер-береһе менән ярыша;

– Аллаһ бүләк итеп биргән тәбиғи, хәләл, таҙа ризыҡтан баш тартып, матди килем алыу өсөн, яһалма тәғәмгә өҫтөнлөк бирә, шулай итеп ризыҡҡа ла, кешелектең һаулығына ла зыян килә;

– Глобаль көстәр, үҙ мәнфәғәттәрен күҙәтеп, көсһеҙ илдәрҙең территорияларында ҡан ҡойоштар ойоштора;

– Бай илдәр, йорттарын, үҙ ерҙәрен ташлап китергә мәжбүр булған миллиондарса кешенең аһ-зарын ишетмәй, ҡолаҡ та һалмай;

– Һүҙҙә кеше хоҡуҡтары хаҡында аһ ороп, асылда мохтаж мигранттарҙы үҙ илдәренә үткәрмәгән илдәрҙең ике йөҙлөлөгө хайран ҡалырлыҡ. Улар, үҙҙәренә ҡабул итергә теләмәйенсә, диңгеҙҙә батҡан ҡасаҡтарға күҙ йомоп ҡарай, хатта ки, Урта диңгеҙҙе зыяратҡа әйләндереп, уларҙың кәмәләрен батыра;

– Урта диңгеҙ ярҙарына сығарып ташланған, Африкала аслыҡтан вафат булған сабыйҙарҙың мәйеттәре донъяла миһырбанлылыҡтың, шәфҡәтлелектең самалы булыуы хаҡында хәбәр итә;

– Көнсығыш Төркөстан, Аракан, Сүриә, Йәмән, Ғаза, Иерусалим һәм башҡа ерҙәрҙәге фажиғәләрҙә донъя йәберләнгәндәрҙе түгел, көскә эйә булған йәберләүселәрҙе тыңлай;

– Төрлө сәбәптәр күп, шуларҙың иң мөһимдәре – донъяла эгоизм, тупаҫлыҡ, боҙоҡлоҡтоң артыуы, нәфесте илаһлаштырыу, ахыр килеп, заманыбыҙҙың яһилиәт упҡынына тәгәрәүе.

Шик юҡ, ошондай йәбер-золом, аяуһыҙлыҡ, ғәҙелһеҙлек арҡаһында, Раббыбыҙ Аллаһ кешеләрҙе рәхмәтенән мәхрүм итә һәм ерҙәгеләргә Уның асыуы төшә.

Әммә ләкин был сәбәптәрҙең төп асылы – «Аллаһты һәм Әхирәтте онотоу», сөнки кешеләр Аллаһтың Бөйөклөгөн, Ҡөҙрәтен, баҡыйлыҡтағы Хисапты һәм язаларҙы онотһа, улар шул тиклем бәғерһеҙгә, аяуһыҙға әйләнә, хатта ки һыртландар ҙа уларға ҡарағанда миһырбанлыраҡ булып тойола.

❁

Ваҡыт-ваҡыт донъяла ҙур һәләкәттәр була. Улар аша еңел генә үтер өсөн, ныҡлы һаҡланыу сараларын күреү лазым.

Әммә иң бөйөк һәләкәт – кешеләрҙең шул һәләкәттәр менән килгән мөрәжәғәтте күрә белмәүе, илаһи киҫәтеүгә, аяттарға битараф ҡалыуы, йә булмаһа уларҙы материалистик, донъяуи күҙлектән генә сығып баһалауҙары. Ә бит аятта әйтелә:

«Кешеләрҙең ҡылмыштары (фәхешлектәр) арҡаһында, ҡоро ер өҫтөндә лә, диңгеҙҙә лә тәртип боҙолдо. Ҡылған гонаһтарына күрә (Әхирәттә) бирелә торған язаларҙың бер өлөшөн (был донъяла) татытыр. Бәлки, улар тәүбә итерҙәр!» (әр-Рум (Румиҙар), 41)

Һәләкәттәр менән килгән был илаһи киҫәтеү беҙгә йөкмәтелгән яуаплылыҡ тураһында һөйләй.

Матди һәләкәттәрҙе барлыҡҡа килтергән рухи сәбәптәргә ҡарата һуҡырлыҡ – тәбиғәт һәләкәттәренә ҡарағанда ла ҙурыраҡ һәләкәт. Иң төп бәлә шунда: кешеләр үҙҙәре тарыған бәләләрҙән һабаҡ алмай. Хата-кәмселектәрен анализлау, уларҙы төҙәтеү өсөн тырышлыҡ һалыу урынына улар еңел юлды һайлай – башҡаларҙы ғәйепләй башлай.

Матди мөмкинлектәреңә, көсөңә, йәшлегеңә, бигерәк тә фән, техника һәм медицинаның юғары ҡаҙаныштарына таянып, үҙеңде яҡлаулы-һаҡлаулы тип иҫәпләү, һәр мәл һағалап йөрөгән үлем хаҡында онотоу, Раббыбыҙҙың бары тик зәғиф һәм кескәй, һәр саҡ Уға мохтаж булған ҡолдары булыуыбыҙҙы онотоу – иң ҡурҡыныс һәләкәт.

Аллаһ Сүбхәнәһү үә Тәғәлә беҙҙе Ҡөрьәндә киҫәтә:

«Әллә улар үҙҙәрен Аллаһтың язаһынан ҡотолған тип һанаймы? Зыян-зәхмәт күрәсәк гонаһлылар ғына Аллаһ хөкөмөнән ҡурҡмай» (әл-Әғраф (Кәртәләр), 99).

Иң ҙур бәхетһеҙлек – Аллаһты танып белергә ынтылмау.

Иң бөйөк бәлә – Раббыбыҙға итәғәтһеҙлек менән ғүмереңдә һәләк итеп, үлем, ҡәбер, Әхирәт тормошо хаҡында онотоу.

❁

Ҡөрьәндә әйтелә:

«Кәмәлә барған саҡта (ҡурҡыныс янағанда), улар ысын мосолман кеүек, Аллаһҡа ялбара. Уларҙы иҫән-һау килеш ҡоро ергә сығарып баҫтырғас, Аллаһтан башҡаларға табыналар» (Ғәнкәбут (Үрмәксе), 65).

Аллаһ миҫал итеп килтергән был карап метафораһын беҙ төрлө ваҡиғалар менән бәйләй алабыҙ. Мәҫәлән, осоп барған самолет турбулент зонаһына эләкһә, уның бортындағы барса кеше Аллаһтан ярҙам һорай, тәүбәгә килә һәм ғәфү үтенә. Тик самолет ергә төшөү менән, һәммәһе, ғафиллыҡҡа күмелеп, барыһын да онота.

Эпидемиялар осоронда ла кешеләр, ҡотҡарыуҙы үтенеп, Раббыбыҙға шулай доға ҡыла, әммә хәүеф-хәтәр үтә башлаһа, йәнә ғафиллыҡҡа сума. Үҙ-үҙеңдә

де алдау был! Бындай моңһоҙлоҡ, ғафиллыҡ – Аллаһ һаҡлаһын – башҡа бәләләргә лә алып килеүе ихтимал.

Шуға күрә бәхетле мәлебеҙҙә лә, ҡайғылы мәлебеҙҙә лә Раббыбыҙға яҡыныраҡ булырға тырышыу, Уның юлында тоғро хеҙмәт итеү бик мөһим.

Ғаләмдәге һәм тирә-йүндәге ваҡиғалар бушҡа түгел, уларҙың тәрән мәғәнәһе бар. Юлыбыҙҙағы һәр яратылмыш һәм һәр ваҡиға – илаһи мөрәжәғәт, улар беҙгә һабаҡ бирә. Әлбиттә, былар - күрә белгән күҙҙәргә, ишетә алған ҡолаҡтарға, фекерләй белгән аҡылға, тоя белгән йөрәктәргә. Намыҫы менән хушлашҡандарға, фекерләү һәләтен, миһырбанлыҡты онотҡандарға, был донъяға ниңә килгәнен аңламаған күңел күҙе һуҡырҙарға иң асыҡ киҫәтеүҙәр ҙә осраҡлы тәбиғи ваҡиғалар кеүек күренә.

Бер әүлиә әйткән: «Был донъя – аҡылы булғандарға «гүзәл күренеш» (сайр-и бадайи - нәсихәт алып, Аллаһтың яратылмыштарын тамаша ҡылыу) һәм иҫәрҙәр өсөн ризыҡ һәм шәһүәт!»

❁

Был донъя – илаһи серҙәр тулы ғәләмәт ҙур мәктәп. Рухи хикмәткә (ғирфан) эйә булғандар, нәсихәт алып һәм тәрән мәғәнәләрҙе төшөнөп, Аллаһты танып белеүҙең үренә күтәрелә. Ә ғәмһеҙҙәр фекеренсә, был мәктәп – күңел асыу, уйын-көлкө урыны. Әммә Аллаһ Сүбхәнәһү үә Тәғәлә әйтә:

«Күктәрҙе, Ерҙе һәм икеһе араһындағыларҙы Беҙ күңел асыу өсөн генә яралтманыҡ» (әд-Духан (Төтөн), 38).

❁

Ғарифтар, йәғни Аллаһты танып белгәндәр, асыҡ күңел күҙе менән Ғаләм китабындағы илаһи хикмәттте һәм хәҡиҡәтте уҡый, күңел һиҙгерлеген юғалтмай. Ҡәлбен нәфес көйҙөргән ғәмһеҙҙәр иһә бары тик тере мәйет кенә.

Шәйех Сәғди әйткән:

«Аҡыллылар өсөн йәшел ағастың һәр бер япрағы – Аллаһты танып белеү (мәғрифәтуллаһ) өсөн тотош бер диван (поэтик йыйынтыҡ). Ғәмһеҙҙәр өсөн барса ағастар япраҡтан да кескәйерәк» һәм «Аҡыл эйәһе хатта көләмәс һәм әкиәттәрҙән дә нәсихәт ала. Әгәр ғәмһеҙгә хикмәтле кәлимәләрҙән йөҙ бүлек уҡыһаң да, уға был әкиәт кенә булып тойоласаҡ».

❁

Тыумыштан һуҡыр булған әҙәм ҡапыл күрә башлаһа, шаҡ ҡатыр, элек күрмәгәнлектән, диңгеҙгә, ағастарға, осоп йөрөгән ҡоштарға иҫе китеп ҡарар ине. «Ниндәй гүзәллек тыуҙырған минең Раббым!», – тип һоҡланыр ине.

Көн һайын ошо гүзәл күренештәрҙе, мөғжизәләрҙе күргән кешеләр иһә, таш ҡаялар бәрәкәтле ләйсән ямғырҙан һис бер файҙа алмаған кеүек, ул матурлыҡтар янынан уйһыҙ-ниһеҙ, битараф рәүештә үтә.

❁

Ғаләмдең уҡыу аудиторияларының буйлап бойоғоп, төшөнкө күңел менән йөрөгәндәр; раузалар, сөмбөлдәр, һандуғастар, елдәр, шишмәләр һәм тауҙар телен аңламағандар; Аллаһ Тәғәләнең яратылмыштарындағы «әл-Бәәри» (Яралтыусы) һәм «әл-Мусаууир» (Һүрәт биреп Яралтыусы) Исемдәренең сағылыштарын (тәджәлли) аңламағандар йөрәге ҡараңғы харабаға әүерелә.

Аллаһ Сүбхәнәһү үә Тәғәләнең бөйөклөгө кәүҙәләнештәренә һуҡыр булғандарҙың йөрәк халәте, хазиналар өҫтөндә йәшәгәндәрен аңламайынса, аслыҡтан үлгәндәрҙең халәтенән айырылмай...

❁

Һөйөүҙе, иман һоҡланыуын (вәджд), иман менән килгән ләззәтте татымағандарҙың, Ғаләм һәм тормош серен аңламағандарҙың барса яратылмыштарҙың өнһеҙ мөрәжәғәтенә аптырап һәм ҡараңғы йөҙ менән ҡарауы ни тиклем ҡыҙғаныс! Хөрмәтле Мәүләнәнең түбәндәге сағыштырыуы шундай тупаҫ йөрәктәр хаҡында:

«Бер үгеҙ ҡапыл Багдадҡа килеп ингән, бөтә ҡаланы урап сыҡҡан, әммә ҡауын һәм ҡарбуз ҡабыҡтарынан башҡа нәмә күрмәгән!

(Ул цивилизацияның һоҡланғыс үҙәген, Багдадтың гүзәллеген, Тигрҙың күркәмлеген күрмәгән. Был донъяла үгеҙҙәр һәм ишәктәр ашанты менән шәһүәттән башҡа нимә күрһен инде ?!)

Үгеҙ һәм ишәктәр йәки юлға һибелгән һаламға ынтыла, йәки аяҡ аҫтындағы үләнгә, йәки ташланған ҡауын һәм ҡарбуз ҡабыҡтарына!

(Нәфес теләктәренә буйһонғанлыҡтан, улар Ғаләмдәге илаһи сәнғәт емештәрен күрергә һәләтле түгел)».

❁

Яҡтылыҡһыҙ күҙҙәр күрә алмаған кеүек, күңел күҙе лә иман яҡтылығынан, Ҡөрьән һәм Сөннәт бәрәкәтенән башҡа күрә алмай. Фекер йөрөткәндә, йөрәктәр иман яҡтылығы менән нурлана башлай. Хикмәт эйәләре әйтә: «Донъяға нәсихәт алмай ҡараған кешенең йөрәге ни ҡәҙәр ғәмһеҙ булһа, шул тиклем һуҡырая» (Ибн Кәсир, I, 448).

❁

Үҙҙәре йәшәгән донъяның уҡыу аудиторияһында, аптырап, төшөнкө күңел менән йөрөгәндәр, ғәмһеҙ рәүештә һәпәләк уйнағандар Әхирәттә мәңгелек һуҡырлыҡ язаһын аласаҡ. Ҡөрьәндә әйтелә:

«Был донъяла (күңел күҙе) **һуҡыр булған Әхирәттә лә һуҡыр булыр. Шуның өҫтөнә улар тағы ла нығыраҡ аҙашыр»** (әл-Исра (Төнгө йөрөү), 72);

«Кем минең киҫәтеүҙәремдән йөҙ сөйөрә, һис шикһеҙ, уның тормошо ғазаплы буласаҡ һәм Беҙ уны Ҡиәмәт Көнөндә тома һуҡыр килеш (ҡәберенән) **ҡубарасаҡбыҙ. Ул әйтер: «Йә, Раббым! Мине нимә өсөн һуҡыр килеш** (ҡәберемдән) **ҡубарҙың? Әүәл мин күрә инем бит!» - тип әйтер.** (Аллаһ) **әйтер: «Шулай шул. Һиңә аяттарым** (киҫәтеүҙәрем) **килде. Һин уларҙы оноттоң. Бына һин дә бөгөн онотоласаҡһың** (мәхрүм ҡаласаҡһың)**»** (Та һа, 124–126).

Хөрмәтле Ғосман (радыйаллаһу ғәнһу) әйткән: «(Илаһи хәҡиҡәттәргә ғәмһеҙ, битараф булған) ҡол, был донъяла күрһә лә, Әхирәттә Аллаһтың һуҡыр килеш ҡубарыуынан ҡурҡһын! Тәрән мәғәнәләрҙе аңлаған кешегә хикмәтле бер һүҙ ҙә етә. (Әммә иҫәр, яһил һәм ҡараңғы йөҙлө кешеләр), йәғни рухи йәһәттән һуҡырҙар, хәҡиҡәтте ишетмәй...»

❁

Фекер йөрөтөү (тәфәккүр) – иман асҡысы. Хәҡиҡәтте күргән, күңел күҙе һуҡыр булмаған әҙәм илаһи аяттарҙы, Ғаләмдәге әйтеп бөтөргөһөҙ матурлыҡтарҙы, мөғжизәле кәүҙәләнештәрҙәге сикһеҙ ҡөҙрәт ағымдарын күрмәй ҡалмай. Хатта ки күҙе күрмәгән һүрәттә лә, ул уны рухиәт күҙе аша күрә. Мәүләнә әйткәнсә: «Һуҡыр кеше лә һис бер кәмселеге булмаған Ҡояш сығыуын тоя».

❁

Йә Раббым!

– Хәҡиҡәтте күрә алыр өсөн, күҙҙәребеҙгә Нурыңды бир.

– Хәҡиҡәт тауышын, яҡшылыҡты ишетер өсөн, ҡолаҡтарыбыҙға Нурыңды бир.

– Нимәгә генә ҡараһаҡ та, Һинең Бөйөк Затыңды иҫкә төшөрөр өсөн, Һинең яныңда булыуҙан хозурланыр өсөн, йөрәктәребеҙгә Нурыңды бүләк ит.

Йә Раббым!

Йөрәктәребеҙҙе уят, физик һәм рухи сирҙәрҙән шифа бир!

Йә Раббым!

Үҙ рәхмәтең, йомартлығың менән, Ҡөрьән һәм Ғаләм Китабы мөрәжәғәттәрен күңел күҙе менән уҡып, нәсихәт алыу һәләтен бир! Хозурыңа тыныс күңел, нурлы аҡ йөҙ менән барып баҫырға насип ит!

Амин!

АЛЛАҺ МЕНӘН БЕРГӘ БУЛЫУ

Берәү Аллаһ менән бергә булһа, яңғыҙлыҡты тоймаҫ.

Донъялағы иң бәхетле кешеләр – тәҡүәле мөьминдәр, улар үҙ йөрәгендә һәр ваҡыт Аллаһты таба ала.

««Йә Раббым! Һине тапҡан нимәһен юғалтҡан? Һине юғалтҡан нимә тапҡан?» (Ғатауллаһ әл-Искәндәри)

Берәү Аллаһ менән бергә булһа, яңғыҙлыҡты тоймаҫ.

❁

Мәрхүм Нәжип Фазил әйткән: «Әгәр берәү Аллаһты тапһа (Уның янында рухи тыныслыҡҡа ирешһә), берәй нәмәнән мәхрүм ҡалырмы?! Аллаһтан мәхрүм ҡалған нимәгәлер эйә булырмы?!»

Йәғни ҡәлбе Аллаһ менән булғанға нимәнәндер мәхрүм булыу һис бер зыян һала алмаҫ. Әммә әгәр ҡәлбең Аллаһҡа ҡарата ғафил икән, һис ниндәй байлыҡ ул бушлыҡты тултыра алмаҫ.

❁

Аллаһтан алыҫ булған ғәмһеҙҙәрҙең был донъялағы зиннәтле һарайҙары тере мәйеттәрҙең зыяраты ише. Аллаһтан алыҫ булғандарҙың йөрәге менән ҡараңғы харабалар араһында һис айырма юҡ.

❁

Ғатаулла әл-Искәндариҙең доғаһы ни ҡәҙәр гүзәл: «Йә Раббым! Һине тапҡан нимәһен юғалтҡан? Һине юғалтҡан нимә тапҡан?»!

❁

Шәйех Муса Әфәнде (рәхимәһуллаһ) әйткән: «Әгәр Раббыһына тулыһынса буйһонған әҙәм Уның менән берләшһә (вуслат), тимәк ул барыһына ла иреште. Әгәр Раббыһына буйһонмаған әҙәм илаһи берлеккә (вуслат) лайыҡ булмаһа,

даны бөтә ер шарына таралһа ла, бөтә донъя уға ҡул сапһа ла, ул меҫкен һәм зыян күреүсе».

Әгәр ҡулыбыҙҙа бөтә донъя булһа, әммә Аллаһ ризалығынан мәхрүм булһаҡ, быныҢ ни хәжәте? Донъя – фани, ә ғүмер үтеүсән. Ә Аллаһ ризалығы биргән бәхет, УныҢ һөйөүе һәм дуҫлығы – мәңгелек!

❁

Сөләймән (ғәләйһис-сәләм) кеүек бай, әммә ғәмһеҙ әҙәм – зыян күреүсе. Шулай уҡ Йософ (ғәләйһис-сәләм) кеүек гүзәл, әммә ғәфләт эсендә йәшәүсе – зыян күреүсе. Иман һәм изге ғәмәлдәр менән генә ҡотолоу мөмкин.

❁

Кешенең тәбиғәтенә, асылына Аллаһҡа инаныу һалынған. Һәр сабый мосолман булып тыуа. Асылда һәр әҙәмдең йәне Аллаһты таный. Әммә төпкөл аңы менән. Иман – дөрөҫ нәсихәт һәм тәрбиә ярҙамында ошо төпкө аңдың асыҡ инанысҡа әүерелеүе ул. Әгәр шундай тәрбиә булмаһа, кешенең тәбиғәтенә һалынған Аллаһҡа инаныу, онотолған төш кеүек, төпкө аңда йәшерен килеш ҡала. Тик Аллаһҡа инанмаған күңел тыныслыҡ тапмай, ситлектәге ҡошсоҡ шикелле үрһәләнә. «Үлемдән һуң минең менән нимә булыр?» - тип ул хафалана, баҡыйлыҡтан ҡурҡа. Шуға күрә бер аҙға күңел тыныслығы тапһа ла, ул оҙаҡҡа бармай.

Мәңгелек хозурлыҡҡа иман һәм изге ғәмәлдәр аша ғына ирешеп була. Мөьмин Аллаһты һәр ваҡыт янында тойған һүрәттә генә ҡәлб, күңел хозурлығына ирешеп була. Бары тик шул рәүешле генә әҙәм йөрәге тыныслыҡ таба. Ҡөрьәндә әйтелә:

«Мәғлүмдер, Аллаһ тураһында уйлағанда, күңелдәр рәхәт тыныслыҡҡа ирешә?» (әр-Рәғд (Күк күкрәү), 28).

❁

Шах Нәҡшбәнд әйткән: «Был юлдың нигеҙе – йөрәкте тергеҙеү. Йәғни Аллаһҡа ҡәлбең менән мөрәжәғәт һәм Уны йыш зекер итеү».

❁

Донъялағы иң бәхетле кешеләр теләгәндәрен шунда уҡ ҡулдарына алыусылар түгел, йөрәктәрендә һәр мәл Раббыһын тапҡан хаҡ мөьминдәр.

❁

Хәсән Басри әйткән: «Аллаһ яныңда икән, кемдән ҡурҡырға? Аллаһ яныңда түгел икән, кемгә таянырға, кемдән яҡлау эҙләргә?»

Бөйөктәрҙән-бөйөк бәхет – ҡәлбең менән Аллаһ менән бергә булыу һәм, мәңге ҡалһын өсөн, ул берлекте семәрләп йөрәгеңә яҙып ҡуйыу.

❁

Аллаһ әйтеүенсә, Ул Үҙенең ҡолдарына муйын тамырынан да яҡын. Уны онотҡандар, йөрәктәре Уның барлығынан мәхрүм ҡалғандар - был донъяла иң аҙашҡан юлсылар!

Физик һәм рухи именлек ваҡытында, бәхетле мәлендә Раббыһын онотмаған йөрәк бәлә килгәндә лә Уны үҙенең янында табыр.

❁

Донъя - һынау төйәге. Кеше барлыҡ-байлыҡ менән боҙолмаһын, бәләләрҙән алйып теҙ сүкмәһен, хаҡ юлда (истиҡәмәт) ныҡ торһон өсөн, йөрәге даимән Аллаһ янында булыуы шарт. Бындай халәт – йөрәк сәнғәте.

Йәннәтте тәүҙә бында, фани донъя тормошонда тоялар, ә Әхирәттә ул алдыбыҙға килә. Йәннәтте ерҙә йөрәк хозурлығы халәтенә ирешеп тойорға була, йәғни үҙеңдең һәр мәл Аллаһ ҡашында тороуыңды төшөнөп.

❁

Оноторға ярамай: донъя тормошонда беҙ Раббыбыҙҙы ниндәй кимәлдә иҫтә тотһаҡ, иртәгә, Әхирәттә, шундай кимәлдә Уның менән берләшә (вуслат) аласаҡбыҙ.

❁

Ғүмеребеҙ сәфәре Йәннәт хозурлығы менән тамамланырмы, әллә Йәһәннәм ғазаптары менән – был иһә фани донъяла йөрәгебеҙҙең Аллаһ менән ни кимәлдә бергә булыуыбыҙға бәйләнгән.

❁

Әгәр әҙәм ҡәлбе һәр ваҡыт Аллаһ менән бергә икән, тимәк ул фани донъя һынауында уңышҡа ирешкән.

❁

Зекерҙән йыраҡ булып, һанаулы ғына һулышыбыҙҙы ғәмһеҙ рәүештә сарыф итеү – ҙур юғалтыу. Хәҙистә әйтелә:

«Йәннәт әһелдәре фани донъяла Аллаһты иҫкә алмай үткән мәлдән тыш һис нәмәгә үкенмәҫ» (Хәйсәми, X, 73-74).

❁

Аллаһтың тәкүәле ҡолдары (ғарифтар) шундай кәлимәгә таянып эш иткәндәр: «Юғалтыу – Һиңһеҙ үткән ваҡыт». Ошо хис менән тойғоланып, Аллаһ Тәғәлә менән бергә үткән ваҡыттарын улар иң бәрәкәтле, иң файҙалы, тип иҫәпләгән. Аллаһҡа ҡарата ғәмһеҙ үткән ваҡытты иһә иң бөйөк ҡаза һәм юғалтыу, тип ҡабул иткән.

❁

Телебеҙҙе буш һәм яман һүҙҙәрҙән әрсәләргә, яҡшы һүҙҙәр генә һөйләргә һәм телмәребеҙҙе Аллаһты зекер итеү менән биҙәргә тейешбеҙ. Тормошта ошо принцип менән эш иткән иман эйәләре:

- Эшләргә һәм ашарға тотонғанда, «бисмилләһ»те әйтә, ә тамамлағас, Аллаһты маҡтай;

- Осрашҡас, иң тәүҙә бер-береһен сәләмләй, ә аҙаҡ, Аллаһтың рәхмәтенә, мәрхәмәтенә лайыҡ булыр өсөн, бер-береһе өсөн доға ҡыла;

- Хушлашҡанда ла бер-береһенә матур теләк теләй: «Аллаһ һаҡлаһын!» - тип әйтә;

- Юлға сыҡҡанда, улар шулай ти: «Аллаһҡа тәүәккәл ҡылайыҡ! Аллаһ юлдашың булһын!»;

- Йоҡоға китер алдынан улар Аллаһтан яҡлау һорап доға ҡыла, ә уянғас, рәхмәтен белдерә;

- Никахлашҡандарҙы улар шулай тәбрикләй: «Аллаһ һеҙгә шатлыҡ-һөйөнөстәр бүләк итһен! Бәхетегеҙгә һөйөнөп көлөргә насип итһен!»;

- Сауҙа ваҡытында тәүге һатып алыусыға: «Башлау - һинән, бәрәкәт - Аллаһтан!»;

- Сирлеләрҙең хәлен белгәндә, улар шулай ти: «Аллаһ шифа бирһен! Бәләләреңә гонаһтарыңа кәффарәт булһын һәм дәрәжәңде күтәрһен!»;

- Улар яңы донъяға килгән сабыйҙар өсөн доға ҡыла: «Аллаһ уны тәкүәле ҡолдарынан ҡылһын! Аллаһ Тәғәлә уны яҡшы ҡоло, Аллаһ Илсеһе (салләллаһу ғәләйһи үә сәлләм) өммәтенең яҡшы ағзаһы, ата-әсәһенең яҡшы улы/ҡыҙы ҡылһын! Аллаһ уға оҙон һәм яҡшы ғүмер бирһен!»;

- Әруахтар тураһында улар шулай ти: «Тыныслыҡ булһын һиңә! Төйәгең Йәннәт булһын! Яҡындарыңа Аллаһ сабырлыҡ бирһен!»

Ғүмеренең һәр мәлен зекер менән биҙәгән тәүәле ҡолдар ни ҡәҙәр бәхетле!

❁

Мосолмандың теле Аллаһты зекер итеү менән мәшғүл булырға тейеш, уйҙары – фекер йөрөтөү (тәфәккүр) менән, ә халате иманға саҡырыу булырға тейеш.

❁

Изге аятта әйтелә:

«...Беҙ уға муйын тамырынан да яҡын торабыҙ» (Ҡаф, 16).

Аллаһ Тәғәлә Хисап көнөндә һораясаҡ: «Йә, минең ҡолом, Мин һинең менән инем, ә һин кем менән булдың?!»

❁

Иман эйәһе үҙенә йыш ҡына һорауҙар бирергә тейеш:

- Һин кем менән?

- Йөрәгең, хистәрең һәм уйҙарың, әҙәбең, ынтылыштарың һәм халәтең кем менән, кемдекенә оҡшаш?

Ғүмереңдең ниндәй өлөшө Аллаһты һөйгәндәр менән үтә?

Мәсеттә, намаҙлыҡта ғына түгел, эштә, өҫтәл артында һин кем менән? Интернетта, телевизор ҡарағанда һин кем менән?

Онотма, Аллаһ һәр ваҡыт һинең менән, ә һин Уның менән күпме ваҡыт бергә булаһың?

Раббыбыҙ әйтә:

«Бәндәләрем Минең турала һораштырһалар, әйт: Мин һәр кешегә бик яҡын торам. Хаҡтыр, миңә доға ҡылғандарҙың теләктәренә яуап бирәм. Улар ҙа, тура юл менән барыр өсөн, Мине ишетһендәр, Миңә ышанһындар. Бәлки, улар тура юлды табыр» (әл-Баҡара (Һыйыр), 186).

❁

Әгәр ҙә ки халәтебеҙҙе беҙгә үрнәк булған сәхәбәләрҙеке менән сағыштырһаҡ, беҙ ниндәй хәлдә?

Аллаһ менән беҙ ниндәй кимәлдә бергә?

Аллаһты зекер итеп йөрәгебеҙҙе терелтә алабыҙмы?

Киләһе аятҡа таянып ғәмәл ҡылабыҙмы:

«Ҡурҡыу менән өмөт араһында Раббыға (намаҙҙа) ялбарғандар йылы һәм рәхәт яҫтыктарынан айырылып, төндә тороп доға ҡыла. Беҙҙең та-

рафтан индерелгән ризыҡтарынан (зәкәткә, хәйер-саҙаҡаға) сарыф итә» (әс-Сәждә, 16).

❁

Раббыбыҙ әйткән: «иң яҡшыһы» («أَحْسِنُوا»). Йәғни, мосолмандың һәр ғәмәле «иң яҡшыһы» булырға тейеш.

Мосолман изге ғәмәлдәр ҡылырға, мәрхәмәтле (мөхсин), киң күңелле булырға тейеш. «Ихсан»[1] халәте арҡаһында мосолман илаһи камералар күҙәтеүе аҫтында йәшәүен онотмай. Аятта әйтелә:

«Һеҙ ҡайҙа ғына булһағыҙ ҙа, Аллаһ һеҙҙең янда булыр» (әл-Хәдид (Тимер), 4).

Мосолманға һыҙып күрһәтелгән ҡотолоу маршруты инде был!

Хәҙистә әйтелә:

«Имандың иң юғары дәрәжәһе – һин ҡайҙа ғына булһаң да, Аллаһ һинең янында икәнен белеү» (Хәйсәми, I, 60).

Ҡәлб Аллаһ менән бергә булғанда, рухи уяулыҡ, үтә күреүсәнлек (фирасат), күңел күҙе һиҙгерлеге һәм йәшерен мәғәнәләрҙе, хәҡиҡәтте аңлау һәләте килә.

❁

Нәҡшбәнд шаһ әйткән:

«Был юлдың маҡсаты – үҙеңдең даимән Аллаһ янында булыуыңды ныҡлы төшөнөү».

❁

Күреү һәм ишетеү сикле, үҙең ҡабул итә алмаған тауыш һәм яҡтылыҡты тойоу мөмкин булмаған кеүек, был кешенең аңлау һәләтенә лә ҡағыла:

«Аллаһ Сүбхәнәһү үә Тәғәлә шул ҡәҙәр асыҡтыр (әз-Ҙаһир), әммә Уның ифрат асыҡлығы Уны йәшерен итә (ғәиб)».

❁

Шаһ Нәҡшбәнд әйткән:

1. Ихсан «бөтә ғибәҙәттәреңде Аллаһ һине күреп торған кеүек ихлас башҡарыу, даимән Уның ҡарашың тойоу», йәғни үҙеңде һәр саҡ илаһи күҙәтеү һәм контроль аҫтында тойоу.

«Буш тойолған аулаҡ урындарҙа ла хәҡиҡәт юлынан барыусы үҙен яңғыҙ тойорға тейеш түгел. Йәмәғәт алдында ул үҙен нисек тотһа, һис кем юҡ һымаҡ тойолған аулаҡта ла ул үҙен шулай тоторға тейеш…»

❁

Кеше үҙенең уй-хистәрен һәммәһенән йәшерә ала, әммә Аллаһтан йәшерә алмай. Аллаһ уларҙы белә. Изге аяттарҙа әйтелә:

«Аллаһ кеше һәм уның күңеле араһында торор һәм һеҙ, һис шикһеҙ, Уның янына тупланасаҡһығыҙ…» (әл-Әнфәл (Табыш малы), 24).

«Аллаһ хыянатсыны күҙ ҡарашынан уҡ таныр. Күңелдәрендәге йәшертен теләктәрен дә белеп тотор» (әл-Мүьмин (Мөьмин), 19).

❁

Дөрөҫ халәттә булыу өсөн, һис бер йән эйәһе, һис бер әҙәм күҙе күрмәһә лә, гонаһтарҙан йыраҡ булыу өсөн, «Раббым мине һәр саҡ, һәр ҡайҙа күрә, илаһи камералар һәр хәрәкәтемде яҙып тора!» - тигән уй ҡәлбеңдә урын алыуы мөһим.

❁

Беҙ Раббыбыҙҙы һис ҡасан онотмаҫҡа тейеш, сөнки ҡәлбе Аллаһ менән булғандар фани донъя образдарына алданмай. Аллаһты һөйгән, Уны йыш зекер иткән иман эйәһе харамға тартылмаясаҡ, нәфес теләктәренең ҡоло булмаясаҡ. «Бисмилләәһ!» - тип әйтеп, һис кем аяҡ сала йәки берәүҙең йөрәгенә энә ҡаҙай алмаясаҡ.

❁

Ғүмеребеҙҙең һәр мәле тәфәккүр (фекер йөрөтөү), Аллаһты зекер итеү, хәмд ҡылыу менән үтергә тейеш, сөнки гонаһтар Аллаһты онотҡанда ҡылына.

❁

Әҙәм балаһы Аллаһ Тәғәләне онотһа, унан да яманыраҡ, унан да яһилыраҡ йән эйәһе юҡ! Ғибәҙәттә ул юғары күтәрелһә һәм ҡәлбендә Аллаһты тапһа, унан да изге күңелле йән эйәһе юҡ!

❁

Барса рухи юғалтыуҙар һәм зыян – Аллаһты онотоу һөҙөмтәһе. Изге аятта әйтелә:

«Аллаһты онотҡан һәм шуның арҡаһында Аллаһ та уларға (яҡшылыҡтың) нимә икәнен онотторған кешеләр кеүек булмағыҙ. Улар – Аллаһ юлынан яҙған бәндәләр» ((әл-Хәшр (Ҡыуып сығарыу), 19).

Хаҡтыр, гонаһтар кеше үҙенең Раббыһын онотҡанда ҡылына башлай. Әгәр ҙә ки Аллаһ ҡоло Әхирәттең ысынлығын танып, «Аллаһ», - тип әйтә икән, ғибәҙәттәрендә һәм ғәмәлдәрендә тырышлыҡ күрһәтә, бер кемде лә рәнйетмәҫкә тырыша.

❁

Дини йолаларҙың билдәле бер ваҡыты бар, әммә иман – йөрәктең Аллаһ менән даими бәйләнеше. Шуға күрә Уға хеҙмәт итеүҙең билдәле бер ваҡыты юҡ. Беҙ Раббыбыҙ Аллаһты һис ҡасан онотмаҫҡа тейешбеҙ.

❁

Аллаһ Сүбхәнәһү үә Тәғәлә һорау бирә:

«(Әй әҙәм балаһы!) Нимәгә ҡыҙығып (алданып), һин сикһеҙ йомарт Аллаһтың ниғмәттәренән (сауаптан, ярлыҡаныуҙан, Йәннәттән) ҡоро ҡалдың? Аллаһ һине юҡтан бар итте, сәләмәт ағзалар биреп, (бөтә кәүҙәңде) килешле, теүәл итте, (уларҙы бер-береһенә яраҡлаштырып) бөтә яғыңды үлсәм менән камиллаштырҙы. Нисек теләһә, һеҙҙең шундай ҡиәфәттә яралтты» (аль-Инфитар (Ярылыу), 6-8).

Хәҡиҡи хеҙмәт – Аллаһҡа даимән тоғро булыу.

❁

Ҡәлбеңдең нәфестең тупаҫ, ҡомһоҙ, үткенсе теләктәре менән тулыуы ни тиклем ҡыҙғаныс! Хазиналар һалыу өсөн оҫта итеп эшләнгән семәрле ҡумтаның сүп-сар менән тулыуы кеүек инде был.

Сүплеккә ташланған һәм лайыҡһыҙ ҡулдарға барып юлыҡҡан гәүһәрҙең хәле ни тиклем аяныслы. Йөрәктең ҡиммәтле ташы Аллаһтыҡы булырға тейеш, уның түбән һәүәҫлектәр сүплегенә эләгеүе – юғалтыуҙарҙан да юғалтыу!

❁

Ҡәлбеңдең нәфестең тупаҫ, ҡомһоҙ, үткенсе теләктәре менән тулыуы ни тиклем ҡыҙғаныс! Хазиналар һалыу өсөн оҫта итеп эшләнгән семәрле ҡумтаның сүп-сар менән тулыуы кеүек инде был.

Сүплеккә ташланған һәм лайыҡһыҙ ҡулдарға барып юлыҡҡан гәүһәрҙең хәле ни тиклем аяныслы. Йөрәктең ҡиммәтле ташы Аллаһтыҡы булырға тейеш, уның түбән һәүәҫлектәр сүплегенә эләгеүе – юғалтыуҙарҙан да юғалтыу.

❁

Аллаһҡа хеҙмәт әҙәбе ҡәлбеңдән был фани донъяның үткенсе һәүәҫлектәрен, ымһындырғыс ынтылыштарын алып ташлауҙы һәм йөрәк һарайын иң

лайыҡлыға – Раббыбыҙ Аллаһҡа бағышлауҙы талап итә. Имам Шәфиғи (рәхимәһуллаһ) әйткән бит: «Хәҡиҡәт тулмаған йөрәккә ялған (батыл) бәреп инә».

Дошман ҡулы аҫтындағы территория һымаҡ, түбән теләктәр әсирлегендәге йөрәктә тыныслыҡ була алмаҫ.

❁

Тәкүәлек аша һоҡланғыс бәхет хазинаһы булған Аллаһ менән дуҫлыҡҡа ирешеү мөмкин булғанда, нәфесеңдең түбән теләктәрен ҡәнәғәтләндереү менән мәшғүл булыуҙан да ҡыҙғанысыраҡ нәмә юҡ!

❁

Аллаһ Сүбхәнәһү үә Тәғәлә һәммәбеҙгә рухи танып белеү (мәғрифәт) һәм мөхәббәт аша асылыу мөмкин булған үҙенсәлектәр биргән. Ул беҙҙе «иң гүзәл һүрәттә» бар ҡылған, Рәхмәтен бүләк иткән, Изге Яҙмалар һәм пәйғәмбәрҙәрен ебәргән. Раббыбыҙ һис бер түләүһеҙ беҙгә шундай ниғмәттәрен бүләк иткән.

Шулай уҡ Раббыбыҙ Аллаһ беҙгә мәңгелек хозурлыҡ, йәғни Йәннәт әҙерләп ҡуйған. Йәннәттең хаҡы бар: ул – Раббыбыҙ хозурына Ул риза булырҙай паҡ, сәләмәт йөрәк менән килеү.

Ибраһим пәйғәмбәр (ғәләйһис-сәләм) үҙ йөрәгендәге фани донъяның барса тәхеттәрен емергән. Бер Аллаһҡа инанысын һаҡлар өсөн, ул хатта утта янырға ла риза булған. Бер зекерҙе ишетеүгә күңеле булып, бөтә көтөүҙәрен Аллаһ юлында ҡорбан иткән. Уның Аллаһҡа мөхәббәте бәғеренең бер өлөшө - улы Исмәғилгә (ғәләйһис-сәләм) ҡарата мөхәббәтенән дә көслөрәк булған. Үҙ йөрәгендә ул Аллаһҡа мөхәббәт, дуҫлыҡ тәхете һалған. Үҙенә шундай ғәҙәттән тыш тәүәккәллеге, буйһоноуы һәм мөхәббәте сәбәпле, Аллаһ Сүбхәнәһү үә Тәғәлә уны Үҙенең Дуҫы (Хәлил) ҡылған.

❁

Хөрмәтле Мәүләнә әйткән:

«Эй, хәҡиҡәт юлсыһы, дәһшәтле Хисап Көнө еткәнсе, ҡулыңдан тотоп ҡотҡарһын өсөн, Йәнәбе Хаҡ менән дуҫлығыңды нығыт. Был көндө Уның ризалығынан башҡа ниңә һис кем ҡулын һуҙмаҫ. Был көндө кеше ағай-эненәнән, ата-әсәһенән, ҡатынынан һәм балаларынан ҡасыр. Шуға күрә Хаҡ Тәғәлә менән дуҫлыҡтың асылын ныҡ төшөн».

❁

Аллаһ менән дуҫлыҡ нәфес һәүәҫлектәренән баш тарта белеүгә бәйле. Түбән теләктәре менән дуҫ булғандар Аллаһ дуҫлығынан мәхрүм.

Мәғрифәтуллаһ (Аллаһты танып белеү) – Уны һәр саҡ иҫтә тотоу тигән һүҙ. Әммә күптәребеҙ, донъя көтөү өсөн килем алыу менән артыҡ мауығып, Ниғмәттәрҙе биреүсе тураһында онота. Байлыҡҡа эйә булырға ынтылып, бөтә байлыҡтарҙың Хаҡ Хужаһын иҫтән сығара!

❁

Ғафиллыҡ – кешенең минутлыҡ ләззәттәр өсөн (Йәннәттәге) мәңгелек бәхетен (Йәһәннәмдәге) ғазаптарға алмашыуы һәм фани донъялағы ҡыҫҡа ғына ғүмерен мәңгелек Йәннәттән өҫтөн күреүе.

Ғафиллыҡ – көн уртаһында Ҡояштан мәхрүм ҡалыу кеүек. Ғәмһеҙ кеше океанда штурвалы боҙолған карапҡа оҡшаш – ниндәй упҡында башын һалыуы билдәһеҙ.

❁

Ғафиллыҡ – кешенең минутлыҡ ләззәттәр өсөн (Йәннәттәге) мәңгелек бәхетен (Йәһәннәмдәге) ғазаптарға алмашыуы һәм фани донъялағы ҡыҫҡа ғына ғүмерен мәңгелек Йәннәттән өҫтөн күреүе.

Ғафиллыҡ – көн уртаһында Ҡояштан мәхрүм ҡалыу кеүек. Ғәмһеҙ кеше океанда штурвалы боҙолған карапҡа оҡшаш – ниндәй упҡында башын һалыуы билдәһеҙ.

❁

Баһауддин Нәҡшбәнд әйткән:

«Зекер – ғәмһеҙлектән ситләшеү. Ғәмһеҙлек китһә, хатта ки һеҙҙең өнһөҙ тороуығыҙ ҙа зекергә хисапланасаҡ».

❁

Беҙҙең заманда хәйерселек базарында бәхет табырға өмөтләнгән байтаҡ ғафил әҙәмдәр, рухи ҡәнәғәтлек эҙләп, көнсығыш диндәрендә һәм философияһында киң таралған йога һәм медитация практикаларынан ярҙам эҙләй. Әммә улар булышлығында күңел хозурлығына ирешеп булмай, ҡыҫҡа ваҡытҡа нәфес бер аҙ еңеллек кенә тоя.

Мосолман өсөн барса ғибәҙәттәр, айырыуса зекер, фекер йөрөтөү (тәфәккүр), тамаша ҡылыу (мураҡаба) - фани донъяла ла, Әхирәттә лә тыныслыҡ һәм бәхет сығанағы, улар йөрәктең Аллаһ менән берлеген тәьмин итә.

Шуны ла онотмайыҡ: берҙән-бер хаҡ дин булған ислам камил. Хаҡ дингә тулы булмағандан, камил булмағандан протез кәрәкмәй.

Аллаһҡа хеҙмәт итергә тейеш булған әҙәм, үҙ-үҙенән тайшанып, фани мәхлүктәргә йөрәген бағлай, һәм Хаҡ Тәғәләнең асыуына тарый. Үҙенең Яралтыусыһын, Ризыҡландырыусыһын, Хаҡ Раббыһын онотоп, бәндәнең башҡа ишектәрҙе ҡағып ярҙам эҙләүенән дә ҙурыраҡ рәхмәтһеҙлек бармы икән?!

Аллаһ Сүбхәнәһү үә Тәғәлә әйтә:

«Шулай булғас, һеҙ Мине (ғибәҙәт ҡылып) зекер итегеҙ, Мин дә һеҙҙе зекер итәсәкмен. Миңә шөкөр итегеҙ. Аң булыығыҙ, Миңә кәферлек ҡылмағыҙ» (әл-Баҡара (Һыйыр), 152).

❁

Бихисап илаһи бәрәкәттәргә лайыҡ әҙәм балаһына Раббыбыҙ Аллаһҡа хәмед-маҡтауҙар әйтеү, Уны зекер итеү һәм рәхмәтеңде белдереү лазым. Әммә һәр кем үҙенә нимә кәрәген үҙе һайлай – Йәннәтте хуп күрәме ул, әллә Йәһәннәм утынмы! Бәндә бер секунд та утҡа ҡаршы тора алмай, шул сәбәпле берҙәнбер һыйыныу урыны, берҙән-бер терәк – Йәнәбе Хаҡ.

Раббыбыҙ Аллаһ бойора:

فَفِرُّوا إِلَى اللَّهِ

«Барығыҙ ҙа Аллаһҡа һыйыныығыҙ…» (әз-Ҙәрийәт (Таратыусылар), 50)

Йәғни ғүмерегеҙҙең һәр мәлендә Аллаһҡа һыйыныығыҙ, Унан ярҙам һорағыҙ һәм Уға ғибәҙәт ҡылығыҙ!

❁

«Эй, иманлы халыҡ! Аллаһты күп зекер итегеҙ» (әл-Әхзәб, 41) аятының тәфсирендә Ибн Ғаббас (радыйаллаһу ғәнһү) әйткән: «Аллаһ (намаҙ, ураҙа, зәкәт кеүек) һәр ғибәҙәт өсөн билдәле сиктәрҙе урынлаштырған һәм уларҙы Үҙенең ҡолдары өсөн фарыз ҡылған. Ул шулай уҡ кисерерлек сәбәптәре булғандарҙың (ҡылмау йәки еңеләйтеп ҡылыу хаҡындағы) аҡланыуҙарын да ҡабул иткән. Әммә былар зекергә ҡағылмай. Аллаһ Сүбхәнәһү үә Тәғәлә уға сик билдәләмәгән. Ул зекер ҡылыуҙан баш тартҡандарҙың, әгәр ул аҡылдан яҙған ғына булмаһа, аҡланыуҙарын ҡабул итмәй. Аллаһ Тәғәлә кешеләргә, һис нимәгә ҡарамайынса, зекер халәтендә булыуҙы бойорған...» (Табари, Джәмиү әл-бәйән ән тавили айи әл-Ҡөрьән, XXII, 22; Ҡуртуби, XIV, 197).

❁

Баязид Бистами әйткән:

«Мул зекер, уның оло миҡдары ғына түгел, ә ғафиллыҡтан баш тартып, уны хозурлыҡ халәтендә ҡылыу».

Мөхтәрәм Мәүләнә әйткән: «(Хәҡиҡи) зекер уйланырға мәжбүр итә. Зекерҙе ҡатып ҡалған уйҙарыңдың ҡояшы ит».

❁

Зекер – механик рәүештә Аллаһтың Исемдәрен ҡабатлау ғына түгел. Камил зекер Раббыбыҙҙың Бөйөклөгө хаҡында уйланыу, Уның Ҡөҙрәте кәүҙәләнештәре алдында бөтә күңелең менән тетрәнеү, Унан йырағайтҡан нәмәләрҙән пакланып, рухиәтең менән Аллаһҡа яҡынайыу.

Изге аятта әйтелә:

«Раббыңдың исемен зекер ит һәм бөтә барлығың менән Уға йүнәл» (әл-Мүзәммил (Бөркәнеүсе), 8).

❁

Зекер – Аллаһҡа хәмде-ҫәнәләрҙе генә ҡабатлап әйтеү түгел. Зекерҙең киң мәғәнәһе шунда: һүҙҙәрҙән тыш, күҙең күргән һәр нәмәгә бағып, Аллаһ Тәғәлә-не ҡәлбең менән даимән зекер итеү. Бәндә, тупраҡҡа ҡарап, илаһи Ҡөҙрәттең сағылышын тоя. Үҙенә, балаларына, тирә-йүненә ҡараһа, һәммәһен иң гүзәл һүрәттә бар ҡылған Йәнәбе Хаҡтың иҫ киткес Бөйөклөгөнә таң ҡала һәм нәсихәт ала.

Әҙәм балаһы Ҡояшҡа һәм Айға баҡһа, был ике күк календарының, бер генә секундҡа ла һуңламайынса, миллиондарса йылдар буйы туҡтауһыҙ хәрәкәт итеүе тураһында уйлана һәм илаһи ғилем, ҡөҙрәт һәм сәнғәттең ни тиклем юғары булыуын нығыраҡ төшөнә. Кешеләргә һәм барса йән эйәләренә йәшәргә мөмкинлек биргән атмосфералағы нескә гармония тураһында фекер йөрөтөп, быларҙың һәммәһенең камил рәүештә Юҡтан бар итеүсенең (әл-Халиҡ), һәр нәмәне Үҙ Ҡөҙрәте менән булдырыусының (әл-Бәәри) һәм һәр йән эйәһен ҡабатланмаҫ йөҙ-ҡиәфәт менән Бар итеүсенең (әл-Мүсауыр) ижад еме-ше икәнлеген аңлай.

Бөйөк Аллаһты һис ҡасан онотмаған, Ҡөрьәндә, Ғаләмдә һәм кешеләрҙә сағылыш тапҡан илаһи көстө күрә белгән йөрәк кенә хәҡиҡи зекер ҡылыуға һәләтле була.

Һөҙөмтәлә, һүҙ менән ҡылынған зекер менән бергә тәфәккүр сиктәре лә киңәйә, йөрәктәге хистәр тәрәнәйә. Аллаһ ҡоло йөрәге һәр мәл һөрән һала: «Йәә Аллаһ!»

❁

Аллаһты зекер итеү – «Аллаһ» һүҙен ҡабатлау ғына түгел. Зекер ҡәлебтә төйәк тапһа, кешелә дөрөҫ ниәттәр, дөрөҫ ғәмәлдәр барлыҡҡа килер һәм шул сәбәпле кимәле үҫер.

Хөрмәтле Мәүләнә әйткән:

«Ауыҙ һәм тел менән ишетмәй, фекерләмәй ҡылынған зекер тулы түгел. Ихлас күңелдән һоҡланып ҡылынған зекер өнһөҙ… Йә кеше, һин Уның Исеме етерлек тип уйлайһың, әммә Уны таба алмайһың! «Һу» кәсәһенән эсмәй тороп (йәғни Аллаһ менән дуҫлыҡ шишмәһенән эсмәй тороп), мин-минлектән нисек ҡотолорһоң?»

❁

Хөрмәтле Әшрәф улы Руми зекерҙе өс кимәлгә бүлгән:

«Беренсеһе – был халәттә тел зекер менән мәшғүл, әммә йөрәк ғәмһеҙ. Был ябай халыҡ (ғауам) зекере. Икенсеһе – тел һәм йөрәк менән ҡылынған зекер. Был һайлам ҡолдарҙың (хауас) зекере. Өсөнсөһө – тел, йөрәк һәм бөтә ағзалар менән ҡылынған зекер. Был һайламдарҙан да һайлам ҡолдар (хасүл-хауас) зекере…»

❁

Зекер яҡтылығы халәткә бәйле. Аллаһ зекерҙе ҡабул итһен өсөн, бөтә хәрәм һәм мәкруһ нәмәләрҙән баш тартыу лазым. Кешене Аллаһтан йыраҡлаштырған барса донъяуи эҫенеүҙәр һәм нәфес теләктәре йөрәктән алып ташланырға тейеш. Зекерҙең тел менән генә түгел, тәрән фекер йөрөтөп, йөрәк менән дә ҡылыныуы уғата мөһим.

❁

Раҫлауҙарынса, ғәрәп телендәге «кеше» (инсан) тигән һүҙ «онотоусанлыҡ» тип тәржемә ителгән «нисйән» һүҙе менән тамырҙаш. Ата-бабаларыбыҙ әйткән: «Кеше хәтере онотоусанлыҡтан (нисйән) яфа күрә». Шуға күрә кеше нәсихәт биреүгә һәм иҫкә төшөрөп тороуға мохтаж.

Гонаһтар бәндә Аллаһты онотҡан саҡта ҡылына. Ғәмһеҙлек сәбәбе – Аллаһ Тәғәләне онотоу, шуға күрә Аллаһты йыш зекер итергә кәрәк. Аятта әйтелә: **«…Онотоп ебәрәһең икән, Раббыңды иҫеңә төшөр…»** (әл-Кәһәф (Мәмерйә), 24)

❁

Ғарифтар (салих заттар) ғүмеренең һәр мәлендә Аллаһ Тәғәләгә доғала – ҡайғыла ла, шатлыҡта ла. Доғанан ситләшеү – Аллаһ ҡолоноң үҙ Раббыбыһынан ситләшеүе. Хөрмәтле Хәсән Басри әйткән: «Доғаларығыҙ ҡабул

булмаҫ, тип ҡурҡмайым мин. (Ғәмһеҙлеккә батып,) уларҙы ҡылырға һәләтһеҙ булырһығыҙ, тип ҡурҡам!»

❁

Хөрмәтле Джәфәр Садыҡҡа һорау биргәндәр:

«Беҙгә ни булды, ниңә беҙҙең доғаларыбыҙ ҡабул булмай?» Ул әйткән: «Сөнки һеҙ уны үҙегеҙ белмәгән Затҡа ҡылаһығыҙ!»

Йәғни, әгәр һеҙ Йәнәбе Хаҡҡа тейешенсә хеҙмәт итмәйһегеҙ икән, әгәр неҙҙә Аллаһтан ҡурҡыу юҡ икән, «йыш зекер итегеҙ» әмеренә буйһонмайһығыҙ икән, милкегеҙ, йәшәү рәүешегеҙ менән Уға тейешлене бирмәйһегеҙ икән, Аллаһты танып белеү (мәғрифәтуллаһ) мөмкин булмаясаҡ. Доғағыҙ ҡабул булмай, сөнки һеҙ уны буш йөрәк менән ҡылаһығыҙ.

❁

Аллаһ Тәғәлә һәр ваҡыт һәм һәр ерҙә беҙҙең менән. Әммә һәр ваҡыт һәм һәр ерҙә беҙҙең Аллаһ менән бергә булыуыбыҙ мөһим. Ул хәләттә кескәй генә ғәмәлебеҙ ҙә тауға әйләнә ала. Һәм киреһенсә, Аллаһҡа ғафил хәләттә ҡылынған ғәмәлебеҙ изге була алмай. Ғәмһеҙ йөрәк менән ҡылынған намаҙ - йәнһеҙ, доға – яуапһыҙ, ә тәүбәләр ҡабул ителмәй.

❁

Аллаһ Тәғәлә ваҡыт һәм урынға мохтаж түгел. Ул һәр ваҡыт бар һәм Ул һәр ерҙә.

Аллаһ сикһеҙ Көҙрәте менән даимән Үҙенең яратылмыштары янында, һәм уларға уларҙың үҙҙәренән дә яҡын.

Камиллығын беҙ төшөнөп бөтә алмаған Раббыбыҙ Үҙенең ҡолдарын һәр мәл күрә һәм ишетә һәм уларҙың һәр халәте хаҡында хәбәрҙар.

Аллаһ ҡолоноң һәр даим үҙен Раббыбыһы хозурында тойоуы – был имандың төп асылы. Беҙ был фани донъяла Раббыбыҙ Аллаһты күрергә һәләтле түгел. Әммә һәр изге ғәмәлебеҙҙе Уның беҙҙе күреп тороуын, беҙгә Ул үҙебеҙҙән дә яҡын булыуын тойоп ҡылабыҙ, ана шул саҡта күңелебеҙҙә ихласлыҡ тыуа, тәҡүәлек сәскә ата, хошуғ емештәре пәйҙә була.

❁

Ғилем океанынан эсергә телмәгәндәрҙең ғәмһеҙлеге шуның менән аңлатыла: улар рухи ләззәттең нимә икәнен белмәй. Әгәр нимә юғалтҡандарын төшөнһәләр, уларҙың хәле бөтөнләй башҡа булыр ине.

Был донъялағы юғары дәрәжәнән баш тартҡан һәм илаһи мөхәббәт диңгеҙенә сумған Ибраһим ибн Әҙһәм әйткән: «Әгәр ҙә ки Аллаһты һөйөүҙә үҙеңде онотоу (вәджд), ләззәт һәм Аллаһҡа ҡарата мөхәбәттә батып юғалыу (истиғраҡ) күҙгә күренерлек нәмә булһа, королдәр, уларҙы алыр өсөн, барса хазиналарын һәм короллектәрен ҡорбан итер ине».

❁

Яңы тыуған сабыйға һөт кенә бирәләр, ә үҫә төшкәс, ул төрлө тәмле ризыҡтар теләй башлай. Рухи тормош та шундай уҡ. Ғилеме булмағандар ер тормошо ләззәттәре - ысын, тип уйлай. Әммә ләкин йөрәк Аллаһты танып белеүгә күмелһә (мәғрифәтуллаһ), хистәр, ҡараштар, кимәлдәр тәрәнәйә, зауығы ла үҙгәрә. Донъяның барса хазиналары ябай ҡырсынташ кеүек тойола башлай, балалар уйынсығы һымаҡ, үҙенең әһәмиәтен юғалта һәм инде йөрәкте лә, күҙҙе лә сағылдырмай.

Сөнки бөйөктәрҙән-бөйөк ләззәт – йөрәгеңдең Аллаһ менән берләшеүе...

❁

Берәү Аллаһтың хәкиҡи ҡолона әйләнһә, Уның мәхлүктәренең ҡоло булыуҙан туҡтай, хәкиҡи азатлыҡҡа эйә була. Юғиһә ул йәберләүселәр, залимдар, байлыҡ әсирлегенә, нәфес теләктәренә буйһоноуҙан ҡотола алмай. Бындай әсирлектәрҙән ҡотолоуҙың берҙән-бер юлы – нәфесеңде Аллаһ Тәғәләгә буйһондороп, Уның әмерҙәрен үтәү.

Хөрмәтле Әбү Бәкер (радыйаллаһу ғәнһү) әйткән: «Аллаһ һәм мәхлүктәр сығыштары менән бәйле түгел. Аллаһҡа яҡынайыу Уға буйһоноу һәм әмерҙәрен үтәү аша ғына мөмкин».

Изге аятта әйтелә:

إِنَّ أَكْرَمَكُمْ عِندَ اللَّهِ أَتْقَاكُمْ

«…Хаҡтыр, гонаһ ҡылыуҙан ҡурҡҡан кеше Аллаһ ҡаршыһында иң оло абруй ҡаҙаныр…» (әл-Худжүрат (Бүлмәләр), 13).

❁

Хөрмәтле Мәүләнә әйткән:

«Доғалар һәм ғибәҙәттәр Аллаһҡа булырға тейеш. Аллаһ менән булғандар өсөн үлем дә, ғүмер ҙә күркәм. Әммә йөрәгендә Аллаһты таба алмағандар өсөн мәңгелек тормош сығанағы ла (әб-и хайат) – ут!»

❁

Иң яман үлем – Көҙрәтле Аллаһҡа ҡарата ғафил булыу һәм Уның ризалығынан мәхрүм ҡалыу! Үлем еле өйөрөлөп торған тормош ырҙынында ғәмһеҙ йөрөгәндәрҙе үҙҙәре ташлап киткән ер донъяһы илап оҙатмаясаҡ һәм улар алдында пәйҙә булған ҡәбер донъяһы ла йылмайып ҡаршы алмаясаҡ.

ҠӨРЬӘН КӘРИМ

Күктәр һәм йондоҙҙар Киәмәткә ҡәҙәр улаһы Көҙрәт кәүҙәләнеше булып ҡалған кеүек, Көрьән дә, именлек күктәре һәм кешелек киләсәге кеүек, аят йондоҙҙары менән балҡып торасаҡ һәм Хисап көнөнә саҡлы һаҡланасаҡ…

Мәүләнә шәйех әйткән: «Көрьән аяттарын һәм Пәйғәмбәребеҙ (саллəллаһу ғəлəйһи үə сəллəм) хәҙистәрен уҡый башлағанға тиклем, үҙеңде төҙәт. Әгәр ҙә ки һин рауза баҡсаһының хуш еҫен тоймайһың икән, баҡса түгел, ә йөрәгең һәм еҫ тойоу һәләтең ғәйепле!»

Ҡөрьән Кәрим – ныҡлы еп, уның бер осо Аллаһ Көҙрәтендә, икенсеһе – беҙҙә. Раббыбыҙға яҡынайыу өсөн, уға сат йәбешеү лазым.

❁

Ҡөрьән Кәрим – һуңғы улаһы Яҙма һәм аҡылы булғандарға, фекерләй белгәндәргә күктең һуңғы саҡырыуы.

❁

Был фани донъяла әҙәмгә төбәлгән Ҡөрьәнде индереүе - Аллаһ Тәғәләнең иң бөйөк рәхмәте, мәрхәмәте.

❁

Мәрхәмәтленең мөрәжәғәтен ишетеү, күңелеңдә улаһы һулышты тойоу, был фани донъяла Аллаһ менән һөйләшеү – ул Ҡөрьән уҡыу.

❁

Йәнәбе Хаҡ дуҫтарының береһе Әбү Хәсән Хараҡани әйткән:

«Аллаһ ҡоло Раббыһын табырға маташҡан саралар (вәсилә) ни ҡәҙәр генә булмаһын, шуларҙың иң яҡшыһы – Ҡөрьән. Шуға күрә һеҙ Аллаһ Тәғәләне Ҡөрьән юлында эҙләргә тейеш» (әл-Хадаикүл-вәрдийә, 458-се бит).

Ҡөрьән – дөрөҫ аҡиданың һәм дини әҙәптең нигеҙе. Нигеҙе ныҡ булмаған һәр нәмә емерелеүгә дусар.

❁

Аллаһ Тәғәлә әйтә:

«Мәрхәмәт эйәһе Аллаһ Ҡөрьәнде өйрәтте. Инсанды Ул яралтты. Һөйләшергә өйрәтте» (әр-Рахман (Мәрхәмәтле Аллаһ), 1-4).

Икенсе төрлө әйтһәк, Ҡөрьән мөхитендә йәшәп кенә, кеше бәхеткә ирешә ала. Изге Ҡөрьәндә телгә алынған «әхсан-и тәкүим» («иң гүзәл форма»), «әшраф-и мәхлүкәт» («яратылмыштарҙың иң яҡшыһы») сифаттарына ирешеү, кешелек бәҫен юғары тотоу Ҡөрьән яҡтылығына таянып хеҙмәт иткәндә генә мөмкин, шул осраҡта ғына илаһи хәкиҡәттәр, серҙәр, хикмәт һәм нәсихәттәр кешеләргә аңлайышлы була башлай. Ҡөрьәнгә ни тиклем күңел бағлаһа һәм буйһонһа, кеше шул дәрәжәлә «камил кеше» була ала.

❁

Күктәр һәм йондоҙҙар Ҡиәмәткә ҡәҙәр илаһи Ҡөҙрәт кәүҙәләнеше булып ҡалған кеүек, Ҡөрьән дә, именлек күктәре һәм кешелек киләсәге кеүек, аят йондоҙҙары менән балҡып торасаҡ һәм Хисап көнөнә саҡлы һаҡланасаҡ...

❁

Ғүмер юлыбыҙҙа осраған аңлашылмаған нәмәләргә күҙебеҙҙе асҡан, төрлө мәсьәләләрҙе хәл итергә ярҙам иткән, ҡараңғылыҡты яҡтыртҡан, аҡыл өсөн дә, йөрәк өсөн дә ышаныслы дәлилдәр килтергән берҙән-бер китап – ул Ҡөрьән Кәрим.

❁

Хөрмәтле Мәүләнә әйткән:

«Ҡөрьән мөсхәфен бер окка[2] ҡара файҙаланып яҙырға мөмкин. Әммә ундағы серҙәрҙе асып һалыр өсөн, икһеҙ-сикһеҙ ҡара диңгеҙҙәре лә, донъялағы барса ағастарҙан эшләнгән ҡәләмдәр ҙә етмәҫ».

❁

Ысын фекер йөрөтөү (тәфәккүр) үәхи ярҙамын алған аҡыл һәм йөрәк осрашҡанда башлана.

2. Окка – 400 дирһәм йәки 1,2828 кг тиң ауырлыҡ берәмеге.

Әгәр ҙә ки иге-сиге булмаған рухи энергия (фәйез) һәм Ҡөрьәндең юғары етәкселеге булмаһа, беҙҙең уйҙарыбыҙ һәм хистәребеҙ уңдырышлы тупраҡтан мәхрүм ҡоро орлоҡ хәлендә булыр ине.

❁

Кеше эсендә ҡапма-ҡаршы ике ҡотоп бар, береһе уны игелеккә, яҡшылыҡҡа тартһа, икенсеһе – яманлыҡҡа һәм тәкәбберлеккә. Инсандарҙың һәммәһенең халәте һәм үҫеше ошо ҡапма-ҡаршы ике ҡотоп араһында үтә.

Хөрмәтле Мәүләнә әйткән:

«Эй, хәҡиҡәт юлынан барыусы! Һиндә Муса ла, Фирғәүен дә бар. Үҙеңдә ошо ике дошманды эҙләргә кәрәк!»

«Муса Фирғәүенде еңһен өсөн, үәхи яҡтылығы менән нурлан!»

❁

Ҡөрьән ике донъяны ла нурландыра, уларға рухи тәртип бирә. Был донъяның барса мәҙәниәте һәм ғилеме Аллаһ Тәғәлә кешеләргә бер аҙ биргән ғилемдең валсыҡтары. Әгәр ҙә кеше, ғүмерен уларға бағышлап, Йәнәбе Хаҡты һәм мәңгелек хәҡиҡәтте онотһа, үҙен киләсәк тормоштан мәхрүм итә. Ундай ғафил әҙәмдәрҙе йәлләргә генә ҡала!

❁

Хөрмәтле Мәүләнә әйткән:

«Әгәр ер күк менән дошманлаша башлаһа, ул уңдырышһыҙға, үлегә әйләнә».

Бәндә Кемгә мохтаж булыуын яҡшы белергә һәм Уға ғына ярҙам һорап мөрәжәғәт итергә тейеш. Әгәр ул, аҡылын эшкә егеп, илаһи яҙмаларҙы уҡый һәм тыңлай икән, күркәм фекер йөрөтөү (тәфәккүр) халәтендә буласаҡ.

❁

Бик күп бәрәкәттәргә оҡшап, аҡыл ике осо ла үткер ҡылыс кеүек. Уны яҡшылыҡ өсөн дә, яманлыҡ өсөн дә файҙаланырға мөмкин. Асылда, Иблис Раббыбыһының әмеренә ҡаршы баш күтәрә һәм, нәфес һәүәҫлегенә бирелгән фекерҙәре һөҙөмтәһендә, мәңгелек ҡәһәргә дусар була. Тимәк, аҡыл кешене хәҡиҡәткә һәм яҡшылыҡҡа илтеүсе юл күрһәтеүсе булһын өсөн, уны изге Яҙма ярҙамында тәрбиәләү лазым.

❁

Динде аңлау өсөн, аҡыл ғына етерлек түгел, шуға күрә Аллаһ Тәғәлә Изге Яҙмаларын һәм пәйғәмбәрҙәрен ебәргән. Барса философ-рационалистар

бер-береһенең фекерен инҡар итә, ә пәйғәмбәрҙәр раҫлай, сөнки улар үәхи менән килгән бер үк хәҡиҡәткә саҡыра. Изге Яҙмаларҙан өлөш алмаған аҡыл һәм философия кешелекте сәғәҙәткә алып килә алмай.

❁

Беренсе булып Аллаһ Тәғәләгә шайтан ҡаршы сыға. Бөгөн дә бәхәсләшкән, Ҡөрьәндең илаһи әмерҙәренә ҡаршы сыҡҡан кешеләр бар. «Ҡөрьәндең ҡайһы бер ҡарарҙары шундағы урынға һәм шул заманға бәйле», – тип белдерә улар, һәм, ҡайһы бер аяттарҙы ғәмәлдән сыҡҡан тип, рационализм битлеге аҫтында дин талаптарын кешеләрҙең һәүәҫлектәренә, аҙашыуҙарына нигеҙләнеп үҙгәртергә маташалар. Улар шәрҡиәтселәрҙең беҙгә ят булған, ислamға дошман булған философтарҙың ағыулы идеяларын үҙләштерәләр һәм тараталар. «Тарихилыҡ» – аптыраған көндән ниндәй сара ҡылырға белмәгән, Аллаһ менән көрәшергә маташҡан шайтан индергән төшөнсә.

❁

Аллаһҡа һәм Уның Илсеһенә (саллəллаһу ғələйһи үə сəллəм) буйһонмай тороп, сикле аҡыл менән оҡшағандарын ҡабул итеп, ауырҙарын инҡар итеп, Ҡөрьәнде һәм Сөннәтте анализларға маташыу Аллаһ Тәғәләгә хеҙмәт әҙәбе менән ярашмай. Бындай үҙ көсөңә саманан тыш ышаныу тураһында Аллаһ Тәғәлә әйтә:

«Әй, иман килтергән әҙәмдәр! Аллаһҡа итәғәт итегеҙ, Пәйғәмбәргә итәғәт итегеҙ. Ҡылған эштәрегеҙ заяға китмәһен!» (Мөхәммәд, 33).

❁

Ҡөрьән рухиәте ышығына инә алмаған ғәмһеҙ кешеләр тормоштоң тышҡы яғын ғына күрәләр, хикмәттән һәм эске донъя хәҡиҡәттәренән мәхрүмдәр. Улар ғүмер буйы донъя рәхәтлектәре һәм ләззәттәре артынан сабыулап йөрөй, был донъя йәшәйешенең мәғәнәһенә иғтибар бирмәй.

Улар донъя табынында ҡомһоҙланып ризыҡлана, әммә Ризыҡ биреүсе (әр-Раззәәҡ) уның хәҡиҡи Хужаһын танымай.

Улар туғандарын ерләй, әммә ер аҫтында уларҙы нимә көтөүе тураһында хәбәрҙар түгел. Улар сәрүи ағастарының өнһөҙ, һүҙһеҙ телен аңламай.

Хатта ки ер тетрәүҙәр, штормдар һәм төрлө бәхетһеҙлектәр уларҙы киҫәткәндә лә, хаҡты инҡар итеү өсөн, үҙҙәренә «стихия һәләкәте» кеүек ялған сәбәптәр табалар, ҡотолоу өсөн берәй тишек эҙләйҙәр.

Шуныһы ғәжәп: улар Аллаһ биләмәһендә йәшәй, әммә донъяның ошо хәҡиҡи Хужаһына дошманлыҡ күрһәтә.

Ҡөрьәндән ситтә үткән ғүмер – мәңгелеккә үҙ-үҙеңә ҡул һалыу.

❁

Ҡөрьән изге, юғары. Ул булған ерҙә изгелек, бәрәкәт, яҡшылыҡ бар, шуға күрә рухи хәҡиҡәттәрҙе танып белгән хикмәт эйәһе (ғариф) әйткән:

«Ябраил (ғәләйһис-сәләм) Изге Ҡөрьәнде Мөхәммәд Пәйғәмбәргә (салләллаһу ғәләйһи үә сәлләм) тапшырған һәм иң күренекле фәрештәгә әйләнгән.

Ҡөрьән Мөхәммәд Пәйғәмбәргә (салләллаһу ғәләйһи үә сәлләм) төшөрөлгән, һәм ул уға саҡлы булған һәм унан һуң киләсәк бөтә кешеләрҙең Әфәнденә әйләнгән.

Ҡөрьән Мөхәммәд Пәйғәмбәр (салләллаһу ғәләйһи үә сәлләм) өммәтенә ебәрелгән, һәм ул өммәттәрҙең иң яҡшыһына әйләнгән.

Ҡөрьән Рамаҙан айында төшөрөлгән, һәм ул ун бер айҙың солтанына әйләнгән.

Ҡөрьән Ҡәҙер кисендә төшөрөлгән, һәм ул төн мең айҙан да хәйерлерәккә әйләнгән.

Әгәр Ҡөрьән һинең йөрәгеңә инһә һәм тормошоңа инһә, һин кешеләрҙең иң күркәменә әйләнерһең!»

❁

Аллаһҡа яҡын булыуҙан да юғарыраҡ дәрәжә һәм бәхет юҡ. Был бәхеткә ирешеүҙең иң ышаныслы сараһы – Ҡөрьән кешеһе булыу.

❁

Аллаһ Илсеһе (салләллаһу ғәләйһи үә сәлләм) бер заман әйткән:

– Хаҡтыр, Аллаһҡа яҡын булған кешеләр бар!

Сәхәбәләр унан һораған:

– Йәә Рәсүлуллаһ! Кемдәр улар?

Аллаһ Илсеһе (салләллаһу ғәләйһи үә сәлләм) яуап биргән:

– Улар Ҡөрьән кешеләре, Аллаһ кешеләре һәм Аллаһтың һайлам ҡолдары!
(Ибн Мәджә, Мукаддима, 16).

❁

Ҡөрьән кешеһе булыр өсөн, йөрәктәребеҙ рухи энергия (фәйез) һәм рухиәт менән тулы булыуы, халәтебеҙ һәм ғәмәлдәребеҙ менән Ҡөрьәндең тере тәф-

сире булырға ынтылыуыбыҙ, уны өйрәнеп, уға өйрәтеп, уның айырылғыһыҙ өлөшө булыуыбыҙ лазым.

❁

Хәҙистә әйтелә:

«Ике кешенән генә көнләшергә мөмкин. Беренсеһе – Аллаһ ярҙамы менән Ҡөрьәнде өйрәнгән кеше. Ул көнөн дә, төнөн дә Ҡөрьән менән мәшғүл, Ҡөрьәнгә ярашлы ғәмәл ҡыла. Икенсеһе – Аллаһ байлыҡ бүләк иткән кеше. Ул уны көнөн дә, төнөн дә (Аллаһ юлында) сарыф итә» (Бохари, Ғильм, 15, 15).

❁

Был донъялағы иң яҡшы кешеләр – Ҡөрьән ышығында йәшәүселәр, уның нурына ҡойоноп йәшәүселәр, йәғни тере Ҡөрьән була алған кешеләр. Тере Ҡөрьән булыр өсөн, уны өйрәнергә һәм уның буйынса ғәмәл ҡылып йәшәргә кәрәк.

❁

Аллаһ Илсеһе (салләллаһу ғәләйһи үә сәлләм) әйткән:

«Һеҙҙең арағыҙҙа иң хәйерлегеҙ – Ҡөрьәнде өйрәнгәнегеҙ һәм уны башҡаларға ла өйрәткәнегеҙ» (Бохари, Фадаилүл-Ҡөрьән, 21).

❁

Беҙ һәр саҡ Аллаһҡа хеҙмәтебеҙҙе Ҡөрьән әмерҙәренән сығып баһаларға, уны уҡыу менән генә сикләнмәҫкә, ә уларҙы тормошҡа ашырырға тейешбеҙ.

❁

Ғабдулла ибн Мәсғуд һүҙҙәре ниндәй тәрән мәғәнәгә эйә:

«Ҡөрьән беҙ уға ярашлы ғәмәл ҡылһын өсөн төшөрөлгән. Әммә кешеләр уны уҡыуҙы ғәҙәт итеп алған!» (ҡар. Сарахси, Мабсут, I, 200, Бейрут, 1331 г.).

Ҡөрьән биттәренә ҡарап ҡына, ундағы хәҡиҡәт һәм изгелекте үҙләштереү мөмкин түгел. Иң мөһиме – уҡылған аяттар мәғәнәһе мөхитенә күмелеү. Быныңмаҡсаты – тормошобоҙҙо шуларға ярашлы ҡороу.

❁

Аҡыл Ҡөрьәнде ятлап алған кеүек, йөрәк тә уны ятлап алыуы мөһим. Ә был ғәмәлдәребеҙҙә сағылыш таба.

❁

Һәр иман эйәһе Ҡөрьәнде мотлаҡ өйрәнергә тейеш, ул өс этапта ғына тормошҡа ашырыла:

1) Хуруф (хәрефтәр): Ҡөрьәнде, хәрефтәрен дөрөҫ әйтеүгә иғтибар биреп, тәджүид ҡағиҙәләре буйынса уҡыу, сөнки Ҡөрьән уҡыу Ғаләмдәр Раббыһы менән әңгәмә ҡороуға тиң. Әгәр аҡланырлыҡ сәбәбе бар икән, кеше намаҙын ултырып та ҡыла ала, әммә Ҡөрьән уҡымайынса намаҙ ҡыла алмай.

2) Худуд (сиктәр): илаһи әмер - тыйыуҙарҙы үтәү.

3) Хулҡ (холоҡ): Ҡөрьән әҙәбен үҙләштереү.

❁

Ҡөрьәнде, хәрефтәрен дөрөҫ әйтеп, тәджүид ҡағиҙәләренә иғтибар биреп, күп уҡырға һәм уның йәшерен мәғәнәһенә төшөнөргә ынтылырға, тәрән фекер йөрөтөп, тормошта уның буйынса ғәмәл ҡылып йәшәргә тырышырға кәрәк. Ғазали имам әйткәнсә: «Тел уҡырға тейеш; төшөнөү һәләте булған аҡыл - фекер йөрөтөргә (тәфәккүр), йөрәк иһә үҙләштерергә, өйрәнергә тейеш» (ҡар. Ихья, I, 816).

❁

Аятта әйтелә:

«...Шөбһә юҡтыр, Аллаһтың хөкөмдәрен хөрмәт иткән кешенең күңеле тәҡүәлектәлер» (әл-Хадж (Хаж), 32).

Быға ярашлы, исламдың Ҡөрьән, аҙан, Ҡәғбә, Рауда-и Мутаһһара, әл-Аҡса мәсете кеүек изге нәмәләре Аллаһтың мөһим аяттары булып тора. Уларға илтифатһыҙ булырға ярамай, һәр береһенә тейешле хөрмәт күрһәтеү лазым.

❁

Ҡөрьәнде хошуғ менән уҡыу, Аллаһ һүҙҙәренә ҡарата тейешле әҙәп күрһәтеү, тәһәрәтһеҙ ҡул менән ҡағылмау лазым, пак булмаған көндәрҙә ҡатын-ҡыҙ уға тотонмаҫҡа тейеш. Ҡөрьәнде шулай уҡ билдән юғары тоторға, ул тарафҡа аяҡты һуҙмаҫҡа, өҫтөнә башҡа китаптар, әйберҙәр һалмаҫҡа, хәжәтханаға уның менән инмәҫкә кәрәк. Бер һүҙ менән әйткәндә, Изге Ҡөрьәнгә беҙ ғибәҙәт ваҡытындағы итәғәтлелек менән хөрмәт күрһәтергә тейеш. Бынан тыш Ҡөрьәнгә ҡарата ошондай нәзәкәтле мөнәсәбәтте киләһе быуындарға ла тапшырырға бурыслыбыҙ, сөнки Аллаһ билдәләренә, аяттарына итәғәтлелек йөрәгебеҙҙәге имандың шаһиты булып тора.

❁

Ҡөрьән бәрәкәтенә ирешеү өсөн, уны ихтирам менән асырға, тейешле хөрмәт күрһәтергә, кешеләргә Мәрхәмәт эйәһе өйрәткән итәғәтлелек менән уҡырға кәрәк. Изге аятта әйтелә:

«Мәрхәмәт эйәһе Аллаһ Ҡөрьәнде өйрәтте» (әр-Рахмән (Мәрхәмәтле Аллаһ), 1-2).

«Ҡөрьән уҡылғанда, бер тауышһыҙ тыңлағыҙ: һеҙ Аллаһтың ярлыҡауына юлығырһығыҙ» (әл-Әғрәф (Кәртәләр), 204).

Илаһи мәрхәмәткә лайыҡ булыу өсөн, Ҡөрьәнгә тейешле әҙәп күрһәтеү, тулҡынланып тыңлау һәм уға ярашлы ғүмер итергә ынтылыу лазым. Уға ҡағылғанда, физик таҙалыҡ мөһим булған кеүек, ҡәлб таҙалығы ла мөһим.

❁

Ҡөрьәнде пак йөрәк менән уҡыйҙар. Күҙҙәр шундай йөрәктең үҙенә күрә бер күҙлеге генә булырға тейеш.

❁

Хөрмәтле Ғосман (радыйаллаһу ғәнһү) әйткән:

«Әгәр һеҙҙең йөрәгегеҙ пак булһа, һеҙ Аллаһ һүҙенән туя алмаҫ инегеҙ» (Ғәли әл-Муттаҡи, II, 287/4022).

❁

Иман эйәһе, тәһәрәт алғанда ауыҙын сайҡап, Ҡөрьән уҡырға һәм Аллаһты зекер итергә лайыҡлы физик тышҡы таҙалыҡ булдырған кеүек, йөрәген дә ялғаң, ғәйбәт, яла яғыу ише гонаһтарҙан тәүбә, ғәфү үтенеү, йәш түгеү ярҙамында пакларға тейеш. Ҡөрьәнде пак йөрәк менән уҡыйҙар. Кемдер шундай йөрәк менән уҡый алмай икән, ысын мәғәнәһендә уның бәрәкәтенә, рухиәтенә лайыҡ була алмайе.

❁

Хөрмәтле Мәүләнә әйткән:

«Ҡөрьән аяттарын һәм Пәйғәмбәребеҙ (салләллаһу ғәләйһи үә сәлләм) хәҙистәрен уҡый башлағанға тиклем, үҙеңде төҙәт. Әгәр ҙә ки һин рауза баҡсаһының хуш еҫен тоймайһың икән, баҡса түгел, ә йөрәгең һәм еҫ тойоу һәләтең ғәйепле!»

Аллаһ Сүбхәнәһү үә Тәғәлә кешеләрҙең Ҡөрьәндән файҙа алыуы тураһында шулай ти:

«Һуңынан был китапты бәндәләребеҙ араһынан һайлап алынған кешегә бирҙек. Бәндәләр араһында үҙ-үҙенә зыян һалғандар ҙа, урталыҡты

тотҡандар ҙа, Аллаһ рөхсәте менән изгелек ҡылыу юлында ярышҡандар ҙа бар. Бына изгелек ҡылыу шулай була!» (Фәтыр (Яралтыусы), 32).

Йәғни ҡайһы бер кешеләр Ҡөрьән уҡый, әммә уҡығандары тамағында төйөлөп ҡала, ҡәлбендә сағылыш тапмай һәм халәтендә, әҙәбендә күренмәй. Улар, зинданда тотҡан һымаҡ, Ҡөрьәнде туҙанлы кәштәлә тота. Ошо рәүешле улар оло ниғмәтте юҡҡа сығара, үҙенә зыян һала.

Ҡөрьән буйынса ғәмәл ҡылған, ә ҡайһы саҡ унан тайшанған кешеләр ҙә бар. Улар, шелтәләүсе рухиәтенә (нәфс-и ләүүәмә) буйһонорға мәжбүр булып, яҡшылыҡ һәм яманлыҡ араһында үрһәләнә.

Хәкиҡәткә инанып, рухи энергия (фәйез) һәм Ҡөрьән рухиәте арҡаһында изгелектәр ҡылыуҙа оҙайлы юл үткәндәр ҙә бар. Тап улар киләһе тормошта ҙур отошта буласаҡ кешеләр, тап улар Аллаһтың был фани донъяны физакәрлек ҡылып үткән бәхетле ҡолдары.

❁

Ҡөрьәнде һәр кем уҡый ала, әммә унан файҙаны һәр кем йөрәк халәтенә ҡарап ала. Ҡөрьән серҙәре Аллаһ ҡолоноң хәкиҡәткә яҡынлығы кимәленә ҡарап асыла. Диңгеҙ ярында торған кешеләр ҙә бит уның өҫтөн генә күрә, ә тәжрибәле сумыусылар диңгеҙҙең төрлө кимәлендәге күренештәрҙе күҙәтә. Ҡөрьән үҙенең серҙәрен инсан йөрәге тәкүәлегенә ярашлы аса, хәкиҡәткә, изгелеккә юл күрһәтә.

❁

Аллаһ Тәғәлә изге аятта әйтә:

«Беҙ Ҡөрьәндән шундай хикмәт индерәбеҙ: ул мөьминдәр өсөн шифа һәм рәхмәттер, ә ғәҙелһеҙҙәр өсөн бары тик зыян ғына» (әл-Исра (Төнгө йөрөү), 82).

❁

Хөрмәтле Мәүләнә кешеләрҙең Ҡөрьәндән файҙа алыу кимәле менән бәйле түбәндәге сағыштырыуҙы килтерә:

«Ҡояш ҡоро ботаҡҡа ла, тере ботаҡҡа ла яҡын. (Ул икеһен дә йомарт рәүештә йылыта). Әммә ваҡыты еткәс, хуш еҫле һутлы емештәре булған тере ботаҡты һәм ағастың ҡоро ботағын сағыштыр ҙа, ҡояшҡа ҡайһыһы яҡыныраҡ булыуы хаҡында уйлан! Яғырға уңайлы булған ҡоролоҡтан башҡа ҡоро ботаҡ ҡояштан нимә алған!?»

❁

Хәҙистә әйтелә:

«Кешеләрҙең иң яманы – Аллаһ Китабын уҡыған һәм унан һис бер файҙа алмаған гонаһлы һәм әҙәпһеҙ кеше» (Әхмәд, II, 37, 41).

❁

Ҡөрьән Кәрим хазина сығарырға мөмкин булған боронғо ер кеүек. Әммә йөрәгебеҙ, уның аят сөмгөлдәренә күмелеп, тәрән фекер йөрөтөргә (тәфәккүр) тейеш.

❁

Хөрмәтле Ғәли (радыйаллаһу ғәнһү) әйткән:

«Ғилемһеҙ ғибәҙәттә һәм тәфәккүрһеҙ Ҡөрьәндә фәйез һәм руханийәт юҡ».

Үҙеңде илаһи хәҡиҡәттәр яҡтылығына йүнәлтеү кеүек ҡиммәтле сифат асылына рухи донъянан үәхи ала белеү һәләте һалынғандарға бирелгән. Күктән тере һыу яуһа ла, ҡәлбе игелектән мәхрүм булғандарға уның тамсыһы ла эләкмәҫ. Хас та бәрәкәтле ямғырҙан файҙа күрмәгән таш ҡаялар һымаҡ…

❁

Хөрмәтле Мәүләнә әйткән:

«Изге Ҡөрьән пәйғәмбәрҙәр халәте һәм сифаттары кәүҙәләнеше булып тора. Әгәр уны уҡыйһығыҙ һәм уға ярашлы ғәмәл ҡылаһығыҙ икән, һеҙ, әйтерһең дә, пәйғәмбәрҙәр һәм әүлиәләр менән осраштығыҙ! Әгәр һеҙ уны уҡыйһығыҙ һәм уның әмерҙәрен үтәмәйһегеҙ, уның рухи ҡиммәттәренә ярашлы йәшәмәйһегеҙ икән, пәйғәмбәрҙәр һәм әүлиәләр менән осрашыуҙан һеҙгә ни файҙа? Ҡөрьәнде уның буйынса ғәмәл ҡылып йәшәгәндәр генә яҡшы аңлай».

❁

Ҡөрьән илаһи ихтыярҙы сағылдыра, шуға күрә уны Аллаһҡа яҡын булғандар яҡшыраҡ аңлай.

Тормошобоҙҙо ни тиклем Ҡөрьән рухиәтендә ҡора алһаҡ, Ҡөрьәнде лә шул тиклем нығыраҡ аңлай алырбыҙ.

❁

Сәхәбәләр һымаҡ, күктән төшөрөп ҡоролған табындай күреп, Ҡөрьәндән файҙа алырға тырышабыҙмы?

Ғабдулла ибн Масғуд (радыйаллаһу ғәнһү) бәйән иткән:

«Сәхәбәләр (кисен) өйҙәренә ҡайтҡас, уларҙың ҡатындары тәүҙә ике һорауҙы бирер ине: «Бөгөн Ҡөрьәндең нисә аяты төшөрөлдө?» һәм «Бөгөн һин

Аллаһ Илсеһенең (салләллаһу ғәләйһи үә сәлләм) нисә хәҙисен ятланың?» (Ғабдулхәмид Кәшк, Фи Рихабит-Тәфсир, I, 26).

❁

Беҙ үҙебеҙҙән һорарға тейеш:

✓ Ҡөрьән Кәрим менән беҙҙең мөнәсәбәтебеҙ ниндәй?

✓ Илаһи хәҡиҡәттәр беҙгә ниндәй офоҡтарҙы аса? Уларҙы тәрән тойғолар менән уҡый алабыҙмы?

✓ Ғаләмдәр Раббыһы төшөргән, хәҡиҡәт юлы етәксеһе булған Изге Ҡөрьәнде кешеләр яҙған бөтә китаптарҙан да юғары ҡуябыҙмы?

✓ Уны уҡығанда, ни кимәлдә уны аңларға, йәшерен мәғәнәһен аңларға тырышабыҙ? Белгәндәрҙән үҙебеҙ белмәгәнде һорайбыҙмы, асылын төшөнөргә ынтылабыҙмы?

Әгәр ҙә ки ошо һорауҙарға ыңғай яуап бирһәк, тимәк сихәтле һәм мәрхәмәтле Ҡөрьәндән файҙа аласаҡбыҙ.

❁

Бай иман эйәләре байлыҡтарын үҙен дини ғилемгә, рухи ҡиммәттәргә һәм, бигерәк тә, Ҡөрьәнгә хеҙмәт итеүгә бағышлағандарға сарыф итергә тейеш. Улар үҙен Аллаһҡа бағышлаған, мохтаждар тураһында хәстәрлек күргән һәм был донъяла үткенсе кеүек йәшәгәндәр янында булырға тейеш.

❁

Аллаһ Сүбхәнәһү үә Тәғәлә әйтә:

«(Саҙаҡа) үҙҙәрен Аллаһ юлына бағышлағандарға (фәкирҙәргә, ғалимдарға) бирелергә тейеш, сөнки улар ер йөҙө буйлап йөрөй алмай. Уларҙың хәлен белмәгән кешеләр, уларҙың тыйнаҡ һәм ғорур булғанына ҡарап, был әҙәмдәрҙе бай, тип иҫәпләйҙәр. Һин уларҙы (үҙҙәренә генә хас) ғәләмәттәренән таныйһың. Улар (ҡыйын хәлдә булһалар ҙа, күҙгә керә-керә) хәйер һорамай. Һеҙҙең (Хаҡ юлында) күпме мал сарыф иткәнегеҙҙе, шик юҡ, Аллаһ белеп тора» (әл-Баҡара (Һыйыр), 273).

❁

Беҙ Ҡөрьәнде өйрәнеү һабаҡтарын йәмғиәтебеҙҙе яраларҙан арындырыуҙың иң тәьҫирле сараһы итеп ҡарарға тейешбеҙ. Ундай дәрестәр алып барған ойошмаларға матди йәһәттән дә, мораль йәһәттән дә ярҙам итеү лазым. Ҡөрьән курстарына йөрөгән балаларыбыҙ, хәзистә әйтелгәнсә, *«йөрәктәре мәсеттәргә бәйле йәштәр»* булһын өсөн, барса көсөбөҙҙө һалырға тейешбеҙ.

Был бик мөһим, сөнки күңелдәре менән был донъяға бәйле әҙәмдәр ымһындырғыс реклама һәм мода ярҙамында йәштәребеҙҙе бар көсөнә ҙтә торған түбән ләззәттәргә этәрә. Беҙ, иман юлындағы кешеләр, уларға ҡаршы тороп, кешеләр Аллаһ юлын һөйһөн өсөн, бөтә сараларҙы ла ҡулланырға тейешбеҙ.

❁

Хатта ауыр заманда ла Аллаһ Илсеһе (салләллаһу ғәләйһи үә сәлләм) Мәккәлә Дарул-Арҡам, Ҡөрьән мәктәбе ойоштора, ә Мәҙинәгә күскәс, шулай уҡ Ҡөрьән мәктәбе Суффаға нигеҙ һала.

«Кеше үҙенең һөйгәне менән бергә» (Бохари, Әҙәп, 96) хәҙисенә ярашлы рәүештә Пәйғәмбәребеҙҙең (салләллаһу ғәләйһи үә сәлләм) Ҡөрьәнде өйрәтеү ынтылышына беҙгә лә ҡулыбыҙҙан килгәнсә ҡушылыу лазым, сөнки был эшкә тотоноу, уға ярҙам итеү һәм ғүмеребеҙҙе шуға бағышлау - Әхирәттә Пәйғәмбәребеҙ (салләллаһу ғәләйһи үә сәлләм) менән бергә булыуҙың иң көслө сараһы.

❁

Әгәр Ҡөрьәнгә мөхәббәт ҡыҫыр йөрәктәрҙе яҙғы бәрәкәтле ямғыр шикелле һуғармаһа, мосолман өммәтенең гөлгә күмелгән баҡса һымаҡ сәскә атыуын күрә алмаясаҡбыҙ.

Кешенең рухи тормошона бер хата ла Ҡөрьәнгә битарафлыҡ кеүек зыян һалмай.

❁

Рухиәтһеҙлек заманында кешеләрҙе ҡотҡарыу эшендә Аллаһ ризалығы һәм хәкиҡәт өсөн ҡылынған иң мөһим нәмә – Изге Ҡөрьәнгә тырышып хеҙмәт итеү.

❁

Йәмғиәттә анархияны булдырмау өсөн, иман һәм Ҡөрьәнгә нигеҙләнгән тәрбиә булыуы лазым.

❁

Киләсәктә илаһи асыуға дусар булмаҫ өсөн, Аллаһ рәхмәтенә ирешеү өсөн, беҙгә һәм беҙҙән һуң килгән быуынға Ҡөрьәнде ололау, уға хөрмәт менән ҡарау, уға хеҙмәт итеү лазым. Шуны оноторға ярамай: Ҡөрьән буйынса йәшәргә һәм уның принциптарын тормошҡа ашырырға тырышҡан тәҡдирҙә генә илаһи ярҙамға лайыҡ буласаҡбыҙ.

Балаларыбыҙ Ҡөрьән мөхитендә үҫһә, был донъяла ла, Әхирәттә лә бәхетле булыр. Ин шәә Аллаһ.

Фекер йөрөтөп ҡарағыҙ әле: бөгөн, мәктәптәрҙә һәм балалар баҡсаһынан алып университетҡа ҡәҙәр төрлө курстарҙа сит телдәр уҡытылғанда, беҙҙән Ҡөрьән талап иткән телмәр мәҙәниәте менән ни кимәлдә танышбыҙ? Кешеләр теленә ниндәй әһәмиәт бирәбеҙ һәм Ҡөрьән өйрәткән әҙәп телмәренә ниндәй әһәмиәт бирәбеҙ?

❁

Балаларға донъяуи ғилем биреүгә ҡарағанда, Ҡөрьәнде өйрәнеүгә беҙ күберәк әһәмиәт бирергә тейешбеҙ. Аллаһ Сүбхәнәһү үә Тәғәләгә һәм уның Пәйғәмбәренә (салләллаһу ғәләйһи үә сәлләм) ихласлығыбыҙҙың күрһәткесе булып тора был. Ниндәйҙер сит телгә ҡарағанда, Ҡөрьән телен өйрәнеүгә күберәк иғтибар итергә тейешбеҙ. Раббыбыҙға хеҙмәт итеүҙең мөһим бер үҙенсәлеге булырға тейеш ул.

❁

Пәйғәмбәребеҙ (салләллаһу ғәләйһи үә сәлләм) әйткән:

«Ҡөрьән уҡығыҙ! Сөнки Хисап көнөндә ул үҙен уҡығандарға шәфәғәт ҡылырға киләсәк» (Мөслим, Мусафирин, 252).

Әгәр ҙә ки Әхирәттә Ҡөрьән шәфәғәтен алырға теләһәк, хәрефтәрҙе дөрөҫ әйтеүгә һәм тәжүид ҡағиҙәләренә иғтибар биреп, уны күп уҡырға, мәғәнәһенә төшөнөргә һәм бөтә ғүмеребеҙҙе уның әмер-тыйыуҙарына ярашлы ҡоророға тейешбеҙ. Айырым алғанда, балаларыбыҙҙы Ҡөрьән курстарына йөрөтөргә, уларға Ҡөрьән әхлағы ҡиммәттәрен үҙләштерергә ярҙам итергә тейешбеҙ.

Юғиһә, Аллаһ һаҡлаһын, Хисап Көнөндә Ҡөрьән шәфәғәте урынына унан үҙебеҙгә ҡарата шикәйәт ишетеүебеҙ ихтимал.

❁

Хәйерле үлем – Ҡөрьән яҡтылығы һәм бәрәкәтендә йәшәлгән ғүмер бүләге. Тетрәнеп хошуғ менән уҡығандар һәм уның менән ғәмәл ҡылғандар өсөн Ҡөрьән ҡәберҙә – нур, Ҡиәмәт Хисабында – шәфәғәтсе (Мизан[3]) үлсәүен ауырайтҡан сауап һәм Сират[4] күперендә ярҙамсы буласаҡ.

❁

3. Мизан (ғәрәп. – Әл-Мизаан) – Хисап Көнөндә Ғәрәсәт майҙанында Аллаһ Тәғәлә Үҙ рәхмәте менән яратылмыштарының бер өлөшөн – Йәннәткә, Үҙ Ғәҙеллеге менән бер өлөшөн Йәһәннәмгә индерер өсөн урынлаштырған Ғәҙеллек Үлсәүе.
4. Сират (ғәрәп. – ас-Сират) – Йәһәннәм өҫтөндәге күпер. Хәҙистәр буйынса, Ҡиәмәт Көнөндә һәммә кеше уның аша үтергә тейеш. Сират «ҡылдан нәҙек һәм ҡылыстан үткер» (Имам Әхмәт Мүснәде, № 24232) һәм унан тәкүәле мосолмандар ғына еңеллек менән үтәсәк.

Йөрәген - иман һоҡланыуы (вәджд), күкрәген – фәйез (рухи энергия), күңелен - Аллаһҡа хеҙмәт итеү, выжданын юғары әхлаҡ паклығы менән биҙәгәндәр, хозурлыҡҡа ирешкәндәр ни тиклем бәхетле!

Бөйөк Хисап көнөндә бәрәкәтле Ҡөрьәнде балаларына һәм киләһе быуындарға тапшырыу кеүек изге бурысты лайыҡлы башҡарыуҙары хаҡындағы хәбәр менән һөйөндөрөлгәндәр ти тиклем бәхетле буласаҡ!

Аллаһ Сүбхәнәһү үә Тәғәлә беҙҙе Ҡөрьән аяттарын һәм сүрәләрен һаҡлаған, уның буйынса ғәмәл ҡылған, уның әхлағын алған тәҡүәле ҡолдарынан әйләһен.

Амин!

БЕҘҘЕҢ ПӘЙҒӘМБӘРЕБЕҘ
(салләллаһу ғәләйһи үә сәлләм)

Аллаһ Сүбхәнәһү үә Тәғәлә Үҙенең һөйөклө Илсеһен (салләллаһу ғәләйһи үә сәлләм), образлы итеп әйткәндә, конверт һәм шул конверт эсендәге йөкмәткеһе сифатында бар ҡылған. Пәйғәмбәребеҙ (салләллаһу ғәләйһи үә сәлләм), бер яҡтан, Аллаһты танып белеүгә алып килеүсе хәҡиҡәттәр һалынған конвертҡа оҡшаш булһа, ул конвертты аса һәм уны йөрәк менән уҡый алыусылар илаһи серҙәргә, хикмәткә һәм хәҡиҡәткә юл табыусылар.

Икенсе яҡтан, Аллаһтың салих заттары (ғарифтар) әйткәнсә, барса ғаләмдең барлыҡҡа килеү сәбәбе — Аллаһ Илсеһенең (салләллаһу ғәләйһи үә сәлләм) рухи асылы булған Мөхәммәд Нурына (Нур-и Мүхәммәди) илаһи мөхәббәт. Бар Ғаләм Мөхәммәд Нуры хөрмәтенә яратылған.

Аҫыл ташты аҫыл ҡумтала һаҡлайҙар. Ҡумтаның бөтә ҡиммәте – уның эсендә һаҡланған хазиналарҙа. Шул рәүешле Аллаһ Илсеһе (салләллаһу ғәләйһи үә сәлләм) Ғаләм конвертының хазинаһына оҡшаш.

Ғаләм йәшәйешенең сәбәбе – Мөхәммәдкә илаһи мөхәббәт. Барса Ғаләм Пәйғәмбәребеҙгә (салләллаһу ғәләйһи үә сәлләм), бөтә барлыҡтың Нурына бағышланған.

❁

Хөрмәтле Мәүләнә әйткән:

«Ике донъя ла бер йән өсөн бар ҡылынған! «Әгәр һин булмаһаң [йәә Мөхәммәд], әгәр һин булмаһаң, Мин был Ғаләмде бар ҡылмаҫ инем!» - кәлимәһе тураһында уйлан».

«Кил, эй йəн эйəһе! Хəкиҡи байрам – Мөхəммəд пəйғəмбəр (саллəллаһу ғəлəйһи үə сəллəм) менəн ҡауышыу (вуслат). Сөнки йыһан яҡтылығы уның мөбəрəк барлығы Нурылыр».

❁

Юныс Əмре яҙған:

Был донъяның мəртəбəһе бул, йəə Мөхəммəд, пəйғəмбəрҙəр пəйғəмбəре!

Һөйөү менəн сəлəм еткер уға, һəм гонаһың юйылыр.

Аллаһ һөйөп бар ҡылған уны, «Хəбибем!» - тигəн,

Ерҙең һəр гөлө – ул Мостафа тире...

❁

Аллаһ Тəғəлə Пəйғəмбəребеҙ (саллəллаһу ғəлəйһи үə сəллəм) йөҙөндə исламдың маҡсаты булған иң камил кешене (инсан камил) бар ҡылған. Ул – Ғаləмдəргə рəхмəт һəм һəммə иман эйəһенə үрнəк.

❁

Аллаһ Сүбхəнəһү үə Тəғəлə һөйөклө Илсеһен (саллəллаһу ғəлəйһи үə сəллəм) «үсватүн хəсəнə», йəғни бөтə кешелеккə иң камил үрнəк шəхес булыу бəхетен бүлəк иткəн.

Бына ни өсөн етемлектə үткəн кескəй сағынан уҡ ул үҙ ғүмерендə төрлө социаль баҫҡыстар аша үтə һəм ҙур юғарылыҡҡа күтəрелə, абруй ҡаҙана – пəйғəмбəр һəм дəүлəт башлығы булып китə.

Төрлө социаль баҫҡыста торған кешеләр, уның ғəмəлдəрен иң гүзəл үрнəк итеп күреп, һəләттəре һəм мөмкинлектəренə ярашлы уға оҡшарға тырыша ала.

❁

Аллаһ Илсеһенең (саллəллаһу ғəлəйһи үə сəллəм) берҙəн-бер остазы – Аллаһ Тəғəлə. Бер кеше лə уны уҡытмай. Шул уҡ ваҡытта ул психология, педагогика, социаль антропология кеүек кешегə йөҙ тотҡан, кешенең эске донъяһын өйрəнгəн бөтə фəндəрҙең иң үрендə тора. Ул тəрбиə ҡылған йəмғиəттə психологик, экономик проблемалар ҙа, иҡтисади һəм социаль көрсөк тə булмай.

❁

Һəр рəссамдың оҫталығын уның хеҙмəттəренə ҡарап баһаларға мөмкин. Яһилиəт йəмғиəтенəн сəхəбəләр быуынын үҫтергəн Пəйғəмбəребеҙ (саллəллаһу ғəлəйһи үə сəллəм) – кешелек тарихындағы иң камил остаз.

23 йыллыҡ пәйғәмбәрлек дәүерендә ул Ҡиәмәткә ҡәҙәр бөтә кешелеккә үрнәк булырлыҡ йәмғиәт төҙөй.

Изгелек цивилизацияһын төҙөйәсәк сәхәбәләргә әхлаҡи тәрбиә биреү – уның белем биреү системаһы һөҙөмтәһе. Ниндәй уҡытыусы, ниндә психолог бөгөн шундай тәрбиә бирә ала?

❁

Пәйғәмбәребеҙҙең (салләллаһу ғәләйһи үә сәлләм) тыуыуы аяуһыҙлыҡ һәм ҡырағайлыҡ ҡараңғылығында атҡан таң кеүек була. Ул халыҡҡа кешелеклелек тураһында иҫкә төшөрә. Мәрхәмәт тураһында онотҡан кешеләрҙең намыҫын һауыҡтыра. Пәйғәмбәребеҙ (салләллаһу ғәләйһи үә сәлләм) әсәләренең йөрәктә ярыҙай әрнеткес һыҡтауы аҫтында үҙ балаларын тереләй күмгән ҡатҡан йөрәктәрҙе йомшарта. Әйтерһең, ҡоро сүллеккә әйләнгән йөрәктәрҙе рәхмәт еле менән терелтеүсе яҙ етә. Уны үлтерергә теләгәндәр унда терелә. Уға һәм исламға дошман булғандар яңы тормош башлай.

❁

Тәжрибәле баҡсасы тәрбиәләгән энәле ҡыуаҡтар бер аҙҙан һоҡланғыс рауза ҡыуаҡтарына әүерелә. Пәйғәмбәребеҙ (салләллаһу ғәләйһи үә сәлләм) килгәс, ҡан күленә оҡшаш сүллектәр хозурлыҡ донъяһына әүерелә. Уның йылмайыуынан ҡыҫыр күңелдәр йомшара, миһырбанлыҡ сәскәләренә күмелә. Күп илаһтар һәм иманһыҙлыҡ ҡараңғылығында ҡап-ҡара күмергә әүерелгән йөрәктәр уның саҡырыуы, остазлығы бәрәкәтендә күҙҙең яуын алырҙай гәүһәргә әйләнә. Ул Хисап көнөнә тиклем изгелек күгендә балҡып торған һәм кешелеккә юл күрһәткән шәхестәр тәрбиәләй.

❁

Аллаһ Илсеһенең (салләллаһу ғәләйһи үә сәлләм) бөтә кешелеккә төбәлгән ғәҙеллек һәм тыныслыҡ системаһы бөйөклөгөн хатта ки бик күп мосолман булмаған философтар, тарихсылар һәм дәүләт эшмәкәрҙәре лә танырға мәжбүр булды. Француз тарихсыһы Альфонс Ламартин шулай тип белдерҙе:

«Әгәр маҡсат бөйөклөгө, түгелгән аҡсалар наҡыҫлығы һәм иҫ киткес һөҙөмтәләр даһиға хас өс критерий булып тора икән, заманыбыҙ тарихындағы ниндәй бөйөк кешене Мөхәммәд менән тиңләргә мөмкин? Иң данлыҡлы кешеләр барлыҡҡа килтергән нәмәләр — ҡорал, ҡанундар, империялар. Әммә былар йыш ҡына уларҙың күҙ алдында уҡ емерелгән матди нәмәләр генә. Мөхәммәд иһә ғәскәрҙәргә, ҡанундарға, империяларға, халыҡтарға һәм династияларға ғына йоғонто яһап ҡалманы, кешелектең өстән берен тәшкил иткән миллиондарса кешеләргә йоғонто яһаны».

Британия яҙыусыһы Томас Карлайл әйткән: «Башында таж йөрөткән һис бер император үҙ ҡулы менән теккән елəндə йөрөгəн Мөхəммəд пəйғəмбəр кеүек һөйөү һəм хөрмəткə лайыҡ булманы».

❁

Философ Лафайет 1789 йылғы Француз революцияһының идеологик нигеҙен əҙерләүселəрҙең береһе була. Данлыҡлы “Кеше һəм граждандар хоҡуғы декларацияһы”н тəҡдим иткəнгə ҡəҙəр, ул бөтə хоҡуҡ системаларын өйрəнə, һəм, ислам ҡанундарының юғарылығын күреп, шулай тип əйтмəй булдыра алмай:

«О Мөхəммəд! Һис кем һəм һис ҡайҙа ғəҙеллек урынлаштырыуҙағы һинең кимəлгə етə алманы!»

❁

Немец аҡыл эйəһе һəм шағир Гёте хөрмəтле Пəйғəмбəребеҙгə (саллəллаһу ғəлəйһи үə сəлләм) шундай юлдар менән мөрəжəғəт итə.

«Бөйөк тау сығанағы һин!

Һəр кем ала һинəн файҙа.

Ҡəрҙəштəрең ҡосағыңа алып, ҡайнар сүл ҡомонан ышыҡлайһың.

Ярһып тауҙар артылаһың да, мəңгелек океанына етəһең».

Күреүебеҙсə, рухи нескəлек һəм ғəҙеллеккə эйə мосолман булмағандар ҙа Пəйғəмбəребеҙҙең (саллəллаһу ғəлəйһи үə сəлләм) изгелеген һəм бөйөклөгөн раҫлай.

❁

Пəйғəмбəребеҙ (саллəллаһу ғəлəйһи үə сəлләм) аяуһыҙ, наҙан йəмғиəттə «сəғəҙəт быуаты» йəмғиəтенə əйлəндереүгə сəбəп булған кеүек, уның мəрхəмəтенең йоғонтоһо бөтə кешелектə именлеккə алып килергə, ҡотҡарырға һəләтле. Уның йөрəктəрҙе йəнləндергəн принциптары – ул йəшəгəн заманның именлек рецебы ғына түгел, Ҡиəмəткə ҡəҙəр йəшəгəн бөтə быуаттарҙың һəм быуындарҙың да берҙəн-бер рецебы.

❁

Пəйғəмбəребеҙ (саллəллаһу ғəлəйһи үə сəлләм) ҡояш кеүек күңел түрендə ҡалҡмай тороп, йəберləүҙəр, ғəҙелһеҙлек һəм ҡырағайлыҡ масштабы көн һайын арта барған заман яһилиəте ҡараңғылығынан ҡотолоу мөмкин түгел.

Йөрәктәр Ҡөрьән һәм Сөннәт рухиәте менән йыуылмай тороп, иманһыҙлыҡтың йәһәннәм төтөнөнән һәм әхлаҡһыҙлыҡтан пакланыу, рухи көрсөктән арыныу мөмкин түгел.

❁

Аятта әйтелә:

«Хаҡтыр, (яһилиәт заманында) ап-асыҡ һәм мотлаҡ аҙашҡан булһалар ҙа, үҙ араларынан пәйғәмбәр һайлап, Аллаһ мөьминдәргә киң рәхмәтле булды. Пәйғәмбәр уларға Аллаһ аяттарын уҡый, уларҙы яманлыҡтарҙан арындыра, уларға Китапты (Ҡөрьәнде) һәм хикмәттәр өйрәтә» (Әлү Ғимран (Мәрйәмдең атаһы), 164)

❁

Аллаһ Илсеһе (салләллаһу ғәләйһи үә сәлләм) – йөрәктәребеҙҙең бөйөк хазинаһы. Донъялағы бөтә ниғмәттәр беҙҙеке булһа, әммә беҙ Аллаһ Илсеһен (салләллаһу ғәләйһи үә сәлләм) белмәһәк, бынан ни фәтүә?! Беҙҙең был донъялағы ғүмеребеҙ ҙә, был донъя үҙе лә фани... Әммә Аллаһ Илсеһен (салләллаһу ғәләйһи үә сәлләм) танып белеүҙән килгән хозурлыҡ һәм сәғәҙәт, ихлас рәүештә уның юлынан барыу - мәңгелек...

❁

Ғүмеребеҙҙең һәр мәлендә, Ғаләмдәргә рәхмәт, мәрхәмәт, шәфҡәт булып килгән Пәйғәмбәребеҙ Мөхәммәд (салләллаһу ғәләйһи үә сәлләм) өммәтендә булыуға һөйөнөп, бәхет халәтендә булырға тейешбеҙ. Үтә торған хәүеф-хәтәр өйөрмәһенә батыу һис тә килешмәй беҙгә.

Уйлап ҡарағыҙ әле, Пәйғәмбәребеҙ (салләллаһу ғәләйһи үә сәлләм) өммәтендә булыуҙан да зурыраҡ ниндәй бүләк, байлыҡ, халәт бар?

❁

124 меңдән ашыу пәйғәмбәр араһынан Аллаһ Илсеһе (салләллаһу ғәләйһи үә сәлләм) өммәтендә булыу – беҙгә буштан-бушҡа килгән оло-ғара ниғмәт. Бының бөйөклөгөн төшөнөп етәбеҙме икән? Был оло бүләк өсөн беҙ рәхмәтлеме?

Был ниғмәткә рәхмәт йөҙөнән беҙ ғүмеребеҙ буйы һөйөү тулы күңел менән уға буйһонорға һәм өммәттең лайыҡлы ағзаһы булырға тырышырға тейешбеҙ.

❁

Аллаһ Илсеһен (салләллаһу ғәләйһи үә сәлләм) хөрмәт һәм һөйөү менән Нәби (Пәйғәмбәр), Рәсүл (Илсе), Хәбибуллаһ (Аллаһтың һөйөклөһө), Фәхр-и

Ғəлəм (Ғаләмдәр шатлығы), Расүл-и Әкрам (Иң фатихалы илсе) кеүек гүзəл исемдəре аша иçлəү һəм, исеме телгə алынғанда, уға итəғəт менəн сəлəмдəр күндереү, салауат əйтеү лазым.

❁

Аллаһ Илсеһе (саллəллаһу ғəлəйһи үə сəллəм) əйткəн: *«Кем миңə салауат һəм сəлəм күндерергə онота, Йəннəт юлынан тайпылыр»* (Ибн Мəджə, Икəмəт, 25);

«Һаран кеше – минең исемем иçкə алынғанда миңə сəлəм һəм салауат əйтмəгəн кеше» (Тирмиҙи, Дəғүəт, 100).

❁

Пəйғəмбəребеҙ (саллəллаһу ғəлəйһи үə сəллəм) əйткəн:

«Минең исемем иçкə алынғанда миңə сəлəм һəм салауат əйтмəгəн кеше минəн, ə ул минəн түгел. Йəə Аллам! Кем минең менəн бəйлəнештə, Һин дə уның менəн бəйлəнештə бул. Ə кем минең менəн бəйлəнеште өзə, һин дə бəйлəнеште өҙ!» (Дайләми, əл-Фирдаус, III, 634).

❁

Хөрмəтле Ғүмəр (радыйаллаһу ғəнһү) əйткəн:

«Доға күк һəм ер араһында ҡала. Аллаһ Илсеһенə (саллəллаһу ғəлəйһи үə сəллəм) сəлəм күндерелмəй тороп, ул Аллаһҡа күтəрелмəй» (Тирмиҙи, Витр, 21).

❁

Хөрмəтле Әбү Бəкер (радыйаллаһу ғəнһү) əйткəн:

«Аллаһ Илсеһенə (саллəллаһу ғəлəйһи үə сəллəм) сəлəм күндереү һыу утты һүндергəнгə ҡарағанда ла гонаһтарҙы йəһəтерəк юҡ итə. Уға (һөйөү һəм ихласлыҡ менəн) сəлəмдəр күндереү - бик күп ҡолдарҙы иреккə ебəреүгə ҡарағанда ла ҙурыраҡ изгелек. Аллаһ Илсеһенə (саллəллаһу ғəлəйһи үə сəллəм) мөхəббəт нəфесеңдe тəбиə ҡылыу (рийазат) һəм Аллаһ юлында ҡылыс тотоп алышыуға (йыһатҡа) ҡарағанда ла яҡшыраҡ» (Бағдади, Тариху Багдад, VII, 161).

Һис шикһеҙ, Аллаһ Илсеһе (саллəллаһу ғəлəйһи үə сəллəм) - иман юлында, ғибəҙəттəрҙə, үҙ-үҙебеҙҙе тотошобоҙҙа һəм əхлаҡта, бер һүҙ менəн əйткəндə, тормошобоҙҙоң һəр бер өлкəһендə беҙгə үрнəк, һəм беҙ уға эйəрергə тейеш... Быға ирешə алғандар ғына, Аллаһ Илсеһенə (саллəллаһу ғəлəйһи үə сəллəм) сəлəмдəр һəм салауаттар əйтеп, уға һөйөү бағлап, изгеләр юғарылығына күтəрелə ала.

❁

Намаҙ ваҡытында кешене сәләмләү намаҙҙы боҙа. Әммә «Тәхийәт» доғаһын ҡылғанда, Аллаһ Илсеһенә (салләллаһу ғәләйһи үә сәлләм) сәләм күндереү намаҙҙы боҙмай ғына түгел, уны камил рәүештә ослап ҡуйырға мөмкинлек бирә.

❁

Кем генә булһа ла, Пәйғәмбәребеҙгә (салләллаһу ғәләйһи үә сәлләм) хөрмәт күрһәтмәгән кеше - наҙан (яһил) һәм аҡылһыҙ кеше (әл-Худжурат (Бүлмәләр), 4).

❁

Үҙ ҡараштарын һәм принциптарын Ҡөрьән һәм Сөннәттән юғары ҡуйып, ғәфләткә һәм мин-минлеккә суммаҫ өсөн, иман эйәһе изге Китабыбыҙҙы һәм хәҙистәрҙе үҙе өсөн критерий итеп алып, киләһе илаһи киҫәтеүҙе тормош девизы итергә тейеш:

«Әй, иманлы әҙәмдәр! (Һүҙҙә һәм ғәмәлегеҙҙә) Аллаһтың һәм Рәсүленең алдына сыҡмағыҙ. Аллаһ ҡаршыһында (гонаһлы булыуҙан) ҡурҡығыҙ! Шик-шөбһә юҡ, Аллаһ ишетеп, белеп тороусы» (әл-Худжурат (Бүлмәләр), 1).

❁

Үрҙә атап кителгән «Аллаһтың һәм Рәсүленең алдына сыҡмағыҙ. Аллаһ ҡаршыһында (гонаһлы булыуҙан) ҡурҡығыҙ!» әҙәп ҡағиҙәһе Аллаһ Илсеһе (салләллаһу ғәләйһи үә сәлләм) юлынан нисек барырға кәрәклеген күрһәтеп тора. Ниндәй генә мәсьәлә килеп тыумаһын, иман эйәһе, Пәйғәмбәребеҙ (салләллаһу ғәләйһи үә сәлләм) нәсихәттәрен ситкә ҡуйып, тәүге планға үҙ фекерен, үҙ ҡарашын сығарырға тейеш түгел. Үҙ теләктәренә һәм мәнфәғәттәренә тап килмәһә лә, иманлы әҙәм Аллаһтың һәм Уның Илсеһенең (салләллаһу ғәләйһи үә сәлләм) әмерҙәрендә мәрхәмәт, хикмәт, бәрәкәт, изгелек барлығын һис ҡасан онотмаҫҡа һәм шуларға ярашлы ғәмәл ҡылырға тейеш.

Аллаһ Ихтыярына ярашлы ғибәҙәт ҡылыу өсөн, беҙ үҙлегебеҙҙән сығып динде аңлатыуҙан, оҡшағанын һайлап, оҡшамағанынан тайшаныуҙан һаҡланырға тейешбеҙ. «Йәнебеҙ йонсомаһын, тәнебеҙ арымаһын», - тип хафаланып, ислам принциптарын үҙебеҙсә аңлатырға тырышыу - хилаф.

❁

Исламдан оҡшағанын алып, оҡшамағанынан баш тартырға ярамай. Ислам – бер бөтөн. Уны тулыһынса ҡабул итмәгәндәр һәм тулыһынса хупламағандар иманлы була алмай. Иман бүлгеләүҙе ҡабул итмәй, уны өлөштәргә бүлергә ярамай, ул бер бөтөн. Ҡөрьәнде тотош инҡар итеүме йәки уның берәй принцибын инҡар итеүме – айырмаһы юҡ, һөҙөмтәһе кеше өсөн берҙәй ҡурҡыныс. Ике осраҡта ла ул иманынан яҙа.

Раббыбыҙ Аллаһ бойора:

«Әй, иманлы кешеләр! Ул һеҙҙе тереклек сығанағына (Ҡөрьәнгә) саҡырһа, Аллаһҡа һәм Уның Рәсүленә буйһоноғоҙ, һәм белеп тороғоҙ: Аллаһ кеше менән уның күңеле араһында торор. Һәм һеҙ, һис шикһеҙ, Уның янына тупланасаҡһығыҙ» (әл-Әнфәл (Табыш малы), 24);

«…Пәйғәмбәр һеҙгә нимә бирһә, шуны алығыҙ, нимәне алыуҙан тыйһа, уны алмағыҙ. Аллаһтың язаһынан ҡурҡығыҙ. Аллаһтың язаһы бик тә хәтәрҙер» (әл-Хәшер (Ҡыуып сығарыу), 7);

«Әй, иман килтергән әҙәмдәр! Аллаһҡа итәғәт итегеҙ, Пәйғәмбәргә итәғәт итегеҙ. Ҡылған эштәрегеҙ заяға китмәһен» (Мөхәммәд, 33).

❁

Пәйғәмбәребеҙ (салләллаһу ғәләйһи үә сәлләм) үҙлегенән сығып һис ҡасан хәбәр һөйләмәгән. Ул бары тик илаһи яҙманы тапшырған, тәфсир ҡылған, тормошҡа ашырған, уға саҡырған һәм үҙе лә тере Ҡөрьән булған.

Сәхәбәләр, мәғәнәһен төшөнһәләр ҙә, бик үк төшөнөп етмәһәләр ҙә, аҡылдың тар сиктәренә һыймаҫ Ҡөрьән аяттарына бер ваҡытта ла шикләнеп ҡарамағандар, Пәйғәмбәребеҙ (салләллаһу ғәләйһи үә сәлләм) әмерҙәрен кисекмәҫтән үтәй торған булғандар, сөнки Пәйғәмбәребеҙ (салләллаһу ғәләйһи үә сәлләм) әмерҙе бөтә аҡылды бар ҡылған Аллаһ Сүбхәнәһү үә Тәғәләнән алған. Был йәһәттән беҙгә аҙашыуҙарҙан, иллюзияларҙан азат сәләмәт аҡылға (акл-и сәлим) эйә булған Аллаһ Илсеһе (салләллаһу ғәләйһи үә сәлләм) артынан барырға кәрәк.

Йософ Хас Хаджиб әйткәнсә: «Хикмәт эйәһенең һүҙе – иҫәр өсөн күҙ».

❁

Бәндә үҙенең күҙаллауына, фекеренә таянып эш итһә, дөрөҫ эшләйем тип, хаталанып ҡуйыуы ихтимал. Тимәк, Аллаһтың һәм Уның Рәсүленең (салләллаһу ғәләйһи үә сәлләм) алдына сығырға, йәғни Китап һәм Сөннәттең асыҡ әмерҙәре бар икән, «Ә бына минеңсә…», - тип хәбәр һөйләргә ярамай.

❁

Мәрхүм Нәжип Фазылдың Аллаһҡа һәм Уның Рәсүленә (салләллаһу ғәләйһи үә сәлләм) һөйөү һәм итәғәт тулы һүҙҙәре ни тиклем гүзәл:

«Күҙем, аҡылым, фекерем бар», - тип әйтмә, үлтер уларҙы!

Һиңә сүл тойолоп, ул [Пәйғәмбәр]: «Был күл», - тиһә, тимәк, ул күл.

❁

Аҡылдың бары тик Ҡөрьән һәм Сөннәт контексында ғына мәғәнәһе бар. Хөрмәтле Мәүләнә, аҡылдағы бөтә шик-шөбһә, үкенестәрҙе алып ташлап, Аллаһҡа һәм Уның Рәсүленә (салләллаһу ғәләйһи үә сәлләм) буйһоноуҙың ни тиклем мөһим булыуын белдергән:

«Донъя эштәрендә аҡыл уңыш ҡаҙанһа ла, ул үҙенең асылы менән хәҡиҡәтте, илаһи хикмәтте һәм серҙәрҙе төшөнөргә, йәғни Аллаһты танып белергә (мәғрифәтуллаһҡа) һәләтле түгел. Был юғары юлдан барыу өсөн, үҙенә ярашлы саралар кәрәк. Һәм былар – йөрәк, мөхәббәт, вәджд (иман һоҡланыуы), истиғраҡ (Аллаһҡа ҡарата мөхәббәттә батып юғалыу). Аҡыл Мостафа өсөн ҡорбан булһын!»

❁

Пәйғәмбәребеҙ (салләллаһу ғәләйһи үә сәлләм) сәхәбәләре һәм Аллаһтың салих ҡолдары Аллаһ Илсеһенең (салләллаһу ғәләйһи үә сәлләм) бөтә әмерҙәренә буйһонған, һәм был буйһоноу мөхәббәткә нигеҙләнгән булған. Беҙ, уларҙан өлгө алып, бөтә көсөбөҙҙө һалып заманыбыҙ сиренән – Сөннәттe һанға һуҡмауҙан һаҡланырға тейеш.

❁

«Мөхәммәд хәҡиҡәтенә» (хәҡиҡәт-и Мүхәммәдиййә) ирешеү өсөн, тәүге нәүбәттә аҡыл түгел, ә йөрәк һәм буйһоноу мөһим. «Мөхәммәд хәҡиҡәте» менән сағыштырғанда, беҙҙең аңлауыбыҙ метафизик йөкмәткеле хәҙисте төшөнөргә тырышҡан сабый халәтенән айырылмай.

❁

Гурджу Хатун сәлжүк солтанының ҡыҙы, вәзир ҡатыны һәм Мәүләнәнең уҡыусыһы була. Бер заман ул остазына, Мәүләнәнең портретын эшләр өсөн, һарайҙың данлыҡлы рәссамын, христиан динен тотҡан грек Ғәлә әд-Дәүлде ебәрә. Рәссам, әүлиәгә килгәс, ҡушылған был эште үтәргә рөхсәт һорай. Мәүләнә, йылмайып әйтә: «Эйе, төшөр».

Ғәлә әд-Дәүл эшкә тотона. Әммә һүрәт төшөрөргә тотонған һайын, ул ҡаршыһында ултырған кеше ҡиәфәте башлаған һүрәтенә тап килмәүен күрә. Рәссам яңынан эшкә керешә. Шул рәүешле, Мәүләнәнең портретын төшөрөргә тырышып, ул 20 дана ҡағыҙ әрәм итә. Ахыр килеп, үҙенең көсһеҙләгән таный һәм был эштән баш тартырға мәжбүр була. Ҡәләм һәм ҡағыҙын ташлап, ул Мәүләнәнең ҡулын килеп үбә, сөнки уның һүрәт төшөрөү оҫталығы юҡҡа сыға.

Риүәйәттәр буйынса, был ваҡиға рәссамдың ҡәлбен уята. Хайран ҡалып, Раббыбыҙға оло һоҡланыу менән ул тәрән уйға сума һәм эске донъя буйлап

сәйәхәт итә башлай. Ахыр килеп, күңел күҙе аша Аллаһ Илсеһен (салләллаһу ғәләйһи үә сәлләм) күргәс, Ғәлә әд-Дәүл ҡысҡырып ебәрә: «Был диндең әүлиәләре шулай булғас, Пәйғәмбәр үҙе ниндәй икән?»

❁

Халид бин Вәлид (радыйаллаһу ғәнһү) Аллаһ Илсеһенең (салләллаһу ғәләйһи үә сәлләм) рәүеш-булмышын һүрәтләп биреүҙе һораусыларға әйтер булған: «Ебәрелгән Ебәреүсеһенә ярашлы булыр!». Йәғни, ебәреүсеһе – Ғаләмдәр Раббыһы, шунан сығып, Уның Илсеһен үҙегеҙ күҙ алдына килтерегеҙ!

❁

Һәр кем күңел күҙе, йөрәк халәтенә ярашлы фекер йөрөтә. Күреү һәләте лә йөрәккә бәйле. Асылда, кешенең ҡәлбе күрә. Ә күҙҙәр уның күҙлегенә оҡшаш.

Мәҫәлән, хөрмәтле Әбү Бәкер (радыйаллаһу ғәнһү), Аллаһ Илсеһенә (салләллаһу ғәләйһи үә сәлләм) бағып, изге кеше үрнәген күрә. Бөтә күңеле менән уны ихлас һөйә һәм Пәйғәмбәребеҙгә (салләллаһу ғәләйһи үә сәлләм) һоҡланып әйтә: «Ғүмерем, милкем, һәммәһе һиңә ҡорбан булһын, йәә Рәсүлүллаһ!». Хатта ки янында булған саҡта ла, Әбү Бәкер (радыйаллаһу ғәнһү) уны юҡһына, уға ҡарап туя алмай.

Уның киреһе булған, йөрәге күп илаһлыҡ, нәфес теләктәре һәм яһиллыҡ менән тулған Әбү Джәһл, Аллаһ Илсеһенә (салләллаһу ғәләйһи үә сәлләм) күҙ ташлағас, Сәғәҙәт Ҡояшынан күҙе ҡамаша, әммә күңелендә нәфрәт, ҡараңғылыҡ ҡына тоя. Әбү Джәһл күңелендә тыйып булмаҫлыҡ асыу ҡайнай, ул Аллаһ Илсеһенең (салләллаһу ғәләйһи үә сәлләм) иң ҡаты дошманына әйләнә. Ахыр килеп, ул үҙен, уның юлын дауам иткән ҡайһы бер замандаштарыбыҙ кеүек, мәңгелек ғазапҡа дусар итә.

❁

Аллаһ Илсеһе (салләллаһу ғәләйһи үә сәлләм) әйткән:

«Итәғәтһеҙ ендәр һәм кешеләрҙән ҡала ер һәм күк араһындағыларҙың һәммәһе минең Аллаһ Илсеһе икәнлегемде белә» (Әхмәд, III, 310).

Әгәр күҙҙәр һуҡыр булмаһа, улар уны мотлаҡ күрәсәк. Әгәр улар ҡылый булмаһа, уның бер кәмселеген дә тапмаясаҡ. Уға кәмселек тағырға тырышҡандар асылда үҙҙәренең ғафиллығын, хаталарын һәм етешһеҙлектәрен генә асып һала.

Кешелек һүгеү урынына Пәйғәмбәребеҙгә (салләллаһу ғәләйһи үә сәлләм) нисек рәхмәтен белдереү тураһында уйларға тейеш. Сөнки уның тыуғандан

алып баҡыйлыҡҡа күскәнгә ҡәҙәр кешеләрҙе ҡотҡарыу һәм нәсихәт биреү өсөн көрәшенә рәхмәт тойғоһо менән тулмаған йөрәк – йөрәк түгел, ғәфләт харабаһы.

❁

Тормошо бөтә нескәлектәренә тиклем тарихта ентекле һүрәтләнгән берҙән-бер кеше – Пәйғәмбәребеҙ (саллəллаһу ғələйһи үə сəллəм). Мосолман ғалимдарының бөтә хеҙмәттәре – бер Китапты һәм бер кешене аңлатырға тырышыу ул. Был Китап – Ҡөрьән, Аллаһ Ҡәләме, ә был кеше – Аллаһтың Һөйөклөһө, беҙҙең Пәйғәмбәребеҙ (саллəллаһу ғələйһи үə сəллəм).

❁

Аллаһ Илсеһе (саллəллаһу ғələйһи үə сəллəм) тормошон һүрәтләгән күпме китаптар бар, әммә телдең сикле ҡыҫанында Мөхәммәд хәҡиҡәтен (хәҡиҡәт-и Мүхәммәдиййә) сағылдырып буламы ни?! Беҙ уны үҙебеҙҙең сикле аҡылыбыҙ менән үлсәй алмайбыҙ. Кешенең аңлау һәләте түбән булғанға ла Аллаһ Тәғәлә уны Үҙе маҡтай, Үҙе данлай.

Тормош юлын өйрәнеп кенә Аллаһ Илсеһен (саллəллаһу ғələйһи үə сəллəм) аңлап бөтөү мөмкин түгел. Тормоштары уның тормошона нығыраҡ оҡшаш булғандар уны яҡшыраҡ аңлай. Йөрәктәрендә тәҡүәлек булғандар, уға мөхәббәт бағлағандар, уны юҡһынғандар, уның Сөннәте буйынса йәшәгәндәр Пәйғәмбәребеҙҙе (саллəллаһу ғələйһи үə сəллəм) яҡшыраҡ белә. Әгәр Аллаһ Илсеһе (саллəллаһу ғələйһи үə сəллəм) Ҡояш булһа, улар – уның Айы.

❁

Тормоштары Аллаһ Илсеһенең (саллəллаһу ғələйһи үə сəллəм) тормошона нығыраҡ оҡшаш булғандар уны яҡшыраҡ аңлай. Аллаһ Илсеһенең (саллəллаһу ғələйһи үə сəллəм) Сөннәтенә ныҡлы эйәргәндәр һәм уның ҡәлбе халәтенән өлөш алғандар уны яҡшыраҡ белә.

❁

Аллаһ Илсеһенең (саллəллаһу ғələйһи үə сəллəм) тормошон хәҡиҡи өйрәнеү Аллаһҡа һәм Аллаһ Илсеһенә (саллəллаһу ғələйһи үə сəллəм) мөхәббәтте арттыра, Сөннәткә эйәреүгә этәрә һәм, сәхәбәләрҙеке һымаҡ, иман юлында тырышлыҡ һалыуҙы арттыра.

❁

Пәйғәмбәребеҙҙе (саллəллаһу ғələйһи үə сəллəм) ташҡа баҫылғанды түгел, йөрәк һәм күңелдәрҙе уҡып белергә мөмкин. Аллаһ Илсеһенең (саллəллаһу ғələйһи үə сəллəм) тормошон, уның әхлағы менән әхлаҡланған тәҡүәле

ғалимдар һәм Аллаһтың салих ҡолдары (ғарифтар) йөрәгенән ағылған рухи энергияны (фәйез) алып, яҡшыраҡ өйрәнеп була.

❁

Аллаһ Илсеһенең (салләллаһу ғәләйһи үә сәлләм) ғәмәлдәрен һәм үҙ-үҙен тотошон белеү генә әҙ, уның ҡәлб сифаты хаҡында ла хәбәрҙар булыу кәрәк. Ә был иһә уны төрлө яҡлап белеү, барса халәттәрен һәм ғәмәлдәрен белеү тигән һүҙ:

✓ Уның мәңгелек тормошто алға ҡуйыуын;

✓ Аскетлығын (зуһд) һәм рухи көрәшен (рийәзат);

✓ Уның ихласлығын һәм тәҡүәлеген;

✓ Ғибәҙәттәр ваҡытындағы хошуғ халәтен;

✓ Илаһи көс һәм бөйөклөк сағылыштары алдында тетрәнеүен һәм көсһеҙләгән, шул турала уйланыуын;

✓ Кешеләр менән мөнәсәбәттә ғәҙәттән тыш әҙәплелеген, нәзәкәтлелеген, намыҫлылығын һәм оялсанлығын;

✓ Барса яратылмыштарға ҡарата мәрхәмәтлелеген һәм шәфҡәтлелеген;

✓ Ғәҙәттән тыш йомартлығын, физакәрлеген һәм башҡаларға ҡарата хәстәрлекле булыуын.

Пәйғәмбәребеҙҙе (салләллаһу ғәләйһи үә сәлләм) тар китап ҡыҫаны юлдарынан ғына танып белеү мөмкин түгел. Сөннәтте ни кимәлдә үтәйбеҙ, уны ла шул кимәлдә танып белә алабыҙ.

❁

Аллаһ Сүбхәнәһү үә Тәғәлә әйтә:

«(Ий, мосолмандар) хаҡтыр, һеҙгә үҙ арағыҙҙан сыҡҡан Пәйғәмбәр килде; һеҙ бәләгә тарыһағыҙ, ул хәсрәтләнә. Ул һеҙҙең өсөн йән ата, тәкүәләргә ул сикһеҙ шәфҡәтле, мәрхәмәтле» (әт-Тәүбә, 128).

❁

Аллаһ Тәғәлә Үҙенең «рәхимле» һәм «мәрхәмәтле» сифаттарын барса пәйғәмбәрҙәр араһынан Аллаһ Илсеһендә (салләллаһу ғәләйһи үә сәлләм) иң камил рәүештә бар ҡылған. Ә Рәхмәт Пәйғәмбәре (салләллаһу ғәләйһи үә сәлләм) киҫәткән:

«Иҫегеҙҙә тотоғоҙ! Әлегә иҫән саҡта, мин һеҙҙең именлегегеҙ сәбәпсеһе. Ә үлгәс, ҡәберҙә саҡта, Сурға тәүге тапҡыр өрөлгәнгә ҡәҙәр доға ҡыласаҡмын:

«Раббым! Минең өммәтем, минең өммәтем!» (Ғәли әл-Муттаҡи, Кәнзу әл-Уммәл, 14, стр. 414).

Икенсе һүҙ менән әйтһәк, Аллаһ Илсеһе (салләллаһу ғәләйһи үә сәлләм) йөрәге беҙҙең менән, йәғни өммәте менән... Ә беҙ күпме ваҡыт уның менән?!

❁

Аллаһ Илсеһе (салләллаһу ғәләйһи үә сәлләм) тәүге нәүбәттә өммәтенең именлеге һәм ҡотолоуы тураһында уйлай. Иҫән сағындағы кеүек әле лә, Барзах донъяһында, теле һәм ҡәлбе менән өммәтен ҡайғырта. Һәм уның өммәтендә булыу бәхете тейгән һәр иман эйәһенең бурысы – Аллаһ Илсеһенә (салләллаһу ғәләйһи үә сәлләм) шундай уҡ оло һөйөү, мөхәббәт менән яуап биреү.

❁

Хатта ки һуңғы һулышында ла Аллаһ Илсеһе (салләллаһу ғәләйһи үә сәлләм), үҙенең ғазаптарын онотоп, өммәтенең именлеген уйлай. Баҡыйлыҡҡа күсер алдынан, тауышы бөтөнләй өҙөлгәнсе, нәсихәт бирә: *«Намаҙҙы дауам итегеҙ! Өҫтөгөҙҙә хаҡтары булған кешеләрҙең хоҡуҡтарын һаҡлағыҙ! Уларҙың хоҡуҡтарына ҡарата Аллаһтан ҡурҡығыҙ!»* Уның был халәте – беҙгә, өммәтенә, һуңғы һулышыбыҙға ҡәҙәр, туҡталмайынса, хатта арттыра барып, Раббыбыҙға хеҙмәт итеү зарурлығына нәсихәте.

❁

Пәйғәмбәребеҙ (салләллаһу ғәләйһи үә сәлләм) өммәтенә ифрат шәфҡәтле һәм мәрхәмәтле. Ә беҙ уны шулай уҡ ныҡ яратабыҙмы, уның һымаҡ шәфҡәтлеме, мәрхәмәтлеме беҙ?

Пәйғәмбәребеҙ (салләллаһу ғәләйһи үә сәлләм) өммәте өсөн йән атып торғанда, мосолман өммәтендәге ҡорбандар, йәберләнгәндәр өсөн йөрәгебеҙ әрнейме?

Ул әҙәплелек үрнәге булған кеүек, беҙ, уның өммәте, кешеләргә яҡты йөҙ, рухи сифаттарыбыҙ, әҙәплелегебеҙ аша исламдың гүзәл дин булыуын кешеләргә күрһәтәбеҙме?

Бөтә асылыбыҙ, һүҙҙәребеҙ менән аҙашып йөрөгәндәргә исламдың күркәмлеген асып һалырға тырышабыҙмы?

❁

Аллаһ Илсеһе (салләллаһу ғәләйһи үә сәлләм) әйткән:

«Минең тормошом һәм минең үлемем – һеҙҙең өсөн бәрәкәт. Һеҙ ғәмәл ҡылаһығыҙ, аҙаҡ [Изге Яҙма аша] нәсихәт алаһығыҙ. Минең үлемемдә һеҙҙең

өсөн бәрәкәт бар: һеҙҙең ғәмәлдәрегеҙ миңә күренер. Әгәр мин яҡшыны күрһәм – быныҢ өсөн Аллаһҡа рәхмәт әйтермен, ә насарҙы күрһәм – һеҙҙең өсөн ярлыҡау һорармын» (Хайсами, IX, 24).

❁

Аллаһ Илсеһенә (салләллаһу ғәләйһи үә сәлләм) өммәтенең ғәмәлдәре күрһәтеләсәк. Ерҙә булған саҡта, беҙ уны борсоуға һалабыҙмы, әллә ул беҙҙең ғәмәлдәребеҙ өсөн Аллаһ Тәғәләгә хәмд-маҡтауҙарын белдерәме? Иртәгә Мәхшәр майҙанында уға беҙҙең ғәмәлдәребеҙ күрһәтеләсәк. Ул, беҙгә ярлыҡау һорап ялбарып, Рәхимле, Ярлыҡаусы алдында сәждәнән башын күтәрмәйәсәк... Әммә *«Һеҙ Сөннәтте ҡалдырҙығыҙ! Китегеҙ бынан! Китегеҙ бынан!»* - тип беҙҙе ҡыуып ебәрмәҫтәрме?

❁

Беҙгә тура юлды күрһәткән Аллаһ Илсеһенә (салләллаһу ғәләйһи үә сәлләм) тоғролоғобоҙ ғүмеребеҙ буйына йөрәгебеҙҙең бөтмәҫ-төкәнмәҫ хазинаһы булырға тейеш.

Рәхмәт Пәйғәмбәренең (салләллаһу ғәләйһи үә сәлләм) үҙ өммәтенә мәрхәмәте ата-әсәнең үҙ балаһына мәрхәмәтенән дә көслөрәк. Әммә яуап итеп ул беҙҙән тоғро булыуыбыҙҙы көтә. Үҙенең хушлашыу вәғәзендә ул әйтә:

«...Белеп тороғоҙ, мин, алдан килеп, һеҙҙе Йәннәттәге Кәүҫәр һыуы буйында көтөп торасаҡмын! Башҡа өммәттәр алдында һеҙҙең күплегегеҙ менән ғорурланасаҡмын. Мине (гонаһтарығыҙ менән) оятҡа ҡалдырмағыҙ!» (Ҡар. Мөслим, Хаж, 147; Әбү Дауыт, Манасик, 56).

❁

Өммәт ҡайғыһы - Аллаһ Илсеһе (салләллаһу ғәләйһи үә сәлләм) ҡайғыһы була. Шуға күрә Мөхәммәд (салләллаһу ғәләйһи үә сәлләм) өммәте ҡайғылары беҙҙең дә ҡайғыбыҙ булырға тейеш. Пәйғәмбәребеҙҙең (салләллаһу ғәләйһи үә сәлләм) йылмайып бағыуына лайыҡ булыу төп теләгебеҙ һәм маҡсатыбыҙ булырға тейеш. Мосолман өммәтенең проблемалары тураһында борсолһаҡ, Аллаһ Илсеһенең (салләллаһу ғәләйһи үә сәлләм) йөҙө беҙҙең өсөн шатланыуҙан балҡый. Әгәр ҙә ки беҙ көнсөллөк, нәфес теләктәре өйөрмәһенә батһаҡ, ғүмеребеҙ капиталын мин-минлеккә һәм һаранлыҡҡа сарыф итһәк, ул беҙҙең өсөн борсола, хафалана.

❁

Аллаһ ҡолон Раббыбыҙҙың мөхәббәт океанына алып килеүсе берҙән-бер рәхмәт һәм һөйөү сығанағы – Пәйғәмбәребеҙ (салләллаһу ғәләйһи үә сәлләм), сөнки аятта әйтелә:

«(Рәсүлүллаһ) Һин әйт: Әгәр Аллаһты яратһағыҙ, миңә эйәрегеҙ (Исламды ҡабул итегеҙ) Аллаһ та һеҙҙе яратыр һәм гонаһтарығыҙҙы ярлыҡар, - тип. Аллаһ - Ярлыҡаусы, киң күңелле, Ғәфү итеүсе» (Әлү Ғимран, 31)».

❁

Беҙ Аллаһтың мөхәббәтенә тәҡүәлек, күндәмлек һәм, бигерәк тә, Уның Һөйөклөһөнә (салләллаһу ғәләйһи үә сәлләм) мөхәббәт аша ғына ирешә алабыҙ. Берәүҙең был юлда кескәй генә етешһеҙлеге, шик-шөбһәһе булһа ла, илаһи мөхәббәт ҡапҡалары бикле ҡаласаҡ. Изге ят раҫлауынса, Пәйғәмбәребеҙгә (салләллаһу ғәләйһи үә сәлләм) мөхәббәт – Аллаһҡа мөхәббәт, уға буйһоноу – Аллаһҡа буйһоноу, ә уға буйһонмау – Аллаһҡа буйһонмау.

❁

Хөрмәтле Хәсән Басри тапшырыуынса, бер заман сәхәбәләр Аллаһ Илсеһенә (салләллаһу ғәләйһи үә сәлләм) шундай һорау бирә:

«Йәә Рәсүлүллаһ! Беҙ Аллаһты бик яратабыҙ, әммә Аллаһҡа хәҡиҡи һөйөү үҙенсәлектәре хаҡында беҙгә хәбәр итмәҫһеңме икән?». Быға яуап итеп Аллаһ Тәғәлә шундай аяттар төшөрә:

«(Рәсүлүллаһ) Һин әйт: Әгәр Аллаһты яратһағыҙ, миңә эйәрегеҙ (Исламды ҡабул итегеҙ) Аллаһ та һеҙҙе яратыр һәм гонаһтарығыҙҙы ярлыҡар, - тип. Аллаһ – Ярлыҡаусы, киң күңелле, Ғәфү итеүсе» (Әлү Ғимран, 31)» (Ҡар. Табари, Камиул-Бәйән, № 6845, 6846).

❁

Сәхәбәләр йөрәгендә Аллаһҡа һәм Уның Илсеһенә (салләллаһу ғәләйһи үә сәлләм) мөхәббәттән дә юғарыраҡ мөхәббәт булмай. Милкенә лә, ғаиләһенә лә, балаларына ла, тормошҡа ла… Былар бит һәммәһе фани донъяла ҡала, ә Аллаһҡа һәм Уның Илсеһенә (салләллаһу ғәләйһи үә сәлләм) мөхәббәт инһә мәңгелек сәғәҙәт өсөн йөрәк капиталы булып ҡала.

❁

Ысын мәғәнәһендә һөйгән кеше мөхәббәте хаҡына ҡылынған ҡорбанды үҙе өсөн мәртәбәгә һанаясаҡ. Сәхәбәләр ана шундай һөйөү, хозурлыҡ, дәрт менән тулы була. «Атам-әсәм, ғүмерем, милкем – һәммәһе һинең өсөн ҡорбан булһын, йәә Рәсүлүллаһ!», – тиҙәр улар. Иман һоҡланыуы менән улар Пәйғәмбәребеҙҙең (салләллаһу ғәләйһи үә сәлләм) иманға саҡырыу хаттарын алыҫ илдәргә алып китәләр. Ҡытайға, Сәмәрҡандҡа, Африкаға, Стамбулға барып етәләр. Аллаһҡа һәм Уның Илсеһенә (салләллаһу ғәләйһи үә сәлләм) ихлас һөйөүҙәрен иҫбат итәләр.

Сәхәбәләр, эске конфликттарын һәм нәфес теләктәрен Аллаһ һәм Уның Илсеһе (салләллаһу ғәләйһи үә сәлләм) әмерҙәренә буйһоноу ҡаҙанында иретеп, рухи хозурлыҡҡа ирешә, сөнки улар Аллаһ Илсеһен (салләллаһу ғәләйһи үә сәлләм) яҡындан беләләр һәм уға ноҡланалар. Шуға ла фани донъя тормошондағы бәхеткә ҡарағанда уның йөрәгендә кескәй генә урын биләү мөмкинлеген һәм ошо юлдағы теләһә нидәй физакәрлекте улар үҙҙәре өсөн мәртәбәгә һанай.

Ә беҙ шундай физакәрлек үренә ни дәрәжәлә күтәрелә алабыҙ?

❁

Йөрәгебеҙҙәге Аллаһ Илсеһенә (салләллаһу ғәләйһи үә сәлләм) булған мөхәббәтебеҙ ниндәй кимәлгә күтәрелһә, фани донъяла ул ирешкән хозурлыҡ һәм Әхирәттәге кимәлебеҙ ҙә шул дәрәжәлә буласаҡ.

❁

Пәйғәмбәребеҙ (салләллаһу ғәләйһи үә сәлләм) өммәте булыу – бөйөк бәхет. Уның әл-Кәүсәр һыуын эсеү, Маҡтау (Ливәүл-хәмд) байрағы аҫтына йыйылыу, уның шаһитлығына һәм шәфәғәтенә лайыҡ булыу өсөн, беҙ уны үҙ ғүмеребеҙгә ҡарағанда ла нығыраҡ яратырға тейешбеҙ.

❁

Аллаһ Илсеһе (салләллаһу ғәләйһи үә сәлләм) беҙҙең күңелдәрҙә булырға тейешле мөхәббәт кимәле дәрәжәһен шулай аңлатып биргән:

«Йәнем ҡулында булған Аллаһ менән ант итәм, атаһына, балаларына һәм бөтә кешеләргә ҡарағанда ла мине нығыраҡ һөймәй тороп, берегеҙ ҙә иманға килмәҫ» (Бохари, Иман, 8).

❁

Кемдең йөрәгендә Аллаһ Илсеһенә (салләллаһу ғәләйһи үә сәлләм) ҡарата мөхәббәт юҡ, хаҡ һөйөү тәмен татымаҫ. Хаҡ һөйөү орлоҡтары уға булған мөхәббәт тупрағында ғына шытып сыға, сөнки Пәйғәмбәребеҙ (салләллаһу ғәләйһи үә сәлләм) - яратылмыштарға ҡарата үтә торған эҫенеүҙе юғарыға, яңы кимәлгә күтәреүсе илаһи мөхәббәт кәүҙәләнеше нөктәһе. Ул йөрәк өсөн бәрәкәт һәм фәйез (рухи энергия) сығанағы. Уның мөхәббәт тупрағы ташҡа әүерелгән күпме йөрәкте пак аҫыл ташҡа әүерелдерҙе.

Мөхтәрәм Мәүләнә әйткән:

«Йәә ғафил! Муса һәм Әхмәт мөғжизәләренә баҡ. Таяҡ нисек аждаһаға әүерелде, пальма түңгәге нисек рухи хикмәткә (ғирфанға) эйә булды һәм ыңғырашып ебәрҙе?»

«Мостафа (салләллаһу ғәләйһи үә сәлләм) уның менән айырылышыу сәбәпле ыңғырашҡан «Ханнана»ны»[5] һыйпаны. Һин ағастан түбән түгел. «Ханнана» бул һәм Раббыңды һағынып ыңғыраш!»

❁

Сөләймән Челәби әйткән:

«Ул - яҡтылыҡ, ә ҡояш – уның күбәләге...». Ул образлы рәүештә ҡояшты Аллаһ Илсеһе (салләллаһу ғәләйһи үә сәлләм) тирәһендә мөхәббәттән сарсап өйөрөлөп йөрөгән күбәләк менән сағыштыра. Йөрәктәрҙе ҡараңғылыҡтан сығарыуҙың берҙән-бер юлы – ана шул Тура юл ҡояшы, йәғни Пәйғәмбәребеҙ (салләллаһу ғәләйһи үә сәлләм) тирәләй өйөрөлгән күбәләк булыу.

❁

Аллаһ Илсеһе (салләллаһу ғәләйһи үә сәлләм) әйткән:

«Өммәтемдә мине бөтәһенән дә нығыраҡ һөйгәндәр минән һуң киләсәк. Мине күреү өсөн, (көслө мөхәббәт арҡаһында) улар милкенән дә, ғаиләһенән дә яҙырға әҙер буласаҡ» (Мөслим, Йәннәт, 12; Хаким, IV, 95).

❁

Пәйғәмбәребеҙ (салләллаһу ғәләйһи үә сәлләм) әйткән:

«Үлемемдән һуң мине зыярат ҡылыусылар мине иҫән саҡта зыярат ҡылыусыларға тиң!» (Даракутни, Сунән, II, 278)

❁

Безмиәлем Валиде Солтан[6] әйткән:

Мөхәббәттән Мөхәммәд булды хасыл (яралтылды),

Мөхәммәдһеҙ мөхәббәттән нимә хасыл (нимә яралһын)?

Икенсе төрлө әйтһәк, әгәр беҙ Пәйғәмбәребеҙ (салләллаһу ғәләйһи үә сәлләм) Нуры эҙенән бармаһаҡ, әгәр ул һөйһәнде һөймәһәк, һөйөүебеҙҙе изге ғәмәлдәребеҙ менән иҫбатламаһаҡ, ауыҙыбыҙҙан сыҡҡан мөхәббәт һүҙҙәре хәҡиҡәтте белдермәйәсәк.

❁

5. Аллаһ Илсеһе (салләллаһу ғәләйһи үә сәлләм) мәсетендә финик пальмаһы түңгәге була, ул тәүҙә шуға баҫып вәғәз һөйләй. Аҙаҡ уның өсөн минбәр эшләйҙәр, һәм шул ваҡыт түңгәк Аллаһ Илсеһен (салләллаһу ғәләйһи үә сәлләм) юҡһынып ыңғыраша башлай. Уны ғәрәптәр «Ханнана» тип, йәғни «ыңғырашыусы» тип атай башлайҙар.
6. Ғосманлылар солтаны Махмуд II ҡатыны, Ғабдул-Мәджид I солтандың әсәһе.

Хаҡ иман эйәһе йөрәгендәге Аллаһ Илсеһенә (салләллаһу ғәләйһи үә сәлләм) тоғролоҡ тойғоһо – шиңмәҫ рауза сәскәһе. Тоғролоҡтоң көҙө юҡ. Тоғролоҡ шишмәһе һыуын ауыҙ иткән иман эйәләре, Пәйғәмбәребеҙ (салләллаһу ғәләйһи үә сәлләм) әхлағы Нуры менән нурланып, рухи донъяларын рауза баҡсаһына әйләндерә. Был баҡсала зекер бөрөләре асыла, Аллаһҡа хәмед-маҡтау һандуғастары һайрай, изгелекле ғәмәлдәр шишмәләре бәреп сыға, иман гөлдәре, рухи хикмәт (ғирфан) һәм илаһи бәрәкәт сәскә ата...

Рауза – Пәйғәмбәребеҙ (салләллаһу ғәләйһи үә сәлләм) символы. Шул рауза таждарында ысыҡ тамсыһы булғандар бәхетле!

МӨХӘББӘТ МЕНӘН СӨННӘТКӘ БӘЙЛӘНЕҮ

Ғүмеребеҙҙең һәр мәлен, хужаһына эйәреп йөрөгән күләгә кеүек, һөйөклө Пәйғәмбәребеҙ (саллəллаһу ғəләйһи үə сəлləм) өйрәткәнсә йәшәргә ынтылырға тейешбеҙ. Аллаһ Илсеһе (саллəллаһу ғəләйһи үə сəлləм) өммәтендә булыуыбыҙ тураһында тәүге сиратта телебеҙ түгел, ә халәтебеҙ һәм әхлағыбыҙ бәйән итергә тейеш.

❁

Малик имам әйткән: «Сөннәт Нух пәйғәмбәр (ғəләйһис-сəлəм) кәмәһенә оҡшаш. Кем генә уға күтәрелһә лә, ҡотоласаҡ. Ә кем уны ҡалдырһа, һәләк буласаҡ».

Тормоштоң мәғәнәһе шунда: Аллаһтың яҡшы ҡоло булып йәшәү һәм Аллаһтың яҡшы ҡоло булып үлеү. Ғүмеребеҙ маҡсаты – Аллаһ Сүбхәнәһү үə Тәғәлə кешелеккә бүләк итеп биргән Пәйғәмбәребеҙҙең (саллəллаһу ғəләйһи үə сəлləм) хис-тойғо тәрәнлегенә бай тормошонан үҙ өлөшөбөҙҙө алыу, Аллаһтың рухи йәһәттән нескә, йомшаҡ күңелле, шәфҡәтле ҡоло булыу.

❁

Пәйғәмбәребеҙҙең (саллəллаһу ғəләйһи үə сəлləм) тормошоноң тарихы – пак, саф көҙгө кеүек. Һәр кеше, шул көҙгөлə үҙенең хәлен һәм ғәмәлдәрен, үҙенең эске һәм тышҡы донъяһын күҙәтеп, үҙ-үҙенə анализ бирə ала. Көҙгөләге сағылышын баһалап, үҙ халәтен яҡшыртыу һәр иман эйәһенең бурысы булып тора.

❁

Аллаһ Илсеһе (саллəллаһу ғəләйһи үə сəлləм) йөҙөндə Раббыбыҙ Үҙенə иң камил хеҙмәт өлгөһөн күрһәтте. Был йәһәттән Пәйғәмбәребеҙгə (саллəллаһу ғəләйһи үə сəлləм) ниндәй кимəлдə яҡын булһаҡ, уның менән уртаҡ яҡтарыбыҙ ниндәй кимəлдə булһа, беҙҙең Аллаһ алдындағы ҡиммәтебеҙ ҙə шул кимəлдə.

Иман эйәһе, Пәйғәмбәребеҙ (салләллаһу ғәләйһи үә сәлләм) Сөннәтенә ныҡлап тотонмай тороп, ислам ынтылған камил кеше (инсан-и камил) халәтенә күтәрелә алмаясаҡ.

❁

Ғүмеребеҙҙең һәр мәлен, хужаһына эйәреп йөрөгән күләгә кеүек, һөйөклө Пәйғәмбәребеҙ (салләллаһу ғәләйһи үә сәлләм) өйрәткәнсә йәшәргә ынтылырға тейешбеҙ. Аллаһ Илсеһе (салләллаһу ғәләйһи үә сәлләм) өммәтендә булыуыбыҙ тураһында тәүге сиратта телебеҙ түгел, ә халәтебеҙ һәм әхлағыбыҙ бәйән итергә тейеш.

❁

Аллаһ Илсеһенә (салләллаһу ғәләйһи үә сәлләм) мөхәббәт ғибәҙәттәрҙәге хошуғ халәтендә, ғәмәлдәрҙәге әҙәптә, рухи нескәлектә, күңел йомшаҡлылығында, йөҙҙәге нурҙа, рухи телмәрҙә һәм ҡараш тәрәнлегендә сағылыш таба. Барса был гүзәл сифаттарҙы һоҫоп алырға мөмкин булған сығанаҡ – ул Пәйғәмбәребеҙ (салләллаһу ғәләйһи үә сәлләм), беҙҙең өсөн тиңе булмаған үрнәк.

❁

Һәр пәйғәмбәрҙең үрнәк алырлыҡ сифаты бар. Был сифаттарҙың һәммәһе иң камил рәүештә Аллаһ Илсеһендә (салләллаһу ғәләйһи үә сәлләм) тупланған. Был йәһәттән, Пәйғәмбәребеҙҙе (салләллаһу ғәләйһи үә сәлләм) белмәй тороп, исламды тейешенсә төшөнөп бөтөп булмай.

❁

Йәнәбе Хаҡ әйтә:

«Уның менән бергә Имен рух (Ябраил фәрештә) инде. (Аллаһтың ҡолдарын) киҫәтеүсе (өгөтсө) булһын тип, һинең күңеленә (Ҡөрьән) индерелде. Ғәрәпсә асыҡ итеп индерелде» (әш-Шүғәрә (Шағирҙар), 193-195).

Был шуны аңлата: Пәйғәмбәребеҙҙең (салләллаһу ғәләйһи үә сәлләм) тормошон, әхлағын, халәтен белмәй тороп, Ҡөрьәндең мәғәнәһенә тулыһынса төшөнөү мөмкин түгел. Ҡөрьән Аллаһ Илсеһенең (салләллаһу ғәләйһи үә сәлләм) 23 йыллыҡ пәйғәмбәрлек дәүерендә тәфсир ҡылына. Пәйғәмбәребеҙ (салләллаһу ғәләйһи үә сәлләм) Сөннәтен белмәй тороп, Ҡөрьәнде аңлау һәм тулыһынса ислам ҡанундары буйынса йәшәү мөмкин булмаған эш. Раббыбыҙ Аллаһ шулай тип әйтә лә:

«Рәсүлгә итәғәт иткән кеше, ысынлыҡта, Аллаһҡа итәғәт иткән кеше булыр...» (ән-Нисә (Ҡатындар), 80).

Шуға күрә беҙ бер нәмәне аслан онотмаҫҡа тейешбеҙ: айырыуса бөгөнгө көндәрҙәге Пәйғәмбәребеҙҙең (саллəллаһу ғəлəйһи үə сəлləм) Сөннәтенә яһалған махсус һөжүм асылда Ҡөрьәнгә, исламға һәм Аллаһ Тәғәләгә йүнәлтелгән.

❁

Аллаһ Илсеһен (саллəллаһу ғəлəйһи үə сəлləм) белеү һәм аңлау – Аллаһҡа хеҙмәтебеҙҙәге иң мөһим аҙым. Уны аңламай тороп, уны белмәй тороп, уның эҙенән бармай тороп, уның ҡәлбенән өлөш алмай тороп, иманыбыҙ ҙа тулы булмаясаҡ, Ҡөрьәнде лә тулыһынса аңлай алмаясаҡбыҙ, хеҙмәтебеҙ ҙә тулы булмаясаҡ…

❁

Иудаизм һәм христиан диненең тора-бара боҙолоуы пәйғәмбәрҙәр сөннәтенән баш тартыуҙан башлана. Тәүҙә сөннәт, унан дин ғилеме, ғибәҙәттәр ситкә ҡуйыла, рухийәт кеймдәре алып ташлана. Ахыр килеп, намаҙҙар алып ташлана, доғалар, ураҙалар үҙгәртелә, ә хиджаб монахинялар өсөн генә ҡалдырыла. Беҙҙең көндәрҙә иһә улар ҙа унан баш тарта башланы.

❁

«Мәҙһәбтәр ниңә кәрәк?» - тигән белдереүҙәр менән беҙҙең көндәрҙә исламды көсһөҙләндереүгә һәм юҡ итеүгә йүнәлтелгән хәрәкәт таралып китте. Бынан һуң имам-мөжтәһидтәр һәм Аллаһ кешеләре адресына наҙандарса тәнҡит яуа башланы. Аҙаҡ «Беҙгә Ҡөрьән етә!» лозунгыһы аҫтында, сәхих хәҙистәргә ҡарата ла шик белдереп, Сөннәтте дискриминациялау тарала. Хатта ки шәриғәт ҡанундарын үҙ эсенә алған ҡайһы бер аяттарҙы, улар төшөрөлгән шул элекке заманға ғына ҡағыла тигән белдереү менән «хаҡлы ялға» оҙатырға маташыу булды.

Был мәкерле эштәр исламды боҙоу, христиан дине һымаҡ рухы төшкән дингә әйләндереү өсөн эшләнә. Бындай манипуляцияларға ҡарата уяу булыу һәм исламды үҙгәтергә тырышыусыларға кәртә ҡуйыу - иман эйәләренең бөгөн төп бурысы.

❁

Ғабдулла ибн Дайләми Сөннәткә мөхәббәт һәм тоғролоҡ хаҡында шулай тигән: «Белеүемсә, имандың юғалыуы Сөннәтте ҡалдырыуҙан башланасаҡ. Сүстәргә айырылған трос көсһөҙләнгән һәм ахырҙа өҙөлгән кеүек, Сөннәттән айырылыу менән, бер-бер артлы дин дә юҡҡа сығасаҡ» (Дарими, Мукаддимә, 16).

❁

Хәҙистә әйтелә:

«Өс нәмәнән дә ҡиммәтерәк булмаған ваҡыттар етер:

– Хәләл аҡсаларҙан.

– Ихлас дуҫлыҡ урынлаштырырға мөмкин булған иман ҡәрҙәшеңдән (йәғни, ауыр саҡта һинең проблемаларың хаҡында борсолған иман ҡәрҙәшеңдән).

– Ғәмәл ҡылынырға тейешле булған Сөннәттән» (Хайсами, I, 172).

❁

Һәр дәүерҙә Аллаһ динен боҙорға һәм йөрәктәрҙе аҙаштырырға тырышҡан төрлө фальсификаторҙар булған. Бындай осраҡта иманлылар өсөн «фарукиййәт» сифаты, йәғни яҡшыны ямандан, хаҡты ялғандан айырыу сифаты ҙур әһәмиәткә эйә. Шул сәбәпле беҙ, айырыуса йәштәр, Ҡөрьәнгә һәм Сөннәткә нығыраҡ тотонорға һәм динде боҙорға маташыусылар ҡапҡанына эләкмәҫкә тейеш.

❁

Аллаһ Илсеһенең (салләллаһу ғәләйһи үә сәлләм) тормошо – Ҡөрьәндең тере тәфсире, Сөннәте Ҡөрьәндең аныҡ тәфсире, аңлатмаһы булып тора. Бөгөн «Ҡөрьән исламы» иғлан итеп, Сөннәтте бөтөрөргә тырышҡандар исламды боҙорға маташҡан һәм «Әйҙәгеҙ, Ҡөрьәнде Аллаһ Рәсүле түгел, беҙ тәфсир ҡылайыҡ, диндең йөкмәткеһен ул түгел, беҙ билдәләйек!» - тип белдереүселәргә оҡшаш. Бөгөн, ҡайһы саҡ хатта дин ғалимы ҡиәфәтендә булһалар ҙа, динде емерергә маташҡандарға ҡарата бик һаҡ булырға кәрәк. Беҙ динебеҙ менән уйнарға рөхсәт итмәҫкә тейешбеҙ.

❁

Пәйғәмбәребеҙ (салләллаһу ғәләйһи үә сәлләм) үҙе бик яратҡан сәхәбәләрҙең береһе булған Ғабдуллаһ ибн Ғүмәрҙе киҫәтеп ҡуя:

«Эй, Ибн Ғүмәр! Динеңә ныҡ тотон, динеңә ныҡ тотон! Сөнки ул һинең бәдәнең һәм ҡаның. Динде кемдән өйрәнеүеңә иғтибарлы бул! Дини ғилемде һәм әмерҙәрҙе хәҡиҡәттә торған ғалимдарҙан ал, йә бер яҡҡа, йә икенсе яҡҡа ауышҡандарҙан булма!» (Хатиб әл-Бағдади, әл-Кифайа фи ғилми әр-ривайа, стр. 121).

❁

Тәү ҡарамаҡҡа «Беҙгә Ҡөрьән етә!» кәлимәһе хәҡиҡәткә тап килә кеүек. Тик беҙ Аллаһ Илсеһенең (салләллаһу ғәләйһи үә сәлләм), Ҡөрьәндең аңлатмаһы, тәфсире, томошҡа ашырылыуына сәбәп булған Сөннәттең әһәмиәтен түбән төшөрөп, динде боҙорға маташыусылар хаҡындағы киҫәтеүен һис ҡасан онотмаҫҡа тейешбеҙ:

«Белегеҙ, миңә Ҡөрьән һәм уның оҡшашы (йәғни Сөннәт) бирелде. Әммә шундай ваҡыттар етер: туҡ, тырышлыҡ күрһәтеү ят булған берәү әйтер: «Һеҙ Ҡөрьәнгә эйәрергә тейеш. Унда нимәнелер хәләл тип табаһығыҙ икән, тимәк был хәләл, ә нимәне харам тип табаһығыҙ – харам (йәғни һеҙгә башҡа сығанаҡ кәрәкмәй!). Әммә белеп ҡуйығыҙ, Аллаһ Илсеһе тыйғандар Аллаһ тыйыуына оҡшаш». (Әбү Дауыт, Сөннәт, 6; Ибн Мәджә, Муҡаддима, 2; Тирмизи, Ғилем, 10; Әхмәд бин Ханбәл, 6/8)

❁

Аллаһ Илсеһенең (салләллаһу ғәләйһи үә сәлләм) тормошо – Ҡөрьәндең практик тәфсире. Ҡөрьән серенә һәм хикмәтенә уның ҡәлбе асылынан үҙ өлөшөңдө алып ҡына ирешергә мөмкин. Аллаһ Китабына уның Сөннәтенән тыш тәфсир ҡылырға ярамай.

❁

Ҡөрьәндә илаһи әмерҙәрҙең байтағын нисек тормошҡа ашырыу тураһында мәғлүмәт юҡ. Беҙ быны Аллаһ Илсеһе (салләллаһу ғәләйһи үә сәлләм) ҡылған ғәмәлдәр буйынса ғына белә алабыҙ.

Мәҫәлән, Ҡөрьәндә үлгән хайуандарҙың итен ашау тыйылыуы хаҡында әйтелә. Ә Сөннәттән беҙ, тере килеш тотолоп, аҙаҡ үлгән балыҡты ашарға мөмкин булыуын беләбеҙ.

Шулай уҡ Ҡөрьәндә намаҙ ҡылыу әмер ителә, ләкин уны нисек ҡылырға кәрәклеге тураһында бәйән ителмәй. Уларҙа уҡырға тейешле рәкәғәттәр һаны, сүрәләр һәм доғалар, намаҙҙы ашыҡмай ҡылыу (тадил-аркан) тураһында беҙ Сөннәттән беләбеҙ.

❁

Хушлашыу вәғәзендә Пәйғәмбәребеҙ (салләллаһу ғәләйһи үә сәлләм) әйткән:

«Мин һеҙгә ике нәмә ҡалдырам, әгәр һеҙ уларға таянып эш итһәгеҙ, һис ҡасан аҙашмаҫһығыҙ. Һәм был Ҡөрьән һәм минең Сөннәтем» (Хаким, I, 171/318; Муватта, Ҡадар, 3)

Йәғни ул: «Мин һеҙгә Ҡөрьән ҡалдырам, был һеҙгә етер», - тип әйтмәй, сөнки Ҡөрьән Сөннәт ярҙамында тәфсир ҡылына һәм аңлатыла. Тимәк, Сөннәтһеҙ ислам динен тотоп булмай.

❁

Аллаһ Илсеһе (салләллаһу ғәләйһи үә сәлләм) әйткән:

– Минең өммәтем етмеш өс төркөмгә бүленәсәк, уларҙың береһе генә ҡотолоу табасаҡ.

Сәхәбәләр һорау бирә:

– Йәә Рәсүлүллаһ! Кемдәр улар, был ҡотолоусылар ниндәй төркөм?!

Аллаһ Илсеһе (салләллаһу ғәләйһи үә сәлләм) яуап бирә:

– *Улар мин һәм минең сәхәбәләрем эйәргәнгә эйәреүселәр* (Тирмизи, Иман, 18; Ибн Мәджә, Фитан, 17).

Шуға күрә бөгөн, мосолман өммәтен «әһлүс-сүннәһ үәл-джәмәғәһ» юлынан тайпылдырырға маташыусылар булғанда, Пәйғәмбәребеҙ (салләллаһу ғәләйһи үә сәлләм) Сөннәтенә ныҡ тотоноу кәрәк.

❁

Имам Мәлик әйткән:

«Сөннәт Нух пәйғәмбәр (ғәләйһис-сәләм) кәмәһенә оҡшаш. Кем генә уға күтәрелһә лә, ҡотоласаҡ. Ә кем уны ҡалдырһа, һәләк буласаҡ».

❁

Маҡсатыбыҙ – Аллаһ Илсеһе (салләллаһу ғәләйһи үә сәлләм) юлынан барыу, сөнки башҡа бөтә юлдар тупикка алып бара!

Аллаһ дуҫтары әйтә:

«Аллаһ Илсеһе (салләллаһу ғәләйһи үә сәлләм) эҙенән барыусыларҙан тыш Раббыбыҙға илтеүсе бөтә юлдар ҙа ябыҡ».

❁

Изге аятта әйтелә:

«Һин улар араһында саҡта, Аллаһ уларға яза бирмәҫ. Улар араһында ярлыҡау һорағандар булғанда ла яза бирмәҫ» (әл-Әнфәл (Табыш малы), 33).

Күреүебеҙсә, иман эйәһенең йөрәге ни тиклем Аллаһ Илсеһенә (салләллаһу ғәләйһи үә сәлләм) мөхәббәт менән тулы булһа, шул кимәлдә ул Йәнәбе Хаҡтың асыуынан йыраҡ булыр. Был Уның бөйөк вәғәҙәһе.

❁

Аллаһ Илсеһе (салләллаһу ғәләйһи үә сәлләм) – бөтә кешелектә яҡтыртып торған һидайәт юлының шәмдәле. Аллаһ Тәғәлә уны, Йәшәйеш Нурын, ғаләмдәргә рәхмәт булараҡ ебәргән. Ә беҙгә, ниндәй генә хәлдә булһаҡ та, Раббыбыҙҙың был ғәҙәттән тыш мәрхәмәте өсөн шөкөр итеп, халәтебеҙ, ғәмәл-

дәребеҙ, хис-тойғо һәм уйҙарыбыҙ менән Пәйғәмбәребеҙ (салләллаһу ғәләйһи үә сәлләм) менән берлекте һаҡларға тырышыу лазым.

❁

Хәҙистә әйтелә: *«Кеше үҙенең һөйөклөһө менән бергә»* (Бохари, Әҙәп, 96).

Пәйғәмбәребеҙҙе (салләллаһу ғәләйһи үә сәлләм) һөйөү өсөн, йөрәгебеҙ, һүҙҙәребеҙ һәм ғәмәлдәребеҙ менән уның менән бергә булырға тырышыу кәрәк.

❁

Хәҡиҡи мөхәббәт булғанда, һөйөклөнөң сифаттары һөйгәненә күсә. Әгәр ҙә ки беҙ Аллаһты һәм Уның Илсеһен (салләллаһу ғәләйһи үә сәлләм) һөйәбеҙ икән, Ҡөрьән һәм Сөннәт ғилеме юлынан барырға тейешбеҙ. Шулай уҡ беҙгә Аллаһ һәм Уның Илсеһе (салләллаһу ғәләйһи үә сәлләм) һөйгәнде һөйөү, улар һөймәгәндән тайшаныу лазым.

❁

Хәсән әл-Басри әйткән: «Эй, кешеләр! *«Кеше үҙенең һөйөклөһө менән бергә»* хәҙисен яңылыш аңлауҙан һаҡланығыҙ! (Көсөгөҙ еткәнсә) тәҡүәләр ғәмәлдәрен ҡыла башламай тороп, тәҡүә була алмаясаҡһығыҙ. Йәһүдтәр һәм христиандар бит үҙҙәренең пәйғәмбәрҙәрен ярата, әммә уларға оҡшамағандар»[7].

❁

Шулай уҡ оноторға ярамай: Аллаһ, Уның Илсеһе (салләллаһу ғәләйһи үә сәлләм) һәм Ҡөрьән менән бәйләнешебеҙ ни тиклем нығ булһа, *«Кеше үҙенең һөйөклөһө менән бергә»* хәҙисенән шул уҡ кимәлдә үҙ өлөшөбөҙҙө аласаҡбыҙ.

❁

Һөйгән һөйөклөһөн ниндәй кимәлдә яратһа, йөрәге һәм теле уның менән булһа, уға шул кимәлдә эйәрә. Аллаһ Илсеһенә (салләллаһу ғәләйһи үә сәлләм) ҡарата шундай күңел тартылыуының төп сифаты – тормоштоң бөтә өлкәләрендә лә уның Сөннәтенә эйәреү.

❁

«Мин Аллаһты һәм Уның Илсеһен яратам»,- тип әйтеү генә етерлек түгел. Был мөхәббәт беҙҙең йортобоҙҙа, эшебеҙҙә, балаларҙы тәрбиәләүебеҙҙә, йәмғиәттә беҙ өҫтөнлөк биргән нәмәләрҙә, ғибәҙәттәрҙә, кешеләр менән мөнәсәбәттәрҙә, әхлағыбыҙҙа, Аллаһ юлындағы тырышлығыбыҙҙа, ҡыҫҡаһы, тормошобоҙҙоң бөтә өлкәләрендә сағылыш табырға тейеш.

7. Ихйа, II том, 402 бит.

Хәҡиҡи мөхәббәт сығанағы - һөйгәндең һәм һөйөклөһөнөң сифаттар уртаҡлығы. Ғашиҡ һөйгәненең хис-тойғоларын бүлешә, уның халәтен алырға тырыша. Ул уның һымаҡ булырға теләй, уның менән гармониялы берлектә теләй.

Әгәр беҙ Аллаһ Илсеһен (саллəллаһу ғəләйһи үə сəлләм) яратабыҙ, уның шәфәғәтенә ирешергә өмөтләнәбеҙ, уның был донъяла Рауза-и мутаххараһын,[8] ә Әхирәттә Кәүҫәр һыуын күрергә теләйбеҙ икән, үҙ-үҙебеҙҙән һорарға тейешбеҙ:

– Уға хас булған мәрхәмәтлелек, изгелек, физакәрлек, йомартлыҡ беҙҙә ниндәй кимәлдә?

– Мөмкинлектәребеҙҙе ниндәй кимәлдә үҙ мәнфәғәтебеҙ, ниндәй кимәлдә башҡаларға ярҙам өсөн файҙаланабыҙ?

❁

Әгәр Аллаһ Илсеһен (саллəллаһу ғəләйһи үə сəлләм) ысын-ысындан яратабыҙ икән, һөйөүебеҙҙе уның юлында физакәрлек күрһәтеп иҫбатларға һәм үҙебеҙгә һорау бирергә тейешбеҙ:

- Аллаһ Илсеһенә (саллəллаһу ғəләйһи үə сəлләм) мөхәббәтебеҙ хаҡына, уның өммәтендә булыу бәхетенә беҙ нимәне ҡорбан иттек?

- Уның сәхәбәләре күреү һәләтен ҡорбан иткән. Ә беҙ харамға ҡарауҙан баш тарттыҡмы?

- Уның сәхәбәләре йәндәрен физа ҡылған. Ә беҙ Аллаһ өсөн ябай ғына энә ҡаҙалыуға түҙәбеҙме?

- Уның сәхәбәләре милкен ҡорбан иткән. Ә беҙ зәкәтте тулыһынса түләйбеҙме, саҙаҡа бирәбеҙме, хәйриә эштәре менән етерлек дәрәжәлә шөғөлләнәбеҙме?

- Мөхәббәтебеҙ дәлилдәре тураһында һораһалар, яуабыбыҙ ниндәй булыр?

❁

Аллаһ Илсеһенә (саллəллаһу ғəләйһи үə сəлләм) мөхәббәтебеҙ ниндәй кимәлдә?

Ул алып килгән дингә ҡулыбыҙҙан килгәнсә, мөмкин булғанса хеҙмәт итәбеҙ, тип әйтә алабыҙмы?

Хәҙерге заман яһилиәте осоронда дингә ихлас ынтылғандарға нәсихәт бирәбеҙме? Ошо юлда физакәрлек күрһәтәбеҙме?

8. Рауҙа-и мутаххара - ҡәбер һәм минбәр араһындағы Пәйғәмбәр (саллəллаһу ғəләйһи үə сəлләм) мәсетендәге урын.

Аллаһтан һәм Уның Илсеһенән (салләллаһу ғәләйһи үә сәлләм) йыраҡ йәшәлгән һәр быуат – ул, асылда, яһилиәт быуаты. Аллаһ һәм Уның пәйғәмбәрҙәре нуры менән нурланмаған һәр дәүерҙең ҡырағайлығы бер-береһенә тиң...

Заман, урын, тормош шарттары һәм декорациялар үҙгәрһә лә, кешенең тәбиғәте шул уҡ. Ләззәттәр, нәфесенең теләктәрен ҡандырыу тураһында ғына уйлаған заман яһилы (наҙаны) 14 быуат элек йәшәгән бәҙәүиҙән гардеробынан башҡа тағы нәмәһе менән айырыла?

❁

Ғаләмдәргә рәхмәт булып килгән Пәйғәмбәребеҙ (салләллаһу ғәләйһи үә сәлләм) юлынан тайшанған һәр дәүер – яһилиәт дәүере…

Уның йөрәге менән аһәңдәш булып типмәгән һәр бер йөрәк – залим...

Уны хупламаған намыҫ һуҡыр һәм ҡара...

Беҙ уның тере һыу тамсылары (әб-и хаят) булған мәрхәмәтенә мохтажбыҙ. Һәм Һуңғыһы булған беҙҙең заманда һәр үткән көн һайын уға мохтажлығыбыҙ арта ғына бара…

❁

Аллаһ Илсеһе (салләллаһу ғәләйһи үә сәлләм) әйткән:

«Минең өммәтем ямғырға оҡшаш. Һәм уның башы яҡшы булырмы, әллә аҙағымы – белеп булмай» (Тирмиҙи, Әҙәп, 81/2869; Әхмәд, III, 130).

Пәйғәмбәребеҙ (салләллаһу ғәләйһи үә сәлләм) өммәтенең башы – уның менән шул замандағы яһилдарға (наҙандарға) ҡаршы көрәшкән сәхәбәләре. Ә уның аҙағы – заман яһилиәте менән көрәшәсәк иман һәм тәҡүә эйәләре.

Әгәр беҙ, уның Сөннәтенә ныҡ тотоноп, тәҡүәлек менән шул бәрәкәтле мәрхәмәт ямғыры була алһаҡ, Аллаһ бойорһа, Аллаһ Илсеһе (салләллаһу ғәләйһи үә сәлләм) Кәүҫәр һыуы буйында көтөп торған игелекле өммәт булырбыҙ.

❁

Күпме генә ваҡыт үтмәһен, Аллаһ Илсеһенә (салләллаһу ғәләйһи үә сәлләм) яҡынлығыбыҙ һәм, әлбиттә, Аллаһ алдындағы дәрәжәбеҙ тәҡүәлек серенә генә бәйле. Аллаһ Илсеһе (салләллаһу ғәләйһи үә сәлләм) әйткән:

«Хаҡтыр, миңә иң яҡын кешеләр, кем генә булһалар ҙа, ҡайҙа ғына булһалар ҙа – тәҡүәләр» (Ахмад, V, 235; Хайсами, IX, 22).

❁

Йәмән яғына бағып, Аллаһ Илсеһе (салләллаһу ғәләйһи үә сәлләм) әйткән:

«Мин Йәмәндән килгән «әр-Рахмандың һулышын» (нәфс-и Рахмани) тоям» (Табарани, Кәбир, VII, 52/6358).

Оноторға ярамай, «әр-Рахмандың һулышын» (нәфс-и Рахмани) тойоу һәләте йөрәктәге тәҡүәлеккә бәрәбәр.

❁

Сәхәбәләр, Аллаһ Илсеһе (салләллаһу ғәләйһи үә сәлләм) алдында ултырған күндәм уҡыусылар булған кеүек, беҙгә лә, уның һуңғы заман өммәте һәм уҡыусыларына, 14 быуат элек сәхәбәләргә төбәлгән шул уҡ аят һәм хәҙистәр төбәлгән.

Аллаһ Илсеһенән (салләллаһу ғәләйһи үә сәлләм) беҙ ала алған иң мөһим рухи дәрес – уның хис-тойғоларын уртаҡлаша алыу.

❁

Шәйех Сәғди «Гөлистан»дағы үҙенең кинәйәле гүзәл бер хикәйәһендә метафорик рәүештә Йәнәбе Хаҡ дуҫтары һәм тәҡүәле мосолмандар үҙҙәренең күркәм сифаттары менән Аллаһ Илсеһенә (салләллаһу ғәләйһи үә сәлләм) бурыслы булыуын, барса рухи байлыҡтар Аллаһ Илсеһе (салләллаһу ғәләйһи үә сәлләм) руханийәтенән икәнлеген сағылдыра:

«Бер әҙәм мунсаға килгән. Унда дуҫтарының береһе, тәнен паклау өсөн, хуш еҫле балсыҡ биргән. Балсыҡтан һоҡланғыс хуш еҫ килгән. Әҙәм уға һорау биргән:

- Эй, фатихалы! Һин мисекме, әллә ғәмбәрме? Мин һинең ғәжәйеп еҫеңдән хайранмын.

Балсыҡ уға былай тигән:

- Мин мисек тә, ғәмбәр ҙә түгел. Мин ябай ғына балсыҡ, һеҙ яҡшы белгән тупраҡ. Әммә мин рауза ҡыуағы аҫтында булдым, һәр иртә һайын уның таждарынан ҡойолған ысыҡ һуғарҙы мине…»

❁

Аллаһ Илсеһе (салләллаһу ғәләйһи үә сәлләм) образы гүзәл сәскәләр, хуш еҫле раузалар менән биҙәлгән йәннәт баҡсаһына оҡшаш. Эҙләгән һәр бер әҙәм унда үрнәк булырлыҡ күркәм бер ғәмәл таба ала. Ул осраҡта һәммәбеҙ үҙ-үҙенә һорау бирергә тейеш:

- Ул баҡсанан иҫкән фатихалы елдәр менән беҙ ни дәрәжәлә файҙаланабыҙ?

- Ғаиләбеҙ тормошо Аллаһ Илсеһе (салләллаһу ғәләйһи үә сәлләм) ғаиләһенә ни дәрәжәлә оҡшаған?

- Юлсыларҙы һәм Аллаһтың мохтаж ҡолдарын беҙ ашатабыҙмы?

- Сауҙа эшмәкәрлегебеҙ, килемебеҙ Аллаһ Илсеһе (салләллаһу ғәләйһи үә сәлләм) өндәгәндәргә оҡшашмы?

- Ниндәй кимәлдә тышҡы ҡиәфәтебеҙ, байрамдарыбыҙ, кешеләр менән мөнәсәбәттәребеҙ һәм йәмәғәт тормошобоҙ уның күрһәтмәләренә тап килә?

❁

Раббыбыҙ Аллаһ «әл-Фәтех» сүрәһенең һуңғы аятында Аллаһ Илсеһе (салләллаһу ғәләйһи үә сәлләм) янында булғандарҙы шулай тасуирлай:

«Мөхәммәд — Аллаһтың Пәйғәмбәре. Уның янындағылар кәферҙәргә ҡаршы ҡаты тора, үҙ араларында мәрхәмәтле ғәмәлдә. Уларҙы һин рөкүғҡа барғанда ла, сәждәгә киткәндә лә күрерһең. Улар Аллаһтан ниғмәт һәм ризалыҡ теләйҙәр. Улар йөҙөндәге тамғалар – сәждә эҙелер…» (әл-Фәтех (Еңеү), 29).

Түбәндәге критерийҙарға таянып, Аллаһ Илсеһенә (салләллаһу ғәләйһи үә сәлләм) яҡын булыуыбыҙ ни кимәлдә икәнен белә алабыҙ:

✓ Динебеҙҙе иманһыҙҙарҙан һәм инҡар итеүселәрҙән ни дәрәжәлә һаҡлайбыҙ?

✓ Беҙҙе ғәйепләүселәрҙән ҡурҡмайынса, иман юлында ныҡ торабыҙмы?

✓ Иман юлындағы ҡәрҙәштәребеҙгә беҙ ни дәрәжәлә мәрхәмәтле? Аллаһ юлындағы тырышлығыбыҙ ниндәй кимәлдә?

✓ Намаҙҙарыбыҙҙы, ғибәҙәттәребеҙҙе хошуғ менән ҡылабыҙмы?

✓ Раббыбыҙ Аллаһтан ни дәрәжәлә Уның ризалығын һәм бәрәкәтен һорайбыҙ? Теләктәребеҙҙә өс көнлөк фани донъяны күберәк ҡайғыртабыҙмы, әллә мәңгелек йортобоҙ Әхирәттеме?

❁

Аманатты һаҡлауыбыҙ - Аллаһ Илсеһенә (салләллаһу ғәләйһи үә сәлләм) мөхәббәтебеҙ күрһәткесе.

– Ҡөрьән һәм Сөннәт әмер-тыйыуҙарына ярашлы көн итәбеҙме?

– Балаларыбыҙ Ҡөрьән һәм Сөннәт әҙәбендә тәрбиәләнәме?

– Мосолман йәмәғәте именлеге, берҙәмлеге өсөн янып йәшәйбеҙме?

Аллаһ Илсеһенә (салләллаһу ғәләйһи үә сәлләм) ҡарата мөнәсәбәтебеҙ билдәле бер ваҡытта үткәрелә торған йолаларға ғына ҡайтып ҡалмай. Аллаһ Илсеһенең (салләллаһу ғәләйһи үә сәлләм) Мәүлиден (тыуған көнөн) күркәм рәүештә үткәреү өсөн:

– Ғүмер буйы йөрәгебеҙҙең Аллаһ Илсеһе (салләллаһу ғәләйһи үә сәлләм) менән бергә булыуы, уның халәте менән хәлләнеүе һәм ихлас күңел менән уға буйһоноуы лазым.

– Һуңғы һулышыбыҙға тиклем үҙ-үҙебеҙҙән һынау алырға тейешбеҙ: «Әгәр ҙә ки хәҙер Аллаһ Илсеһе (салләллаһу ғәләйһи үә сәлләм) яныбыҙҙа булһа, беҙҙең халәтебеҙҙе күреп, ул йылмайыр инеме, әллә фатихалы йөрәгенә борсолоу тулыр инеме?».

– Ниндәйҙер ҡарар ҡабул иткәндә йәки мөһим аҙым яһағанда, йөрәгебеҙҙәге ниәтебеҙҙе тәүҙә Аллаһ Илсеһе (салләллаһу ғәләйһи үә сәлләм) раҫларға, хупларға тейеш.

❁

Һәм әгәр ҙә мөмкинлегебеҙ бар икән, бөгөндән башлап Аллаһ һәм Уның Илсеһе (салләллаһу ғәләйһи үә сәлләм) юлынан тайпылмай барырға тейешбеҙ, сөнки инде Әхирәткә күскәс, кәферҙәр һымаҡ: **«Ай, валлаһи, Раббыға итәғәт итһәк, Пәйғәмбәргә эйәргән булһаҡ!»** (әл-Әхзәб (Төркөмдәр), 33/66), тип үкенеүҙән файҙа булмаясаҡ…

ЫСЫН БАЙЛЫҠ - ЙОМАРТЛЫҠ

Беҙҙең хаҡ байлығыбыҙ – биргән саҙаҡаларыбыҙ. Аллаһ ризалығы өсөн биргән һәр нәмәбеҙ – беҙҙеке. Ҡылған бөтә изге ғәмәлдәребеҙ – беҙҙеке. Беҙ ярҙам иткән барса мохтаждар, бәхетһеҙҙәр, яңғыҙҙар – беҙҙеке, сөнки улар аша беҙ, Аллаһ бойорһа, Раббыбыҙҙың ризалығына ирешәсәкбеҙ, шуға күрә уларҙы беҙ илаһи бәрәкәт итеп ҡабул итергә тейеш.

❁

Был фани донъяла йыйырға мөмкин булған иң ҡиммәтле хазина – беҙ һөйөндөрә алған йөрәктәр. Ә иң ҙур капитал – беҙ һөйөндөргән һағыш тулы шул йөрәктәрҙән әл-Ғәршҡа күтәрелгән һәм Аллаһтың беҙгә мәрхәмәтенә сәбәп булған доғалар.

Аллаһ Сүбхәнәһү үә Тәғәлә – Мәрхәмәт һәм Рәхмәт эйәһе, Йомарттарҙың-Йомарты.

Раббыбыҙ Аллаһ Ерҙәге шаһиттары һәм хәлифәләре булырға ниәтләгән иман эйәләренең Үҙенә хас Гүзәл сифаттарҙы алыуҙарын, мәрхәмәтле, изгелекле һәм йомарт булыуҙарын теләй.

❁

Аллаһ бер изге ҡудси хәҙисендә әйтә: *«Был дин (йәғни Ислам) – Мин Үҙемә һайлаған дин, һәм Мин унан ҡәнәғәт. Уға йомартлыҡ һәм күркәм әхлаҡ ҡына килешә. Мосолмандар булып йәшәйһегеҙ икән, ошо ике сифат менән уны юғары күтәрегеҙ»* (Хайсами, VIII, 20; Ғәли әл-Муттаҡи, Кәнз, VI, 392).

Шуны белеү лазым: күркәм әхлаҡтың иң асыҡ сифаты – йомартлыҡ.

❁

Йәмғиәттәге ярлылар һәм байҙар араһындағы дошманлыҡты һәм көнсөллөктө бөтөрөү, тотороҡлолоҡ булдырыу, үҙ-ара йылы, гүзәл мөнәсәбәт булды-

рыу өсөн, исламда зәкәт түләү ҡаралған. Байҙар түләргә тейешле зәкәт - йомартлылыҡтың иң түбән кимәле.

Ислам шулай уҡ саҙаҡа (инфаҡ) биреүҙе лә хуплай. Һәр кем уны намыҫы, йөрәге ҡушҡанса, динебеҙҙәге ҡәрҙәшлек принциптарын юғары кимәлгә күтәреү өсөн бирә.

Йомартлыҡ (исар) сәбәпле бирелгән бындай саҙаҡаны ислам юғары ҡуя, сөнки әҙәм, үҙе мохтаж була тороп, иман ҡәрҙәшен ҡайғырта.

Мөхәммәд Хәким Тирмиҙигә һорау бирәләр: «Инфаҡ нимә ул?» Ул әйтә: «Инфаҡ – башҡаларҙы ҡыуандырыуҙан ҡәнәғәтлек табыу».

❁

Хәҙистәрҙә әйтелә:

«Әгәр Аллаһ Үҙ ҡолона яҡшылыҡ теләһә, Ул уны кешеләрҙең ихтыяждарын ҡәнәғәтләндереү юлында файҙалана» (Суюти II, 4/3924).

«Кешеләрҙең иң яҡшыһы – ул башҡаларға иң файҙалыһы» (Байхаки, Шуаб, VI, 117).

«Изгелек ҡылыу юлындағы аралашсы – уны ҡылыусыға бәрәбәр» (Тирмиҙи, Ғилем, 14).

❁

Хөрмәтле Ғәли (радыйаллаһу ғәнһү) әйткән: «Ике ниғмәт бар, уларҙың ҡайһыһы мине нығыраҡ ҡыуандырғанын әйтә лә алмайым. Беренсеһе – хәжәтен ҡәнәғәтләндереүемә өмөт бағлап, минән ихлас ярҙам һораған кеше. Икенсеһе – Аллаһ Тәғәләнең минең аша кешенең шул хәжәтен үтәүе йәки эшен еңеләйтеүе. Берәй мосолманды ҡыйынлыҡтан аралауҙы мин бар донъяны тултырырҙай алтын-көмөшкә эйә булыуға ҡарағанда ла өҫтөнөрәк күрәм» (Ғәли әл-Муттаки, Канзу әл-Уммәл, VI, 598/17049).

❁

Аллаһ Тәғәләнең бер Исеме – Әл-Үәһһәәб (Бүләкләүсе). Йәғни Ул Үҙенең яратылмышына һәр ваҡыт, һәр ерҙә, яуап итеп бер нәмә лә көтмәйенсә, мул итеп ниғмәттәрен бирә. Шул сәбәпле Ул барса яратылмыштарына ла «биреү, ҡорбан итеү, һыйлау» сифаттарын бүләк иткән».

Мәҫәлән, бал ҡорттары балды үҙ ихтыяждарынан бер нисә тапҡырға артыҡ йыя. Кәрәҙҙәргә уларҙы ентекләп, бөхтә итеп урынлаштыра. Балдың бер өлөшөн генә улар үҙҙәре ашай, ҡалғаны төрлө хайуандарға һәм кешеләргә эләгә.

Шулай уҡ емеш ағастары ла, орлоҡтарында һаҡланған нәҫелдәрен ҡалдырыу өсөн, бихисап емеш үҫтерә. Меңдән берәү үҫеп сыҡһа, был да етә. Ҡалған емештәренән кешеләр һәм башҡа йән эйәләре файҙа күрә.

Кеше хайуандарҙы ризыҡ өсөн, тормош көтөү өсөн үҫтерә. Кешеләр иттәрен ашаһын өсөн, билдәле бер ваҡыттан һуң хайуандар үлә.

Ер аяҡ аҫтында тапалһа ла, ул өҫтөндәге тере йән эйәләре эшмәкәрлегенең ҡалдыҡтарын паклай, улар менән үҫемлектәрҙе туйындыра һәм йәнә уларҙы һыйға, мәрхәмәткә әйләндерә.

Миҫалдарҙан күреүебеҙсә, кеше лә йомарт булырға, саҙаҡа бирергә ашығырға тейеш. Ул миҫалдар - эшләп тапҡан милкең йәки эйә булған мөмкинлектәрең менән бүлешеүгә нәсихәт. Ҡоло киң күңелле, булғанын ҡорбан итергә яратһын өсөн, Аллаһ Тәғәлә Ғаләм китабы аяттарында йомартлыҡ үрнәге булған меңдәрсә шундай миҫал килтерә.

❁

Сәғди Ширази шәйех әйткән: «Йомарт емеш биргән ағасҡа оҡшаш. Ә һаран – тауҙағы утынға».

Хәҙистә әйтелә: *«Йомарт Аллаһҡа, Йәннәткә, кешелергә яҡын һәм Йәһәннәм утынан йыраҡ. Һаран иһә Аллаһтан, Йәннәттән, кешеләрҙән йыраҡ һәм Йәһәннәм утына яҡын. Йомарт яһил (наҙан) Аллаһҡа һөйөклөрәк, хатта ки һаран ғибәҙәт ҡылһа ла»* (Тирмизи, Бирр, 40/1961).

❁

Сәғди Ширази шәйех әйткән: «Ашаған һәм башҡаларҙы ла ашатҡан киң күңелле кеше ғибәҙәт ҡылған, нәфел ураҙалар тотҡан, әммә кешеләргә бер нәмә лә бирмәгән кешенән яҡшыраҡ».

❁

Аллаһ ризалығы өсөн ғүмереңдә, милкеңдә, булған ниғмәттәреңдә ҡорбан итеү – хаҡ байлыҡҡа эйә булыу тигән һүҙ. Һаран һәм ике йөҙлө кешеләр был бәхеттән мәхрүм. Шуға күрә әҙәп менән саҙаҡалар биреү – бөйөк бәрәкәт һәм сәғәҙәт.

❁

Изге аятта әйтелә:

«Аллаһ һиңә бәрәкәт биргән кеүек, һин дә (кешеләргә саҙаҡа биреп) йомарт бул…» (әл-Ҡасас (Ҡиссалар), 77).

Иманлы әҙәм дин ҡәрҙәшенә үҙенә теләгәнде теләргә, уның хәжәтен үтәүҙе илаһи мәрхәмәт һәм бәхет тип ҡабул итергә тейеш. Шуға күрә һис бер ризаһыҙлыҡ күрһәтмәйенсә, булған ниғмәттәрең менән бүлешеү, бындай мөмкинлекте иҫ киткес ләззәт һәм бәхет итеп күреү лазым. Башҡалар менән бүлешә алыу мөмкинлеге - килем алыуға, ә биргәнең - эш хаҡына тиң.

Аллаһ Илсеһе (салләллаһу ғәләйһи үә сәлләм) үҙ ғаиләһе өсөн һарыҡ һуя. Улар итте төрлө кешеләргә тарата, һәм, Аллаһ Илсеһе (салләллаһу ғәләйһи үә сәлләм) күпме ит ҡалыуы тураһында һорағас, Ғәйшә (радыйаллаһу ғәнһә) яуап бирә: «Бер ҡалаҡ һөйәге ҡалды». Пәйғәмбәребеҙ (салләллаһу ғәләйһи үә сәлләм) әйтә: *«Ҡалаҡ һөйәгенән башҡаһы беҙҙеке булды!»* (Тирмизи, Ҡиәмәт, 33).

Шулай итеп, беҙҙең хаҡ байлығыбыҙ – биргән саҙаҡаларыбыҙ. Аллаһ ризалығы өсөн биргән һәр нәмәбеҙ – беҙҙеке. Ҡылған бөтә изге ғәмәлдәребеҙ – беҙҙеке. Беҙ ярҙам иткән барса мохтаждар, бәхетһеҙҙәр, яңғыҙҙар – беҙҙеке, сөнки улар аша беҙ, Аллаһ бойорһа, Раббыбыҙҙың ризалығына ирешәсәкбеҙ, шуға күрә уларҙы беҙ илаһи бәрәкәт итеп ҡабул итергә тейеш.

❁

Аллаһ Сүбхәнәһү үә Тәғәлә әйтә:

«Һеҙ һөйөклө әйберҙәрегеҙҙе сарыф итмәһәгеҙ, изгелеккә ирешә алмаҫһығыҙ» (Әлү Ғимран (Ғимран ғаиләһе), 92).

Ошо аятҡа ярашлы, Аллаһ юлындағы тырышлығыбыҙҙы һәм йомартлығыбыҙҙы тикшереп ҡарарға, ниндәй кимәлдә тороуыбыҙҙы асыҡларға, саҙаҡа биргәндә йөрәгебеҙҙән һорарға тейешбеҙ: «Биргәндә шатланабыҙмы беҙ? Әллә күңелебеҙ донъя проблемалары, нәфесебеҙҙән килгән шик-шөбһә менән мәшғүлме?».

Раббыбыҙ әйтә:

«Әй, моьминдәр! Йыйған малдарығыҙҙың иң затлыларын ғына һәм һеҙҙең өсөн ерҙән сығарғандарыбыҙҙан сарыф итегеҙ. Күҙ йомоп алырҙай затһыҙ малды бүләккә бирмәгеҙ (үҙегеҙгә оҡшамаған, ғәмәлгә яраҡһыҙ мал хәйергә бирелмәҫ)…» (әл-Баҡара (Һыйыр), 267).

❁

Бер заман Ғәйшә (радыйаллаһу ғәнһә) еҫләнә башлаған итте саҙаҡа итеп бирергә ҡарар итә. Аллаһ Илсеһе (салләллаһу ғәләйһи үә сәлләм) уға былай тип белдерә: *«Эй, Ғәйшә! Һин үҙең ашамағанды саҙаҡа итеп бирергә уйлайһыңмы?»* (Хайсами, III, 113).

❁

Бер изге ҡудси хәҙистә әйтелә: *«Эй, әҙәм балаһы! Саҙаҡалар алыр өсөн, саҙаҡалар бир!»* (Бохари, Тәфсир, 11/2, Нәфәҡат, 1).

❁

Аллаһтың барса гүзәл (джәмәл) атрибуттарында ла был сер бар:

• Ғәфү ит, һәм ғәфү ителерһең;

• Ярлыҡа, һәм ярлыҡанырһың;

• Мәрхәмәтле бул, һәм һиңә лә мәрхәмәтле булырҙар;

• Башҡаларҙы бәләнән арала, һәм һине лә бәләнән араларҙар;

• Дуҫыңдың проблемаһын хәл итергә ярҙам ит, һәм һиңә лә ҡыйын хәлдә ярҙам итерҙәр.

Сәғди Ширази шәйех әйткән: «Әгәр Аллаһтан мәрхәмәт һәм изгелек көтәһең икән, Уның ҡолдарына изгелек ҡыл».

❁

Кем берәүҙе Аллаһ ризалығы өсөн шатландырһа, Аллаһ та уны шатландырыр.

❁

Аллаһ Илсеһе (салләллаһу ғәләйһи үә сәлләм) әйткән:

«Аллаһ әмер бирә: «Саҙаҡалар бир, һәм һиңә лә саҙаҡа бирерҙәр. Аллаһ хазиналары бихисап. Үҙ яратылмыштарына күпме генә биргә лә, Уның хазиналары кәмемәй. Көнөн дә, төнөн дә бирә Ул [яратылмыштарына Үҙ ниғмәттәрен]. Күктәр һәм Ер яратылғаны бирле, Уның күпме таратыуы тураһында уйлап ҡарағыҙ! Был Уның байлығын һис кенә лә кәметмәй!» (Бохари, Тәфсир, 11/2, Тәүхид, 22)

❁

Әгәр тейешле ваҡытында һәм дөрөҫ итеп келәттә һаҡланған бер ни тиклем орлоҡто сәсһәң, ул артып ҡайтасаҡ һәм келәттәр яңынан туласаҡ. Шуның кеүек, Аллаһ бүләк иткән ниғмәттәрҙе Уның юлында сарыф итеү уларҙы кәметмәй, киреһенсә, арттыра ғына.

❁

Хөрмәтле Мәүләнә әйткән:

«Байлығың һәм бәдәнең, боҙ кеүек, юҡҡа сығасаҡ. Әммә улар Аллаһ юлында ҡорбан булһа, Ул уларҙы аласаҡ. Ҡөрьәндә әйтелә:

«Аллаһ мөьминдәрҙең малдарын, йәндәрен (үҙҙәренә биреләсәк) Йәннәт биреп һатып алды...» (әт-Тәүбә, 111).

Аллаһ һатып алған нәмә иреүгә һәм юғалыуға дусар түгел. Ул мәңгегә ҡала, ифрат та ҡиммәтлегә һәм шәрәфлегә әйләнә».

❁

Сәғди Ширази шәйех әйткән:

«Байлығыңдан зәкәт түлә. (Хәйер-саҙаҡалар биреүгә битараф булма). Онотма, йөҙөм ҡыуағын киҫһәң, ул емеште күберәк бирә».

❁

Хәҙистә әйтелә:

«Мин (һеҙгә) өс нәмә тураһында ант итәм һәм тағы бер нисә һүҙ әйтәм, ә һеҙ хәтерегеҙҙә ҡалдырығыҙ! (Ант итәм:) саҙаҡа ҡолдоң милкен кәметмәй, ә әгәр ҡолға ҡарата ғәҙелһеҙлек ҡылһалар, ә ул сабырлыҡ күрһәмһә, Аллаһ мотлаҡ уның шанын күтәрәсәк, ә инде (Аллаһ) ҡоло үҙе өсөн теләнеү ишеген аса, Аллаһ уға мотлаҡ хәйерселек ишеген асыр!» (Тирмизи, Зуһд, 17).

❁

Саҙаҡаларҙың милекте кәметмәүе – хаҡ. Киреһенсә, саҙаҡалар ҡорбан итеүсенең ихласлығы бәрәбәренә ниғмәтен арттырасаҡ. Ошоға саҡлы хәләл килем алған, Аллаһ юлында хәләл рәүештә ҡорбан ҡылған бер кеше лә йомартлығы сәбәпле хәйерселеккә төшмәгән.

❁

Изге аяттарҙа әйтелә:

«Малдарын Аллаһ юлында сарыф иткәндәрҙең хәле, ете башаҡ үҫтереп, һәр башаҡта йөҙ бөртөк орлоҡ биргән бер дана орлоҡтоң хәле кеүектер. Ихтыяр иткән кешеһенә Аллаһ ҡат-ҡат ниғмәт бирер. Аллаһ – Мулльıҡ эйәһе һәм барыһын да Белеп тороусы» (әл-Баҡара (Һыйыр), 261).

«Күпме хәйер бирһәгеҙ, Аллаһ уның урынына һеҙгә ниғмәт бирер» (Сәбә (Сәбә иле), 39).

❁

Кемдер ярҙам һораусы берәүгә: «Аллаһ бирер!», - тиһә, хөрмәтле Муса Әфәнде (рахимәһуллаһ) бик бошонған һәм әйтер булған: «Ә беҙгә һуң кем бирә? Аллаһ ни өсөн беҙгә бирә? Үҙебеҙ өсөн генәме? Уйлап ҡарағыҙ, беҙ һәр һәр ваҡыт Аллаһтан нимәлер һорайбыҙ, тағы һорайбыҙ, тағы. Байлыҡ Аллаһтыҡы, ә ҡолдарына ул аманат итеп кенә бирелә!».

Сәғди Ширази шәйех әйткән:

«Ишек төбөңә мохтаж килһә, уны буш ҡул ебәрмә. Аллаһ наҡлаһын, бәлки, бер көн һин дә, мохтажлыҡҡа төшөп, бер ишектән икенсе ишеккә йөрөрһөң!».

❁

Нәфестең сикһеҙ әүәҫлектәре менән донъя бысранған, исраф ҡылыу, донъяуи теләктәр хаттин ашҡан беҙҙең көндәрҙә яуаплылыҡ һәм беҙгә Аллаһ биргән ниғмәт һәм рәхмәттәр өсөн Әхирәттә көтөп торған хисап тураһында етди уйланырға кәрәк.

Оноторға ярамай, фәҡирҙәр һәм мохтаждар байҙар милкенең Аллаһ тарафынан билдәләнгән өлөшөнә хоҡуҡтары бар. Шуны иҫтән сығармау лазым: әгәр ҙә ки ул өлөш саҙаҡалар аша бүленмәй икән, уның төрлө бәлә-ҡазалар һөҙөмтәһендә юғалыуы ихтимал.

❁

Сәғди Ширази шәйех әйткән:

«Эй, кеше! Көс-ҡеүәтеңә таянып, көсһөҙҙәр ҡулын буш ҡалдырма! Көсһөҙҙәр йөрәген яралама, һин дә бит ҡеүәтлерәк берәүҙең золомона дусар булып, көсһөҙ булыуың ихтимал!».

❁

Әгәр Раббыбыҙ Үҙенең юғары төйәгенән беҙҙе буш ҡул менән бороп ебәреүен теләмәһәк, ишегебеҙ янынан берәүҙе лә буш ҡул, бошонҡо күңел менән ебәрмәҫкә тырышайыҡ...

❁

Ғүмер, байлыҡ һәм аманат рәүешендә бирелгән төрлө мөмкинлектәр беҙҙә мәңгегә ҡалмаясаҡ. Бер көн мотлаҡ һис көтмәгәндә улар беҙҙең менән хушлашасаҡ, һәммәһе үҙ асылына ҡайтасаҡ.

Шуға күрә, был донъяла бер тапҡыр йәшәргә мөмкинлек бирелгән икән, ул илаһи ниғмәттәрҙе Аллаһ ризалығы өсөн сарыф итәйек. Шулай итеп беҙ киләһе тормош яуаплылығынан да ҡотолорбоҙ. Аллаһ Тәғәләнең сиктән тыш мәрхәмәтенән, рәхмәтенән дә мәхрүм булмабыҙ.

❁

Мөьмин өсөн иң килешкәне – бер көн мотлаҡ ҡалдырып китәсәк фани донъя ниғмәттәрен Аллаһ ризалығы өсөн хаҡ һәм мәңгелек сәғәҙәт капиталына әйләндереү.

Мөьмин өсөн төп капитал – изгелектәр ҡылып, мәңгелек донъя өсөн йыйған капитал.

❁

Фани донъялағы байлыҡ көсһөҙҙәргә, яңғыҙҙарға, иң яҡындарыңдан башлап, йәмғиәттәге бәхетһеҙҙәргә ярҙам итеү һәм шул рәүешле рухи хозурлыҡҡа, мәңгелек бәхеткә ирешеү өсөн кәрәк. Әгәр килем алған кешенең шундай ниәте бар икән, фани донъя тыуҙырған ҡурҡыныстар, аяуһыҙлыҡ, күңел төшөнкөлөгө һәм ҡыйынлыҡтар урынына ул күңел тыныслығына, хозурлыҡҡа ирешер.

❁

Аллаһ Илсеһе (салләллаһу ғәләйһи үә сәлләм) әйткән:

«Әгәр йөрәгең йомшарыуын теләйһең икән, фәкирҙе ашат һәм етемдең башынан һыйпа!» (Әхмәд ибн Ханбәл, II, 263).

❁

Хәҙистә әйтелә:

«Саҙаҡа бирергә ашығығыҙ, сөнки ул бәләнән аралай» (Хайсами, Мәджмәү әз-заваид, III, 110).

❁

Әхмәд ибн Ханбәл әйткән:

«Юлығыҙҙағы кәртәгә тап булғансы, үҙегеҙ ҡиммәт тип һанаған изгелекте ҡылығыҙ».

❁

Намаҙҙың игелеге уны ваҡыты инеү менән ҡылыуға бәйле булған кеүек, саҙаҡаларҙың игелеге лә уны кисектермәй ҡылыуға бәйләнгән.

❁

Изге аятта әйтелә:

«Әжәле килгән кеше: «Раббым! Миңә ҡыҫҡа ваҡытҡа булһа ла ғүмер бир. Валлаһи, мин саҙаҡа бирер инем, изгелектәр ҡылыр инем, - тип әйткәндән күпкә әүәл Беҙ биргән ризыҡтарығыҙҙан саҙаҡа бирергә кәрәк ине» (әл-Мунафиҡун (Ике йөҙлөләр), 10).

❁

Саҙаҡа биргән саҡта ошо принциптар хаҡында онотаҫҡа кәрәк:

1. Ихлас булыу, риянан (күрһәтеп эшләүҙән) ҡасыу һәм донъя мәнфәғәттәренән сығып эш итмәү лазым (ҡар. әл-Баҡара, 264).

Бысраҡ (нәджәсат) берәй тамсы төшһә, һыу паклығын юғалта. Шуның кеүек донъяуи маҡсаттарҙан сығып ҡылынған ғибәҙәт тә ҡабул ителмәй.

2. Үрнәк күрһәтеү, башҡаларҙы ла изге ғәмәлдәр ҡылыуға дәртләндереү ихтыяжы ғына булмаһа, «уң ҡулың биргәнде һул ҡулың белмәҫлек итеп» йәшерен эш итеү зарур.

Дәһшәтле Ҡиәмәт Көнөндә саҙаҡаларҙы шул рәүешле биргәндәр, гонаһтары ярлыҡанып, әл-Ғәреш күләгәһенә ингән бәхетле кешеләр буласаҡ.

3. Ҡылған изгелегең менән кешене битәрләһәң йәки саҙаҡаны кешенең күңелен төшөрөрлөк итеп бирһәң, уның ҡиммәте ҡалмаясаҡ (ҡар. әл-Баҡара, 262-264; әл-Инсан, 8-11).

4. Кеше фәҡирҙәргә үҙе өсөн ерәнгес булған затһыҙ әйберҙәрҙе саҙаҡа итеп бирмәҫкә тейеш (ҡар. әл-Баҡара, 267).

5. Биргән кешенең алған кешегә рәхмәтле булыуы зарур, сөнки алыусы уны яуаплылыҡтан азат итә һәм Аллаһтан бүләктәр алыуға сәбәпсе булып тора.

❁

Ҡиәмәт Көнөндәге Мәхшәр майҙанында хәйерсе һәм банкрот хәлендә ҡалмаҫ өсөн, фани донъя өсөн һис нәмә өмөт итмәйенсә, бары тик Аллаһ ризалығы хаҡында ғына уйлап, яҡшы, йылы һүҙҙәр менән мохтаждарға мәрхәмәт күрһәтеү, изгелек ҡылыу мөмкинлеген үҙебеҙ өсөн табыш тип иҫәпләргә тейешбеҙ.

❁

Аллаһ Илсеһе (салләллаһу ғәләйһи үә сәлләм), ҡулына килеп эләккән донъя ниғмәттәрен мохтаждарға таратып бөтмәй тороп, күңеленә тыныслыҡ таба алмаған. Фәҡирҙәргә бирергә һис бер нәмәһе ҡалмаһа, ул, оялып, йөҙөн борған. Шуға күрә шундай аят төшөрөлә:

«Үҙең дә Аллаһтан ниғмәт һорап ялбарған саҡта (хәйер бирә алмау сәбәпле ҡыйынһынып) мохтаждарҙан боролһаң, һис юғында уларға күңелдәре рәнйемәҫлек йомшаҡ һүҙҙәр әйт» (әл-Исра (Төнгө сәфәр), 28).

Ислам әҙәбе мохтаждарҙы ярҙамһыҙ, ҡыйын хәлдә ҡалдырыуҙы хупламай. Әгәр иман эйәһе фәҡиргә бирерҙәй һис нәмә таба алмаһа, йомшаҡ һүҙ менән булһа ла күңелен күрергә тейеш.

❁

Әҙәм балаһын мохтаж хәлдә күргән саҡта, Аллаһ Илсеһенең (салләллаһу ғәләйһи үә сәлләм) борсолоуҙан фатихалы йөҙө үҙгәрер булған. Әгәр ҙә ки кемгәлер ярҙам итә алһа, күңелегдәге хозурлыҡ, бәхет йөҙөндә сағылған. Ул игелек ҡылынған кешегә ҡарағанда ла үҙен бәхетлерәк тойған.

Аллаһ Илсеһенең (салләллаһу ғәләйһи үә сәлләм) юғары әхлаҡи сифаттары тураһында ғәрәп шағирҙарының береһе былай тип яҙа: «Йомартлығың берәү болотҡа оҡшатһа, хаталана. Биргәндә бит болот илай, ә һин көләһең».

❁

Сәғди Ширази шәйех әйткән:

«Хаҡҡ дуҫтары алыш-биреште һис кем инмәҫ кибеттә ҡыла». Йәғни улар мохтажлыҡтары хаҡында асыҡтан-асыҡ әйтә алмаған кешеләрҙе яҡшы белә, улар яңғыҙҙарға ҡулын һуҙа, уларҙың тауышлы һәм өнһөҙ ялынысын ишетә һәм, Ҡояш кеүек, иң аулаҡ урындарҙы ла нурландыра.

❁

Төп изгелек – Аллаһ ризалығы өсөн һис кемдән ярҙам алмағандарға ярҙам итеү йәки һис кем ҡылмаған изгелекте ҡылыу.

❁

Аллаһ Тәғәлә йөрәктәрендә һағыш-хәсрәт булғандар янында. Шуға күрә йәберләнгәндәргә, яфа күргәндәргә ҡарата уғата иғтибарлы, түбәнселекле булыу лазым. Тупаҫ, әрнеткес һүҙҙәр менән улар йөрәгенә һалынған яраны бер ниндәй саҙаҡа ла шифаландыра алмай. Ватылған һауытты күпме генә йәбештермә, ул элекке кеүек булмаясаҡ, эҙе ҡаласаҡ…

❁

Йәнәбе Хаҡҡ әйтә:

«(Етемдәргә килгәндә, аң бул, уларҙы рәнйетмә! Мохтаждарға килгәндә лә, уларҙы яныңдан ҡыума!» (әд-Духа (Иртәнге шәфәҡ), 9-10).

❁

Сәғди Ширази шәйех әйткән:

«Яҙын гөлгә күмелгән раузаларҙың гүзәллегенән мәхрүм ҡалмаҫ өсөн, көҙөн рауза ҡыуаҡтарын һындырма (Ватылған йөрәкте шифаландырыу ауыр).

Берәүгә яҡшылыҡ ҡылһаң, һауаланма: «Мин әфәнде, ул миңә мохтаж!».

Уға кәмһетеп ҡарама һәм әйтмә: «Заман ҡылысы ул меҫенде һәләк итте!».

Ул ҡылыс әле ҡынына тығылмаған. Бәлки, бер көн килеп ул һине лә аяп тормаҫ!».

❁

Хөрмәтле Мәүләнә әйткән:

«Фәкир кеше – байҙың көҙгөһө. Һаҡ бул, мыҫҡыллы һүҙҙәр менән ул көҙгөнө тоноҡландырма!».

Хөрмәтле Ғәли (радыйаллаһу ғәнһү) әйткән:

«Кемгәлер бурыслы булғансы, мохтаж һәм мәхрүм булғаның яҡшыраҡ».

❁

Аллаһтың бүләк итеп бирелгән ниғмәттәренә рәхмәт йөҙөнән шул ниғмәттәрҙән мәхрүмдәргә хеҙмәт итеүҙе һәм ярҙам итеүҙе үҙебеҙ өсөн бәхет тип һанарға тейешбеҙ. Был беҙҙең бурысыбыҙ. Беҙ игелек ҡылған кешеләр беҙгә бурыслы түгел, киреһенсә, беҙ уларға бурыслы.

Беҙгә өлгө булып торған Аллаһ Илсеһе (салләллаһу ғәләйһи үә сәлләм) сәхәбәләре үҙҙәре ярҙам иткәндәргә әйтер булған:

«Улар хәйерселәргә: «Беҙ һеҙҙе Аллаһ ризалығын алыр өсөн ашатабыҙ, һеҙҙән бер түләү ҙә, рәхмәт әйтеүҙе лә көтмәйбеҙ. Ысындан да, беҙ ситен (ауыр) һәм хәтәр бер көндөң ауырлығынан ҡурҡабыҙ» - тип әйтерҙәр» (әл-Инсан (Кеше), 9-10).

❁

Әбү Ләйс әс-Сәмәрҡанди әйткән:

«(Саҙаҡа биргәндә,) биреүсе алыусыға рәхмәт әйтергә тейеш, сөнки алыусының донъяуи ихтыяждары ҡәнәғәтләндерелә, ә биреүсене Йәнәбе Хаҡтың ризалығы һәм Әхирәттәге сикһеҙ мәрхәмәттәре көтә. Был осраҡта биреүсе алыусыға ҡарағанда күберәк файҙа күрә, шуға күрә уның рәхмәтле булыуы зарур».

❁

Мөхтәрәм Муса Әфәнде (рахимәһуллаһ), кемгәлер изгелек эшләгәндә, саҙаҡаның тәүҙә Аллаһҡа һәм аҙаҡ ҡына мохтажға ирешеүен иҫендә тотоп, әҙәпле, түбәнселекле эш иткән. Саҙаҡаһын ул конвертҡа һалыр булған, ә тышына былай тип яҙған:

«Мөхтәрәм фәлән-фәлән! Бүләгебеҙҙе ҡабул итеүегеҙ өсөн, рәхмәтебеҙҙе белдерәбеҙ…», һәм нәзәкәтле күркәм кәлимәләр ҡулланған.

Хөрмәтле Мәүләнә әйткән:

«Мохтаждар йомартлыҡҡа һәм изгелеккә мохтаж булған кеүек, йомартлыҡ һәм изгелек тә мохтаждарға мохтаж».

❁

Фани донъяла фәҡир байға мохтаж. Баҡыйлыҡта бай ярлының доғаһына мохтаж буласаҡ. Шуға күрә фәҡир – байҙар өсөн бөйөк ниғмәт, улар аша байҙар Аллаһтың ризалығын ҡаҙаныу мөмкинлеген ала.

❁

Фани донъяла алыу мөмкин булған иң ҡиммәтле хазина – һиңә рәхмәтле булған йән эйәләре. Ә иң яҡшы капитал – Әл-Ғаршҡа күтәрелгән, Уның рәхмәтенә сәбәпсе булған һин ҡыуандырған йөрәктәрҙең доғалары.

❁

Хәҙистә әйтелә:

«Киәмәт Көнөндә Аллаһ һине Үҙенә яҡынайтһын өсөн, фәҡирҙәрҙе ярат, уларҙы үҙеңә яҡынайт» (Тирмизи, Зуһд, 37).

❁

Аллаһтың тәҡүәле ҡоло, бер һуҡырҙы ҡунаҡ итер өсөн, күркәм табын ҡорған. Унан һорайҙар икән:

«Һиңә киләсәк ҡунаҡ һуҡыр. Ниңә шул тиклем тырышаһың, шул ҡәҙәр көс түгәһең? Был матурлыҡты ул күрмәйәсәк бит!». Теге мәғрифәтле кеше әйткән:

«Эйе, һуҡыр үҙенә әҙерләнгән һыйҙы күрмәйәсәк, әммә ул һуҡырҙың Раббыһы күрәсәк!».

❁

Байҙар өсөн мотлаҡ булған зәкәт - Аллаһ ризалығы өсөн улар ҡорбан итергә тейешле иң түбән кимәл. Зәкәт түләү – Аллаһ юлы хеҙмәтендә ҡылынған өҫтәмә изгелек түгел, ә бурыс түләү, байҙар милкендәге мохтаждарҙың өлөшө. Шул өлөштө кәрәкле кешеһенә бирмәгәндәр сит милекте үҙләштергән булып һанала.

Шәйех Муса Әфәнде (рахимәһуллаһ) әйткән:

«Иң яман бурлыҡ – зәкәт түләмәйенсә, фәҡир-фоҡараның милкен урлау».

❁

Беҙҙең көндәрҙә юҡҡа сығып барған ғөшөр – ҡылынырға тейешле йәнә бер ғибәҙәт, уңыштан түләнергә тейешле зәкәт. Ғөшөр саҙаҡаһын һәм зәкәтен түләмәүселәр Аллаһ ҡашында сит милекте үҙләштереүселәр, ғәйеплеләр булып иҫәпләнә. Улар юҡһылдарҙың, мохтаждарҙың һәм үҙен Аллаһ юлы хеҙмәтенә бағышлағандарҙың хоҡуҡтарын боҙа.

Риүәйәттәр буйынса, Йәмәндә йәшәүсе берәүҙең Сана янында бик зур баҡсаһы була. Йомарт кеше булараҡ, уңыш йыйған ваҡытта фәҡирҙәргә, меҫкендәргә, көсһеҙҙәргә мул итеп ғөшөр саҙаҡаһы тарата ул. Был изге әҙәм донъя ҡуйғас, балалары, ҡомһоҙлоҡтарына барып, былай тип белдерә: «Ғаиләләребеҙ зур, ә үҙебеҙ бай түгел. Ярлы-ябағаға бер нәмә лә бирмәйек, улар, килеп, үҙ өлөшөн һорағансы, уңышты йыйып ала һалайыҡ!» Уларҙың түбән ниәтен күреп, Аллаһ Тәғәлә баҡсаларын көлгә әйләндерә, тирә-йүн бөтөнләй танымаҫлыҡ булып үҙгәрә.

Шулай итеп, йомарт рәүештә бирелгән ғөшөр, мохтаждарҙың доғалары сәбәпле, милкебеҙҙең юҡҡа сыҡмауының гарантияһы булып тора.

❁

Ҡөрьәндә зәкәт 32 тапҡыр телгә алына, ә саҙаҡа (инфаҡ) төрлө формала – 72 тапҡыр. Был шуға ишара: мөьмингә саҙаҡаларҙың иң түбәнге кимәле булған зәкәт менән генә сикләнергә ярамай, күберәк бирергә ынтылырға кәрәк.

❁

Шәриғәт ҡанундары буйынса бай тип иҫәпләнгәндәр өсөн зәкәт – илаһи әмер, ә йомартлыҡ һәм саҙаҡалар (инфаҡ) – байҙар өсөн дә, ярлылар өсөн дә.

Йомартлыҡ, мосолман ниндәй генә хәлдә булһа ла, төп сифат булырға тейеш.

❁

Аллаһ Илсеһе (саллəллаһу ғələйһи үə сəллəм) өммәтен - байҙарҙы ла, ярлыларҙы ла - йомарт булырға өндәй. Йомартлыҡ байлыҡҡа бәйле түгел, ул шөкөр итә белеүгә һәм күңел киңлегенә бәйле.

Саҙаҡалар тураһындағы аяттар төшөрөлгәс, хәйерсе сәхәбәләр: «Беҙҙең бер нәмәбеҙ ҙә юҡ, нисек беҙ саҙаҡа бирәйек?» - тип, өҫтәренән был бурысты төшөрөр урынға Аллаһтың әмерен нисек үтәү тураһында уйлай башлай. Улар тауҙарҙа утын йыя һәм уны баҙарға килтереп һата, баҙарҙа йөк ташыусы булып эшләй, ҡоҙоҡтан һыу сығарып, баҡсаларға һыу һибә, ә эшләп тапҡан аҡсаларын Аллаһ Илсеһенә (саллəллаһу ғələйһи үə сəллəм) саҙаҡа итеп килтерә.

Аллаһ Илсеһе (салләллаһу ғәләйһи үә сәлләм) барса мосолмандарҙың рухиәтен бай итеп күрә. Хатта иң фәҡирҙәрҙе лә ул саҙаҡа таратырға өндәй. Әбү Ҙарр (радыйаллаһу ғәнһү) хәйерсе хәлендә тиерлек була. Шуға ҡарамаҫтан Аллаһ Илсеһе (салләллаһу ғәләйһи үә сәлләм) уға бойора:

«Һурпа әҙерләгәндә, һыуҙы күберәк һал, шунан күршеләреңә ин һәм тейешенсә уларға өләш сығар» (Мөслим, Бирр, 143).

Был хәҙистән күреүебеҙсә:

1. Күршеләрҙең бер-береһе алдында хаҡтары бар.

2. Күршеләр араһында мөхәббәтте нығытыу өсөн, бүләк бирешеү һәм әҙәпле итеп бер-береңә ярҙам итеү зарур.

3. Фәҡир күршеләрҙе ҡайғыртыу – байҙарҙың бурысы ғына түгел. Киреһенсә, ҡулынан килгәнсә, һәр иман эйәһе ҡыйыныраҡ йәшәгән ҡәрҙәшенә ярҙам итергә бурыслы.

❁

Раббыбыҙ Аллаһ Ҡөрьәндә тәҡүәләр хаҡында әйтә:

«Улар – саф мосолмандар; муллыҡта ла, юҡлыҡта ла йомарт булғандар, асыу һаҡламаусылар, кешеләрҙең кәмселектәрен кисерә белеүселәр (өсөн ул Йәннәт). Аллаһ изгелек ҡылғандарҙы ярата» (Әли Ғимран (Мәрйәмдең атаһы), 134).

Шуға күрә Аллаһ Илсеһе (салләллаһу ғәләйһи үә сәлләм) бер финиктан башҡа һис нәмәһе лә булмаған сәхәбәгә шуның яртыһын булһа ла саҙаҡа итеп бирергә кәңәш бирә. Тимәк, мөмкинлеге булғанда, зәкәт алырға хоҡуғы булған кеше лә хәленән килгәнсә саҙаҡа бирергә тейеш.

❁

Аллаһ өсөн саҙаҡаның күләме түгел, саҙаҡа биреүсенең ни дәрәжәлә ҡорбан килтерергә һәләтле булыуы мөһим.

Бер заман Аллаһ Илсеһе (салләллаһу ғәләйһи үә сәлләм) әйтә:

– *Бер дирһәм йөҙ мең дирһәмде уҙҙы.*

Сәхәбәләр һорай:

– Нисек улай була инде, йәә Рәсүлүллаһ?

Ул әйтә:

– Бер кешенең ике дирһәме була. Береһен ул саҙаҡа итеп бирә (Йәғни ул милкенең яртыһын ҡорбан итә). Икенсеһе (бик бай кеше) милкенән 100 мең дирһәм ала һәм саҙаҡа итеп бирә (Нәсаи, Зәкәт, 49).

❁

Әгәр ҙә ки кешенең ниәттәре дөрөҫ булһа, ул бәләкәйҙе лә ҙур итә. Кескәй генә саҙаҡа, әгәр ихлас бирелһә, ысын күңелдән бирелмәгән тауҙай аҡсанан ҡиммәтерәк.

❁

Юлда осраған ҡаршылыҡтар, кәртәләр ни тиклем күберәк булһа, еңеүҙең ҡиммәте лә шул тиклем юғары. Шуға күрә ауыр тормош шарттарында ла йомарт, физакәр булыу – Йәнәбе Хаҡҡа яҡын булғандарҙың йөрәк халәте.

Бына ни өсөн мосолмандарҙың Мәккә яуланғанға тиклем, ауыр, мохтаж ваҡытта биргән саҙаҡаһы, еңеү яуланып, муллыҡ заманы килгәс бирелгәненән бик күпкә ҡиммәт.

❁

Шул сәбәпле Ярмук янындағы алышта ҡаты яраланған, һыуға сарсаған өс сәхәбәнең, эсеүҙән баш тартып, тәүге нәүбәттә зыян күргән иптәшен эсереүҙе һорауҙары дәрәжәһе буйынса имен заманда биргән күптәрҙең ҙур саҙаҡаларын уҙып китәлер моғайын.

❁

Исар – йомартлыҡтың үре. Йомартлыҡ – үҙеңдән артҡанды, үҙеңә кәрәкмәгәнде биреү. Ә исар – үҙең мохтаж була тороп, нәфесеңдең өнөн тығып, үҙеңә хәжәт булғанды икенсе берәүгә биреү.

❁

Матди асылы бер үк булһа ла, ағып ятҡан шишмә янында һыуҙы саҙаҡа итеп биреүҙең һәм ҡыҙған сүллектә үлергә ятҡан кешегә һыу биреүҙең ҡиммәтте, әһәмиәте айырмаһы ер менән күк араһы кеүек. Сөнки тәүге осраҡта ул һыуһынды ҡандыра, икенсе осраҡта кеше ғүмерен ҡотҡара.

❁

Сәғди Ширази шәйех әйткән:

«Аллаһ Сүбхәнәһү үә Тәғәлә бер кем алдында ла игелек ҡапҡаларын япмай. Шуны ла белеп ҡуй: һәр кемдең изгелеге – хәленә ҡарап. Үҙенең ҡиммәте

буйынса бер бай үҙ хазиналарынан ҡорбан иткән бер ҡантар[9] алтын фәкирҙең бер кираты[10] менән ярыша алмай. Ҡырмыҫҡа өсөн сиңерткә аяғы – ауыр йөк».

❁

Иман эйәһе өсөн маҡсат булырға тейешле йомартлыҡ матди ниғмәттәрҙе ҡорбан итеүҙе генә аңлатмай. Тейешле ваҡытта йылмайыу, яҡшы һүҙ, тайып барғанға терәк-таяныс булыу, иман ҡәрҙәшеңдең проблемаларын тыңлау, ваҡытың, хеҙмәтең, ғилемең, хис-тойғоларың менән бүлешеү – был да саҙаҡа.

Шуға күрә ислам саҙаҡа мәсьәләһендә фәкирҙәрҙең аҡланыуын ҡабул итмәй. Иң мохтаж мосолмандан да ул альтруизм, йомартлыҡ һәм фиҙакәрлек талап итә.

Хәҙистә әйтелә:

«Һәр бер хәләл һәм изге ғәмәл – ул саҙаҡа» (Бохари, Әҙәп, 33).

❁

Бай кешегә саҙаҡа биреү еңел, сөнки был нәфескә ауырлыҡ тыуҙырмай. Әммә ярлы булһаң, йомарт булыуы еңел түгел. Ә үҙең һөйгәнде биреү иһә – байҙың нәфесе өсөн ауыр һынау.

❁

Мөхтәрәм Ғәли (радыйаллаһу ғәнһү) әйткән:

«Донъя ниғмәттәренә эйә булғанһың икән, уны бирә лә бел, был уларҙы кәметмәйәсәк. Донъя ниғмәттәренән мәхрүм ҡалһаң, йәнә бир, сөнки былар мәңгелек түгел!»

«Аллаһ мул ризыҡ бирһен өсөн, матди ауырлыҡтар килгән заманда саҙаҡа биреҙ – был Аллаһ менән алыш-биреш».

❁

Аятта әйтелә:

«...Йәнә һинән саҙаҡаның нисек бирелергә тейешлеге тураһында ла һорарҙар. Һин әйт: «Ихтыяжыңдан артҡанын бир»…» (әл-Баҡара (Һыйыр), 219).

9. Урта быуаттарҙа Яҡын Көнсығышта ҡулланышта булған ауырлыҡ берәмеге. Төрлө илдәрҙә 45-320 кг. нисбәтендә йөрөгән.
10. 0,2 г.-ға тиң ауырлыҡ берәмеге.

Тимәк, мөьмин эшләргә, килем алырға, үҙенә кәрәге менән сикләнеп, ҡалғанын саҙаҡаға бүлергә тейеш. Шул уҡ ваҡытта уға намыҫлы булыу ҙа зарур.

Аллаһ Илсеһе (салләллаһу ғәләйһи үә сәлләм), сәхәбәләрен тәрбиәләп, изгелек цивилизацияһын барлыҡҡа килтергән.

Джәбир (радыйаллаһу ғәнһү) әйткән:

«Мин, ваҡыф (хәйрийә фонды) төҙөү мөмкинлеге булып, уны төҙөмәгән бер генә сәхәбәне лә белмәйем» (Ибн Ҡудама, әл-Муғни, V, 593).

Ваҡыф – исламдың кешеләргә һәм бөтә барлыҡҡа мөнәсәбәтен белдереүсе гүзәл күренеш.

❁

Ғосманлылар дәүләте заманында, уны, моғайын, Аллаһ Илсеһе (салләллаһу ғәләйһи үә сәлләм) дәүеренән ҡала ислам тарихының гүзәл осоро тиергә лә була, ваҡыф мәҙәниәте сәскә ата.

Солтандар, уларҙың әсәләре, байҙар мираҫ итеп хазиналар түгел, ә мәсеттәр, мәҙрәсәләр, дини комплекстар (күллиә), йәғни өҙлөкһөҙ саҙаҡа (саҙаҡа әлджәрийә) итеп иҫ киткес зур капитал ҡалдыра.

Йәмғиәттә мәрхәмәт һәм шәфҡәтлелек институты булған ваҡыфтар, тол ҡатындарҙы, етемдәрҙе, мохтаждарҙы ҡурсып, бөтә илгә тарала. Йөрәктәр мәрхәмәт төйәгенә әүерелә.

❁

Көслөләр, хәйриә ойошмалары төҙөп, бәхетһеҙҙәр, яңғыҙҙар тураһында хәстәрлек күргән, мәрхәмәт таратып, саҙаҡалар биргән йәмғиәттә һис бер сәйәсмән, социолог һәм психолог тәьмин итә алмаған ҡәрҙәшлек мөхите барлыҡҡа килә. Әҙәмдәр күңеленә изгелек тула, ә йөрәктәр бәхетһеҙҙәр өсөн терәк-таяныс төйәгенә әүерелә…

❁

Мосолмандар әлеге көнгә саҡлы беҙгә ҡәҙәр йәшәп киткәндәр төҙөгән ваҡыфтарҙы файҙалана.

Данлыҡлы ата-бабаларыбыҙ эшен дауам итергә лайыҡлымы беҙ бөгөн?

Киләһе быуындар файҙалана алырлыҡ нимә ҡалдырырбыҙ? Ата-бабаларыбыҙ кеүек, үҙебеҙҙән һуң ваҡыфтар, мәсеттәр, мәҙрәсәләр ҡалдырырбыҙмы, әллә тапҡан-таянғаныбыҙҙы юҡ-барға исраф ҡылырбыҙмы?

❁

Был фани донъялағы изге ғәмәлдәребеҙ һәм саҙаҡаларыбыҙ – баҡыйлыҡ тормошобоҙ уңышының орлоҡтары.

Беҙ Әхирәткә юл тотҡан юламсылар, һәм бер көн фани булған барса нәмәбеҙ беҙҙе ташлап китәсәк. Әйҙәгеҙ, үлем сәғәте еткәнсе, Әхирәткә буш ҡул менән китмәҫ өсөн, саҙаҡалар бирәйек.

❁

Иң яҡшы байлыҡ – кеше иҫән-һау саҡта үҙенән алда Әхирәткә оҙатҡан байлығы. Аятта әйтелә:

«Алдарына Йәһәннәм сығарылғас, әҙәм балаһы ул көндө (бөтөн ҡылғандарын) аңлар. Ләкин хаталарын (һуңлап) аңлауҙан ниндәй файҙа? «Аһ, фани донъяла алдағы тормошом өсөн изгелектәр ҡылған булһам», - тип уфтанасаҡ» (әл-Фәжер (Таң), 23-24).

❁

Сәғди Ширази шәйех әйткән:

«Аҡыллы кешеләр икенсе донъяға юл тотор алдынан үҙенән алда милкен һәм аҡсаларын оҙата (Йәғни Аллаһ юлында саҙаҡалар бирә). Һарандар, һағышҡа батып, һәммәһен был донъяла ҡалдырып китә».

❁

Мөхәммәд Әсғәд әл-Әрбили (рәхимәһуллаһ) әйткән: «Мәғлүм, арендаға алыусылар бер йорттан икенсе йортҡа күскәндә, үҙҙәре өсөн һөйөклө булған бөтә әйберҙәрен дә ала. Бәс, шулай булғас, шуныһы ғәжәп: кешеләр ниңәлер бөтә нәмәгә лә мохтаж буласаҡ ҡәбер төйәгенә күсер алдынан үҙҙәренә һөйөклө булған әйберҙәрҙең ҡайһы берҙәрен генә булһа ла алмай (йәғни улар, саҙаҡалар биреп, үҙҙәренән алда Әхирәткә оҙатмай).

❁

Беҙҙең хәҡиҡи байлығыбыҙ – беҙҙең саҙаҡа итеп биргәндәребеҙ. Ысын файҙа бирәсәк милкебеҙ – Аллаһ ризалығы өсөн бирә алған милкебеҙ.

Аллаһ Илсеһе (салләллаһу ғәләйһи үә сәлләм) бик гүзәл әйткән:

«Әҙәм балаһы әйтә: «Минең байлығым, минең байлығым!», – әммә, эй, әҙәм балаһы, ашап-эсеп юҡ иткән ризығыңдан, йәки кейеп туҙҙырғаныңдан (кейемеңдән), йәки биргән саҙаҡаңдан башҡа һинең тағы берәй нәмәң бармы?!» (Мөслим, Зуһд, 3-4).

❁

Изге аятта әйтелә:

«Эй, иман килтергән бәндәләрем! Беҙ һеҙгә биргән ризыҡтарҙы Әхирәт көнө килеп еткәнсе үк (Хаҡ юлында) сарыф итегеҙ (саҙаҡа бире-

геҙ, етемдәргә ярҙам итегеҙ, зәкәт биреГеҙ, хаж ғибәҙәте ҡылығыҙ). Ул көн килеп еткәс кенә алыш-бирешТә, дуҫлыҡ та, шәфәғәт тә булмаясаҡ…» (әл-Баҡара (Һыйыр), 254).

❁

Аллаһ Илсеһе (салләллаһу ғәләйһи үә сәлләм) әйткән:

«Был донъяла байлығы күп булғандар – баҡыйлыҡта сауабы әҙ булғандар. Уңға ла, һулға ла, тегендә лә, бында ла таратҡандар улар иҫәбенә инмәй. Әммә ундайҙар бик әҙ!» (Бохари, Истикраз, 3, Рикак, 14).

Фани донъянан киткәндәр кем генә булмаһын, батшамы ул, әллә хәйерсеме, Әхирәттәге уларҙың барса байлығы – унда уларҙы иҫән саҡта оҙатҡан нәмәләре…

❁

Беҙ файҙа аласаҡ бала – беҙ Аллаһ юлында тәрбиәләгән, беҙҙең «даими саҙаҡабыҙ» (саҙаҡа әл-джәрийә) булып ҡаласаҡ бала.

Беҙҙең файҙа аласаҡ дуҫыбыҙ – Аллаһ ризалығы өсөн һөйгән һәм ауыр ваҡытта уға туғаныбыҙ кеүек булған дуҫыбыҙ.

Беҙгә файҙа килтерәсәк байлыҡ – беҙ хәҙер саҙаҡа итеп биргән һәм шул рәүешле мәңгелек йортобоҙға оҙатҡан байлығыбыҙ.

❁

Бөгөнгө көндә саҙаҡаға һәм исарға әһәмиәт биреү зарур. Оноторға ярамай, үҙебеҙ ҙә бер көн килеп шул зыян күргәндәр һәм мохтаж булғандар хәленә төшөүебеҙ ихтимал. Шуға күрә йомартлыҡ, күп һанлы саҙаҡалар һәм хатта ки сирле, бәхетһеҙ, яңғыҙ һәм мохтаждарға ҡарата исар – Раббыбыҙға рәхмәтле булыуыбыҙ билгеһе, бурысыбыҙ.

❁

Үҙебеҙҙәге ниғмәттәрҙе мохтаждар менән ихлас күңелдән бүлешәйек, фани донъяла беҙ йыуатҡан һәм ҡыуандырған йөрәктәр һәммәбеҙгә рухи хозурлыҡ бүләк итһен, мәңгелек тормошобоҙҙа - ярҙам, Йәннәттә бәхет булып әүерелһен. Амин

ИСРАФТАН, ҠОМҺОҘЛОҠТАН ҺӘМ ТУЙМАҪ ТЕЛӘКТӘРҘӘН ҠАСЫУ

Хикмәт эйәһе әйткән: «Кеше үлгәндә, бығаса һис ҡасан дусар булмаған ике бәхетһеҙлек ябырыла уға. Беренсенән, уның йыйған бөтә малын тартып алалар, ә икенсенән, бөтә малын тартып алһалар ҙа, нисек уларҙы эшләп табыуы һәм нисек сарыф итеүе тураһында һорау алалар».

Кешелек йәмғиәтендә милек, матди байлыҡтар йәки дәүләттеке, йәки айырым шәхестәрҙеке. Исламда иһә шундай принцип: «Әл-мүлкү лилләһ» (اَلْمُلْكُ لِلّٰهِ) – «Барса милек Аллаһтыҡы».

Милекте сарыф итеүгә килгәндә, киң таралған ике хата бар: исраф һәм һаранлыҡ.

Исраф – матди байлыҡтарҙы самаһыҙ, нәфесең теләктәренә буйһоноп сарыф итеү. Бындай хәл кәмселектәр комплексына эйә булған бәндә үҙенең өҫтөнлөгөн күрһәтергә тырышҡанда килеп сыға.

Һаранлыҡ – матди байлыҡтарҙы үҙең өсөн йыйыу. Был ғәмәлдәрҙең икеһе лә яман, уларҙың тамырҙары Йәһәннәмдән үҫеп сыға.

❁

Исраф – заманыбыҙҙың иң бөйөк бәләләренең береһе. Шуларҙың бер сағылышы – ниндәйҙер әйберең булыуына ғорурланыу. Был популярлыҡ яулау ынтылышынан килгән ахмаҡлыҡ йәки донъя ялтырауыҡтарына мөкиббән китеү. Тамғаһы (логотибы) өсөн генә ҡиммәт итеп әйбер һатып алыу һәм быға байлыҡ, шөһрәт кәүҙәләнеше тип ҡарау – сиктән ашҡан иҫәрлек. Өҫтәүенә күпселек бындай ялтырауыҡтар (брендтар) - донъя залимдарының капиталы, һәм асылда ғафил мосолмандар үҙҙәренең аҡсалары менән залимдарҙы яҡлай булып сыға.

❁

Изге аятта әйтелә:

«Малын әрәм-шәрәм итеүселәр — шайтандың ҡәрҙәштәре» (әл-Исра (Төнгө сәфәр), 27).

❁

Сарыф итеү аҡылһыҙлығы, мин-минлек, материалистик һәм капиталистик донъя көйөнә ҡулайлашып, үҙеңдең көслө икәнлегеңде күрһәтергә маташыу кешеләрҙе, саптар ат кеүек, килем алыу ярышына этәрә һәм күберәк сарыф итергә мәжбүр итә. Барса нәмәнең ҡиммәте матди хаҡ менән үлсәнә. Донъяға бындай ҡараш рухиәтебеҙҙе ағыулай, намыҫыбыҙҙы тупаҫландыра, Аллаһ ҡолдарын Әхирәт тураһында оноторға, мәңгелек донъяға ҡарата һуҡыр булырға мәжбүр итә. Былар Аллаһҡа хәмед-маҡтауҙар, булғанына шөкөр итеү, ҡәнәғәтлек һәм күндәмлек кеүек рухи хозурлыҡ шишмәләрен ҡорота.

Ә бит һис ниндәй байлыҡ рухи хозурлыҡ алып килмәй. Аллаһтың биргәненә ҡәнәғәт булып, шөкөр итеп йәшәлгән ябай тормош аша ғына быға ирешеп була.

❁

Илаһи һынау булған милкеңде Аллаһ риза булғанса сарыф итеү – мәңгелек сәғәҙәт кпиталы, ә уны исраф итеү йәки һаранлыҡ, киреһенсә – мәңгелек бәхетһеҙлек сәбәбе.

❁

Һәр бер кеше һынау өсөн бирелгән байлығын нисек эшләп табыуы һәм уны нисек сарыф итеүе тураһында яуап тотасаҡ. Шуға күрә ерҙең уҡыу аудиторияһында милкеңде һәм байлығыңды дөрөҫ файҙаланыу – ул бөйөк сәнғәт. Уны үҙеңә генә сарыф итеү – исраф, үҙең өсөн генә йыйыу – һаранлыҡ.

❁

Хикмәт эйәһе әйткән: «Кеше үлгәндә, быға са һис ҡасан дусар булмаған ике бәхетһеҙлек ябырыла уға. Беренсенән, уның йыйған бөтә малын тартып алалар, ә икенсенән, бөтә малын тартып алһалар ҙа, нисек уларҙы эшләп табыуы һәм нисек сарыф итеүе тураһында һорау алалар».

❁

Сәғди Ширази шәйех әйткән:

«Һаран кеше, бик күп мәшәкәттәргә батып, аҡса йыя, ҡомһоҙланып, уларҙы һаҡлай, ә аҙаҡ, һағышҡа батып, уларҙы ҡалдырып китә».

«Мәғдән усағын ҡаҙып, алтын табырға була. Ә һарандың ҡулынан байлыҡ йәне менән бергә китә».

«Ике кеше бушҡа ғына хеҙмәт итә. Уның беренсеһе ғилем ала, әммә уға ярашлы ғәмәл ҡылмай. Икенсе ғүмер буйы донъя ниғмәттәрен эшләп таба, әммә уларҙан саҙаҡа бирмәй».

❁

Мөхтәрәм Ғәли (радыйаллаһу ғәнһү) әйткән: «Ниндәй ғәжәп һарандарҙың хәле. Был донъяла улар фәҡирҙәр һымаҡ йәшәй, ә киләһе тормошта байҙар һымаҡ хисап бирәсәк».

❁

Сәғди Ширази шәйех әйткән:

«Бер хикмәт эйәһенә һорау биргәндәр:

– Кем ул бәхетле һәм кем бәхетһеҙ?

Ул шундай яуап биргән:

– Бәхетле – ул ашай (кәрәгенсә сарыф итә) һәм сәсә. Ә бәхетһеҙ – үлгәндә ҡалдырып китә (йыйғанын сарыф итмәй).

❁

Изге аятта әйтелә:

«Шайтан һеҙҙе: «Фәкир буласаҡһығыҙ!» - тип ҡурҡыта. Һеҙҙе ул фәхешлеккә саҡыра (боҙоҡлоҡҡа, һаранлыҡҡа өндәй)...» (әл-Баҡара, 268).

Аллаһ Үҙ ҡолдарының һаран булыуын теләмәй. Һаранлыҡ – ул фәҡирлеккә төшөүҙән һәм Раббыға тейешенсә өмөт бағламауҙан килгән иман йомшаҡлығы. Аллаһ ҡоло Раббыһына һыйыныр урынға үҙенең фани байлығына һыйына һәм өмөт бағлай.. Үҙенә күрә байлығын ботҡа әйләндерә. Ә бит байлыҡты Аллаһ Тәғәлә бирә…

Иман эйәһе даимән Аллаһҡа һыйынырға, бары тик унан ғына ярҙам көтөргә, иман ҡыйыулығы менән нәфесен һәм шайтан үәсүәсә ҡылған мохтажлыҡҡа төшөү хәүефен еңергә тейеш.

❁

Яһилдең (джәһил) нәфесе һаран. Ул, үҙенең байлығын мәңгелек тип уйлап, уға сытырман йәбешә. Саҙаҡаларҙың милеккә бәрәкәт биреүе тураһындағы Аллаһ вәғәҙәһенә ҡолаҡ һалмай ул, саҙаҡаларҙың хәйерселеккә төшөрөүе тураһындағы шайтан үәсүәсәһен тыңлай.

Ә бит, ҡомһоҙланып, ни ҡәҙәр генә милкеңә йәбешеп ятма, тәҡдиреңә яҙылғандар һине урап үтмәй. Йәғни, әгәр ҙә ки Аллаһ Тәғәлә аманат итеп бир-

гән байлығын алырға теләһә, ғафил бәндәнең һаранлығы быға ҡамасаулай алмай.а

Сәғди Ширази шәйех әйткән:

«Мин бер мөршидтең (рухи остаздың) мөритенә (уҡыусыһына) биргән шундай нәсихәтен ишеттем:

«Әгәр кешеләр ризыҡҡа сат йәбешкән кеүек, Ризыҡ биреүсе Аллаһ Тәғәләгә сат йәбешһәләр, фәрештәләрҙән дә өҫтөн булырҙар ине»».

❁

Милкебеҙҙәге барса нәмә – Аллаһ аманаты, йәғни һаҡларға ҡушылып бирелгән нәмә. Ул беҙгә ҡасан бирә һәм ҡасан ала – билдәле түгел. Шуға күрә милкебеҙ мәңге беҙҙә ҡаласаҡ, тип уйлау, Аманатты биреүсегә түгел, аманаттың үҙенә өмөт бағлау тигән һүҙ. Ә был инде ғәфү итеп булмай торған ғәмһеҙлек.

❁

Юныс Әмре, беҙҙең тирә-йүндәге ниғмәттәргә бағып, уларҙың Хаҡ Хужаһын күрмәгән, көҙгөләге сағылышына алданған һәм ғәмһеҙлеккә батҡан әҙәмгә шулай өндәшә:

Милек хужаһы, байлыҡ хужаһы,
Кем һуң уның хаҡ хужаһы?
Байлығың да ялған, милкең дә ялған.
Бер аҙ ирмәк тап уларҙан.

❁

Шуныһы ғәжәп: яһилдар Аллаһ биләмәһендә йәшәй, әммә уның Хаҡ Хужаһына битараф булып, нәфестәренең әсире булып ҡала. Улар илаһи ҡөҙрәт һәм көс ағымдыры ҡаршыһында иҫәр, битараф, һәм һөҙөмтәлә мәңгелек зыян күреүгә дусар.

Көн кеүек асыҡ булған илаһи хәҡиҡәттәрҙән баш тартҡан һәм үткенсе сағымдарға алданған ғәмһеҙлекте Нәжип Фазыл бик гүзәл тасуирлаған:

Күк донъяһын яҡын күрһә йәнем,
Күләгәһенә ерҙең абына аяғым...

❁

Мөхтәрәм Мәүләнә, йөрәгенең рухи байлыҡтарын фани донъя өсөн сарыф иткәндәр, Аллаһтың мөхәббәтенән мәхрүм ҡалғандар менән бәйле ғибрәтле ваҡиғаны миҫал итеп килтерә:

«Ер донъяһына йөрәген бағлағандар күләгәгә һунар иткән аусы менән бер. Күләгә кемдең милке була алһын? Ахмаҡ аусы ҡош күләгәһен ҡош, тип уйлаған һәм уны тоторға булған. Әммә ботаҡта ултырған ҡош та был иҫәрҙең ҡылығына аптыраған».

❁

Иманлы әҙәм барса байлыҡтарҙың Хаҡ Хужаһы булған Раббыбыҙ ышанып тапшырған аманатты һаҡлай. Ул үҙендә булған милекте, мөмкинлектәрҙе Аллаһ риза булғанса тотона, яуаплы казначей булып тора.

Казначейға аманат итеп бирелгән аҡсаға күңел бағлау – иҫәрлек. Уның берҙән-бер бурысы – булған аҡсаны хужалары ҡушҡанса сарыф итеү.

❁

Беҙ Аллаһ биргән һынау донъяһында йәшәйбеҙ. Ысынлап та, ғүмеребеҙ, милкебеҙ кемдеке? Кем бүләк иткән беҙгә уларҙы? Һаранланып, ни өсөн беҙ ул милекте йәлләйбеҙ?

❁

Беҙ был донъяға хужа булыр өсөн килмәнек, шаһит булыр өсөн килдек. Йәғни, матди байлыҡ йыйыр өсөн түгел, ә Аллаһтың ерҙәге шаһиттары һәм Ислам вәкилдәре булып, киләһе тормошобоҙға лайыҡлы булыу өсөн килдек. Шуға күрә был донъя ниғмәттәрен иманыбыҙ шаһиттарына әйләндереү, капиталыбыҙға милек итеп түгел, ә аманат итеп ҡарау лазым.

❁

Заманыбыҙ иҡтисадында таймшер тигән төшөнсә бар. Күп хужалы милектә билдәле бер ваҡыт арауығында хужаларҙың береһенең файҙаланыу хоҡуғын шулай атайҙар. Дин күҙлегенән сығып фекер йөрөткәндә, был донъяның бөтә матди байлыҡтары таймшерға ҡарай.

Хужалары – беҙ, тип иҫәпләп, ваҡытлыса бирелгән милекте хәйер-саҙаҡаға тотонмау – сиктән ашҡан иҫәрлек. Беҙ был фани донъяға, ваҡытыбыҙҙы әрәм итеп, юҡ-бар нәмәләр артынан сабыулап йөрөр өсөн ебәрелмәгән.

❁

Имам Шафиғи әйткән:

«Эй, ер донъяһын һәм үҙен ер донъяһының биҙәге, тип иҫәпләүселәр! Үлем бинаға ла, уны төҙөгәнгә лә килә… Бөйөклөгө ошо донъяла һәм уның биҙәктәрендә булғандар белһен: уның бөйөклөгө бер ни түгел, юғалыуға, сереп юҡҡа сығыуға дусар… Был донъяның хазиналары алтындан. Ә һин иман хазиналары, изге ғәмәлдәр, яҡшылыҡ йыйһың!»

Мәрхәмәт һәм шәфҡәттән мәхрүм цивилизациялар үҙҙәренең һауаланыу, мин-минлек һәйкәлдәрен һала. Ҡолдарҙы арыҫландарҙан өҙгөләтеү өсөн - ареналар, мәғәнәһеҙ һәм ҡырағай кәйеф-сафа өсөн төрлө ҡоролмалар төҙөй. Үҙҙәренең шанын, ҡеүәтен һәм бөйөклөгөн күрһәтер өсөн, аяуһыҙ алымдар ҡулланып, пирамидалар ҡора. Ялағайҙарҙың ялған маҡтауҙары, ләззәт биргән хуплауҙары уларҙың аяуһыҙлығын һәм мин-минлеген арттыра ғына бара.

Әммә бер көн улар алдына ла мәңгелек килеп баҫа. Күк тә, ер ҙә улар артынан илап ҡалмай. Бөгөн уларҙың һауаланыу, мин-минлек һәйкәлдәре хәрабаларына эттәр һәм ябалаҡтар һөйөнә. Ҫәмүд, Ғәд, Помпей тап шуларҙан…

❁

Был донъялағы кәферҙәрҙең, аҙашҡандарҙың, гонаһкәрҙәрҙең, ришүәтселеккә юл ҡуйғандарҙың рәхәт йәшәүенә ҡарап беҙ алданмаҫҡа, уларҙа булғандарға ҡыҙыҡмаҫҡа тейеш. Заманында Ҡарундың байлығына ҡыҙыҡҡандар, хазиналарына көнләшкәндәр, уның был фани донъянан нисек китеүен күреп, бик ныҡ үкенә, тәүбә итә.

❁

Мөхтәрәм Ғәли (радыйаллаһу ғәнһү) әйткән:

«Аллаһ дуҫтары был донъяның хәҡиҡи асылын күрә, ә ҡалғандар – тышҡы яғын ғына».

❁

Һәммә байлыҡтың хәҡиҡи Хужаһы Аллаһ аманатты насар һаҡлаусыларҙы һөймәй, йәғни ниәттәре боҙоҡ булғандарҙы һәм үҙен берҙән-бер хужа тип иҫәпләгәндәрҙе. Йәнәбе Хаҡ, эштең асылын аңлаһын өсөн, ундай кешегә яза бирә. Ғүмер һөрөп, быны аңламағандар уны ҡәберҙә аңлай, хатта энә лә үҙенеке булмауын ныҡлап төшөнә! Зыяраттар… Нисә триллион кеше унда буш ҡул менән ята. Фани донъянан алып киткәндәре бары бер кәфен. Уныһы ла серей, юҡҡа сыға. Үҙен хужамын тип һанаған һис нәмәһе уныҡы түгел.

Оноторға ярамай: беҙ бары тик яҡшы һәм яман ғәмәлдәребеҙ менән генә баҡыйлыҡҡа күсәбеҙ.

❁

Бер хикмәт эйәһе әйткән:

«Ниндәй ғәжәп! Ҡәберҙәгеләр тәүбә ҡылған нәмәләр өсөн иҫәндәр бер-береһен ашарға әҙер!».

Ҡәбер әһелдәре яҡшы төшөнә: беҙ был фани донъяла үҙебеҙҙеке итергә теләгән нәмәләр – һис бер файҙаһы булмаған теләк кенә. Әммә эш үткән!

Иман эйәһенә киләһе нәсихәтте онотмау лазым.

Тәнде ҡәбергә һалғас, уны ҡорттар ашап бөткәнгә саҡлы, туған-тыумаса ҡайғы уртаҡлаша. Вариҫтар милекте бүлешә башлағас, тән боҙола башлай. Был процестар параллель рәүештә бара һәм бер мәл тамамланып ҡуя. Бер яҡтан, тән ергә әйләнеп юҡҡа сыға, икенсе яҡтан, бәндәнең бөтә тупланмаһы бүленеп бөтә. Быларҙы хайран ҡалып күҙәткән йән, тупланған, әммә сарыф ителмәгән милек өсөн яуап тоторға тура киләсәген төшөнөп, бошона, ҡулын тубығына һуғып алғыһы килә. Әммә инде уның ҡулы ла, тубығы ла юҡ! Бары ғәмәлдәре генә тороп ҡалған… Ә тәкүәлек һәм был донъяла ҡылынған изге ғәмәлдәр – киләһе бәхетле тормош өсөн берҙән-бер капитал.

❁

Фани донъя хаяты – кәртәләр менән тулы сәфәр, илаһи имтиханды бирер өсөн, улар аша үтә белергә кәрәк.

Ҡайҙа юл тотҡандарын онотҡандар, был донъя ҡунаҡтары өсөн әҙерләнгән биҙәктәр, фани донъяның ялған ялтырауыҡтары менән артыҡ мауығып, баҡыйлыҡ сәфәренә әҙерләнеүҙән ғафил. Өс көнлөк донъя мәшәкәттәренә башкөллө сумып, улар енәйәтсел рәүештә яйлай, һәм шул арҡала ҡәбер ғазабына дусар буласаҡтар, илаһи Үлсәү янында ауыр хәлдә ҡаласаҡтар, ә хисаптары ҡатмарлы буласаҡ.

❁

Күҙҙең яуын алып әсир иткән, ғүмерҙе үҙенә бағышларға мәжбүр итән был донъя баҙарының ваҡытлы тауары ошонда ҡала. Әҙәм балаһы ҡәбергә барғанда ер донъяһынан бары бер кәфен генә ала.

Ғүмерҙәрен нәфесенең теләктәрен, донъя һәүәҫлектәрен ҡәнәғәтләндереүгә сарыф иткән бәхетһеҙҙәр тураһында Аллаһ Тәғәлә әйтә: «михнәтле һәм йонсоуҙар» (әл-Ғәшийәһ (Бөйөк ваҡиға), 3).

❁

Хафиз Ширази әйткән:

«Кеше – бер тамсы ҡан һәм мең хафа».

Ысынлап та, кеше, уның тәне ит һәм һөйәктән тора. Әммә уның эске донъяһы – уҡмашҡан мең дә бер хафа: ризығың, һаулығың, киләсәгең өсөн хафаланыу, сикһеҙ хыялдар, пландар, ғәмәлдәр…

Әммә үлем сәғәте етеү менән, әйтерһең, былар һәммәһе бысаҡ менән телеп ташлана һәм юғалып барған күләгәгә әйләнә.

Тимәк, кешегә зарур:

– Был донъяның буш хазиналарына алданмау,

– Дусар булған фәкирлегеңә һәм мохтажлығыңа зарланмау,

–Буш һәүәҫлектәреңә өсөн мәңгелек тормошоңдо емермәү,

– Был фани донъяға мәңгелек күҙлегенән ҡарау,

– Йөрәгеңдә ваҡытлы хафалар зинданына әйләндермәү, Аллаһҡа өмөт бағлау һәм Уға күндәм булыу…

❁

Мөхтәрәм Ғәли (радыйаллаһуғәнһү) әйткән:

«Кәңәшкә өс кешене аяҡ баҫтырмағыҙ: һаранды, ҡурҡаҡты һәм һәүәҫлектәр ҡолон. Һаран, һеҙ ауырлыҡтарға һәм фәкирлеккә дусар булырһығыҙ тип, ҡылырға теләгән изге ғәмәлдәрегеҙҙән баш тартырға кәңәш бирәсәк. Ҡурҡаҡ һеҙҙең бөйөк эштәргә ынтылышығыҙҙы кәметәсәк. Ә һәүәҫлектәр ҡоло һәүәҫлектәрҙең бер ҙә насар булмауын күрһәтергә тырышасаҡ».

❁

Нәфес һәм шайтан, изге ғәмәлдәр ҡылыуға ҡамасаулап, бик етди сәбәптәр һәм дәлилдәр килтерәсәк. Мәҫәлән, саҙаҡа бирергә тейешле кеше әйтәсәк: «Теләнселәү гонаһ түгелме ни? Әгәр мин был һораған кешегә бирһәм, уны хәйерселәүгә этәрмәйемме?»

Бындай дәлилдәр хаҡ кеүек күренһә лә, улар ҡомһоҙлоҡҡа сәбәп була. Шуға күрә Муса Әфәнде (рахимәһуллаһ) кешеләрҙең мәрхәмәтлелек хисен эксплуатациялауҙары ихтимал булғандар тураһында ла әйтер булған:

«Нәфесеңдең һаранлығын еңер өсөн, әҙ булһа ла бирергә кәрәк…»

❁

Ниндәй ғибрәтле хәл!

Ҡасаҡтарға ярҙам итергә һаранланған, байлыҡтары менән бүлешергә теләмәгән күп кенә Европа илдәренә эпидемиялар осоронда аҡсаларын артығы менән сарыф итергә тура килде.

Ошоға бәйле Шәйех Сәғдитең ғибрәтле һүҙҙәре иҫкә төшә:

«Яҡшы көндәрҙә ярлыларҙы, бәхетһеҙҙәрҙе һәм мохтаждарҙы йыуатығыҙ! Уларҙың йөрәген яулау башығыҙға төшәсәк бәләләрҙән йолоп ҡалыр.

Әгәр мохтаж, хәленә зарланып, нимәлер һорай икән, биреген! Әгәр быны эшләмәһәгеҙ, залим килер һәм уны һеҙҙән көс менән тартып алыр».

❁

Йомартлыҡ – Аллаһ менән дуҫлыҡтың тәүге һәм кәрәкле шарты. Икенсе яҡтан, һаранлыҡ – рухи бәрәкәттәрҙән мәхрүм ҡалыуҙың төп сәбәбе.

Мөхтәрәм Мәүләнә был хәҡиҡәтте шулай тасуирлай:

«(Йәә Раббым!) Ҡолдарың күктәргә күтәрелһен өсөн, Һин ҡуйған серле баҫҡыстан һарандар һәм ғафилдар файҙа ала алмай.

Әммә ышаныслы, тәҡүәле һәм йомарт кешеләр рухы каруанына Һин күктәреңә алып барған ул баҫҡысты күрһәтәһең» (Диван-и Кәбир).

❁

Мөхтәрәм Ғәли (радыйаллаһу ғәнһү) әйткән:

«(Сарыф ителмәгән) милек – нәфес һәүәҫлектәренең сығанағы. Ә нәфес һәүәҫлектәре бәләләр асҡысы булып тора».

❁

Шәйех Сәғди әйткән:

«Кешегә, тәүге нәүбәттә, аҡыл һәм йөрәк кәрәк. Милек һуңыраҡ килә, сөнки ғафилдың милке һәм көсө Аллаһҡа ҡаршы һуғышта ҡорал булыуы ихтимал».

❁

Аллаһ ҡолоноң үҙ нәфесенә капитал иткән һәр ниғмәте асылда ниғмәт түгел, ә Әхирәт тормошон ғазапҡа әйләндергән рухи һәләкәт».

❁

Мөхтәрәм Ғүмәр (радыйаллаһу ғәнһү) әйткән:

«Ирекле йәшәү өсөн, фани донъя теләктәреңде кәмет! Үлемең еңел булһын өсөн, гонаһтарыңды кәмет!».

❁

Хөрмәтле Мәүләнә әйткән:

«Ваҡыт еткәс еңел генә ҡалдырып китер өсөн, байлыҡ һәм милек менән артыҡ мауыҡма. Ул саҡта еңел генә бирерһең һәм китерһең, сауабын да алырһың. Һине ныҡ Тотоусыға нығыраҡ тотон. Ул – Беренсе, һәм Ул - Һуңғыһы. Әгәр Уны табырға, тыныслыҡ ярына барып етергә теләһәң, йөрәк карабыңды батырған нәфесең һөйгән барса йөктө атып бәр».

❁

Имам Шафиғи әйткән:

«Фани донъяға мөхәббәтем һәм Аллаһҡа мөхәббәтем берҙәй яраша, тип әйтеүселәр ялғанлай».

❁

Пәйғәмбәребеҙ (салләллаһу ғәләйһи үә сәлләм) әйткән:

«Минең өммәтем (һәүәҫлектәренең ҡоло булып) фани донъяны артыҡ яҡын күрә башлаһа, унан исламдың бөйөклөгөн алырҙар. Улар яҡшылыҡҡа өндәүҙән һәм яманлыҡтан тыйыуҙан туҡтаһа, Изге Яҙманың фатихаһынан (йәғни Ҡөрьәнде аңлауҙан) мәхрүм ҡалырҙар» (Суюти, әл-Джәмиғү әс-Сәғир, №1610; Ғәли әл-Муттаки, Кәнз, III, 183/6070).

❁

Аллаһ Илсеһенә (салләллаһу ғәләйһи үә сәлләм) мосолмандар яулап алған ғәнимәт малының биштән бер өлөшө тейеш була. Әгәр теләһә, ул ифрат бай йәшәй алыр ине. Әммә Пәйғәмбәребеҙ (салләллаһу ғәләйһи үә сәлләм) фәкирлекте һәм заһитлыҡты хуп күрә, үҙ ихтыяжына уларҙың бик аҙын ғына тотона, ә ҡалғандарын хәйер итеп тарата. Шул рәүешле ул «агнийә-и шәкирин» үрнәген, йәғни «шөкөр итеүсе байҙар» үрнәген күрһәтә .

Һыуҙан башҡа өйөндә бер нәмә лә булмағанда, ул, шөкөр итеп һәм рәхмәтле булып, түҙемле фәкирҙәргә («фуҡара-и сабирин») тере үрнәк була».

❁

Хәҡиҡи тормош – баҡыйлыҡтағы мәңгелек тормош. Был фактҡа һуҡыр булып йәшәгән ғәмһеҙҙәр үҙҙәре ҡунаҡ ҡына булған фани донъя төйәгенең нығмәттәренә сат йәбешә. Милке уларҙы һаҡлар, хатта мәңгелек донъяла ла һаҡлар, тип уйлай улар. Әммә ер донъяһының иң асыҡ сифаты - тоғролоҡһоҙлоҡ.

Мөхтәрәм Мәүләнә әйткән:

«Ер донъяһы магнитҡа оҡшаш, ул бөтә һаламды үҙенә тарта, ә яҡшы бойҙай инә уның тартыу көсөнә буйһонмай».

❁

Үлемгә дусар һәр бер йән эйәһенең көс-кеүәте, йәшәү көсө, ваҡыт тирмәненең ташында даимән тартылып, бөтөүгә табан барыуына кеше нәсихәт алмаймы ни?! Әхирәт тураһында онотоп, нәфес һәүәҫлектәренә эйәреп, ваҡытлы тормош, ваҡытлы уйынсыҡтар менән мауығыу – мәңгелек һәм бөйөк киләсәк ҡашында ҡурҡыныс аҙашыу!

❁

Донъя – өлөгөрөп етмәгән рухтар өсөн һыу булып күренһә лә, ул алдатҡыс сағым. Өҫтөнә яһалма ялтырауыҡ һибелгән алмаға оҡшаш ул: тыштан ялтыр, матур, ә эсе – әсе, серек.

❁

Донъяның биҙәп күрһәтелгән ләззәттәре ҡоло булыу, ялған макияжға алданыу – бәхетһеҙлекте бәхет тип һанау ул.

❁

Фани донъя үҙе бер саҡ биргәнде мотлаҡ кире ала. Үҙенә күңел бағлағандарҙы ул бик тиҙ ҡорбан итә. Бер көн күтәрә, иртәгәһенә ҡоҙоҡ төбөнә ташлай. Ул күләгә кеүек. Уны тоторға уйлаһаң, ул ҡаса. Әммә унан ҡасырға уйлаһаң, ул һинән ҡалмай...

❁

Мөхтәрәм Мәүләнә әйткән:

«Фани донъя – аҡса, тауарҙар, ғаилә һәм балалар түгел, ул Аллаһҡа ҡарата ғафиллыҡ. Һине үҙенә ылыҡтырған, хәкиҡәтте инҡар итергә мәжбүр иткән бөтә нәмә – донъя».

Йөрәкте – Алллаһ Сүбхәнә үә Тәғәлә баҡҡан урынды – фани донъя һаҡлағысы урынына әүерелдерергә ярамай.

❁

Аллаһ Тәғәлә кешегә йөрәкте зекер, фекер, шөкөр менән тулы булһын өсөн, Раббыһы баҡҡан урын булһын өсөн биргән. Әгәр Аллаһ ҡоло йөрәген Уға бағышлаһа, Алллаһ Илсеһенә (салләллаһу ғәләйһи үә сәлләм) итәғәтле итһә, уны иман, ислам, ихлас менән тултырһа, донъя шөғөлдәре уға зыян һалмаясаҡ. Әммә ләкин бәндә фани донъяны һөйөү сәбәпле йөрәген юғалтһа, үҙенең Раббыһына ҡарата ғафил булһа, уның ғибәҙәттәрендә фәйез һәм руханийәт булмаясаҡ.а

Был донъялағы өлөшөңдө эҙләү менән мәшғүл булһаң, уға ғашиҡ булһаң, динең һәм намыҫың ҡушҡан бурыстарыңа һалҡын ҡараһаң, исраф ҡылһаң йәки һаран булһаң, тимәк һин фани донъя әсире.

Онотмаҫҡа кәрәк: аҡсаның урыны – янсыҡ, йөрәк түгел!

❁

Иман ныҡлығы, заһитлыҡ һәм тәҡүәлек – фани донъянан баш тартыу түгел, ә Сөләймән пәйғәмбәр (ғәләйһис-сәләм) шикелле уға һөйөүҙе йөрәгеңә индермәү.

Риүәйәттәр буйынса, бер ҡырмыҫҡа Сөләймән пәйғәмбәрҙең (ғәләйһис-сәләм) ендәрҙән, кешеләрҙән һәм ҡоштарҙан торған ғәскәрен күргәс, ҡәүемдәштәренә бойора:

«Сөләймәндең хакимиәте көслө, ул һеҙҙе тапап китәсәк! Үҙ төйәктәрегеҙгә ҡайтығыҙ!».

Сөләймән (ғәләйһис-сәләм), быны ишеткәс, әйткән:

« – Юҡ, минең хакимиәтем ваҡытлы ғына! Минең был донъялағы ғүмерем сикле. Тәүхид кәлимәһе алып килгән бәхет - мәңгелек!»

❁

Әгәр кешегә бөтә донъяны бирһәң, һәм ул мең йыл рәхәтлектәр, ләззәттәр эсендә хакимлыҡ ҡылһа, барыбер бер көн донъя ҡуясаҡ, ә булған барса ниғмәте барыбер ошо донъяла ҡаласаҡ. Аллаһҡа хәмд ҡылыу һәм фани ниғмәттәр ярҙамында Уның ризалығына ирешеү – был киләсәк донъялағы мәңгелек бәхет капиталы.

❁

Дөрөҫ файҙаланылған фани бәрәкәттәр – мәңгелек сәғәҙәткә ирешеү сараһы. Әммә сара булыуҙан туҡтаһа һәм маҡсатҡа әүерелһә, улар бәләгә әйләнә.

❁

Үҙ-үҙебеҙҙән һорайыҡ әле:

Яҡшы диплом алыу, юғары урын биләү, байлыҡ йыйыу кеүек нәфесебеҙгә оҡшаған маҡсаттар менән килдекме беҙ ергә? Ғәмһеҙлеккә батып, сәбәп булырға тейешле был ғәмәлдәрҙе ғүмеребеҙ маҡсатына әйләндермәнекме?!а

Шәйех Сәғди әйткән:

«Аҡса һәм байлыҡ уңайлы тормош көтөү өсөн, тормошобоҙ көсөргәнешһеҙ барһын өсөн кәрәк. Әммә ләкин ғүмеребеҙ маҡсаты байлыҡ һәм аҡса йыйыу түгел».

❁

Тәҡүә һәм ғариф заттарҙың донъя ниғмәттәре менән мөнәсәбәте карап һәм диңгеҙ мөнәсәбәтенә оҡшаш булырға тейеш. Диңгеҙ – караптың терәге. Әммә һыу уның эсенә үтеп инһә, ул уны батырасаҡ, ризыҡ киҫәге ише йотоп ҡуясаҡ. Ә инде карапҡа һыу инмәһә, ул имен генә йөҙөп китәсәк һәм теләгән еренә барып етәсәк.

Шулай итеп, диңгеҙ һыуы – һынау, ул бәрәкәт тә, бәлә лә булыуы ихтимал. Шуны төшөнә алғандар уны бәрәкәт буларағ файҙалана, ә быны аңлауҙан йыраҡ булғандар уның өйөрмәләрендә батып ҡала.

❁

Аллаһ Илсеһе (салләллаһу ғәләйһи үә сәлләм), йөрәктәрҙе тетрәтерлек хәүефен белдереп, өммәтен киҫәтеп ҡуйған:

«...Аллаһ менән ант итеп әйтәм, мин һеҙҙең өсөн фәкирлектән ҡурҡмайым, ә, һеҙгә тиклем йәшәп киткәндәргә килгән һымаҡ, был донъяның ниғмәттәренә ирешерһегеҙ ҙә, (һеҙгә тиклемгеләр һымаҡ) бер-берегеҙ менән ярыша башларһығыҙ һәм, был, уларҙы һәләк иткән һымаҡ, һеҙҙе лә һәләк итер, тип ҡурҡам!» (Бохари, Рикак, 7; Мөслим, Зуһд, 6).

❁

Аллаһ Тәғәләнән алған ниғмәттәребеҙ өсөн беҙ яуаплы. «Күберәк аҡса эшләгеҙ!» - тип Раббыбыҙ бойормай. Әммә ул шундай әмер бирә: «Хәләл юл менән аҡса эшләгеҙ һәм саҙаҡаға сарыф итегеҙ!».

Шул сәбәпле хәҙистәр донъя ниғмәттәрен артыҡ көҫәүҙең зыяны тураһында киҫәтә:

«Әҙ, әммә етерлек ризыҡ юлдан яҙҙырған байлыҡтан яҡшыраҡ» (Әхмәд, V, 197).

«Һеҙ шөкөрана ҡылған аҙ миҡдар һеҙ шөкөрана ҡылмаған байлыҡтан яҡшыраҡ» (Ибн Кәсир, Тәфсир, II, 388).

❁

Мөхтәрәм Мәүләнә әйткән:

«Һыуҙа, именлектә саҡта, туймаҫ ҡорһағы арҡаһында күпме балыҡ ҡармаҡҡа ҡаба!».

❁

Шәйех Сәғди әйткән:

«Ун ир бер табын артында тыныс ҡына аш ейә. Уларҙан айырмалы рәүештә нәфесенең көслө һәүәҫлектәренә эйәргәндәр үләкһәне бүлә алмаған ике эт ише. Ҡомһоҙға бөтә донъяны бирһәң дә, ул ҡәнәғәт булмаясаҡ. Ә булғанына ҡәнәғәт кеше ҡатҡан икмәккә лә шөкөр итә».

❁

Нәфес һис тә ҡәнәғәтләнмәҫ. Иман тәмен тойған мөьмин, тамағын туйҙырырлыҡ ризыҡ булһа, Аллаһҡа шөкөр ҡыла һәм хатта бүлешергә кеше эҙләй.

❁

Фәридуддин Аттар (рахимәһуллаһ) әйткән:

«Шөкөр итә белмәгәндәрҙе донъяның ниндәй ниғмәттәре байыта алһын?».

❁

Хәҙистә әйтелә:

«Байлыҡтың иң яҡшыһы – йөрәк байлығы» (Ибн әл-Асакир, Му'джам, I, 566)

Икенсе төрлө әйтһәк, хәҡиҡи байлыҡ ниғмәттәр күплегенә бәйле түгел, ә йөрәктең шөкөрана ҡылыу һәләтенә бәйле. Шөкөр итеү – иң бөйөк байлыҡ.

❁

Әхмәд ибн Хәнбәл әйткән:

«Иманлыға әҙ милек тә етә. Нәфес ҡолона хатта ҙур байлыҡ та әҙ».

Иман эйәһе милкен хәйер-саҙаҡаға сарыф итә, шуға күрә уның милке бәрәкәтле. Ә нәфес ҡоло һаранлығы һәм исраф ҡылыуы сәбәпле хафала, тыныслыҡ таба алмай.

❁

Нәфес ҡоло көршәккә оҡшаш: ҡарыны тулы булһа ла, уның ауыҙы ябылмай. Диңгеҙҙәрҙе көршәкләп һайығайтырға уйлаһағыҙ, ныйғандан артығын ул һыйҙыра алырмы?

❁

Шуны хәтерҙә тотоу кәрәк: донъя ҡомһоҙлоғо килемде арттырмай, ул күңел тыныслығын ала, рухиәткә зыян һала һәм милекте бәрәкәттән мәхрүм итә. Бәндә ни тиклем генә һаран булмаһын, ул тәҡдир ителгәнде генә ала.а

Йөрәгебеҙ киләсәк тормошҡа юл тотһа, фани донъя уға эйәрер. Әммә йөрәгебеҙ фани донъяны көҫәһә, фани донъя ла, мәңгелек донъя ла беҙҙеке булмаҫ...

❁

Пәйғәмбәребеҙ (салләллаһу ғәләйһи үә сәлләм) әйткән:

«Берәүҙең хәстәрлеге һәм маҡсаты киләһе тормош булһа, Аллаһ ҡәлбенә байлыҡ һалыр, эштәрен тәртипкә һалыр һәм был донъя уға кәмһетелгән хәлдә килер. Ә берәүҙең хәстәрлеге. маҡсаты фани донъя булһа, Аллаһ фәкирлекте

күҙ алдына урынлаштырыр, эштәрен көйһөҙләндерер һәм донъяуи нәмәләрҙән тәҡдиренә яҙылғандан тыш һис ни ала алмаҫ» (Тирмизи, Ҡиәмәһ, 30/2465).

❁

Шәйех Сәғди әйткән:

«Логика буйынса, ике нәмәнең булыуы мөмкин түгел: беренсеһе – тәҡдиреңә яҙылғандан артыҡ ашау, ә икенсеһе – тәҡдиреңә яҙылғандан алда үлеү».

Әгәр һеҙ ғафил кешегә бөтә донъяны бирһәгеҙ, ул һораясаҡ: «Ә Айҙа берәй биләмә юҡмы икән?». Нәфес теләктәренең иге-сиге юҡ. Шөкөрана, ҡәнәғәтлелек һәм рәхмәтлелек менән генә күңел тыныслығы килә.

❁

Көслө һәүәҫлектәр – күңел яман шеше. Аллаһ Илсеһе (салләллаһу ғәләйһи үә сәлләм) әйткән:

«Әгәр кешенең алтын тулы тотош бер үҙәне булһа, йәнә икәүҙе теләр ине, ерҙән башҡа уның ҡарынын бер нәмә лә тултыра алмай…» (Бохари, Рикак, 10).

❁

Бер ҡош та күршеһенән күберәк оя ҡорорға маташмаған. Ҡасыр өсөн өңөм берәү генә тип, бер төлкө лә ҡайғырмаған. Бер ҡыш урынына ике ҡышҡа етерлек сәтләүек йыя һәм наҡлай алманым тип, бер тейен дә хафанан үлмәгән. Ҡартлығыма етерлек һөйәк йыйманым тип, бер эт тә төнгө йоҡоһонан яҙмаған. Эй, кеше, әгәр бөтә тере йән эйәһе шундай өмөт һәм шөкөр халәтендә икән, ни өсөн һиндә шул тиклем ҡанмаҫ теләк?!

❁

Шафиғи имам әйткән:

«(Донъяуи) теләктәр һәм өмөттәр күҙе күргәндәрҙе һуҡырға әйләндерә».

❁

Әбү Хазим, тәҡүәлеләрҙән алдағы дәүер ғалимы, әйткән: «Фани донъя менән мауыҡҡан кешеләрҙең яҡын булыуы һау кешеләрҙе лә ауырыуға әйләндерә».

❁

Беҙ йыш ҡына үҙебеҙҙән хисаплама алырға тейеш:

– Аллаһ Тәғәлә бүләк итеп биргән нығмәттәрҙе файҙаланып, беҙ ни кимәлдә Уның ризалығына ирешергә теләйбеҙ?

– Аллаһ бүләк итеп биргән ниғмәттәр өсөн беҙ ни кимәлдә рәхмәтебеҙҙе белдерә алабыҙ?

– Аллаһҡа яҡынайыу өсөн, үҙебеҙҙә булған ниғмәттәрҙе файҙаланабыҙмы?

– Әллә ул ниғмәттәрҙе Раббыбыҙ Аллаһ менән үҙебеҙҙең арала пәрҙә итәбеҙме?!

❁

Мөхтәрәм Мәүләнә әйткән:

«Донъя ниғмәте – Аллаһ ҡапҡаны, уның ярҙамында Ул беҙҙе һынай. Ул беҙҙе иҫертә һәм алдай. Бына ни өсөн донъяны һөйөүселәрҙең күңел күҙе һуҡыр - улар бысраҡтан әсе һәм тоҙло һыу эсә».

❁

Мөхтәрәм Мухйиддин ибн Ғәраби былай тип раҫлай:

«Матди нәмәләргә күңел бағлағандар өсөн тормош диңгеҙ һыуын эсеү менән бер. Эскәндә улар сарсай, ә сарсағас, йәнә эсә».

❁

Шәйех Сәғди әйткән:

«Бәндә фани донъяға күңел бағлаһа, ул балға төшкән себен хәлендә ҡала».

❁

Әхирәтте онотоп, күңелен фани донъяға бағлағандарҙың хәле океан уртаһында рулһеҙ ҡалған караптыҡы ише – уны упҡын мотлаҡ һәләк итәсәк...

❁

Имам Шәфиғи әйткән:

«Сағым үҙен күргәндәрҙе алдаған, үҙенә ышанғандарҙың өмөтөн һүндергән кеүек, нәфес ынтылыштары, һәүәҫлектәре һәм донъяуи теләктәре менән күпме кеше һәләк булды».

❁

Зия паша бик күркәм әйткән:

«Ваҡыттың (фани донъяла булыуҙың) тыныслығы ла, алтыны ла, көмөшө лә юҡ.

Һәммәһен ҡалдырып, бәндә үлемгә юл тота».

Икенсе төрлө әйтһәк, асылда был фани донъяла алтын да, көмөш тә, башҡа әйберҙәр ҙә күңел тыныслығы бирмәй, сөнки баҡыйлыҡҡа сәфәр киткәндә, һуңғы һулышында, бәндә быларҙың һәммәһен артта торғоҙоп ҡалдыра һәм сәфәргә яңғыҙы ғына юллана!

Шулай итеп, был фани донъялағы иң бөйөк ғилем – ғүмеребеҙҙе һәм милкебеҙҙе Аллаһ юлында файҙалана белеү

ТӘСАУЫФ – ШӘРИҒӘТ – ИСТИҠӘМӘТ[11]

Мөхтәрәм Мәүләнәнең түбәндәге һүҙҙәре асылда уның тәсуыфҡа билдәләмәһе лә булып тора: «Әлегә тәнемдә йәнем бар икән, мин – Изге Ҡөрьән ҡоло, Мөхәммәт Мохтар (салләллаһу ғәләйһи үә сәлләм) һуҡмағындағы ер, аяғы аҫтындағы туҙан».

❁

Ҡөрьәнгә һәм Сөннәткә ныҡ тотоноу һәләте, уларға эйәреү, йәғни истиҡамәтле булыу – заманыбыҙҙың бөйөк мөғжизәһе.

ТӘСАУЫФ

– Тәүәлек ярҙамында йөрәк паклығына ирешеү.

– Нәфесте ауыҙлыҡлау һәм рухиәтте үҫтереү мәктәбе.

– Хаҡҡа итәғәтлелек сығанағынан эсеү һәм иманды ихсан кеүек юғары офоҡтарға күтәреү.

– Раббыбыҙ насип иткән тәҡдиргә риза булып, Аллаһтың дуҫы булыу сәнғәте. Шатлыҡлы хәлдәр булһынмы йәки ҡайғылы хәлдәрме, ниндәй генә көтөлмәгән хәлдәр килеп тыумаһын, зарланыу, мыжыуҙы онотоп, күңел тыныслығын юғалтмау, Аллаһтың яҡшы ҡоло булыу һәләте.

❁

ТӘСАУЫФ

– Аллаһ Тәғәләне ҡәлбең менән танып белеү сәнғәте.

– Был пакланыу фәне. Аллаһтан йырағайтҡан бөтә нәмәнән тайшанып, тәҡүәлеккә ирешеү юлы.

– Ул рухиәтте үҫтереү юлында даимән камиллашыу мәктәбе.

11. Истиҡамат — Аллаһ Тәғәлә ҡушҡан хәҡиҡәт юлынан барыу, Аллаһ Китабына һәм Уның Пәйғәмбәренең (салләллаһу ғәләйһи үә сәлләм) Сөннәтенә эйәреү.

– Ул нәфес теләктәренә ҡаршы солох мөмкин булмаған рухи алыш, сөнки нәфес – бөйөк тырышлыҡ менән генә тәрбиәләү мөмкин булған сер тулы көс.

❁

Мөхтәрәм Әбү-Хәсән Хәраҡани әйткән:

«Бөтә кешеләр менән – татыулыҡ, ә нәфес менән – һуғыш».

Икенсе төрлө әйтһәк, тәсауыф – бөтә кеше менән килешеп йәшәү һәм нәфес теләктәре менән көрәш.

❁

Тәсауыф – Ҡөрьән һәм Сөннә әмерҙәренә ярашлы, мураҡаба һәм мәрхәмәт менән Аллаһҡа иң гүзәл рәүештә хеҙмәт итеүгә ынтылыш.

❁

Тәсауыф – Аллаһҡа хеҙмәт итеүгә ҡамасаулаған бөтә кәртәләрҙе алып ташлау һәм шундай хеҙмәт сараларына бөтә шарттарҙы тыуҙырыу.

❁

Тәсауыфтың маҡсаты – эске яғы ла, тышҡы яғы ла берҙәй булған өлгөргән шәхес тәрбиәләү. Былар йөрәк һәм тән, һүҙ һәм ғәмәл гармонияһы өсөн кәрәк. Мәүләнә һүҙҙәре буйынса, был шуны аңлата: «йәки нисек бар шулай күренеү, йәки нисек күренһәң, шундай булыу».

❁

Тәсауыфты кәрәкһеҙ, тип һанау – ихласлыҡты, тәҡүәлекте, рухи хикмәтте (ғирфанды), нәфесте паклауҙы, бер һүҙ менән әйткәндә, Аллаһҡа ихлас хеҙмәтте (ихсанды) кәрәкһеҙ тип һанау ул.

❁

Исламдан рухи тәрбиә сараһы булған тәсауыфты айырыу - кешене «Аллаһты күреп торғандай хеҙмәт итеүҙән», йәғни «ихсан кимәлендәге ихлас хеҙмәттән» айырыу ул.

❁

Тәсауыф юлы – остаз тәрбиәһе (иршад) юлы. Йөрәгеңде рухи төйәккә әйләндереү тигән һүҙ ул. Ул төйәктә тәүбәгә килгәндәрҙең һәммәһенә лә урын бар: итәғәтһеҙҙәргә лә, гонаһкәрҙәргә лә. Остаз йылы ҡосағын һәммәһенә аса, сөнки ул һидәйәт юлы төйәге, камиллашыу төйәге. Бындай төйәк – һәр мөьминдең мәрхәмәтле йөрәге, сөнки ундай йөрәк һәр яратылмышҡа Яралтыусы-быҙҙың мәрхәмәте аша ҡарарға өйрәнгән...

Бер бысаҡ та үҙ һабын ҡырҡа алмай. Бер хөкөмдар ҙа үҙ-үҙенә хөкөм сығара алмай, уға башҡа берәү кәрәк. Шул сәбәпле һис бер иман эйәһе үҙен яҡшымын, тип уйларға, үҙем белгән юл менән барам, тип уйларға тейеш түгел. Ул, үҙ халәтен истиҡамәт көҙгөһөндә тикшерергә һәм хаталарын төҙәтергә тырышырға тейеш. Истиҡамәт көҙгөһө иһә – Ҡөрьәндең тере тәфсире булған Пәйғәмбәребеҙ (салләллаһу ғәләйһи үә сәлләм) һәм шулай уҡ уның нурлы эҙенән тайпылмай атлау өсөн бөтә көсөн һалған камил остаз (мөршид әл-камил).

❁

Тәсауыф – Аллаһтың ҡушҡандарын үтәп, тыйғандарынан тыйылып йәшәргә ынтылыу, йәғни, хис-тойғоларыңды тәрбиәләп, камил рәүештә шәриғәткә таяныу. Аллаһ ҡоло нимәлер уҡып ҡына камиллыҡҡа ирешә алмай. Ул, халәтен һәм йөрәк донъяһын бөтә яманлыҡтан аралап, камиллыҡҡа ирешә. Уның өсөн тәсауыф - таҙа, саф ҡәлб менән шәриғәт буйынса йәшәргә ынтылыу ул.

❁

Әхлағыбыҙ Аллаһ Илсеһенең (салләллаһу ғәләйһи үә сәлләм) әхлағына әйләнгән һәм Ҡөрьән бәрәкәте һәм рухиәтенән үҙ насибын алған һүрәттә генә йөрәгебеҙ билдәле кимәлгә күтәрелә аласаҡ. Изге Китабыбыҙҙағы хикмәт һәм хәҡиҡәттәрҙе аңламай тороп, рухиәт юлынан алға китеп булмай.

❁

Тәсауыф – шәриғәткә ярашлы иң күркәм рәүештә йәшәү өсөн, йөрәгеңде тәрбиәләү.

Әгәр кеше ғибәҙәттәрендә, башҡа кешеләр менән мөнәсәбәттәрендә, әхлағында һәм йәшәү рәүешендә шәриғәт критерийҙарына таянырға ынтылмай икән, унан тәсауыф юлында алға китеүҙе көтөүҙән мәғәнә юҡ.

❁

Ҡөрьән һәм Сөннәт критерийҙары - ислам бинаһының нигеҙе. Әгәр бина нигеҙе ныҡ түгел икән, уны нисә ҡат итеп кенә күтәрмә, ер тетрәү менән ул емереләсәк. Ныҡлы бинаны көсһеҙ нигеҙгә һалып булмай. Шуның кеүек рухи үҫешебеҙ өсөн дә Аллаһҡа хеҙмәтебеҙ Ҡөрьән һәм Сөннәткә нигеҙләнгән булыуы мотлаҡ.

❁

Ҡөрьән һәм Сөннәт – истиҡамәттең иң камил көҙгөләре. Үҙ халәтен күҙәтеп тороу һәм хаталарын төҙәтеү өсөн, иманлы әҙәмгә даимән уларға ҡарау зарур.

Исламға һөйөү, иман һоҡланыуы (вәджд) һәм ләззәт менән эйәреү өсөн, тормошобоҙҙоң бөтә өлкәләрендә Ҡөрьән һәм Сөннәткә буйһоноу кәрәк.

Үле тән матурлығын, һөйкөмлөлөгөн юғалтҡан кеүек, Ҡөрьән һәм Сөннәттән алыҫ булған тормоштоң да мәғәнәһе, ҡиммәте юҡ.

❁

Мосолмандың иң төп бурысы – Ҡөрьән һәм Сөннәткә ярашлы ғүмер итеү. Бәхеткә, именлеккә бынан башҡа юл юҡ. Ҡалған юлдарҙың һәммәһе тоҡон юлдарға, яңылыш адрестарға алып барыусы ҡараңғы юлдар.

❁

Тәсауыф тәрбиәһенең асылы шунда: һәр бер эске һәм тышҡы халәтебеҙ, тәртибебеҙ менән Аллаһ Илсеһе (салләллаһу ғәләйһи үә сәлләм) менән берлеккә ынтылыу, уның әхлағы менән әхлаҡланыу.

❁

Хәҡиҡи тәсауыф – иң юғары кимәлдә Ҡөрьән һәм Сөннәт принциптарын, йәғни тәҡүәлек һәм ихласлыҡ критерийҙарын тормошҡа ашырыу.

❁

Аллаһтың лайыҡлы ҡоло булыу өсөн, ислам принциптарын, юғарыға ынтылып, төрлө өлкәләрҙә тормошҡа ашырыу шарт. «Мин мосолман!» - тип әйтеү генә аҙ. Ҡөрьәндә 258 урында төрлө формала беҙгә тәҡүәлек хаҡында әйтелә.

❁

Әгәр мөьмин, бер йүнәлештә генә түгел, төрлө фронттарҙа нәфесе менән көрәште дауам итһә, ул уңышҡа ирешә аласаҡ. Икенсе һүҙ менән әйтһәк, иман, ғибәҙәт, әхлаҡ, башҡа кешеләр менән мөнәсәбәт, йәмғиәттә үҙ-үҙеңде тотоу кеүек тормошобоҙҙоң нигеҙен тәшкил иткән бөтә өлкәләрҙә лә тәҡүәлек критерийҙарына эйәреү лазым.

❁

Мәрхүм Муса Әфәнде (рәхимәһуллаһ) үҙенә рухи дәрес алырға килгәндәргә, уның Аллаһҡа яҡынлығын белергә теләп, тәүҙә түбәндәге һорауҙарҙы биргән:

– Һеҙҙең матди һәм рухи хәлегеҙ ниндәй?

– Һеҙ нимә менән көн күрәһегеҙ? Алған килемегеҙ хәләлме? Һеҙ процент-тар менән эш итәһегеҙме? Һеҙ ниндәйҙер рәүештә харам һәм мәкрүһ нәмәләр менән бәйле түгелме?

– Әгәр һеҙ дәүләт хеҙмәтендә икән, эшегеҙҙе еренә еткереп, дөрөҫ итеп башҡараһығыҙмы? Эш ваҡытын дөрөҫ файҙаланаһығыҙмы? Илке-һалҡылыҡ, протекция, ришүәтселек кеүек бәләләрҙән һаҡланаһығыҙмы?

– Әгәр һеҙ һатыусы икән, сауҙағыҙ нисек бара? Сауҙағыҙҙа кәмселектәр бармы? Ялғандан, көслөк менән алыуҙан, ҡара баҙарҙан һәм башҡа шундай харамдарҙан һаҡланаһығыҙмы?

– Алғанығыҙ һәм һатҡанығыҙ хәләлме, әллә ул Аллаһ тыйған нәмәләрме?

– Әгәр ҡуртымға биргән күсемһеҙ милкегеҙ булһа, һеҙ уны ниндәй эш өсөн бирәһегеҙ? Ул тәңгәлдә килемегеҙгә ҡанундарға ҡаршы килгән йәки шикле нәмәләр ҡатнашмаймы?

– Әгәр һеҙ эшкә яллаусы икән, хаҡтан, ҡанундарҙан ситкә сыҡмайһығыҙмы? Ҡулығыҙ аҫтындағыларҙың хаҡына кермәйһегеҙме? Хеҙмәткәрҙәрегеҙгә эш хаҡын уларҙың «тире кипкәнсе» бирәһегеҙме?

– Әгәр мөмкинлегегеҙ булһа, зәкәт, ғөшөр, саҙаҡа, хәйриә эштәренә ни кимәлдә йомартһығыҙ?

– Һеҙ кем менән дуҫһығыҙ? Салих заттарға, тәҡүәләргә яҡынһығыҙмы һәм ғафилдарҙан, гонаһкәрҙәрҙән йыраҡ тораһығыҙмы?

– Ғаилә тормошоғоҙ ниндәй хәлдә? Ғаилә ағзаларығыҙға илаһи хәҡиҡәттәр тураһында нәсихәт бирәһегеҙме? Был йәһәттән уларға яҡшы үрнәк күрһәтәһегеҙме?

– Ата-әсәгеҙ менән мөнәсәбәттәрегеҙ ниндәй? Уларҙың хаҡын һаҡлайһығыҙмы?

– Һеҙгә Аллаһ тарафынан аманат итеп бирелгән балаларығыҙҙы нисек тәрбиәләйһегеҙ? Фани тормоштан бигерәк балаларығыҙҙың мәңгелек тормошон ҡайғыртаһығыҙмы?

Ошо рәүешле Муса Әфәнде (рәхимәһуллаһ) үҙенән рухи дәрестәр алырға теләгәндәргә тәүге нәүбәттә уларҙың Ҡөрьән һәм Сөннәткә ярашлы йәшәүен талап итеп шарт ҡуйған. Кеше шул халәттә көн итә башламай тороп, ул уны уҡытырға алмаған. Уның фекеренсә, ҡунаҡҡа биргән рәхәт-лукум ише ерле-юҡҡа таныҡлыҡ бирегү дөрөҫ түгел.

Тәсауыфтың маҡсаты – Аллаһҡа хеҙмәт юлында шәриғәтте иң камил рәүештә тормошҡа ашырыу. Икенсе төрлө әйтһәк, илаһи әмер-тыйыуҙарҙы еренә еткереп үтәү.

Ислам – бер бөтөн. Уның бер өлөшөн ҡабул итеп, икенсе өлөшөн ҡалдырыу йәки ҡабул итмәү йөрәктәге иман йомшаҡлығынан килә. Аллаһтың яҡшы ҡоло булыу өсөн, тормошобоҙҙоң бер өлкәһендә лә исламды оноторға ярамай. Бигерәк тә эшебеҙҙә, ғаилә тормошобоҙҙа, кешеләр менән мөнәсәбәттәребеҙҙә был хаҡта иҫтә тотоу лазым – улар һәммәһе беҙҙең өсөн бөйөк имтихан... Ислам – билдәле ваҡытҡа, урынға бәйле йола түгел, ә тормошобоҙҙоң һәр мәлен тура юлға ныҡлы көйләүсе тәртип.

❁

Аллаһ Илсеһе (салләллаһу ғәләйһи үә сәлләм), рухиәттең иң юғары дәрәжәһенә күтәрелһә лә, Аллаһ алдындағы бурыстарын һуңғы һулышына тиклем бик ентекле үтәй. Шуның кеүек һәр мөьмин, ниндәй генә рухи дәрәжәлә булмаһын, ниндәй генә мәҙһәбтә, мәшрабта йәки тәриҡәттә тормаһын, дини бурыстарын тулыһынса үтәргә тейеш.

❁

Әгәр диндең тәрән рухи аспекттарын ситкә алып ташлаһаҡ, тәсауыфтағы йөрәк таҙалығын тәьмин иткән мәғрифәттән, тәҡүәлектән баш тартһаҡ, ҡоро ҡағиҙәләр йыйылмаһы ғына ҡала. Быныһ менән рәттән беҙ шуны ла күрәбеҙ: беҙҙең көндәрҙә тәсауыф рухиәтен танып белдек тип иҫәпләгән ҡайһы бер төркөмдәр шәриғәт ҡанундарында йәшерен (батыни) мәғәнә бар, тип иҫәпләй. Диндең тышҡы (заһири) ҡағиҙәләрен һанға һуҡмау сифаты уларҙың тәсауыф хәҡиҡәтенән йыраҡ тороуы тураһында һөйләй.

«Әгәр ҡәлбең пак икән, ғибәҙәткә ихтыяж юҡ!», - тип әйтеүселәр нәфескә ташлама яһау өсөн ишек аса. Быныдай кешеләрҙең шәриғәт хеҙмәтсеһе булған тәсауыф менән һис бер уртаҡлығы юҡ.

❁

Шуны онотмайыҡ: Ислам – рецепт, мәңгелек хозурлыҡ рецебы. Беҙ рецепт алдыҡ, әммә рецептта яҙылғандарҙы теүәл үтәмәһәк, шифаланмаһаҡ, аптырашта ҡалып: «Ни өсөн беҙ һауыға алмайбыҙ, ниңә еңеллек юҡ?» - тип әйтә алмайбыҙ.

Ҡөрьән һәм Сөннәт Хисап Көнөнә тиклем һауығыу һәм мәрхәмәтлелек рецепттары тәҡдим итәсәк. Ә һөҙөмтәһе инде уларҙы нисек файҙаланыуыбыҙға бәйле.

❁

Мөьминдең һәр аҙымы Ҡөрьән һәм Сөннәткә тап килергә тейеш. Әгәр ниндәйҙер өлкәлә кешеләр ислам ҡанундарына иғтибар итмәй икән, Аллаһ ул

өлкәне рәхмәтенән мәхрүм итә. Уларҙан тыныслыҡ, бәрәкәт китә, матди һәм рухи проблемалар башалана.

❁

Ҡөрьән һәм Сөннәткә ныҡ тотоноу һәм уларға эйәреү һәләте, йәғни истиҡамәт – заманыбыҙҙың бөйөк мөғжизәһе.

❁

Мөхтәрәм Йософ Хамәдани әйткән:

«Кеше дин һәм шәриғәт юлынан бармаһа, хатта көнөнә мең мөғжизә (кәрәмәт) күрһәтһә лә, ул шайтанға эйәргән булып сыға!»

«Кеше Сөннәткә ҡаршы килгән нәмәгә ышана икән, хатта ки донъяның бөтә ғилемдәрен ятлап алһа ла, ул фетнә башлығы ғына!»

❁

Мөхтәрәм Әбү әл-Хәсән Харҡани әйткән:

«Диндә ике кеше тыуҙырған фетнәне хатта шайтан да булдыра алмай: (донъяуи эштәре һәм һәм нәфесе менән бәйле) тәкәббер ғалим һәм (дини) ғилемһеҙ наҙан суфый!»

❁

Дини битлек кейгәндәрҙе, дингә һәм ислам динен тотоусыларға зыян һалғандарҙы асыҡлауҙың төп критерийы - Ҡөрьән һәм Сөннәт. Джунәйд Бағдади әйткән: «Хатта ки һауала осоп барған кешене күрһәгеҙ ҙә, әммә үҙен тотошо Ҡөрьән һәм Сөннәткә тап килмәһә, был ялған мөғжизә (истидрадж)».

❁

Иман эйәһенә тәүҙә хәҡиҡәт асылын һәм дөрөҫлөктө Ҡөрьән һәм Сөннәт буйынса өйрәнеү зарур. Аҙаҡ ул, шул критерийҙарға таянып, юл күрһәтеүсенен табырға, Ҡөрьән һәм Сөннәт буйынса йәшәргә ынтылырға тейеш. Ҡөрьән һәм Сөннәткә таянмаған кешегә хатта ки хаҡ камил мөршид тә файҙа бирә алмаясаҡ.

❁

Бер ниндәй законлы маҡсатҡа законһыҙ саралар менән ирешеү мөмкин түгел. Шул сәбәпле берәү, изге маҡсатҡа хеҙмәт итеүе тураһында белдереп, Аллаһтың әмер-тыйыуҙарын боҙоу мөмкин тип иҫәпләй икән, ул бер нисек тә тәҡүәле һәм күндәм була алмай.

Аллаһ Илсеһе (салләллаһу ғәләйһи үә сәлләм) әйткән:

«Мосолман, Аллаһҡа итәғәтһеҙлек хаҡында фарман ғына булмаһа, (үҙ хакимын), окшаһа ла, окшамаһа ла, тыңларға һәм буйһонорға тейеш. Әгәр инде Аллаһҡа буйһонмауҙы талап итеүсе фарман булһа, тыңламаҫҡа йәки буйһонмаҫҡа тейеш» (Мөслим, Имара, 38).

❁

Мөьмингә Ҡөрьән һәм Сөннәтте һәр мәсьәләлә хәҡиҡәттең берҙән-бер сараһы итеп ҡарау лазым. Үҙе буйһонған кешеләрҙән килгән фармандарҙы, күрһәтмәләрҙе, өгөт-нәсихәтте лә шул хәҡиҡәткә ярашлы баһалау зарур. Ниндәй генә хәлдәр килеп тыумаһын, ул хәҡиҡәткә эйәрергә һәм ялғандан (батылдан) алыҫ торорға тейеш. Белергә тейеш: ялғанға буйһоноу – хәҡиҡәткә ҡаршы сығыу. Ҡөрьән һәм Сөннәткә ҡаршы булған әмергә буйһоноу, кем генә уны бирһә лә, ул исламға ҡаршы сығыу. Был осраҡта кеше түгел, ә ислам билдәләгән ҡанундар мөһим.

❁

Раббыбыҙға итәғәтһеҙлектә һис бер яратылмышҡа эйәрергә, буйһонорға ярамай. Ғибәҙәттәр – тик бер Раббыбыҙ Аллаһҡа.

Мәҫәлән, ислам буйынса, ата-әсәгә буйһоноу лазым. Әммә улар баланы Аллаһ тыйған нәмәләрҙе ҡылырға мәжбүр итһә, буйһоноу ярамай. Әйтәйек, ғафил ата һәм әсә ҡыҙын яулыҡ ябыныуҙан тыйһа, уларҙы тыңлау кәрәкмәй. Был осраҡта уларҙы тыңламаған ҡыҙ бала гонаһлы булмай. Киреһенсә, Аллаһҡа итәғәтлелеге өсөн ул сауап ала.

❁

Аллаһ Илсеһе (салләллаһу ғәләйһи үә сәлләм) үҙенең Хушлашыу вәғәзендә өммәтенә уларҙы аҙашыуҙан аралаясаҡ ике аманат ҡалдырыуы тураһында әйтә: улар - *«Көрьән һәм Сөннәт».*

Ошо ике нигеҙгә ҡаршы булған һәм әһәмиәт бирмәгән кешеләргә, ойошмаларға һуҡырҙарса бәйлелек һис тә тоғролоҡ һәм күндәмлек түгел, ә иман йомшаҡлығы!

❁

Яҡшыларҙы күрмәйенсә, айырым яман миҫалдар килтереп, һәммәһен инҡар итеү – шул яман ғәмәл ҡылыусылар золомон бүлешеү булып тора. Мәҫәлән, ҡайһы бер врачтар үҙ бурыстарына һалҡын ҡараған өсөн генә медицинаны инҡар итергә ярамай. Шулай уҡ, ҡайһы бер халыҡ майын имеп йөрөгән юристарға ҡарап, тотош юриспруденцияһан баш тартыу ҙа - аҡылһыҙлыҡ. Тап шул рәүешле кешеләрҙең дини хис-тойғоларын эксплуатиялауҙарына ҡарап, тәсауыф юлынан барыусыларҙы, бөтә тәриҡәтте ғәйепләү ярамаған эш.

Шәйех Сәғди әйткән:

«Мин бер бәҙәүизе күрҙем. Ул улына шулай тине: «Эй, улым! Хисап көнөндә һиңә: «Һин ниндәй ырыуҙан?» - тигән һорау бирмәйәсәктәр, ә әйтәсәктәр: «Һин нимәгә эйә булдың?» Икенсе һүҙ менән әйтһәк, атайыңдың кемлеге тураһында түгел, ғәмәлдәреңә хаҡында һораясаҡтар…»

❁

Бөгөн, ҡыҙғанысҡа ҡаршы, наҙан кешеләр араһында шундай ҡараш йәшәй: «Мин фәлән-фәлән кешенең сабыуына йәбешермен дә, ул мине мәңгелек донъяла ҡотҡарыр...». Әммә ул сабыуына тотонорға ниәтләгән кешенең иман менән үлеренә гаратия бармы?! Юғары дәрәжәгә күтәрелгән, хатта ки кешеләрҙең донъялыҡта ҡыласаҡ ғәмәлдәре яҙылған Ләүхелмәхфүз таҡтаһын уҡый алған, әммә, нәфесенән еңелеп, мәңгелек зыянға дусар булған Бәлғам бин Баураны беҙ һис ҡасан онотмаҫҡа тейеш. Аллаһ ҡоло, ниндәй генә юғары дәрәжәгә күтәрелмәһен, үҙенең һуңғы нүлышы ниндәй булырын белергә һәләтле түгел. Ул һәр ваҡыт Раббыһының мәрхәмәтенә мохтаж.

Шуға күрә, мәңгелек ҡотолоуға ирешеү өсөн, бөтә көсөңдө һалып Аллаһ юлында хеҙмәт итеү, Йәнәбе Хаҡтың ризалығын, рәхмәтен эҙләү урынына фани яратылмыштарға өмөт бағлау – иң бөйөк аҙашыу.

❁

Ҡайһы бер ғафил әҙәмдәр, остазы итеп һайлаған кешегә мөхәббәттә хаттин ашып, наҙандарса хәбәр һөйләй: «Минең остазым һис ҡасан хаталанмай!». Был яңылыш ҡараш.

Күп риүәйәттәрҙә пәйғәмбәрҙәрҙән ҡала ерҙәге иң яҡшы кеше иҫәпләнгән Әбү Бәкер (радыйаллаһу ғәнһү) хәлиф булып һайланғас һөйләгән тәүге вәғәзендә Ҡиәмәткә саҡлы барса мосолман башлыҡтарына ориентир булырлыҡ һоҡланғыс критерийҙар килтерә. Ул әйтә: «Эй, кешеләр! Арағыҙҙа иң яҡшығыҙ булмаһам да, мине хәлиф итеп һайланылар. Әгәр дөрөҫ йүнәлеш менән барһам, әгәр бурыстарымды үтәһәм, ул саҡта миңә буйһоноғоҙ. Ә тура юлдан тайпылһам, мине төҙәтегеҙ. Аллаһҡа һәм Уның Илсеһенә буйһонһам, миңә буйһоноғоҙ! Әгәр буйһонмаһам, неҙ ҙә миңә буйһонмаҫҡа тейеш!».

Мосолман өммәтенең иң күркәм вәкиле шулай тип әйтә икән, унан үрнәк алырға тейеш булғандар үҙҙәрен ни дәрәжәлә баҫалҡы һәм кесе итеп тойорға тейеш һуң?

❁

Тәсауыф – күҙ буяу өсөн тейешле ҡиәфәт алып, ниндәйҙер донъяуи маҡсаттарҙы күҙ уңында тотоу түгел. Киреһенсә, түбән теләктәрҙән баш тартып,

ҡәлбеңдән донъяуи эҫенеүҙәрҙе алып ташлап, үҙеңдең зәғифлегеңде танып, Аллаһ ҡашына күндәмлек менән барып баҫыу, үҙеңдең «көсһеҙ ҡол» булыуыңды таныу.

Аллаһ алдындағы үҙ бурыстарын үтәгәндә, иман эйәһе үҙ халәтенә һәр ваҡыт иғтибарлы булырға тейеш. Ҡайһы бер наҙандар шикелле: «Мин шул остаздың уҡыусыһы, ул мине ҡотҡарасаҡ», - ише юҡ-бар хәбәр һөйләргә ярамай, сөнки бындай уйҙар тырышлыҡты һүндерә, асылда ундай уйҙарҙаң сығанағы нәфес булып тора.

Ҡайһы бер кешеләр Аллаһ юлында тырышлыҡ күрһәтеү урынына Мәһдиҙе көтә. Ә бит Хисап көнөндә ҡотолоу-ҡотолмауыбыҙ Мәһдиҙең килеүеүенә бер нисек тә бәйле түгел. Ҡасан һәм ҡайҙа ғына йәшәһәк тә, беҙҙе Аллаһҡа хеҙмәтебеҙ һәм Уның юлындағы тырышлығыбыҙ ғына ҡотҡарасаҡ.

Әгәр Мәһди беҙҙең заманда килһә, уның янында урын алыр өсөн, беҙ бөгөн үк тәкүә булырға тейешбеҙ. Әгәр күңелебеҙҙә шундай ниәт бар икән, ул киткәнсе баҡыйлыҡҡа күсһәк тә зыян булмаясаҡ. Әммә шундай тырышлығыбыҙ булмаһа, Мәһди беҙ йәшәгән заманда килгән һүрәттә лә, был беҙгә Әхирәттә ҡотолоуыбыҙ өсөн бер нәмә лә бирмәйәсәк.

❁

Изге ғәмәлдәр ҡылмайынса, Аллаһ юлында физакәрлек күрһәтмәйенсә, ауырлыҡтарға дусар булмайынса, әүлиәләргә яҡын булып ҡына ҡотолоуға өмөт бағлау – ғафиллыҡ. Мөхтәрәм Мәүләнә ундайҙарҙы киҫәтә:

«Әйтәйек, һин Муса (ғәләйһис-сәләм) таяғын ҡулыңа алыуға лайыҡ булдың, ти. Әммә йыланды барлыҡҡа килтереү, уны буйһондороу көсө һиндә бит юҡ».

«Әйтәйек, һин Ғайса пәйғәмбәрҙең (ғәләйһис-сәләм) кешеләрҙе терелтергә һәләтле һулышына эйә булдың һәм бының өсөн уның доғаһын беләһең, ти. Әммә, эй, ғафил! Һулышың менән үлектәрҙе терелтер өсөн, мөхәббәтең менән йән өрөр өсөн, һинең ауыҙың (гонаһһыҙ) Ғайса (ғәләйһис-сәләм) ауыҙымы ни?»

«Әйтәйек, һиңә мираҫ булып Ғәлиҙең (радыйаллаһу ғәнһү) Зөлфиҡар ҡылысы ҡулыңа эләкте, ти. Әммә ул ҡылысты ҡулланыу өсөн, Аллаһ Арыҫланы Ғәлиҙең (радыйаллаһу ғәнһү) көсө һиндә бармы?»

Бер һүҙ менән әйткәндә, **«һәр кемдең үҙе тапҡаны - үҙенә»** (ән-Нәджм (Йондоҙ), 39).

❁

Хөрмәтле Мәүләнә һәммәбеҙгә критерийҙар билдәләп әйткән:

«Әгәр Аллаһ юлында утҡа инеү талап ителә икән, утҡа инергә кәрәк. Әммә быны эшләр алдынан үҙеңде баһала – һиндә Ибраһим (ғәләйһис-сәләм) сифаттары бармы, сөнки ут уның сифаттары булғанды таный һәм уларҙы яндырмай!».

❁

Киләһе ваҡиға рухи тормоштоң асылына түгел, ә һүҙҙәргә, йөрәккә түгел, ә уның формаһына әһәмиәт биргән ғәмһеҙҙәргә нәсихәт биреү өсөн бик ғибрәтле.

Баязид Бистамиҙың уҡыусыларының береһе уға әйткән:

– Әфәндем, миңә бер нисә бөртөк сәсегеҙҙе бирегеҙ әле, бәрәкәт (табәррук) өсөн мин уларҙы гел үҙем менән йөрөтөрмөн.

Рухиәт тәрәнлегенә ирешеү өсөн, күҙгә күренгән нәмәләргә генә иғтибар биреү ярамағанлығын аңлатырға теләп, остазы былай тигән:

– Улым, кеше булмай тороп, Баязидтың тунына түгел, тиреһенә төрөнһәң дә, был һиңә бер файҙа ла бирмәйәсәк.

❁

Рухиәт юғарылығына кеше китаптар уҡып, нәсихәттәр тыңлап үрләмәй, ә уҡыған китаптарынан һәм ишеткән нәсихәттәренән тормошон яҡшы яҡҡа үҙгәтер өсөн үҙенә рецепт ала, Аллаһ юлында тырышлыҡ күрһәтә.

Тәсауыфтағы рухи камиллыҡ юлы (сайр-и сулүк) – һүҙ түгел, ә хәл. Аллаһтың тәкүәле ҡолдарының әхлаҡи сифаттарынан, халәтенән насибыңды алыу. Матур һүҙҙәрҙе, нәзәкәтле телмәрҙе һөйгәндәр һәм улар етә, тип уйлағандар яңылыша.

❁

Әүлиәләрҙең береһе әйткән: «Тәсауыф – халәт. Кем ҡулланған, белә».

❁

Юныс Әмре тәсауыфтың асылы ниндәйҙер дәрәжәгә эйә булыу, ниндәйҙер тышҡы үҙенсәлектәрҙә күренеү түгел, ә йөрәк халәтенә бәйле булыуын бик күркәм рәүештә асып һалған:

Дәрүиш булыу – сапан, салма кейеү түгел,
Ҡәлбе дәрүиш булғанға сапандың хәжәте юҡ.

❁

Сапан, салма кейеп кенә дәрүиш булһаҡ,
Сапан, салмаларҙы күпләп алған булыр инек!

Шәйех Сәғди әйткән:

«Хаҡ ғарифтар һәм заһиттар йөрәк хозурлығы һәм күңел шөкөрләгә өсөн аулаҡта ғибәҙәт ҡыла. Ә ғибәҙәт ҡылынырға тейешле мөйөштә ҡасып икмәк еймәй».

❁

Кеше тураһында дөрөҫ мәғлүмәт алыу өсөн, намаҙ ҡылғанын һәм ураҙа тотҡанын ғына күҙәтеп тороу етерлек түгел. Хәҡиҡи намаҙ бәндәне гонаһтарҙан һәм итәғәтһеҙлектән аралаған кеүек, хәҡиҡи ураҙа, мәрхәмәт һәм шәфҡәт менән тултырып, күңелде йомшарта; шуның кеүек хәҡиҡи тәсауыф та тышҡы формаға түгел, ә йөрәк халәтенә бәйле.

Әгәр кеше изге ғәмәлдәр ҡылмай, юғары әхлаҡҡа эйә түгел, Аллаһты танып белеүҙең (мәғрифәтуллаһ) бөтә тәрәнлеген үҙендә тоймай икән, ғибәҙәттәрендә ихласлыҡ, тормошонда тәсауыф принциптарына ярашлы паклыҡ һәм тәҡүәлек юҡ икән, суфый булып, суфый кейемдәрендә һәм символдары менән йөрөһә лә, бынан ғына ул рухи хикмәткә (ғирфан) эйә була алмай, тәҡүә лә, дәрүиш тә, мөрит тә, мөршит тә йәки хатта тәсауыф вәкиле лә булып китә алмай.

❁

Тәсауыф – әҙәм балаһының, «шәриғәт, тәриҡәт, хәҡикәт) һәм рухи танып белеү (мәғрифәт)» принцибы берлеген тормошҡа ашырып, теленең, күҙҙәренең, ҡулдарының, енес ағзаларының, бер һүҙ менән әйткәндә, бөтә халәттәренең, ғәмәлдәренең, бөтә асылының хужаһы булып тороуы тигән һүҙ. Әгәр шундай рухи камиллыҡ юҡ икән, был ҡоро оҡшарға тырышыу ғына, тышҡы форма һәм символдар кешене суфый яһай алмай.

❁

Дәрүиш булыу – рухиәттән мәхрүм, тәрән мәғәнәгә эйә булмаған символдарҙан һәм ғәмәлдәрҙән торған церемония йыйылмаһына эйәреү түгел. Дәрүиш булыу – ул ҡәлбеңде тәрбиә ҡылыу.

Хәҙистә әйтелгәнсә:

«Хаҡтыр, Аллаһ һеҙҙең ҡиәфәтегеҙгә һәм милкегеҙгә ҡарамай, әммә йөрәктәрегеҙгә һәм ғәмәлдәрегеҙгә ҡарай» (Мөслим, Бирр, 33).

❁

Иман эйәһе тормошоноң һәр өлкәһендә илаһи мөхәббәттең сикһеҙ алдан күреүсәнлегенә (фирасат) һәм күңел күҙе менән күреүгә (басират) мохтаж.

Юғиһә ул күҙгә күренгәндән уның асылына, форманан хәҡиҡәткә күсә алмаясаҡ.

❁

Тәсауыф – рухи асыштар (кәшф) һәм кәрәмәттәр эҙләп, иллюзиялар һәм күҙаллауҙар артынан сабыулау түгел, ә иланһи әмерҙәргә ярашлы тормош, һиҙгерлек һәм тәҡүәлеккә ирешеү, ҡәлбең үҫеше.

❁

Әбү Бәкер әл-Ҡаттани әйткән:

«Тәсауыф – ул әхлаҡ. Кем һинән әхлаҡи йәһәттән өҫтөн, ул рухи паклыҡ йәһәтенән да һинән өҫтөн».

❁

Әгәр рухи юлдағы кимәлебеҙҙе күрергә теләһәк, беҙгә халәтебеҙҙе һәм тәртибебеҙҙе анализлау зарур.

❁

Тәсауыф юлы рухи дәрестәрҙең һәм вирдтарҙың яйлап ҡатмарлана барыуы менән бәйле. Өҫтәүенә йөрәгең һиҙгерелеген һәм әхлағыңды юғары күтәрә барыу, иланһи гүзәл исемдәрҙең (исм-и джәмәл) ҡәлбеңдә сағылыш табыуын (таджәлли) көсәйтеү ҙә лазым.

Кешенең рухи һабаҡтары кимәле күтәрелә икән, һиҙгерлек, әҙәплелек кеүек сифаттары ла көсәйергә, йөрәге йомшарырға, мәрхәмәтлерәк, шәфҡәтлерәк булырға тейеш. Аллаһ юлы хеҙмәтендәге физакәрлек менән бергә рәхимлелек, түҙемлелек, кеше хәленә инә белеү кеүек сифаттар пәйҙә булыуы, шөкөр итә белеү һәм ҡәнәғәтлелек (рида) кеүек сифаттарҙың нығыныуы зарур. Кеше имандаш ҡәрҙәшенә үҙенә теләгәнде теләргә, башҡаларға ярҙам итергә һәм күңел йомшаҡлығына эйә булырға тейеш.

Бер һүҙ менән әйткәндә, рухи үҫештең төп күрһәткесе – кешенең халәте һәм тәртибе.

❁

Мөхтәрәм Ғүмәр (радыйаллаһу ғәнһү) алдында бер кешене маҡтағас, быны эшләгән кешенән ул өс нәмә тураһында һорай:

– Һин был кеше менән берәй заман күрше булып йәшәнеңме, уның менән сәфәр ҡылдыңмы, алыш-бирәш иттеңме?

Әңгәмәсеһе быларҙың һәммәһен инҡар итә. Яуап итеп Ғүмәр (радыйаллаһу ғәнһү) былай тип белдерә:

– Минең уйымса, һин мәсеттә уның башын һелкеп Ҡөрьән уҡып ултырғанын ғына күргәнһең!

Теге ир әйтә:

– Эйе, о Ғүмәр! Мин тап шуны күрҙем.

Шул саҡ Ғүмәр (радыйаллаһу ғәнһү) әйтә:

– Улайһа уны артыҡ күп маҡтама! Аллаһ ҡолоноң елкәһенә уның ихласлығы яҙып ҡуйылмаған бит.

Әгәр кешенең ғибәҙәттәрендә, кешеләр менән мөнәсәбәттәрендә, әхлағында һәм тормош көтөүендә Аллаһтың һәм уның Илсеһенең (салләллаһу ғәләйһи үә сәлләм) әмерҙәренә буйһоноуҙа һиҙгерлек юҡ икән, унан рухи үҫеш көтөп булмай. Был йәһәттән Ғүмәр (радыйаллаһу ғәнһү) билдәләгән критерийҙарҙы онотмау мөһим: «Кешенең намаҙына һәм ураҙаһына ҡарамағыҙ, ә шуларға ҡарағыҙ:

– Һөйләгәндә ул хаҡтан айырылмаймы?

– Уға ышанһалар, ул ышаныслы аҡлаймы?

– Донъяуи эштәр менән шөғөлләнгәндә, хәләл һәм харам мәсьәләләренә иғтибарлымы?»

НӘФЕСЕҢДЕ ТӘРБИӘЛӘҮ ҺӘМ ЙӨРӘГЕҢДЕ ПАКЛАУ

Затлы биҙәүестәрҙе бысраҡ ҡаптарҙа һаҡламайынса, ялтлап торған таҙа ҡумталарҙа һаҡлағаң кеүек, ҡәлб донъяһын да, улаһи рәхмәт сағылыш таба алһын өсөн, пак тотоу зарур.

❁

Йәнәбе Хаҡҡа тапшырыу мөмкин булған иң гүзәл бүләк – Уның Гүзәл исемдәре (исм-и джәмәл) кәүҙәләнеш табырҙай, ялтыратып ҡуйылғандай таҙа, нурлы һәм нескә йөрәк көҙгөһө.

Бәндә, нәфес йәшәйешенең мәғәнәһен, уның кешелә булыу маҡсатын, хәйләләрен һәм ҡорған ҡапҡандарын белмәйенсә, үҙен Раббыһына хеҙмәт итеүгә тейешенсә бағышлай алмай.

Шуға күрә әйтелгән бит: *«Үҙ нәфесең танып белгән – Раббыһын танып белгән»*.

❁

Аллаһ ҡоло фани ләззәттәрҙән ситләшмәй тороп, мәңгелек ләззәттәргә ирешә алмай. Был тап сабый балаларҙың һөттән баш тартҡас ҡына төрлө тәмле ризыҡтар ашауға һәм тормош ләззәттәренә өйрәнеп китеүе кеүек.

Шуға күрә рухи тәрбиә юлындағы тәүге аҙым – рухи үҫешкә ҡамасаулаусы нәфес һәүәҫлектәре йөгөнән арыныу.

❁

Нәфес ағасҡа оҡшаш. Өлгөрөп етмәгән емештәр ағасҡа ныҡ йәбешеп торған кеүек, өлгөрөп етмәгән кешеләр ҙә нәфес һәүәҫлектәренең әсире булып ҡала. Әммә өлгөргән емештәр ағастан ни рәүешле арынһа, камил иман эйәләре лә нәфес теләктәренән шулай арына һәм юғары донъяларға юл тота.

Кешенең асылына гонаһкәрлек тә *(фүджүр)* һәм тәкүәлек тә һалынған. Һәр кем алдында оло һынау тора: хайуани сифаттарҙан арыныу һәм үҙендәге фәрештәләргә хас гүзәл сифаттарҙы асыу, Аллаһ менән дуҫлыҡҡа юл ярыу.

❁

Ағас тамырына төшкән сир уның япраҡтарында, емештәрендә күренгән кеүек, йөрәк ғафиллығы һәм ҡатылығы кешенең халәтендә лә, тәртибендә лә күренә.

❁

Әгәр ағастың емештәре сирле кеүек күренһә, тимәк тамырҙарында ла нимәйҙер хәстәлек бар, һәм ул хәстәрлек күреүгә мохтаж. Был йөрәккә лә ҡағыла. Әгәр ул һәүәҫлектәр һәм нәфес теләктәре алдында көсһөҙ булһа, уға рухи һабаҡ алырға кәрәк. Юғиһә кешенең ғәмәлдәре һәм ғибәҙәттәре ҡабул ителмәйәсәк.

Тәсауыф –күңелде тәрбиәләү (тәзкиә нәфес), йөрәкте паклау (тәсфиә ҡәлб) һәм хозурлыҡҡа ирешеү.

❁

Әгәр стакан бысраҡ булһа, таҙа шишмә һыуы һалынһа ла беҙ уны эсербеҙме? Эсерҙән алда беҙ стаканды таҙартырға тейеш түгелме ни?

Тап шулай уҡ Ҡөрьәндән, хәҙистәрҙән, Ғаләмдәге илаһи ҡөҙрәт һәм көс кәүҙәләнештәренән насибыбыҙҙы алыр өсөн, йөрәкте матди булмаған бысраҡтан сафлау зарур.

Аллаһ Сүбхәнәһү үә Тәғәлә атрибуттары сағылыш таба алһын өсөн, йөрәкте паклау лазым.

Аллаһ Илсеһен (салләллаһу ғәләйһи үә сәлләм) яҡындан танып белеү өсөн дә йөрәктең таҙа булыуы кәрәк.

Йөрәк пак булған һүрәттә генә ислам әхлағы уның әхлағына әүереләсәк.

Йөрәк пак булған һүрәттә генә изге ғәмәлдәрҙән рухи энергия (фәйез) аласаҡ.

Тәсауыфтың маҡсаты – Аллаһ ҡолоноң эске донъяһын сафландырыу.

❁

Мөхтәрәм Мәхмүд Сәми Рамазануғлы Әфәнде әйткән:

«Тәүҙә яраны эрендән таҙарталар. Был ғәмәл ҡылынмай тороп, дарыу һөртмәйҙәр. Шифалы мазь һөрткән һүрәттә лә, унан файҙа булмаясаҡ».

Тимәк, тәүге нәүбәттә харамдан һәм гонаһтарҙан баш тартыу зарур, шунан һуң ғына изге ғәмәлдәр ҡылырға һәм сауап алырға ынтылырға була.

❁

Ғосманлылар дәүләтенең хоҡуҡ кодексы «Мәджәллә»лә әйтелә: «Зыян килтергән нәмәләрҙән баш тартыу файҙа килтергән нәмәләрҙән алда ҡылынырға тейеш».

Шул сәбәпле рухи тормошта иң тәүҙә рухи таҙалыҡ булдырыу, рухиәтеңде тәрбиәләү һәм ҡәлбеңде паклау лазым.

❁

Затлы биҙәүестәрҙе бысраҡ ҡаптарҙа һаҡламайынса, ялтлап торған таҙа ҡумталарҙа һаҡлаған кеүек, ҡәлб донъяһын да, илаһи рәхмәт сағылыш таба алһын өсөн, пак тотоу зарур.

❁

Был донъяға килгән үлемгә дусар булғандарҙың һәммәһе кеүек, беҙ ҙә мәңгелек донъяға юл тотасаҡбыҙ. Ундай сәфәргә һәр мәл әҙер булырға тейешбеҙ. Шул сәбәпле, нәфес һәүәҫлектәренән баш тартып һәм рухи һәләттәребеҙҙе үҫтереп, Аллаһҡа яҡын ҡолдар булырға тырышыу мөһим.

❁

Аллаһ Тәғәлә беҙҙе Тыныслыҡ төйәгенә (Дар әс-сәләм), йәғни Йәннәткә саҡыра. Әммә һәр саҡырыуҙың шарты бар. Йәннәткә саҡырыуҙың шарты – рухи сәләмәт йөрәк (ҡәлб-и сәлим), тәүбәгә килгән йөрәк (ҡәлб-и мүниб) һәм тыныслыҡҡа ирешкән нәфс (нәфс-и мүтмәиннә). Шул саҡта ғына Аллаһ Тәғәлә ҡолона әйтәсәк:

«Башҡа бәндәләрем менән бергә, әй пак мосолман, әйҙә, кер Йәннәткә!» (әл-Фәджр (Таң), 29-30).

❁

Йәнәбе Хаҡҡа тапшырыу мөмкин булған иң гүзәл бүләк – Уның Гүзәл исемдәре (исм-и джәмәл) кәүҙәләнеш табырҙай, ялтыратып ҡуйылғандай таҙа, нурлы һәм нескә йөрәк көҙгөһө.

❁

Аллаһ Тәғәлә әйтә:

«Үҙенең нәфесен тәңре итеп табынғандарҙы күрҙеңме һин?» (Әл-Фурҡан (Яҡшыны ямандан айырыусы Китап), 43).

Йөрәктә боттар бар икән, йәғни нәфес һәүәҫлектәре пакланмаһа, бәндәнең бөтә тырышлығы бушҡа ғына. Ундайҙар тураһында Ҡөрьәндә шулай әйтелә:

عَامِلَةٌ نَاصِبَةٌ

«Улар бик тә михнәтләнеп эшләүселәрҙер» (әл-Ғәшийәһ (Бөйөк ваҡиға), 3).

❁

Үҙ Раббыһынан башҡа кеше табынырға һәүәҫ булған ялған илаһ – уның үҙенең нәфесе, Аллаһ әмерҙәрен үтәүгә кәртә булған теләктәре. Улар һәммәһе исламға ҡаршы булған «минең уйымса» һәм «минеңсә» кеүек нәмәләр. Кеше Аллаһ әмере булған өсөн ғибәҙәт ҡылмай, ә кешеләрҙең хөрмәтен яулау йәки үҙенә ҡарата булған хөрмәтте юғалтыуҙан ҡурҡып, донъяуи файҙаны уйлап ғибәҙәт ҡыла.

❁

Хәҙистә әйтелә: *«Ерҙә ғибәҙәт ҡылынған ялған илаһтарҙан Аллаһ иң нығы бәндә сабыулап йөрөп көҫәгән ҡанмаҫ теләктәрҙе, көйһөҙлөктәрҙе яратмай»* (Хайсами, I, 188).

❁

Мөхтәрәм Абдуллаһ Дәхләүи әйткән:

«Теләктәренең ҡоло булған кеше нисек Аллаһ ҡоло була алһын инде?!».

❁

Линза фокусына йыйылған ҡояш нурҙары барса сүп-сарҙы яндырған һәм көлгә әйләндергән кеүек, һәр бер иман эйәһе, иғтибарын тәүхид кәлимәһенә йүнәлтеп, ҡәлбендәге нәфес теләктәрен яндырырға тейеш.

❁

Ҡара диңгеҙгә ҡушылған Сакарья йылғаһы диңгеҙ һыуында эҙһеҙ юғалған кеүек, мөьмин дә нәфес һәүәҫлектәренән арынырға, ихтыярын Аллаһ Ихтыярына буйһондорорға һәм унда «иреп юғалырға» тейеш. Шул саҡта ғына Аллаһ ҡоло тәүхид хәҡиҡәтенән үҙ насибын аласаҡ.

Аллаһтың бер дуҫы (әүлиә) әйткән:

«Һин сыҡһаң аранан,

ҡалыр һине Яралтҡан».

❁

Хикмәт эйәләре әйткән:

«Күктәге болоттарҙың һәм диңгеҙҙәге һыуҙың үҙ төҫө юҡ. Төҫтө ул күктәге Ҡояштан ала. Мәғрифәт (Аллаһ Тәғәләне ҡәлбең менән танып белеү) – нәфес һәүәҫлектәренән, ҡанмаҫ теләктәрҙән баш тартып, «төҫһөҙлөк», халәтенә ирешеү һәм Аллаһ[12] «төҫөн алыу».

❁

Еп бик күп сүстәрҙең үрелеүенән хасил була. Ул энә күҙенән үтһен өсөн, сүстәргә берҙәмлекте һаҡлау кәрәк. Әгәр сүстәр, бер-береһенән айырылып, ептең осо туҙһа, улар берҙәмлеген юғалта һәм энә күҙенән үтә алмай.

Мөьмин үҙ ихтыярын Аллаһ Ихтыярына ни тиклем нығыраҡ буйһондорһа, тәүхид хәҡиҡәтен дә ул шул тиклем яҡшыраҡ танып белә ала.

❁

Тәүхид кәлимәһе, йөрәктән барса матди һәм матди булмаған илаһтарҙан, нәфес теләктәренән арынып, «Ләә иләәһә» («Илаһ юҡ») фразаһын әйтеүҙән башлана.

Ә аҙаҡ беҙ «илләллааһ» («Аллаһтан башҡа») «Аллаһ ҡына бар» тип әйткәс, ул камиллыҡҡа ирешә һәм Аллаһтың сифаттары менән биҙәлә, беҙҙең бөтә ғәмәлдәребеҙ Аллаһ ризалығын ала.

❁

Шәриғәт ҡанундары буйынса, кеше мосолман булһын өсөн, кәферҙәрҙең, күп илаһтарға табыныусыларҙың һәм поттарға табыныусыларҙың ялған илаһтарынан баш тартып, Бер Аллаһҡа инаныуҙы белдереү ҙә етә. Әммә был тәүхид хәҡиҡәтенә ирешеү өсөн ҡылынған ғәмәлдәрҙең бер өлөшө генә. Иң ауыр һәм мөһим өлөшө – эске донъяңдағы поттарҙы ҡолатыу, йәғни нәфес теләктәренән, һәүәҫлектәрҙән, күңел көҫәгән юҡ-барҙан арыныу һәм тик бер Аллаһҡа буйһоноу.

❁

Ниндәй поттарҙан йөрәкте паклау зарур?

– Улар кешегә ҡайһы саҡ Аллаһ әмерҙәренән дә мөһимерәк күренгән нәфес теләктәре.

– Ҡайһы саҡ ул Аллаһ өсөн баш тарта алмаған, мәңгелек тормошто оноторға мәжбүр иткән үтә торған ихтыяждар.

12. әл-Баҡара, 138.

– Ҡайһы саҡ ул Аллаһ ҡолон Раббыһынан йырағайтҡан юғары урын, дәрәжә.

– Ҡайһы саҡ Аллаһты оноторға мәжбүр иткән дан, уңыш, байлыҡ.

– Ҡайһы саҡ ҡаршы енес вәкиленә эҫенеү.

❁

Мөхтәрәм Муса Әфәнде (рәхимәһуллаһ) рухи тәрбиә зарурлығы тураһында шулай тип әйтә ине:

«Кеше күпме генә ғибәҙәт, сәждә ҡылмаһын һәм ураҙа тотмаһын, ул сауап ҡына ала. Ә рухи үҫеш рухи камиллашыу юлы (сайр-и сүлүк) аша ғына мөмкин. Был юлда кеше үҙенең нәфесен танып белә. (Ул үҙенең көсһеҙлөгөн, зәғифлеген таный.) Ул нәфесен танып белгәс, Аллаһты белә башлай, сөнки үҙ нәфесен белгәндәр генә Аллаһты танып белә ала. Әгәр бәндә үҙ нәфесен танып белмәһә, заһит булһынмы ул, үҙен ғибәҙәткә бағышлаусымы, ғалиммы – камиллыҡҡа ирешеү өсөн ул ғына аҙ (сөнки быларҙың һәммәһе нәфесте тәүге планға сығара)».

❁

Йософ Хас Хаджиб әйткән:

«Эй, ғалим! Нәфесеңдең ҡоло булма! Әгәр нәфесең һине әсир итһә, иманың менән түләүҙе талап итәсәк».

❁

Ғилем хикмәткә (ғирфан) әйләнһен өсөн, нәфес рухи тәрбиә (тәзкийә) үтергә тейеш. Кешелә күпме ғилем булыуы мөһим түгел, ғилем океан саҡлы булыуы һәм ул океан ағыулы булыуы ла ихтимал. Бындай хәлде беҙ Ҡарунда һәм Бәлғам бин Баурҙа күрәбеҙ. Улар Аллаһтың тәкүәле ҡолдары булһа ла, үҙ нәфестәренә мөкиббән китеүҙәре уларҙы ағыулай. Тимәк, һәр иман эйәһе үҙен нәфесенең яманлығынан һаҡларға тейеш.

❁

Һынау өсөн ебәрелгән был фани донъяла беҙ күҙәтеүсеһеҙ түгел, үҙ-үҙебеҙгә тапшырып ҡуйылмағанбыҙ. Ер – нәфес теләктәре үтәлә дорған донъя ла түгел. Әгәр кеше ул теләктәргә буйһона икән, үҙе лә һиҙмәйенсә залим булыуы һәм мәңгелек донъяһын юҡҡа сығарыуы ихтимал.

❁

Иң ҙур залим – һинең үҙ нәфесең. Тышҡы донъянан килгән залим һине был фани донъянан мәхрүм итеүе ихтимал, әммә ләкин ул залим һинең эсеңдә булһа, ул һинең мәңгелек донъяңа ла хаслана!

❁

Мөхтәрәм Шаһ Нәҡшбәнд әйткән:

«Йәә Раббым! Кешеләр Һинән ҡурҡа, ә мин нәфесемдән ҡурҡам! Мин бит Һинән тик яҡшылыҡ күрҙем, ә бөтә яманлыҡты – нәфесемдән».

❁

Нәфесеңде күпме генә тәрбиә ҡылма, уның яманлығынан имен булыуға һис ҡасан ныҡлы ышаныс юҡ. Аллаһ ҡолоноң ихтыярында остоҡ ҡына йомшаҡлыҡ күренһә лә, нәфес, боҫҡонда көтөп ултырған мәкерле дошман шикелле, баш күтәрергә генә тора. Шуға күрә уға ҡарата һәр ваҡыт уяу булыу лазым. Хатта ки Аллаһ Илсеһе лә (салләллаһу ғәләйһи үә сәлләм) Раббыбыҙға ялбарған: *«Йәә Раббым! Бер генә мәлгә лә мине нәфесем менән яңғыҙ ҡалдырмасы!»* (Ҡар. әл-Джәмиғү әс-Сәғир, I, 58).

❁

Вәхб ибн Мүнәббих (рәхимәһуллаһ) әйткән:

«Кешеләр ниндәй сәйер! Улар тәндәре үлгәндәр өсөн ҡайғырып илай, әммә йөрәктәре үлгәндәр өсөн иламай. Ә бит иң ҙур бәлә — ул йөрәк үлеме!».

❁

Әгәр бесәй алдына тәмле шашлыҡ ҡуйһаң, ул ҡомһоҙланып ашай башлаясаҡ. Әммә эргәһендә сысҡан күренһә, ул, шашлыҡты ҡалдырып, сысҡан артынан йүгерәсәк.

Тәрбиә процесын үтмәгән, рухиәте үҫешмәгәндең халәте лә шундай. Ул бәхетте ҡалдыра һәм бәхетһеҙлек артынан саба.

❁

Мөхтәрәм Мәүләнә әйткән:

«Сысҡан бихисап юлдарҙы белә, әммә улар барыһы ла ер аҫтында. Ул бөтә ерҙә лә ерҙе ҡаҙый, өңдәр һәм юлдар яһай. Сысҡанға оҡшаш нәфес тә был донъя әйберҙәре артынан йүгереп йөрөй, буш хыялдарҙы кимерә. Сысҡанға бит фани донъя ихтыяждарын ҡәнәғәтләндерерлек кенә аҡыл бирелгән».

❁

Һәммбеҙ был фани донъяла һынау үткәнгә күрә, бөтә харам нәмә нәфес өсөн магнит кеүек. Ағыулы бал кеүек гонаһтар — тоҙаҡ, тәүҙә улар ләззәт бирә, аҙаҡ һәләкәткә илтә.

Тәрбиә процесын (тәзкийә) үтмәгән нәфес һәр мәл шундай тоҙаҡҡа элә-гергә әҙер тора. Гонаһтар тәҡүәлек тыуҙырған һиҙгерлектән мәхрүм, тупаҫ, наҙан һәм ғәмһеҙ күңелдәрҙе үҙенә тарта. Шуға күрә нәфесеңле паклау һәм контролдә тотоу зарур. Раббыбыҙ Аллаһ мәңгелек ҡотолоуҙың шундай пакла-ныуға бәйле булыуын хәбәр итә:

«Йәнен пак тотҡан кеше моратына (сәғәҙәткә) ирешәсәк» (әш-Шәмс (Ҡояш), 9).

❁

Рухи йәһәттән өлгөрмәгән нәфес — харам өсөн асып ҡуйылған һынауҙар тәҙрәһе. Гонаһтар уның өсөн магнит шикелле, сөнки уның асылы харамға ылыға. Бына ни өсөн Аллаһ тыйған бөтә нәмә кешеләрҙе үҙенә тарта. Шуға күрә һәр кемгә нәфесен тәрбиә ҡылыу кәрәк. Рухиәт нәфесте мотлаҡ еңергә тейеш.

❁

Мөхтәрәм Зуннун Мисри әйткән:

«Аллаһтың дуҫы һәм нәфестең дошманы булырға кәрәк, ә нәфестең дуҫы һәм Аллаһ дошманы түгел!».

❁

Мөхтәрәм Ғабдулҡадир Ғәйләни әйткән:

«Һинең ҡаршылығың нәфесеңә булһын, ә буйһоноуың — Раббыңа!».

❁

Иман эйәһе тышҡы дошманға ҡаршы көрәшкә әҙер булһын өсөн, ул тәүҙә эске донъяһындағы дошман менән көрәштә уңышҡа ирешергә тейеш. Нәфес һәм шайтандан һаҡлаған тәҡүәлек менән ҡоралланып, рухиәт көрәшендә еңеү яуламай тороп, тышҡы дошманды еңеү мөмкин түгел.

❁

Аллаһҡа хеҙмәт нәфесең, шайтан, яман кешеләр, гонаһтар һәм аҙашыуҙар менән һуңғы һулышыңа тиклем даимән көрәш алып барыуҙы талап итә. Шул сәбәпле тәсауыф билдәләренең береһе - «нәфесең менән солох төҙөү мөмкин булмаған алыш».

Мөьмин – ғүмере буйына иман көсө менән нәфес һәм шайтан һөжүменә ҡаршы торған кеше.

❁

Өлгөргән ҡәлб донъяһы нәфескә оҡшаған нәмәләрҙән баш тартыуҙы һәм уға оҡшамаған ғазаптар менән тәрбиәләнеүҙе талап итә.

❁

Тулҡындар, яр буйында ятҡан таштарға бәрелеп уларҙы шымартҡан кеүек, эске донъябыҙҙың етешмәгән яҡтарын, кәмселектәрен рухиәт диңгеҙе тулҡындары менән төҙәтергә тейешбеҙ.

❁

Рухи ғилем эйәләре әйткән: «Үлемгә ҡәҙәр үл».

«Үл» әмерендә үҙ ихтыярың менән нәфестең шәриғәт хупламаған теләктәренән, иге-сиге булмаған һәүәҫлектәренән, үлем килеп мәжбүр иткәнсе үк баш тартыу күҙ уңында тотола.

❁

Нәфестең кәмселектәрҙән арыныуы бик күп йонсоҡкос кәртәләрҙе үтеүҙе талап итә, сөнки утҡа һалмай тороп, эшкәртелмәгән тимергә тейешле форманы биреп булмай.

❁

Рухи тәрбиә алмаған йөрәк һалҡын тимер һымаҡ. Ул кәрәкле консистенцияға етһен өсөн, уны тәүҙә утта сыныҡтырырға, тутыҡтан, бысраҡтан, шлактан таҙартырға, ҡатылығын бөтөрөп йомшартырға һәм аҙаҡ ҡына кәрәкле форма бирергә мөмкин.

Кешенең эске донъяһы Раббыһынан йырағайтҡан яманлыҡтарҙан паклanмай тороп һәм нәфес һәүәҫлектәре ҡоллоғоноң быҒауҙары өҙөлмәй тороп, йөрәк сәләмәт хәлгә ҡайта алмай.

❁

Өлгөрөп етһен өсөн, бешмәгән емештәр еҫе ҡояш аҫтында йылынырға тейеш. Йөрәк өлгөрөп етһен һәм камиллыҡҡа ирешһен өсөн, ул ғазаптар ялҡыны аша үтергә тейеш.

❁

Мөхтәрәм Мәүләнә әйткән:

«Әгәр һин көн яҡтылығы кеүек балҡып торғоң килһә, нәфесеңдең ҡара төндәй теләктәрен яндырыу зарур!».

❁

Хозурлыҡ һәм бәхет сере асылы ҡанмаҫ теләктәрҙән торған нәфесеңде туйындырыу түгел, ә уны мин-минлектән арындырыу һәм тәрбиәләү.

Ризыҡ ейеүҙә сама белеү йөрәкте йомшартҡан һәм яҡтыртҡан кеүек, самаһыҙ ризыҡланыу уны томалай һәм нурын ала. Әҙ ризыҡ менән ҡәнәғәт булыу нәфестең асыуын баҫа һәм хәкиҡәткә, игелеккә тартылыуын еңеләйтә, ә оңҡотлоҡ сәбәпле рухи һиҙгерлек юғала, күңел тарая һәм аҡылдың хикмәтте төшөнөү һәләте юғала.

❁

Ас һәм ҡайғылы хәлдә, кеше үҙенең көсһөҙлөгөн тойғанда, фекер йөрөтөү (тәфәккүр) аша йөрәккә ғибрәт булырҙай, хикмәт бирерҙәй нәмәләр асыла. Ә ҡарын артыҡ тулы булғанда, фекерләү ҡеүәһе юғала, күңел күҙе һуҡырая.

Мөхтәрәм Мәүләнә әйткән:

«Барса нәмәнән мәхрүм ҡалһа, бәләләр ябырылһа, Аллаһ ҡоло (үҙенең көсһөҙлөһөн таный һәм) Раббыһын зекер итә башлай: «Раббым, Раббым!» һәм Уға ялбара: «Ҡоткар мине!»».

❁

Мөхтәрәм Баязид Бистами әйткән:

«Аслыҡ болотҡа оҡшаш. Кеше әҙерәк ашарға тырышһа, уның йөрәген хикмәт ямғыры һуғара башлай».

❁

Бер әүлиә шулай тигән:

«Флейта һымаҡ, ҡарыныңды буш тот һәм һыҡта. Ҡамыш ҡәләм һымаҡ, ҡарыныңды бушат һәм серҙәр хаҡында һөйлә, уларҙы яҙып ҡуй!».

❁

Мөхтәрәм Муса Әфәнде (рәхимәһуллаһ) рухи тәрбиәнән һуң күңелгә асылған фәйез һәм бәрәкәт офоҡтары тураһында шулай тигән: «Мөьмин нәфесен танып белһә, һәр нәмәнең мәғәнәһе үҙгәрә… Ә ҡарашы үҙгәргәс, һәр ғәмәле ғибәҙәткә әүерелә. Әгәр Раббыһын танып белә башлаған Аллаһ ҡоло, мәҫәлән, милек алырға теләһә, маҡсаты икенсе буласаҡ. Элек был осраҡта ул, нәфес һәүәҫлегенә барып, милек хужаһы булырға, туйғансы ашарға-эсергә, башҡалар хуплаһын өсөн йортло булырға теләр ине. Әммә өлгөргән кешегә әйләнгәс,

ул әйтәсәк: «Ҡөҙрәтле Аллаһ биргән байлыҡ һәм милек менән мин хәләл юл менән ғаиләмде ризыҡ менән тәьмин итә, исламға һәм мосолмандарға хеҙмәт итә аласаҡмын!». Ә инде ниәттәре үҙгәргәс, уның донъяуи эштәре лә ғибәҙәткә әүерелә. Әгәр кеше Аллаһ Тәғәлә тураһында уйлаһа, уның һәр ғәмәле ғибәҙәт булып иҫәпләнә. Ризыҡ, йоҡо һәм ғаилә мөнәсәбәттәре – һәммәһе ғибәҙәткә әйләнә…»

ТӘҮБӘ ҺӘМ ЯРЛЫҡАУҘЫ ҺОРАП ЯЛБАРЫУ

Гонаһ бысрағын йыуыусы һәм йөрәктәрҙе паклаусы ихлас күҙ йәштәре – үҙен улаһи мөхәббәт ебе менән бәйләгәндәр өсөн тәүбә сығанағы, Аллаһҡа өмөт бағлау төйәге. Бөтә өмөттәр һүнгәндә, шул төйәк буҫағаһында илай алыусылар – ысын-ысындан бәхетле.

❁

Ҡайһы саҡ, бер гонаһты йыуыу өсөн, меңдәрсә күҙ йәше түгеү талап ителә, ҡайһы саҡ бер ихлас күҙ йәше меңдәрсә гонаһты йыуа.

Аллаһ ҡолоноң рухи хикмәткә эйә булыуы - гонаһын йәки хатта ки ифтибарһыҙлығын тойоуҙы, ә выжданы Аллаһтан ғәфү үтенеүҙе талап итә.

❁

Раббыбыҙ тел менән генә әйтелгән тәүбәне түгел, ә үкенес уты менән янған күңел шәмдәленең тоҡаныуын, ғәмәл менән иҫбатланған ихласлыҡты теләй. Тәүбә ҡылғанда, ҡайнар күҙ йәштәре менән Аллаһтан мәрхәмәт һорарға һәм, башҡаса һис ҡасан ҡабатламаҫ өсөн, гонаһтарҙан һәм яманлыҡтарҙан баш тартырға кәрәк.

❁

Әгәр ғибәҙәттә ҡәлб һәм тән гармонияһы кәрәк булһа, тәүбә иһә – башлыса йөрәк ғәмәле. Хәҙистә тәүбә шулай тасуирлана: *«Гонаһың өсөн (ихлас) үкенес тойоу – ул тәүбә була ла инде»* (Ибн Хәнбәл, I, 423).

❁

Яхъя бин Муаз (рәхимәһуллаһ) әйткән:

«Гонаһтарҙан баш тартмайынса, Аллаһтан ғәфү үтенеү – ялғансылар ғәмәле».

❁

Мөхтәрәм Ғүмәр (радыйаллаһу ғәнһү) әйткән:

«Тәүбәләр ҡылғансы, гонаһтан баш тартыу еңелерәк».

❁

Мөхтәрәм Абдулхалиҡ Ғуждувани (радыйаллаһу ғәнһү) әйткән:

«Белегеҙ, юлдың башы — тәүбә. Тәүбә – Аллаһҡа оҡшамаған бөтә һүҙҙәрҙән һәм ғәмәлдәрҙән баш тартыу ул».

❁

Ихласлыҡ менән раҫланмаған тәүбә шулай уҡ тәүбәгә мохтаж. Икенсе һүҙ менән, әгәр ауыҙ: «Раббым, мин тәүбә ҡылам, ғәфү ит!» - тип әйтһә, ә кешенең халәте һәм тәртибе ул һүҙҙәр менән ярашмаһа, әгәр ул гонаһтар һәм яманлыҡтар ҡылыуҙы дауам итһә, был, Мәүләнә әйткәнсә, – «һүҙҙәрҙе мыҫҡыл итеү».

❁

Донъяла үҙҙәренән башҡа һис кем булмағанда, берҙән-бер һыйыныр урындары, төйәктәре һәм терәктәре Раббыбыҙ Аллаһ булғанда, Әҙәм һәм Һауа ҡырҡ йыл буйы Унан ярлыҡау һорай. Тәүбә ҡылыусы шундай уҡ рухи халәттә булырға һәм Уның мәрхәмәт буҫағаһында ярлыҡау һорарға тейеш. Тап ғәләмәт ҙур океанда яңғыҙ ҡалған йәки ҡара урманда аҙашҡан кеше һымаҡ: «Раббым, ҡотҡар мине!» -тип ялынырға, Аллаһ Тәғәләгә ихлас тәүбә (тәүбә-и нәсух) ҡылырға тейеш.

❁

Һәр бер ғәмәл кеүек үк, Аллаһ тәүбәләрҙе ҡабул итһен өсөн, ихласлыҡ кәрәк. Быныҡ төп сифаты – үкенес һәм күҙ йәштәре.

Хаҡ тәүбәләр тәрән үкенес менән башланырға тейеш, гонаһтар бысрағы ихлас күҙ йәштәре менән йыуыла.

Гонаһ бысрағын йыуыусы һәм йөрәктәрҙе паклаусы ихлас күҙ йәштәре – үҙен иланы мөхәббәт ебе менән бәйләгәндәр өсөн тәүбә сығанағы, Аллаһҡа өмөт бағлау төйәге. Бөтә өмөттәр һүнгәндә, шул төйәк буҫағаһында илай алыусылар – ысын-ысындан бәхетле.

❁

Ҡайһы саҡ, бер гонаһты йыуыу өсөн, меңдәрсә күҙ йәше түгеү талап ителә, ҡайһы саҡ бер ихлас күҙ йәше меңдәрсә гонаһты йыуа.

❁

Аллаһтан ҡурҡып тамған мөьминдең күҙ йәштәре – ҡәбер ҡараңғылығын яҡтыртҡан нур һәм Йәннәт баҡсалары ысығы.

❁

Мөхтәрәм Мәүләнә ниндәй гүзәл әйткән:

«Раббыбыҙ Аллаһ һинән был донъяла бер нисә тамсы күҙ йәшеңде ала, әммә урынына Йәннәт һыуҙарын бүләк итә. Ул һинең һөйөү һәм ғазап тулы аһтарыңды һәм иңрәүҙәреңде ала, ә һәр бер һыҡтауың һәм иңрәүең өсөн йөҙҙәрсә юғары рухи халәт һәм буй етмәҫлек дәрәжә бирә».

❁

Ихлас күҙ йәштәре — мәғәнәһен һүҙ менән аңлатыу мөмкин булмаған тел. Аллаһ ҡоло уның ярҙамында Раббыһынан үҙе күҙ алдына килтерә лә алмағанды һорай.

❁

Аллаһ Илсеһе (салләллаһу ғәләйһи үә сәлләм) әйткән:

«Йәһәннәм уты ике күҙгә ҡағыла алмаҫ. Был Аллаһтан ҡурҡып илаған күҙҙәр һәм Аллаһ юлында һаҡта торған күҙҙәр» (Тирмизи, Фадайлу әл-джихад, 12/1639).

❁

Тәүбә – үҙеңдең зәғиф һәм меҫкен хәлдә булыуыңды күрһәтеп, Аллаһҡа ялбарыу. Раббыбыҙҙың рәхмәтенә ирешеү өсөн, быға ярашлы йөрәк халәте кәрәк. Билдәле булыуынса, ямғыр һорап доға ҡылырға йыйынғанда, мохтаждарҙы, яңғыҙҙарҙы, гонаһһыҙ балаларҙы, хатта хайуандарҙы алып киләләр, иҫке кейемдәр кейәләр һәм күндәмлек, түбәнселек менән Аллаһҡа ялбаралар.

❁

Тәүбә һәм истиғфар ҡылыу – үҙеңдең тәкәбберлегеңдән, мин-минлегеңдән арыныу һәм шулай тип ялбарыу: «Йәә Аллаһ! Мин көсһөҙ, Һин Көҙрәтле, Һин Мәрхәмәтле! Мин мәрхәмәтеңә һәм ярлыҡауыңа мохтаж зәғиф ҡолоң. Үҙеңдең йомартлығың, рәхмәтең менән миңә мәрхәмәтле бул!». Шулай уҡ тәүбәңде һүҙҙә генә ҡалдырыу түгел, ә изгелекле ғәмәлдәрең менән раҫлау.

❁

Аллаһ Тәғәлә – Ғәфү итеүсе һәм ғәфү итеүҙе һөйә. Гонаһтар кисерелеүгә сәбәпсе булған тәүбәләр өсөн түбәндәгеләр кәрәк:

– Тәрән үкенес.

– Тәүкүәле булыу.

– Изге ғәмәлдәр ярҙамында яман халәтеңде үҙгәртеү…

❁

Мөхтәрәм Ғабдулҡадир Ғәйләни әйткән:

«Тәүбә ҡылыу ғына әҙ. Иң мөһиме – тәүбәңә хилафлыҡ ҡылмау. Ағас ултыртыуҙа ла бит иң мөһиме — ағас ултыртыу түгел. Иң мөһиме – яҡшы уңыш килтерһен, емеш бирһен өсөн, үҫентене үҫтереү».

❁

Тәүбәләр һәм истиғфар, саҙаҡа кеүек үк, гонаһтарҙың ярлыҡаныуына сәбәпсе генә түгел, бәләләрҙе булдырмау, изгелек артыуы, илаһи мәрхәмәт килеү сараһы ла булып тора.

❁

Йәғәфәр Садик әйткән:

«Әгәр бәндәнең ризығы сикле икән, шунда уҡ (Аллаһтан) күберәк ярлыҡау һорап ялына башлаһын!»

❁

Аллаһ Тәғәлә Үҙенең тәүбәгә килгән һәм ғәфү үтенеүҙе эҙләгән ҡолдарын бәләләрҙән ҡотҡара һәм бихисап рәхмәтен бүләк итә. Бер заман Хәсән әл-Басриға дүрт кеше килә. Уларҙың береһе ҡоролоҡҡа зарлана, икенсеһе – фәҡирлеккә, өсөнсөһө – еренең уңдырышһыҙ булыуына, ә дүртенсеһе – балалары булмауға. Барыһы ла был бөйөк әүлиәнән ярҙам һорай. Уларҙың һәр береһенә ул Аллаһтан ғәфү үтенергә кәңәш бирә. Эргәһендә торғандар һорау бирә: «Әфәндем, был кешеләрҙең бәләләре һәм бәхетһеҙлектәре төрлө-төрлө, ә һеҙ уларға бер үк кәңәш бирҙегеҙ?!».

Мөхтәрәм Хәсән Басри уларға киләһе аяттарҙы уҡып яуап бирә:

«Шунан әйттем: «Аллаһтан ярлыҡау һорағыҙ, Аллаһ – ысындан да, мәрхәмәтле, ярлыҡаусы, тинем. (Яманлыҡтан баш тартһағыҙ) Аллаһ өҫтөгөҙгә мул ямғыр яуҙырыр, тинем. Һеҙҙең малдарығыҙҙы, улдарығыҙҙы арттырыр, һеҙгә баҡсалар (емеш бостандары), шишмәләр бирер, тинем» (Нух, 10-12). (Ибн Хаджәр, Фәтх әл-Бәри, XI, 98; Айни, Умда әл-кари, Бейрут, Т. XXII, 277-278).

Ғәфү үтенеү Аллаһ ҡолона мотлаҡ файҙа бирә. Әммә Аллаһ Ихтыяры менән кемгәлер был файҙа шунда уҡ бирелә, икенселәренә – киләсәктә, ә өсөнсөләренә сауап булараҡ киләсәк тормошта. Аллаһ Тәғәлә, әлбиттә, Үҙ ҡолона нимә яҡшыраҡ икәнен яҡшыраҡ белә.

Ҡыйынлыҡтар, ҡайғы-хәсрәттәр менән осрашҡанда, Раббыбыҙҙа хеҙмәтебеҙҙә ниндәй хаталар ебәреү тураһында уйланыу һәм, кисекмәҫтән тәүбә ҡылып, ғәфү үтенеү зарур. Бындай иғтибар һәм һиҙгерлек – Аллаһ дуҫтарының Уға хеҙмәт юлындағы мөһим әҙәбе. Фудайл ибн Ияз (рәхимәһуллаһ) әйткән:

«Аллаһҡа хеҙмәтемдә хата ебәреүемде мин ялсымдан һәм егеп йөрөгән хайуанымдан (уларҙың буйһонмауынан) күрәм».

❁

Иман эйәһенә бәхетһеҙлектәр ябырылһа, ул итәғәтһеҙлек һәм зарланыу урынына уйланырға тейеш: «Минең барса кәмселектәремдең сығанағы – нәфесем. Ниндәй ғәйебем был бәләгә сәбәпсе булды?». Ошо уй менән ул үҙенең рухи халәтен анализларға һәм хаталарын төҙәтергә тырышырға тейеш.

❁

Хәҡҡ дуҫтары тәүбәне өс төргә бүлә:

1 – **Ябай кешеләрҙең (ғауам) тәүбәһе:** улар гонаһары өсөн тәүбә итә.

2 – **Аллаһтың һайлам ҡолдары тәүбәһе (хавас):** улар халәттәрендә һәм эштәрендә Хаҡҡа ҡарата ғәфләттә булған мәлдәре өсөн тәүбә итә.

3 – **Һайламдарҙан-һайлам ҡолдар тәүбәһе (хасс әл-хавас):** улар Аллаһҡа тағы ла яҡыныраҡ булыр өсөн тәүбә ҡыла.

❁

Тәүбәнең асыл маҡсаты һәм ғәфү итеүҙе һорап ялбарыу – тәрән үкенес, үҙеңдең көсһеҙлөгөңдө таныу, Аллаһҡа һыйыныу, шуға күрә улар Аллаһҡа яҡынайыу өсөн иң нәтижәле сара булып тора. Улар йөрәктең рухи бысраҡтан таҙарыныуына, Аллаһ ҡоло менән Раббыһы араһындағы ғафиллыҡ пәрҙәһе юғалыуға, Аллаһтың ризалығына һәм һөйөүенә ирешеүгә сәбәпсе. Был турала изге аятта әйтелә:

«…һәр хәлдә, Аллаһ тәүбә иткәндәрҙе һәм таҙарынғандарҙы ярата» (әл-Баҡара (Һыйыр), 222).

❁

Беҙ һис бер гонаһ ҡылмаған хәлдә лә (ә был инде мөмкин булмаған хәл), барыбер ғәфү үтенергә тейешбеҙ, сөнки Аллаһ биргән бөтә ниғмәттәр өсөн рәхмәтебеҙҙе еткерә алмайбыҙ. Ямғыр һыуынан да сафыраҡ булған пәйғәмбәрҙәр ҙә бит, үҙҙәренең көсһеҙлөгөн танып, һәр ваҡыт Унан ғәфү үтенгән.

❁

Бөтә гонаһтары, хатта яңылыш ҡылынған хаталары ла ғәфү ителеүгә ҡарамаҫтан, Пәйғәмбәребеҙ (саллəллаһу ғəлəйһи үə сəллəм) әйткән:

«Мин Аллаһтан ярлыҡау һорайым һəм көн һайын Унан етмештән ашыу тапҡыр (хəҙистең икенсе вариантында - 100 тапҡыр) ғəфү үтенəм» (Ҡар. Әбү Дауыт, Витр, 26; Әхмәд, II, 450).

Ул ваҡытта беҙҙең кәмселек тулы йөрәктәребеҙ һәм телдәребеҙ һәр уңайлы мәлдән файҙаланып, һәр ваҡыт, айырыуса таң алдынан ғәфү үтенеү менән мәшғүл булырға тейеш.

❁

Әгәр мөьмин тыуған мәлдәге кеүек гонаһһыҙ булһа ла, Аллаһтан барыбер бик күп ғәфү үтенергә тейеш, сөнки үҙенә биргән бихисап ниғмәттәре өсөн Уға тейешенсә рәхмәттәрен еткерә алмай. Был Унан ғәфү үтенеүгә йәнә бер сәбәп булып тора.

❁

Бер аятында Аллаһ Тәғәлә әйтә:

فَسَبِّحْ بِحَمْدِ رَبِّكَ وَاسْتَغْفِرْهُ

Ул бойора: **«Тик Раббыңды маҡтап, тәсбих әйт. Унан ярлыҡау һора. Шик юҡ, Аллаһ тәүбәләрҙе күпләп ҡабул итеүсе»** (ән-Наср (Ярҙам), 3). Икенсе һүҙҙәр менән, Ул, беҙгә бүләк итеп биргән бөтә ниғмәттәре өсөн, маҡтап зекер итеүебеҙҙе теләй. Әммә был ғына етерлек булмауын аңлатып, Уға рәхмәтебеҙҙе тейешенсә белдереүҙәге ғәмһеҙлегебеҙ, кәмселегебеҙ өсөн шулай уҡ ғәфү үтенергә бойора.

❁

Тәүбә һәм ғәфү үтенеүҙәр гонаһтарҙан таҙарыныу өсөн генә кәрәкмәй, улар ғибәҙәттәр әҙәбенең айырылғыһыҙ бер өлөшө, сөнки үҙебеҙ белгән етешһеҙлектәрҙән тыш үҙебеҙ белмәгән йәки аңлай алмаған кәмселек-хаталар, гонаһтар ҙа бар. Шуға күрә беҙгә һәр ваҡыт тәүбә ҡылыу халәтендә булыу һәм Аллаһ Тәғәләнән ғәфү үтенеү лазым.

❁

Шуны ла уйларға тейешбеҙ: үҙебеҙ белмәгән бихисап кәмселегебеҙ, ғафиллығыбыҙ, етешмәгән яҡтарыбыҙ булһа ла, Раббыбыҙ беҙҙе ниғмәттәренән өҙмәй. Быға лайыҡлы булмаһаҡ та, рәхмәтенән мәхрүм итмәй, бүләктәрен даимән бирep тора. Шуға күрә Уға тәсбих әйткәндә, ниғмәттәре өсөн рәхмәтебеҙҙе белдергәндә, хата-кәмселектәребеҙ өсөн ғәфү үтенергә лә тейешбеҙ.

Пәйғәмбәрҙәр һәм әүлиәләр һәр ваҡыт ялбарыу халәтендә булған. Ғәмһеҙ кешеләр Йәнәбе Хаҡтың әмер-тыйыуҙарына иғтибар бирмәй, улар үҙҙәрен шулай йыуата: «Минең йөрәгем саф», әйтерһең, уларға Йәннәт әҙерләп ҡуйылған. Улар ғибәҙәттәр, доғалар, Аллаһҡа һыйыныу тураһында иҫенә лә алмай. Ә бит доғалар тураһында онотоусылар тора-бара шөкөрһөҙ, һауалы, тәрбиәһеҙ һәм ҡаты күңеллегә әйләнә. Ә был – Аллаһ һаҡлаһын – мәңгелек үкенес һәм бәхетһеҙлек сәбәбе.

❁

Иң оло ғафиллыҡ – бәндәнең Аллаһ юлына баҫмайынса, Уның Рәхимле (Рахмәән), Шәфҡәтле (Рахиим), Ярлыҡаусы (Ғәффәәр) атрибуттарына мөрәжәғәт итеп үҙ-үҙен алдауы.

❁

Нәфес һәм шайтан кешеләрҙе шундай үәсүәсәләре менән алдарға тырыша: «Аллаһ Ярлыҡаусы һәм Рәхимле, Ул Мәрхәмәтлеләрҙән-Мәрхәмәтле. Хатта гонаһ ҡылһаң да, Ул һине ғәфү итәсәк… Һин әле йәш, әлегә ләззәтлән, ә ҡартайғас, ғибәҙәт ҡылырһың…»

Аллаһ Тәғәлә Үҙ ҡолдарын бындай үәсүәсәләргә алданмаҫҡа өндәй:

«…Ата ялғансы шайтан, ышанысығыҙға кереп, Аллаһ юлында һеҙҙе төп башына ултыртмаһын (Һаҡ булығыҙ!)» (Лоҡман, 33; Фәтыр (Яралтыусы), 5).

❁

Мосолманға, Аллаһтың сикһеҙ Мәрхәмәтенә, Ярлыҡауына, Рәхмәтенә өмөт бағлап, илаһи әмер-тыйыуҙарға буйһонмайынса, харамға эйәреүҙең ҡот осҡос эҙемтәләре тураһында аслан оноторға ярамай. Аллаһтың әл-Ғәффәәр (Ярлыҡаусы) һәм әр-Рахиим (Шәфҡәтле, Рәхимле) Исемдәрен иҫтә тотоп, Уның шулай уҡ әл-Ҡаһһәәр (Юҡ итеүсе, Һәләк итеүсе) һәм Шәдидү әл-Иҡаб (Ҡаты яза биреүсе) Исемдәрен иҫәпкә алмау – бик ҙур хата.

❁

Хикмәт эйәләре әйтә:

«Ғәмһеҙ кешенең биш сифаты бар:

1. Аллаһта яҙып ҡуйылһа ла, үткән гонаһтарын онотоу.

2. Аллаһтың ҡабул итеү-итмәүен белмәй тороп, элекке изге ғәмәлдәрен иҫтә тотоу.

3. Үҙен был донъяла матди хәле яҡшыраҡ булғандар менән сағыштырыу һәм Аллаһҡа шөкөр итеүҙән йырағайыу.

4. Үҙен дини йәһәттән түбәнерәк булғандар менән сағыштырыу һәм тыныслаңыу.

5. Шайтандың: «Аллаһ барыбер ғәфү итә», - үәсүәсәһенә алданып, гонаһтар ҡылыу».

❁

Тәүбә итмәгәндәр һәм йәбер, ғәҙелһеҙлек ҡылғандар көн һайын илаһи асыуҙы һәм үҙҙәренә киләсәк ғазапты ғына арттыра. Был турала аятта әйтелә:

«(Ий, Рәсүлем!) Залимдарҙың нимә ҡылғандарын Аллаһ белмәй, тип уйлама. Ләкин Аллаһ уларға яза биреүҙе ҡурҡыуҙан күҙҙәре аҡайған Көнгәсә (Ҡиәмәткәсә) кисектерә килә» (Ибраһим, 42).

❁

Хаҡ тәүбә – беҙҙең ихтыярҙан тормаған үлем килгәнсе, үҙ теләгең менән Аллаһҡа ҡайтыу һәм тулы күндәмлек, ихласлыҡ менән уның әмер-тыйыуҙарына буйһоноу.

❁

Йәннәт – хозурлыҡ төйәге, уға гонаһкәрҙәр, баш бирмәҫ тыңлауһыҙҙар инә алмай. Юғары донъяға ынтылған кеше фани донъяның матди һәм матди булмаған бысрағынан һәм нәфсеһенән арынырға тейеш.

❁

Аллаһ Тәғәлә Үҙ ҡолдарында күргә теләгән рухи йәһәттән сәләмәт йөрәк (ҡәлб әс-сәлим) – тулыһынса пакланған һәм нескә йөрәк.

Ә нисек уға ирешергә һуң? Әлбиттә:

– Йөрәгеңде гонаһтарҙан, боҙоҡлоҡтан һәм нәфес һәүәҫлектәре ынтылышынан әрсәләп.

– Бәндәселек менән ҡылынған гонаһтар бысрағын үкенес йәштәре менән йыуып, йөрәгебеҙҙе тәүбәләр һәм ғәфү үтенеү менән сафландырып...

– Аллаһ хозурына үҙ бәҫебеҙҙе төшөрмәйенсә, тыныс күңел һәм таҙа намыҫ менән барырға ынтылып, Уның тәкүәле ҡоло булып…

ТАҢ АЛДЫ СӘҒӘТТӘРЕН ҒИБӘҘӘТ МЕНӘН ЙӘНЛӘНДЕРЕҮ

Таң алды сәғәттәре - рухи хазина. Әгәр ҙә ки мөьмин уларҙы йоҡоға сарыф итһә, ул аяҡ аҫтында хазина барлығын белмәйенсә астан үлеүсе бәхетһеҙгә оҡшап ҡала.

Әгәр мөьмин таң алды сәғәтен Аллаһ һәм Уның Илсеһе (салләллаһу ғәләйһи үә сәлләм) өйрәткәнсә үткәрә алһа, уның төндәре көндән дә яҡтыраҡ буласаҡ.

Ҡөрьәндә әйтелә: **«Иртә-кис Аллаһ Исемен зекер ит. Төндөң бер өлөшөн Уға сәждә итеп уҙҙыр, төндөң оҙон ваҡытында ла тәсбих ит. Хаҡтыр, кешеләр, күҙ асып йомғансы уҙып китә торған фани донъяға мөкиббән һәм киләсәктә баштарына төшәсәк (Әхирәт) көндө оноталар»** (әл-Инсан (Кеше), 25-27).

«Ҡурҡыу менән өмөт араһында Раббыға (намаҙҙа) ялбарғандар, йылы һәм рәхәт яҫтыҡтарынан айырылып, төндә тороп доға уҡый…» (әс-Сәждә (Сәждә), 16).

«Төндәрен әҙ йоҡлағандар. Сәхәр ваҡыттарында ярлыҡау һораған-дар» (әҙ-Ҙәрийәт (Таратыусылар), 17-18).

Таң алды сәғәттәре – Аллаһҡа ялбарыу, Уның язаһынан ҡотолоу һәм рәхмәтенә ирешеү өсөн иң уңайлы мәл. Раббыбыҙ Аллаһ беҙҙе таң алдынан ярлыҡау һорарға саҡыра. Ошо мәлдә, таң ҡыҙарып, ҡараңғылыҡ сигенә башлаған кеүек, тап ошо мәлдә ғәфү үтенеү гонаһтар ҡараңғылығынан, ғәмһеҙлектән арыныу һәм илаһи ярлыҡауға лайыҡ булыу өсөн иң яҡшы сара булып тора.

Аллаһ Илсеһе (салләллаһу ғәләйһи үә сәлләм) тәһәджүтте (төнгө намаҙ) Табуҡ һымаҡ ауыр хәрби операциялар ваҡытында ла ҡалдырмаған. Беҙ таң

алды сәғәттәренең рухи бәрәкәтенән мәхрүм ҡалмаһын өсөн, ул шундай нәсихәттәрен биргән.:

«Төнгө ғибәҙәткә иғтибарлы булығыҙ, сөнки был һеҙгә тиклемге тәкүәләр ғәҙәте. Шик юҡ, төнөн ғибәҙәт ҡылыр өсөн тороу – Аллаһҡа яҡынайыу сараһы. (Был ғибәҙәт) гонаһтарҙан аралай, хаталарҙы юя һәм тәнде сирҙәрҙән һауыҡтыра» (Тирмизи, Дәғүәт, 101);

«Өммәтемдең иң шәрәфле кешеләре — Ҡөрьән кешеләре һәм даимән төнгө намазға тороусылар» (Мүнәви, I, 522).

❁

Таң алды сәғәттәрендә Аллаһ Тәғәләнең ишетә белгәндәр, күңел күҙе асыҡ булғандар өсөн махсус нәсихәттәре бар. Һауа саф, тирә йүнгә гөлдәр хуш еҫ таратҡан, ә әтәстәр төнгө намазға саҡырған мәлдә, Аллаһ Тәғәлә Үҙ ҡолдарын ярлыҡау һорарға саҡыра һәм уны алыуға ғәҙәттән тыш мөмкинлектәр бирә.

❁

Таң алды сәғәттәрен ғибәҙәттәр менән йәнләндереү – Раббыбыҙҙың махсус саҡырыуын алыу ул.

Төнгө намаз һәм зекер – әйтерһең дә, Йәнәбе Хәҡҡ менән осрашыу һәм әңгәмә.

Һәммәһе йоҡлаған мәлдә таң алдынан уяныу, ошо мәлдең илаһи мәрхәмәт һулышын тойоу Уның мөхәббәт һәм рухи хикмәт йыйынына килгән һайлам ҡолдарының береһе булыу тигән һүҙ.

❁

Йөрәгеңдәге илаһи мөхәббәт көсө менән генә таң алды ваҡытын йәнләндереү мөмкин. Шуға күрә уны һәр кем булдыра алмай, кеше бит бары тик Аллаһҡа мөхәббәте сәбәбендә магнит һымаҡ тартып торған урындығын ҡалдыра, татлы йоҡоһон бүлә һәм Раббыһы ҡашына барып баҫа – ҡолдоң Раббыһына ихлас мөхәббәте билдәһе булып тора был. Раббыһын ихлас һөйгән иманлы әҙәм, ғәмһеҙлеккә бирелеп, таң атҡансы йоҡлап ята аламы ни!

❁

Мөхтәрәм Мәүләнә мөьминдәр таң алдынан тойған мөхәббәт, иман һоҡланыуын шулай тасуирлай:

Йә, аяҡсы! Илаһи һөйөүҙе һал бокалға!
Һыуындарым ҡанһын, онот ризыҡты!
Һал Кәүсәрҙе, баҫ һин сарсауҙы,

Ни теләй һуң диңгеҙҙәге һыуҙан башҡа?
Һал шарапты, йәнә, йәнә һал!
Китмәһен төн, дуҫым, туҡтат уны!
Уҙма, ваҡыт, бушҡа, заяға. Һуҡ йоҡома.
Йоҡосолар төн ҡәҙерен аңлаймы ни һуң?!

❁

Әгәр бәндәнең төн уртаһында торорға шәхси ихтыяжы бар икән, ул мотлаҡ йоҡоһон бүләсәк. Шулай уҡ Аллаһ Сүбәхәнә үә Тәғәлә лә беҙҙе, Үҙенең ҡолдарын, таңдағы осрашыуға саҡыра.

Мөхәббәттең бөйөк кәүҙәләнеше – физакәрлек. Илаһи ярлыҡау һәм мәрхәмәт ҡапҡалары асылған иртә лә – Раббыбыҙға мөхәббәтебеҙ һынау тотҡан ғәҙәттән тыш бәрәкәтле мәл.

❁

Төнгө намаҙ (тәһәджуд), зекер, ғәфү итеүҙе һорау һәм доғалар менән йәнләндерелгән таң алды сәғәттәре – Аллаһҡа яҡынайыу өсөн иң бәрәкәтле мәл. Әхирәт бәхетенең ҡояшы таң ҡараңғыһы сәғәттәрендә йәшеренгән.

❁

Әгәр иман эйәһе таң алды ваҡытын Аллаһ һәм Уның Илсеһе (саллəллаһу ғəләйһи үə сəлләм) ҡушҡанса үткәрә алһа, уның төнө көндән дә яҡтыраҡ буласаҡ.

❁

Аллаһтың тәҡүәле ҡолдары һәр ваҡыт таң алды ваҡыттарының рухи энергияһынан (фәйезенән) файҙаланғандар һәм был ғәҙәттән тыш ваҡытты ғибәҙәттәр менән йәнләндеүҙең мөһимлеге тураһында хәбәр иткәндәр. Мөхтәрәм Баязит Бистами әйткән:

«Төндәрем көнгә әйләнмәй тороп, миңә бер сер ҙә асылманы».

❁

Аллаһҡа ғашиҡтар өсөн намаҙһыҙ, зекерһеҙ һәм тәфәккүрһеҙ (илаһи һәм рухи нәмәләр тураһында уйланыуһыҙ) үткән таң алды сәғәттәре – иң нағышлы айырылышыу сәғәттәре.

❁

Сөләймәндең (ғəләйһис-сəләм) әсәһе уға ошондай кәңәш биргән:

«Улыҡайым! Төндә бик күп йоҡлама! Төнөн оҙаҡ йоҡлау әҙәмде Хисап көнөндә фәҡиргә әйләндерә!».

Яхъя ибн Мүғәҙ (рәхматуллаһи ғәләйһи) әйткән:

«Төндәр оҙон, уны йоҡо менән ҡыҫҡартмағыҙ!..»

❁

Лоҡман (ғәләһис-сәләм) улына шундай нәсихәт биргән:

«Эй, улым! Әтәс һинән аҡыллыраҡ булмаһын! Һәр иртә ул зекер ҡыла һәм Аллаһҡа тәсбих әйтә, ә һин йоҡлайһың!».

❁

Таң алды сәғәттәре – рухи хазина. Әгәр иман эйәһе уны иҫәрҙәрсә йоҡоға сарыф итһә, ул аяҡ аҫтындағы хазинаны күрмәйенсә астан үлгән бәхетһеҙгә оҡшап ҡала.

❁

Таң алды ваҡытын йоҡоға сарыф иткәндәр, бәрәкәтле ямғырҙар алъюҫыҡҡа сүллектәрҙе, диңгеҙҙе һәм ҡая таштарҙы һуғарған кеүек, ғәҙәттән тыш илаһи бәрәкәттән мәхрүм ҡала.

❁

Таң алды сәғәттәре – йөрәктең уяныу сәғәте. Берәү уны рухи ҡараңғылыҡта үткәрһә, көнө лә рухиәт яҡтылығы менән нурланмаҫ. Берәү төндө баһалай белмәһә, көнөнөң бәрәкәтле булыуына ла ышаныс юҡ. Төндө ғәмһеҙ рәүештә йоҡлап үткәргәндең көнө лә бәрәкәттән һәм рухиәттән мәхрүм ҡалыр. Шуға күрә рухиәтебеҙҙе ялҡаулыҡ упҡынына ҡолауҙан, йоҡо әсире булыуҙан аралау лазым.

❁

Таң алды сәғәттәре – тәүлектең иң бәрәкәтле мәле. Был ваҡыттағы намаҙҙарыбыҙҙы, тәүбә ҡылыуҙарыбыҙҙы, күҙ йәштәребеҙҙе ғәнимәт тип ҡарау зарур. Яңы көнгә бай рухиәт, мул рухи күстәнәстәр менән аяҡ баҫыу өсөн, таң алды ваҡытын ғибәҙәттәр менән йәнләндереү лазым. Ошо мәлдә алынған рухи энергия, күтәренке рух көнө буйы йөрәкте гонаһтарҙан, ғафиллыҡтан һәм Аллаһтан йыраҡлаштырған барса нәмәнән һаҡларға, йөрәктең изгелеккә тартылыуын, яманлыҡҡа ҡаршы тороуын нығытырға һәләтле.

❁

Берәү Ибраһим ибн Әҙһәмгә былай ти:

– Мин төнгө намаҙға тора алмайым, берәй сара табырға ярҙам ит әле.

Әүлиә уға шундай яуап бирә:

– Көндөҙ Аллаһҡа итәғәтһеҙ булма (йәғни рухиәтеңде ағыуларҙай хәлдәрҙән һәм ғәмәлдәрҙән үҙеңде арала), ул саҡта Ул һине Үҙ хозурына баҫтырыр өсөн торғоҙор. Төндә Уның хозурында булыу ҙур мәртәбә. Гонаһкәрҙәр быға лайыҡ түгел!

Әгәр беҙ төнөн тора алмайбыҙ икән (әлбиттә, сирләп китмәһәк инде), көндөҙгө шөғөлдәребеҙҙе күҙҙән үткәрергә кәрәк:

– Гонаһлы, харам нәмәләргә туҡталып, күҙҙәребеҙ экран буйлап йөрөмәнеме?

– Ниндәйҙер гонаһлы һәм хаталы хәбәрҙәр һөйләмәнекме?

– Ҡолаҡтарыбыҙ гонаһлы нәмәләргә ҡолаҡ һалып, ғәйбәт һәм юҡ-бар хәбәр тыңламанымы?

– Ҡарыныбыҙға харам һәм мәкрүһ ризыҡ эләкмәнеме?

Йәғни һәр ваҡыт сирҙең сәбәбен эҙләргә һәм һаҡланыу сараларын күрергә кәрәк. Физик һаулыҡтың именлеге өсөн профилактик медицина мөһим булған кеүек, йөрәгебеҙҙе һаҡлау өсөн дә рухи пландағы медицина ла кәрәк...

ҒИБӘҘӘТ

Ғибәҙәттәр күңел витаминына оҡшаш. Улар Аллаһ ҡолон Раббыһынан ситләштергән гонаһ вирусына ҡаршы сара булып тора.

❁

Ғәмәлдәреңә арҡаланма! Барса ғибәҙәттәребеҙ, ғәмәлдәребеҙ һәм хеҙмәтебеҙ, доғалар кеүек үк, Аллаһтың ҡабул итеүенә мохтаж…

Иман яҡтылыҡ сығанағына оҡшаш. Нәфес һәм шайтан елдәре, шул утты һүндермәк булып, ғүмер буйы өрөп торасаҡ. Иман нурын шул елдәрҙән һаҡлаусы быяла – ул ғибәҙәт.

Кеше ни тиклем ихлас ниәт һәм тейешле халәт менән ғибәҙәтен ҡылһа, ҡәлбендәге иман нуры шул тиклем көсләрәк һәм яҡтыраҡ буласаҡ.

❁

Раббыбыҙ Аллаһ әйтә:

«Иман килтерҙек» (бер Аллаһҡа инандыҡ), - тип әйткәндән һуң, ауырлыҡтар аша һыналмайбыҙ, беҙҙе иғтибарһыҙ ҡалдырырҙар, тип уйлайҙармы әллә кешеләр?» (Әл-Ғәнкәбут (Үрмәксе), 2).

❁

Аллаһ Тәғәлә һәр уңайлы мәлдә беҙҙең иманыбыҙҙы һынай. Иманды һаҡлау Раббыбыҙ Аллаһҡа хеҙмәттә ташлама яһау һәм йомшаҡлыҡ күрһәтеү менән килешмәй. Әгәр йомшаҡлыҡ күрһәтһәк – Аллаһ һаҡлаһын! – иман нигеҙе сатнаясаҡ.

Әгәр ғәмһеҙ кеше: «Ни генә тимә, мин мосолман. Ә Аллаһ - Ярлыҡаусы һәм Рәхимле», - тип үҙен йыуата икән, һуңғы һулышында сатнаған шундай ташҡа баҫыуы һәм – Аллаһ һаҡлаһын! – иманын юғалтыуы ихтимал. Шул сәбәпле һуңғы һулышыбыҙға тиклем итәғәт менән Аллаһҡа ғибәҙәт ҡылыу лазым.

Йәшәү көсөн тәьмин итеү өсөн, ризыҡ менән үҙебеҙҙең организмға витаминдар бирәбеҙ. Шуның һымаҡ, рухи донъябыҙға ла витаминдар кәрәк.

Ғибәҙәттәр күңел витаминына оҡшаш. Улар Аллаһ ҡолон Раббыһынан ситләштергән гонаһ вирусына ҡаршы сара булып тора.

❁

Ғибәҙәт ҡылмаған, ғафиллыҡты ғәмһеҙлектән өҫтөн күргәндәр үҙен йәлләмәй, йәнен ас тота, хатта йәберләй.

❁

Иман эйәһе тәне түгел, йәне ас ҡалмауы өсөн күберәк борсолорға тейеш, сөнки тәне йәненең кейеме кеүек, ваҡыты еткәс, ул тәүге хәленә, йәғни тупраҡҡа ҡайтасаҡ. Ә йәне рухи көсөнә ярашлы күккә күтәреләсәк.

❁

Әгәр кеше беҙгә ҡиммәтле бүләктәр бирһә, әммә быны ихласыһыҙ, һытыҡ йөҙ менән эшләһә, беҙ уны ҡабул итергә теләмәйәсәкбеҙ. Әммә ысын йөрәктән, ихлас бирелгән кескәй генә бүләкте лә ҡыуанып аласаҡбыҙ. Был мәлдә күңелебеҙҙә хозурлыҡ, бүләк биреүсегә мөхәббәт тоясаҡбыҙ.

Доғалар, Аллаһ ҡолоноң Раббыһына хеҙмәте һәм ғибәҙәттәре лә шуға оҡшаш. Аллаһ ризалығы өсөн ҡылынған ғәмәлдәребеҙ ни тиклем һөйөү, иман һоҡланыуы һәм ихласлыҡ менән тулы булһа, Йәнәбе Хәҡҡ алдындағы ҡиммәте лә шул тиклем юғарыраҡ.

❁

Мөхтәрәм Шаһ Нәҡшбәнд әйткән:

«Асыулы, ғәмһеҙ саҡта һәм көсләп ҡылынған ғәмәлдәрҙә яҡшылыҡ та, игелек тә юҡ…»

❁

Бер әҙәм Баязид Бистамиға килгән һәм шулай тип һораған:

«Ҡотолоуға алып килгән нәмәгә өйрәт әле мине!». Әүлиә уға шундай кәңәш биргән:

– Ике хәҡиҡәтте онотма, ғилем булараҡ улар һиңә етер:

1. Аллаһ беҙгә муйын тамырынан да яҡын, Ул һәммәһен күрә һәм белә. (Бел, һин һәр мәл илаһи камералар күҙәтеүе аҫтындаһың!)

2. Аллаһ һинең ғәмәлдәреңә мохтаж түгел. Киреһенсә, рәхмәт тойғоһо менән, Ул һиңә кәрәк тигән хис менән изге ғәмәлдәреңде ҡылырға тейеш!)

Юғары рухиәтлеләр даимән доғала һәм хеҙмәттә, сөнки уларҙың йөрәктәре Аллаһҡа доғаның әһәмиәте тураһындағы киләһе аяттағы илаһи киҫәтеүҙән тетрәнеү халәтендә:

«Әйт: «Аллаһҡа мөрәжәғәт итмәгән булһағыҙ, Аллаһ һеҙгә иғтибар итмәгән булыр ине…» (әл-Фурҡан (Яҡшыны ямандан айырыусы Китап), 77).

❁

Әгәр бөтә кешелек Көҙрәтле Аллаһты инҡар итһә, Уның Бөйөклөгөнә һис бер зыян булмаясаҡ. Һәм, киреһенсә, әгәр бөтә кешелек, Уның барлығын белеп, берлегенә иман килтерһә, был Уның Бөйөклөгөн әҙ генә лә арттырмаясаҡ. Йәғни Йәнәбе Хәҡҡ беҙҙең ғибәҙәткә мохтаж түгел. Ул бөтә ихтыяждарҙан өҫтөн. Уға иман килтереү йәки Уны инҡар итеү Раббыбыҙға түгел, ә кешенең үҙенә генә файҙа йәки зыян килтерә ала.

❁

Аҡылы булған һәр бер һатыусы, сауҙаһынан килем алырға теләп, һатып алыусыға оҡшаһын өсөн, тауарының сифатын ҡайғырта һәм уны һатып алыусының күңеленә хуш килерлек итеп һатырға тырыша.

❁

Иман эйәһе Йәннәтте һатып ала алған баҙарға оҡшаш был донъяла ғибәҙәттәрҙе, кешеләр менән мөнәсәбәттәрҙе, изге ғәмәлдәрҙе Раббыбыҙ Аллаһ риза булырлыҡ итеп ҡылырға тырышыу кәрәк.

❁

Аллаһты танып белгән салих заттар әйткән:

«Ғибәҙәттәр кешене - Йәннәткә, ғибәҙәттәрҙәге әҙәп һәм күндәмлек Аллаһҡа алып бара һәм хәҡиҡәткә яҡынайта».

❁

Аятта әйтелә:

«Аллаһ кемдең изгелекле ғәмәлдәр ҡыласағын һынап ҡарар өсөн, үлемде, йәшәйеш-тормошто бар итте…» (әл-Мүлк (Хакимиәт), 2).

Иғтибар итһәк, Көҙрәтле Аллаһ был аятта әйтә: «اَحْسَنُ عَمَلًا» (изгелекле ғәмәлдәр), ә «اَكْثَرُ عَمَلًا» (күберәк ғәмәлдәр) тип әйтмәй. Йәғни Ул кешеләрҙең күп ғәмәл ҡылыуына түгел, ә яҡшыраҡ ғәмәл ҡылыуына әһәмиәт бирә.

❁

Әнәс бин Малик (радыйаллаһу ғәнһү) былай тип раҫлай: «Ғәмәлдәрҙең әҙәп менән ҡылыныуы уларҙың ҡабул булыуының сифаты булып тора».

❁

Ғибәҙәттәргә һәүәҫлек һәм мөхәббәт – Аллаһҡа ҡарата һөйөүҙең йөрәктәге сағылышы. Кем Аллаһты һөйә, шул Уның әмерҙәрен яратып үтәй. Шулай булғас Аллаһ һөйгән ғәмәлдәрҙе, Ул беҙҙе һөйһөн өсөн, хозур һәм шат күңел, иман һоҡланыуы менән, хәмед һәм тәсбихтәр әйтеп башҡарайыҡ. Аллаһ бит беҙҙе һөйһә, күңелебеҙгә лә Үҙе һөйгән ғәмәлдәргә һөйөү бүләк итә һәм уларҙы ләззәтләнеп башҡарыу мөмкинлеген бирә.

❁

Мөхәббәттә шундай сер бар, ул ауырлыҡты рәхмәткә әйләндерә. Иман тулы йөрәк өсөн 20 рәкәғәтле тәрәүих намаҙын һәм хатта йоҡоноң иң татлы сәғәттәрен ҡалдырған төнгө тәһәджуд намаҙын ҡылыуҙың һис бер ауырлығы юҡ. Шул уҡ ваҡытта мөхәббәтһеҙ йөрәк өсөн иртәнге намаҙҙарҙың 4 рәкәғәте лә ауыр.

❁

Пәйғәмбәребеҙ (саллəллаһу ғəлəйһи үə сəллəм) йыш ҡына киләһе доғаны ҡылған һәм өммәтенә лә уны тәҡдим иткән:

اَللّٰهُمَّ اَعِنِّى عَلٰى ذِكْرِكَ وَشُكْرِكَ وَحُسْنِ عِبَادَتِكَ

«Йәә Аллаһ! Миңә Үҙеңде зекер итергә, Һиңә рәхмәтемде еткерергә һәм Һиңә ҡабул ителгән ғибәҙәт ҡылырға ярҙам ит!» (Ҡар. Әбү Дауыт, Витр, 26)

❁

Ғибәҙәттәребеҙҙең ҡабул булыуының төп билдәһе – ул әхлағыбыҙҙың яҡшырыуы.

❁

Ғибәҙәттәребеҙҙең сифаты – рухи йөҙөбөҙҙө күҙәтеү мөмкин булған көҙгө. Әйҙәгеҙ, шул көҙгөнән халәтебеҙҙе баһалап торайыҡ, кәмселектәребеҙ булһа, уларҙы төҙәтергә тырышайыҡ.

❁

Бер заман, Абдуллаһ Дәхләүи (рәхимәһуллаһ) ураҙа тотҡанда, уның янында солтанды әрләй башлайҙар. Әүлийә әйтә:

– Ҡайғы беҙгә, беҙҙең ураҙабыҙ боҙолдо!

Шәкерттәренең береһе әйтә:

– Әфәндем, һеҙ бит ғәйбәт һатманығыҙ!

Абдуллаһ Дәхләүи быға шулай ти:

– Эйе, беҙ ғәйбәт һатманыҡ, әммә беҙ яман һүҙҙе тыңланыҡ. Ғәйбәтте һөйләүсе лә, тыңлаусы ла бер тигеҙ.

❁

Әгәр кеше хошуғ менән намаҙ ҡылһа һәм илас рәүештә Аллаһтан ҡурҡыу хисе (тәҡүәлек) менән ураҙа тотһа, уның әхлағы гүзәл буласаҡ. Ул һөйләһә, хаҡ һүҙҙәр һөйләй, аманатты (үҙенә ышанып тапшырылғанды) һаҡлай, хәләл һәм харам нормаларын үтәй, Аллаһ ҡолдарының хоҡуҡтарын боҙмай. Әгәр кеше ошо әҙәп ҡағиҙәләрен ентекле үтәһә, уның намаҙы ҡабул буласаҡ. Йәғни, береһе икенсеһенең кимәлен күрһәтә: әхүәле рухиәбеҙ әхлаҡта сағылыш таба, ә әхлағыбыҙ – әхүәле рухиәбеҙҙә.

❁

Мөхтәрәм Мәүләнә әйткән:

«Ғибәҙәттең ҡабул булыуы билдәһе икенсе ғибәҙәттең шунда уҡ тәүгеһенән һуң ҡылыныуында һәм изге ғәмәлдәрҙең бер-бер артлы эшләнеүендә күренә».

❁

Ғибәҙәттең ҡабул булыуы билдәһе икенсе ғибәҙәттең шунда уҡ тәүгеһенән һуң ҡылыныуында. Унан һуң яман ғәмәл ҡылыныуы – уның ҡабул булмауы билдәһе. Һәм иң яманы шул: яҡшылыҡ артынан килгән яманлыҡ яҡшылыҡты юҡҡа сығара.

❁

Яҡшы ғәмәлдәребеҙ күпме генә булмаһын, йөрәктә ихласлыҡ һәм тәҡүәлек юҡ икән, улар әҙ генә төртһәң дә ер менән тигеҙләнергә, ауырға торған, нигеҙе серек булған бина кеүек.

❁

Йөрәк халәтебеҙ яҡшырған һайын, ғәмәлдәребеҙ ҙә яҡшыра. Ә ғәмәлдәрҙең яҡшырыуы ниәттәрҙең яҡшырыуына алып килеп килә.

❁

Кемдең ниәте ҡараңғы – юлы яҡты булмаҫ...

❁

Әгәр радио йышлығын дөрөҫ көйләмәһәң, тауышы насар буласаҡ. Был йөрәккә лә ҡағыла. Хәҡиҡәткә һәм дөрөҫлөккә тап килмәгән хаталы фекерҙәр, яман ниәттәр һәм идеялар кешеләрҙе ғәмһеҙлеккә этәрә, һөҙөмтәлә гонаһлы ғәмәлдәргә һәм тәртипкә.

❁

Хәҙистә әйтелә:

«Аллаһ Тәғәлә ихлас ғәмәлдәрҙе һәм Үҙенең ризалығы өсөн ҡылынған ғәмәлдәрҙе генә ҡабул итә» (Нәсаи, Йыһад, 24/3138).

❁

Аллаһ Тәғәлә ҡолдарының Үҙ ризалығы өсөн түгел, башҡа маҡсаттар өсөн ҡылынған ғәмәлдәрен өҙөр һәм йөҙҙәренә ташлар. Бер ҡудси хәҙистә Раббыбыҙ Аллаһтың шундай һүҙҙәре бар:

«Әгәр берәү үҙенең ғәмәлдәрендә Миңә тиңдәш эҙләһә, Мин унан да, ул Миңә тиңдәш ҡылғанынан да баш тартырмын» (Мөслим, Зуһд, 46).

❁

Беҙҙең иманыбыҙ, ғибәҙәттәребеҙ һәм изге ғәмәлдәребеҙ ғүмеребеҙ буйына киләһе тормош өсөн йыйып ҡуйған һаҡламыбыҙ кеүек. Әммә ләкин Йәнәбе Хәҡҡ уларҙы ҡабул итмәһә, айырыуса беҙ үҙебеҙҙең сауапты рийә, мин-минлек, һауаланыу һәм көнсөллөк менән юҡ итһәк, тирмәнгә тишек тоҡ менән иген алып барған моңһоҙҙарҙан бер нисек тә айырылмабыҙ.

Яҡшы ғәмәлдәребеҙ сауаптарын юҡҡа сығарған яман ғәмәлдәрҙән дә алыҫ булыу зарур.

❁

Яхъя ибн Мүғәҙ (рәхмәтуллаһи ғәләйһи) әйткән:

«Эй, дуҫ! Иман капиталыңды һаҡла. Монафиҡлыҡ һәм яман холоҡ ҡомаҡтары уларҙы кимереп бөтмәһен!».

❁

Ниәтенең ихласлығына ҡарап, Раббыбыҙ Аллаһ Үҙ ҡоло өсөн әҙҙе күпкә әйләндерә. Ҙур булмаған изге ғәмәл өсөн, Үҙенең рәхмәте һәм йомартлығы менән тауҙай бүләктәр бирә.

Киреһенсә, әгәр ҙә ки изге ғәмәлдәрендә рийә, ихласһыҙлыҡ булһа, тыштан һоҡланғыс тауҙар кеүек тойолған ғәмәлдәр өсөн дә бер нәмә лә бирелмәй.

❁

Әҙәм балаһының асыҡ дошманы булған шайтан, әгәр әҙәм балаһын гонаһҡа батырып, тура юлдан яҙҙыра алмаһа, үҙенең тактикаһын үҙгәртә. Киләһе аятта Аллаһ Иблистең шундай һүҙҙәрен килтерә:

«Һин мине аҙғынлыҡҡа мәхкүм иттең, шуға күрә мин дә, уларҙы аҙҙырыр өсөн, Һинең тура юлыңда ултырасаҡмын» (әл-Әғраф (Кәртәләр), 16).

Йәғни Иблис, кешеләрҙе аҙҙырырға тырышып, ялған, гонаһлы юлдарҙы ғына түгел, тура юлды ла (сырат әл-мүстаҡым) файҙаланырға тырыша.

Мәҫәлән, кешегә мәсет йәки хәйриә йорто төҙөргә ҡамасаулай алмаһа, уны үҙ исеме менән атау теләгән һеңдерергә керешә. Шулай итеп ул, кешенең ихлас ниәтенә рийә, дан көҫәү, һауаланыу ҡушып, зыян һала, изге ғәмәленең сауабын юҡ итергә ынтыла.

Шуға күрә, иманлы әҙәм мәсет, Ҡөрьән мәктәбе һәм башҡа хәйриә йорттары төҙөһә, уларҙы үҙ исеме менән атауҙан аслан ҡасырға тейеш. Әммә үҙе үлгәндән һуң иҫтәлек итеп быны эшләйҙәр икән, уның зыяны юҡ. Киреһенсә, уны яҡшы яҡтан иҫкә алырға сәбәп буласаҡ.

❁

Мөхтәрәм Баязид Бистами әйткән:

«Әгәр кеше йәмәғәт алдында үҙен яманлаһа, асылда ул үҙен маҡтай. Был рийәнең бер билдәһе».

❁

Нәфестең бер хәйләһе шунда: ул, маҡталыуға лайыҡ булыр өсөн, артыҡ итәғәтле булырға тырыша. Ысынлап та, ҡайһы бер кешеләр, нәфесен ҡәнәғәтләндереү, һәм кешеләр: «Ниндәй баҫалҡы кеше!» - тип әйтһен өсөн, үҙҙәренең күндәмлеген күрһәтергә ынтыла. Был ихласһыҙ рийә халәте асылда «күндәмлек маҡтаныуы», йәғни итәғәтлелек күлдәге кейеп маҡтаныу. Мәҫәлән, кеше шулай тип әйтеүе ихтимал:

«Мин көсһөҙ – мин Ҡөрьәнде бер аҙнала ғына уҡып сыға алам».

«Мин тик биш тапҡыр ғына хаж ҡыла алдым».

«Мин фәҡир, бер генә мәсет төҙөй һәм шунса ярлыға ғына ярҙам итә алдым…»

Былар һәммәһе – күндәмлек ҡиәфәтендәге рийә һәм һауаланыу. Йәғни Аллаһҡа ғына бағышланырға тейешле ғәмәлдәр тирә-йүндәге кешеләрҙән танылыу өсөн һатыла. Ә бит бындай ғәмәлдәр Аллаһ ҡоло һәм уның Раббыһы араһында ғына ҡалырға тейеш.

Раббыбыҙ һәр ваҡыт ихласлыҡ талап итә. Ул ниәттәребеҙҙең ихлас булыуын теләй: ғәмәлдәребеҙҙе, бер нәмә лә өмөт итмәйенсә, бары тик Аллаһ ризалығы өсөн ҡылыуыбыҙҙы теләй, сөнки ҡоллоҡ, ғибәҙәт ҡылынырға тейешле зат тик бер Аллаһ.

❁

Тәүхид диненә инанған кеше тышҡы донъялағы ялған илаһтарҙы инҡар иткән һәм тик Аллаһты ғына Раббыһы тип таныған кеүек, Аллаһ менән махсус бер осрашыу булған ғибәҙәттәр ваҡытында ла ул тәүхид рухиәтенә һәм мәғәнәһенә тоғро булырға тейеш. Фани донъя менән бәйле уйҙар һәм нәфес теләктәре Раббыһы менән уның араһына баҫырға тейеш түгел.

❁

Киләһе нәмәләр тураһында ныҡлы фекер йөрөтөп ҡарау зарур. Беҙгә ғүмер биреүсе, ниғмәттәрен биреүсе – бер Аллаһ. Улай ғына ла түгел, бүләк итеп биргән ниғмәттәрен Үҙенең ризалығын өмөт итеп сарыф итеүсегә Ул Йәннәт вәғәҙә итә. Шундай бөйөк ниғмәтте Унан башҡа кем бирә ала? Ниндәй фани бәндә быға һәләтле?!

Эш шулай икән, Аллаһ ризалығы өсөн генә ҡылынған ғибәҙәткә, ике йөҙлөләнеп, фани йән эйәләрен ҡатнаштырыуҙан да ҙурыраҡ иҫәрлек бармы?!

❁

Онотмайыҡ, дәһшәтле Ҡиәмәт көнөндә ғибәҙәттәребеҙ һәм изге ғәмәлдәребеҙ өсөн сауапты фани бәндәләр түгел, бары тик Аллаһ бирәсәк!

❁

Бер заман Пәйғәмбәребеҙ (саллəллаһу ғələйһи үə сəллəм) әйткән:

– Мин иң нығы һеҙ кесе ширк ҡыла башларһығыҙ, тип хәүефләнәм.

Эргәһендә тороусылар һорау бирә:

– Кесе ширк нимә һуң ул, йәә Рәсүлүллаһ?

Пәйғәмбәребеҙ (саллəллаһу ғələйһи үə сəллəм) шундай яуап бирә:

– Рийә, йәғни күрһәтеп эшләү (күҙ буяу). Ҡиәмәт көнөндә, кешеләрҙең ғәмәлдәре хисапланғанда, рийә ҡылғандарға Аллаһ әйтәсәк: «Фани донъяла кем алдында рийә ҡылғанһығыҙ (изге ғәмәлдәрегеҙҙе кем алдында күрһәтеп эшләгәнһегеҙ) шуларға барығыҙ! Уларҙан сауап ала алырһығызмы икән?!» (Әхмәд, V, 428, 429).

❁

Ғибәҙәттәрҙә Аллаһ ризалығынан башҡа ниндәйҙер маҡсат ҡуйыу йәшерен күп илаһлыҡ (ширк) булып тора. Изге ғәмәлдәрҙе үлемгә дусар кешеләр ризалығы өсөн ҡылыу – уларҙы файҙаһыҙға әйләндереү тигән һүҙ.

❁

«Йәә Аллаһ! Минең маҡсатым — бары тик Һин, һәм мин бары тик Һинең ризалығыңды теләйем» доғаһы ғүмеребеҙҙең һәр мәлендә йөрәктәребеҙҙә яңғырап торорға тейеш.

❁

Нәжип Фазыл Ҡысаҡйөрәк, Аллаһ дуҫтарының ихласлығын шулай тасуирлай:

Нәфес кеҫһә әгәр ғибәҙәткә,

“Бәхетһеҙлек был”, - тиҙәр әсенеп.

Ҡараштары ситкә сайпылышһа (Аллаһтан ситкә),

Ғүмерҙәре үтә йәш түгеп.

❁

Намаҙ ҡылғанда, барсаһын, хатта йөрәгендә ни булыуын да белеп торған Аллаһ ҡашына баҫып, иман эйәһе һәр ваҡыт тәрбиә ала. Мөьмин, хошуғ менән ҡылынған намаҙ ваҡытындағы халәтен һаҡлап, илаһи хозурҙа күрһәтеү оят булған бөтә яман хис-тойғоларҙан арынырға тырышырға тейеш. Был йәһәттән хошуғ менән бөтә ғәмәлдәре ентекле ҡылынған намаҙ рухи тәрбиә булып тора.

❁

Намаҙ – ғибәҙәт акты, ул итәғәтлелекте (хошуғты) арттырырға, йәғни һәр мәл илаһи камералар алдында тороуыңды иҫтә тоторға мөмкинлек бирә. Рәббыһы хозурында рухиәтен миғражда һымаҡ тойған Аллаһ ҡоло күңел нескәлегенә ирешә, намаҙҙан һуң да Аллаһ риза булмаған халәттәрҙән, ғәмәлдәрҙән йыраҡ булырға тырыша. Икенсе һүҙ менән әйтһәк, намаҙ – гонаһтарға ҡаршы тороу һәләтен арттырған ихтыяр көсө тәрбиәләү.

❁

Изге аятта әйтелә: **«…Хаҡтыр, намаҙ бит боҙоҡлоҡтарҙан, аҡылға һәм шәриғәткә һыймаған нәмәләрҙән һаҡлай…»** (әл-Ғәнкәбут (Үрмәксе), 45).

Шуға күрә, намаҙҙарыбыҙҙың ҡабул булыу-булмауын гонаһтарҙан ни тиклем йыраҡ тороуыбыҙҙан күргә була.

❁

Намаҙ – үҙенә күрә ҡолдоң әхлағын билдәләү ул. Әхлаҡ камиллыҡҡа ирешмәй тороп, ғибәҙәттә рухи энергия (фәйез) булмаясаҡ. Мәҫәлән, Аллаһ ҡолдарының хоҡуҡтарын хөрмәт итмәгәндәр һәм алдашҡандар хошуғ менән намаҙ ҡыла алмаҫ.

❁

Ҡабул булған намаҙ – бөтә яманлыҡтарҙан, әҙәпһеҙлектән азат булған кешенең намаҙы. Әгәр кеше, хәҡиҡәткә ҡаршы барып, Аллаһтың асыуына дусар булырлыҡ ғәмәлдәр ҡыла икән, асылда ул намаҙ ҡылмай. Был кеше, үҙенең тәһәрәтен һәм намаҙын ҡайтанан ҡарап, хатаһын табырға һәм төҙәтергә тейеш.

❁

Шулай ҙа була: кеше намаҙ ҡыла, ә рибанан (проценттарҙан) ҡасмай; ураҙа тота, әммә ғәйбәт һөйләй; зәкәт түләй, әммә Аллаһ ҡолдарының хоҡуҡтарын боҙа; мәсеттә мосолман, әммә өйҙә һәм эштә үҙен диндә булмаған кешеләр кеүек тота... Бөтә был ҡаршылыҡлы хәлдәр – нәфес ләүүәмә сифаттары, йәғни, берсә гонаһ ҡылып, берсә тәүбә ҡылып, үҙ-үҙен тәнҡитләүсе нәфес. Ислам – бер бөтөн, уның бер генә өлкәһен дә иғтибарһыҙ ҡалдырырға ярамай.

❁

Намаҙ ваҡытында йөрәгеңде Аллаһтан йыраҡайтҡан бөтә нәмәнән һаҡла. Бел, һин Аллаһ ҡашында баҫып тораһың. Ул ваҡытта намаҙ кешене тәрбиә ҡыла һәм бөтә гонаһтарҙан һаҡлай.

❁

Намаҙҙы физик рәүештә ҡылғандар, әммә йөрәктәре донъяуи эштәр менән мәшғүл булғандар Аллаһ хозурында миғражға ирешеү урынына бөйөк ғәмһеҙлектә ҡала. Аллаһ Сүбхәнәһү үә Тәғәлә шул рәүешле намаҙ ҡылыусылар тураһында әйтә:

«Уларҙың намаҙ уҡыуы – гонаһ йыйыу ғына. Уларҙың намаҙы ихлас һәм етди түгел» (әл-Мәғүн (Саҙаҡа), 4-5).

❁

Аллаһ беҙҙән итәғәтлек (хошуғ) менән ҡылынған ихлас һәм кәмселекһеҙ намаҙ көтә. Изге аятта әйтелә:

«Һис шикһеҙ, мөьминдәр Сәғәҙәткә ирешәсәк. Улар намаҙ-ғибәҙәттәрендә итәғәт менән сәждә итә» (әл-Мөьминүн (Мөьминдәр), 1-2).

❁

Мөхтәрәм Мәүләнә әйткән:

«Диҡҡәтле бул һәм тышҡы яҡтан ғына түгел, рухи йәһәттән дә файҙа ал. Ем сүпләгән ҡош кеүек, башыңды сәждәгә эймә һәм, Аллаһтың бөйөклөгөн танымайынса, уны күтәрмә! Пәйғәмбәребеҙ (салләллаһу ғәләйһи үә сәлләм) нәсихәтен тыңла: *«Кешеләр араһында иң яман бур – үҙ намаҙынан урлаусы бур»!»*

❁

Мөхтәрәм Мәүләнә фәйездән мәхрүм йөрәктәргә мөрәжәғәт итә: «Эй, ғафил! Әгәр һиң, сәждә ҡылғанда, Аллаһҡа ихлас рәүештә йүнәлә алһаң һәм тулыһынса «Минең Раббым Аллаһ бөтә кәмселектән пак!» һүҙҙәренең мәғәнәһен тулыһынса аңлай алһаң ине!». Йәғни, әгәр һин ғибәҙәтте физик рәүештә генә түгел, йөрәк менән ҡыла алһаң ине!».

❁

Аллаһ Сүбхәнәһү үә Тәғәлә ҡолдарын Үҙенә яҡынайырға саҡыра:

«…Сәждә ит. Аллаһҡа яҡынлаш!» (әл-Ғәләҡ (Уҡмашҡан ҡан), 19).

Намаҙҙағы маңлайҙарыбыҙ менән бергә йөрәктәребеҙ ҙә ни тиклем сәждәгә китә ала, шул тиклем беҙ Көҙрәтле Раббыбыҙға яҡыная алабыҙ.

❁

Аллаһ Тәғәлә намаҙҙарыбыҙҙы оло әҙәп һәм итәғәтлелек менән ҡылыуыбыҙҙы теләй. Юғары урын биләгән кеше янына барғанда, тышҡы ҡиәфәтебеҙгә, халәтебеҙгә, үҙ-үҙебеҙҙе тотошобоҙға ныҡ иғтибар бирәбеҙ. Шулай уҡ намаҙҙа Ғаләмдәр Раббыһы ҡашында ла әҙәп тураһында оноторға тейеш түгелбеҙ.

Изге аятта әйтелә:

«Әй, Әҙәм балалары! Намаҙ уҡый торған ергә барғанда, һәр ваҡыт пак кейемдәр кейегеҙ…» (әл-Әғрәф (Кәртәләр), 31).

Хәҙистәрҙә намаҙ алдынан мисүәк ҡулланырға, хуш еҫле майҙар һөртөргә һәм йома намаҙы алдынан ғөсөл алырға ҡушыла, сөнки пакланыуыбыҙ һәм әҙерләнеүебеҙ Раббыбыҙ Аллаһҡа ҡарата итәғәтле булыуыбыҙҙың дәлиле булып тора.

Бөйөк шәйехтәр был мәсьәләгә ҙур әһәмиәт биргән, хатта ки ғибәҙәт алдынан намаҙлыҡ ситендәге суҡтарҙы ла матурлап ҡуйыр булғандар.

❁

Намаҙ ваҡытында Ғаләмдәр Раббыһы ҡашында тороуыбыҙҙы аңларға тейешбеҙ. Унан башҡа бөтә нәмәгә бәйлелекте өҙөү һәм, үҙебеҙҙең зәғифлекте танып, бөйөк күндәмлелек, итәғәтлелек, түбәнселек менән йөрәгебеҙҙе Аллаһ Тәғәләгә йүнәлтеү, тапшырыу зарур. Аллаһтың бөйөклөгөн, ә үҙебеҙҙең уға

мохтаж булыуыбыҙҙы уйлап, ҡурҡыу һәм өмөт менән рөкүғка эйеләбеҙ һәм сәждәгә китәбеҙ. Сәждәгә киткәндә, әйтерһең, нәфесебеҙҙе ер менән тигеҙләйбеҙ, Йәнәбе Хәҡта иреп юғалабыҙ.

❁

Йөрәге даимән Аллаһ менән булғандарға донъя эштәре менән шөғөлләнеүҙең зыяны юҡ. Әммә ҡәлбе Йәнәбе Хәҡтан йыраҡ булған ғәфләт эсендәгеләргә фани донъяның ығы-зығыһы ғибәҙәттәр юлына күпме кәртә ҡуя!

❁

Мөхтәрәм Мөхәммәд Парса (рәхимәһуллаһ), бөйөк салих заттарҙың береһе, хажға китеп барған ерҙән Бағдадта туҡталғанда, шөғөлө аҡса алмаштырыу булған нурлы йөҙлө йәш егетте күрә. Барса ваҡытын был фани донъя сауҙаһына, алыш-бирешкә бағышлай, тип уйлап, ул бик хафалана:

«Ҡайһылай йәл! Үҙен ғибәҙәткә бағышлар саҡта, ул фани донъяның хәстәренә сумған!». Ниндәйҙер бер мәлдә, күңел күҙенә бағып, Мөхәммәд Парса хайран ҡалып аңлай: алтын менән алыш-бireш иткән егет ҡәлбе Аллаһҡа бағланған. Был юлы ул йәш егетте маҡтап ҡуя:

«Мәә шәә Аллаһ! Ҡулдары – хеҙмәттә, ә йөрәге Һөйөклөһө менән!».

❁

Раббыбыҙ ғибәҙәттәребеҙҙә йөрәк һәм тән гармонияһын күрергә теләй. Йәғни намаҙ ваҡытында тәндең ҡиблаһы – Ҡәғбә, ә йөрәк ҡиблаһы – Ҡәғбә Хужаһы.

❁

Ләйләгә мөхәббәт утында янған Мәжнүн сүллеккә юл тота һәм яңылыш намаҙ ҡылған кеше алдынан үтә. Сәләм[13] биргәс һәм намаҙын тамамлағас, ир был ғашиҡҡа асыуланып ҡысҡыра:

– Эй, ғафил! Намаҙ уҡыусы алдынан үтергә ярамағанын белмәйһеңме ни?!

Мәжнүн уға әйләнә һәм әйтә:

– Ләйләгә мөхәббәт утында янып, мин һине күрмәгәнмен. Әммә һин намаҙҙа, үҙең һөйгән Аллаһ ҡашында баҫып тороп, нисек мине күрә алдың?!

❁

Мөхтәрәм Шаһ Нәкшбәнд әйткән:

13. Сәләм – намаҙ тамамланған «Әс-сәләмү ғәләйкүм үә рәхмәтуллаһ» («Һеҙгә тыныслыҡ һәм Аллаһтың рәхмәте булһын») һүҙҙәре.

«Аллаһ ҡоло дүрт нәмә ярҙамында ғына күндәмлек (хошуғ) менән намаҙ ҡыла ала:

1. Ризыҡ ейгәндә йөрәге уяу булһын өсөн, тик хәләлде генә ҡулланыу.

2. Тәһәрәт алғанда, ғафиллыҡтан йыраҡ булыу.

3. Башланыс тәкбирҙе[14] әйткәс, Раббың алдында тороуыңды күҙ алдына килтереү.

4. Намаҙҙан тыш та Аллаһты онотмау».

❁

Намаҙыбыҙ миғражыбыҙға әйләнһен өсөн, беҙ Уны күрмәһәк тә, Аллаһ беҙҙе һәр мәл күреп тороуын аңлап ҡылыу лазым.

❁

Намаҙ – Аллаһ ҡашына баҫҡан иман эйәһенең рухиәте миғражы.

Ниндәй һуң ул ундай намаҙ?

– Ундай намаҙҙа йөрәк бөтә ихласлығы, күндәмлеге, итәғәтлелеге менән Раббыбыҙға йүнәлә, үҙен Уға тапшыра…

– Әйтерһең, Аллаһҡа һуңғы тапҡыр доға ҡылырға мөмкинлек бирелгән, әйтерһең, кеше был донъяны ташлап китергә йыйына…

❁

Мүғәҙ ибн Джәбәл (радыйаллаһу ғәнһү) улына шундай өгөт-нәсихәт бирә:

«Улыҡайым, намаҙ ҡылғанда, уны ғүмереңдәге һуңғы намаҙ һымаҡ ҡыл! Киләһе намаҙҙы ҡылырға өлгөрәм, тип өмөтләнмә!».

❁

Аллаһ Илсеһе (салләллаһу ғәләйһи үә сәлләм) әйткән:

«Намаҙыңды (ғүмерең менән) хушлашыу намаҙы кеүек ҡыл» (Ибн Мәджә, Зүһд, 15).

Шул рәүешле ул был ғибәҙәттә үлем хаҡында уйланыу (тәфәккүр әл-мәүт) булған тәрбиә элементы барлығын да асып һалған. Йәғни намаҙ – фани донъянан хәҡиҡи тормош булған Әхирәткә рухи сәфәр; көнөнә биш тапҡыр Раббыбыҙ Аллаһҡа үҙеңдең буйһоноуыңды, итәғәтлелегеңде, тоғролоғоңдо һәм

14. Башланғыс тәкбир, тәкбир ифтитах – намаҙҙың башланыуын белдергән «Аллаһу әкбәр» («Аллаһ бөйөк») һүҙҙәре.

хеҙмәтеңде күрһәтеү; үҙенә күрә беҙгә сит яҡ булған фани донъялағы рухи осрашыуҙан насибыңды алыу өсөн рухи дисциплина.

❁

Намаҙ – фани донъяларҙан юғары донъяларға миғраж. Мөьмин, уның бөтә элементтарын (тәғдил-и әрҡән) ентекле үтәп, һәм күндәмлек менән донъя хәстәренә ҡайтҡанда, үҙен үлемдән һуң терелгәндәй тойорға, бар тирә-йүнгә Әхирәт тәҙрәһе аша бағырға тейеш. Шундай юғары рухиәткә эйә булғандың тормош юлдашы шайтан була алырмы? Улар үҙ нәфестәренең әсиренә әйләнерме? Донъя һәүәҫлектәренә улар күңел бағлармы?

❁

Ислам индивидуализмды, мин-минлекте, үҙеңә бикләнеп, йәмғиәттән айырылыуҙы тыя һәм альтруизмды, иман ҡәрҙәштәреңменән аралашыуҙы, йәмәғәт менән бергә булыуҙы хуплай. Уға ирешеүҙең иң гүзәл сараһы – мәсеттәрҙә йәмәғәт менән бергә намаҙ ҡылыу, ә был иһә мосолмандар берлегенең символы, бер Аллаһҡа ҡоллоҡтоң аяты (билдәһе).

❁

Йәмәғәт менән йома, байрам һәм тәрәүих намаҙҙарын ғына түгел, шулай уҡ биш ваҡыт намаҙҙы ҡылыу – беҙҙең өсөн мөһим бурыс. Киләһе риүәйәткә ифрат тәрән мәғәнә һалынған:

Һуҡыр сәхәбә Абдуллаһ ибн Умм Мәктум (радыйаллаһу ғәнһү) бер заман Аллаһ Илсеһенә (салләллаһу ғәләйһи үә сәлләм) килә һәм әйтә:

– Йәә Рәсүлүллаһ! Минең йортом һинең мәсетеңдән йыраҡ, ҡулымдан тотоп оҙатыр кешем дә юҡ. Юлда төрлө зарарлы бөжәктәр осрауы ла ихтимал. Намаҙымды өйҙә ҡылырға мөмкинме, рөхсәт итәһеңме быны?

Пәйғәмбәребеҙ (салләллаһу ғәләйһи үә сәлләм) бер аҙ уйланып тора һәм һорау бирә:

– *«Намаҙға ашығығыҙ!»*[15] тигәнде ишетәһеңме?

– Эйе, йәә Рәсүлүллаһ!

– *Улайһа мәсеткә йөрөүҙе дауам ит!* (Нәсаи, Имамат, 50).

Һәм был һуҡыр кешегә төбәлгән нәсихәт… Ә беҙ ишетәбеҙме ул нәсихәтте?

❁

Аллаһ Илсеһе (салләллаһу ғәләйһи үә сәлләм) әйткән:

15. «Намаҙға ашығығыҙ!» - аҙандың намаҙға саҡырыу һүҙҙәре.

«Әгәр мәсеткә йөрөүҙе ғәҙәт итеп алған кешене күрһәгеҙ, ул иманлы, тип шаһитлыҡ ҡылығыҙ…» (Ибн Мәджә, Мәсәджид, 19).

Ана шундай иманға эйә булған ата-бабаларыбыҙ ҡала уртаһында - ҙур мәсеттәр, ә мәхәлләләрҙә, берәү ҙә йәмәғәт намаҙы ҡылыу бәрәкәтенән мәхрүм булмаһын өсөн, бәләкәйерәктәрен төҙөгәндәр.

Беҙ, уларҙың иман юлындағы һиҙгерлегенән үрнәк алып, йәмәғәт намаҙына йөрөүҙе үҙебеҙҙең төп сифатыбыҙ итеп алырға тейешбеҙ.

❁

Изге аятта әйтелә:

«Аллаһҡа иман килтергәндәр, Әхирәт көнөнә инанғандар, намаҙ ҡалдырмағандар, зәкәт биргәндәр һәм Аллаһтан башҡа берәүҙән дә ҡурҡмағандар ғына мәсет ҡорҙороғо тейеш…» (әт-Тәүбә, 18).

Иман сифаттарының береһе - **«мәсеттәрҙе төҙөкләндереү»**, йәғни иманлыларҙың мәсеттәрҙе йәнләндереүе. Мөхәммәт (саллəллаһу ғəләйһи үə сəлləм) өммәтенә бөтә ер мәсет булараҡ бүләк ителә. Һәм уларҙы тултырыу мөһим. Әгәр мәсеткә йөрөүсе юҡ икән, оҙаҡламай ул һағышлы бер харабаға әйләнә. Уны яңынан йәнләндереү, тултырыу – иман эйәләренең бурысы.

❁

Беҙҙең ата-бабаларыбыҙ яһилиәт заманында мәсеттәрҙе, иманды һаҡлау өсөн хатта ғүмерҙәрен аямағандар, меңдәрсәһе Себер яҡтарында баштарын һалғандар. Әгәр беҙ бөгөн мәсеттәрҙе буш тотһаҡ, иртәгә Ҡиәмәт көнөндә нисек уларҙың күҙенә ҡарарбыҙ? Ҡиәмәт көнөндә Пәйғәмбәребеҙҙән (саллəллаһу ғəләйһи үə сəлləм) шәфәғәт ҡылыуҙы ялбарғанда, мөһим Сөннәтте тотмағанбыҙҙы иҫкә төшөрһәләр, нимә тип аҡланырбыҙ?

❁

Мөхтәрәм Ғүмәр (радыйаллаһу ғәнһү) урындағы идара башлыҡтарына былай тип яҙған:

«Минең өсөн һеҙҙең иң мөһим ғәмәлегеҙ — намаҙ. Кем быны нигеҙ итеп алған һәм уның башланыу ваҡытына иғтибарлы – үҙ динен һаҡлар. Ә кем ҡылмайынса юғалтһа, оҙаҡламай иманын да юғалтасаҡ» (Муватта, Вукуту-ас-салат, 6).

❁

Аҙан тауышы яңғырап, Аллаһ ҡашына барып баҫыу кәрәк булғанда, Пәйғәмбәребеҙ (саллəллаһу ғəләйһи үə сəлləм), тормошо туҡталған һымаҡ, бөтә эшен ҡалдырыр булған. Ул намаҙҙы ваҡыты ингәс тә ҡылған, ә аҙаҡ, ғибәҙәт рухиәте юғарылығын һаҡлап, йәнә эшенә тотонған.

Шулай уҡ беҙ ҙә, Пәйғәмбәребеҙ (салләллаһу ғәләйһи үә сәлләм) Сөннәтенә эйәреп, бөтә көндәлек эштәребеҙҙе намаҙ ваҡытына ярашлы ҡора алһаҡ, намаҙ яңғырау менән, Раббыбыҙ хозурына уҡталһаҡ, Аллаһ бойорһа, беҙ Уның ризалығына ирешербеҙ. Бынан тыш, намаҙ мәсьәләһендә үҙебеҙгә ҡарата талапсанлыҡ тәрбиәләһәк, тормошобоҙҙа ул айырым бер бәрәкәт һәм рәхмәт булып сағылыш табасаҡ.

❁

Намаҙ – иманлы әҙәмдең төп бурысы. Әгәр аҙан яңғырағас та ҡылынһа, ул бәндәгә күңел хозурлығы бүләк итә, Раббыбыҙ намаҙға өҫтөнлөк биреүселәрҙең эштәрен еңеләйтә. Әммә намаҙ, кисерерлек сәбәптәрһеҙ һуңға ҡалдырылһа, уның рухи энергияһы (фәйезе) кәмей. Намаҙҙы кисектереүгә сәбәп булған эштәр ҙә бәрәкәттән мәхрүм ҡала.

❁

Һис шикһеҙ, әгәр мөьмин, аҙан тауышын ишеткәс, машинаһын туҡтатып йәки автобустан сығып, йәмәғәт менән намаҙ ҡылһа, сәфәре лә уңышлы булыр. Әгәр мосолман, эшен туҡтатып, намаҙ ҡылһа, эше лә ырамлы барыр.

Әгәр уҡыусы, аҙан тауышын ишетеп, китабын япһа һәм, тейешенсә намаҙ ҡылғандан һуң, дәресенә тотонһа, зирәклек артҡанын, йөрәге яҡтырғанын тойор.

❁

Онотмайыҡ, намаҙ кешене зинанан, гонаһтарҙан аралай, йәғни дин һәм аҡыл насар тип иҫәпләгән бөтә нәмәгә кәртә ҡуя. Шәриғәт рөхсәт иткәндәргә иһә һәм изге ғәмәлдәргә ул ҡамасауламай. Киреһенсә, иманлы кеше, эшендә тәнәфес яһап, бөтә элементтары (тәғдил-и әрҡән) ентекле үтәлгән, хошуғ менән ҡылынған намаҙҙан һуң шөғөлөн дауам итһә, барса эше файҙалы һәм бәрәкәтле булыр.

❁

«Минең ваҡытым юҡ, минең һис бер мөмкинлегем юҡ, мин балаларҙы, эшемде ҡалдыра алмайым…» кеүек аҡланыуҙар табып, донъя мәнфәғәттәрен, нәфес һәүәҫлектәрен алға ҡуйып, намаҙҙарға, мәсеттәргә, иман эйәләренең зекер мәжлестәренә һәм уның тура юлында тырышлыҡ күрһәтеүгә битараф булғандарҙы Раббыбыҙ Аллаһ ҡаты киҫәтә:

«Эй, иман килтергән халыҡ, малдарығыҙ (байлығығыҙ), балаларығыҙ Аллаһты оноттормаһын. Кем Аллаһтың исемен онота, шул зыян-зәхмәт күрер» (Монафиҡтар (Ике йөҙлөләр), 9).

❁

Изге аятта әйтелә:

«Бар шундай кешеләр: уларҙы сауҙа һәм алыш-биреш эштәре лә Аллаһты зекер итеүҙән, (ваҡытында) намаҙ уҡыуҙан, зәкәт биреүҙән айыра алмай. Улар, дәһшәтле көн килеп, йөрәктәрҙе тетрәтә торған, ҡараштар әйләнә торған Көндән (Ҡиәмәттән) ҡурҡалар» (ән-Нур, 37).

❁

Аллаһ Тәғәлә йәмәғәт менән ҡылынған намаҙҙар өсөн ҙур сауаптар вәғәҙә итә. Бынан тыш йәмәғәт менән ҡылынған намаҙ күбеһенсә ҡабул булыусан. Йәмәғәттәге тәҡүәле ҡолдары хаҡына Аллаһ Тәғәлә башҡаларҙың да намаҙын ҡабул итер тигән өмөт бар.

❁

Мөхтәрәм Малик имам әйткән:

«Мәсеткә килеп ингән һәм йөрәгендә монафиҡлыҡ ғәләмәте булған әҙәм ситлектәге сәпсеккә оҡшаш. Ситлек ишеге асылыу менән, ул осоп китә».

Һәм әгәр был шулай икән, етди сәбәптәреҙ йәмәғәт намаҙында ҡатнашмауыларҙың хәле тураһында уйланырға кәрәк...

❁

Намаҙ, ураҙа, зәкәт, хаж… Былар мотлаҡ ҮТәлергә тейешле дини ғәмәлдәр. Әммә уларҙы ҡабул итеүебеҙ дәрәжәһе халәтебеҙҙе һәм әхлағыбыҙҙы күрһәтеп тора.

❁

Аллаһтың һөйөклө ҡоло булыу өсөн, һәр ваҡыт һәм һәр ҡайҙа ихласлыҡ (ихсан) мөһим шарт:

– Ғибәҙәттәреңдә, Аллаһ һине күреп торғандай, итәғәтлелек (хошуғ) менән ҡылыу…

– Аллаһ юлында тырышлыҡ күрһәтеү, дәғүәт ҡылыу; ғәмәлдәреңдә, Раббың һине күреп торғандай, физакәрлек һәм нескәлек менән атҡарыу…

– Кешеләр менән мөнәсәбәттәреңдә, Аллаһ һине күреп торғандай, ғәҙел, ғәфү итә белеүсән, сабыр, күркәм холоҡло булыу…

– Саҙаҡаларҙы, Аллаһ һине күреп торғандай, ихлас күңелдән биреү…

❁

Изге аятта әйтелә:

«Эй, мөьминдәр! Кешеләргә күрһәтер өсөн генә саҙаҡа-мал бирмәгеҙ. Аллаһҡа, Әхирәт көнөнә ышанмаған кәфер кеүек, хөсөтлөк менән, кешене рәнйетеп, саҙаҡа бирмәгеҙ» (әл-Баҡара (Һыйыр), 264).

❁

Әгәр намаҙ кешене яманлыҡтан араламай икән, тимәк ул тейешенсә ҡылынмай. Әгәр ураҙа кешене аҙғынлыҡтан биҙҙермәй икән, тимәк ул тейешенсә тотолмай.

❁

Хәҙистә әйтелә:

«Әгәр кеше ялғандан, ялған ғәмәлдәрҙән һәм яһиллыҡтан тыйылмай икән, Аллаһ уның ашау-эсеүҙән баш тартыуына (ураҙаһына) мохтаж түгел!» (Бохари, Саум, 8).

❁

Ураҙа ваҡытында ауыҙыбыҙға ризыҡ эләгеүҙән нисек һаҡланһаҡ, ауыҙыбыҙҙан сыҡҡан һәр һүҙ өсөн дә шулай борсолорға тейешбеҙ.

❁

Хәҙистә әйтелә:

«Ураҙа тотҡанда (бигерәк тә) арағыҙҙан һис кем яман һүҙ һөйләмәһен һәм бәхәсләшмәһен. Әгәр кемдер әрләй башлаһа йәки талашырға теләһә, әйтһен: «Мин ураҙалы!» (Бохари, Саум, 9).

❁

Ғибәҙәттәребеҙҙең сифаты йөрәгебеҙҙең рухи кардиограммаһы һымаҡ. Шуға күрә был мәсьәләлә үҙебеҙҙе һәр саҡ контролдә тоторға һәм үҙебеҙгә шундай һорауҙар бирергә тейешбеҙ:

– **Намаҙыбыҙ** ниндәй дәрәжәлә Раббыбыҙ Аллаһҡа ҡарата итәғәтле, күңдәм (хошуғ хәлендә) булыуға этәрә? Ни дәрәжәлә харамдан һәм мәкруһтан тыя? Ни дәрәжәлә уның ҡиммәтен һәм әһәмиәтен аңлайбыҙ? Раббыбыҙ алдында сәждәгә китә алыу нығмәтенә ни тиклем рәхмәтлебеҙ?

– **Ураҙабыҙ** ни дәрәжәлә тәҡүәлеккә юл аса? Беҙҙең миһырбанлылыҡ һәм мәрхәмәтлелекте арттырамы ул? Аллаһ биргән нығмәттәргә шөкөр итеүгә этәрәме? Ғәйбәттәрҙән, юҡ-бар хәбәр һөйләүҙән, мәғәнәһеҙ ғәмәлдәрҙән аралаймы?

– **Зәкәт** түләгәндә, хәйер-саҙаҡа биргәндә беҙ ҡыуанабыҙмы? Әллә милкебеҙ кәмене, тип бошонабыҙмы? Аллаһ Тәғәлә матди байлыҡтарҙы һынау

итеп биргәнен, һәм уларҙың артыуы йәки кәмеүе шулай уҡ һынау икәнлеген төшөнәбеҙме?

– **Хаж** беҙҙе гонаһтарҙан, конфликттарҙан, һәүәҫлектәрҙән аралаймы һәм беҙгә кәфендә булыу тойғоһон бирәме? Ғүмер буйы шайтан артынан йөрөүебеҙҙе төшөнөп, уны ҡалдырып, изге ғәмәлдәр ҡылыуҙа тырышлыҡ күрһәтәбеҙме? Нәфесебеҙ һәм шайтан үҫүҫәләренән имен булыр өсөн, изге ғәмәлдәребеҙ менән ни дәрәжәлә Аллаһҡа ныйынабыҙ?

Былар һәммәһе Аллаһҡа ни кимәлдә яҡын булыуыбыҙҙы һәм мөхәббәтебеҙҙе күрһәтеп тороусы көҙгөләр.

❁

Мөхтәрәм Мәүләнә әйткән:

«Хаж ҡылыусылар Ҡәғбәнең Хужаһын эҙләһендәр. Уны тапһалар, ҡайҙа ғына булһалар ҙа, Ҡәғбәне лә табасаҡтар».

❁

Мөхәммәд Икбал Мәҙинәнән хаждан ҡайтҡан хажиҙарға һорау бирә:

«Һеҙ Нурлы Мәҙинәлә булдығыҙ. Мәҙинәнең Әхирәт донъяһы баҙарынан йөрәктәрегеҙгә ниндәй бүләктәр тултырҙығыҙ?

Алып ҡайтҡан бүләктәрегеҙ, түбәтәйҙәрегеҙ, тиҫбеләрегеҙ, намаҙлыҡтарығыҙ бер аҙ ваҡыттан һуң туҙасаҡ, төҫөн юғалтасаҡ. Мәҙинәнән туҙмай торған, йөрәктәрҙе йәнләндерә торған рухи бүләктәр алып ҡайттығыҙмы?

Бүләктәрегеҙҙә мөхтәрәм Әбү Бәкерҙең хыянатһыҙлығы һәм тоғролоғо, мөхтәрәм Ғүмәрҙең ғәҙеллеге, мөхтәрәм Ғосмандың оялсанлығы һәм йомартлығы, мөхтәрәм Ғәлиҙең зирәклеге һәм Аллаһ юлындағы тырышлығы бармы?»

❁

Онотмағыҙ, шайтанға «таштар атыу» хаж ваҡыты өсөн генә мөһим түгел, беҙ быны тормошобоҙҙоң һәр бер өлкәһендә эшләргә тейеш. Ғүмеребеҙҙе ғибәҙәттәр һәм изге ғәмәлдәр менән биҙәү – беҙҙе уларҙан биҙҙерергә маташҡан шайтанға «таштар атыу» ул. Әгәр ҙә ки беҙ был мәсьәләлә ғәмһеҙ һәм битараф булһаҡ – Аллаһ һаҡлаһын – шайтан беҙгә «таштар ата» башлаясаҡ.

❁

Мөхтәрәм Ғәли (радыйаллаһу ғәнһү) әйткән:

«Итәғәтлелек (хошуғ) менән ҡылынмаған намаҙҙа, теле гонаһтарҙан һәм буш һүҙҙәрҙән азат булмаған ураҙала, тәфәккүр (фекер итеү) булмаған Ҡөрьән уҡыуҙа, йөрәктә урын алмаған ғилемдә, саҙаҡалар бирелмәгән милектә, ауыр

саҡта ярҙамы тойолмаған дуҫлыҡта, рәхмәттәр әйтелмәгән ниғмәттәрҙә, йөрәктән сыҡмаған ихласһыҙ доғаларҙа бәрәкәт юҡ».

❁

Доғаларының ҡабул булмауына зарланыусыларға мөхтәрәм Ибраһим Әҙһәм әйтер булған:

«– Һеҙ Аллаһ Тәғәләне беләһегеҙ, әммә әмерҙәренә буйһонмайһығыҙ.

– Һеҙ Аллаһ Илсеһен (салләллаһу ғәләйһи үә сәлләм) беләһегеҙ, әммә уның Сөннәтенә эйәрмәйһегеҙ.

– Һеҙ Ҡөрьән уҡыйһығыҙ, әммә уның буйынса ғәмәл ҡылмайһығыҙ.

– Һеҙ Аллаһ Тәғәлә ниғмәттәре менән ризыҡланаһығыҙ, әммә улар өсөн рәхмәт әйтмәйһегеҙ.

– Һеҙ Йәннәт тураһында беләһегеҙ, әммә уны һорамайһығыҙ.

– Һеҙ Йәһәннәмдең барлығы тураһында әйтәһегеҙ, әммә үҙегеҙҙе унан тейешенсә ҡурсаламайһығыҙ.

– Һеҙ үлемдең барлығы тураһында әйтәһегеҙ, әммә уға әҙерләнмәйһегеҙ.

Кәмселектәрегеҙ шул тиклем күп булғас, Аллаһ нисек һеҙҙең доғаға яуап бирһен?»

❁

Ниндәй кимәлдә Аллаһ ҡоло була алһаҡ, шул кимәлдә Аллаһ беҙгә ярҙам итә.

❁

Изге аятта әйтелә:

«Эй, иман килтергән әҙәмдәр! Сабыр-түҙем булып, намаҙ уҡып, Аллаһтан ярҙам һорағыҙ. Хаҡтыр, Аллаһ сабыр кешеләр менән бергә» (әл-Баҡара (Һыйыр), 153).

Борон, дошмандар һөжүм иткәндә, кешеләр ҡәлғәләрҙең ныҡлы диуары артына йәшенгән. Шулай уҡ намаҙ ҙа бәйләнсек гонаһтарҙвың, нәфес һәм шайтандың һөжүменән аралаусы Аллаһ яҡлауы аҫтындағы ныҡлы ҡәлғә булып тора.

❁

Намаҙҙың һәр рәкәғәтендә уҡылған «әл-Фатиха» сүрәһендә беҙ Аллаһҡа һыйынабыҙ һәм әйтәбеҙ:

إِيَّاكَ نَعْبُدُ وإِيَّاكَ نَسْتَعِينُ

«Бары тик Һиңә (генә буйһоноп) ғибәҙәт ҡылабыҙ һәм (бары тик) Һинән (генә) ярҙам өмөт итәбеҙ» (әл-Фәтиха (Асыусы), 5).

Шуға ла иғтибар итеү лазым: аятта яңғыҙ ҡылынған ғибәҙәт тураһында түгел, ә йәмәғәт менән ҡылынған ғибәҙәт тураһында һүҙ бара. Өммәт булараҡ иланы әмер-тыйыуҙарҙы үтәүебеҙ ниндәй кимәлдә булһа, шул кимәлдә беҙ Аллаһтың ярҙамына лайыҡ булабыҙ.

Өммәт булараҡ бәләләргә һәм бәхетһеҙлектәргә дусар булған ваҡытта, бергәләп халәтебеҙҙе анализлау, хата-кәмселектәребеҙҙе төҙәтергә тырышыу зарур. Беҙгә бөйөк бәләләр ябырылмаһын өсөн, күмәкләп тәүбәгә килергә һәм ғәфү итеүҙе һорарға, Аллаһтың әмер-тыйыуҙарын тағы ла ентекләберәк үтәргә тейешбеҙ. Яңғыҙҙарҙы, бәхетһеҙҙәрҙе, етемдәрҙе, йәберләнгәндәрҙе шатландырыу өсөн, йомарт рәүештә хәйер-саҙаҡалар таратырға кәрәк, сөнки Аллаһтың ярҙамына, яҡлауына, рәхмәтенә ирешеү уларға бәйле.

❁

Һәр ваҡиға һәм күренеш артында уны барлыҡҡа килтергән сәбәптәр тора. Тимәк заманыбыҙ эпидемиялары, төрлө һәләкәттәр, кешеләр араһындағы конфликттар, фетнәләр һәм ҡыйынлыҡтар артында нимә тороуы хаҡында фекерләп ҡарау зарур. Ғибәҙәттәр ҡылған тәҡүәле йәмғиәткә генә Аллаһтың ярҙамы, Уның рәхмәте һәм бәрәкәттәре бүләк итеп бирелә. Кешеләр Уның юлында тырышлыҡ күрһәтеүҙән, ғибәҙәт ҡылыуҙан туҡтаһа, Уның ярҙамы ла туҡтай.

Бөгөн Раббыбыҙ Аллаһтың, мәңгелек донъяның онотолоуы һәм әхлаҡһыҙлыҡ, риба, ришүәтселектең нормаға әйләнеүе - Көнбайышҡа ябырылған бәләләрҙең төп сәбәпсеһе.

❁

Әҙәм балалары Аллаһҡа ғибәҙәт ҡыла икән, Уның ярҙамы ла көттөрмәй. Илаһи ярҙамдың арта барыуы Бәдер һуғышында күренә. Иман эйәләренең ихласлығы һәм сабырлығы арҡаһында, Аллаһ Тәғәләнең бөйөк ярҙамы булып, тәүҙә мең, унан өс мең, ә аҙаҡ биш мең фәрештә[16] мосолмандар ғәскәрен ҡеүәтләй.

❁

Пәйғәмбәребеҙ (саллəллаһу ғəлəйһи үə сəлləм) заманында мөшриктәр йәберләгән фәҡир, меҫкен, көсһөҙ сәхәбәләр ҙә күп була. Әммә уларҙың береһе лә күңел төшөнкөлөгөнә йәки депрессияға бирелмәй, сөнки иң ауыр мәлдәрҙә

16. Ҡар. әл-Әнфәл, 9-10; Әли Ғимран, 123-125.

улар Аллаһҡа сәждә ҡыла, Уға табына, Уға һыйына. Ҡөҙрәтле Аллаһ уларҙы ярҙамһыҙ ҡалдырмаясағын белә. Һәр бер ауыр хәлдә улар Раббыбыҙҙа йыуаныс таба…

❁

Намаҙ торған, йәғни уны тейешенсә, нисек кәрәк, шулай ҡылған йәмғиәт физик йәһәттән дә, мораль йәһәттән дә сәләмәт буласаҡ. Бер ваҡыт Пәйғәмбәребеҙ (салләллаһу ғәләйһи үә сәлләм) заманында Мәҙинәгә табип килә. Әммә ул үҙенә эш таба алмай. Һөҙөмтәлә Пәйғәмбәребеҙ (салләллаһу ғәләйһи үә сәлләм) уға ғаиләһенә кире ҡайтырға кәңәш бирә.

Шулай уҡ, сығанаҡтарға мөрәжәғәт итһәк, ул осорҙа психолгик тайпылыштарҙы ла, социаль сыуалыштарҙы ла күрмәйбеҙ. Сәбәбе шунда: сәхәбәләрҙең иман һоҡланыуы менән (вәжд) һәм бөтә күңелен биреп (истиғраҡ) ҡылған намаҙҙары, әйтерһең дә, талған йөрәктәрҙе рухи йәһәттән шифаландырыусы сара була. Шулай уҡ улар үҙ выжданын ураҙа, зәкәт һәм саҙаҡалар биреп тәрбиәләй. Ислам ҡәрҙәшлеге арҡаһында йәмғиәттә тыныслыҡ хөкөм һөрә.

❁

Мәңгелек донъяла Аллаһтың бер ҡоло ла, мәрхәмәт, киң күңеллелек, ғәфү итә белеүсәнлек һәм шәфҡәтлелек кеүек сифаттары булмай тороп, бары тик ғибәҙәттәре һәм изге ғәмәлдәре менән генә ҡотолоуға ирешә алмаясаҡ. Әммә фани донъяла Раббыһының рәхмәтенә өмөт бағлағандар һәм ихлас рәүештә ҡотолоу өсөн бөтә тышлығын һалғандар унда ҡотолоу табасаҡ.

❁

Изге ғәмәлдәребеҙ ни тиклем генә күп булмаһын, беҙ Аллаһтың мәрхәмәтенә өмөт бағларға тейешбеҙ, сөнки намаҙҙарыбыҙ ҙа һәм изге ғәмәлдәребеҙ ҙә шулай уҡ ҡабул ителеүгә мохтаж.

❁

Хәҡҡ дуҫтары, тәкүәле тормош алып барһалар ҙа һәм Аллаһ юлында бар көсөн һалһалар ҙа, үҙҙәрен бер нәмәгә һәләтле булмаған Уның зәғиф ҡолдары тип иҫәпләгәндәр. Мәрхүм Нәжип Фазыл әйткән бит:

Йөрәк донъяһында көн итмешле ир-ат,

Ғазап менән китә сәждәгә...

Йондоҙҙарҙы тәсбих итеп тарта,

Һуңғы рәткә баҫа намаҙға...

Раббыбыҙ бүләк итеп биргән бихисап ниғмәттәргә яуап итеп ҡылған Аллаһ ҡолдарының бурыстарын иң яҡшы рәүештә үтәргә тырышһаҡ та, беҙ уларға буш, артыҡ әһәмиәт бирергә кәрәкмәгән нәмә итеп ҡарарға тейешбеҙ. Беҙ бары тик Аллаһтың зәғиф ҡолдары һәм һәр мәл Уның мәрхәмәтенә мохтажбыҙ, Уның ярҙамынан тыш һәр ғәмәлебеҙ уңышһыҙлыҡҡа дусар.

❁

Балалары, милке, ғүмере менән иң ҡаты һынауҙарҙы үтһә лә, Хәлилуллаһҡа, Аллаһ Дуҫына әйләнһә лә, Ибраһим (ғәләйһис-сәләм) Раббыһына шулай ялбарған:

«Бәндәләреңдең ҡәберҙән ҡубарыласаҡ Көнөндә мине рисуай итмә!» (әш-Шүғәрә (Шағирҙар), 87). Уның халәте һәм инанысы шундай була: әгәр Раббыһы уға мәрхәмәтле булмаһа, уның бар физакәрлеге, ғәмәлдәре бушҡа ғына булаҫаҡ.

❁

Иман эйәһе Йәнәбе Хаҡҡа яҡыная барған һайын, уның йөрәгендә яңы офоҡтар асыла. Илаһи бөйөклөк ҡаршыһында мөьминдең Аллаһҡа ҡарата хәмд-маҡтауҙары, рәхмәте, зекерҙәре, Уны танып белеүе (мәғрифәт) арта һәм ул ғилеменең етерлек булмауын төшөнә, үҙ халәтенең кәмселектәрен күрә башлай. Шул сәбәпле Яралтыусыбыҙҙы барыһынан да яҡшыраҡ белеүсе салих заттар (ғарифтар) Уны тейешенсә танып белә алмауҙарын төшөнә. Үҙҙәрен Уға ғибәҙәткә бағышлаған ҡолдар аңлай: улар Уға тейешенсә, Ул лайыҡ булғанса ғибәҙәт ҡылырға һәләтле түгел.

❁

Аллаһты танып белгәндәр (ғарифтар) бөйөк ғәмәлдәрен дә юҡ нәмә итеп күрһә һәм үҙҙәренең көсһөҙлөгөн таныһа, ғәмһеҙ әҙәмдәр әҙ генә изге ғәмәлдәрен дә мәңгелек өсөн етерлек, тип уйлай һәм тыныслана. Ғәмһеҙҙәр һәммәһен утын өсөн тәғәйенләнгән үлсәү менән үлсәй, ә Аллаһты танып белгән ғарифтар – зәркән (ювелир) үлсәүе менән.

❁

Ибраһим Дисуки (рәхмәтуллаһи ғәләйһи) әйткән:

«Эй, ҡәрҙәшем! Нимәнелер үҙем эшләнем, тип уйлама!.. Бел, әгәр һин тәҡүәлектең бер кимәленә ирешкәнһең икән, уға һине Аллаһ алып килгән. Әгәр һин рухи һәм матди йәһәттән нимәгәлер лайыҡ булғанһың икән, уларҙы һиңә Аллаһ бүләк итеп биргән… Изге ғәмәлдәреңе бөтә кешеләрҙеке һәм ендәрҙеке ҡәҙәр булһа ла, әйтмә: «Мин»,- тип, сөнки улай тип белдереүселәрҙе Аллаһ үҙенең көсһөҙлөгөн танырға мәжбүр итә. Әгәр һин үҙ аллы икәнеңде

белдерергә тырышһаң, һине матди һәм рухи пландағы ҡазалар көтә, онотма шул турала!».

❁

Онотмайыҡ, ғәмәлдәребеҙ ни тиклем генә гүзәл тойолмаһын, улар океанға түгелгән бер биҙрә һыу кеүек кенә. Аллаһтың бихисап бәрәкәттәре ҡаршыһында беҙ барса ғибәҙәттәребеҙгә һәм хеҙмәттебеҙгә әһәмиәтһеҙ нәмәгә ҡараған шикелле генә ҡарарға тейешбеҙ. Беҙ Аллаһ алдындағы бурысыбыҙҙы үҙебеҙ йәшәгән йәмғиәт кимәленә ҡарап түгел, ә сәхәбәләр һәм изгеләр кимәле менән сағыштырырға тейеш, сөнки Аллаһ беҙгә ансарҙар һәм мөһажирҙар миҫалында үрнәк күрһәткән.

❁

Иман эйәһе һәр ваҡыт «бәйнә әл-хауфи үә әр-раджә» халәтендә, йәғни ҡурҡыу һәм өмөт араһында буларға тейеш. Йөрәк, бер яҡтан, Аллаһтың асыуына тарыуҙан ҡурҡырға, икенсе яҡтан – Уның рәхмәтенә өмөт бағларға тейеш. Мөхтәрәм Ғүмәр (радыйаллаһу ғәнһү) әйткәнсә:««Йәннәткә бер кеше керә»,- тип әйтһәләр, өмөтләнергә кәрәк: «Бәлки, ул миндер?», ә әгәр ҙә ки: «Бер генә кеше Йәһәннәмгә эләгәсәк», - тиһәләр, уйланыу зарур: «Ә ул мин түгелме икән?».

❁

Мөьминдең йөрәге, һәр даим Аллаһтың асыуына тарыуҙан ҡурҡып, уяу булырға һәм, Уның рәхмәтенә өмөт бағлап, хозур халәтендә булырға тейеш.

❁

Был һынау донъяһындағы үҙебеҙгә яҙылғандарҙы беҙ белмәйбеҙ. Шуға күрә үҙ халәтебеҙгә ҡарап һис тә ҡыуанырға, туғарылырға ярамай. Киреһенсә, уяу булып, һуңғы һулышыбыҙ һәм киләһе тормошобоҙ ниндәй булыуын даимән уйлап, үҙ-үҙебеҙгә һорау бирергә тейешбеҙ.

ҮҘЕҢДЕҢ МЕҪКЕНЛЕГЕҢДЕ ТАНЫУ, БАҪАЛҠЫЛЫҠ

Эй, кеше!

– Бер нәмәң булмаһа ла, һине кеше итеп, барса мәхлүктәр араһында иң шәрәфле зат итеп бар ҡылған Раббың алдындағы үҙеңдең меҫкенлегеңде онотма!

– Раббыбыҙҙың «Бул!» тигән әмере менән пәйҙә булыуыңды һәм, бер көн килеп, «Үл!» әмере менән йән бирәсәгеңде онотма.

– Аллаһтың әмере менән, ябай күҙ менән күреү ҙә мөмкин булмаған микробтарҙың "еңелмәҫ", тип нарыҡланған баһадирҙарҙы аяҡтан йығыуынан һабаҡ ал!

Һис кем булмаған менән һис нәмә булмаҫ…

❁

Мөхтәрәм Мәүләнә әйткән:

«Ҡылыс муйыны булғандың муйынын саба… Күләгә ергә түшәлгәнлектән, бер ҡылыс та уға зыян һала алмай».

Йәғни, әгәр мөьмин йәшәйешенә, асылына йәбешеп ятмаһа, күләгә кеүек, һис кем түгел халәтенә ирешә алһа, ул фани донъяла ла һәм мәңгелек донъяла ла бик күп бәләләрҙән, бәхетһеҙлектәрҙән имен буласаҡ.

❁

Эй, кеше!

– Бер нәмәң булмаһа ла, һине кеше итеп, барса мәхлүктәр араһында иң шәрәфле зат итеп бар ҡылған Раббың алдындағы үҙеңдең меҫкенлегеңде онотма!

– Раббыбыҙҙың «Бул!» тигән әмере менән пәйҙә булыуыңды һәм, бер көн килеп, «Үл!» әмере менән йән бирәсәгеңде онотма.

– Аллаһтың әмере менән, ябай күҙ менән күреү ҙә мөмкин булмаған микробтарҙың “еңелмәҫ”, тип нарыҡланған баһадирҙарҙы аяҡтан йығыуынан һабаҡ ал!

❁

Онотмайыҡ, беҙ был донъяға һис бер хаҡ түләмәйенсә, һис бер нәмәһеҙ килдек. Аллаһ Тәғәлә кешене, үҙ урынын, сығышын танып белһен өсөн, остоҡ ҡына материянан, бысраҡ (нәджәс) тип һаналған тамсынан барлыҡҡа килтерә һәм уны көсһөҙ итеп донъяға килтерә. Үҙенең һис ни түгел икәнен һәм зағифлеген белһен дә, уны юҡтан бар ҡылған Раббыһына ҡаршы сыҡмаһын, рухи хикмәткә (ғирфан) эйә булһын өсөн эшләнә был.

❁

Ни өсөн кеше ҡиммәтле күҙ йәшенән түгел, ә шәриғәт бысраҡ (нәджәс) тип һанаған, артыҡ ҡиммәте булмаған тамсынан барлыҡҡа килгән? Ни өсөн ул, үлгәндән һуң, яман еҫ тарата башлай, серей һәм тупраҡҡа әйләнә? Әҙәм балаһының тәүҙә кескәй генә тамсы һәм аҙаҡ мәйеткә әүерелеүе һауаланырға, маҡтанырға һис бер хоҡуғы юҡлығын күрһәтеп тороусы илаһи мөрәжәғәт.

Шулай итеп, бәндә, ниндәй генә дәрәжәгә һәм мөмкинлектәргә эйә булмаһын, Аллаһ Тәғәләнең зәғиф ҡоло булыуын оноторға тейеш түгел!

❁

Мөхтәрәм Әбү Бәкер (радыйаллаһу ғәнһү) әйткән:

«Маҡтанма! Ерҙән барлыҡҡа килгән һәм, ергә ҡайтҡас, бүреләрҙән ашалған кешегә маҡтаныуҙан ни фәтүә?!».

❁

Мөхтәрәм Ғәли (радыйаллаһу ғәнһү) әйткән:

«Әҙәм балаһы нимәһе менән маҡтана? Уның сығанағы – аталыҡ орлоғо тамсыһы, ә аҙағы – мәйет! Ул үҙенә ризыҡ барлыҡҡа килтерә лә, үҙен бәхетһеҙлектәрҙән аралай ҙа алмай».

❁

Элек фәһем бирерлек каллиграфик алтаҡталар бик күп рухи мәктәптәрҙең диуарҙарын биҙәгән. Уларҙың береһенә шулай тип яҙылған: « هيچ » («һис ни»).

«Һис ни» - «мин»дән баш тартыу ул, сөнки нәфес һәүәҫлектәренән баш тартҡандан һуң ғына илаһи серҙәргә юл асыла. Рухи үҫештең нигеҙ ташы ана шул үҙеңдең «һис ни» түгел икәнлегеңде, көсһөҙлөгөңдө таныуҙан башлана.

Тәсауыфтың маҡсаты – Аллаһ ҡолоноң Йәнәбе Хәҡҡ Көҙрәте, Бөйөклөгө һәм Хакимлығы алдында үҙ көсһөҙлөгөн, зәғифлеген таныуы.

❁

Илаһи бөйөклөк ҡаршыһында кеше лә, Ғаләм дә - һис ни түгел. Был фани донъяның барса ниғмәте Йәннәттең кескәй генә ниғмәте менән сағыштырғанда ла - һис ни түгел. Ерҙең барса ауырлыҡтары һәм һынауҙары Йәһәннәмдең ҡыҫҡа ғына ваҡытлы ғазабы менән сағыштырғанда ла - һис ни түгел.

❁

Инсан өсөн бөтә нәмә үҙенең көсһөҙлөгөн таныуҙан башлана. Быны төшөнгән кеше алдында бер-бер артлы серҙәр һәм хикмәттәр асыла. Шуға күрә әйтелгән бит:

مَنْ عَرَفَ نَفْسَهُ فَقَدْ عَرَفَ رَبَّهُ

«Үҙенең нәфесен танып белгән – үҙенең Раббыһын танып белгән».

Йәғни, кем үҙенең юҡтан бар ҡылыныуын, һис нимәһеҙ донъяға килеүен аңлай, ул Аллаһтың Барлығын, Уның Берлеген, Көҙрәтен һәм Бөйөклөгөн дә аңлай. Шундай кимәлгә еткән Аллаһ ҡолонда һауаланыу ҙа, үҙ тормошона, асылына ҡарата ризаһыҙлыҡ та ҡалмай... Баҫалҡылыҡтан мәхрүмдәр һәм үҙенең зәғифлеген танымағандар – улар Раббыбыҙҙың Көҙрәтен һәм Бөйөклөгөн дә тейешенсә аңлай алмаған меҫкендәр.

❁

Камил кеше булыу юлындағы тәүге аҙым – үҙеңдең зәғифлегеңде таныу. Кеше белергә тейеш: уға Игелек ҡылыусы, уны Яманлыҡтан аралаусы, Көс һәм Көҙрәткә эйә берҙән-бер Зат - Аллаһ Сүбхәнәһү үә Тәғәлә. Шул сәбәпле тәсауыф иң мөһим көрәш үҙ асылыңдан ғорурлыҡ һәм мин-минлекте сығарып ташлау икәнлегенә баҫым яһай.

❁

Аллаһ Тәғәләнең бөйөклөк төйәгенә юл табыу өсөн, рухи һабаҡ аша нәфес теләктәрен һәм һәүәҫлектәрен юҡ итеү һәм шул рәүешле үҙ асылыңдың пәрҙәһен юҡ итеү зарур.

Нәфескә хас ғорурлыҡ, һауаланыу, мин-минлектән арынмай тороп, йөрәк көҙгөһөн нур менән тултырыу мөмкин түгел. Кем үҙ йөрәген нәфес теләктәренән арындыра һәм Аллаһ нуры менән ҡарай, Уны һәр ваҡыт үҙ йөрәгендә таба.

Аллаһты танып белгәндәр (ғарифтар) был хәҡиҡәтте шулай тип белдергән:

«Һин китәһең, Яралтыусың ҡала».

❁

Үҙ асылының пәрҙәһенән арынып, үҙен тулыһынса Аллаһҡа тапшырған мөьминдәрҙең ҡараштары, тойғолары, уйҙары һәм ғәмәлдәре һәр саҡ илаһи ихтыярға тап килә. Уларҙың ҡәлб донъяһы, саф көҙгө кеүек. Ҡөҙрәтле Раббыбыҙҙың мәрхәмәт атрибуттарын (сыфат-и джәмәл) сағылдыра. Улар бар нәмәгә Аллаһ ҡарашы менән баға.

Изге ҡудси хәҙистә Йәнәбе Хәҡҡ менән дуҫлыҡҡа лайыҡ булғандар йәки, тәсауыф теле менән, «Аллаһҡа мөхәббәттә иреп юғалғандар» («фәнә филлəһ») тураһында шулай әйтелә:

«...Миңә яҡынайырға ниәтләп, ҡолом ҡылғандарҙан минең өсөн иң һөйөклөһө - Мин йөкмәткәндәрҙе (фарыздарҙы) үтәүе, һәм ул, Минең һөйөүемә ирешеүҙе теләп, мин йөкмәткәндәрҙән артығын (нәфел) ҡылыр, ә инде Мин уны һөйгәс, Мин уның ишетер ҡолағы, һәм уның күрер күҙе, һәм уның тотор ҡулы, һәм атлар аяғы булырмын, һәм ул Минән (нимәлер) һораһа, Мин уға мотлаҡ (уны) бүләк итермен, ә инде ул Минән яҡлау һораһа, Мин уны мотлаҡ яҡлармын» (Бохари, Рикак, 38).

❁

Ғорурлыҡ, һауаланыу, үҙ-үҙең менән ҡәнәғәтлек – былар рухи тормош өсөн яман шеш менән бер. Тәсауыфтың маҡсаты – барса ниғмәттәрҙең Йәнәбе Хәҡтан килеүен танып, үҙ нәфесеңә ауыҙлыҡ кейҙереү.

❁

Аллаһ дуҫтары әйткән:

«Әгәр кеше асылынан бер генә хәреф ҡалһа ла, ул Аллаһ дуҫы була алмай».

❁

Бер кеше Хәҡҡ дуҫына килгән һәм әйткән:

– Әфәндем, минең гонаһтарым күп. Минең өсөн доға ҡылмаҫһыңмы икән?

Әүлиә шулай тип доға ҡылған:

– Йәә Раббым! Һинең бер гонаһлы ҡолоң икенсе бер гонаһлы ҡолоң өсөн ялбарып доға ҡыла, ғәфү ит уларҙың икеһен дә!

Барса бөйөк остаздар (мөршидтәр), баҫалҡы һәм ихлас хеҙмәт аша нәфескә хас үҙ-үҙеңдән ҡәнәғәтлек, мин-минлек, һауаланыу кеүек сирҙәрҙе еңгәс кенә, камиллыҡҡа ирешеп, йөрәктәргә юл күрһәтеү мөмкинлеген алған. Йәғни үҙ нәфестәрен аяҡ аҫтына түшәлгән сепрәккә әйләндергәс кенә, уларҙың башына таж кейҙергәндәр.

❁

Наҙан кешеләр тупһаға кәмһетеп ҡарай, сөнки, улар фекеренсә, ул ишеккә бәйле бер ҡушымта ғына. Унда ғәҙәттә ҡапҡа ҡарауылсыһы ултыра. Һауалы әҙәмдәр тупһала түгел, шәрәфле урында ултырырға теләй. Әммә Аллаһты танып белгәндәр (ғарифтар) өсөн уның ҡиммәте ҙур.

Юныс Әмре, остазының күңелен яуларға теләп, уның тупһаһына башын һалған. Был тупһа бит баҫалҡылыҡ дәресенә өйрәткән, үҙеңдең көсһөҙлөгөңдө танып, Аллаһтың ризалығына ирешергә мөмкинлек биргән юғары мәктәп булған.

❁

Тәсауыфтағы иң мөһим мәсьәлә – нәфесеңдең мин-минлеген, тәкәбберлеген ауыҙлыҡлау һәм үҙ-үҙеңдән ҡәнәғәтлекте юҡ итеү. Ғәзиз Мәхмүд Ходаи үҙе хөкөмдар булған Бурса урамдарында бай кейемдә бауыр һатып йөрөй. Мөхтәрәм Юныс Әмре, буҫағаға башын һалып, рухи тәрбиә ала. Хәлид Бағдади кеүек бөйөк ғалимдар йәмәғәт хәжәтханаларын таҙарта. Нәфестәренең тәкәбберлек боттарын емереү өсөн, Аллаһтың тәкүәле ҡолдары бик күп шундай эштәр башҡара, сөнки тәсауыфта бөтә нәмә үҙеңдең «һис ни» түгел икәнлегеңде таныуҙан башлана...

❁

Беҙ шул турала уйларға тейеш: был фани донъяға «үҙебеҙҙе күрһәтер өсөн», йәғни, кәйеф-сафа ҡороп, үҙебеҙгә бүләк итеп бирелгән ниғмәттәр менән һауаланыр өсөн килмәгәнбеҙ. Киреһенсә, беҙ Аллаһ алдындағы үҙебеҙҙең зәғифлегебеҙҙе, көсһөҙлөгөбөҙҙө төшөнөр өсөн килгәнбеҙ һәм, йөрәгебеҙ шул халәткә ирешһен өсөн, ошо донъяның уҡыу аудиторияһында торабыҙ. Беҙ алырға тейешле иң мөһим ғилем – йөрәгебеҙҙе тәрбиә ҡылыу..

❁

Мөхтәрәм Ғәзиз Мәхмүд Ходаи, Аллаһ Тәғәләгә мөрәжәғәт итеп, зәғифлеген һәм көсһөҙлөгөн таныуын гүзәл рәүештә белдерә:

Биреүсе Һин, Алыусы Һин, Яралтыусы Һин.

Һин биргән бар. Унан башҡа тағы ни бар?!

❁

Тәсауыф – ниндәй генә урын биләһәк тә, үҙебеҙҙең «[Аллаһтың] көсһөҙ ҡолдары» булыуыбыҙҙы таныу. Ниндәйҙер ниғмәткә эйә булһаҡ йәки уңышҡа ирешһәк, нәфесебеҙ һәүәҫлектәрен ситкә атып, әйтергә тейешбеҙ: «Был Һинең рәхмәтең, йәә Раббым! Һин һәр нәмәне Үҙ Көҙрәтең менән булдырыусы, ә мин Һинең зәғиф ҡолоң!»

❁

Әгәр кеше байлыҡ, ғилем, дәрәжә кеүек ниғмәттәрҙе үҙенеке тип иҫәпләһә, мин-минлек упҡынына батасаҡ. Көсһөҙләгән онотһа һәм, нәфесенә эйәреп, үҙен юғары баһалай башлаһа, ул ҡазаға тарыясаҡ. «Мин» тип әйтеүҙән туҡтап, ихлас рәүештә: «Был Һинең рәхмәтең, был Һинең бүләгең, йәә Раббым!», - тиһә, нәфесенең хәүефенән азат буласаҡ.

❁

Мөхтәрәм Мәүләнә әйткән:

«Берәүҙә ниндәйҙер гүзәллек булһа, белһен: был уға бурыҫҡа бирелгән».

❁

Хата һәм кәмселектәр – нәфестән, ә уңыштар Аллаһтан булыуын белеү ғибәҙәттең мөһим акты булып тора. «Мин булдырҙым, мин еңдем, мин быға үҙ көсөм, ғилемем һәм оҫталығым арҡаһында ирештем», - тип белдереүсе ҡолға, ул ниғмәттәр уны ташлап киткәнсе, Аллаһ Тәғәләнең асыуы төшөүен онотмайыҡ.

Шулай уҡ ниндәйҙер ниғмәт килһә йәки уңышҡа ирешһәк, нәфесебеҙ ыңғайына тороп, уны үҙебеҙ ҡаҙаныш, тип ҡарау дөрөҫ түгел. Киреһенсә, зәғифлегебеҙҙе, көсһөҙләгөбөҙҙө һәм ярҙамға мохтаж булыуыбыҙҙы аңлап, Аллаһҡа рәхмәттәребеҙҙе белдереү зарур.

❁

Мосолмандарҙың еңеүе менән тамамланған Бәдр һуғышы беҙгә бихисап һабаҡтар бирә. Был бөйөк еңеүҙән һуң, мосолмандар һауаланып, тәкәбберләнеп китмәһен өсөн, Раббыбыҙ Аллаһ киләһе аяттарҙы төшөрә: **«Уларҙы һеҙ үлтермәнегеҙ, фәкәт Аллаһ үлтерҙе; (тупраҡ) һибеүҙе лә һин һипмәнең, Аллаһ һипте; был эштәрҙе Аллаһ мөьминдәрҙе һынар өсөн башҡарҙы. Шик юҡ, Аллаһ - барыһын да Ишетеп тороусы, Белеп тороусы»** (әл-Әнфәл (Табыш малы), 17).

Асылда хәҡиҡи көс һәм ҡөҙрәт Аллаһта. Абсолют Бар ҡылыусы (фәил әл-мутлаҡ) бары тик Раббыбыҙ Аллаһ. Кешегә Аллаһ биргән көс-ҡеүәтте лә

тик Уның рөхсәте менән генә ҡулланыу мөмкин. Шуға күрә ниндәйҙер эш менән мәшғүл булғанда, тик Уға ғына һыйынып ярҙам һорарға кәрәк:

«لَا حَوْلَ وَلا قُوَّةَ إِلَّا بِاللَّهِ العَلِيِّ الْعَظِيمِ»

«Олуғтарҙың Олуғы Бөйөктәрҙең Бөйөгө булған Аллаһтан башҡа көс һәм ҡеүәт эйәһе юҡтыр». Беҙгә һис ҡасан үҙебеҙҙең зәғифлегебеҙ, Уның ҡоло булыуыбыҙ тураһында онотоу ярамай. Беҙгә бирелгән барса нығмәттәр, еңеүҙәр һәм уңыштар Аллаһтың рәхмәте лә, һынау ҙа икәнлеген даимән иҫтә тотоу лазым.

❁

Иман эйәһенә ниндәйҙер нығмәт килһә, ул уларҙың хәҡиҡи Хужаһын иҫкә төшөрөп: **«...Раббым миңә рәхмәтен күндерҙе…»**[17] - тиергә һәм Аллаһҡа шөкөр итергә тейеш. «Мин, ғилемем һәм һәләттәрем арҡаһында, һәммәһенә үҙ көсөм менән ирештем», - тип, нәфесе ыңғайына торорға тейеш түгел.

❁

Барса яҡшылыҡ Аллаһтан булыуын танып, Уға хәмд-тәсбихтәр әйтеү һәм барса яманлыҡ сығанағы нәфесеңдән икәнлеген таныу – ғибәҙәттең иң мөһим акты.

Үҙ хата-кәмселектәре менән мәшғүл булған мөьмин башҡаларҙың хата-кәмселектәре менән булышмаҫҡа тейеш, сөнки уның үҙ ҡәлбендәгеләре лә баштан ашҡан...

❁

Йөрәккә нур тулыуының бер сәбәбе кешеләрҙең кәмселектәрен түгел, тәүге нәүбәттә үҙеңдең кәмселектәреңде күреү, үҙеңдең халәтеңде анализлау һәләтенән килә. Шағир бик яҡшы әйткән:

Мәрхәмәт һәм ғәҙеллектән яҡшы үлсәү юҡ,

Кәмселегең белеүҙән ҙур хикмәт юҡ!

❁

Мөьмингә иман ҡәрҙәштәренең хата-кәмселектәре тураһында түгел, ә үҙенең хата-кәмселектәре тураһында борсолоу зарур. Ул белергә тейеш: башҡаларға асыуланыу һәм уларҙы ғәйепләү уның үҙен аҡламай, сөнки кеше кәмселектәрен күреп, үҙеңдең кәмселектәреңде күрмәү кешене биҙәмәй. Юҡҡа ғына боронғолар әйтмәгән: «Бары ла яҡшы – беҙ яман, бары ла бойҙай – беҙ һалам».

❁

17. Ән-Нәмел (Ҡырмыҫҡа), 40.

Аллаһ Илсеһе (салләллаһу ғәләйһи үә сәлләм) әйткән:

«Кем үҙенең иман ҡәрҙәшен ниндәйҙер гонаһта ғәйепләһә, үҙе шул гонаһты ҡылмайынса үлмәҫ» (Тирмизи, Ҡиәмәһ, 53/2505).

❁

Мөхтәрәм Ғүмәр (радыйаллаһу ғәнһү) әйткән:

«Кем башҡаларҙың кәмселектәре менән шөғөлләнеүҙән туҡтай, үҙ кәмселектәрен төҙәтә алыу халәте бирелә».

❁

Шәйех Сәғди әйткән:

«Һеҙ һәр берегеҙ үҙ гонаһтарығыҙҙы ташыусылар. Башҡаларҙың хаталарын һәм ғәмәлдәрен ғәйепләмәгеҙ».

❁

Мөьмин үҙ ҡәлбе ҡапҡаһында һаҡсы кеүек торорға һәм ул ҡапҡа аша тәкәбберлектең, һауаланыуҙың, мин-минлектең бөртөгөн дә индермәҫкә тейеш; тәрән фекер йөрөтөп, (тәфәккүр) һәм иланы яҡынлыҡты тойоп (мураҡаба), һәр даим йөрәген контролдә тоторға һәм үҙ хата-кәмселектәрен төҙәтеү менән мәшғүл булырға тейеш.

❁

Үҙен башҡаларҙан юғары һанап, тәкәбберлеккә, мин-минлеккә сумғандар асылда үҙҙәрен Аллаһ алдында кәмһетә. Үҙенең хата-кәмселектәрен күрмәгәндәр һәм Аллаһтың сикһеҙ Ҡөҙрәте һәм Бөйөклөгө алдына «һис ни» түгел икәнлеген аңламағандар үҙҙәрен юғары баһалай, көслө тип иҫәпләй. Ә был Аллаһтың Кибрийә (Бөйөклөк) сифатына тиңдәш булырға ынтылыу тигән һүҙ, әммә тәүхид ғәкидаһы бындай тиңдәшлекте инҡар итә.

❁

Мөхтәрәм Мәүләнә әйткән:

«Ер кеүек күндәм һәм баҫалҡы бул».

«Яҙын таш йәшеллеккә күмеләме? Һинән гүзәл раузалар һәм сәскәләр үҫеп сыҡһын өсөн, ер кеүек күндәм бул!»

Ер өҫтөндә йөрөгән йән эйәләре уны аяҡтары менән тапай һәм тиҙәктәре менән бысрата. Ер уларҙы өнһеҙ һәм ҡаршылыҡһыҙ үҙенә һеңдерә, эшкәртә, ә аҙаҡ, һутлы йәшел үҫемлектәргә, һоҡланғыс сәскәләргә һәм тәмле емештәргә әүерелдереп, өҫтөндә йөрөгән барса йән эйәһен туйындыра.

Күндәм мөьмин йөрәге лә шундай уңдырышлы ер кеүек, тирә-йүндәгеләрҙең мөғәмәләһе ниндәй генә булһа ла, тик игелек һәм матурлыҡ тарата.

❁

Тупраҡ нескә һәм киң күңелле. Ул яманлыҡҡа яҡшылыҡ менән яуап бирә. Ул үҙенә тиҙәк ташлағандарға раузалар бүләк итә. Үҙенә төкөргәндәргә саф шишмәләр менән яуап бирә. Үҙен тапағандарҙы үҙендә йөрөтә. Ерҙең бурысы — үле йән эйәләрен, изге аманат шикелле, үҙ ҡуйынында тотоу һәм Ҡиәмәткә тиклем тоғро бер серҙәше һымаҡ күреп уларҙы һаҡлау.

Бер һүҙ менән әйткәндә, ерҙән бар ҡылынған кеше ер кеүек күндәм, йомарт, тоғро һәм фиҙакәр булырға тейеш…

❁

Мөхтәрәм Ғайса (ғәләйһис-сәләм) янындағыларға һорау биргән:

«Орлоҡ ҡайҙа шыта?» Уға яуап биргәндәр:

«Ерҙә». Быға ҡаршы Ғайса (ғәләйһис-сәләм) әйткән:

«Шулай уҡ хикмәт тә ер кеүек баҫалҡы булған йөрәктә шытып сыға».

❁

Хәҙистә әйтелә:

«…Берәү Аллаһ ҡашында күндәм булһа, Аллаһ уны юғары күтәрер…» (Хәйсами, X, 325).

❁

Раббыһы ҡашында күндәмлек менән һәм үҙенең зәғифлеген танып сәждә ҡылғанға илаһи рәхмәт ҡойоп яуған ямғыр һымаҡ яуыр. Аллаһ Тәғәлә сәждә ҡылған итәғәтле ҡолдарын ярата һәм уларға Үҙенең ғәҙәттән тыш ниғмәттәрен бүләк итә. Был ямғыр һыуҙарының бейек ҡалҡыулыҡтарҙа түгел, ә уйһыу ерҙәрҙә йыйылыуы менән бер.

❁

Мөхтәрәм Сәлмән Фәриси әйткән:

«Күндәм бул! Берәү Аллаһ ризалығы өсөн был донъяла баҫалҡы булһа, Раббыбыҙ Аллаһ уны Хисап көнөндә юғары күтәрер».

❁

Мөхтәрәм Нәҡшибәнд шаһ әйткән:

«Был юлда үҙеңдең зәғифлегеңә төрөнөү, нәфесеңдән баш тартыу, үҙеңдең көсһөҙлөгөңдө күрһәтеү һәм күндәм булыу – бөйөк ҡаҙаныш. Был бөйөк сәғәҙәткә ирешеү асҡысы».

❁

Аллаһты танып белгәндәрҙең (ғарифтарҙың) солтаны булған, үҙен бары тик буҫағала ғына тороусы тип иҫәпләгән Нәҡшибәнд шаһтың киләһе шиғырында күпме гүзәл нәсихәт бар:

Донъя – бойҙай, мин – һалам,

Барыһы – яҡшы, мин - яман!

❁

Мөхтәрәм Фудайл ибн Ияз әйткән:

«Инсафлылыҡ – хаҡ һүҙҙе яһилдан ишетһәң дә, баланан ишетһәң дә, уға буйһоноу һәм ҡабул итеү».

❁

Инсафлылыҡ – ғәҙәттән тыш игелек, ул Аллаһҡа хеҙмәтебеҙҙе камил итә, ул мөьминде гүзәл сифаттар менән биҙәй:

– Инсафлы мөьмин йомарт, сөнки ул фани донъяға йәбешеп ятмай, булған ниғмәтте үҙенеке тип һанамай. Ул үҙен вәкил тип һанай, шуға күрә уға Раббыһы бүләк итеп биргәнде Аллаһ юлында сарыф итеү ауыр түгел. Киреһенсә, ул бынан әйтеп бөтөргөһөҙ ләззәт ала.

– Инсафлы мөьмин ғәфү итергә ярата. Быны эшләгәндә, ул илаһи ярлыҡауға лайыҡ булырға тырыша.

– Инсафлы мөьмин хатта яманлыҡҡа ла яҡшылыҡ менән яуап бирә.

– Инсафлы мөьмин ҡайғы-хәсрәткә сабыр итә. Ул уларҙы пакланыу, Аллаһтың әжерен алыу сараһы итеп ҡарай.

– Инсафлы мөьмин Аллаһҡа тоғро хеҙмәт итә. Үҙенә йөкмәтелгәндәр өсөн бөйөк яуаплылыҡ тойоп, ул Аллаһҡа хеҙмәт итеүҙе бурысы, тип һанай һәм мохтаж иман ҡәрҙәштәре алдында ла үҙен бурыслы тип тоя.

– Инсафлы мөьмин физакәр, нескә, һиҙгер күңелле...

❁

Мөьмин алтын урталыҡты тоторға тейеш. Әгәр ул һауалылыҡ һәм абруй, тупаҫлыҡ һәм ихласлыҡ, инсафлылыҡ һәм түбәнселек араһында баланс таба

алһа, хозурлыҡҡа ирешә. Әгәр ул был халәттәр араһындағы нескә тигеҙлекте тота алмаһа, зыян күрергә мәжбүр буласаҡ.

Шәйех Сәғди әйткән:

«Артыҡ асыу ҡурҡыу тыуҙыра. Урынһыҙ һәм ваҡытһыҙ йомшаҡлыҡ мөхәббәтте юҡ итә.

Ҡатылыҡ һәм йомшаҡлыҡ ҡулға-ҡул тотоноп барырға тейеш. Хирург яра ла һала, май ҙа һөртә...

Зирәк кеше, үҙен түбәнһетмәҫ өсөн, һәр саҡ ҡырыҫ та, һәр саҡ йомшаҡ та түгел.

Шулай уҡ зирәк кеше ғорурланмай ҙа, үҙен түбәнһетеп, бөткән кеше тип тә иҫәпләмәй»...

ТӘКӘББЕРЛЕКТӘН ҺӘМ ҺАУАЛАНЫУҘАН ҠАСЫУ

Аллаһ алдында кем нимәгә лайыҡ икәнен белмәйбеҙ, сөнки ҡәлбтәрҙең тәҙрәһе Уға ғына асыҡ. Шуға күрә берәүгә лә кәмһетеп ҡарарға һәм берәүҙе лә рәнйетергә ярамай. Аллаһтың тәкүәле ҡолдары араһында кәмһетелгәндәр, рәнйетелгәндәр күп, шуға ла әйтелгән бит: «Һәр төндө Ҡәҙер кисе, тип бел, осраған һәр кемде Хызыр, тип уйла».

❁

Барса золом тәкәбберлектән башлана. Тәкәббер кеше иҫәргә, наҙанға әйләнә, һәр нәмәгә битараф була һәм шомланып ҡарай.

Изге аятта әйтелә:

«Ер йөҙөндә маһайып йөрөмә. Сөнки һин (булыр-булмаҫ көсөң менән) Ерҙе яра алмайһың, (булыр-булмаҫ буйың менән) тауҙар бейеклегенә етә алмайһың!» (әл-Исра (Төнгө сәфәр), 37).

«Тәкәбберләнеп, кешеләрҙән йөҙ сөйөрмә. Донъяла маһайып, танау сөйөп йөрөмә. Аллаһ тәкәбберҙәрҙе, үҙен генә яратыусыларҙы, маҡтансыҡтарҙы яратмаҫ» (Лоҡман, 18).

«…Маһайма, Аллаһ маҡтансыҡтарҙы яратмаҫ…» (әл-Ҡасас (Ҡиссалар), 76).

❁

Хәҙистә әйтелә:

«Кешегә, гонаһлы булыу өсөн, мосолман ҡәрҙәшенә кәмһетеп ҡарау ҙа етә» (Мөслим, Бирр, 32).

❁

Аллаһ ҡолдарына кәмһетеп ҡарау – иң ҙур гонаһтарҙың береһе. Үҙеңдән һорау лазым: «Һуңғы һулышыңа тиклем иманыңды һаҡлай алыуға ныҡлы ышанысың бармы әллә? Ни өсөн һин башҡаларҙы һанға һуҡмайһың?!»

Шәйех Сәғди әйткән:

«Ҡул аҫтында булған, әмерҙәреңә буйһонған һәм хеҙмәт иткән ҡолға ерле юҡҡа асыуланма. Үҙ урыныңды бел һәм сиктән сыҡма, сөнки Хисап көнөндә ҡол - иректә, ә һин, уның әфәндеһе, бығауҙа булһағыҙ, был һинең өсөн ҙур мәсхәрә буласаҡ…»

❁

Мөхтәрәм Ғәли (радыйаллаһу ғәнһү) әйткән:

«Кешенең юғары урын биләүе бәләкәй генә хеҙмәтен дә бөйөк итеп күрергә мәжбүр итергә тейеш түгел, ә биләгән урыны түбән булыуы бөйөк хеҙмәтен бәләкәй итеп күрергә мәжбүр итергә тейеш түгел».

❁

Аллаһ Илсеһе (салләллаһу ғәләйһи үә сәлләм) «касталар системаһын», йәғни йәмғиәттең кластарға бүленеүен ғәмәлдән сығара. Билал Хәбәши (радыйаллаһу ғәнһү) тәүҙә ҡол, ә аҙаҡ Ҡәғбә ҡыйығына баҫып аҙан әйтеүсе «Пәйғәмбәр мөәзине» була. Шулай уҡ Пәйғәмбәребеҙ (салләллаһу ғәләйһи үә сәлләм), һәләттәрен күреп, иреккә ебәрелгән ҡоло Зәйдтең (радыйаллаһу ғәнһү) улы Усаманы (радыйаллаһу ғәнһү), 20 йәш кенә булһа ла, ғәскәр башлығы итеп тәғәйенләй.

Исламда өҫтөнлөктөң берҙән-бер үлсәме – тәҡүәлек.

❁

Шулай ҙа була: хужа үҙенә ялланған хеҙмәткәрҙе әрләй. Хеҙмәткәр хаҡлы булһа ла, яуап бирә алмай, сөнки ишекте икенсе яҡтан ябырға тура киләсәген белә. Мөьмин белергә тейеш: юғары урын биләү үҙеңде иман ҡәрҙәштәреңдән өҫтөн тотоу өсөн хоҡуҡ бирмәй. Изге аятта әйтелә:

«…Хаҡтыр, гонаһ ҡылыуҙан ҡурҡҡан кеше Аллаһ ҡаршыһында иң оло абруй ҡаҙаныр…» (әл-Худжурат (Бүлмәләр), 13).

❁

Мөьмин иман ҡәрҙәштәре алдында үҙен юғары ҡуя алмай, сөнки Аллаһ алдындағы өҫтөнлөктөң берҙән-бер үлсәме – тәҡүәлек, ә тәҡүәлек – Раббыбыҙ Аллаһтың йөрәктәрҙәге сере. Изге хәбәр бүләк итеп бирелгән пәйғәмбәрҙәрҙән ҡала һис кемдең ниндәй халәттә үлере, йәғни иманын һаҡлай алыу-алмауы билдәле түгел. Шуға күрә иң ҙур гонаһтарҙың береһе — Аллаһ ҡолдарын мыҫҡыл итеү, һауаланыу, Аллаһ ҡолдарына кәмһетеп ҡарау.

❁

Кемдең йөрәгендә тәкүәлек булыуын һәм шул арҡала яҡшыраҡ булыуын Аллаһ ҡына белә. Бына ни өсөн Аллаһ беҙҙе изге аятта киҫәтә:

«Эй, мөьминдәр! Бер төркөмөгөҙ икенсеһен мыҫҡыллап көлмәһен (кәмһетмәһен). Бәлки, улар (мыҫҡыллаусынан) күпкә яҡшыраҡтыр…» (әл-Худжурат (Бүлмәләр), 11).

Йәғни, үҙебеҙҙә бар тип уйлаған яҡшылыҡтар, бәлки, беҙ һанға һуҡмаған кешеләрҙә күберәктер. Шул сәбәпле Аллаһ ҡолдарын кәмһетеп ҡарау асылда үҙебеҙҙе кәмһетә.

❁

Аллаһ алдында кем нимәгә лайыҡ икәнен белмәйбеҙ, сөнки ҡәлбтәрҙең тәҙрәһе Уға ғына асыҡ. Шуға күрә берәүгә лә кәмһетеп ҡарарға һәм берәүҙе лә рәнйетергә ярамай. Аллаһтың тәкүәле ҡолдары араһында кәмһетелгәндәр, рәнйетелгәндәр күп, шуға ла әйтелгән бит: «Һәр төндө - Ҡәҙер кисе, тип бел, осраған һәр кемде - Хызыр, тип уйла».

❁

Ғәйбәтсе, кеше артында кәмһетеп һөйләп, үҙен иман ҡәрҙәшенән юғары ҡуя. Ғәйбәт, яман теллелек – һауаланыуҙың, тәкәбберлектең телдәге сағылышы. Аллаһ Сүбхәнәһү үә Тәғәлә изге аятта кешеләрҙе киҫәтә:

«Әсе ҡәһәр төшһөн кеше артында яман һүҙ йөрөтөүселәргә!» (әл-Һүмәзәһ (Ғәйбәтсе), 1).

❁

Аллаһ ҡолдарына кәмһетеп ҡарауҙан да кешене рухи йәһәттән һәләк итеүсе һәм Аллаһтың ҡарғышына дусар итеүсе башҡа бәлә юҡ.

❁

Шик юҡ, тәкәбберлеккә һәм мин-минлеккә сумған һәр бер әҙәм Аллаһтың Бөйөклөк (Кибрийә) сифатына тиңдәш булырға маташасаҡ, ә был иһә уны Аллаһтың ҡарғышына юлыҡтырасаҡ.

❁

Аллаһ бүләк итеп биргән көс һәм ҡөҙрәтте үҙҙәренеке һанаған золом эйәләре Раббыбыҙҙың Бөйөклөк (Кибрийә) сифаты менән ярышырға маташып һәм «Мин!» - тип белдереп, үҙҙәрен Уға ҡаршы ҡуйырға маташтылар һәм, илаһи асыуға дусар булып, һәр ваҡыт һәләк булдылар. Улар:

– «Кем беҙҙән көслөрәк?»- тип маҡтанған ғәд һәм ҫәмүд кеүек ҡәүемдәр.

– Тәкәбберлек һәм мин-минлеккә сумып: «Мин был байлыҡты үҙ ғилемем һәм оҫталығым менән эшләп таптым!»,- тигән Ҡарун һәм уның ишеләр.

Тәкәббер золом эйәләренең мөһабәт һарайҙары өҫтөндә ҡалҡҡан ҡояш бөгөн инде уларҙың харабалары өҫтөнә ҡалҡа.

❁

Мөхтәрәм Мәүләнә әйткән:

«(Аллаһтың асыуына тарыған) Фирғәүен һәм ғәдтәр дусар булған нәмәләр тураһында ишеткән аҡыллы кешеләр үҙ нәфесенә эйәрергә, һауаланырға, тәкәбберләнергә тырышмай. Ә әгәр инде баш тартмаһалар, бәләгә тарыйҙар һәм улар бәхетһеҙлегенән башҡалар һабаҡ ала».

❁

Кешелек тарихында Раббыһын онотҡан һәм, фани донъяла ирешкән уңыштарына, көсөнә, ҡөҙрәтенә таянып, үҙҙәрен еңелмәҫ, ҡаҡшамаҫ һәм үлмәҫ, тип уйлаған ғафилдар күп була. Улар, үҙ нәфесен илаһлаштырып, хатта Аллаһҡа ҡаршы баш күтәрә. Быға бик күп миҫалдар килтерергә мөмкин.

Мәҫәлән, 1912 йылда океандарҙа гиҙеп йөрөү өсөн ғәләмәт ҙур карап - «Титаник» төҙөлә. Уны төҙөүселәр, ғорурлыҡтарына, тәкәбберлектәренә барып, былай тип белдерә: «Һис бер көс был карапты батыра алмаясаҡ!». Әммә тәүге рейсында уҡ «Титаник» океанда йөҙөп йөрөгән боҙ тауына бәрелеп һыу төбөнә китә.

1986 йылда «Челленджер» тип аталған, инглиз теленән ул «ҡаршы сығыу» тип тәржемә ителә, йыһан шаттлы төҙөлә. Челленджер йыһанға юл тоторға тейеш була, әммә 73 секунд үткәс, ул күктә шартлай.

Көсөнә һәм ҡөҙрәтенә таянып, үҙен илаһ тип иғлан иткән ғорур Нәмруд, мыҫҡыл ителгән кеүек, аҡһаҡ себен тарафынан үлтерелә.

Раббыбыҙ Аллаһ сиктән сыҡҡан Фирғәүенде Ҡыҙыл диңгеҙҙә батыра.

Ҡәғбәне емерергә теләгән тәкәббер Әбрәхә үҙ заманының танкылары – ҙур һуғыш филдәре булған ҡеүәтле ғәскәренә таяна. Һис бер көс уны туҡтата алмаҫ, тип уйлай ул. Әммә еңелмәҫ тип иҫәпләгән ғәскәре менән Мәккә тирәһенә еткәс, Аллаһ Тәғәлә уны арыҫландар, юлбарыҫтар йәки башҡа йыртҡыс хайуандар ярҙамында ла туҡтатмай, ә, әйтерһең дә, мыҫҡыл иткәндәй, ҡошсоҡтар ташлаған ваҡ ҡына таштар ярҙамында туҡтата – Әбрәхә ғәскәре орлоғо һуғып алынған һалам кеүек теткеләнеп бөтә.

Шулай итеп, Аллаһ Сүбхәнәһү үә Тәғәләнең «әл-Мутакаббир» (Бөйөктәрҙең-Бөйөгө, Тиңдәшһеҙ) сифаттарын һис кем уртаҡлаша алмай!

Аллаһ Илсеһе (салләллаһу ғәләйһи үә сәлләм) әйткән:

«Йөрәгендә туҙан ҙурлыҡ ҡына тәкәбберлек ҡалған булһа ла, кеше Йәннәткә инә алмаҫ» (Мөслим, Иман, 147-149).

❁

Юғары рухиәт үрҙәрендә өлгөрөп етмәгән тупаҫ йөрәктәргә урын юҡ. Тамырҙары Йәһәннәмдә булған һауаланыу, тәкәбберлек һәм мин-минлек кеүек яман сифаттар менән Йәннәттең хозур, һоҡланғыс мөхитенә инеү мөмкин түгел.

❁

Мөхтәрәм Әсғәд Әрбили әйткән:

«Аллаһ алдында ҡолдарын түбәнһеткән иң беренсе гонаһ – ҡолдоң үҙен ҡөҙрәтле итеп күреүе, йәғни мин-минлек».

❁

Ғилемебеҙ күпме генә булмаһын, беҙ онотмаҫҡа тейеш: ғилемдең осо-ҡырыйы юҡ. «Мин бөтәһен дә беләм!..»- тип белдереү – көсһеҙлөктән килә. Кем генә булмаһын, кеше – белгәндәренең уҡытыусыһы һәм белмәгәндәренең уҡыусыһы.

❁

Мөхтәрәм Әбү Хәсән Харакәни әйткән:

«Бер нәмә лә белмәгәнен аңлағанға тиклем, кеше ғилеме менән ғорурлана. Ә инде аңлағас, ғилеме өсөн уға оят була башлай, ана шул саҡта мәғрифәтуллаһ, йәғни Аллаһҡа яҡынайтыусы хәҡиҡи ғилем камил төҫ ала. Хәҡиҡи ғилем – үҙеңдең һис нәмә белмәүеңде таныу ул».

❁

Үҙҙәренең наҙанлығын аңлағандарға нәсихәт биреүе еңел, ә үҙҙәрен ғалим, тип иҫәпләгән тәкәбберҙәргә, маһайыусыларға – ауыр.

❁

Мөхтәрәм Әхмәд ибн Хәнбәл әйткән:

«Иҫәр кешеләр — үҙҙәрен маҡтағанды яратыусылар».

❁

Мөхтәрәм Имам Шафиғи әйткән:

«Золом ҡылыусыларҙың иң ямандары – юғары урын биләгәс, туғандарын һанға һуҡмаусылар, дуҫтарын танымай башлаусылар һәм изге күңеллеләр алдында маһайыусылар».

❁

Мөхтәрәм Әбү Ғәли Рузбари әйткән:

«Юҡтан бар ҡылынған үҙ нәфесен бер тапҡыр ғына булһа ла кәрәгенән артыҡ баһлаусы (йәғни, ғәмһеҙлеккә батып, маһайыусы, һауаланыусы) нәсихәт ала алмай».

❁

Барса яманлыҡтар мин-минлектән башлана. Һауалы әҙәм иҫәргә, наҙанға әүерелә, һәр нәмәгә, асылын төшөнмәйенсә, ҡараңғы сырай менән ҡарай.

Мөхтәрәм Әхмәд ибн Хәнбәл әйткән:

«Мин-минлек булған башта һеҙ хикмәт тапмаҫһығыҙ».

❁

Аҡыл бүләк иткән Раббыһы Аллаһҡа итәғәтле булыу урынына дошман булғандар Иблис/Шайтан өммәтенә ҡарай.

Иблис Әҙәмгә (ғәләйһис-сәләм) кәмһетеп ҡарай, маһая. Мин-минлеге сәбәпле ул Аллаһҡа буйһонорға теләмәй. Шул саҡта тәүге диспут, тәүге рационалистик ҡаршы сығыу була. Тәкәбберлек шайтандың аҡылын томалай, ул айыҡ фекер йөрөтә алмай башлай һәм Аллаһтың әмеренән сыға.

Әммә аҡылды файҙаланып фекер йөрөтөү – уны бүләк итеп биргән Аллаһҡа шөкөрһөҙлөк түгел, киреһенсә, Уға күндәмлек һәм рәхмәтеңде белдереү, тик быны Изге Яҙмаларға нигеҙләнеп эшләү лазым.

Быны аңлай алмаған Шайтан үҙенә бүләк итеп бирелгән аҡыл ярҙамында Аллаһ Сүбхәнәһү үә Тәғәләгә ҡаршы килә. Мин-минлеге арҡаһында ул тәүбә ҡыла ла алмай һәм рухи йәһәттән һәләк була.

Илаһи хәҡиҡәттәргә ҡаршы баш күтәргән поттарға табыныусыларҙың сикле аҡылының ҡыҙғаныс һөҙөмтәһе был!

❁

Мөхтәрәм Әҙәм (ғәләйһис-сәләм), илаһи әмерҙе боҙоп, тыйылған емеште ашай, әммә шунда уҡ тәүбә ҡыла. Шайтан инһә, хатаһын белһә лә, тәкәбберлеге арҡаһында тәүбә ҡыла ла, ғәфү үтенә лә алмай, шулай итеп, хаҡтан йыраҡлаша.

Тимәк, хаталанһаң, илаһи асыуҙан ҡотолоу өсөн, шунда уҡ уны таныу һәм, ярлыҡау һорап, Раббыбыҙҙан ғәфү үтенеү лазым.

❁

Мөхтәрәм Мәүләнә әйткән:

«Иблис илаһи буҫағанан Аллаһ алдындағы әҙәпһеҙ хәбәрҙәре сәбәпле ҡыуыла…

Әгәр шайтанды еңергә теләһәң, күҙеңде ас һәм күр: әҙәп – уны ҡыйрата торған нәмә!

Әгәр кешелә әҙәп юҡ икән, ул кешелеклелек менән хушлашҡан, сөнки кешене һәм хайуанды айырып торған нәмә – ул әҙәп».

❁

Еңеү ауыр булған кешеләге иң яман һыҙат – мин-минлек. Кеше һәр ваҡыт үҙ нәфесе әсирлегендә һәм, шайтан кеүек, һәр ваҡыт үҙ-үҙен аҡлай. Һауалы кеше, башҡаларҙың кәмселек-хаталарын өҫкә күтәреп, үҙен һәр ваҡыт өҫтөн итеп күрһәтергә тырыша. Ул ғәйбәттән һәм кешеләрҙең кәмселектәрен табыуҙан йәм таба. Шайтан һымаҡ, тәкәбберләнеп, минең һис бер хата-кәмселегем юҡ, тип иҫәпләй. Уның уйынса, Аллаһтың киҫәтеүҙәре уға ҡағылмай. Ә бит донъяла хата-кәмселекһеҙ кеше юҡ.

Шуға күрә, тәсауыфтың иң төп һәм иң мөһим маҡсаты – йөрәктән мин-минлекте ҡыуып сығарыу.

❁

Әбү Хашим әс-Суфи, тәүге суфыйҙарҙың береһе, әйткән:

«Йөрәккә оялаған тәкәбберлекте ҡыуып ебәреү әнә менән тауҙы тигеҙләүгә ҡарағанда ла ауырыраҡ».

❁

Мөхтәрәм Муса Әфәнде, маһайыуҙан һәм тәкәбберлектән арынған йөрәк алдында ниндәй офоҡтар асылыуы тураһында шулай тип һөйләгән:

«Барыһы ла кешенең мин-минлектән ҡотолоуына бәйле. Әгәр ул унан баш тартһа, камиллыҡҡа табан иҫ киткес ҙур юлды үтә аласаҡ. Әммә, тыштан ҡарағанда еңел тойолһа ла, мин-минлектән арыныуы ғәҙәттән тыш ауыр.

Тәкәбберлектән арынғас, күңелгә тыныслыҡ килә, һәммәһе дуҫыңа әүерелә! Быға ирешкән кешелә барсаһына, айырыуса мосолмандарға йылы мөнәсәбәт барлыҡҡа килә һәм ул башҡалар тураһында тик яҡшы уйҙар ғына уйлай».

ҒӘФҮ ИТӘ БЕЛЕҮ ҺӘЛӘТЕ, ТҮҘЕМЛЕК, АСЫУҘЫ БАҪЫУ

Раббыбыҙ Аллаһ һорау бирә:

«...Аллаһтың һеҙҙе ғәфү иткәнен яратмайһығыҙмы ни?» *(ән-Нур, 22-се аят).*

Аллаһтың ярлыҡауына мохтаж булғанлыҡтан, уның ҡолдарын ғәфү итеп, беҙ илаһи ярлыҡауға лайыҡ булырға ынтылырға тейеш.

❁

Үҙен мыҫкыл итеүселәргә асыуланыр урынға имам Шәғби әйтер булған: «Әгәр һеҙ әйткәндәр дөрөҫ булһа, Аллаһ мине ғәфү итһен! Әгәр был ялған булһа, Аллаһ һеҙҙе ғәфү итһен!»

Аллаһ Илсеһе (салләллаһу ғәләйһи үә сәлләм) үҙе өсөн асыуланмаған, әммә башҡаларҙың хоҡуҡтарын боҙһалар һәм хәҡиҡәткә ҡаршы барһалар, өнһөҙ ҡалмаған. Үҙенә ҡарата ҡылынған хаталарҙы, яҙыҡтарҙы һәм тупаҫлыҡтарҙы ул Аллаһ ризалығы өсөн ғәфү иткән.

Аллаһ Илсеһе (салләллаһу ғәләйһи үә сәлләм) өммәте булараҡ, уның халәте беҙҙең халәтебеҙ булыуға өлгәшергә ынтылырға тейешбеҙ:

– Рамаҙан һәм Ҡорбан байрамдары ваҡытында ғына кәмселек-хаталарҙы ғәфү итеү, килешеү, аралашыу, иман ҡәрҙәшлеген һаҡлау тураһында иҫкә төшөрөү түгел, ә һәр ваҡыт киң күңелле мәрхәмәт кешеләре булырға тырышыу зарур.

– Аллаһ ризалығы өсөн, үпкә кеүек кәмселектәребеҙҙе еңеү һәм үҙебеҙгә ҡарата ҡылынған ғәҙелһеҙлекте принцип һәм намыҫ эше тип ҡарауҙан йыраҡ булыу мөһим.

– Үпкә йөрөтөү һәм үс тотоу, асыу кеүек сифаттарҙы пакланмаған йөрәктең сифаты тип ҡарау кәрәк.

– Белергә тейешбеҙ: беҙгә ҡарата ҡылынған хаталар, яҙыҡтар – нәфесебеҙ пакланыуының (тәзкиәһенең) һәм гонаһтарыбыҙ ғәфү ителеүенең сәбәбе.

❁

Мөхтәрәм Мәүләнә әйткән:

«Әгәр иман ҡәрҙәшең күңелеңдә бер тапҡыр яралаһа, уның һиңә мең тапҡыр тоғро булыуын иҫеңә төшөр! Яҙыҡтарыбыҙҙы юйып, изгелектәребеҙ бит шәфәғәт ҡыла».

❁

Шәйех Сәғди бит әйткән:

«Әгәр һиңә зыян һалғандар икән, түҙ. Ғәфү итеп, һин бит гонаһтарҙан паклanаһың».

❁

Мөхтәрәм Мәүләнә һорау бирә:

«Һинең һәр ҡыйынлыҡҡа йәнең көйә, асыуың килә. Һин һәр бер тупаҫ әҙәмгә үпкәләйһең. Шымартылмай тороп, һин нисек көҙгө булырға уйлайһың?»

❁

Бары тик Аллаһ Тәғәлә – Мәғфирәт эйәһе, Мәрхәмәтле. Мөьминдәр йөрәге ни дәрәжәлә Аллаһты һөйһә, шул дәрәжәлә генә ғәфү итә белер һәм мәрхәмәтле булыр.

Ғәфү итергә ихтыяры етмәгән ғафил йөрәктәр нисек итеп иртәгә үҙҙәрен ғәфү итеүҙе һорай алыр һуң?

❁

Әгәр беҙ Раббыбыҙҙың әл-Ғафүүр (Ярлыҡаусы) сифатынан өлөш алырға теләһәк, үҙебеҙҙән ғәфү үтенгәндәрҙе ғәфү итә белергә тейешбеҙ.

❁

Ҡолдарына мәрхәмәтле булып ҡына, Рәхимленең рәхмәтенә лайыҡ булырға мөмкин. Һәммәбеҙ бит Уның яҡшылығына һәм рәхмәтенә мохтаж.

«Йәә Аллаһ! Беҙҙе ғәфү ит, ғибәҙәттәребеҙҙе ҡабул ит!»- тип ялбарабыҙ беҙ. Әммә ләкин үҙебеҙгә ярлыҡау һорарға лайыҡлы булыр өсөн, тәү сиратта Раббыбыҙҙың мохтаж ҡолдарына һәм Уның мәхлүктәренә йомарт һәм мәрхәмәтле булырға тейешбеҙ.

❁

Мөхтәрәм Ғүмәр (радыйаллаһу ғәнһү) әйткән: «Мәрхәмәтле булмағанға мәрхәмәт булмаҫ. Ғәфү итмәгән ғәфү ителеүгә лайыҡ булмаҫ…» (Бохари, аль-Адабул-муфред, стр. 415, №371).

❁

Раббыбыҙ Аллаһ әйткән:

«…Аллаһтың һеҙҙе ғәфү иткәнен яратмайһығыҙмы ни?» (Ән-Нур, 22).

Аллаһтың ғәфү итеүенә мохтаж булғанлыҡтан, Уның ҡолдарын ғәфү итеп, илаһи ярлыҡауға лайыҡ булырға ынтылыу зарур.

❁

Камил иман эйәләре яманлыҡҡа ғәҙеллек менән түгел, ә ғәфү итеү һәм мәрхәмәт менән яуап биреүҙе хуп күрә, сөнки улар мәңгелек тормошта Аллаһ та илаһи мизанда ғәҙеллек буйынса түгел, ә ярлыҡау, мәрхәмәт, яҡшылыҡ һәм киң күңеллелек менән эш итер, тип өмөтләнә.

Әхирәткә бит һәммәбеҙ бик күп әжер-сауаптар менән барырға һәм Аллаһтың рәхмәтенә ирешергә теләй түгелме ни? Бына ни өсөн салих заттар эҙәрлекләүҙәргә һәм ғазаптарға дусар итеүселәргә үҙҙәре һымаҡ яуап биреүҙе хупламай. Улар ғәфү итә белә һәм киң күңелле, улар Аллаһ ризалығы өсөн түҙемле һәм Аллаһ ризалығы өсөн асыуын баҫа.

❁

Пәйғәмбәребеҙ (саллəллаһу ғəлəйһи үə сəлləм) әйткән:

«...Йомшаҡ күңелдән мәхрүм әҙәм рәхмәттән дә мәхрүм» (Тирмизи, Бирр, 67/2013).

❁

Ниндәй хикмәтле нәсихәт һалынған рухи мәктәптәр диуарын биҙәгән был яҙмаға:

«Йомшаҡ бул!»

Был кәлимәнең икенсе мәғәнәһе: «Сәбәптәргә йәбешмә, Сәбәптәр менән идара итеүсе Хәҡҡ Ихтыярына ҡара, йәғни Аллаһ Тәғәләнең биргән тәҡдиренә шөкөр ит!».

❁

Хаҡ мөьмин, әгәр берәү хата эшләһә йәки уға ҡарата золом ҡылһа, Аллаһ ризалығы өсөн асыуын баҫа. Ниндәй генә имтихандар менән һыналмаһын, хаҡ мөьмин итәғәтһеҙлек күрһәтмәй, һәр ваҡыт сабыр булып ҡала, шөкөр итә һәм

әйтә: «Был Раббымдың һынауы, мин уның тәҡдиренә шөкөр итәм, Ул да минән риза булһын инде».

Шулай итеп, сәбәптәргә йәбешмәйенсә, ул рухи һыҙланыуҙарҙан ғына ҡотолмай, һәр осраҡта Аллаһҡа мөрәжәғәт итеүе өсөн сауап та ала, йәғни яҡшылыҡтан да, яманлыҡтан да файҙа ала...

❁

Мөхтәрәм Ғәли (радыйаллаһу ғәнһү) әйткән:

«Әгәр кешелә Аллаһ, Аллаһ Илсеһе (салләллаһу ғәләйһи үә сәлләм) һәм тәҡүәләр Сөннәте юҡ икән, тимәк был уға хикмәт бирелмәгәнен күрһәтеп тора. Аллаһ Сөннәте – серҙәрҙе йәшереү, Аллаһ Илсеһе (салләллаһу ғәләйһи үә сәлләм) Сөннәте – күркәм холоҡ аша кешеләр менән уртаҡ тел табыу, тәҡүәләр Сөннәте – кешеләрҙән килгән ғазаптарға түҙеү».

❁

Пәйғәмбәребеҙ (салләллаһу ғәләйһи үә сәлләм) өммәтенең һәр ағзаһы үҙе менән бергә Йәннәттә булыуын теләй. Шуға күрә ул сәхәбәләренә уларҙың кимәленә ҡарап нәсихәт бирә. Әнәс ибн Маликка (радыйаллаһу ғәнһү) ул әйткән:

«Балам, әгәр һин йөрәгеңдә һис бер асыу һәм һис бер үпкә тотмай һәр иртә тора һәм һәр кис ятып йоҡлай алаһың икән, һин быны шулай эшлә! Балам, был минең Сөннәтем. Кем минең Сөннәтемде тота, һис шикһеҙ, мине һөйә. Ә кем мине һөйә, ул минең менән Йәннәттә бергә булыр» (Тирмизи, Ильм, 16/2678).

❁

Мөхтәрәм Шафиғи имам әйткән:

«Был донъяла һис бер тыныслыҡ тапмаған кешенең йөрәгендә асыу һәм көнсөллөк булыр».

❁

Мөхтәрәм Ғәли (радыйаллаһу ғәнһү) әйткән:

«Аллаһ ҡолдарына ҡарата һәр ваҡыт тик яҡшы фекерҙә бул. Шундай булһаң, хәлдән тайҙырған күп нәмәләрҙән ҡотолорһоң».

❁

Шәйех Сәғди әйткән:

«Аллаһты танып белгән (мәғрифәтуллаһҡа эйә) кеше тупаҫ һәм назан кешеләрҙең мыҫҡыллауҙарына дусар була икән, ул үпкәләмәҫкә тейеш.

Тупаҫ таш алтын сеүәтәне вата ала, әммә бынан ғына таштың ҡиммәте лә үҫмәй, алтындың хаҡы ла төшмәй».

❁

Мөхтәрәм Мәүләнә әйткән:

«Белегеҙ, яҡшы әҙәп - әҙәптән мәхрүмдәрҙең тупаҫлығына сабыр булыу һәм асыуҙы баҫыу».

❁

Үҙен мыҫҡыл итеүселәргә асыуланыр урынға Шәғби имам әйтер булған: «Әгәр heҙ әйткәндәр дөрөҫ булһа, Аллаһ мине ғәфү итһен! Әгәр был ялған булһа, Аллаһ heҙҙе ғәфү итһен!»

❁

Илаһи һынауҙар аша рухи юғарылыҡҡа күтәрелгән йөрәктәр ғәҙәттән тыш сыҙамлыға әйләнә. Улар үпкәләтмәйҙәр һәм үпкәләмәйҙәр. Асылда тәсауыфтың тәүге һабағы - үпкәләтмәү, ә һуңғыһы - үпкәләмәү.

❁

Үпкәләтмәү ниндәйҙер дәрәжәлә кешенең ихтыярына бәйле. Әммә үпкәләмәүе ауыр, сөнки йөрәктең ихтыяры юҡ. Шуға күрә ғәҙелһеҙлектән зарланған йөрәктең өнөн тығыуға юғары рухиәтлеләр генә һәләтле.

❁

Шәйех Сәғди әйткән:

«Ғәләмәт зур диңгеҙҙе бер таш менән болғатып булмай. Үпкәләгән кеше һайлыҡҡа оҡшаған».

❁

Шәфҡәтлелек һәм ғәфү итә белеү рухи йәһәттән үҫешкән кешеләргә хас. Аллаһ ризалығы өсөн, күргән ғазап-яфалары хаҡына кешеләрҙе ғәфү итеү – камил мөьминдәр генә эйә булған рухи юғарылыҡ.

❁

Ҡөҙрәтле Раббыбыҙ аяттарҙа әйтә:

«Мосолмандар – үҙ-ара ҡәрҙәш. Шулай булғас, ҡәрҙәштәрҙең араһын яйлағыҙ һәм Аллаһтан (язаһынан) ҡурҡығыҙ, ярлыҡанырһығыҙ, Уның рәхмәттәренә ирешерһегеҙ!» (әл-Худжүрат (Бүлмәләр), 10);

«...әгәр һеҙ мөьмин булһағыҙ, үҙ-ара татыу булығыҙ, Аллаһтан ҡурҡығыҙ һәм Рәсүленә итәғәт итегеҙ» (әл-Әнфәл (Табыш малы), 1).

❁

Ҡөрьәндә асыуланышҡан мосолмандарҙың татыулашырға тейешлеге тураһында әйтелә. Йәғни иман ҡәрҙәшлеге, Аллаһ ризалығы өсөн, «мин хаҡлы, һин хаҡлы түгел» рәүешендәге бәхәстәрҙе туҡтатып, элекке дошманлыҡты онотоуҙы талап итә. Бының өсөн, үҙ нәфесеңде еңерлек, иман ҡәрҙәшеңде ғәфү итә алырлыҡ эскерһеҙ күңел кәрәк. Үпкә тотоу – ул Аллаһтың әмеренә буйһонмау тигән һүҙ...

❁

Йософ (ғәләйһис-сәләм) ағаларының аяуһыҙлығына һәр ваҡыт шәфҡәтлелек, яҡшылыҡ, мәрхәмәтлелек менән яуап бирә. Ахыр килеп, был хәҡиҡәтте ағалары ла таный: **«Валлаһи! Ысындан да, Аллаһ Тәғәлә һине беҙҙән өҫтөн ҡуйҙы. Хаҡ, беҙ гонаһлылар булдыҡ»** (Йософ, 91).

Йософ (ғәләйһис-сәләм) изгелек күрһәтеп әйтә:

«Бөгөн мин һеҙгә үпкәләмәйем инде, Аллаһ һеҙҙе ғәфү итһен ине. Ул миһырбанлыларҙың да миһырбанлыһылыр» (Йософ, 92). Йәғни ул, ағаларын үҙе ғәфү иткән кеүек, Аллаһтың да уларҙы ғәфү итеүен үтенә.

❁

Хәҙерге заман донъяһында матдиәт һәм рухиәт араһындағы баланс матдиәт файҙаһына боҙолған, мөхәббәт һәм иман юҡҡа сығып бара, күңелдәрҙә тәрән төшөнкөлөк. Донъяуи мәнфәғәттәр тәүге урынға күсеү сәбәпле, күпме иман эйәһе бер-береһенә ҡарата үпкә йөрөтә, халҡын мөнәсәбәттә! Наҙанлыҡ, мин-минлек һәм күңел төшөнкөлөгө сәбәпле, ислам ҡәрҙәшлеге көсһөҙләнә.

Ә бит һәммәбеҙ өсөн Пәйғәмбәребеҙ (салләллаһу ғәләйһи үә сәлләм) – бөйөк үрнәк һәм нәсихәтсе. Ул иманлыларҙың бер-береһенә йылы мөнәсәбәттә булыуын һәм ихлас мөхәббәт мөхитендә йәшәүен теләй.

Әммә был мөхәббәт ҡоро белдереүгә ҡайтып ҡалырға тейеш түгел. Иман килтергәндәр, ҡәрҙәштәренең ҡайғы-хәсрәттәрен бүлешеп, кәмселек-хаталарын ғәфү итеп, физакәрлек күрһәтмәһә, хәҡиҡи мөхәббәт тураһында һүҙ алып барыу мөмкин түгел.

❁

Бер заман Аллаһ Илсеһе (салләллаһу ғәләйһи үә сәлләм) һораған:

«Ураҙа, ғибәҙәт һәм зәкәттән дә яҡшыраҡ ғәмәл тураһында әйтәйемме һеҙгә?». [Сәхәбәләр] әйткән: «Эйе, һөйлә, йәә Рәсүлүллаһ!» Ул әйткән: «Кешеләрҙе үҙ-ара татыулаштырыу. Кешеләр араһындағы мөнәсәбәттәр боҙолоу (иманды) емерә» (Әбү Дауыт, Әҙәп, 50/4919).

❁

Мөхтәрәм Йәғәфәр Садыҡ әйткән: «Кем итәғәтһеҙлек ҡылысын ҡынынан алһа, шул ҡылыстан тураҡланыр. Кем иман ҡәрҙәшенә соҡор ҡаҙһа, шунда үҙе төшөр».

❁

Мосолманға ҡәберҙә һәм Әхирәттә үкенес килтерерҙәй, фани, үтә торған мәнфәғәттәр өсөн йөрәкте яраларҙай, дошманлыҡ тыуҙырырҙай ғәмәлдәрҙән тыйылырға кәрәк. Һәм, киреһенсә, исламдағы ҡәрҙәшлекте нығытыуға, йөрәктәрҙе һис ҡаҡшамаҫ мөхәббәт күперҙәре менән тоташтырыуға бөтә көсөбөҙҙө һалыу лазым, сөнки шундай берҙәмлек, ойошҡанлыҡ яҡшылыҡты арттыра һәм золомдо еңә.

Мөхтәрәм Мәүләнә әйткән:

«Кешеләр менән дуҫ бул, сөнки каруаның ни тиклем күп һанлы, зур булһа, юлбаҫарҙарҙың мөмкинлеге шул тиклем кәмей».

❁

Мөхтәрәм Ғәли (радыйаллаһу ғәнһү) әйткән:

«Дуҫтар табырға һәләтһеҙҙәр - кешеләрҙең иң көсһөҙө. Ә булған дуҫын юғалтыусы – тағы ла нығыраҡ көсһөҙ».

❁

Пәйғәмбәребеҙ (салләллаһу ғәләйһи үә сәлләм) әйткән:

«Һеҙгә таркаулыҡтан ҡасырға һәм берҙәм булырға кәңәш итәм, сөнки шайтан яңғыҙ кеше янында, ул ике кеше янынан алыҫлаша. Берәү Йәннәт уртаһында булырға теләһә, мосолмандар йәмғиәтен ташлап китмәҫкә тейеш!» (Тирмизи, Фитан, 7/2165; Әхмәд, I, 26, V, 370-371).

❁

Пәйғәмбәребеҙ (салләллаһу ғәләйһи үә сәлләм) әйткән:

«Һәр кесаҙна һәм дүшәмбе кешеләрҙең ғәмәлдәре [Аллаһҡа] тапшырыла, һәм Аллаһ Үҙенә тиңдәш ҡылмаған һәм ҡәрҙәше менән икеһе араһын нәфрәт

айырғандарҙан башҡаларын ғәфү итә. Һәм Ул шул саҡ [фәрештәләргә] әйтә: «Үҙ-ара дуҫлашмай тороп, быларҙы ҡалдырып тороғоҙ!» (Мөслим, Бирр, 36; Әбү Дауыт, Әҙәп, 47).

❁

Аллаһ Илсеһе (салләллаһу ғәләйһи үә сәлләм) әйткән:

«Мөьмингә иман ҡәрҙәшенә өс көндән артыҡ үпкә йөрөтөү тыйыла. Өс көн үтһә, ул мотлаҡ ҡәрҙәшенә килһен һәм сәләм бирһен. Әгәр икенсеһе сәләменә яуап бирһә, икеһе лә сауап ала. Әгәр яуап бирмәһә, яҙығы уға булыр, ә сәләм биргәне үпкә яҙығынан ҡотолған булыр» (Әбү Дауыт, Әҙәп, 47/4912).

❁

Пәйғәмбәребеҙ (салләллаһу ғәләйһи үә сәлләм) әйткән:

«(Иман) ҡәрҙәштәре булыр өсөн, Бөйөк һәм Ҡөҙрәтле Аллаһ әмер иткәнсә, сәләм таратығыҙ, фәкирҙәрҙе һәм мохтаждарҙы ашатығыҙ» (Ибн Мәджә, Атима, 1);

«Кешеләр араһынан Аллаһ ҡашында иң һөйөклөһө һәм Уға иң яҡыны - [иман ҡәрҙәшен] беренсе булып сәләмләүсе» (Тирмизи, Исти'зан, 6).

❁

Раббыбыҙ Аллаһ әйтә:

«Аллаһҡа һәм уның Рәсүленә буйһоноғоҙ, үҙ-ара ғауғалашмағыҙ, юҡһа, рухығыҙ төшөр һәм ҡеүәтегеҙ китер…» (әл-Әнфәл (Табыш малы), 46).

❁

Әгәр мосолмандар берҙәмлекте һәм теләктәшлекте һаҡламаһа, бер-береһенә арҡа терәге булмаһа, Аллаһтың мөхәббәтенән генә мәхрүм ҡалмаясаҡ, көс-ҡеүәтен дә юғалтасаҡ. Шуға күрә хәҙистә әйтелә:

«Йәмғиәттә – рәхмәт, тарҡаулыҡта – һәләкәт» (Әхмәд, IV, 278, 375; Хайсами, V, 217).

❁

Мөхтәрәм Әбү Бәкер (радыйаллаһу ғәнһү) әйткән:

«Күршең менән һуғышма, яныңдағылар китер, ул ҡалыр!».

❁

Раббыбыҙ Аллаһ әйтә:

«Эй, иман килтергән кешеләр! Барығыҙ ҙа, берләшеп, Ислам диненә керегеҙ, шайтан артынан эйәрмәгеҙ…» (әл-Бәкара (Һыйыр), 208).

❁

Мөьминдәр – бер Аллаһҡа инанған һәм Пәйғәмбәребеҙҙең (салләллаһу ғәләйһи үә сәлләм) бер үк өммәтендә торған, бер үк ҡиблаға ҡараған, мәсеттәрҙә иңгә-иң терәп намаҙ ҡылған, бер-береһен аманат тип белгән һәм бер-береһе алдында үҙҙәрен бурыслы итеп тойған иман ҡәрҙәштәре. Иман ҡәрҙәшлеге ҡан ҡәрҙәшлегенән, йәғни уртаҡ ата-инә булыуҙан юғарыраҡ, сөнки йөрәк берлеге булмаһа, туғанлыҡ һәм биологик бәйләнештәрҙән фәтүә юҡ.

Биологик һәм туғанлыҡ бәйләнештәре Нух пәйғәмбәрҙең (ғәләйһис-сәләм) дүртенсе улы булған Кенанға бер ниндәй ҙә файҙа бирмәй – ул, Ер йөҙөнә туфан ҡалҡҡанда, башҡа мөшриктәр менән бергә батып үлә.

Аллаһ Тәғәлә Нух пәйғәмбәрҙе (ғәләйһис-сәләм) киҫәтә:

«...Эй, Нух! Ул асылда һинең тоҡомоң түгел ине…» (Һуд, 46).

❁

Барса мосолмандар – ҡәрҙәш. Уттан яралыуын һәм шул арҡала ерҙән бар ҡылынған Әҙәмдән юғары булыуын раҫлаған шайтандан башланған расизм исламда ҡәтғи тыйыла... «Хушлашыу хөтбәһе» - быға асыҡ дәлил.

Ҡыҙғанысҡа ҡаршы, дини тойғолар көсһөҙләнһә, ә яһилиәт көсәйһә, милләт берлеге иман берлегенән юғары була башлай. Расизм һәм милләтселектең берҙән-бер тормозы – расаларға йәки милләттәргә айырмайынса, барса иман эйәләрен ҡәрҙәштәр тип иғлан иткән ислам. Хәҡиҡи ҡәрҙәшлек – иман ҡәрҙәшлеге, йөрәктәр ҡәрҙәшлеге. Әгәр шундай ҡәрҙәшлек булмаһа, биологик ҡәрҙәшлектән фәтүә юҡ.

Әҙәм пәйғәмбәрҙең (ғәләйһис-сәләм) ике улы, Һабил һәм Ҡабил, биологик туғандар була, әммә икеһенең йөрәге ике төрлө. Ҡабил, нәфес һәүәҫлектәренә һәм көнсөллөгөнә барып, кеше үлтереүсе була. Изге күңелле Һабил иһә, ғәҙелһеҙ ҡәрҙәшенән айырмалы рәүештә, үҙен ҡорбан итеүҙе хуп күрә.

❁

Изге аятта әйтелә:

«Барығыҙ ҙа бер булып, Аллаһтың арҡанына (Ҡөрьәнгә, Ислам диненә) тотоноғоҙ, сөнки айырылғанда, һеҙ бер-берегеҙгә дошман инегеҙ, Ул һеҙҙең күңелдәрегеҙҙе берләштерҙе. Уның ниғмәте арҡаһында, ҡәрҙәштәр булдығыҙ…» (Әлү Ғимран (Мәрйәмдең атаһы), 103).

«Ислам» һүҙе «Аллаһҡа буйһоноу, именлектә һәм тыныслыҡта булыу» тигәнде аңлата. Мосолмандың бурысы – айырым шәхестәргә лә, йәмғиәткә лә ярҙам итеү, кешеләрҙе татыулаштырыу, именлек һәм тыныслыҡ булдырыу. Иман ҡәрҙәштәреңде һөйгән, ярҙам иткән, улар менән берҙәм, теләктәш булған һүрәттә, быны тормошҡа ашырыу мөмкин.

❁

Лоҡман Хәким улына шундай нәсихәт биргән:

«Улым! Өс нәмә өс нәмә менән беленә: асыу килгәндә – тотанаҡлылыҡ, яу яланында – ҡыйыулыҡ, фәкирлектә - ҡәрҙәшлек».

❁

Хәҙистә әйтелә:

«Алышта дошманын еңгән ҡеүәтле түгел, асыуын еңгән ҡеүәтле» (Бохари, Әҙәп, 76).

❁

Тормош китабының асыу тураһындағы бүлеге – һәләкәттәр тарихы. Асыу – кешене аҡыл ниғмәтенән мәхрүм иткән ваҡытлыса иҫәрлек халәте. Ғәфү итә белеү һәм йомшаҡлыҡ кеүек гүзәл сифаттар асыуҙы ауыҙлыҡларға ярҙам итә. Раббыбыҙ Аллаһ был хикмәтле күркәм сифаттарға һәләтле булғандарға шатлыҡлы хәбәр еткерә:

«Раббығыҙҙың ярлыҡауына һәм тәкүә мосолмандар өсөн әҙерләнгән Йәннәткә, Күктәр һәм Ер кеүек иркен урынға ынтылығыҙ. Улар – саф мосолмандар; муллыҡта ла, юҡлыҡта ла йомарт булғандар, асыу һаҡламаусылар, кешеләрҙең кәмселектәрен кисерә белеүселәр (өсөн ул Йәннәт). Аллаһ изгелек ҡылғандарҙы ярата» (Әлү Ғимран (Мәрйәмдең атаһы), 133-134).

❁

Асыуланырға әүәҫ булған бер кеше Аллаһ Илсеһенән (салләллаһу ғәләйһи үә сәлләм) кәңәш һорай. Теге уға кәңәш бирә: «لا تغضب» **«Асыуланма!»**. Был әҙәм бер нисә тапҡыр кәңәш һораһа ла, Аллаһ Илсеһе (салләллаһу ғәләйһи үә сәлләм) уға шул уҡ бер кәңәште бирә. (ҡар. Бохари, Әҙәп, 76).

❁

Ҡылынған золом өсөн асыуланыу һәм үс алыу – рухиәттәре үҫешмәгәндәрҙең нәфестәрен ҡәнәғәтләндереү сараһы. Иланы мәрхәмәткә лайыҡ иткән рухи юғарылыҡ – үс алырға мөмкинлеге булған мөһиндең, үҙ асыуын баҫып, ғәфү итеүе һәм миһырбанлыҡ күрһәтеүе.

Әнәф ибн Ҡайс (рәхимәһуллаһ) әйткән:

«Ҡәрҙәшлек ептәре – нескә һәм йомшаҡ субстанция. Әгәр һин уларҙы ҡурсалап тормаһаң, бәләгә тарыясаҡһың. Асыуыңа тейгән кеше килеп ғәфү үтенһен өсөн, асыуыңды баҫып, уларҙы һаҡла. Булғанына шөкөр ит, үҙеңә артығын теләмә һәм ҡәрҙәшеңдә ғәйепләмә» (Ихья, II, 466).

❁

Ғәмр ибн Ас (радыйаллаһу ғәнһү) Египет менән уңышлы идара. Бының серен һорағас, ул әйткән:

«Мин тирә-йүндәгеләр менән еп менән бәйләнгәнмен, тип күҙ алдына килтерәм. Улар тартылып, өҙөлөргә етешһә, мин уларҙы бер аҙ йомшартам. Ә инде кәрәгенән артыҡ бушаһа, шунда уҡ уларҙы тартам. Ошо рәүешле мин кешеләр менән бәйләнештә балансты һаҡлайым».

❁

Мөхтәрәм Ғүмәр (радыйаллаһу ғәнһү) әйткән:

«Аяуһыҙлыҡ күрһәтмәйенсә, көслө бул, кәрһеҙлек күрһәтмәйенсә, йомшаҡ бул!».

❁

Артыҡ ҡатылыҡ нәфрәт тыуҙыра. Артыҡ йомшаҡлыҡ абруйҙы кәметә. Шул ике сифат араһындағы балансты һаҡлай белгәндә генә уңышҡа ирешергә мөмкин.

❁

Хәҙистә әйтелә:

«Дуҫыңды уртаса ярат, сөнки бер көн килеп ул һинең дошманыңа әйләнеүе ихтимал. Дошманыңа уртаса нәфрәт ит, сөнки бер көн килеп ул дуҫыңа әйләнеүе ихтимал» (Тирмизи, Бирр, 60).

❁

Мөхтәрәм Ғәли (радыйаллаһу ғәнһү) әйткән:

«Берәү менән дуҫ булырға теләһәң, (тәүҙә) унан бер аҙ алыҫыраҡ тор. Әгәр был осраҡта ул һиңә мөнәсәбәтен үҙгәртмәһә, дуҫлыҡты һаҡла, юҡ икән, унан баш тарт».

❁

Раббыбыҙ тарафынан беҙгә үрнәк шәхес рәүешендә бүләк итеп бирелгән Пәйғәмбәребеҙ (салләллаһу ғәләйһи үә сәлләм) иң йомшаҡ холоҡло кешеләрҙең

бereһe була. Шул сәбәпле ул кешеләр менән мөнәсәбәттәрҙә еңеллеккә ынтыла, аңлашылмаусанлыҡ, асыуланыу. үпкәләшеү кеүек нәмәләрҙән йыраҡ торорға тырыша. Берәй кешенең хоҡуҡтары ғына боҙолмаһа, һис ҡасан асыуланмай, үҙенә ҡарата ҡылынған хаталарҙы, яҙыҡтарҙы бик еңел ғәфү итә. Кешеләрҙең мөғәмәләһе ни тиклем генә тупаҫ булмаһын, тотанаҡлы булып ҡала, хатта ки үҙенә яманлыҡ эшләгәндәргә лә яҡшылыҡ менән яуап бирә.

❁

Изге аятта әйтелә:

«Изгелек менән яманлыҡ бер булмаҫ. Һин яманлыҡты изгелегең менән баҫ. Шулай ғәмәл ҡылғанда, икегеҙҙең арағыҙҙағы дошманлыҡ бөтөр. Һеҙ дуҫлашырһығыҙ» (әл-Фуссиләт (Аңлатылды), 34).

❁

Хәҙистә әйтелә:

«(Ғәмһеҙ кешеләр кеүек) шулай тип әйтмәгеҙ: «Тирә-йүндәгеләр үҙҙәрен нисек тота, мин дә шулай итәм... Әгәр улар изгелек ҡылһа, мин изгелек ҡылам, ә яманлыҡ ҡылһа, мин дә яманлыҡ ҡылам!». Киреһенсә, кешеләр изгелек ҡылһа, изгелек ҡылырлыҡ итеп һәм яманлыҡ ҡылһа, ғәҙелһеҙлектән йыраҡ торорлоҡ итеп нәфесегеҙҙе тәрбиәләгеҙ» (Тирмизи, Бирр, 63/2007).

❁

Яманлыҡ ҡылғандарға яҡшылыҡ ҡылыу нәфес өсөн ауыр булһа ла, йөрәктәрҙе әсир итә торған изгелек бар. Фани донъяға төбәлгән яҡшылыҡ – әсе, ә Әхирәткә йүнәлтелгәне – татлы. Холоҡтоң был һыҙаты - йөрәк сәнғәте, рухиәт тантанаһы. Еңеү ни тиклем ауыр яуланһа, уның ҡиммәте лә шул тиклем ҙурыраҡ.

❁

Пәйғәмбәребеҙ (салләллаһу ғәләйһи үә сәлләм) наҙан кешеләрҙең тупаҫ ғәмәлдәренән күп яфа сигә. Әммә ләкин асыуланыу урынына мәрхәмәт океаны булған йөрәге уларҙың хәле өсөн көйөнөс менән тула. Ә инде Раббыһының үҙенән риза булғанын белгәс, ул кешеләрҙән килгән ғазап-яфаларға сабыр итә.

❁

Аллаһ Илсеһе (салләллаһу ғәләйһи үә сәлләм) кешеләрҙән күргән ғазап-яфаларға түҙеп кенә ҡалмай, яманлыҡҡа яҡшылыҡ менән дә яуап бирә. Таиф халҡы уға таштар атҡас, ул уларҙы ҡырыу тураһында түгел, ә уларҙың һидәйәткә лайыҡ булыуы һәм мәңгелек ҡотолоуға ирешеүе тураһында доға ҡыла. Мәккәне яулап алғас, ул үс алыу урынына, йылдар буйы үҙен эҙәрлекләгән,

бик күп ғазап-яфаларға дусар иткән мөшриктәргә амнистия иғлан итә. Күркәм сифаттары сәбәпле, уның бихисап ҡан дошманы ихлас дуҫына әйләнә!

❁

Һәр ниғмәттең ҡиммәте уға эйә булыу юлындағы ҡыйынлыҡтарға пропорциональ. Мәҫәлән, һиңә яманлыҡ эшләгән кешегә яҡшылыҡ теләүе ифрат ауыр. Шул сәбәпле әйтелгән бит: «Яҡшылыҡҡа – яҡшылыҡ, был барсаһының өлөшө, ә яманлыҡҡа – яҡшылыҡ – был изгеләрҙең өлөшө».

Аллаһты танып белгәндәр (ғарифтар) йөрәгендә ғәҙәттән тыш урын биләгән Халладж Мансур, уның рухи халәтенең сағылыштарын аңламаған кешеләр тарафынан таштар менән бәреп туҡмалғас, Аллаһҡа шулай тип доға ҡыла: «Йәә Раббым! Улар белмәй. Минән алда мине таштар атып туҡмағандарҙы ғәфү ит!».

❁

Ислам әхлағы буйынса, һиңә золом эшләһәләр, өс аҙымды ҡылыу зарур:

1) Асыуҙы еңеү.

2) Ғәфү итеү.

3) Изгелек эшләү, хәйерле ғәмәл ҡылыу.

❁

Әхлаҡ тураһында һорағас, Сәхел Тустари әйткән:

«Әхлаҡтың иң түбән дәрәжәһе – хатта ки йәберләүсегә лә мәрхәмәт күрһәтеп, үс алыуҙан баш тартып, уның өсөн [Аллаһтан] ярлыҡау һорау һәм йәлләү» (Ихья, III, 163).

❁

Пәйғәмбәребеҙ (салләллаһу ғәләйһи үә сәлләм) әйткән:

«Бер-берегеҙҙе күрә алмау кеүек яман ғәҙәттәр булдырмағыҙ. Асыу-үпкәгеҙҙе бер-берегеҙгә төшөрмәгеҙ. Бер-берегеҙҙән кәмселектәр эҙләмәгеҙ. Башҡалар һөйләгәнде тыңлап тормағыҙ... Эй, Аллаһ ҡолдары! Кәрҙәштәр булығыҙ!» (Мөслим, Бирр, 30).

❁

Әгәр ҙә ки Ҡиәмәт Көнөндә Раббыбыҙҙың хаталарыбыҙҙы йәшереүен теләһәк, бөгөн Уның ҡолдарының хаталарын йәшерергә тырышыу лазым.

❁

Ислам ҡәрҙәшлеге бер-береһен йыуған ике ҡулға оҡшаш. Мөһажирҙар һәм ансарҙар кеүек…

❁

Ислам ҡәрҙәшлегенең тәүшарты – «йөк түгел, ә һөйөклө булыу», йәғни ҡәрҙәшеңә артыҡ йөк булыу түгел, киреһенсә, уның йөгөн еңеләйтергә тырышыу.

❁

Йөк булмаған менән дуҫлыҡ һәм ауырлыҡ һалмағанға мөхәббәт һүнмәйәсәк.

РӘХМӘТЛЕ БУЛЫУ

Һис кем үҙе лайыҡ булған өсөн бар ҡылынмаған. Бер нәмәбеҙ булмаһа ла, яратылғанбыҙ, селәүсен, ер йәки япраҡ түгел, ә кеше итеп; барса кешеләр араһынан иманға лайыҡ булған өммәттәбеҙ, 124 меңдән ашыу пәйғәмбәрҙең имамы булып тәғәйенләнгән Мөхәммәд Мостафа (саллəллаһу ғəләйһи үə сəлләм) өммәтендә булыу бәхетенә лайыҡ булғанбыҙ. Был бөйөк нығмәт, ул нығмәтте бер ниндәй рәхмәттәр менән дә ҡаплатып бөтә алмаясаҡбыҙ.

Рәхмәт ғибәҙәте менән ғүмер буйы баш күтәрмәйенсә сәждәлә булһаҡ та, был да әҙ буласаҡ, Раббыбыҙ алдындағы бурысыбыҙҙы был һис тә кәметмәйәсәк.

Һис кем үҙе лайыҡ булған өсөн бар ҡылынмаған. Бер нәмәбеҙ булмаһа ла, яратылғанбыҙ, бөжәк, ер йәки япраҡ түгел, ә кеше итеп; барса кешеләр араһынан иманға лайыҡ булған өммәттәбеҙ, 124 меңдән ашыу пәйғәмбәрҙең имамы булып тәғәйенләнгән Мөхәммәд Мостафа (саллəллаһу ғəләйһи үə сəлләм) өммәтендә булыу бәхетенә лайыҡ булғанбыҙ. Был бөйөк нығмәт, ул нығмәтте бер ниндәй рәхмәттәр менән дә ҡаплатып бөтә алмаясаҡбыҙ.

Рәхмәт ғибәҙәте менән ғүмер буйы баш күтәрмәйенсә сәждәлә булһаҡ та, был да әҙ буласаҡ, Раббыбыҙ алдындағы бурысыбыҙҙы был һис тә кәметмәйәсәк.

Беҙ һәр ваҡыт шул турала уйланырға тейеш: бер ни түләмәйенсә, илаһи мәрхәмәт буйынса ғына иман юлына баҫҡанбыҙ, Мөхәммәд Мостафа (саллəллаһу ғəләйһи үə сəлләм) өммәтендәбеҙ, изге Китабыбыҙ – Ҡөрьәнебеҙ бар. Ул нығмәттәрҙе бер ниндәй рәхмәттәр менән дә ҡаплатып бөтә алмаясаҡбыҙ.

❁

Раббыбыҙ Аллаһҡа хәмед-маҡтауҙар әйтеү мөмкинлеге – шулай уҡ рәхмәтле булыуҙы талап иткән ғәҙәттән тыш нығмәт. Йәғни бихисап матди һәм рухи нығмәттәргә лайыҡ булған Аллаһ ҡоло рәхмәтен белдерә алыуы өсөн дә

шөкөр итергә тейеш. Аллаһты зекер итә алыуы, Уның алдында сәждәгә китә алыуы һәм ғөмүмән Аллаһтың ҡоло булыуы өсөн бәндә рәхмәтле булырға тейеш.

❁

Беҙ белгән һәм белмәгән бөтә ниғмәттәре өсөн Раббыбыҙ Аллаһҡа рәхмәтле булыу лазым. Әгәр дөрөҫ фекер йөрөтә алһаҡ, бер туҡтауһыҙ илаһи бәрәкәттәрҙең беҙгә яуып тороуын аңларбыҙ. Хатта бер һулыш өсөн дә ике рәхмәт талап ителә: береһе – һулыш алыу мөмкинлеге өсөн, икенсеһе – һулышыңды сығарыу өсөн...

❁

Аллаһтың ниндәй генә яратылмышын күрһә лә, Ҡөҙрәтле Аллаһтың үҙенә Мәрхәмәте, Шәфҡәте, Йомартлығы өсөн рәхмәтен тәфәккүр аша арттырып, иман эйәһе әйтергә тейеш: «Ул - минең урында, ә мин уның урынында була алыр инем». Маҡтаныр урынға Аллаһҡа хәмед-маҡтауҙар әйтеү зарур. Ғафиллыҡҡа батып, бөтә ниғмәттәрҙе үҙеңдеке тип иҫәпләүҙән арыныу һәм шул ниғмәттәрҙең Хаҡ Хужаһына рәхмәттәреңде белдереү зарур.

❁

Шәйех Шибли әйткән:

«Рәхмәтле булыу – ниғмәтте түгел, ә шул Ниғмәттәрҙе бүләк итеүсене күреү».

❁

Үҙебеҙгә гөлләмә бүләк итеүсегә рәхмәтебеҙҙе белдереүҙе беҙ бурысыбыҙ, тип һанайбыҙ. Ә шул гөлләмәләге сәскәләрҙе бар ҡылыусыға беҙ ни дәрәжәлә рәхмәтле булырға тейеш?

Бер стакан һыу биреүсегә лә рәхмәт әйтмәүҙе ғәйеп эш, тип ҡарайбыҙ. Ә шул һыуҙы бар ҡылған, атмосфераның һоҡланғыс фильтрында уны паклаған һәм уны беҙгә саф, ҡтә күренмәле итеп биреүсе Раббыбыҙға ни дәрәжәлә рәхмәтле булырға тейешбеҙ?

❁

Ниғмәттәр ҙә, ҡыйынлыҡтар ҙа Аллаһ Ихтыярында икәнлеген белгән мөьмин уларҙың килеүенә сәбәпсе генә булған фани заттарға күңел бағламаҫ. Ул ниғмәт килеүгә сәбәпсе булған кешегә рәхмәтен белдерә һәм шул ниғмәттәрҙең Хаҡ Хужаһы булған Аллаһ Тәғәләгә хәмед-маҡтауҙарын, рәхмәтен әйтә. Ул, ризыҡтарҙы күреү менән генә хушланмай, шул ризыҡты биреүсе әр-Раззәәҡты һәр саҡ иҫендә тота.

Ысын мәғәнәһендә рәхмәтле булыу – ниғмәттәрҙең Хаҡ хужаһын белеү һәм һүҙҙәрең, ғәмәлдәрең менән Аллаһтың ихлас ҡоло булыу.

❁

Беҙ был фани донъяға һис бер түләүһеҙ килдек. Әммә Әхирәткә беҙ, бүләк итеп бирелгән ниғмәттәр өсөн бурысыбыҙҙы ҡайтарырға тырышып, бик күп хәмед-маҡтауҙар әйтеп китергә тейешбеҙ.

❁

Изге аятта әйтелә:

«Һуңынан һеҙ Әхирәт ғәмәленән мәхрүм иткән донъя ниғмәттәре тураһында һоралырһығыҙ» (әт-Тәкәҫур (Байығыуҙа ярышыу), 8).

Был аят төшөрөлгәс, һис нәмәһе булмаған фәҡир сәхәбә тора һәм һорау бирә:

«(Хисап алырлыҡ) минең ниндәйҙер ниғмәттәрем бармы?».

Аллаһ Илсеһе (салләллаһу ғәләйһи үә сәлләм) яуап бирә:

«Күләгә, ике сандалийың һәм һалҡын һыу», йәғни ул хатта шундай кеше лә Әхирәттә хисапһыҙ ҡалмаясағын белдерә) (ҡар. Суюти, VII, 619).

❁

Раббыбыҙ Аллаһ әйтә: **«Күктәрҙә һәм Ерҙә нимә булһа, шуларҙың барыһын да Ул [Аллаһ], Үҙ тарафынан индереп, һеҙҙең ҡарамаҡҡа бирҙе»** (Әл-Джәҫийә (Теҙләнеү), 13).

Ошо илаһи бәрәкәттәргә яуап итеп, Раббыбыҙға хәмед-маҡтауҙар әйтеп, рәхмәттәребеҙҙе белдереп һәм Уны зекер итеп, тормошобоҙҙо тәрән мәғәнәле итеү лазым.

❁

Мөхтәрәм Мөхәммәд Әсғәд Әрбили рәхмәтле булыуҙы шулай тасуирлай:

«Шөкөр итеү – «Раббым, шөкөр итәм Һиңә!» һүҙҙәре генә түгел. Киреһенсә, шөкөр итеү – Аллаһ Үҙ ниғмәттәрен ниндәй маҡсат менән бар ҡылһа, уларҙы шул юлда файҙаланыу…»

❁

Шөкөр итеү ике төрлө була:

Ихлас шөкөр итеү. Барса ниғмәттәрҙең хәҡиҡи Хужаһы Аллаһ булыуын йөрәгең менән ныҡлы раҫлау.

Ғәмәлдәрең менән шөкөр итеү. Ул ниғмәттәрҙе Аллаһ риза булмаған нәмәләргә сарыф итмәү, ә, ризалығына ирешеү сараһы итеп, Уның Ихтыярына ярашлы тотоноу.

❁

Көн һайын, кәм тигәндә 40 тапҡыр беҙ намаҙҙа һүҙ менән Раббыбыҙға рәхмәтебеҙҙе еткерәбеҙ, маҡтайбыҙ: **«Бөтә ғаләмдәрҙең тәрбиәсеһе Раббы Аллаһҡа маҡтауҙар булһын!»** (әл-Фәтиха (Асыусы), 2). Әммә был һүҙҙә генә ҡалырға тейеш түгел. Джүнәйд Бағдади әйткәнсә: «Шөкөр итеү – Аллаһ бүләк итеп биргән ниғмәттәр ярҙамында Уға ҡаршы баш күтәрмәү һәм уларҙы гонаһ өсөн файҙаланмау».

❁

Аллаһ Сүбхәнәһү үә Тәғәлә бүләк итеп биргән бихисап матди һәм рухи ниғмәттәр ярҙамында, беҙ имен-аман йәшәйбеҙ. Уларҙың ҡиммәтен аңлау һәм шөкөр итеү өсөн, беҙгә шул турала күп уйланыу зарур. Мәҫәлән, күҙ ниғмәте тураһында ғына фекер йөрөтөп ҡарайыҡ.

Әгәр ҙә ки, һуҡыр булып тыуып, йылдар үткәс күреү һәләтенә эйә булһаҡ, беҙ ул мәлдә ниндәй бәхетле булыр инек! Күреү һәләтенең бөйөклөгөнә, күркәмлегенә хайран ҡалыр инек! Беҙгә уны бүләк итеп биргән Раббыбыҙҙың Ҡөҙрәтенә таң ҡалыр, Уға рәхмәтле булыр инек!

Ысынлап та, Ҡояш, йондоҙҙар, Ай, көн, төн, океан, урман-ҡырҙар, хайуандар - һәммәһенең күҙҙең яуын алып торған, күңелгә хозурлыҡ биргән төҫө бар! Аллаһ Сүбхәнәһү үә Тәғәләнең Ғаләмдә кәүҙәләнеш тапҡан һоҡланғыс ижадын тәү ҡат тамаша ҡылһаҡ, беҙ “хайрандың күҙе ҡамашыр” ине. Күреү һәләте ләззәтенән, әйтеп бөтөргөһөҙ гүзәллектән иҫерер инек. Күҙебеҙ күргән һәр яратылмышҡа ғәҙәти нәмәгә ҡараған һымаҡ күҙ йүгертеп үтмәҫ, океандарҙың тәрәнлеге асылғандай, хикмәт ҡапҡалары асылғандай, ғәжәпкә ҡалып, барсаһынан нәсихәт алып бағыр инек...

Әле тасуирлап үткән күреү бәрәкәтенә оҡшатып, ишетеү, йөрөү һәм аҡыл кеүек башҡа ниғмәттәр тураһында ла фекер йөрөтөп ҡараһаҡ, шөкөр итеү, рәхмәттәр әйтеү өсөн бик күп сәбәптәр барлығын яҡшы төшөнөбөҙ.

❁

Аятта әйтелә:

«[Рәсүлем!] Әйт: «Ул [Аллаһ] – һеҙҙе юҡтан бар итеүсе, һеҙгә ҡолаҡтар, күҙҙәр, йөрәк биреүсе. Бик әҙ шөкөр итәһегеҙ!» (әл-Мүлк (Хакимиәт), 23).

❁

Аллаһ беҙгә биргән тәнебеҙҙең һәр өлөшө өсөн айырым шөкөр ҡылыу кәрәк. Һәр ниғмәт өсөн рәхмәт шул ниғмәт кеүек үк булырға тейеш.

Мәҫәлән, күҙҙәребеҙ өсөн шөкөр ҡылыу – харамдан, нәфес витринаһынан, шайтан экранынан күҙҙәребеҙҙе һаҡлау һәм, Раббыбыҙҙың Көҙрәтен, Сәнғәтен һәм Бөйөклөгөн хәтергә төшөрөп, нәсихәт биргән рухиәт витринаһын тамаша ҡылыу.

Ишетеү һәләтебеҙ өсөн шөкөр итеү ҡолағыбыҙҙы яман һүҙҙәрҙән, ғәйбәттән һаҡлау һәм Көрьән уҡыу, дини әңгәмәләр, вәғәздәр, аҙан кеүек рухи тауыштарға иғтибарыбыҙҙы йүнәлтеү.

Ауыҙыбыҙ өсөн шөкөр итеү — йәки өндәшмәү, йәки яҡшы һүҙ.

Тәнебеҙ өсөн шөкөр – Аллаһ биргән хакимлыҡты һәм көстө хеҙмәт аша Уның ризалығына ирешеү юлында файҙаланыу, Уның юлында тырышлыҡ күрһәтеү һәм ғибәҙәт ҡылыу.

Йөрәк өсөн шөкөр итеү - Аллаһ бүләк итеп биргән ниғмәттәр тураһында даимән фекер йөрөтөп, Раббыбыҙҙы һис ҡасан иҫтән сығармау.

❁

Сәғди Ширази шәйех тән өлөштәребеҙ тураһында уйланырға тәҡдим итә:

«Тел рәхмәтебеҙҙе еткереү өсөн кәрәк. Хәҡты белеүсе уны ғәйбәт өсөн ҡулланмаясаҡ.

Ҡолаҡтарыбыҙ ялған һәм буш һүҙҙәр тыңлау өсөн түгел, Көрьән һәм нәсихәттәр тыңлау өсөн кәрәк.

Ике күҙебеҙ яҡындарыбыҙ һәм дуҫтарыбыҙҙың яҙыҡтарын күҙәтеү өсөн түгел, ә Аллаһтың Көҙрәт һәм Сәнғәт манзараһын тамаша ҡылыу өсөн тәғәйенләнгән...»

❁

Әгәр аҡылы булған кешегә: «Күҙҙәреңдә бир һәм бар донъяны ал!», - тип әйтһәң, уларҙы биреүсе булырмы икән? Әгәр ҙә ки: «Һаулығыңды бир, Ерҙе ал!»- тип тәҡдим итһәң, кем алмашырға риза булыр? Аҡылы камил булған бер генә кеше лә ризалашмаясаҡ, сөнки был ғазап-яфаға хөкөм ителеү менән бер буласаҡ.

Бына ни өсөн ярты донъя хакимы булған Сөләймән Ҡануни солтан әйткән:

Бәндә өсөн державанан бөйөк нәмә юҡ,

Тик һаулыҡһыҙ державанан ни хәжәт!?

Тимәк, беҙгә бирелгән һаулыҡ, именлек кеүек бихисап бәрәкәттәр тураһында фекер йөрөтөп, шөкөр итеү һәм фани донъяға рәхмәттәребеҙҙе еткереү өсөн килгәнебеҙҙе төшөнөү лазым.

❁

Аллаһты танып белгәндәрҙең береһе (ғариф), беҙ ғафиллыҡтан ҡотолһоң, Раббыбыҙға тыныс ҡына хеҙмәт итеп, даими Уға тәсбихтәр әйтеп, рәхмәттәребеҙҙе белдереп һәм булғанына шөкөр итеп йәшәһен өсөн, шундай кәңәш бирә:

«Ара-тирә хәстәханаларҙа бул һәм сирлеләрҙең хәлен бел! Шул меҫкендәр һымаҡ ауырымағаның өсөн шөкөр ит һәм һаулыҡ ниғмәте хаҡында уйлан!

Ара-тирә төрмәләрҙә бул һәм тотҡондарҙың ғазаплы хәлен күҙәт! Күбеһенең ғүмер ҡыйыуы бер минутлыҡ асыу халәтендә йәки аҡылы томаланғанда ҡылыныуын уйла, икенсе яҡтан, рәшәткә артына ғәҙәлһеҙлек арҡаһында эләгеп, яҡа күргәндәр ҙә бар. Фекерләп ҡара, ә бит һин дә улар хәлендә була алыр инең! Һине шундай хәлгә төшөүҙән аралаған Аллаһҡа рәхмәтеңде белдер! Төрмәләрҙә ултырғандарҙың именлеге өсөн доға ҡыл!

Һуңынан зыяратҡа юл тот, ҡәбер таштары аҫтынан килгән өнһеҙ ҡысҡырыуҙы ишет! Уйлан, юҡҡа сыҡҡан ниғмәттәр тураһында үкенеү ярҙам итмәйәсәк! Ваҡытыңдың ҡәҙерен бел! Төйәктәре ҡәберҙә булғандар өсөн доға ҡыл, уларҙы ғәфү итеүҙе һора! Һәм ҡалған ғүмереңде Аллаһҡа күберәк тәсбих, хәмед-ҫәнәләр әйтеп, Уны зекер итеп үткәр!».

❁

Йәнәбе Хәҡҡ әйтә:

«…Шөкөр итһәгеҙ, әлбиттә һеҙгә (ниғмәтте) арттырасаҡмын, әгәр ҙә кәферлек ҡылһағыҙ, һис шикһеҙ, бирәсәк язам бик хәтәрҙер» (Ибраһим, 7).

Йәғни, шөкөр итеү ниғмәттәрҙең бәрәкәте артыуға сәбәпсе була, шөкөрһөҙлөк ниғмәттәрҙең юғалыуына, Аллаһтың асыуына тарыуға алып килә.

❁

Булған ниғмәттәре юҡҡа сыҡмауын һәм бәрәкәткә эйә булыуын теләгән мөьмингә рәхмәтен һүҙ менән дә, ғәмәле менән дә белдереү зарур. Үҙенә бүләк итеп бирелгән ниғмәттәрҙе унан мәхрүм булғандар менән ихлас күңелдән бүлешә алыуҙы ул бөйөк бәхет итеп һанарға тейеш. Иман эйәһенә шуны белеү лазым: шөкөрһөҙ ниғмәттәр юҡҡа сығасаҡ!

❁

Мөхтәрәм Ғәли (радыйаллаһу ғәнһү) әйткән:

«Мохтажлыҡҡа төшһәң, (хәлеңдән килгәнсә) саҙаҡа бир, Аллаһ менән алыш-биреш ит. Әгәр ҙә ки байып китһәң, бик күп тәсбих әйт! Һаҡ бул, рәхмәттәр әйтеүгә һаранланып, Аллаһ биргән ниғмәттәрҙән ҡолаҡ ҡаҡма!».

❁

Берәү ниндәйҙер ниғмәткә эйә булһа һәм Йәнәбе Хәҡҡа мөрәжәғәт итеп: «Был Аллаһтың рәхмәте, быны Ул миңә бүләк итеп бирҙе, бик күп хәмед-маҡтауҙар булһын Уға!», - тиһә, Аллаһ Тәғәлә уға фани донъяла ла, Әхирәттә лә мәрхәмәтен һәм бәрәкәттәрен арттырыр.

❁

Раббыбыҙ Аллаһ әйтә: **«Мине зекер итегеҙ, Мин дә һеҙҙе зекер итәсәкмен. Миңә шөкөр итегеҙ. Аң булығыҙ. Миңә кәферлек ҡылмағыҙ»** (әл-Баҡара (Һыйыр), 152).

❁

Шөкөр итеүҙең ҡаршыһы – шөкөрһөҙлөк. Йәғни, булған бөтә ниғмәттәребеҙ Аллаһтың рәхмәте булыуын онотоп, үҙ нәфесеңде уҙындырып шулай тип әйтеү: «Мин үҙем уңыш ҡаҙандым, үҙ көсөм менән эшләп таптым…» Йәғни ирешкән барса уңыштарыңды үҙ нәфесеңә, үҙ-үҙеңә ҡайтарып ҡалдырыу. Бындай ғафләт халәтендә кеше гонаһҡа төшә һәм барса килемен дә Аллаһ риза булмаған нәмәләргә сарыф итә.

❁

Аллаһ Сүбхәнәһү үә Тәғәлә әйтә:

«Хаҡтыр, Беҙ уға тура юл күрһәттек. Теләһә шөкөр ҡылыусы булыр, теләмәһә, кәферлекте һайлар» (әл-Инсан (Кеше), 3).

Аллаһ ҡоло нимәне генә һайлаһа ла, шөкөр итеүҙеме, әллә шөкөрһөҙлөктөмө – Раббыбыҙ өсөн бында файҙа ла, зыян да юҡ. Әммә кеше йә фани донъяла, йә Ҡиәмәттә, йәғни баҡыйлыҡта, үҙе һайлағандары өсөн мотлаҡ әжерен аласаҡ.

❁

Изге аятта әйтелә:

«Ул һеҙгә нимә теләһәгеҙ, шуны бирҙе. Аллаһтың ниғмәттәрен һанарға ни ҡәҙәр тырышһағыҙ ҙа, осона сыға алмаҫһығыҙ...» (Ибраһим, 34).

Бүләк итеп бирелгән бихисап ниғмәттәре өсөн шөкөр итеү һәм Аллаһтың ризалығына ирешергә ынтылыу урынына гонаһҡа төшөү – иҫ киткес шөкөрһөҙлөк!

Әгәр ҙә ки дуҫыбыҙ йомарт рәүештә бүләктәр бирһә, беҙ уның күңелен ҡыйырға, уны үпкәләтерлек берәй һүҙ әйтергә, ғәмәл ҡылырға ояласаҡбыҙ. Үҙебеҙ ҙә уға ҡарата яҡшы булырға, рәхмәтебеҙҙе белдерергә тырышасаҡбыҙ.

Беҙ йәшәгән фани донъяла Раббыбыҙ Аллаһ, Уның ҡолдары, шөкөр ҡылһын, хәмед-ҫәнәләр әйтһен өсөн, бихисап ниғмәттәрен бүләк итеп бирә. Кем шөкөр итер, ә кем шөкөр итә белмәҫ тип, Ул беҙҙе һынай. Раббыбыҙ хәбәр итеүенсә, рәхмәтле булғандар Уның мәрхәмәтенә лайыҡ буласаҡ, ә рәхмәтһеҙҙәр – язаһына.

❁

Мөхтәрәм Мәүләнә әйткән: «Эй, кеше! Тоғроһоҙлоҡ – хатта эттәр өсөн дә кәмселек. (Тоғролоҡтоң ни икәнен белмәгән урам эте берәүгә лә оҡшамай. Ә хужаһына тоғро эт иғтибарға лайыҡ була). Нисек инде һин, кеше була тороп, (Раббыңа ҡарата) тоғролоҡһоҙһоң һәм рәхмәтһеҙһең!»

❁

Шәйех Сәғди әйткән:

«Кеше барса яратылмыштар араһында иң шәрәфлеһе, ә эт иң түбәне һымаҡ. Әммә шуныһы бәхәсһеҙ: игелектең ҡәҙерен белгән тоғро эт игелектең ҡәҙерен белмәгән, баһалай белмәгән кешенән яҡшыраҡ.

Эткә йөҙ тапҡыр таш бәрһәң дә, һин уға ашатҡан бер телем икмәкте ул онотмаясаҡ. Ә күңеле түбән кешегә ғүмер буйы игелек ҡылһаң да, ул, юҡ ҡына сәбәпте бар итеп, һинең менән талаш ҡуптарасаҡ».

САБЫРЛЫҠ ҺӘМ ҠӘНӘГӘТЛЕ БУЛЫУ

Тормош сюрпризларҙың яҡшыһын да, яманын да алға сығарғанда, Аллаһты танып белгәндәр әйтә: «Һәм был да үтәсәк, йәә Һин! (йәғни, йәә Аллаһ)». Был кәлимәләрҙең мәғәнәһе шундай: «Йәә кеше! Тормошоңда осраған ҡайғы һәм һағыштар ҙа, шатлыҡ һәм бәхет тә – йөрәгең каруан-һарайының сираттағы ҡунаҡтары ғына. Һаҡ бул, мәңгелеккә килгән, тип иҫәпләмә! Фани ауырлыҡтарға артыҡ бошонма һәм төшөнкөлөккә батма, сөнки улар үтәсәк. Шулай уҡ фани шатлыҡ һәм бәхет менән дә мауыҡма, сөнки улар ҙа мәңгелек түгел».

Изге аятта әйтелә:

«Иман килтерҙек» (бер Аллаһҡа инандыҡ), тип әйткәндән һуң, ауырлыҡтар аша һыналмайбыҙ, беҙҙе иғтибарһыҙ ҡалдырырҙар, тип уйлайҙармы әллә кешеләр» (әл-Ғәнкәбут (Үрмәксе), 2).

❁

Аллаһтың ҡолдарына тәҡдир иткән һынауҙары, ҡайғылары һәм шатлыҡтары асылда уларҙың иман, Уға хеҙмәт итеү юлындағы ихласлыҡтарын, тоғролоғон, Уға тәүәккәлләүҙәрен һәм Уға күндәмлектәрен тикшереү, имтихан алыу булып тора.

❁

Кешенең хәҡиҡи асылы уны ауырлыҡтар һәм уңыштар менән һынағанда асыла, айырыуса был нәфесебеҙгә оҡшамаған хәлдәр булғанда күренә.

❁

Аятта әйтелә:

«Һәр хәлдә һеҙҙе бер аҙ ҡурҡытып, аслыҡта тотоп, малдарығыҙҙы әҙәйтеп, ниғмәттәрегеҙҙе кәметеп, яҡындарығыҙҙың йәнен алып һынай-

быҙ. Түҙем булғандарҙан (Аллаһтың әжере була тип) һөйөнсө ал» (әл-Баҡара (Һыйыр), 155).

Фани донъя һынау донъяһы түгелме?

❁

Шәйех Сәғди әйткән:

«Әгәр кешеләр һиңә зыян һалһа, үпкәләмә, сөнки уларҙың яҡшылыҡ ҡылырға ла, яманлыҡ ҡылырға ла хәленән килмәй. Бел: дуҫтың дуҫлығы ла һәм дошмандың дошманлығы ла – Аллаһтан. Икеһенең дә йөрәге – Уның Ихтыярында. Уҡ йәйәнән осоп сыҡһа ла, аҡыллы кеше белә, ул унан түгел. Ул йәйә тотоп торған кешене күрә һәм уны сәбәпсе, тип иҫәпләй».

❁

Иманлы әҙәм белә: бөтә кеше йыйылып, уға ҡамасауларға теләһә лә, Аллаһ тәҡдир иткән яҡшылыҡҡа кәртә ҡуя алмаясаҡтар. Шулай уҡ, бөтә кеше берләшеп, Аллаһ тәҡдир иткән яманлыҡты юҡ итергә теләһәләр ҙә булдыра алмаҫтар ине.

Изге аятта әйтелә:

«Аллаһ һинең башыңа берәй бәлә ебәрһә, Унан башҡа ул бәләне бер кем дә ала алмаҫ. Әгәр һиңә бер изгелек килһә, уны ла һинән тартып ала алмаҫтар. Ул Үҙе ихтыяр иткән ҡолдарына изгелек бирер һәм ярлыҡар, ғәфү итер» (Юныс, 107).

❁

Тормошонда осраған барса ҡайғы һәм бәхет илаһи һынау икәнен белгән мөьмингә һәм хәлдән рухи файҙа алырға тырышыу зарур. Шуға күрә тәүге нәүбәттә бөтә сәбәптәрҙең сәбәпсеһе булған илаһи ихтыярға иғтибар итергә кәрәк. Аллаһты танып белгән ғарифтар әйтә:

Бел: яманлыҡ – дошмандан, яҡшылыҡ дуҫтан түгел.

Һәр саҡ Аллаһҡа тәүәккәлләп эш ит һәм бел: яманлыҡ та, яҡшылыҡ та – Уның һынауҙары.

❁

Сабырлыҡ һәр саҡ кәрәк:

– Ғибәҙәттәреңдә һәм изге ғәмәлдәреңдә даимән ҡылыу өсөн ...

– Гонаһтарҙың, харам ләззәттәрҙең, нәфес әүәҫлектәренең үҫүҫәләренә ҡаршы тороу өсөн…

– Бәлә-ҡазалар, ҡаты һынауҙар, ауырлыҡтар ваҡытында ризаһыҙлыҡ күрһәтмәү, ҡәлбеңдәге шөкөрҙө һаҡлау өсөн...

– Бәхетле һәм бай сағыңда, нәфес әүәҫлектәрен тормошҡа ашырырға бөтә мөмкинлектәр булғанда тайып китмәҫ өсөн…

– Фәҡир сағыңда, мохтажлыҡ кәферлеккә яҡынайтҡанда, иманыңды ҡаҡшатмаҫ һәм харам юлдарға инмәҫ өсөн...

❁

Иманың нығыуы күрһәткесе – бәлә-ҡазаларҙы һәм ауырлыҡтары сабырлыҡ менән үткәреү. Тырышлыҡ һалмайынса, бер нәмәгә лә эйә булып булмай. Ҡыйынлыҡтарҙы үтмәйенсә, мәрхәмәт ишектәре асылмай.

❁

Ризыҡты бешермәйенсә ашап булмаған кеүек, йөрәк тә ғазап уттарында янғас һәм бешкәс кенә камиллыҡҡа ирешә.

❁

Мөхтәрәм Мәүләнә әйткән: «Ай яҡты, сөнки ул төн ҡараңғылығына сабыр итә. Рауза хуш еҫле, сөнки ул энәләргә сабыр итә».

Рауза, энәләр менән дуҫлашып, улар менән яҡшы мөнәсәбәт булдырып, гүзәллеккә, камиллыҡҡа ирешә. Йәғни энәләр менән дуҫлашып, ул камил һәм хуш еҫле булыуға юл таба. Кеше лә шулай: ҡыйынлыҡтар, ауыр һынауҙар мәлендә ни тиклем түҙемле булһа, шул уҡ дәрәжәлә ул паклана, рухиәте юғары күтәрелә.

❁

Илаһи Ихтыяр тәҡдир иткән бөтә нәмәгә сабыр итеү лазым. Шундай кәлимә бар: «алтын сабырлыҡ». Беҙҙең «алтын сабырлыҡ» һис ҡасан сатнамаһын, киреһенсә, унда гөлдәр үҫһен. Йәғни һәммәбеҙгә Аллаһтың ризалығына ирешеү юлында сабырлыҡ менән бөтә ауырлыҡтарҙы үтеү, фиҙакәрлек күрһәтеү насип булһын.

❁

Алҡынып аҡҡан һыуҙар ҙа тауҙарҙы артылып үтә алмай. Әммә уны урап үтеп, ул маҡсатына ирешә, тик был сабырлыҡ талап итә.

❁

Бер грамм алтын табыу өсөн, сабырлыҡ иләге аша фани донъяның меңәр тонна яфа-ғазабын иләргә кәрәк.

Аллаһ ҡоло фани донъя һынауҙарын сабырлыҡ ярҙамында үтергә тейеш, сөнки Йәннәттә сабырлыҡ хәжәт түгел, ул был донъяла ғына кәрәк!

❁

Сабырлыҡтың иң ҡиммәтле мәле – ҡапыл ғына бөтә көсө менән өҫтөнә бәхетһеҙлек ябырылған мәл. Ошо ваҡытта сабыр булып ҡала алыу – сабырлыҡтың үре. Аллаһ Илсеһе (салләллаһу ғәләйһи үә сәлләм) әйткән: *«Хәкики сабырлыҡ – бәхетһеҙлек килгән тәүге мәлдәге сабырлыҡ»* (Бохари, Йыназа, 32).

❁

Шәйех Сәғди бәләҙ-ҡазаларҙағы йәшерен мәрхәмәт тураһында былай ти:

«Һандалдың үҙендә бер еҫ тә юҡ. Әммә уны утҡа һалһаң, тирә-йүнгә хуш еҫ тараласаҡ».

❁

Иманлы әҙәм бәхетһеҙлектәрҙе һәм бәләләрҙе рухи камиллыҡҡа ирешеү, нәфесен ауыҙлыҡлау һәм, тимәк, рухи тәрбиә алыу һәм пакланыу мөмкинлеге итеп ҡабул итергә тейеш.

Әгәр ҙә ки кеше ғазап-яфалар аша үтмәһә, теләгәне һәр ваҡыт алдына килеп торһа, уның нәфесе йүгән күрмәгән аҫау айғыр кеүек тиҫкәреләнә. Ябай күҙ менән түгел, микроскоп аша ғына күренгән вирустың биле ер күрмәгән баһадирҙарҙы ла ергә бираҡтырыуын ул бөтөнләй уйламай. Ғәмһеҙлеге арҡаһында, ундай нәфес үҙен бөйөк, ҡеүәтле, көслө тип иҫәпләй һәм Раббыһының рәхмәтенән алыҫлаша.

Ауырлыҡтар кисергән кешенең нәфесе инә, еүеш ҡағыҙ һымаҡ, көсһөҙләнә, үҙенең зәғифлеген, көсһөҙлөгөн яҡшы аңлай. Был уға Аллаһтың Бөйөклөгөн, Көҙрәтен аңларға ярҙам итә.

❁

Шуны ла онотмау зарур: йөрәктәр өсөн мәңгелек бәхет тере һыуына әйләнәсәк тормош башлыса ҡыйын ваҡыттар, мохтажлыҡтар ҡосағына йәшеренгән.

❁

Раббыбыҙ Аллаһ әйткән:

«Эй, иман килтергән әҙәмдәр! Сабыр-түҙем булып, намаҙ уҡып, Аллаһтан ярҙам һорағыҙ. Хаҡтыр, Аллаһ сабыр кешеләр менән бергә» (әл-Баҡара (Һыйыр), 153).

❁

Ауырлыҡтарҙағы сабырлыҡтар артында бөйөк әжерҙәр тора. Сабырлыҡ, ҡаҡшмаҫ иман ныҡлығы Аллаһ ҡолон Раббыһына яҡынайта, һәм илаһи рәхмәт пәйҙә була. Ҡөрьәндә әйтелә:

«Тимәк, ҡыйынлыҡ артынан еңеллек тә килә. Хаҡтыр, ҡыйынлыҡ менән рәттән еңеллек тә бар» (аль-Инширах (Ярып асыу), 5-6).

❁

Шәйех Сәғди әйткән: «Яңы ғына өлгөргән йөҙөм емеше әсе була. Әммә бер нисә көн түҙһәң, ул татлыға әйләнә».

❁

Ғүмеребеҙ тыныслығын һәм шатлығын беҙ Аллаһ тәҡдир иткән был ваҡыттағы яҡшылыҡтар менән бәйләйбеҙ. Беҙгә бәхетһеҙлек булып тойолған бихисап нәмәләр бар, әммә уларҙың һөҙөмтәһендә Аллаһтың рәхмәте ята. Әйтәйек, әжере Йәннәт булған фәҡирлек кеүек. Шулай уҡ мәрхәмәт булып тойолған бик нәмәләр бар, тик уларҙың һөҙөмтәһе ҡыҙғаныс. Мәҫәлән, саҙаҡаларға түгел, ә үҙеңә генә сарыф ителгән һәм Ҡиәмәттәге ауыр хисапҡа сәбәпсе буласаҡ байлыҡ.

❁

Шәйех Сәғди әйткән:

«Шатлыҡ булып әүерелгән ҡайғы күңелһеҙлектәр булып әүерелгән шатлыҡтан яҡшыраҡ».

«Түҙемлеге булмаған әҙәмгә хикмәт килмәҫ».

«Еңел килгән нәмә ғәҙәттә оҙаҡҡа бармай. Эштәр сабырлыҡ менән ҡылына. Ашығыусан яҡшы һөҙөмтәгә ирешә алмаҫ».

❁

Ер, ҡышҡы айҙарҙың ауырлығын үткәргәс кенә, йәйге ниғмәттәргә ирешә ала. Әсә, йөклө ваҡыттың 9 айын үткәргәс кенә, сабыйын ҡулына алыу ҡыуанысын кисерә.

❁

Мөхтәрәм Әбү Бәкер (радыйаллаһу ғәнһү) әйткән:

«Түҙемлек һәм тоғролоҡтоң – зыяны, һағыш һәм борсолоуҙың файҙаһы юҡ».

❁

Сабырлыҡтың фани донъяға ҡараған яғы әсе, әммә уның Әхирәттәге емештәре татлы. Аллаһты танып белгән ҡолдар (ғарифтар) Уның ризалығы өсөн фани донъя ауырлыҡтарын, мохтажлыҡтарын сабырлыҡ менән үткәрә һәм быныҢ илаһи әжерен белә. Шуға күрә улар өсөн бәләләр – мәрхәмәт, ҡыйынлыҡтар – бәрәкәт, ә михнәттәр – мәңгелек сәғәҙәткә ирешеү сараһы.

❁

Джүнәйд Бағдади (рәхимаһуллаһ) әйткән:

«Сабырлыҡ – әсене йөҙөңдө һытмайынса эсеү».

❁

Йәнәбе Хәҡҡ Үҙенең һөйөклө ҡолдарын яфалар түңәрәге буйынса йөрөтә. Фани донъяла бит бәндә күргән ҡыйынлыҡтар уның рухиәте үҫеүгә сәбәп булып тора. Шуға күрә лә иң ауыр һынауҙар пәйғәмбәрҙәр һәм, Хәҡҡә яҡынлығына ҡарап, салих заттар өлөшөнә төшә.

Улар, үҙ ҡайғы-хәсрәттәрен онотоп, башҡаларҙың башына төшкән бәләләр өсөн борсола һәм уларға ярҙамға ашыға. Улар, иң сәләмәт рухлы кешеләр, күңелдәрен мәрхәмәт йылғаһына әүерелдереп, ғазап күргәндәргә һәм йәберләнгәндәргә йыуаныс сығанағы булып хеҙмәт итә. Аллаһ янында булыуҙан алған күңел хозурлығы уларҙың фани донъялағы барса шәхси ҡайғыларын оноттора. Яралтыусыбыҙға яҡын булғанлыҡтан, барса яратылмыштарға ҡарата изгелек һәм мәрхәмәт улар өсөн иң зур ләззәткә һәм бәхеткә әүерелә.

❁

Аллаһтың иң һөйөклө ҡоло булған Пәйғәмбәребеҙ (салләллаһу ғәләйһи үә сәлләм) етем булып тыуа һәм үҫә. Ете балаһының алтауһын үҙ ҡулдары менән ерләй. Пәйғәмбәрлек миссияһын үтәгәндә уға күпме ғазап-яфалар күргә тура килә! Өхөд һуғышында уның 70-тән ашыу сәхәбәһе шәһит китә, шулар араһында иң һөйөклөләре - Мүсаб ибн Умайр һәм бабаһы Хәмзә (радыйаллаһу ғәнһүмә).

Әммә Пәйғәмбәребеҙ (салләллаһу ғәләйһи үә сәлләм) һәр ваҡыт Аллаһҡа шөкөр итеп, Уға тәүәккәл ҡылып әшәй. Таифтың наҙан халҡы уны таштар менән бәргеләгәс, ул Аллаһҡа шулай тип доға ҡыла:

«Йә Раббым! Мин бөтә ғазаптарға түҙерман, Һин генә минән риза бул!»
(ҡар. Ибн Хашим, II, 29-30; Хайсами, VI, 35).

❁

Аллаһ Илсеһе (салләллаһу ғәләйһи үә сәлләм) әйткән:

«Аллаһ юлында мин һис кемдең өлөшөнә төшмәгән яфалар күрҙем…» (Тирмиҙи, Ҡиәмәт, 34/2472).

Әммә был бәхетһеҙлектәр Аллаһ Илсеһенең (салләллаһу ғәләйһи үә сәлләм) рухи ныҡлығына һәм тыныслығына тамсы ла зыян һалмай. Киреһенсә, уның рухи халәте үҫә, һәм ул һис ҡасан зарланмай. Ниндәй генә ғазаптар ябырылмаһын, уның йөҙөнән йылмайыу китмәй. Берәү ҙә уның төшөнкөлөккә бирелгән, һытыҡ. ҡараңғы сырайлы ваҡытын күргәне булмай. Аллаһ янында булыуҙан килгән хозурлыҡ арҡаһында, Пәйғәмбәребеҙ (салләллаһу ғәләйһи үә сәлләм) һәр ваҡыт йылмайып йөрөй. Ниндәй генә хәлдәр булһа ла, һәр кем уның йөҙөндә исламдың мәрхәмәтле йөҙөн күрә.

❁

Сәхәбәләрҙең һөйөү һәм тырышлыҡ тулы тормошона күҙ һалһаҡ, күрәбеҙ: әгәр йөрәктәр Аллаһ хозурында булыуҙан тыныслыҡҡа ирешһә, ниндәйҙер аҡланыуҙар, ғазаптар юҡҡа сыға, үтеп булмаҫлыҡ аралар яҡыная, түҙеп торғоһоҙ эҫе еләҫ һауаға әйләнә. Аллаһ Илсеһе (салләллаһу ғәләйһи үә сәлләм) менән айырылышыу ғазабы янында башҡа яфа-ғазаптар сүп кенә булып ҡала. Улар уның янында булғанда, уның йылмайыуын күргәндә, бөтә ыҙалар, мохтажлыҡтар әһәмиәтен юғалта.

❁

Шөкөр итә белеү – ниндәй генә хәлгә тарыһаң да, шатлыҡ киләме, әллә ҡайғымы, алтын урталыҡтан тайпылмау. Әгәр кеше Аллаһ ризалығы өсөн сирҙәргә, фәҡирлеккә, бәхетһеҙлектәргә һәм мохтажлыҡтарға сабыр итә һәм шөкөр итә икән, ул Аллаһтың ризалығына ла ирешә. Иң ҡыйын мәлдәрҙә иманлы әҙәм пәйғәмбәрҙәр башына төшкән ҡаты һынауҙарҙы иҫенә төшөрөргә һәм бөтә ихтыяр көсөн туплап бирешмәҫкә тейеш.

❁

Килеме триллиондарға еткән әҙәм юлда 10 һум аҡсаһын юғалтһа, быныңөсөн ҡайғырып, кире әйләнеп килерме? Триллиондар менән сағыштырғанда, 10 һум нимә ул? Шулай уҡ беҙ ҙә, әгәр был фани донъяла бәлә-ҡазаларға тарыһаҡ, иң зур бәхет һәм сәғәҙәт – Аллаһ ҡоло булыу һәм Уның Илсеһе (салләллаһу ғәләйһи үә сәлләм) өммәтендә булыу икәнлеген уйлап, сабыр итергә тейешбеҙ. Шундай уйҙар менән рухланып, Аллаһ Илсеһе (салләллаһу ғәләйһи үә сәлләм) өммәтендә булыуҙан хушланып, фани донъя яфаларына әһәмиәт бирмәҫкә тейешбеҙ. Өс көнлөк фани донъяның ҡайғы -хәсрәттәренә артыҡ бошонорға, зарланырға, төшөнкөлөккә бирелергә лә, «Ни өсөн шулай булды ул! Ниндәй ҡайғы!» - тип тә ah ororға кәрәкмәй.

❁

Хаҡ иман эйәһе Аллаһ тәҡдир иткән бәләләргә зарланмай, һәр ваҡыт Раббыһына ныйына. Башына төшкән бәләләрҙе ул илаһи һынау, тип ҡабул итә һәм һағыш, төшөнкөлөк упҡынына суммай. Киреһенсә, бәхетһеҙлеге ни тиклем генә яман булып күренмәһен, ул әйтә:

حَسْبُنَا اللهُ وَنِعْمَ الْوَكِيلُ

«Аллаһтың ярҙамы беҙгә етер, Ул яҡшы (ярҙамсы) вәкилдер!» (Әлү Ғимран (Мәрйәмдең атаһы), 173).

❁

Нимәгәлер ирешһәң йәки уңыш ҡаҙанһаҡ, беҙ туғарылырға тейеш түгел. Аллаһтың зәғиф һәм ярҙамға мохтаж ҡолдары булыуыбыҙҙы оноторға ярамай. Һауаланыу, тәкәбберләнеү, көнләшеү кеүек сифаттар ҙа беҙҙән йыраҡ булыуы зарур. Аллаһ билдәләгән сиктәрҙән ситкә сығырға, ҡанундарҙы боҙорға тейеш түгелбеҙ.

Икенсе яҡтан, бәлә-ҡазалар менән һынау үткәндә, өмөтһөҙлөккә батмаҫ өсөн, улар пакланыуыбыҙ, юғары күтәрелеүебеҙ сәбәпсеһе, йәғни гонаһтарыбыҙ ғәфү ителеүенең һәм Аллаһ алдында дәрәжәбеҙ үҫеүенең сәбәпсеһе булыуын да иҫтән сығармау лазым.

❁

Хәҡиҡи мөхәббәттең күрһәткесе – физакәрлек. Бәлә-ҡазалар һөйөүебеҙҙең ни тиклем ихлас булыуын тикшереп тора.

Иң ҙур ҡыйынлыҡтар ваҡытында ла хәҡиҡи мөхәббәт юҡҡа сыҡмай, киреһенсә, ул, шулар аша үтеп, тағы ла нығына төшә. Шуға күрә Раббыһын ихлас һөйгән Аллаһ ҡоло шатлыҡлы хәлендә лә, ҡайғылы хәлендә лә Раббыһына хәмед-маҡтауҙар әйтә, шөкөр ҡыла.

❁

Тоғролоҡ — биргән антыңды үтәү генә түгел. Хәҡиҡи тоғролоҡ – ни менән генә түләргә тура килмәһен, Аллаһҡа тоғролоҡ, күндәмлек, итәғәтлелек халәтен юғалтмау, ниндәйҙер бер мәлде генә түгел, ә бөтә ғүмереңде Уға хеҙмәт итеүгә бағышлау.

❁

Тормоштоң яҡшы һәм яман сюрприздарын шөкөр итеп түгел, ә зарланып, күндәмһеҙ ҡаршы алырға күнеккән йөрәк Аллаһҡа яҡын була алмай.

Тормош шарттары нисек кенә үҙгәрмәһен, Аллаһҡа тәсбих әйтеү, Уны зекер итеү, доға халәте – иман эйәһенең даими сифаты булырға тейеш.

«Аллаһ Үҙ ҡолонан ҡасан риза булыр?» һорауына мөхтәрәм Рабиға шулай яуап бирә:

«Ҡыйынлыҡтар һәм яфалар кисергәндә лә, ниғмәттәргә күмелеп йәшәгәндәй, [Аллаһҡа] хәмед-маҡтауҙар әйткән хәлдә…»

❁

Хәҙистә әйтелә:

«Иманлы әҙәм алтынға оҡшаш. Уны утҡа ташлап иретһәләр, ул унан шундай уҡ пак һәм камил килеш килеп сыға» (Әхмәд, II, 199).

❁

Ауыр саҡтарҙа ла, имен саҡтарҙа ла, шатлыҡ килгәндә лә, ҡайғы килгәндә лә Раббыбыҙ йөрәгебеҙҙең шундай зекер халәтендә булыуын теләй: «Йә Раббым Аллаһ! Һәр бер хәлдә һиңә тәсбих әйтәм, Һиңә шөкөр итәм!».

❁

Хәҡиҡи мөхәббәт бәләләрҙе мәрхәмәткә әйләндергәнлектән, Һөйөклөң тыуҙырған ҡыйынлыҡтар ҙа шатлыҡ һымаҡ ҡабул ителә. Берәүҙең мөхәббәте ни тиклем ихлас булыуын, уның кимәле ниндәй булыуын аңларға теләһәң, Һөйөклөһө һалған ауырлыҡтарға ни кимәлдә түҙергә әҙер булыуына ҡара.

❁

Шәйех Сәғди әйтә:

«Эй, әҙәм балаһы! Рәхәтлектәргә күмелгән ҡайһы бер саҡта һин тәкәббер һәм илтифатһыҙ. Фәҡирлек килгән ҡайһы бер саҡта сараһыҙ һәм бошонҡо... Былар бәхетле һәм ҡайғылы ваҡыттарҙағы халәттәрең. Белмәйем, Раббыңа (тәсбих әйтеп һәм шөкөр ҡылып) ҡасан һин хеҙмәт итә башларһың?!».

❁

Камил мөьмин, яҡтылыҡ тирәләй өйөрөлгән күбәләк кеүек, Раббыһына мөхәббәте сәбәпле ихтыярынан яҙа, сөнки, хәмед-тәсбихтәр әйтеп, Уға хеҙмәт итеү, Унан риза булыу һәм Уға күндәмлек – Йәнәбе Хаҡҡа мөхәббәттең иң гүзәл емеше.

❁

Аллаһтың иманлы ҡоло фани донъяның алдатҡыс ялтырауыҡтарына күңел бағларға һәм уларҙы үҙенеке итә алмағанға һағышланырға тейеш түгел. Ул, бәләләргә йәшенгән бәхетте, бәхетһеҙлектәргә төрөлгән рәхмәтте күреп, һәр ваҡыт күңел тыныслығын һаҡлап ҡалырға тейеш.

Хатта ки бойоҡ булһа ла, мосолмандың йөҙөндә һәр ваҡыт йылмайыу балҡый. Уңыш килһә, Аллаһтан икәнен белеп, ул хәмед-маҡтауҙар әйтә. Бәлә килһә, уны илаһи һынау тип иҫәпләй һәм сабыр итә. Ниндәй генә хәлдәр булһа ла, Аллаһ та унан риза булһын өсөн, ул Раббыһының ихтыярынан риза була.

❁

Тормош сюрприздарҙың яҡшыһын да, яманын да алға сығарғанда, Аллаһты танып белгәндәр әйтә:«Һәм был да үтәсәк». Был кәлимәләрҙең мәғәнәһе шундай: «Йәә кеше! Тормошоңда осраған ҡайғы һәм һағыштар ҙа, шатлыҡ һәм бәхет тә – йөрәгең каруан-һарайының сираттағы ҡунаҡтары ғына. Һаҡ бул, мәңгелеккә килгән, тип иҫәпләмә! Фани ауырлыҡтарға артыҡ бошонма һәм төшөнкөлөккә батма, сөнки улар үтәсәк. Шулай уҡ фани шатлыҡ һәм бәхет менән дә мауыҡма, сөнки улар ҙа мәңгелек түгел»

❁

Джүнәйд Бағдади (рәхимәһуллаһ) әйткән:

«Бәләләр һәм бәхетһеҙлектәр ваҡытындағы сабырлыҡ – ул Аллаһты танып белгәндәрҙең шәме һәм дәрүиштәрҙең һабағы. Әммә ғафилдар быны аңлай алмай».

❁

Хәҙистә әйтелә:

«Ни тиклем гүзәл иманлы әҙәмдең хәле! Һис шикһеҙ, уның хәлендә бөтә нәмә ниғмәт, һәм ул тик иман эйәләренә генә бирелгән. Ниндәйҙер шатлыҡ килһә, ул Аллаһҡа рәхмәтен белдерә, һәм был уның өсөн бәрәкәт булып әүерелә, ҡайғы килһә, ул сабыр итә, һәм был да уның өсөн бәрәкәт булып әүерелә» (Мөслим, Зуһд, 64).

Мөьмин – барса тормош хәлдәренән – яҡшымы ул, яманмы – һәр саҡ файҙа алыусы бәхет эйәһе. Фани донъяға мөкиббән киткәндәр өсөн зыян, зарар, ҡайғы кеүек тойолған һынауҙар ҙа, рухи хикмәткә эйә булған иманлылар өсөн – түҙемлек, ҡәнәғәтлек һәм хатта ки рәхмәтле булып ҡабул ителергә тейешле Әхирәт килеменә эйә булыу сараһы.

❁

Мөхтәрәм Мәүләнә әйткән:

«Ауырлы ҡатын өсөн тулғаҡ – ҡаты һыҙланыу, ә ҡарындағы бала өсөн – төрмәнән ҡотолоу».

Камил иман эйәләренең сифаты шул: Аллаһ юлында осраған ҡыйынлыҡтарға улар сәфәр һуңында ирешәсәк гүзәл һөҙөмтәләр күҙлегенән сығып ҡарай белә.

❁

Бәлә килһә, уға башкөллө сумыу һәм үҙеңде һәләк итеү дөрөҫ түгел. Өлөшөңә яҙған бәхеткә артыҡ шашып шатланыу ҙа шулай уҡ хата. Үҙеңде улай тотоу намыҫыңа ла, шәхесеңә лә һәм абруйыңа ла зыян ғына һала.

❁

Аллаһ Сүбхәнәһү үә Тәғәлә был фани донъяла кешене байлыҡ менән дә, фәҡирлек менән дә һынай. Бәлә килгәндә Аллаһ ҡоло Раббыһына мәрхәмәт һорап ялбара, ә имен йәшәй башлаһа, үҙенең ҡоллоҡ бурысы тураһында онота – был иһә Аллаһҡа ҡарата хыянатсыллыҡ, рәхмәтһеҙлек.

❁

Хәҙистә әйтелә:

«…Ҡыйын саҡта доғалары ҡабул булыуын теләгәндәр имен саҡта ҙур тырышлыҡ һалып ғибәҙәттәр ҡылырға тейеш…» (Тирмизи, Дәғүәт, 9).

❁

Ҡыйынлыҡтарға һәм мохтажлыҡтарға осраған мосолмандың төшөнкөлөккә бирелергә һәм: «Мин юлында хеҙмәт иткән Аллаһ ни өсөн был ауыр саҡта минең менән түгел?» -тип зарланырға бер ниндәй ҙә хоҡуғы юҡ. Ундай кәлимәләр кәферлеккә алып килергә мөмкин булған итәғәтһеҙлекте күрһәтә, сөнки был һынау донъяһында ҡол Раббыһын түгел, ә Аллаһ ҡолон төрлөсә тикшерә!

❁

Мөхтәрәм Ғәли (радыйаллаһу ғәнһү) әйткән:

«Тормош ике генә көндән тора. Бер көн һинең өсөн (йәғни һиңә именлек алып килә), ә икенсе көн һиңә ҡаршы (ҡайғылары менән килә). Көн һинең өсөн булғанда (йәғни уңыш, төрлө ниғмәттәр килгәндә), боҙолма. Ә һиңә ҡаршы булған саҡта, ҡайғырма, ыңғырашма һәм зарланма! (Иҫеңдә тот, икеһе лә – Раббыңдың һынауы!)».

❁

Изге ҡудси хәҙистә әйтелә:

«Минең ҡолдарымдың ҡайһы берҙәрен байлыҡ ҡына яҡшы иман эйәһе (мосолман) итә. Әгәр Мин уларҙы фәҡир итһәм, был уларҙы боҙасаҡ.

Иманлы ҡолдарымдың ҡайһы берҙәрен фәкирлек кенә тыйып тора. Әгәр Мин уларға мул ниғмәттәр биргәм, был уларҙы боҙасаҡ.

Ҡайһы бер Минең иманлы ҡолдарым Миңә хеҙмәттә юғары дәрәжәгә күтәрелергә теләй, әммә, мин-минлек уларҙы һәләк итмәһен өсөн, мин уларҙың доғаларына яуап бирмәйем, теләгәндәрен бүләк итмәйем.

Ҡайһы бер иманлы ҡолдарымдың иманын һау булыуҙары ғына һаҡлай, әгәр Мин уларға сирҙәр ебәргәм, был уларҙы боҙасаҡ...

Мин ҡолдарымдың ғәмәлдәрен ҡәлебтәренең ғилеме менән үлсәйем. Мин бар нәмәнән Хәбәрҙар, һәммәһен белеп торам» (Бәйхаҡи, әл-Әсмә үә әс-сыфат, с. 122).

❁

Күп кенә кешеләр нимәнәндер мәхрүм булыуҙарын, нимәгәлер мохтаж булыуҙарын ҙур яманлыҡ тип иҫәпләй. Әммә тап ана шундай «мохтажлыҡ» уларҙың күбеһен тура юлда тотоп тора.

❁

Тәүге нәүбәттә Аллаһ ҡоло ниғмәттәрҙе яҡшылыҡтың абсолют сәбәбе рәүешендә ҡабул итмәҫкә тейеш. Оноторға ярамай: улар, ике осло бысаҡ кеүек, яҡшылыҡтың сәбәбе лә, яманлыҡтың сәбәбе лә булыуы ихтимал. Әммә иманлы әҙәм хәләл ниғмәттәр менән ҡәнәғәт булырға һәм улар өсөн Раббыһына рәхмәттәрен еткерергә тейеш. Шулай уҡ уны ғафиллыҡҡа сумдырырҙай ниндәйҙер ниғмәттәрҙән мәхрүм ҡалған икән, асылда был да уның өсөн илаһи рәхмәт, һәм быныңөсөн дә Аллаһҡа хәмед-маҡтауҙар әйтеү лазым.

❁

Шөкөр итә белеү уғата мөһим, сөнки, ҡыҙғанысҡа ҡаршы, мин-минлек, фани донъяға мөкиббән китеү бөгөнгө көндә бик күп кешеләрҙе «үҙҙәрен күрһәтергә» ынтылыу менән мауыҡтыра. Байлыҡ, дан-шөһрәт, шәһүәттәр менән мауығыусылар бер заман быларҙың һәммәһе үҙҙәренә зыян булып әйләнеп ҡайтыр, тип уйламай.

Иманлы әҙәмдең маҡсаты бит байығыу, йәмғиәттә күренекле урын биләү түгел, ә Аллаһтың тәкүәле, тоғро һәм яҡшы ҡоло булыу.

❁

Ниндәйҙер матди байлыҡтар аҙ насип булған мөьмин, Аллаһты маҡтап, тәсбих әйтергә тейеш, сөнки өлөшөнә төшкән көмөшө күберәк булһа, һауаланып, боҙолоп китеүе лә ихтимал ине бит. Матди ниғмәттәр тағы ла кәмерәк булмағаны өсөн дә рәхмәттәр еткереү зарур, бәлки, был хәл уға итәғәтле ҡол булырға ҡамасаулар ине. Ғазап-яфалар ҙа, мәрхәмәт тә илаһи һынау икәнен

аңлап, иманлы әҙәмгә күңел тыныслығын юғалтмау һәм тәкдиренә шөкөр итеү бик мөһим.

Онотмайыҡ, Ҡарун, мәҫәлән, Аллаһтың тәкүәле ҡоло була, әммә, Аллаһ һынау өсөн биргән байлыҡты күтәрә алмайынса, һәләк була – ҙур өмөттәр бағлаған барса хазиналары менән уны ер йота.

❁

Беҙ һынау үткән был ҡыҫҡа ғына фани донъяла Аллаһ насип иткән һәр нәмәне шөкөр итеп, хәмед-маҡтауҙар менән ҡабул итеү зарур. Нәфес әүәҫлектәренә эйәреп ғәмһеҙ йәшәгәндәрҙән дә йыраҡ булырға кәрәк. Аллаһ Тәғәлә быға ҡағылышлы беҙгә шундай киҫәтеү яһай:

«(Аллаһты, Ҡөрьәнде, Пәйғәмбәрҙе танымаусы инҡар итеүселәр, йәғни) кәферҙәрҙең ил буйлап йөрөгәндәре (сауҙа менән байығандары) һине ҡыҙыҡтырмаһын. Әҙ файҙалыр, һуңынан уларҙың барасаҡ ере – Йәһәннәмдер. Ул ҡот осҡос хәтәр урын!» (Әлү Ғимран (Мәрйәмдең атаһы), 196-197).

❁

Шәйех Сәғди әйткән:

«Яҡшы кешеләр дусар булған бәләләр мотлаҡ шатлыҡ менән тамамланасаҡ. Һәм ямандарҙың бәхете лә үтеп китәсәк».

❁

Һәр иманлы әҙәм хәләл юл менән килем алырға тырышырға тейеш. Әммә шулай уҡ әҙенә лә шөкөр итә белеү, булғанына ҡәнәғәт булыу лазым. Аллаһ риза булһын өсөн, мөьмингә лә Раббыһы насип иткән ниғмәттәргә риза булыу мөһим.

❁

Әҙәм балаһы теләктәренең иге-сиге юҡ. Насибыңдың әлмисаҡта ул тәҡдир ителеүе йөрәгеңдә ныҡлы урын алыуы - уларҙан ҡотолоуҙың төп шарты. Шул уҡ ваҡытта, ялҡаулыҡты ситкә ҡуйып, үҙеңә насип ризыҡты табыу өсөн хеҙмәт һалырға ла кәрәк. Ә инде ҡулыңдан килгәндең барыһын да эшләгәс, тапҡаныңа шөкөр итеү лазым. Тапҡан-таянғаның ниндәй күләмдә генә булмаһын, шулай тип әйтә белергә кәрәк: «Раббым насип иткәне – миңә иң яҡшыһы». Ә аҙаҡ инде исрафтан ҡасырға һәм ихлас күңелдән шөкөр итергә мөмкин.

Раббыбыҙ изге аятта әйтә:

«Һәр нәмәнең хазинаһы бары тик Беҙҙең ихтыярыбыҙҙа. Беҙ уны кәрәк миҡдарҙа ҙа ғына индерәбеҙ» (әл-Хиджр (Хижр иле), 21). Шулай итеп, Ул

фани донъялағы байлыҡтарҙың илаһи ихтыярға ярашлы бүленеүен аңлата, әммә ҡомһоҙлоҡ, һаранлыҡ быны аңларға ҡамасаулай...

❁

Хәҙистә әйтелә:

«[Аллаһҡа] шөкөр итә алған ҙур булмаған байлығың шөкөр итә алмаған ҙур байлығыңдан яҡшыраҡ» (Табәри, Джәмиғ әл-бәйән, XIV, 370).

❁

Кешегә файҙа килтерерҙәй хәҡиҡи ниғмәттәр – ул шөкөр итә алған ниғмәттәр. Шөкөр итә алмаған, исраф ҡылған һәм һаранлыҡ күрһәткән ниғмәттәр – асылда боҙоҡлоҡ һәм бәлә. Ғафил кеше уны ниғмәткә һанап шатлана, унан мәхрүм ҡалһа, ҡайғыра, бәхетһеҙлекте – бәхет, ә бәхетте бәхетһеҙлек тип хаталана.

❁

Йөрәккә шатлыҡ биргән күренеш һәм ваҡиғаларға - ҡәнәғәтлек, ҡайғы һәм борсолоу тыуҙырған ваҡиғаларға ризаһыҙлыҡ Аллаһҡа хеҙмәт әҙәбе менән килешмәй. Әммә әҙәм балаһы рухи йәһәттән үҫешмәй тороп, кешеләргә хас был кәмселектән еңел генә ҡотола алмай.

Нәфесен паклап, «радыйа» (шөкөр) дәрәжәһенә еткәс, кеше һис бер икеләнеүһеҙ яҡшылыҡ та, яманлыҡ та булып кәүҙәләнеш тапҡан илаһи ихтыярҙың барса ҡарарҙарына аһ-зарһыҙ буйһона. Ғайбтан килгән нәмәләр беҙгә йәшерен, уларҙы Аллаһ Тәғәлә генә белә.

Аятта әйтелә:

«…Шулай ҙа була: һеҙ берәй нәмәнән нәфрәтләнәһегеҙ, ә ул һеҙҙең өсөн файҙалы; ҡайһы саҡ һеҙ үҙегеҙгә зарарлы булғандарҙы ла яратаһығыҙ. Быларҙың барыһын да Аллаһ белә, һеҙ белмәйһегеҙ» (әл-Баҡара (Һыйыр), 216).

❁

Билдәле бер арауыҡта ғына күҙҙәр күрергә һәм ҡолаҡтар ишетергә һәләтле. Бик алыҫтағы нәмәләрҙе күреү һәм ишетеү мөмкин түгел. Шулай уҡ өлөшөнә яҙған тәҡдирҙе лә кеше аңларға ҡадир түгел, сөнки беҙ ваҡиғаларҙы сәбәптәргә таянып аңларға тырышабыҙ һәм күп осраҡта улар артында торған хикмәтте белә алмайбыҙ.

❁

Бәхетһеҙлектәргә йәшенгән рәхмәткә ғафил булмаған һәм һәр даим Ғаләмдәр Раббыһына тәүәккәлләгән тәҡдирҙә генә тыныслыҡ һәм бәхет табырға мөмкин.

❁

Иман һәм рухи хикмәт күҙлегенән сығып шуны әйтергә була: бай булһаҡ та, фәҡир булһаҡ та – был халәттәр беҙҙең өсөн иң яҡшыһы.

❁

Мөхтәрәм Әбү Бәкер (радыйаллаһу ғәнһү) әйткән: «Минең уйымса, һынауҙар үтеп, сабырлыҡ күрһәткәнсе, имен булып, булғанына шөкөр итеү яҡшыраҡ».

❁

Имам Ғазали әйткән:

«Хәҡиҡи ниғмәт – муллыҡта сабыр һәм ҡәнәғәт булыу».

❁

Сәғди Ширази шәйех әйткән:

«Тәҡдиренә шөкөр итмәгәнгә Аллаһ разый булмаҫ».

❁

Тормошта күтәрелеш һәм түңкәрелештәр сиратлап килә, йәғни йә шатлыҡ, йә ҡайғы. Былар һәммәһе – илаһи һынау.

Беҙ, Раббыбыҙ ҙа беҙҙән разый булһын өсөн, Аллаһ насип иткән тәҡдиргә риза булырға тейешбеҙ.

❁

Ғүмәр ибн Ғабдул Ғәзизгә (рахимәһуллаһ) шундай һорау бирәләр:

«Әфәндем, һеҙҙе айырыуса нимә ҡыуандыра?», ул былай тип яуап бирә:

«Мин тәҡдиремә насип булғанға ғына ҡыуанам. Мин Аллаһтың миңә ҡылынған һәр күрһәтмәһен яратам…»

Әгәр ҙә ки мөьмин үҙенә ҡарата булған илаһи тәҡдирҙе үҙ теләктәренән өҫтөн ҡуймаһа, ул хәҡиҡи шөкөр халәтенә ирешә алмай.

❁

Мөхтәрәм Әхмәд ибн Ханбәл әйткән: «Һәр нәмәнең хуш күңеле бар. Йөрәктең хуш күңеле – Раббыбыҙҙан разый булыу, йәғни тәҡдирҙән».

Аллаһҡа хәҡиҡи хеҙмәт:

– Аллаһ Тәғәлә насип иткән тәҡдиргә риза булыу.

– Һәр саҡ һәм һәр ҡайҙа Аллаһтың дуҫы булып ҡалыу.

– Зар һәм аһтарҙы онотоп, тормошобоҙҙоң туҡтауһыҙ үҙгәреп торған күтәрелеш-түңкәрелештәре, ҡапыл килгән үҙгәрештәре ваҡытында тигеҙлекте юғалтмау.

❁

Бәндәләрҙән һис кемдә булмаған, тиңһеҙ хакимлыҡ бирелгән Сөләймән пәйғәмбәр (ғәләйһис-сәләм) бөтә рәхмәттәрҙең Хаҡ Хужаһы булған Раббыһын һис ҡасан иҫенән сығармай, йөрәген фани донъя ниғмәттәре һандығына әйләндермәй. Аллаһ Сүбхәнәһү үә Тәғәлә уны маҡтап әйтә: نِعْمَ الْعَبْدُ **«...Ниндәй хуш бәндәләр ул Сөләймән, ул һәр ваҡыт тәүбә-тәсбих менән Аллаһҡа ҡайтыусылыр!»** (әс-Сад, 30).

❁

Икенсе яҡтан, ауыр бәләләр, ғазаптар һәм фәҡирлек менән һыналған Әйүб (ғәләйһис-сәләм) бер ҡасан да сабырлығын юймай, гел шөкөр халәтендә була. Аллаһ Тәғәлә уны ла маҡтап әйтә: نِعْمَ الْعَبْدُ **«Ул ғәжәйеп яҡшы хеҙмәткәребеҙ ине!»** (әс-Сад, 44).

Тимәк, Аллаһҡа рәхмәтле булған байҙар ҙа һәм, сабыр-түҙем булып, шөкөр иткән фәҡирҙәр ҙә Аллаһтың ризалығына, мөхәббәтенә берҙәй үк ирешә ала.

❁

Мөхтәрәм Ғәли (радыйаллаһу ғәнһү) әйткән:

«Байҙарҙың Аллаһтың әжер-сауабын өмөт итеп итәғәтлек күрһәтеүе - гүзәл. Аллаһҡа тәүәккәлләп, байҙарға мохтаж булмаған фәҡирҙәр генә уларҙан яҡшыраҡ».

«Ғиффәтлек – фәҡирлек биҙәге, ә рәхмәтле булыу – байлыҡ биҙәге».

❁

Исламда һауалы, тәкәббер байҙар ҙа, тәҡдирҙәренә күнмәйенсә, күндәмлектән йыраҡлашҡан фәҡирҙәр ҙә хупланмай. Бына ни өсөн Пәйғәмбәребеҙ (салләллаһу ғәләйһи үә сәлләм) шулай доға ҡылған: *«Йә Раббым! Мин фәҡирлек һәм байлыҡ фетнәһенән Һинең яҡлауыңа һыйынам»* (Мөслим, Зикр, 49).

❁

Ҡәнәғәтлек – холоҡтарының тупаҫлығынан ҡотолған һәм камиллыҡҡа ирешкән әүлиәләргә һәм салих заттарға хас һыҙат. Был йөрәк байлығына шөкөр итеүҙе һәм артығын көҫәмәүҙе аңлата. Хәҙистән күреүебеҙсә: «Ҡәнәғәтлек – бөтмәҫ-төкәнмәҫ хазина», – был, рухи йәһәттән байып, хозурлыҡҡа ирешкән йөрәк халәте.

Шәйех Сәғди әйткән:

«Хеҙмәт һалып табылған һеркә һәм салат ауыл башлығының яңы бешкән икмәгенән һәм һарыҡ итенән яҡшыраҡ».

«Башҡаларҙа булғанды көҫәп ҡомһоҙланма һәм (шөкөр, ҡәнәғәтлек) солтанлығына хужа бул. Һаранлыҡтан баш тартҡанды нығыраҡ хөрмәт итәләр».

ЛАЙЫҠЛЫҒА - МӨХӘББӘТ, ЗАЛИМҒА - НӘФРӘТ

Мөхәббәт – рухтың рухҡа һоҡланыуы. Тәндең тәнгә һоҡланыуы – ул мөхәббәт түгел, ә шәһүәт.

❁

Ҡарыныбыҙға харам ризыҡ инеүҙән тайшанған кеүек, йөрәгебеҙҙең лайыҡһыҙҙарға һөйөү баҒлауынан да тайшанырға тейешбеҙ.

Изге аятта әйтелә:

«…Исламға килгәндәрҙең Аллаһҡа булған мөхәббәттәре... күп тапҡырға артыҡ…» (әл-Баҡара (Һыйыр), 165).

❁

Мөхәббәттең үре – әл-Үәдүүд (Һөйөүсе) булған Аллаһты һәм Уның һөйөклө Илсеһен (салләллаһу ғәләйһи үә сәлләм) һөйөү.

Әгәр кеше сығанағы нәфес булған фани мөхәббәт әсирлегендә булһа, әгәр тормошо Аллаһҡа һәм Уның Илсеһенә (салләллаһу ғәләйһи үә сәлләм) мөхәббәт менән йәнләнмәһә, тимәк ул – Аллаһ һаҡлаһын – ғафиллыҡта үткән.

❁

Линза Ҡояш нурҙарын бер нөктәгә йыя, һәм уның аҫтындағы сүп-сар тулыһынса янып бөтә. Тап шул рәүешле һөйөү Аллаһҡа һәм Уның Илсеһенә (салләллаһу ғәләйһи үә сәлләм) йүнәлһә, ул, йөрәктәге Аллаһ һәм Уның Илсеһенән (салләллаһу ғәләйһи үә сәлләм) ҡала бөтә нәмәне яндырып, көлгә әйләндерә… Берәү шундай ғишыҡ утында янһа, фани донъя кесерәйеп ҡалғандай була, ә мәңгелек тормошта Аллаһ Илсеһе (салләллаһу ғәләйһи үә сәлләм) янында булыу һәм Аллаһ Тәғәләнең гүзәллеген күреүгә лайыҡ булыу иң бөйөк маҡсатҡа һәм иң бөйөк ләззәткә әйләнә.

❁

Аллаһ Тәғәләгә рәхмәт тойғоһо булып яралған хәҡиҡәти тоғролоҡ тәүге нәүбәттә Аллаһ Илсеһенә (салләллаһу ғәләйһи үә сәлләм) мөхәббәт, хөрмәт, доға һәм рәхмәт булып ярала, аҙаҡ ул гүзәл тойғолар башҡа пәйғәмбәрҙәргә лә, Пәйғәмбәребеҙҙең (салләллаһу ғәләйһи үә сәлләм) ғаиләһенә, сәхәбәләренә, иман беҙҙең көндәргә тиклем килеп етһен өсөн тырышлыҡ һалған салих заттарға, йөрәктәребеҙгә йүнәлеш биреүсе камил остаҙҙарыбыҙға күсә һәм шулай уҡ оло мөхәббәт ата-әсәләребеҙгә, туған-тыумасаға, иман ҡәрҙәштәребеҙгә ҡарата ла барлыҡҡа килә.

❁

Әгәр күңелебеҙҙәге иң ҙур мөхәббәт Аллаһ Тәғәләгә йүнәлтелмәһә, беҙ хәҡиҡи иманға эйә була һәм хәҡиҡи юлда була алмаясаҡбыҙ. Сығанағы нәфесебеҙ булған фани донъяға төбәлгән һәүәҫлектәрҙән ни дәрәжәлә ҡотола алһаҡ, илаһи һөйөү һәм дуҫлыҡ ләззәтен дә шул дәрәжәлә татып ҡарай аласаҡбыҙ.

❁

Аллаһҡа һәм Уның Илсеһенә (салләллаһу ғәләйһи үә сәлләм) мөхәббәтен фани донъя эҫенеүҙәренән юғары ҡуйыусылар, ялған сәскәләргә алданмаусылар ни тиклем бәхетле!

❁

Аллаһты һөйгән мөьмин мөхәббәте ихласлығына бик күп һынауҙар үтер. Тап, алтынды һуҡҡылап, ялғанмы-ысынмы икәнлеген асыҡлаған кеүек...

❁

Тормош – иманыбыҙҙы һәм Аллаһҡа ҡарата йөрәгебеҙҙәге ихласлыҡты һынаусы имтихан. Был имтихандарҙа уңышҡа ирешә килә мөьмин Аллаһҡа яҡын булған ҡол дәрәжәһенә күтәрелә, хатта ки Уның дуҫына әйләнә һәм хәҡиҡи дуҫлыҡтың ғәҙәттән тыш бүләктәренә лайыҡ була.

❁

Мөхтәрәм Ибраһим (ғәләйһис-сәләм) Аллаһ менән дуҫлыҡ юлында ҡаты һынауҙар аша үтә. Тормошо, милке һәм нәҫеле мәсьәләһендә Йәнәбе Хәҡҡ уға ғәҙәттән тыш мәрхәмәт, хөрмәт күрһәтә. Ул уға утты халҡын һәм имен итә, милкенә бәрәкәт бирә. Хатта ки иман эйәләре бер-береһенә шулай тип доға ҡыла: «Раббым һиңә дуҫы Ибраһим бәрәкәтен бирһен!».

Уйлап ҡарайыҡ, фани әҙәм икенсе бер фани әҙәмгә нимә бирә ала? Хәленән килгәнен генә бирә ала. Аллаһ Тәғәләнең, Ғаләмдәр Раббыһының Үҙ ризалығы өсөн фани донъя эҫенеүҙәренән һәм нәфес әүәҫлектәренән баш тартҡан дуҫтарына йомартлығы һәм рәхмәте иһә икһеҙ-сикһеҙ.

Тормошта иң зур хаҡ мөхәббәт өсөн түләнә, сөнки хәҡиҡи мөхәббәттең үлсәме – физакәрлек. Ихтыяж тыуғанда, һөйгән нәмәләренән баш тартып, Аллаһ өсөн Уның ҡоло бөтә ауырлыҡтарға сабыр итеүе Аллаһҡа мөхәббәттең төп күрһәткесе булып тора…

❁

Иман – ул бөйөк мөхәббәт. Мөхәббәт дәлилдәр талап итә. Мөхәббәттәге ихласлығың дәлиле – һөйөклөң хаҡына ҡылынған физакәрлегең, ауырлыҡтарға сыҙамлығың. Һөйөклөһө хаҡына уңайлы тормошонан, донъя файҙаһынан баш тарта алмағандың һөйөүе хаҡ түгел.

❁

Һәр ниғмәттең үҙ хаҡы бар. Рухи түләү һәм матди түләү булмаған нәмәгә эйә булырға тырышыу – иҫәрлек. Был фани донъяла беҙҙән түләү талап иткән иң ҡиммәт нәмә – иман.

❁

Имандан ҡала, Аллаһ Сүбхәнәһү үә Тәғәлә Үҙ ҡолдарынан изге ғәмәлдәр талап итә, сөнки иман һүҙҙә генә булырға тейеш түгел. Кеше уның принциптарын тормошҡа ашырып иҫбатларға тейеш.

Һүҙҙә мөхәббәттәре тураһында һөйләп, асылда хәҡиҡәттән йыраҡ булған ғафил кешеләрҙе мөхтәрәм Мәүләнә киҫәтә: «Һүҙ көлкөһө булма!».

❁

Кеше йөрәген нимәгә биргә, шуға һоҡлана һәм ғашиҡ була. Мөхәббәт физакәрлек тыуҙыра. Физакәрлеккә эйә булһа, әҙәмдең ғибәҙәте ләззәткә әйләнә, ә изге ғәмәлдәре хозурлыҡ алып килә.

❁

Мөхтәрәм Мәүләнә Аллаһҡа мөхәббәт сағылыштарын шулай тасуирлай:

«Мөхәббәт яфаларҙы татлы итә.

Мөхәббәт арҡаһында баҡыр алтынға әүерелә.

Мөхәббәт шифа табылмаған ғазаптарҙан һауыҡтыра.

Мөхәббәт үлеләрҙе терелтә.

Мөхәббәт арҡаһында ҡайғылар – бәхеткә, һағыш шатлыҡҡа әүерелә.

Мөхәббәт арҡаһында бәхетһеҙлек рәхмәткә әйләнә».

«Мөхәббәт булмаһа, хатта шәм дә тимер һымаҡ ҡата».

Донъяуи белем алыуҙың сәбәпселәре – уҡытыусы, мәктәп, китап һәм башҡалар. Йәшерен ғилем алыуҙың сәбәпсеһе иһә – мөхәббәт.

❁

Донъяуи ғилем һәм аҡыл ярҙамында хикмәт һәм хәҡиҡәткә ирешеп булмай, быға йөрәктең өлгөрөп етешеүе кәрәк. Ә уның төп сараһы – саф һәм ихлас мөхәббәт.

Мөхәббәт тәсауыфтағы рухи үҫештең ҡиммәтле сараһы булып тора, ә бының һөҙөмтәһе – әҙәп, йәғни тормоштоң бөтә өлкәләрендә Аллаһҡа хеҙмәт ҡағиҙәләрен үтәү.

❁

Һис ҡасан оноторға ярамай: кәмселекле тәғлимәттәр, инаныстар Аллаһ ҡолон һуңғы һулыш мәлендә лә, ҡәберҙә лә, Ҡиәмәт көнөндә лә, Мәхшәр майҙанында ла, ғәмәл үлсәгесе Мизан янында ла, Сират күперендә лә ҡотҡара алмаясаҡ. Әммә Аллаһҡа һәм Уның Һөйөклөһөнә (салләллаһу ғәләйһи үә сәлләм) мөхәббәт, ихлас итәғәтлелек һәм буйһоноу – мәңгелек бәхеткә ирешеү өсөн йөрәктең берҙән-бер капиталы буласаҡ.

❁

Боҙға нимәлер яҙһаң, ҡояш, иретеп, уны юҡҡа сығарасаҡ. Нисек кенә ауыр булмаһын, мәрмәрҙе соҡоп яҙһаң, ул мәңгелеккә ҡаласаҡ. Шулай уҡ Аллаһҡа һәм Уның Илсеһенә (салләллаһу ғәләйһи үә сәлләм) мөхәббәтебеҙҙе, мәрмәргә яҙған һымаҡ, йөрәгебеҙгә уйып яҙыу лазым. Ә уның яҙылыу-яҙылмауын иһә ғәмәлдәребеҙ һәм халәтебеҙ күрһәтеп торор...

❁

Әгәр физакәрлек менән иҫбатланмаһа, мөхәббәтебеҙ ихласлығы тураһында һөйләп тороу ҙа артыҡ. Ғашиҡ мөхәббәте хаҡына бөтә ауырлыҡтарға сыҙай. Аллаһтың яратылмыштарына саҙаҡалар иһә Уға һөйөүҙең иң күркәм сағылышы булып тора.

❁

Үҙенең «Диван-и Кәбир»ендә мөхтәрәм Мәүләнә ниндәй гүзәл әйткән:

«Әгәр мөхәббәткә сарыф ителмәгән, Һөйөклөңә бүләк ителмәгән икән, алтын, ғүмер йәки ынйынан ни файҙа?!».

❁

Пәйғәмбәребеҙ (салләллаһу ғәләйһи үә сәлләм) әйткән:

«Мин Әбү Бәкер милкенән алған тиклем файҙаны башҡа һис кемдең милкенән алманым».

Аллаһ Илсеһенә (салләллаһу ғәләйһи үә сәлләм) мөхәббәте хаҡына үҙ тормошонан һәм асылынан баш тартҡан Әбү Бәкер (радыйаллаһу ғәнһү), әйтерһең, Аллаһ Илсеһендә (салләллаһу ғәләйһи үә сәлләм) үҙ ғүмерен таба. Үҙенә төбәлгән маҡтауҙан тәрән тойғоланып, ул йәш тулы күҙҙәре менән һорау бирә:

«Мин һәм минең милкем һинеке түгелме ни, йә Рәсүлүллаһ?!» (ҡар. Ибн Мәджә, Муҡаддима, 11; Әхмәд, II, 253).

❁

Ихлас ғәшиҡ һөйөкләһә өсөн үҙен ҡорбан итергә лә әҙер, әммә ул быны йәнемде фиҙа ҡылам, ти уйламай. Ул быны, бурысын үтәгәндәй, рухи хозурлыҡ менән эшләй - хаҡ иман эйәһенең Раббыһы Аллаһҡа хеҙмәте, тырышлығы һәм фиҙакәрлеге ана шундай.

❁

Әгәр бәндә илаһи һөйөүҙән йыраҡ икән, тимәк әле ул камиллыҡҡа ирешмәгән һәм үҙ нәфесе әсирлегендә йәшәй. Илаһи һөйөүҙе татып ҡарамағандар эшкәртелмәй ятҡан ҡалдау ер кеүек. Ифрат мөһим ул һөйә белеү, йәшәйеш сәбәбе лә бит – мөхәббәт.

❁

Метафорик мөхәббәттән хәҡиҡи мөхәббәткә күтәрелгән Мәжнүн халәтенең юғарылығы шунда: Ләйлә уның Аллаһ юлындағы һуңғы туҡталҡаһы булып ҡалмаған.

Берәүҙәр өсөн «Ләйлә» - ҡаршы енес вәкиле, икенселәре өсөн – байлыҡ, өсөнсөләре өсөн – йәмғиәттәге урыны.

Сәбәптәрҙең маҡсатҡа әйләнеүе ниндәй ҡыҙғаныс!

❁

Ер әүәҫлектәре Аллаһҡа мөхәббәт һәм илаһи һөйөүгә баҫҡыс булыуы менән генә ҡиммәт.

❁

Мөхтәрәм Мәүләнә әйткән:

«Мәрхәмәтле бул, мөхәббәт гүзәл. Уға яман холоҡ ҡына ҡамасаулай. Һин әүәҫлекте мөхәббәт, тип атаның. Әүәҫлектәр мөхәббәттән ни тиклем алыҫ икәнен белһәң икән!

Илаһи мөхәббәт мөьминде уяу булырға мәжбүр итә. Фани әүәҫлектәр иһә, киреһенсә, кешене иҫәргә әйләндерә, аҡылын ала».

❁

Тәндең һәр бер өлөшөнөң үҙ ихтыяры бар, йөрәктә генә ул юҡ. Йөрәк тирә-йүндәге үәсүәсәләргә бирешеүсән. Шул сәбәпле йөрәк ғәҙәттә үҙе булған мөхиттең төҫөн, формаһын һәм гармонияһын ала.

Шул уҡ ваҡытта йөрәк, ни кимәлдә яратһа, шул кимәлдә тышҡы факторҙарҙың йоғонтоһона эйәрә һәм ни кимәлдә яратмаһа, шул кимәлдә уларҙы инҡар итә. Шуға күрә мөхәббәт һәм нәфрәтте дөрөҫ һәм урынлы файҙаланыу кешенең рухи үҫеше өсөн мөһим, юғиһә мөхәббәт һәм нәфрәт түбән тәгәрәү өсөн бер этәргес булыуы ла ихтимал.

Мөхәббәтте лайыҡлы нәмәләргә, ә нәфрәтте тейешле сәпкә йүнәлтеү кешегә яңы мөмкинлектәр аса. Һәм, киреһенсә, мөхәббәтте һәм нәфрәтте тейешһеҙ яҡҡа йүнәлтеү уны бәхетһеҙ итә.

❁

Шәйех Сәғди әйткән:

«Дошман күҙе менән ҡараһаң, оҫталыҡ һәм ғилем дә кәмселек булып ҡабул ителә. Ерҙе яҡтыртып торған Ҡояш ярғанаҡтарға шөкәтһеҙ һымаҡ тойола.

Әгәр кеше кемделер яратмаһа һәм уға нәфрәт менән ҡараһа, теге Йософ пәйғәмбәр (ғәләйһис-сәләм) кеүек сибәр булһа ла, уның өсөн ул йәмһеҙ булып күренәсәк. Әммә мөхәббәт күҙе менән ҡараһа, хатта ки шайтан да фәрештә кеүек тойоласаҡ».

❁

Ҡарыныбыҙға харам ризыҡ инмәүен тикшереп торған кеүек, йөрәгебеҙҙә лайыҡһыҙҙарға ҡарата мөхәббәт пәйҙә булыуынан һаҡланырға кәрәк.

❁

Физика бушлыҡты ҡабул итмәгән кеүек, йөрәк тә бушлыҡты ҡабул итмәй. Мөхтәрәм Шафиғи имам әйткәнсә:

«Әгәр күңелеңә хәҡиҡәтте индермәһәң, уны ялған ялмап алыр».

❁

Мөхәббәт, әүәҫлектәр һәм ынтылыштар – кешенең көҙгөһө. Кеше нимә эҙләһә, уй-хыялдары шунда йүнәлә. Мөхтәрәм Мәүләнә һүҙҙәре буйынса: «Кеше (Аллаһ ҡашында) эҙләгәндәре буйынса баһалана».

Улайһа, беҙ нимә эҙләйбеҙ һуң? Хыялдарыбыҙ нәфесебеҙ яғына ауышҡанмы, әллә рухиәтебеҙҙе ҡайғыртамы? Хәйерселек һәм түбәнлек баҙарында бәхет эҙләү бөйөк иҫәрлек булыуын да оноторға ярамай!

❁

Мөхтәрәм Ғәли (радыйаллаһу ғәнһү) әйткән:

«Кешенең ҡиммәте уның теләктәре һәм ынтылыштары ҡиммәтенә бәйле».

❁

Мөхтәрәм Шафиғи имам әйткән:

«Әгәр бәндәнең берҙән-бер теләге ҡарынына инеп ятҡан нәмә булһа, был кешенең ҡиммәте ҡарынынан бүленеп сыҡҡан нәмәгә тиң!».

❁

Мөхтәрәм Мәүләнә әйткән:

«Эй, туғанҡайым! Һинең тәнең, хайуандарҙыҡы һымаҡ, ит-ҡан һәм һөйәктәрҙән тора (йәғни матди). Һинең асылың – ул уйҙарың. Әгәр уйҙарың рауза булһа, һин рауза баҡсаһында. Әгәр уйҙарың энә булһа (әгәр уйҙарың нәфес әсирлегендә булһа), һин утта янасаҡ бүрәнә!».

Кешенең бармаҡ эҙҙәре материаль асылына тура килһә, уйҙар донъяһы уның рухиәтенә тура килә.

❁

Лайыҡлы уйҙар нәфес һаҙлығының ағыулы һулышынан түгел, ә рухиәттән илһам ала.

Әгәр автомобиль багына бензин урынына һыу тултырһаң, ул ватыласаҡ. Йөрәгебеҙ Изге Яҙмалар етәкселегендә генә хозурлыҡҡа ирешерлек итеп бар ҡылынған. Һәм әгәр уға ялған идеялар, буш фәлсәфәләр, нәфес йоғонтоһондағы фекерҙәр, әүәҫлектәр тултырһаң, был уны рухи һәләкәткә алып киләсәк. Ҡаҙанға боҙолған ризыҡтар һалып, тәмле ниғмәт әҙерләп булмай.

❁

Хис һәм тойғо үҙәге булған йөрәгебеҙ һәм аңыбыҙ бассейнға оҡшаш. Мәрхүм Нәжип Фазыл һүҙҙәре буйынса, ул бассейнға ике улаҡ ҡуйылған, уларҙың береһенән – нур, икенсеһенән әшәкелек аға... Әгәр ул улаҡтарҙан нәфес, яҙыҡтар, зина, харам һәм мәкрүһҡа нигеҙләнгән ғафиллыҡ аҡһа, эске донъябыҙ бысраҡ канауға әйләнәсәк. Әммә әгәр ул улаҡтар Ҡөрьән һәм Сөннәт рухиәте һәм бәрәкәте каналдарына әйләнһә, йөрәктәребеҙ хикмәт океанына әүереләсәк.

Йөрәктәребеҙгә тулғандар шифа һәм мәрхәмәт сығанаҡтарынанмы, әллә золом һәм ғафиллыҡ канализацияһынанмы – был мәсьәләләә бик наҡ булырға тейешбеҙ.

❁

Был донъяла бөтә нәмә үҙенең ҡапма-ҡаршыһы аша ерләшә. Мөхәббәттең ҡапма-ҡаршыһы нәфрәт булғанлыҡтан, Аллаһҡа оҡшамаған нәмәләргә нәфрәтләнеү шулай уҡ Аллаһҡа мөхәббәт сәбәбендә барлыҡҡа килә.

❁

Шулай уҡ Аллаһты һөйөү һәм Ул һөйгән нәмәләрҙе һөйөү ҙә һәм Ул һөймәгән нәмәләрҙән тайшаныу ҙа иман именлегенең шарты булып тора. Хәҡиҡәт һәм изгелектең ҡапма-ҡаршыһы иҫәпләнгән ялғанға һәм золомға нәфрәт булмауы – шулай уҡ иман йомшаҡлығы һәм кәмселеге билдәһе.

❁

Иман мөхәббәт һәм нәфрәттең быға лайыҡлы булғандарға ғына төбәлеүен талап итә. Йәғни мөьминдең бурысы:

– Нәмрудҡа нәфрәте ни тиклем көслө булһа, Ибраһим пәйғәмбәргә (ғәләйһис-сәләм) мөхәббәте лә шул тиклем көслө булырға тейеш,

– Муса пәйғәмбәрҙе (ғәләйһис-сәләм) ни тиклем көслө яратһа, Фирғәүенде лә шул тиклем күрә алмау,

– Әбү Яһилде ни ҡәҙәр көслө күрә алмаған кеүек, Пәйғәмбәребеҙҙе лә (салләллаһу ғәләйһи үә сәлләм) шул тиклем көслө яратыу.

«Тәббәт (Ҡулы ҡорохон)» сүрәһендә беҙгә, Пәйғәмбәребеҙҙең (салләллаһу ғәләйһи үә сәлләм) бабаһы булһа ла, кәферлегендә ныҡ торған Әбү Ләһәбте күрә алмаҫҡа тейешлегебеҙ тураһында әйтелә.

❁

Риүәйәттәр буйынса, мөхтәрәм Ғайса (ғәләйһис-сәләм) әйткән: «Итәғәтһеҙҙәрҙең дошманына әйләнеп, Аллаһтың дуҫы бул! Итәғәтһеҙҙәрҙән йыраҡлаш, уларға нәфрәт бағла һәм Аллаһтың ризалығына иреш, Уға яҡынай!»

❁

Әгәр мосолман йөрәге, мосолман булмағандарҙың нәфес әүәҫлектәрен ҡәнәғәтләндереүгә нигеҙләнгән йәшәү рәүешенә күнегеп, Аллаһ хаҡы өсөн нәфрәтләнеү һәләтен юғалтҡан икән, улар араһындағы айырма яйлап юҡҡа сыға бара. Иман – ул бау, тип күҙ алдына килтерәйек. Әгәр йөрәктәрҙә Аллаһ хаҡы өсөн нәфрәт тойғоһо кәмей икән, был бауҙың сүстәре бер-бер артлы

өҙөлә башлай. Ул саҡта диндең исеме генә ҡала, һәм ул йәндән мхрүм тән рәүешен ала.

❁

Урынһыҙ асыуланыу ғауға һәм фетнәләрҙең сәбәпсеһе булған кеүек, хәкиҡәт аяҡ аҫтына һалып тапалғанда, ғәҙелһеҙлек хөкөм һөргәндә нәфрәтләнмәү, йәғни урынлы ерҙә өнһеҙ ҡалыу ҙа шул уҡ һеҙөмтәгә алып килә. Был ике халәт тә иман һәм әхлаҡ йомшаҡлығын күрһәтеп тора.

❁

Аҡылды томаландырған, сабырлыҡты юйған асыу кешеләрҙе хаталандыра, сығанағы нәфес булған сиктән ашыу булып тора. Әммә дингә, иманға, әхлаҡҡа һәм рухиәткә ҡарата агрессия һәм ғәҙелһеҙлек ҡылынған саҡта, ғәмһеҙ, битараф ҡалыу асыуҙы баҫыу түгел. Киреһенсә, бындай ҡылыҡ – ҡурҡаҡлыҡ.

Кәрәк саҡта Аллаһ хаҡына асыуыңды баҫыу ҙа, нәфрәтеңде белдереү ҙә – Аллаһ ҡолоноң мөһим бурысы.

❁

Әгәр асыу нәфескә бәйле булһа, был – бәлә, иҫәрлектең бер төрө. Нәфескә бәйле асыу кешенең аҡылын ала һәм шайтан ҡулындағы уйынсыҡҡа әүерелдерә. Әммә әгәр кеше Аллаһ хаҡы өсөн асыуланһа, иманды яҡлап асыуланһа, был инде шайтанды ҡыйратыусы изгелек булып әүерелә.

Бер заман мөхтәрәм Ғәли (радыйаллаһу ғәнһү) Аллаһ хаҡы өсөн кәфер менән алыша һәм, уны ултерергә йыйынғанда, теге бының битенә төкөрә. Ул саҡта Ғәли (радыйаллаһу ғәнһү), был йәһәттән беҙгә гүзәл үрнәк күрһәтеп, ултереү уйынан баш тарта. Бындай киң күңеллелекте аңлай алмаған дошманы, алыш һәм үлем ҡурҡыныс хаҡында онотоп, ҡурҡып һәм хайран ҡалып һорау бирә: «Йә Ғәли! Һин бит мине ултерә ала инең, ниңә туҡтап ҡалдың? Нисек улай асыуҙан ҡапыл тыныс хәлгә ҡайттың? Һин бит йәшен кеүек инең, һәм ҡапыл һил һауа кеүек тынысландың. Ҡапыл булған бындай үҙгәрештең сәбәбе ниҙә? Һинең халәтең миңә йомаҡ».

Мөхтәрәм Ғәли (радыйаллаһу ғәнһү) шундай яуап бирә:

«Мин бары тик Аллаһ юлында көрәшәм, Уның дошмандарының башын тик Уның хаҡына ярам. Был эшкә мин нәфесемде ҡыҫтырмайым. Битемә төкөрөп, һин мине кәмһетергә, асыуландырырға теләнең. Әгәр шул мәл ҡыҙып китеп үлтерһәм – сәбәбе нәфесем арҡаһында булыр ине. Әммә мин мин-минлегемде ҡәнәғәтләндерер өсөн түгел, бары Аллаһ хаҡына алышам».

Шул ҡәҙәр изгелекте күреп, кәфер иман менән шәрәфләнә, уның дуҫына әүерелә.

❁

Хәҙистә әйтелә:

«Кем Аллаһ хаҡы өсөн һөйә, Аллаһ хаҡы өсөн нәфрәтләнә, Аллаһ хаҡы өсөн сарыф итә һәм [сарыф итеүҙән] тыйыла (йәғни, килемен Аллаһ разый булмаған ерҙәргә сарыф итеүҙән ҡаса), шул иман камиллығына ирешкән» (Тирмиҙи, Сыфату әл-ҡийәмәһ, 60).

❁

Ғабдуллаһ ибн Ғаббас (радыйаллаһу ғәнһү) әйткән:

«Нимәнелер һөйһәң, Аллаһ хаҡы өсөн һөй! Нимәнелер ҡалдырһаң, Аллаһ хаҡы өсөн ҡалдыр! Бел, шул рәүешле һин Аллаһ ризалығына ирешерһең...

Ҡыҙғанысҡа ҡаршы, хәҙер кешеләр фани донъя ниғмәттәренә күңел бағлай. Уларҙың мөхәббәте һәм нәфрәте шул мәнфәғәт өсөн…»

❁

Әгәр дуҫыбыҙҙың хәлен белергә баһаҡ, беҙ бүләккә ул һөйгән нәмәне алып барабыҙ. Мөхәббәттең төп билдәһе – һөйгәнең һөйгәнде һөйөү һәм һөйгәнең һөймәгәнде күрә алмау.

Беҙ Раббыбыҙ Аллаһ менән осрашыуға барыусы юлсылар. Ул йөрәктәре беҙ сәләмәт булыуын теләй. Беҙ иһә ниндәй йөрәк менән килербеҙ уға?

ТӘҠҮӘЛӘР МЕНӘН БЕРГӘ БУЛЫУ, ГОНАҺКӘРҘӘРҘӘН ҺАҠ БУЛЫУ

Гүзәл раузалар, сөмбөлдәр һәм ҡәнәферҙәр үҫкән баҡса өҫтөнән иҫкән ел хуш еҫтәр алып килә. Киреһенсә, сүплектәр һәм емтектәр өҫтөнән иҫкән ел кешеләрҙең тыны ҡыҫылырлыҡ һәм кәйефен төшөрөрлөк һаҫыҡ еҫтәр тарата.

Шулай уҡ салих заттарҙан һәм тәкүәләрҙән рухи хозурлыҡ һәм шатлыҡ таралһа, ғафилдарҙан һәм гонаһкәрҙәрҙән – ғәмһеҙлек һәм бошонҡолоҡ.

Аллаһ Илсеһе (салләллаһу ғәләйһи үә сәлләм) әйткән:

«Кеше дуҫының иманын ала. Шуға күрә кем менән дуҫ булыуығыҙға иғтибарлы булығыҙ!» (Тирмизи, Зуһд, 45).

Тимәк, мөьмин кем янында булыуын, кем менән дуҫ булыуын, кем яҡлы булыуын һәм кем менән бер сафта тороуын иман күҙлегенән сығып баһаларға тейеш.

❁

Кешене ғәҙәттә үҙе аралашҡан йәки дуҫ булған кешеләре тура юлға баҫтыра йәки аҙаштыра. Йәғни, әгәр бергә булғандары тәҡүә булһа, кеше рухи йәһәттән имен була, ә әгәр гонаһкәр булһа, бәләгә тарый.

❁

Әгәр кеше тәҡүәләр һәм салих заттар менән аралашһа, улар ярҙамында ул хәҡиҡәткә һәм яҡшылыҡҡа тартыла. Ә әгәр ул яман кешеләр менән аралашһа, ялғанға һәм золомға тартыла.

Инсан «кеше» тигән һүҙ ғәрәп телендә унс «дуҫлыҡ, танышлыҡ» һүҙе менән тамырҙаш. Икенсе һүҙ менән, дуҫлыҡ урынлаштырыу, тирә-йүндәгеләрҙең йоғонтоһона бирелеү кешене тәбиғәтенә һалынған. Шуға күрә аралашҡан, дуҫлашҡан кешеләр менән һаҡ булыу һәм ыңғай һәм кире йоғонтоларҙы айыра белеү лазым.

Гүзәл раузалар, сөмбөлдәр һәм ҡәнәферҙәр үҫкән баҡса өҫтөнән иҫкән ел хуш еҫтәр алып килә. Киреһенсә, сүплектәр һәм емтектәр өҫтөнән иҫкән ел кешеләрҙең тыны ҡыҫылырлыҡ һәм кәйефен төшөрөрлөк һаҫыҡ еҫтәр тарата.

Шулай уҡ салих заттарҙан һәм тәҡүәләрҙән рухи хозурлыҡ һәм шатлыҡ таралһа, ғафилдарҙан һәм гонаһкәрҙәрҙән – ғәмһеҙлек һәм бошонҡолоҡ.

❁

Аллаһ Илсеһе (салләллаһу ғәләйһи үә сәлләм) әйткән:

«Яңғыҙлыҡ яман дуҫтан яҡшыраҡ, тәҡүәле дуҫ яңғыҙлыҡтан яҡшыраҡ…» (Хаким, III, 343).

❁

«Кил, ҡәрҙәшем! Әлегә мөмкинлек булғанда, Аллаһ ризалығы өсөн изге ғәмәлдәр ҡылайыҡ, әйҙә, ялҡаулыҡты ҡалдырайыҡ, хеҙмәтебеҙҙә тырышлыҡ күрһәтәйек!» - тип өгөт-нәсихәт биргән тәҡүә дуҫ иң яҡшыһы.

«Кил, дуҫҡайым! Мөмкинлек булғанда, донъяның рәхәтен күреп ҡалайыҡ, күңел асайыҡ, был көндәрҙең ләззәтен татып ҡалайыҡ!» - тип ғәмһеҙлеккә, нәфесеңә эйәрергә саҡырған гонаһкәр дуҫың иң яманы.

❁

Аҙаштырыр өсөн, беҙгә йылмайып комплименттар әйткән һәм нәфесебеҙгә эйәреүҙе хуплаған асылда беҙҙең дуҫ түгел, ә беҙҙең мәңгелек донъяла ғазапҡа тарыуыбыҙҙы теләгән дошман.

Нәфесебеҙгә оҡшамаһа ла, беҙҙе тура юлға төшөрөргә тырышып киҫәткән – беҙҙең тоғро дуҫыбыҙ. Ул беҙгә хәҡиҡи бәхет, йәғни мәңгелек бәхет теләй.

❁

Аллаһ Илсеһе (салләллаһу ғәләйһи үә сәлләм) тәҡүәләр менән дуҫлыҡтың һәм гонаһкәрҙәрҙән йыраҡ булыуҙың әһәмиәте тураһында ниндәй гүзәл әйткән:

«Һис шикһеҙ, тәҡүәле иптәшеңде һәм яман иптәшеңде мисек һатҡан һәм тимерлек күреген өрҙөргән кеше менән сағыштырырға мөмкин. Мисек һатыусыға килгәндә, ул һиңә йә берәй тауарын бүләк итер, йәки һатыр, кәм тигәндә, һин унан килгән хуш еҫте тойорһоң. Күрек өрҙөрөүсегә килгәндә инде, ул йә кейемеңде яндырыр, һәм, кәм итгәндә, һин унан килгән яман еҫте тойорһоң» (Бохари, Буйу, 38).

❁

Тәҡүәләргә мөхәббәт һәм гонаһкәрҙәрҙән алыҫлашыу кешене рухи бәхеткә алып бара. Һәм киреһенсә, мөхәббәткә лайыҡ булмағандарҙы һөйөү һәм

тәҡүәлеләргә нәфрәтләнеү кешене бәхетһеҙ итә. Шулай булғас, кемде яратыу һәм кемде яратмау мәсьәләһендә кеше үтә лә һаҡ булырға тейеш.

❁

Һәр ҡош үҙе һымаҡтар менән осоп йөрөгән кеүек, һәр характер үҙенә оҡшаштар менән тыныслыҡ таба. Шул сәбәпле беҙ аралашҡан кешеләр менән рухи берлек һәм йөрәктәр берлеге матди берлек һәм тышҡы берлектән күпкә өҫтөн.

❁

Тәҡүәләр һәм Аллаһтың салих ҡолдары менән бергә булыу – рухи хазина. Киреһенсә, Аллаһ һөймәгән йәмғиәт менән бергә булыу, ялған инаныстар әсирлегендәге мосолман булмағандар һәм нәфесенең ҡолона әйләнгән ғәмһеҙҙәр менән бергә булыу – күңеленде ағыулаған рухи һәләкәт.

❁

Аят шундай бурыстар йөкмәтә:

«…Изгелек итеүҙә, яман эш ҡылыуҙан һаҡланыуҙа бер-берегеҙгә ярҙамлашығыҙ. Гонаһ ҡылыуҙа, дошманлыҡ эштәрендә бер-берегеҙгә ярҙамлашмағыҙ!» (әл-Мәәидә (Табын), 2).

Тимәк, яҡшылыҡ, изгелек ҡылыу өсөн йыйылыу, бер-береңә ярҙам итеү, игелекте арттырыусы өммәт булыу зарур булған кеүек, яманлыҡ нигеҙендә ойошоу һәм золомдо арттырыусы төркөм булыу ярамаған эш.

❁

Мөьмингә, иманын һәм әхлағын һаҡлау өсөн, тирә-йүненә иғтибарлы булыу лазым. Ғилем алыу, никахлашыу, һөнәр һайлау һымаҡ тормоштоң боролмалы мәлдәрендә был айырыуса мөһим. Балалары белем аласаҡ мәктәпте һайлағанда, иманлы әҙәм тәүге нәүбәттә уҡытыусының, класта уҡыусы балаларҙың рухи халәтенә иғтибар итергә тейеш.

❁

Йорт һатып алғанда, ике нәмәгә иғтибар итеү кәрәк: «Эргәлә мәсет бармы? Күршеләреңә тәҡүәле кешеләрме?».

Донъялыҡта кәрәк булған кеүек, баҡыйлыҡта ла быныңәһәмиәте ҙур:

«Әруахтарығыҙҙы тәҡүәләр араһында ерләгеҙ. Яман күршеләр тереләрҙе борсоған кеүек, был нәмәләр шулай үк үлеләргә лә ҡағыла» (Әбү Нуғайм, Хилйә, VI, 354).

Стамбулдағы мөхтәрәм Әбү Әйүб әл-Ансари һәм төрлө илдәрҙәге әүлиәләр ҡәберҙәре тирәһендә уларҙың күршеләре булырға теләгәндәрҙән зыяраттар барлыҡҡа килә.

❁

Ябай күҙ менән күреп булмаған альфа, бета, гамма, ультрафиолет ише нурланыштар булған кеүек, кешеләрҙең халәттәре лә бер-береһенә күсеү һәләтенә эйә. Йөрәктән беҙ күрмәгән, әммә башҡаларға йоғонто яһаған нурҙар тарала. Ыңғайҙарын беҙ - «мөбәрәк» һәм «рухи», ә киреһен – «ғафиллыҡ» һәм «боҙоҡ», тип атайбыҙ .

Тәҡүәләрҙән һәм әүлиәләрҙән мөбәрәк, рухи, ыңғай энергия тарала. Шул сәбәпле Раббыбыҙ Аллаһ әйтә:

«Эй, иман килтергәндәр! Аллаһ ҡаршыһында гонаһ ҡылыуҙан ҡурҡығыҙ һәм тура юлдағылар менән бергә булығыҙ!» (әт-Тәүбә, 119).

Киреһенсә, иман дошмандары һәм гонаһкәрҙәр менән бергә йөрөү бәләләр сәбәпсеһе була. Был турала аятта шулай әйтелә: **«...залимдар менән бер рәттән ултырма…»** (әл-Әнғәм (Мал-тыуар), 68).

❁

Кешеләр башҡаларға эйәреп ғәмәл ҡылырға әүәҫ. Был ыңғай нәмәләргә лә, кире нәмәләргә лә ҡағыла. Кеше эйәреү объектын рухи кимәленә ҡарап һайлай. Мәҫәлән, итәғәтле кеше итәғәтлелектең үрендә торғандарға оҡшарға тырыша, улар һымаҡ кейенә, үҙен улар һымаҡ тота.

Тәҡүәләр пәйғәмбәрҙәрҙән, әүлиәләрҙән һәм Аллаһты танып белгән ҡолдарҙан, ғарифтарҙан үрнәк ала. Ул уларҙың халәтенә, һүҙҙәренә, нисек ултырыуҙарына, баҫып тороуҙарына, әҙәбенә эйәрергә тырыша.

❁

Мөхтәрәм Әхмәд ибн Хәнбәл әйткән:

«Аллаһ ҡолоноң йөрәге боҙоҡлоҡтан арынһын, хозурлыҡҡа ирешһен өсөн, салих заттар янында булыуҙан да файҙалыһы юҡ. Икенсе яҡтан, Аллаһ ҡолоноң гонаһкәрҙәр янында булыуынан һәм уларҙың ғәмәлдәрен күҙәтеп тороуынан да яманы юҡ».

❁

Атомдар тарҡалғанда, ғәләмәт ҙур энергия бүленеп сығып, күҙгә күренмәгән, әммә һиҙеп булырлыҡ нурланыш, радиация таралған кеүек, Аллаһтың

тәҡүәле ҡолдары йәмғиәте лә йөрәккә иҫ киткес ыңғай энергия биреп, кешенең ихласлығын һәм тәҡүәлеген арттыра.

❁

Мөхәббәт һәм дуҫлыҡ йөрәктәрҙе берләштерә, һәм тора-бара улар бер-береһенә оҡшаш була башлай.

Тәҡүәлеккә тәүге аҙым – салих заттарҙы һөйөү һәм уларҙың йыйындарында булыу, уларҙың дуҫтары, яҡындары даирәһенә инеү. Бының тәбиғи һөҙөмтәһе тәҡүәлек буласаҡ, сөнки рауза баҡсаһында йөрөгәндәр үҙҙәре лә уларҙың хуш еҫенә тула.

❁

Хаҡ дуҫығыҙ – һеҙҙе нәфесегеҙ ҡорған тозаҡтарҙан аралаусы. Ул рухиәт һәм мәңгелек донъя именлеген матди һәм фани мәнфәғәттәрҙән өҫтөн ҡуя. Хатта ки нәфесеңә оҡшамаһа ла, тура юлға әйҙәп, һиңә нәсихәт биреүсе – ул һинең ысын дуҫың.

Мөхтәрәм Ғүмәр (радыйаллаһу ғәнһү) әйткән:

«Миңә иң һөйөклө кеше – минең хата-кәмселектәрем тураһында хәбәр итеүсе».

Әммә ләкин бындай дуҫтарса киҫәтеүҙәр икәүҙән-икәү булғанда, йөрәкте йәнләндерерҙәй тейешле һүҙҙәр табып, үпкәләтмәйенсә әйтелергә тейеш.

❁

Тәбиғиндәр быуынынан Билал ибн Сәғд (рахимәһуллаһ) әйткән: «Тәҡүәлегеңде арттырырға ярҙам иткән дуҫың осраған һайын һиңә алтын тотторған дуҫыңдан яҡшыраҡ».

❁

Аллаһ ризалығы өсөн һөйгән, Аллаһ ризалығы өсөн киҫәткән, Аллаһ ризалығы өсөн яҡлаған һәм ауыр мәлдә Аллаһ ризалығы өсөн ҡулын һуҙған хаҡ дуҫы булған кеше был донъялағы иң ҙур хазинаға эйә.

❁

Мөхтәрәм Әхмәд ибн Хәнбәл әйткән:

«Әгәр кеше тоғро дуҫынан мәхрүм ҡалһа, - был бөйөк юғалтыу».

❁

Мөхтәрәм Мәүләнә әйткән:

«(Тәкүәләр менән) дуҫлашығыҙ, каруан ни тиклем ҙурыраҡ булһа, юлбаҫарҙарҙың мөмкинлектәре лә шул тиклем тарая».

«Дуҫтарыңдың хәлен йышыраҡ бел, сөнки йөрөлмәгән юлды сәнскеләр һәм ҡыуаҡтар баҫа».

❁

Мөхтәрәм Йәғәфәр Садыҡ әйткән:

«Эштәреңә хаҡында тәкүәләр, әүлиәләр һәм салих заттар менән кәңәшләш!».

❁

Аллаһ юлында әүҙем булғандарҙы күреү, уларҙың иман һоҡланыуын һәм тәкүәлеген тойоу һәм шул рәүешле ғафиллыҡ йоҡонан уяныу – бөйөк ниғмәт. Был халәт, зарядкаһы бөткән ҡоролманы зарядкаға ҡуйыу ише, йөрәктә йәнләндереү һәм бәрәкәт алыу сараһы булып тора.

Шул сәбәпле рухи тәрбиәсе булған тәсауыфтағы иң төп методтарҙың береһе – билдәле бер ваҡыт үткән һайын, әленән-әле рухи вәғәздәргә йөрөү. Салих заттар менән шундай осрашыуҙар улар янында булыу хәжәтенең иң әҙ дәрәжәһе.

❁

Тән матди ризыҡҡа мохтаж булған кеүек, рухиәтебеҙ ҙә рухи ризыҡҡа мохтаж. Һәр ғибәҙәт ул күңел өсөн витамин кеүек. Тәсауыфтағы иң мөһим алым булған әңгәмә йөрәк фәйезен арттыра торған рухи табын.

❁

Бәрәкәт һәм илһам тулы һәр әңгәмә – ул Аллаһ Илсеһе (салләллаһу ғәләйһи үә сәлләм) йыйындарынан күскән, сәғәҙәт быуатынан килеп еткән мәрхәмәт һәм шатлыҡ. Бер шәмде икенсе шәм менән тоҡандырған кеүек инде был… Шәмдәрҙе тоҡандырған һәм тирә-йүнде яҡтыртҡан ялҡын шул уҡ. Әгәр мөьмин һуңғы шәмдән яҡтылыҡ ала икән, был тәүге яҡтылыҡ сығанағына мөрәжәғәт итеү менән бер.

❁

Аллаһ Илсеһе (салләллаһу ғәләйһи үә сәлләм) сәхәбәләрен әңгәмәләр ярҙамында тәрбиәләй. Сәхәбәләр әңгәмәләр бәрәкәтендә камиллыҡҡа ирешә, тиергә була. Ғәрәп телендә «сәхәбә» һәм «сөхбәт» тамырҙаш һүҙҙәр. Был йәһәттән сәғәҙәт ғасыры заманынан килгән әңгәмәләр бәрәкәткә һәм рухиәткә эйә булыу сараһы, Мүәҡкәдә Сөннәһе булып тора, йәғни Мөхәммәд пәйғәм-

бәрҙең (салләллаһу ғәләйһи үә сәлләм) һәр ваҡыт (бик һирәк осраҡтарҙа ғына ҡалдырған) үтәгән Сөннәт ғәмәле.

❁

Сәхәбәләр, Пәйғәмбәребеҙҙең (салләллаһу ғәләйһи үә сәлләм) мөбәрәк ауыҙынан сыҡҡан хәҙистәрҙе тыңлап, уның йөрәгенән үҙ насиптарын алып, рухи камиллыҡҡа ирешә, сөнки мөхәббәт бәрәкәтендә, әйтерһең дә, йөрәктәр араһында каналдар барлыҡҡа килә. Һөйөү менән тулған йөрәктәр халәттәре, фәйезе, илһамдары менән бүлешә.

Әйтергә кәрәк, рухи әңгәмәләрҙең маҡсаты ла ана шул. Өгөт-нәсихәт – хәләтең менән бүлешеү. Кеше китапты өйҙә лә уҡый ала, әммә был вәғәздәрҙәге һымаҡ бәрәкәт һәм рухиәт менән бүлешеү мөмкинлеген бирмәй. Икенсе төрлө әйтһәк, әңгәмә барышында йөрәктәр араһында энергия барлыҡҡа килә. Һәм маҡсат – ана шул энергиянан файҙа ала белеү.

❁

Пәйғәмбәребеҙҙең (салләллаһу ғәләйһи үә сәлләм) сөхбәттәрен сәхәбәләр, ғибәҙәт ҡылғандай, йотлоғоп, бирелеп тыңлай. Улар шундай халәтә була: әйтерһең дә, баштарына ҡоштар ҡунған да һәм, әҙ генә хәрәкәтләнһәң дә, улар осоп китер кеүек. Сәхәбәләр шул рәүешле уның хис-тойғо, халәттәренән үҙ насибын алыр булған.

Шуға күрә хәҡиҡи сөхбәт – сығыш яһаусы китап уҡыған, вәғәз һөйләгән һәм нәсихәттәр биргән, ә тыңлаусылар иғтибар менән уны тыңлаған осрашыу ғына түгел. Сөхбәттәрҙең хәҡиҡи файҙаһы китап уҡыуҙан бигерәк халәттәрҙең йөрәктән йөрәккә күсеүендә.

❁

Сөхбәт – рухи һауығыу һәм рухи алыш-бireш йыйыны. Мөхтәрәм Юныс Әмре әйткәнсә: «Әүлиәләр сөхбәте рухи хикмәтте арттыра...», рухи әңгәмәләр – ниндәйҙер мәғлүмәтте еткереү түгел, ә йөрәктәге ихласлыҡ нурын, тәҡүәлектә һәм мөхәббәттә, рухи ғилемде арттырыусы халәт... Шуға күрә рухи остаҙдар әйткән: «Беҙҙең юл – өгөт-нәсихәт юлы».

❁

Лоҡман Хаким улына шундай кәңәш бирә:

«Улыҡайым! Ғалимдар һәм тәҡүәләр менән бергә бул һәм уларҙың вәғәздәренән айырылма! Аллаһ бит, ерҙе ямғыр менән йәнләндергән кеүек, йөрәктәрҙе лә хикмәт нуры менән йәнләндерә» (Әхмәд ибн Ханбәл, Китабуз-зүһд, хәҙис № 552).

Мөхтәрәм Әбү Бәкер (радыйаллаһу ғәнһү) әйткән:

«Хәкиҡәтте танып белгән ғалимдарҙың ҡоло бул!».

❁

Йософ Хас Хаджиб әйтә:

«Ололарҙы хөрмәт ит, был йәһәттән йомшаҡлыҡ күрһәтмә. Шул рәүешле һин күтәрелерһең, һәм һиңә уларҙың да бәхете тәтер».

❁

Мөхтәрәм Мәүләнә әйткән:

«Бысаҡ икенсе бер бысаҡһыҙ үҙенә һап юна аламы? Бар ҙа яраларыңды хирургҡа күрһәт. Һин үҙең генә шифа таба алмаясаҡһың...»

«Донъяуи хис һәм аҡыл именлеген табиптан талап ит, ә баҡыйлыҡта юғары күтәрә торған илаһи хис-тойғоларҙы камил остаҙдан талап ит!»

❁

Хәҙискә ярашлы булғанса, «мөьмин – мөьминдең көҙгөһө»[18]. Камил заттар беҙҙең өсөн пак һәм саф көҙгөгә әйләнә, һәм беҙҙең йәнебеҙ унда үҙенең асылын һәм хәкиҡи тәбиғәтен күрә. Ундай көҙгөнән мәхрүм ҡалғандар, бәхетһеҙлектәрен бәхеткә һанағанда, үҙҙәренең хаталарын аңлай һәм ғафиллыҡтан уяна алмай.

❁

Мөхтәрәм Мәүләнә әйткән: «Илаһи мөхәббәт менән тулмаған кешенең ниндәй бахыр икәнен бел. Ул хайуандан да түбән булыуы ихтимал, сөнки мәмерйәне төйәк иткән кешеләрҙең хатта эте лә, мөхәббәт кешеләрен табып, юғары рухиәт баҫҡысына күтәрелә...»

❁

Йөрәгеңде масивтан, йәғни Аллаһтан айырған нәмәләрҙән аралау, күркәм тәьҫирҙәргә лайыҡ булыу өсөн, рухиәтенән бәрәкәт алырға мөмкин булған, йөрәге изгелек һәм тәҡүәлек тулы заттар менән аралашыу мөһим.

Беҙҙе камиллыҡҡа алып барһындар өсөн, тәҡүәле, Аллаһты танып белгән ғалимдар менән дуҫлыҡты нығытыу, уларға яҡын булыу лазым. Юғиһә, тура юлға нәсихәт алыу урынына, аҙашып ҡуйыуыбыҙ ихтимал.

❁

18. Бохари, әл-Әҙәбү әл-муфрад, №238; Әбү Дауыд, Әҙәп, 49/4918.

Аллаһ Тәғәлә гонаһтар ҡылынған урындарға рәхмәт күҙе менән баҡмай. Сәми Әфәнде (рәхимәһуллаһ) хатта хәрам һәм мәкруһ ғәмәлдәр ҡылынған урамдарҙан үтеүҙән дә тыйылырға саҡырған.

Ҡәғбә, Рауҙа-и Мотаһһара, әл-Аҡса мәсете һәм тәҡүәләр, салих заттар йөрөгән башҡа мәсеттәр һәм урындар иһә илаһи рәхмәт һәм мәрхәмәт төшкән ерҙәр. Ул урындарҙың бәрәкәтенән һәм рухиәтенән файҙа алырға тырышыу зарур.

❁

Аллаһ Сүбхәнәһү үә Тәғәлә беҙгә тәҡүәле, салих заттар менән бергә булырға һәм гонаһкәрҙәр һәм кәферҙәр менән дуҫлыҡтан һаҡланырға саҡыра, сөнки рухи хәләттәрҙең күсеү һәләте бар. Был урындарға ла ҡағыла.

Аллаһ Илсеһе (салләллаһу ғәләйһи үә сәлләм) һәм уның сәхәбәләре бер заман сәфәр ваҡытында ҫәмүд ҡәбиләһе һәләк ителгән ерҙә туҡтай. Сәхәбәләр үҙ ихтыяждары өсөн шундағы ҡойоларҙан һыу ала, ҡамыр баҫа. Аллаһ Илсеһе (салләллаһу ғәләйһи үә сәлләм) ул һыуҙы түгергә, ә ҡамырҙы дөйәләргә ашатырға ҡуша. Аҙаҡ ул һыуҙы Салих пәйғәмбәр (ғәләйһис-сәләм) дөйәһе эскән ҡойонан ғына алырға бойора (ҡар. Бохари, Әнбиә, 17; Мөслим, Зуһд, 40).

Күпме быуаттар үтһә лә, бөгөн дә илаһи асыу сағылыш тапҡан ул ерҙәрҙә булған кешеләрҙең был ҡойоларҙан тәһәрәт өсөн һыу алмауы ниндәй ғибрәтле.

Тимәк, Аллаһтың асыуына тарымаҫ өсөн, харам ғәмәлдәр ҡылынған урындарҙан йырағыраҡ булыу хәйерле.

❁

Был һынау донъяһында һәр нәмәнең үҙ баҙары бар Бәхет эҙләгән Аллаһ ҡолона түбәнлек баҙарында йөрөүҙән һәм нәфес, шайтан витриналарына бағыуҙан тайшаныу лазым.

❁

Мөьмин яман кешеләр менән дуҫ булыуҙан һәм Аллаһ ҡанундары сигенә сыҡҡан ерҙәрҙә булыуҙан үҙен араларға тейеш, сөнки ундағы яманлыҡтар уға күсмәгән хәлдә лә, кешеләр уға шикләнеп ҡарауы ихтимал.

❁

Мөхтәрәм Раббани имам кешенең рухиәте өсөн ғафил һәм гонаһкәр кешеләр менән дуҫ һәм яҡын булыуҙың зыянын шундай миҫал менән раҫлай: «Ҡомарлы уйындар уйнаусылар янында ултырыусы, бәлки, үҙе уйнамайҙыр. Быларға минең ҡыҫылышым юҡ, тип иҫәпләүе лә мөмкин. Әммә уйынсылар янында ултырһа, уларҙың кире йоғонтоһо тәьҫирендә тора-бара ҡомарлы уй-

ындарҙа насарлыҡ күрмәй башлауы ихтимал. Ә был инде рухиәтеңдең ҡыйралыуы тигән һүҙ».

❁

Аллаһ Тәғәлә аятта әйтә: **«Зинаға яҡын бармағыҙ!..»** (әл-Исра (Төнгө сәфәр), 32). Әгәр ҙә ки кеше уға яҡынайһа, гонаһҡа батыуы бик ихтимал, сөнки уның инсафлығына зыян килә.

Билдәле инде, әгәр кеше текә яр буйында йөрөһә, иртәме-һуңмы тайып тәгәрәйәсәк һәм аҫҡа осасаҡ. Был йәһәттән гонаһкәрҙәргә, ямандарға яҡын булыу, улар менән дуҫлыҡ кешеләрҙе рухи йәһәттән тайып китергә мәжбүр иткән төп сәбәптәрҙең береһе булып тора.

❁

Мөхтәрәм Йәғәфәр Садиҡ әйткән:

«Атайым мине өс нәмәгә өйрәтте. Ул миңә әйтте:

– Улым! Ғафилдар һәм гонаһкәрҙәр менән дуҫ булғандар рухи йәһәттән имен булмаясаҡ.

– Гонаһтар ҡылынған ерҙә булған һәр кешегә гонаһтар ҡыла тигән шик төшәсәк.

– Теленә хужа булмаған әҙәм быға үкенәсәк!».

Муса Әфәнде (рәхимәһуллаһ) шундай кәңәш биргән:

«Аҡыллы әҙәм әхлағы һәм иманы йомшаҡ кешеләрҙән үҙен һәм яҡындарын араларға тейеш. Уға уларҙан мөмкин тиклем алыҫыраҡ булырға ынтылыу лазым, сөнки кешегә дуҫтың халәте һәм холҡо еңел күсә».

❁

Мөхтәрәм Шафиғи имам әйткән:

«Кеше ни тиклем юғары әхлаҡлы булып күренмәһен, әгәр ул айыҡ аҡыл менән әхлаҡһыҙ һәм яман кешеләрҙе дуҫ итеп ала икән, уларҙың яманлыҡтарын бүлешеүсе булып иҫәпләнәсәк».

❁

Мөхтәрәм Ғабдулхалиҡ Гуждувани әйткән:

«Арыҫландан ҡасҡан кеүек, ғафил кешеләр менән аралашыуҙан ҡасығыҙ!».

❁

Ғибәҙәт һәм хеҙмәткә йүнәлгән тырышлығыбыҙ бушҡа булмаһын өсөн, нәфес һәм шайтан тоҙаҡтарынан ҡасыу зарур. Шулай уҡ, мәңгелек тормошобоҙҙо ғазапҡа әйләндермәҫ өсөн, Аллаһ Һәм Уның Илсеһе (салләллаһу ғәләйһи үә сәлләм) дошмандарына һәм уларҙың нәфес әүәҫлектәрен ҡәнәғәтләндереүгә нигеҙләнгән йәшәү рәүешенә эйәреүҙән бөтә көсөбөҙ менән ҡасыу лазым.

❁

Ислам дошмандарына яҡынлыҡ һәм фани донъяла юғары урын биләү өсөн уларҙы яҡлау Аллаһ алдында кешенең бәҫен төшөрә. Был турала аятта әйтелә:

«…Гәрсә, ысын өҫтөнлөк бары тик Аллаһта, Пәйғәмбәрендә, мөьминдәрҙә булыр. Ләкин монафиҡтар быны белмәй» (әл-Мүнәфиҡун (Ике йөҙлөләр), 8).

❁

Иманлы була тороп, фани әҙәмдәр алдында танылыу, уларҙың яҡшы мөнәсәбәте һәм хуплауына лайыҡ булыу йәки уларҙың ситкә тибәреүенән үҙеңде аралау маҡсатында илаһи принциптарға кәмселек килтереү, ташлама яһау һис тә ярамаған эш түгел.

Аятта әйтелә:

«Үҙенә абруй-дәрәжә яуларға теләгән кеше белһен: абруй һәм дәрәжә Аллаһ хозурында…» (Фәтыр (Яралтыусы), 10).

❁

Шәйех Сәғди әйткән:

«Әгәр һин рәхмәтле булып, түбән (йәнле) кешенән ниҙер һорайһың икән, бәлки, һин аҡса янсығыңды тултырырһың, әммә рухиәтең зыян күрер».

❁

Камил иман эйәләре золом ҡылыусыларҙың, гонаһкәрҙәрҙең, кәферҙәрҙең йәшәү рәүеше менән бер ниндәй ҙә уртаҡлыҡ булыуын теләмәй генә түгел, хатта игелекле хис-тойғоларын да ҡабул итмәй. Кеше мәрхәмәтлегә ихтирам күрһәтә, уның менән һоҡлана, яҡшылыҡ ҡылған кешене яҡын күрә башлай.

Шуға күрә иман эйәһенең ниндәйҙер мохтажлығы бар икән, ул тәҡүәләргә мөрәжәғәт итергә һәм кемгәлер мохтаж булыуҙан Аллаһҡа һыйынырға тейеш.

❁

Ислам индивидуализмды түгел, йәмғиәтләштереүҙе хуплай. Ул кешеләр менән яҡшы мөнәсәбәт урынлаштырырға нәсихәт бирә. Әммә бында ҡайһы бер сикләүҙәр бар. Кешеләр менән яҡшы мөнәсәбәт булдырам тип, мосолман

Аллаһ Тәғәлә ҡанундарын боҙа алмай. Мөьмин белә: Аллаһтың мәхлүктәренә буйһоноп, Раббыңа итәғәтһеҙлек күрһәтергә асла ярамай!

❁

Мөхтәрәм Шафиғи имам әйткән:

«Һин бөтә кешегә лә ярай алмайһың. Аллаһ менән мөнәсәбәттәреңдә төҙәтергә тырыш! Ә бынан һуң ғафилдарға иғтибар итмә!».

❁

Беҙҙең заманда халыҡ өйөрө артынан эйәреү сиренән ҡотолоу бигерәк тә мөһим. Шуны онотмаҫҡа тейешбеҙ: мосолман булараҡ критерийҙарыбыҙ – йәмғиәттә нығынған инаныстар һәм ғәҙәттәр түгел, ә Аллаһтың әмер-тыйыуҙары.

Әлбиттә, йәмғиәттәге ислам рөхсәт иткән ғөрөф-ғәҙәттәргә, традицияларға эйәрергә мөмкин. Әммә йәмғиәттәге исламға ҡаршы килгән нәмәләргә таянырға һәм: «Бының ниндәй насарлығы бар, бөтәһе лә шулай эшләй!» - тип, ғафилдар һүҙен ҡабатларға ярамай. Аллаһ риза булмаған нәмәләргә лояль ҡараш кешене тура юлдан сығара, аҙаштыра.

❁

Йөрәгеңдә Аллаһ һәм Уның Илсеһе (саллəллаһу ғələйһи үə сəллəм) дошмандарын хуплауҙан һәм уларға һоҡланыуҙан, уларға хатта бәләкәй генә илтифатлыҡ күрһәтеүҙән дә аралау лазым. Бындай ғәмәлдәр уларҙың абруйын күтәрә, тимәк Аллаһтың асыуына тарыуға сәбәпсе була.

❁

Хәҙистә әйтелә:

«Монафиҡты «әфәнде» тип атамағыҙ, әгәр һеҙ уны әфәнде тип тип иҫәпләгәһегеҙ, һеҙ Ҡөҙрәтле һәм Бөйөк Раббығыҙҙың асыуына тарыясаҡһығыҙ» (Әбү Дауыд, Әҙәп, 83; Әхмәд ибн Ханбал, V, 346).

❁

Иман дошманы төҙөгән диуар менән һоҡланыу ҙа йөрәккә кире йоғонто яһаясаҡ, сөнки әгәр кешегә шундай дошмандың ғәмәле йәки эше оҡшай икән, был тегенең баһаһын арттыра һәм Аллаһтың асыуына сәбәпсе була.

❁

Мосолман һәр саҡ һәм һәр ҡайҙа ислам әһеле вәкиленең бәҫе, шәхесе һәм холҡо юғары булыуын күрһәтергә тейеш. Беҙ намаҙҙың һәр рәҡәғәтендә уҡыған «әл-Фәтиха (Асыусы)» сүрәһенең һуңғы аяттарында әйтелә:

صِرَاطَ الَّذِينَ أَنعَمتَ عَلَيهِمْ
غَيرِ المَغضُوبِ عَلَيهِمْ وَلاَ الضَّالِّينَ

«Беҙҙе тура юлға – рәхмәтеңә-ниғмәттәреңә ирешкәндәр юлына күндер. Юлдан яҙғандар һәм нәфрәтеңә дусар булғандар юлына төшөрмә!» (әл-Фәтиха, 7).

Был доғаны ҡылғанда, беҙ мосолман булмағандар юлына төшөүҙән, халәтебеҙ уларҙыҡына оҡшауҙан Аллаһҡа һыйынабыҙ.

Аллаһ Сүбхәнәһү үә Тәғәлә беҙҙең аҙашҡандарҙан йыраҡ булыуыбыҙҙы, уларҙың йолалаларына эйәрмәүебеҙҙе, уларға оҡшап кейенмәүебеҙҙе һәм ислам вәкиленең шәхесен, холҡон лайыҡлы итеп күрһәтеүебеҙҙе теләй. Мосолман булмағандарға оҡшамау – был да иманлылыҡ билдәһе.

❁

Роже Гароди, Франция Коммунистар фирҡәһенең элекке сәркәтибе, ислам-ды ҡабул иткәндән һуң, Стамбулға килә. Бында ул Йондоҙ һарайында сығыш яһай. Ул әйткән һүҙҙәр тере хәҡиҡәт:

«Көнбайыш үҙе сирле. Һеҙ хәҡиҡәткә таянаһығыҙ, тимәк һеҙ асылда һау-сәләмәт. Ҡыҙғанысҡа ҡаршы, үҙегеҙҙең сәләмәт булыуығыҙҙы аңламайынса, һеҙ Көнбайышҡа эйәрергә тырышаһығыҙ.

Йәнә, ҡыҙғанысҡа ҡаршы, Әғзам имам кеүек, донъя кимәлендәге хоҡуҡ белгесен тейешенсә баһаламайһығыҙ. Ҡыҙғанысҡа ҡаршы, миңә мосолмандарға уның даһилығын аңлатырға тура килә. Әммә ләкин мин үҙем яңы ғына мосолман булдым…»

❁

Көнбайыш донъяһы, матди йәһәттән юғары булһа ла, рухи көрсөктән ҡотола алманы. Зина, эскелек, наркомания, үҙ-үҙеңә ҡул һалыуҙарҙың бығаса кешелек тарихында күҙәтелмәгән кимәлгә етеүе - рухи зәғифлектең асыҡ миҫалы. Кешеләрҙең теләһә ниндәй матди ихтыяждары үтәлә алһа ла, рухи аслыҡ әхлаҡи һәм гуманистик ҡиммәттәрҙе түбәнәйтә һәм материалистик донъя, үҙен-үҙе сағып үлтергән саян шикелле, һәләкәткә табан бара.

Шул сәбәпле иманлы мосолман йәштәренең рухи көрсөктәге Көнбайыштың матди именлегенә алданыуы һәм уларҙың йәшәү рәүешенә эйәреүе үтә лә хәүефле. Был һау кешенең сирлегә оҡшарға, уның кеүек булырға тырышыуы кеүек.

❁

Техастың вице-губернаторы белдереүенсә, таж вирусы эпидемияһы шарттарында илдең иҡтисадын һаҡлау өсөн, етмеште үткән хәүеф төркөмөндәге һәр кем һаулығын үҙалдына ҡайғыртырға тейеш…

Яңылыҡтарҙа, Францияның интенсив терапия бүлектәрендә урын булмауға һылтанып, оло йәштәгеләрҙе өйҙәренә таратыуҙары хаҡында хәбәр иттеләр…

Испанияның ҡарттар йорттарында таж вирусынан үлергә ҡалдырылған оло йәштәгеләрҙең үле кәүҙәләре табылған…

Үҙен үҫтергән ҡартайған ата-әсәһен кеше нисек итеп ҡайҙалыр оҙата ала? Был ниндәй кешелеклелек, был ниндәй намыҫ, был ниндәй цивилизация?!

Был алтын ялатылған битлектәр артына йәшенгән, үҙ ҡөҙрәтен ҡоралдан, колониализмдан һәм тупаҫ көстән алған Көнбайыштың ысын йөҙө. Ул гуманитар көрсөк шарттарында асылды! Мәрхәмәттең һәм шәфҡәтлелектең һуңғы үҫентеләре сереп ятҡан цивилизация харабалары был!..

❁

Хәҡиҡи цивилизация – ислам, мәрхәмәт дине. Ислам цивилизацияһы – тәүге нәүбәттә мәрхәмәт цивилизацияһы.

Ислам ата-әсәне тыңламауҙы бөйөк гонаһ, тип иҫәпләй. Улар ҡартайғас, мәрхәмәтле булырға, яҡшы һүҙҙәр әйтергә, хәстәрлек күрергә, ризаһыҙлыҡ белдермәҫкә, «уф» тип тә әйтмәҫкә бойора. Хәҡиҡи цивилизация һәм кешелеклелек бына шул була. Цивилизацияның хәҡиҡи үлсәме – бөтә барлыҡтың, тәүге нәүбәттә кешеләрҙең ҡәҙерен белеү, сөнки улар һәммәһе – Аллаһтың яратылмыштары.

Шулай итеп:

– Хәҡиҡи цивилизация – аҡса янсығы байлығы түгел, намыҫ байлығы.

– Хәҡиҡи цивилизацияла донъяны юҡ итергә һәләтле ҡорал түгел, ә рауза энәләре бар, йәғни нәфесте әсир итерлек рухи ҡиммәттәр.

– Хәҡиҡи цивилизация – нефть тамсыһы ҡан тамсыһынан ҡиммәт булған аяуһыҙ принциптар түгел, ә бер кешенең ғүмерен ҡотҡарыу бөтә кешене ҡотҡарыуға тиң булған изгелек.

❁

Иң тәүҙә Мөхәррәм айының 10-сы көнөндә (Ғәшүрә көнө) ураҙа тотоу фарыз була. Ә инде Рамаҙан айында ураҙа тотоу фарыз ҡылынғас, Ғәшүрә көнө ураҙаһы Сөннәткә әйләнә, әммә барыбер Рамаҙан ураҙаһынан ҡала иң

шәрәфлеһе иҫәпләнә. Тик был көндә йәһүдтәр ҙә ураҙа тота. Шул сәбәпле хәҙистә әйтелә:

«Ғәшүрә көнөндә ураҙа тотоғоҙ. Әммә йәһүдтәрҙән айырмалы рәүештә унан алдағы һәм унан һуңғы көндә лә ураҙа тотоғоҙ!» (Әхмәд, I, 241; Баззар, № 1052; Хайсами, III, 188).

Мосолман булмағандарға оҡшамау – ислам шәхесен һәм дәрәжәһен һаҡлауҙың мөһим шарты. Пәйғәмбәребеҙ (салләллаһу ғәләйһи үә сәлләм) хатта ғибәҙәттә лә мосолман булмағандарға оҡшауҙы тыйған.

❁

Ислам - берҙән-бер хаҡ дин - камил. Камил үҙенән түбән булғандарға мохтаж түгел. Йәғни исламдың кешеләр барлыҡҡа килтергән көсәйтеүҙәргә, системаларға йәки боҙоҡ диндәргә ихтыяжы юҡ. Был йәһәттән, хаҡ диндә була тороп, ялған диндәргә мөрәжәғәт итеү йөрәктәге иман йомшаҡлығынан килә.

Һәр мосолман тормошоноң бөтә өлкәләрендә ислам шәхесен, әхлағын һәм дәрәжәһен һаҡлау һәм мосолман булмағандарҙың йола-ғәҙәттәренән алыҫ булыу өсөн яуаплы.

❁

Хәҙистә әйтелә:

«Кем бер халыҡҡа оҡшарға тырышһа, ул шуларҙан» (Әбү Дауыд, Либас, 4/4031).

Христиандарҙа изге тип иҫәпләнгән Яңы йылды байрам итеү ислам әхлағына ҡаршы килә, сөнки динебеҙ камил. Ә камил булғанға иҫке һәм боҙоҡ диндән нимәлер алыуҙың хәжәте юҡ.

Ғөмүмән, бер генә изге көндө лә нәфес әүәҫлектәренә нигеҙләнгән күңел асыуҙарға, харамға һәм шайтани хаттин ашыуҙарға бирелеп байрам итергә ярамай. Әйтеп үтелгәндәр үҙҙәре генә лә Яңы йылды билдәләүҙең ниндәй ҙур аҙашыу икәнлеген ап-асыҡ күрһәтеп тора.

❁

Григориан календарының башы булһынмы, мосолман календарының башы булһынмы, мөьмин, үткән йылға йомғаҡ яһап, тәүбә ҡылырға һәм гонаһ-хаталарын ғәфү итеүҙе һорап ғәфү үтенергә, ҡалған ғүмере рухи йәһәттән элеккеһенә ҡарағанда яҡшыраҡ булһын өсөн тырышлыҡ һалырға тейеш.

Онотмайыҡ, көн һәм төндө Бар ҡылыусы, ай һәм йылдарҙы үҙгәртеп тороусы – ул беҙҙең Раббыбыҙ. Ҡиәмәт көнөндә беҙгә бүләк итеп бирелгән бөтә

ниғмәттәр өсөн Ул беҙҙе яуап аласаҡ. Был ауыр көндә хисап биреү еңелерәк булһын өсөн, бөгөн үк үҙ-үҙебеҙҙән хисаплама алыу һәм, тормошобоҙҙо иман юлына бороп, изге ғәмәлдәр ҡылыу мөһим.

Мосолманға хисапламаға бағышларға тейешле ҡиммәтле ваҡытын мосолман булмағандарҙың ислам ҡиммәттәре менән тап килмәгән йолаларына, әйтәйек, шыршы тирәләй ғәмһеҙ күңел асыуҙарына сарыф итергә ярамай. Әгәр ҙә ки бындай кәмселеге булған ҡәрҙәштәребеҙҙе беләбеҙ икән, уларҙы йомшаҡ һәм әҙәпле итеп киҫәтеү зарур.

❁

Мосолмандарҙың мосолман булмағандарҙың ғәҙәтенә ингән «Яңы йылды байрам итеү» тип аталған лотерея билеттарын һатып алыуы үтә лә ҡыҙғаныс. Лотерея һәм еңеүсе осраҡлы рәүештә һайланған шуға оҡшаш уйындар ҡомарлы уйындарға инә. Был рухи тормошҡа ябырылған «ағыу». Аллаһ ҡомарлы уйындарҙы рөхсәт итмәй. Улар тыныслыҡ та, бәхет тә алып килмәгән бәлә, бәхетһеҙлек, һәм тыштан еңеүсе булып күренгәне лә асылда еңелеүсе.

Аятта әйтелә:

«Эй, мосолмандар! Хәмер эсеү, аҙғын уйындар уйнау, һындарға баш эйеү, фал астырыу, ырымланған уҡтар менән шыбаға һалыу - шайтан ғәмәлдәрелер, шаҡшылыҡтыр, уларҙан йыраҡ тороғоҙ – бәхеткә ирешерһегеҙ» (әл-Мәәидә (Табын), 90).

❁

Хаҡ иман һөйөүгә лайыҡ булғанға – һөйөү, нәфрәткә лайыҡ булғанға нәфрәт талап итә. Пәйғәмбәребеҙ (салләллаһу ғәләйһи үә сәлләм) менән бергә булған иман эйәләренең сифаттары һанап кителгән «Фәтех» сүрәһенең һуңғы аятында әйтелә: **«кәферҙәргә ҡаршы ҡаты торалар, үҙ араларында мәрхәмәтле ғәмәлдә»** (әл-Фәтех (Еңеү), 29).

Тимәк, иманлылар мосолман булмағандарҙың хөрәфәттәрен үҙләштерергә лә, уларҙың ғөрөф-ғәҙәттәре менән ҡыҙыҡһынырға ла тейеш түгел.

❁

Өс көнлөк фани донъяла ялған ҡиммәттәргә таянып көн иткәндәрҙең имен, зиннәтле тормошон күреп, уларҙың ғөрөф-ғәҙәттәренә, йәшәү рәүешенә, модаһына эйәрергә ынтылыу, үҙ асылыңа, үҙ динеңә хилафлыҡ килтереү – бөйөк аҙашыу.

Әгәр мосолман мосолман булмағандар кеүек йәшәһә йәки мосолман булмаған мосолман кеүек йәшәһә, был бәхет килтермәй. Сәғәҙәт ғасырындағы

шикелле, Аллаһҡа бөйөк мөхәббәт менән, иман һоҡланыуы менән йәшәлгән ғүмер генә кешегә файҙа бирә.

❁

Мосолман булмағандарға һәм гонаһкәрҙәргә эйәреү сире, уларҙың нәфес әүәҫлектәренә нигеҙләнгән тормошона оҡшатып көн итергә тырышыу иманыбыҙға янаған факторҙарҙың береһе. Йыш ҡына иман нигеҙе ҡаҡшауы, әхлаҡи түбән тәгәрәү шунан башлана. Тора-бара былар ғәҙәткә инеп китә һәм характерҙы ла үҙгәртә. Тышҡы оҡшашлыҡ уй-фекер оҡшашлығына килтерә, ахыр килеп, рухи халәттәрҙә лә оҡшашлыҡ барлыҡҡа килә. Рухи ҡыйралыш ана шулай тамамлана.

❁

Әлиә Иззетбегович ниндәй гүзәл итеп әйткән: «Һуғышта еңелеү яу яланында еңелеү түгел, ә дошманыңа оҡшатырға тырышыу».

Ҡыҙғанысҡа ҡаршы, бөгөн ислам донъяһы тормоштоң төрлө өлкәләрендә мосолман булмағандарға оҡшарға тырышыуы, үҙ асылынан, характерынан ситләшеүе өсөн ҙур хаҡ түләй.

❁

Көн итмешебеҙгә бағайыҡ һәм фекерләп ҡарайыҡ: бөгөн беҙ һәм беҙҙең быуын кемгә оҡшаған?

– Тыуған-тыумасабыҙ, күршеләребеҙ, дуҫтарыбыҙ менән мөнәсәбәтебеҙ ата-бабаларыбыҙҙыҡына оҡшағанмы? Әллә яһилдарҙыҡына (наҙандарҙыҡына) оҡшағанмы?

– Урамыбыҙ, ауыл-ҡалаларыбыҙ, баҙарҙарыбыҙ ата-олатайҙарыбыҙҙыҡына оҡшағанмы? Әллә улар яһилдарҙың урамдарына, ауыл-ҡалаларына, баҙарҙарына оҡшағанмы?

❁

Онотмайыҡ, хәҙерге заман йәшәү рәүеше ислам аҡидаһына әһәмиәт бирмәгәндәр тарафынан урынлаштырылған. Беҙ, мосолмандар, быларҙы динебеҙҙең юғары принциптарына нигеҙләнеп тергеҙергә тейеш...

ХАРАМДАН ҺАҠЛАНЫУ

Ризыҡтың һәр бер киҫәгендә үткән юлының рухи эҙе ҡала. Ул хәләл юл менән эшләп табылғанмы, әллә харам юл менән килгәнме? Аллаһ ҡолдарының береһенең уға хоҡуғы юҡмы? Мираҫ алырға тейешле берәүҙең йәки зәкәт рәүешендә алырға тейешле берәй фәкирҙең уға хоҡуғы юҡмы? Ул ризыҡты әҙерләгән кешенең йөрәк халәте ниндәй?.. Бөтә факторҙар ризыҡты ашаған кешегә йә ыңғай, йә кире йоғонто яһай. Ыңғай йоғонто икән, ул йөрәктә рухи энергия (фәйез) булып сағылыш таба, күңелде күтәрә, ә йоғонтоһо кире булһа - ғәмһеҙлек, күңел ҡатылығы булып.

Гонаһ – Аллаһ бүләк итеп биргән ниғмәттәргә ҡарата шөкөрһеҙлөк.

Мөхтәрәм Ибраһим Әҙһәм әйткән:

«Әгәр һиң гонаһ ҡылырға уйлайһың икән, исмаһам Аллаһ биргән ниғмәттәрҙе ашама! Йәнәбе Хаҡтың ризығын ейеп, Уға итәғәтһеҙ булыу яраймы ни?!».

❁

Гонаһтар – Аллаһ ҡоло һәм Уның Раббыһы араһындағы пәрҙә.

Гонаһтарҙың ауыр йөгө Раббыһы менән осрашыуға барған Аллаһ ҡолоноң юлын аҡрынайта. Шул баҫырау аҫтындағы йән рухиәт юлындағы араны үтә алмай.

❁

Шәхескә ике фактор бигерәк тә ныҡ йоғонто яһай: беренсенән, дуҫ булып йөрөгән кешеләрҙең рухи халәте, ә икенсенән, алған килеменең һәм ейгән ризығының хәләл булыу-булмауы.

❁

Шуға күрә хәләлгә харамды ҡушырға ярамай, тик хәләлде генә ейергә кәрәк, сөнки харам йәки мәкруһ ризыҡ кешенең рухиәтен ағыулай, йөрәген

ғафилгә әүерелдерә, ғибәҙәттәргә ҡарата ялҡаулыҡ һәм Аллаһ юлындағы хеҙмәткә һүлпәнлек тыуҙыра.

Хәләл ризыҡ иһә йөрәктең рухиәтен нығыта, изге ғәмәлдәр ҡылыуға ынтылышты арттыра, тәнгә көс бирә, рухиәтеңде туйындыра һәм һауыҡтыра.

❁

Хәләл әр-Рахмәәндән килә, ә харам – шайтандан. Хәләлдә – Аллаһ Сүбхәнәһү үә Тәғәләнең рәхмәте һәм бәрәкәте, ә харамда – бәрәкәттән мәхрүмлек һәм шайтандың яман тәьҫире.

❁

Мөхтәрәм Мәүләнә әйткән:

«Йөрәктәге нурҙы һәм камиллыҡты арттырыусы ризыҡ – хәләл юл менән эшләп табылған ризыҡ».

❁

Ғибәҙәттәрҙән тәм табыу – тәҡүәлеләр сифаты. Ә быға хәләл ризыҡ менән туҡланған, харамдан һаҡланған тәндәр һәм фани донъяға түгел, ә мәңгелек донъяға уҡталған йәндәр генә лайыҡ була.

❁

Мөхтәрәм Нәҡшбәнд шаһ әйткән:

«Ризыҡ хәләл булған һүрәттә генә изге ғәмәлдәр ҡылыу мөмкин. Әммә хәләл ризыҡты ла ғафил күңел менән ашарға ярамай».

❁

Әгәр тәнгә харам эләкһә, тәүге нәүбәттә ғибәҙәттәрҙән бүләк булып килгән ләззәт, хозурлыҡ юҡҡа сыға.

❁

Ғибәҙәт ләззәтенән һәм хошуғ халәтенән мәхрүм ҡалыуҙың сәбәбе - харам йәки мәкрүһ ҡатыш килем, ризыҡ һәм йөрәктең фани донъя ләззәттәре һәм эштәре менән мауығыуы. Был сәбәптәр юҡҡа сыҡмай тороп, кеше ғәмһеҙлектән арына алмаясаҡ, ғибәҙәттән тәҡүәлеләр алған рухи ләззәтте ала алмаясаҡ.

❁

Бер заман Баһауддин Нәҡшбәндтың шәкерте уға ниндәйҙер рухи халәтен юғалтыуы тураһында зарлана. Остаҙы уға әйтә:

«Бел, һин ейгән ризыҡ хәләлме, әллә хараммы!».

Шәкерте, уның кәңәшен тотоп, шуны асыҡлай: ризыҡ әҙерләнгән усаҡҡа ул хараммы-хәләлме икәне асыҡ билдәле булмаған утын ағас һалған. Бынан һуң шәкерте шунда уҡ тәүбә ҡыла.

❁

Мөхтәрәм Баки Биллəһ әйткән:

«Ризыҡты әҙ ейеү менән генә сикләнергә ярамай. Ризыҡ әҙерләнгән һыу ҙа, һауыт та һәм утыны ла хәләл булыуына иғтибар итергә кәрәк.

Бынан тыш, ризыҡты бешергән кешенең ғафил булмауы, ризыҡты Аллаһ ҡашында тороуын белеп әҙерләүе лазым.

Был нәмәләргә иғтибарһыҙ әҙерләнгән ризыҡтан бәрәкәт каналдарын томалаусы быу күтәрелә».

❁

Бер заман Хызыр мөхтәрәм Ғабдулхалиҡ Ғуждуваниҙың (рәхимәһуллаһ) хәлен белергә килә. Теге, ҡунаҡты һыйлар өсөн, өйөндә булған ике арпа икмәге килтерә. Әммә Хызыр уны ашамай. мөхтәрәм Ғуждувани (рәхимәһуллаһ) уны өгөтләй башлай:

«Аша, зинһар. Был хәләл ризыҡ!». Шунда Хызыр әйтә:

«Эйе, ысынлап та, ул хәләл, әммә ҡамыр баҫҡан кеше тәһәрәтһеҙ булған. Беҙгә уны ашау килешмәй»[19].

❁

Һис шикһеҙ, ризыҡты әҙерләүсенең һәм уны ейеүсенең рухи халәте ризыҡҡа йоғонто яһай. Ә унан килгән энергия рухиәткә йә ыңғай, йә кире йоғонто яһай. Һәм шулай булғас, ризыҡтың харам йәки мәкрүһ булыуы рухиәткә ниндәй зыян һалыуы хаҡында етди уйланыу зарур.

❁

Мөхтәрәм Мәүләнә әйткән:

«Бөгөн иртән минән илһам ҡасты. Шунда мин тәнемә ниндәйҙер күләмдә мәкрүһ ризыҡ килеп инеүен аңланым. Ғилем дә, хикмәт тә хәләл ризыҡтан тыуа. Шулай уҡ мөхәббәт һәм мәрхәмәт тә - хәләл ризыҡтан. Әгәр ҙә ки ниндәйҙер ризыҡтан һуң ғәмһеҙлек баҫһа, белегеҙ: ул йә харам, йә мәкрүһ».

❁

Мөхтәрәм Суфьян Саури әйткән:

19. Рәшахат, 92-93 биттәр.

«Кешенең динилеге туранан-тура ризығының хәләл булыу-булмауына бәйле».

❁

Ғафил кешеләр үҙ гонаһтарына тиң гонаһкәрҙәрҙе эҙләй. Ә аҡланыу өсөн улар былай тип белдерә: «Һөйөклөм, нимәне оҡшамай? Беҙҙең заманда ҡайҙа ул пак аҡсалар: хәҙер бөтә ерҙә проценттар, бөтәһе лә алдаша, бөтәһе лә ғәйбәт һата…»

Ә бит беҙ үрнәк алырға тейешле йәмғиәт – сәхәбәләр йәмғиәте. Аллаһ Тәғәлә әйтә:

«…Мөһажирҙарҙан һәм әнсарҙарҙан элек килгән һәм уларға эйәреүселәрҙән Аллаһ ҡәнәғәт ҡалды…» (әт-Тәүбә, 100).

❁

Хәҙистә әйтелә:

«Шундай заманлар килер: рибанан килгән аҡса менән ризыҡланмаған һис кем ҡалмаҫ! Хатта берәү туранан-тура ризыҡланмаһа ла, уға ла быныҡ туҙаны эләгер!» (Әбү Дауыд, Буйу, 3/3331).

Ысынлап та, уйлап тормай кредит карталарын файҙаланыу, банкылар ойоштороған акцияларҙа ҡатнашыу һ.б. арҡаһында, күптәр туранан-тура йәки ситләтеп булһа ла процентлы операцияларға йәлеп ителә. Хәләлде эҙләү һәм уның менән ҡәнәғәт булыу көндән-көн ауырлаша барған заманда йәшәйбеҙ. Әммә ауыр заманда пак килеш ҡалыуҙың Аллаһ алдында ҡиммәте бик ҙур.

❁

Хәҙистә әйтелә:

«…(Ысын) мөһажир — Аллаһ харам ҡылған нәмәләрҙән баш тартыусы» (Бохари, Иман 4-5, Рикак 26; Мөслим, Иман, 64-65).

Сәхәбәләр, Мәккәнән күсенгәндә, дин тотоу мөмкинлеге өсөн, бөтә мөлкәттәрен ҡалдырып китә. Шулай уҡ бөгөн һәр мөьмин, Аллаһ харам ҡылған нәмәләрҙән баш тартып, әгәр кәрәк булһа, фани донъя менән бәйле файҙаларҙан баш тартып, яманлыҡтан – яҡшылыҡҡа, ялғандан – хәҡиҡәткә, фани донъянан баҡыйлыҡҡа һижрәт иткән хис-тойғо менән йәшәргә тейеш.

❁

Бөгөн иң мөһим һижрәт – Аллаһтың һәм Уның Илсеһенең (саллəллаһу ғəлəйһи үə сəлləм) ризалығына, мөхәббәтенә һәм дуҫлығына һижрәт итеү.

Хәкиҡи һиҗрәт – гонаһтарҙан, яҙыҡтарҙан, буш юҡ-бар нәмәләрҙән изге ғәмәлдәргә һиҗрәт итеү.

Аллаһтан һәм Уның Илсеһенән (салләллаһу ғәләйһи үә сәлләм) алыҫ булған һәр быуат – асылда яһилиәт быуаты. Илаһи һәм пәйғәмбәрҙәр нәсихәте менән төҙәтелмәгән һәр быуат үҙенең ҡырағайлығы менән бер-береһенә тиң…

Беҙ, заман яһилиәтенең ғафиллығынан һаҡланып, үрнәк итеп Пәйғәмбәребеҙ (салләллаһу ғәләйһи үә сәлләм) һәм уның сәхәбәләренең тәҡүәле тормошон алһаҡ – был заманыбыҙҙың иң бөйөк һиҗрәте.

❁

Ғабдуллаһ ибн Мәсғуд (радыйаллаһу ғәнһү) әйткән: «Сәхәбәләрҙең берәйһе иртән өйҙән сығып киткәндә, ҡатыны нәсихәт әйтеп ҡалыр ине: «Аллаһтан ҡурҡ, харам килемгә тотонма! Фани донъяла беҙ аслыҡҡа түҙербеҙ, әммә Хисап көнөндә йәһәннәм утына сыҙай алмабыҙ!» (Ғабдулхәмид Кәшк, Фи рихаби әт-тәфсир, I, 26).

❁

Хәҙистәрҙә әйтелә:

«Аллаһ Үҙ ҡолоноң (хеҙмәт менән) хәләл килем алып арығанын күрергә ярата» (Суйути, Джәәми әс-сәғир, I, 65).

«Һис кем һис ҡасан (үҙ ҡулдары менән) эшләп тапҡан ризыҡтан да яҡшырағын ашағаны юҡ…» (Бохари, Буйу, 15).

❁

Беҙ йәшәгән Ҡиәмәт алды осоронда тәртип һәм тыныслыҡ бөтөүҙең иң мөһим сәбәбе тапҡан-таянғаны хәләлме-хараммы икәненә кешеләрҙең әһәмиәт бирмәй башлауында. Пәйғәмбәребеҙ (салләллаһу ғәләйһи үә сәлләм) был тураля әйткән:

«Шундай заманда килер: кеше тапҡан-таянғаны хәләлме, әллә хараммы икәненә әһимәт бирмәҫ» (Бохари, Буйу, 7, 23).

❁

Бәндә килеменең хәләл, мәкрүһ йәки харам булыуы ғибәҙәттәренең ҡабул булыу-булмауына йоғонто яһай. Бер хәҙистә харам килем менән хаж ҡылған кеше тураһында әйтелә:

«Ундай кеше, ихрамға инеп, хаж ҡылырға ниәтләп, дөйәһенең өҙәңгеһенә баҫып урынынан ҡуҙғалғас, әйтер:

– Ләббәйк. Аллаһумма, Ләббәйк!

Шул саҡ күктән бер һөрәнсе яуап итеп әйтер:

– Ләббәйк тә юҡ һиңә, Сәғдәйк тә юҡ! Яуап та юҡ һиңә, яҡлау ҙа юҡ! Сөнки килемең һинең хәләл түгел, ризығың Шәриғәт ҡушҡанса хәләл түгел, дөйәң дә ғәҙелһеҙ юл менән алынған. Яҙыҡтарың менән әжер-сауапһыҙ кире ҡайт! Күңелеңә хуш килмәгән нәмәләрҙе осратып ғазаплан!» (ҡар. Хайсами, III, 209-210).

❁

Аллаһ Илсеһе (салләллаһу ғәләйһи үә сәлләм) әйткән:

«Оҙон юлда булып, туҙан менән ҡапланған, сәстәре туҙған кеше, ҡулдарын күккә төбәп: «Йә Раббым!» - тип ҡабатлай. Әммә уның ризығы харам, һәм эскәне харам, һәм кейеме харам, һәм уны харам менән туйындырғандар, шулай булғас уның доғаһына яуап булырмы?!» (Мөслим, Зәкәт, 65; ҡар. Шулай уҡ Тирмизи, Тәфсиру әл-Ҡөрьән, 3).

❁

Мөхтәрәм Мәүләнә әйткән:

«Хатта эт тә үҙенә ташланған һөйәк һәм икмәкте еҫкәп ҡарамайынса ашамай».

Йәғни, хәләл һәм харамды, яҡшы һәм яманды, хаҡ һәм ялғанды айырып тормайынса, нәфес теләктәреңде һәм донъяуи мәнфәғәттәреңде ҡәнәғәтләндереү өсөн сабылап йөрөү кешеләрҙе иҫәрләндерә һәм хайуандарҙан да түбән хәлгә төшөрә. Был иң түбән ғафиллыҡ халәте.

❁

Ғафил кеше, ҡулына кергән нәмәне хәләл һәм харамға айырмайынса, үҙенең килеме, тип иҫәпләй. Әммә мөьмин өсөн хәләл юл менән табылған тинлектәр харам юл менән табылған миллиондарҙан күпкә ҡиммәт.

Мөьмин өсөн Ҡиәмәттә еңел хисапланасаҡ хәләл милек бәрәкәтле. Хисап бирә алмаясаҡ һәм яза сәбәпсеһе буласаҡ харам килем уның өсөн торғаны бер бәлә.

❁

Хәләл сиктәренә бик иғтибарлы булыу зарур. Әгәр вазифалы кеше йәки эшсе үҙ бурыстарын тейешенсә үтәмәй һәм эш ваҡыты режимын боҙа икән, уның эш хаҡына ниндәйҙер миҡдарҙа харам керә.

Әгәр мәсет имамы үҙ яуаплылығы аҫтындағы мосолмандарға нәсихәт бирмәй, уларҙы киҫәтмәй икән, әгәр уҡытыусы уҡыусылары тураһында тейешенсә хәстәрлек күрмәй икән, улар үҙ ҡулдары менән эш хаҡтарына харам өҫтәй.

Киң билдәле хәҡиҡәт: законһыҙ байлыҡты мираҫ итеп алыусылар йыш ҡына тура юлдан тайпыла. Сәбәбе шунда: аҡсаларҙа бер сер бар – улар ниндәй юл менән килһә, шундай юл менән китә. Хәләл юл менән табылған аҡса изге эштәргә сарыф ителһә, харам аҡсалар харамға китә. Харамдан килгән байлыҡ, вариҫтарҙы ла үҙ артынан һөйрәп, йыш ҡына яман юлға сарыф ителә.

❁

Мөьмин мираҫҡа ҡағылышлы ике нәмәгә иғтибар итергә тейеш:

Беренсенән, ул хәләл юл менән аҡса эшләргә, хәләл менән ризыҡланырға тейеш, ул саҡта вариҫтарына ҡалдырған мираҫы ла хәләл буласаҡ.

Икенсенән, ул балаларын, харамдан йыраҡ булып, килемде хәләл юл менән эшләп табырға өйрәтергә һәм тәҡүәлекте мираҫ итеп ҡалдырырға тейеш.

❁

Кешеләр, алған килемебеҙҙе үҙ ихтыярыбыҙ буйынса тотонабыҙ, тип уйлай. Ә бит аҡсаларҙың яҙмышы кешеләр яҙмышына ла йоғонто яһай. Икенсе төрлө әйтһәк, ниндәй кимәлдә хәләл юл менән эшләп табылыуына ҡарап, улар үҙҙәре лайыҡлы булған урынға ынтыла. Шул уҡ ваҡытта улар хужаһының ихтыярын үҙҙәре ынтылған маҡсатҡа йүнәлтә. Хәләл юл менән эшләп табылған аҡсалар – хәләлгә, харам юл менән табылған аҡсалар харамға алып бара.

❁

Әбү Ғаббас Нихавенди әүлиәгә бай шәкерте килә һәм, зәкәтте кемгә биреү яҡшыраҡ булыр, тип кәңәш һорай. Ул әйтә:

«Йөрәгең ҡушҡан кешегә бир!».

Остаҙынан киткәс, егет юлда бер һуҡырҙы күрә. Күңелендә уға ҡарата йылы тойғо барлыҡҡа килә һәм ул зәкәткә тәғәйенләнгән алтын һалынған ансығын уға тоттора.

Икенсе көндө шул тирәнән үтеп барған шәкерт икенсе бер һуҡыр менән һөйләшеп торған үҙе зәкәт биргән кешене күрә һәм уның шундай һүҙҙәрен ишетә:

«Кисә бер бай миңә янсыҡ тулы алтын бирҙе. Мин ҡабаҡҡа барҙым да уны эскегә тотоноп бөттөм…»

Әңгәмәне ишеткән шәкерт бик бошона, мөхтәрәм Әбү Ғаббасҡа барып, был хәлде әсенеп уға һөйләй. Әммә остаҙы, бер һүҙ әйтергә лә бирмәйенсә, үҙе тегеп һатҡан түбәтәй аҡсаһынан бер дирһәм һуҙып, тәүге осраған кешегә саҙаҡа итеп бирергә ҡуша.

Шәкерт, остаҙы әйткәнсә, аҡсаны тәүге осраған кешегә һона. Ҡыҙыҡһынып, уның артынан китә һәм, теге ирҙең күлдәк аҫтынан үлгән ағунаны алып, харабалар араһына ташлағанын күрә. Шәкерт килеп, инде китергә йыйынған иргә һорау бирә:

«Эй, хөрмәтлем! Аллаһ хаҡы өсөн дөрөҫөн әйт әле, был нимә ул? Ниндәй үлгән ағунаны ташланың һин?»

Үҙенә аҡса биргән кешене күргәс, был ир, тулҡынланыуҙан тотлоға-тотлоға аңлатырға керешә:

«Етенсе көн инде балаларымды ашатыр өсөн ризыҡ таба алмайым. Беҙ ҡатыным менән бер аҙ түҙер ҙә инек, әммә балаларым инде аслыҡҡа сыҙай алмай! Шуға ҡарамаҫтан, хәйер эстәй ҙә, кешеләрҙән һорана ла алмайым. Ошондай уйҙар менән яфаланып йөрөгәндә, үлгән, инде һаҫый башлаған ағунаны табып алдым. Мохтажлыҡтың сигенә еткәнгә күрә, мин уны алып ҡайтып, балаларыма ашатырға уйлағайным. «Раббым, хәлемә кер, миңә мәрхәмәтле бул!» - тип эстән генә Аллаһҡа ялбарған саҡта, һин килдең һәм миңә ошо аҡсаны бирҙең. Мин Раббыма шөкөр ҡылып, ашарға яраҡһыҙ был ҡошто сүплеккә ташланым. Хәҙер баҙарға барып, һин биргән аҡсаға берәй ризыҡ алам…»

Ишеткән-күргәндәренә хайран булып, шәкерт шунда уҡ остаҙына китә. Ул һүҙ әйтергә лә өлгөрмәй, ә остаҙы аңлатып та бирә:

«Улым! Был шуны аңлата: һин килемеңә харам йәки мәкрүһ кереп киткәненә иғтибар бирмәгәнһең. Шуға ла, һин мохтажға биреү хаҡында хәстәрлек күрһәң дә, зәкәтең хәмергә киткән. Аҡсаларҙың шундай үҙенсәлеге бар: улар ҡайҙан килһә, шунда китә. Бына шуның өсөн һинең алтын тулы янсығыңдан айырмалы рәүештә минең бер дирһәмем тәкүәле кеше ҡулына ингән…»

❁

Аҡсаларҙың хәләллек дәрәжәһен белер өсөн, уларҙың нимәгә сарыф ителеүен күреү ҙә етә. Әгәр килем сығанағы буръяҡлы икән, улар сарыф ителгән урын да саф, таҙа булмаясаҡ. Әгәр ҙә исраф йәки һаранлыҡ бар икән, алған килемебеҙҙә рухи йәһәттән ниндәйҙер проблемалар бар.

❁

Ризыҡтың һәр бер киҫәгендә үткән юлының рухи эҙе ҡала. Ул хәләл юл менән эшләп табылғанмы, әллә харам юл менән килгәнме? Аллаһ ҡолдарының береһенең уға хоҡуғы юҡмы? Мираҫ алырға тейешле берәүҙең йәки зәкәт рәүешендә алырға тейешле берәй фәкирҙең уға хоҡуғы юҡмы? Ул ризыҡты эҙерләгән кешенең йөрәк халәте ниндәй?.. Бөтә факторҙар ризыҡты ашаған кешегә йә ыңғай, йә кире йоғонто яһай. Ыңғай йоғонто икән, ул йөрәктә рухи

энергия (фәйез) булып сағылыш таба, күңелде күтәрә, ә йоғонтоһо кире булһа - ғәмһеҙлек, күңел ҡатылығы булып.

❁

Ҡыҙғанысҡа ҡаршы, беҙҙең заманда, айырыуса ҙур ҡалаларҙағы йорттарҙа, аш-һыу бүлмәләре юҡҡа сыҡты. Урамдар һәм проспекттар аш-һыу бүлмәһенә әйләнде.

Элек ризыҡты гел өйҙә әҙерләйҙәр ине. Тәһәрәтләнеп, бисмилла әйтеп, Аллаһты зекер итеп, Аллаһ Илсеһенә (салләллаһу ғәләйһи үә сәлләм) салауаттар әйтеп, рухи күтәренкелек менән эшкә тотоналар ине. Тиҙлек һәм ләззәттәргә йөҙ тоткан заман хаятында, ҡыҙғанысҡа ҡаршы, өйгә ризыҡты әҙер килеш килтертеү популяр булып китте. Ә бит уның ниндәй продукттан әҙерләнеүе, әҙерләгән кешенең рухи халәте билдәһеҙ.

Табын артында ултырған кеше ризығының да, уны әҙерләгән кешенең рухи халәтен дә белмәй.

Ит ризыҡтары хәләл иттән әҙерләнгәме, ашнаҡсы иманлымы, тәһәрәтләме, намаҙ ҡыламы, биссмилла әйтеп бешерәме – был турала берәү ҙә һорамай, уйланмай, борсолмай.

Йәмғиәттән бәрәкәт ҡасыуы, ҡылған доғаларыбыҙға яуап булмауы, матди һәм рухи пландағы бәхетһеҙлектәр, күңел төшөнкөлөгө, мин-минлек, тыныслыҙлыҡ артыуы сәбәптәрен шунан эҙләргә кәрәк.

❁

Бөгөнгө көндә төрлө матди проблемалар тураһында күп һөйләйҙәр. Тәүге нәүбәттә был инфляция, көнкүреш сығымдарының артыуы һ.б. Әммә ләкин ул проблемаларҙың тышҡы яғына күберәк иғтибар бирелә, ә эске сәбәптәр иғтибарҙан ситтә ҡала.

Ҡыҙғанысҡа ҡаршы, бөгөн йәмғиәттең бер өлөшө, Аллаһ гонаһтары өсөн юҡ иткән бик күп халыҡтар кеүек, Әхирәт, хәләл-харам сиктәре, ғиффәтлек тураһында онотто. Мутлашыуҙар, ҡомарлы уйындар, ришүәтселек, риба, йәшерен баҙар киң ҡолас йәйҙе.

Ошо һәм шуға оҡшаш гонаһтар – Аллаһтың ярҙамы туҡталыуға һәм бәрәкәт китеүгә алып килгән сәбәптәр. Ә йәмғиәтебеҙ төҙәлһен өсөн, беҙҙән тәүбә-истиғфар ҡылыу, рухи халәтебеҙҙе яҡшыртыу талап ителә.

❁

Элек һирәк күренеш булған психолгик тайпылыштар артҡандан-арта бара. Етеш йәшәгән, матди мөмкинлектәре юғары булған кешеләр рухи көрсөк, рухи ғазаптар кисерә, күңел төшөнкөлөгөнә зарлана.

Бөгөнгө көндә яман сиргә әүерелгән булған һайын күберәк булдырыу, өҫтө-өҫтөнә нимәлер алыу, нимәлер яңыртыу әүәҫлеген дәртләндереүҙең, хуплауҙың нәтижәһе былар. Етемдәрҙе, астарҙы мыҫҡыл иткән һымаҡ, фәкирҙәрҙең бошонҡо ҡараштарына иғтибар итмәйенсә, витриналарға иң тәмле, иң ҡиммәтле ризыҡтарҙы ҡуялар.

Һатыусы хәләлде hatһa ла, алыусы хәләл аҡсаға alһa ла, өмөтһөҙ, бошонҡо күҙҙәр төшкән, күҙһенгән был ризыҡтар ҙа, шулай уҡ унан алынған килем дә кешегә рухи йәһәттән зыян һалырға һәләтле.

Аллаһ ҡолдары өсөн күҙ хаҡын үтәү (йәғни әгәр кеше ымһынып нимәгәлер күҙ һалһа, уны биреү) мотлаҡ булған цивилизациянан нимә ҡалды хәҙер?

❁

Әгәр ниндәйҙер ризыҡта күҙ хаҡы ҡалһа, әгәр кемдер уны тәмләп ҡарағыһы килһә, ризыҡтың рухи йәһәттән паклығы боҙола. Шуға күрә элекке замандарҙа:

– Фәкирҙәр күрмәһен өсөн, ризыҡ өҫтөнә берәй япма һалып ҡуйыр булғандар.

– Элек күҙ хаҡы төшмәһен өсөн, мейестән алған ризыҡтарҙың өҫтөн ябып килтерер булғандар, ә икмәк бешереүсегә күстәнәскә мотлаҡ өлөш бүлгәндәр.

– Өйҙә ит бешһә, күршеләрҙе лә һыйлағандар һәм әйтер булғандар: «Еҫе күршеләргә лә барып етте, тимәк был иттә уларҙың да хаҡы бар». Ул заманда Аллаһ ҡолдары хаҡын, күршеләр хаҡын һәм күҙ хаҡын һаҡлауға ҙур әһәмиәт биргәндәр.

Боронғоларҙың әҙәп кимәле шундай булған. Ә хәҙер беҙҙең әҙәп кимәлебеҙ ниндәй?

❁

Күңелде биләп алған хозурлыҡ һәм хошуғ йәһәтенән ата-бабаларыбыҙ төҙөгән боронғо мәсеттәрҙә һәм яңы мәсеттәрҙә ҡылынған намаҙҙар араһында айырма бар. Сәбәптәрҙең береһе был мәсеттәрҙе төҙөүгә киткән аҡсаларҙың рухи халәтенә, йәғни уларҙың ниндәй кимәлдә хәләл булыуына бәйле.

Тарихтан бер миҫал килтерергә мөмкин.

Сөләймән I, Сөләймәниә мәсетен төҙөгәс, был эштә ҡатнашҡан бөтә архитекторҙарҙан, оҫталарҙан, эшселәрҙән, бәлки, кемдеңдер күңелен ҡырғанмындыр тип, ғәфү үтенә. Солтан төҙөлөштә ҡатнашҡан хайуандарҙың да хоҡуҡтарын һаҡлауға ҙур иғтибар бүлә һәм шундай әмер бирә: «Әгәр хайуандар арыһа, уларға ял итергә мөмкинлек бирергә кәрәк. Хайуандарҙы бер ваҡытта ла ас ҡалдырырға ярамай…» Былар һәммәһе Сөләймәниә мәсетенең һоҡланғыс архитектураһына ла, күңелгә хозурлыҡ биргән рухиәтенә лә йоғонто яһай.

❁

Беҙҙең көндәрҙә, аңлап етмәйенсә, Аллаһ ҡолдарының бик күп хоҡуҡтарын һаҡлауға битарафтар. Әммә Ҡиәмәт еткәс, һәммәһе өсөн яуап бирергә тура киләсәк.

Мәҫәлән, эш биреүселәргә үҙ хеҙмәткәрҙәренең хоҡуҡтарын һаҡлауға күберәк иғтибар бирегеҙ, уларға мәрхәмәтле, шәфҡәтле булыу лазым, сөнки улар, эшһеҙ ҡалыуҙан ҡурҡып, ғәҙелһеҙлеккә дусар булһалар ҙа, ҡаршы һүҙ әйтмәйҙәр, бәлки. үпкәләрен дә йәшерәләрҙер.

Хужалар, ҡаршы килеүсе булмағас, быларға иғтибар бирмәй. Ә бит, бурысын тейешенсә үтәмәгән өсөн, өҫтәренә ауыр йөк һалына, Ҡиәмәттә былар өсөн ҡаты хисап тоторға тура киләсәк.

❁

Әйҙәгеҙ, Аллаһ Илсеһенең (салләллаһу ғәләйһи үә сәлләм) вафаты алдынан биргән нәсихәтен онотмайыҡ: *«Намаҙ мәсьәләһендә Аллаһтан ҡурҡығыҙ! Үҙ хакимлығығыҙ аҫтындағы кешеләр мәсьәләһендә Аллаһтан ҡурҡығыҙ (йәғни уларҙың хаҡын һаҡлауға иғтибарлы булығыҙ)!»* (Ҡар. Байхаки, Шуаб, VII, 477).

❁

Аллаһ Илсеһе (салләллаһу ғәләйһи үә сәлләм) үҙ үрнәгендә хоҡуҡ һәм ҡанундар нисек тормошҡа ашрылырға тейешлеген күрһәтә:

«Мин дә бит кеше. Берәйегеҙгә бурысым булыуы ла ихтимал. Кемдеңдер арҡаһына һуҡһам, бына минең арҡам – һуҡһын! Хаталанып берәйегеҙҙең милкен алһам бына минең милкем – килһен дә алһын!» (Әхмәд, III, 400).

Бына ниндәй хәстәрле беҙҙең цивилизация кеше хаҡына ҡарата!

❁

Әгәр кемдер берәүҙең хаҡын хаҡламаһа, ул уға мотлаҡ хаҡын түләргә, килешергә тейеш. Был осраҡта оятҡа ҡалыуҙан ҡурҡырға кәрәкмәй. Хәҙистә әйтелгән бит:

«Эй, кешеләр! Әгәр бәндә берәүҙең хаҡына керһә, кисекмәҫтән хаҡын түләһен. Фани донъяла оятҡа ҡалам, тип уйламаһын, белһен, был донъялағы хурлыҡ киләһе донъялағы хурлыҡтан күпкә еңелерәк» (Ибн Сәғд, II, 255; Табари, Тарих, III, 191).

❁

Хәҙистә кемдеңдер хаҡына кергән кешенең Әхирәттә нисек итеп уны түләйәсәге бәйән ителә:

«Әгәр кемдер, икенсе берәүҙең хаҡына кереп, намыҫына, дәрәжәһенә һәм милкенә ҡарата золом ҡылған икән, алтын һәм көмөш тә булмаған Ҡиәмәт еткәнсе килешһен. Юғиһә әгәр уның изге ғәмәлдәре өсөн сауаптары бар икән, шул сауаптарҙан золомона ярашлы хаҡын аласаҡтар (һәм үҙе рәнйеткән кешегә бирәсәктәр). Әгәр изге ғәмәлдәре булмаһа, рәнйетелгән кешенең гонаһтарын уға йөкмәтәсәктәр» (Бохари, Мазалим 10, Рикак 48)

Хисап көнөндә мөһиндең сауаптары уның иң ҡиммәтле байлығы булаҫаҡ. Әгәр был шулай икән, фани донъяла Аллаһ ҡолдарының хаҡына кергән өсөн Ҡиәмәт банкротына әүерелеүҙән, йәғни уларҙан мәхрүм булыуҙан, етмәһә башҡаларҙың гонаһын йөкмәүҙән дә яманыраҡ тағы ни бар!

❁

Аллаһ Тәғәлә Үҙ ҡолдарының хаҡына кереүҙе ғәфү итмәй, шуға күрә кеше хаҡына кереүҙәу һаҡ булыу зарур. Аллаһ Илсеһе (салләллаһу ғәләйһи үә сәлләм) әйткән:

«Раббыбыҙ шәһит киткәндең Аллаһ ҡолдары хаҡына инеүҙән тыш бөтә гонаһтарын ғәфү итер» (Мөслим, Имара, 119).

Һәм әгәр Ҡиәмәт көндө пәйғәмбәрҙәрҙән ҡала кешеләр араһында иң юғры урын биләгән шәһиттәргә мөнәсәбәт шундай икән, башҡалар менән ни булыр?!

❁

Ҡиметтәге хисаплама ваҡытында үҙенең ғәмәлдәр китабындағы ентекле яҙмаларҙы күреп, кеше шаҡ ҡатасаҡ. Был турала аятта әйтелә:

«Китап (ғәмәл дәфтәре) уртаға ҡуйылғас, яҙылған гонаһтарын күреп, нисек ҡурҡҡандарын күрерһең: «Харап булдыҡ! Был ниндәй китап һуң, (ҡылмыштарыбыҙҙың) ҙуры ла, бәләкәйе лә – береһе лә онотолмайынса яҙып ҡуйылған!» - тип әйтерҙәр. Шулай итеп, ҡылғандары улар ҡаршыһында булыр. Раббың һис кемгә ғәҙелһеҙ булмаҫ» (әл-Кәһәф, 49).

Был бик нескә, сетерекле мәсьәлә, шуға күрә беҙ үтә лә һаҡ булырға тейешбеҙ. Әгәр беҙ хоҡуҡтарын боҙған кешеләр булһа, улар менән кисекмәҫтән

килешеү лазым. Әммә законлы хужаның үлеме йәки юҡҡа сығыуы сәбәпле быны эшләү мөмкин булмаһа, уның исеменән саҙаҡалар биреп һәм Аллаһтан ғәфү үтенеп, хатабыҙҙы төҙәтергә тырышыу лазым. Үҙебеҙ онотҡан йәки белмәгән хаталар, ғәйептәр булыуы ла ихтимал, шуға күрә түбәндәге доғаны йыш ҡабатлау зарур:

رَبَّنَا لاَ تُؤَاخِذْنَا إِن نَّسِينَا أَوْ أَخْطَأْنَا

«Йә Раббым! Онотһаҡ йәки яңылышһаҡ, беҙҙе ғазаптарға һалма, (зинһар)» (әл-Баҡара (Һыйыр), 286).

❁

Ҡөрьәндә әйтелә:

«Кем туҙан бөртөгө (зәррә) ҡәҙәрле генә изгелек ҡылған булһа, хатта шул да күренер. Кем туҙан бөртөгө (зәррә) ҡәҙәрле әшәкелек ҡылған булһа, ул да күренер» (әз-Зәлзәләһ (Ер тетрәү), 7-8).

Иң кескәй гонаһтар һәм изгелектәр ҙә хатта хисапланасаҡ. Шуға күрә бәләкәй генә хата ҡылыуҙан да һаҡланырға тейешбеҙ.

❁

Ҡасим ибн Мөхәммәд (рахимәһуллаһ) әйткән: «Иң ҙур гонаһтарҙың береһе - үҙ гонаһтарыңа еңел ҡарау».

❁

Лоҡман Хәким әйткән: «Кескәй ғәмәлдәргә иғтибарһыҙ булмағыҙ! Шул кескәй иртәгә ҙур булыуы ихтимал».

❁

Абдуллаһ ибн Масғуд (радыйаллаһу ғәнһү) әйткән:

«Хаҡ иман эйәһе гонаһтарына өҫтөнә ишелергә торған тау аҫтында ултырған һымаҡ ҡурҡып ҡарай. Иманһыҙ инһә гонаһтарына танау төбөнән осоп үткән себенгә ҡараған һымаҡ ҡарай» (Бохари, Дәғүәт, 4).

❁

Ҡайһы саҡ остоҡ ҡына бер киҫәктән дә үлсәү бер яҡтан икенсе яҡҡа ауыша. Шуға күрә бер генә изге ғәмәлгә лә йәки гонаһҡа ла өҫтән ҡарарға ярамай.

Тәбиғиндәрҙән булған Билал ибн Сәғд салих заттарҙың һәр даим тәҡүәлеккә ынтылышын бәйән итеп гүзәл рәүештә киҫәтә:

«Гонаһыңдың остоҡ ҡына булыуына ҡарама! Кемгә итәғәтһеҙ булыуыңа, Кемгә ҡаршы гонаһ ҡылыуыңа ҡара!».

❁

Упҡын янындағы һаҡһыҙ бер аҙым да һәләкәткә илткән кеүек, илаһи асыуға тарыуға алып килгән остоҡ ҡына дөрөҫ булмаған халәттән һәм ғәмәлдән дә һаҡланыу зарур. Артыҡ әһәмиәт бирелмәгән күп кенә дөрөҫ булмаған халәттәр һәм ғәмәлдәр Аллаһтың асыуына тарыуға һәм бөтә ғәмәлдәрҙе юҡҡа сығарыуға алып килеүе мөмкин.

Хәҙистә бәйән ителгәнсә, гонаһкәр ҡатын, сарсаған эткә һыу эсереп, шәфҡәтлелеге сәбәпле ярлыҡана һәм Йәннәткә лайыҡ була. Бесәйен ас тотҡан ҡатын ирһә, аяуһыҙлығы арҡаһында Йәһәннәмгә эләгә.

❁

Аллаһтың рәхмәтенә һәм асыуына бик кескәй йәки уртаса һәм ҙур ғәмәлебеҙ өсөн дә дусар булыуыбыҙ бар. Йәғни беҙгә әһәмиәтһеҙ булып тойолған ябай һәм бәләкәй генә яҡшылыҡ Аллаһтың мәрхәмәтенә, бөйөк бүләктәренә, Уның рәхмәте төшөүгә сәбәпсе булыуы мөмкин. Шуға күрә бәләкәй генә булып күренгән изге ғәмәлдәргә лә өҫтән ҡарарға ярамай.

Шул уҡ ваҡытта ябай һәм әһәмиәтһеҙ тойолған гонаһ Аллаһтың бөйөк асыуына тарыуға, бәндәнең Әхирәт тормошон мәңгелек ғазапҡа әйләндереүгә сәбәпсе булыуы мөмкин.

❁

Ҡөрьән мөфәссире Фәхрүддин әр-Рази әйткән:

«Аллаһ, кешеләр бөтә ғибәҙәттәргә лә иғтибарлы булһын өсөн, ниндәй ғибәҙәттәргә риза булыуын йәшергән.

Кешеләр бөтә гонаһтарҙан да һаҡланһын өсөн, ниндәй итәғәтһеҙлек асыуына тейеүен йәшергән.

Бөтә кешеләрҙе лә хөрмәт итһендәр өсөн, Ул дуҫтарын кешеләр араһына йәшергән.

Бөтә доғаларға ла иғтибарлы булһындар өсөн, Үҙе ҡабул иткән доғаһын башҡа доғалар араһына йәшергән.

Бөтә Исемдәрен дә зекер итеп данлаһындар өсөн, Ул Үҙенең бөйөк Исемен башҡалары араһына йәшергән…»

❁

Ҡыҙғанысҡа ҡаршы, көндәлек тормошта, Аллаһ ҡолдары хаҡына кереүҙәрен аңламайынса, кешеләр бик күп гонаһтар ҡылып ҡуя. Мәҫәлән:

• Юл хәрәкәте ҡағиҙәләренә ҡаршы килеп, башҡа автомобилдәрҙе уҙып китеү – Аллаһ ҡолдары хаҡына кереү.

• Балаҫ, келәмдәрҙе аҫтағы ҡатта йәшәүселәрҙең тәҙрәһе, балконы бысранырлыҡ итеп ҡағыу - шулай уҡ Аллаһ ҡолдары хаҡына кереү.

• Күршеләреңдә хафаға һалған фейерверктар һәм музыканы аҡыртып ҡуйыу - Аллаһ ҡолдары хаҡына кереү.

• Ғәйбәт һөйләү, кеше йәшерергә теләгән нәмәне белергә тырышыу – Аллаһ ҡолдары хаҡына кереү.

• Еңел-елпе уйлап ҡылынған башҡаларҙың физик һәм психик һаулығына зыян килтерерҙәй ғәмәлдәр – шулай уҡ Аллаһ ҡолдары хаҡына кереү.

Хисап көнөндә барса ғәмәлдәребеҙ өсөн яуап тоторға тура киләсәген иман эйәһе белергә тейеш. Мосолманға тәкүәле булыу, башҡаларҙың хаҡына кереүҙән һаҡланыу лазым.

❁

Шәйех Муса Әфәнденең күркәм холоҡ, хәләл һәм харам нормаларын үтәү, Аллаһ ҡолдары хоҡуҡтарына хөрмәт тураһында шундай һүҙҙәре бар: «Күптәрҙең фекеренсә, рухи үҫеш — бары тик ғибәҙәттәр һанын арттырыу. Юҡ! Хәҡиҡи үҫештең асылы шунда: кеше Аллаһ хозурында булыуын белә һәм бөтә ғәмәлдәрен Сөннәткә ярашлы үтәй.

Күптәр өҫтәмә ғибәҙәттәр ҡылыуҙа тырышлыҡ күрһәтә, тик улар хәләл һәм харамға иғтибар бирмәй, әхлаҡтары ислам әхлағы булһын өсөн көс түкмәй. Буш ваҡыттарын улар ғәйбәт һатып үткәрә, тапҡан-таянғандарын нәфестәрен ҡәнәғәтләндереү өсөн файҙалана. Өҫтәмә ғибәҙәттәргә әҙерәк ваҡыт сарыф итеү, әммә юғары әхлаҡҡа ынтылыу, хәҡиҡәткә һәм башҡаларҙың хаҡын хаҡлауға күберәк иғтибар бүлеү улар өсөн яҡшыраҡ булыр ине!»

❁

Мөхтәрәм Ибн Ғаббасҡа (радыйаллаһу ғәнһү) һорау биргәндәр: «Бер әҙәм изге ғәмәлдәр ҡылырға тырыша, ләкин ҡайһы бер гонаһтарҙы ла ҡылып ҡуя. Икенсеһе изге ғәмәлдәр ҡылыуға артыҡ тырышлыҡ күрһәтмәй, шулай уҡ гонаһтар ҙа ҡылмай. Уларҙың ҡайһыһы яҡшыраҡ?» Ул әйткән: «Гонаһарҙан йыраҡ булыуҙы мин нығыраҡ хуҙһынам» (Әбү Дауыд, Зуһд, 356-сы бит).

❁

Бөгөнгө көндә телевидение бәләһенән үҙеңде һаҡлау лазым. Интернет, модалар һәм рекламалар нәфесте ҡуҙғыта. Әйтәләр бит, тәүге нәүбәттә ямандан азат булырға һәм шунан инде файҙалы ғәмәлдәр ҡылыуға тырышлыҡ һалырға кәрәк. Иң тәүҙә яраны эрендән таҙарталар, шунан һуң ғына шифалы май ябалар.

Тәүге нәүбәттә йөрәкте ғафиллыҡҡа батырған харамдан һаҡланыу лазым. Шул саҡта ғына рухиәт һауыға, ғибәҙәттәр хошуғ менән ҡылына башлай һәм кеше Аллаһтың камил ҡолона әүерелә.

❁

Изге аятта әйтелә:

«Асыҡ рәүештә гонаһ ҡылыуҙан да, йәшерен гонаһ ҡылыуҙан да баш тартығыҙ!» (әл-Әнғәм (Мал-тыуар), 120).

Хәмерҙән, ҡомарлы уйындарҙан, рибанан һәм ришүәтселектән баш тартҡан кеүек, хөсөтлөктән, ике йөҙлөлөктөн, ялғандан, исрафтан һәм һаранлыҡтан һаҡланыу зарур. Зинанан һаҡланған кеүек, күҙ, ҡолаҡ һәм телгә янаған йәшерен һәм асыҡ әхлаҡһыҙлыҡтарға юлды ныҡлы ябыу зарур.

❁

Тормоштоң ниндәйҙер өлкәһендә ислам ҡанундарына эйәреү һәм икенсеһендә инҡар итеү яраған эш түгел. Ислам мәсеткә бикләп ҡуйыла алмай. Ислам тән менән ҡылынған ғибәҙәт һәм асыҡтан-асыҡ харамдан һаҡланыу ғына түгел.

Асыҡ һәм йәшерен – бер-береһен тултырып торған ике элемент. Бынан сығып, шуны әйтә алабыҙ: дини ҡанундарҙың бер өлөшөн илке-халҡы, тейешенсә үтәмәү икенсе өлөшөнә лә йоғонто яһай. Бер ҡанаты һынған ҡош оса алмаған кеүек, диндең асыҡ йәки йәшерен ҡылынған бер ҡанатына иғтибар бирмәгән мөьмин дә алыҫҡа китә алмай.

❁

Бөгөн, ҡыҙғанысҡа ҡаршы, асыҡ, күренеп торған тыйыуҙарға ҙур иғтибар бирелһә лә, күҙгә күренеп тормағандарға иғтибар юҡ. Мәҫәлән, мосолман ғүмере буйы сусҡа итен ашамай, ул унан ерәнә. Әммә ләкин ялғандан, ғәйбәттән һәм яман һүҙҙәрҙән телен араламай. Ә бит был йәшерен булған тыйыуҙар сусҡа итен ашау кеүек үк әшәкелек.

❁

Аятта әйтелә:

«...Уйҙырмаларҙан (ғәйбәт, имеш-мимештәрҙән) ваз кисегеҙ. Улар гонаһ. Кешенең серен һатмағыҙ. Шымсылыҡ ҡылып, бер-берегеҙҙең ғәйе-

бен (тырнаҡ аҫтынан кер) эҙләмәгеҙ. Берегеҙ икенсегеҙҙең артынан (яман) һөйләп ҡалмаһын. Үлгән туғанының итен ашап, кеше йәм табырмы?..» (әл-Худжүрат (Бүлмәләр), 12).

Әруахтар үҙҙәрен хурлаған, яла яҡҡан кешеләрҙе ишетә һәм үҙен яҡлай алмаған кеүек, үҙе юҡта ғәйбәтселәрҙең хурлауына дусар булған кеше лә тегеләргә яуап ҡайтара алмай.

Шуға күрә ғәйбәт гонаһы Ҡөрьәндә «үлгән туғанының итен ашау» кеүек ҡәбәхәт бер ғәмәлгә тиңләштерелә.

❁

Ғәйшә (радыйаллаһу ғәнһә) әйткән:

«Ғәжәп, кеше иман ҡәрҙәше тураһында яман һүҙҙәр әйткәндән һуң түгел, хәләл ризыҡ ашағандан һуң ауыҙын сайҡай!».

❁

Салих заттарҙан булған мөхтәрәм Фудайл ибн Ияз әйткән:

«Ғәйбәт булған ерҙән ҡәрҙәшлек юғала».

❁

Нәфесебеҙгә, шайтанға һәм яман кешеләрҙең золомона ҡаршы тороп, һуңғы һулышыбыҙға тиклем «тәҡүәлек кейемендә» булыу мәңгелек ҡотолоуыбыҙ өсөн уғата мөһим. «Тәҡүәлек кейеме» – ул һәр даим илаһи күҙәтеү аҫтында булыуыбыҙҙы тойоу, Раббыбыҙ Аллаһтың асыуына тарырҙай хәләттәрҙән, ғәмәлдәрҙән ҡасыу. Был йәһәттән бер генә мәлгә лә нәфес һәм шайтанға ҡарата ғәмһеҙлек күрһәтергә ярамай. Аллаһ Илсеһенең (салләллаһу ғәләйһи үә сәлләм) һүҙҙәрен үҙебеҙҙең тормош девизыбыҙ итеп алыу лазым:

«Йә Раббым! Мине бер генә мәлгә лә яңғыҙ ҡалдырмасы!».

❁

Мөхтәрәм Ғүмәр (радыйаллаһу ғәнһү) әйткән:

«Яман ғәмәлдең иң йәшерен шаһиты – ул беҙҙең намыҫ».

❁

Изге аятта әйтелә:

«Әйт: «Теләгәнегеҙсә ғәмәл ҡылығыҙ, һәм Аллаһ та, Рәсүлүллаһ та, мосолмандар ҙа ҡылғанығыҙҙы күрәсәк. Йәшеренде лә, асыҡты ла белеүсе Аллаһ хозурына ҡайтарыласаҡһығыҙ. Ул һеҙҙең нимәләр ҡылғаныгыҙ тураһында хәбәр бирәсәк» (әт-Тәүбә, 105).

Йәғни беҙ онотмаҫҡа тейешбеҙ: ғәмәлдәребеҙ Аллаһҡа билдәле һәм хатта Аллаһ Илсеһенә лә (салләллаһу ғәләйһи үә сәлләм) күрһәтеләсәк. Беҙ кеше алдында ғына түгел, яңғыҙ саҡта ла яман ғәмәлдәр ҡылыуҙан һаҡланырға тейешбеҙ. Бөгөнгө көндә хаталарҙан һаҡланыу иртәгә иртәгә бит Хисап көнөндә беҙҙе хурлыҡтан йолоп ҡаласаҡ.

❁

Аллаһ Илсеһе (салләллаһу ғәләйһи үә сәлләм) хәҙистәрендә әйтә:

«Эй. кешеләр! Мин һеҙҙән алда китәсәкмен һәм һеҙҙе Йәннәттәге Кәүсәр һыуы буйында көтөп торасаҡмын. Кем минең менән осрашырға ынтыла, шул ҡулын һәм телен гонаһтарҙан һаҡлаһын!» (Бохари, Саләт, 80; Ибн Сад, II, 227).

«Минең тормошом – һеҙҙең өсөн бәрәкәт, сөнки һеҙ хәҙистәрҙе ишетәһегеҙ һәм башҡаларға һөйләйһегеҙ. Минең үлемем дә - һеҙҙең өсөн бәрәкәт, сөнки һеҙҙең ғәмәлдәрегеҙ миңә күрһәтелә. Әгәр ғәмәлдәрегеҙ хәйерле булыуын күрһәм, Аллаһҡа рәхмәтемде белдерәм. Әгәр яманлыҡтарығыҙҙы күрһәм, һеҙҙең өсөн ғәфү үтенәм» (Хайсами, IX, 24).

«Мине оятлы итмәгеҙ (гонаһтарығыҙ менән)» (ҡар. Мөслим, Хадж, 147; Әбү Дауыд, Манасик, 56).

❁

Хаджа Мөхәммәд Лүтфи (Алварлы Эфе) (рахимәһуллаһ) шиғырҙарының береһендә шундай кәңәш бирә:

Һаҡ бул, зинһар, яралама йөрәктәрҙе, ҡылма золом!

Ят күрһә лә, тап берәүгә йылы һүҙең!

Мөхәббәт юламсыһына ҡылма золом!

Бәләләргә түҙемле бул, Рәхимлелә көн итеүең!

Кеше булһаң, һис бер йәнгә ҡылма золом!

Яҙыҡтарың күреп, әрнемәһен ғаләм нуры Пәйғәмбәрең (ғәләйһис-сәләм)!

Аллаһтың яҡшы ҡоло булыр өсөн, имандан ихсанға (ихласлыҡҡа) юл тотоу зарур. Ихсан – һәр саҡ һәм һәр ҡайҙа Раббыбыҙ Аллаһтың һине күреп, күҙәтеп тороуын тойоуҙан килгән юғары рухи халәт. Һәр мәл Хаҡ Тәғәләгә ҡарата шундай халәттә булып, бәндә һәр ҡайҙа, хатта һис кем булмаған аулаҡта ла гонаһтарға ҡаршы торорға көс таба.

❁

Мөхтәрәм Руми былай тип яҙған:

«Ҡәлғә гарнизоны ил сигендә, солтандан һәм баш ҡаланан алыҫ булһа ла, ҡәлғәне дошмандарҙан һаҡлай. Бик күп аҡсалар тәҡдим итеп, уларҙы һатып алырға тырышҡан һүрәттә лә, улар ҡәлғәне дошманға барыбер бирмәйәсәк. Ил сигендә, солтандан алыҫ булһалар ҙа, улар уның янында йөрөгәндәй тоғро. Солтан өсөн был алыҫтағы гарнизон үҙ эргәһендә йөрөгәндәрҙән, ғүмерен ҡорбан итергә әҙер торғандарҙан ҡиммәтерәк».

❁

Мөхтәрәм Шафиғи имам әйткән:

«Шундай өс ғәмәл бик ауыр:

1. Мөмкинлектәрең сикле саҡта йомарт булыу.

2. Һәр саҡ дөрөҫөн һөйләү.

3. Яңғыҙ саҡта ла тәҡүәлектән ситләшмәү».

❁

Тәҡүәлек – нәфес әүәҫлектәренән арыныу, рухи һәләттәреңде асыу, йөрәгең менән һәр мәл илаһи камералар аҫтында тороуыңа инаныу.

Тәҡүәлек – харамдан баш тартыу һәм, Аллаһтың ризалығын һәм мөхәббәтен юғалтыуҙан ҡурҡып, мәкруһтан да ентекле ҡасыу.

❁

Хәҙистә әйтелә:

«Кеше, зыянлы булыуынан ҡурҡып, (шәриғәт буйынса) зыянһыҙ тип иҫәпләнгән нәмәләрҙән дә һаҡланмай тороп, тәҡүәлек дәрәжәһенә ирешә алмаҫ» (Тирмизи, Ҡиәмә, 19/2451).

❁

Мөхтәрәм Ғосман (радыйаллаһу ғәнһү) әйткән:

«Биш нәмә тәҡүәләр сифаты булып тора:

1. Салихтар һәм тәҡүәләр менән бергә булыу.

2. Нәфесеңде паклау һәм телеңде контролдә тотоу.

3. Нәфесеңә хуш килгәнгә эйә булғанда, уның зыянын күрә белеү. Дингә ҡағылышлы бәләкәй генә нимәгә эйә булғанда ла, уны бөйөк ҡаҙаныш, тип иҫәпләү.

4. Уға, бәлки, харам ҡушылғандыр, тигән хәүеф менән, хатта хәләлде лә самалап ҡулланыу.

5. (Үҙеңде кәмселекле күреп һәм тотанаҡлы булып, рухи йәһәттән) бөтәһе лә ҡотолған һәм бер үҙең һәләк булғанһың, тип уйлау».

❁

Мөхтәрәм Ғүмәр (радыйаллаһу ғәнһү) Үбәй бин Ҡәғбтән (радыйаллаһу ғәнһү) тәҡүәлектең сифаты тураһында һораған:

– Ғүмәр, һин берәй заман сәнскеле юлдан үткәнең булдымы?

Мөхтәрәм Ғүмәр (радыйаллаһу ғәнһү) яуап биргән:

– Эйе, йөрөнөм.

– Нисек итеп унан йөрөнөң?

– Мин, кейемемде ҡармап тотоп, сәнскеләр зыян итмәһен өсөн, бөтә тырышлығымды һалдым.

– Ана шул була инде тәҡүәлек» (Ибн Касир, Тафсиру аль-Курани аль-Азим, Бейрут, 1988, I, 42).

❁

Тәҡүәлелек – бишектән ҡәбергә саҡлы булған был фани донъяла ислам һәм иман кейеменә зыян һалмаһындар һәм йыртып ташламаһындар өсөн, гонаһ сәнскеләренән, харамдан, дингә ғафиллыҡтан һәм исламдан булмаған нәмәләргә ташлама яһауҙан үҙеңде араларға тырышыу.

❁

Мөхтәрәм Әбү Бәкер (радыйаллаһу ғәнһү) әйткән:

«Аҡыллы тәҡүәле булыр, ә иҫәр йәберләүсе булыр».

❁

Ниндәйҙер берәүҙең хаҡына кереүсе уны ғына йәберләмәй. Мәңгелек тормошондағы ғазапҡа сәбәп булырҙай гонаһ ҡылғанлыҡтан, ул асылда үҙ-үҙенә золом ҡыла.

❁

Иң ҙур золом – гонаһ һәм итәғәтһеҙлек ҡылып, кешенең үҙ-үҙенә зыян һалыуы. Кемделер йәберләү, ары китһә, кешенең үлеменә, йәғни уның донъя ҡуйыуына алып килеүе ихтимал, ә харам һәм итәғәтһеҙлек ҡылып үҙеңә золом ҡылыу иһә бөтә әхирәт тормошоңдо һәләк итеүе мөмкин.

❁

Беҙгә, иман эйәләренә, фани донъя бәлә-ҡазаларынан түгел, ә, Аллаһ һаҡлаһын, Әхирәт тормошобоҙҙо ғазапҡа әйләндереүсә итәғәтһеҙлектән, шөкөрһеҙлөктән, гонаһтарҙан, ғафиллыҡтан һәм нәфес әүәҫлектәренән ҡурҡыу зарур.

❁

Ваҡыт-ваҡыт донъяла булып торған ҙур һәләкәттәр хафаға һала. Беҙ ер тетрәүенән, һыу ташҡындарынан ҡурҡабыҙ. Кешеләр өсөн был тәбиғи хәл. Әммә иң нығы беҙ гонаһтарҙан ҡурҡырға тейешбеҙ:

– Беҙ, ғафиллығыбыҙ сәбәпле, гонаһҡа кереп китеүҙән ҡурҡырға тейешбеҙ.

– Беҙ ауыҙыбыҙҙан сыҡҡан яҙыҡтарҙан ҡурҡырға тейешбеҙ.

– Беҙ кәрәкмәгән экрандарға текәлеүҙән ҡурҡырға тейешбеҙ.

– Беҙ хаҡыбыҙ булмаған нәмәгә хужа булырға тырышыуҙан ҡурҡырға тейешбеҙ.

– Беҙ мәрхәмәт һәм шәфҡәттән мәхрүм ҡалыуҙан ҡурҡырға тейешбеҙ.

– Беҙ күңелебеҙҙәге мәрхәмәтебеҙ, шәфҡәтебеҙ һайығыуҙан, ҡороуҙан ҡурҡырға тейешбеҙ.

– Беҙ исламдың асылын, холҡон тарата, «яҡшылыҡҡа саҡырыу һәм яманлыҡтан тыйыу» бурысын атҡара алмауыбыҙҙан ҡурҡырға тейешбеҙ.

– Беҙ башҡаларға исламдың ихласлығын тарата алмауыбыҙҙан ҡурҡырға тейешбеҙ.

Беҙ быларҙың һәммәһенән ҡурҡырға бурыслы. Әйҙәгеҙ, йәмәғәт, һуңғы һулышыбыҙҙа фәрештәләр «ҡурҡыу һәм борсолоуҙан азатһығыҙ» тигән ҡыуаныслы хәбәр килтергән Аллаһтың бәхетле ҡолдары булырға ынтылайыҡ...

❁

Тәкүәле әҙәмдәр харам ғәмәлдәр ҡылынған урындың күләгәһендә ултырыуҙан да тайшанған, сөнки ундай ерҙәрҙә күңелдәргә аяуһыҙлыҡ үтеп инеү хәүефе бар. Күңел һиҙгерлеге, нескәлеге тәкүәлелерҙе ундай урындарҙы урап үтергә мәжбүр итә.

❁

Билдәле булыуынса, профилактик медицинала инфекцияларҙан киҫәтеү сараһы рәүешендә микробтар сығанағы булған урындарҙан алыҫ булыу, таҙалыҡҡа нығлы иғтибар биреү, организмдың иммунитет системаһын нығытыу ҡаралған. Гонаһтарға, золом ҡылыусыларға ҡаршы тороу өсөн, мосолманға ла

барса кире тәьҫирҙәрҙән, айырыуса телевидениены, интернет һәм моданың кире йоғонтоһонан үҙеңде аралау мөһим.

❁

Эпидемияларға ҡаршы ғәҙәттән тыш саралар беҙҙе уйландырырға, үҙ-үҙебеҙҙән хисаплама алырға мәжбүр итергә тейеш. Һәммәбеҙгә фекерләп ҡарау зарур:

– Вирустарҙан һаҡланыуҙың социаль дистанция тотоу ҡағиҙәһен рухи һаулығыбыҙҙы һаҡлау өсөн файҙаланабыҙмы? Йәғни харамдан, мәкруһтан, шайтан витриналарынан, нәфес экрандарынан, Аллаһтың асыуына тарығандарҙан алыҫ булырға һәләтлеме беҙ?

– Ҡулдарыбыҙҙы. йоттарыбыҙҙы дезинфициялаған кеүек, йөрәгебеҙ төйәген гонаһтар керенән, ғафиллыҡтан тәүбә күҙ йәштәре, ғәфү һорап ялбарған доғалар, үкенестәр менән паклайбыҙмы?

– Үҙебеҙҙе, ғаиләбеҙҙе сирҙәрҙән аралау өсөн, карантин сараларын файҙаланабыҙ. Йәмғиәтебеҙҙә таралған рухи пландағы эпидемияларҙан, йәғни ялған уйҙырмаларҙан, инаныстарҙан, әхлаҡһыҙлыҡтан, хаяһыҙлыҡтан һаҡланыу өсөн тырышабыҙмы?

– Физик һаулығыбыҙҙы, иммунитетыбыҙҙы нығытыу өсөн, беҙ витаминдар ҡулланабыҙ, ризыҡты ла ентекле һайлап алабыҙ. Әммә тәҡүәлелеккә бәйле рухи сәләмәтлегебеҙҙе нығытыр өсөн, гонаһтарға ҡаршы тороҙай көсөбөҙҙө арттырыр өсөн тырышлыҡ һалабыҙмы?

Бөтә донъяға хәүеф менән янаған вирус эпидемияһына ҡаршы таҙалыҡ булдырыу, гигиенаға ҙур иғтибар биреү ише матди саралар күргән кеүек, йөрәкте һәләк иткән рухи бәләләргә ҡаршы ла һуңғы һулышыбыҙға саҡлы тәҡүәлелеккә бәйле һаҡланыу сараларын күреү мөһим.

Ҡулыбыҙҙы, телебеҙҙе, күҙебеҙҙе, ҡолағыбыҙҙы, аҡыл һәләттәребеҙҙе лә яҙыҡтар бысрағынан аралау ифрат мөһим.

❁

Мөхтәрәм Әбү әл-Хәсән Хараҡани әйткән:

«Аллаһ беҙҙе донъяға пак килеш алып килде. Уға бысраҡ килеш ҡайтмағыҙ!».

❁

Сабый, донъяға килгәндә, болғансыҡ шыйыҡлыҡ эсендә ятһа ла, хуш еҫле була. Ул шатлыҡ, йөрәккә йыуаныс бирә. Был наҙлылыҡ, һөйкөмлөлөк уның сафлығы, гонаһһыҙлығы нәтижәһе.

Аллаһ Сүбхәнәһү үә Тәғәлә беҙҙең ошо донъяға килгәндәге сафлығыбыҙҙы һаҡлауыбыҙҙы, лайыҡлы тормош көтөүебеҙҙе, Уға яҡшы ғәмәлдәр яҙылған Китап менән ҡайтыуыбыҙҙы теләй. Аятта әйтелә:

«Ул Көндө мал да, улдар ҙа файҙа килтермәҫ. Әммә ләкин Аллаһҡа саф күңел менән инанғандар ғына Йәннәткә яҡынлаштырылыр» (әш-Шүғәрә (Шағирҙар), 88-89).

❁

Мөхтәрәм Әбү әл-Хәсән Хараҡани әйткән:

«Аллаһ разый булмаған нәмәләрҙе һөйләй алмаһын өсөн, ауыҙыңды мисәтләп ҡуй!

Аллаһтан башҡа һис нәмәгә тартылмаһын өсөн, йөрәгеңде мисәтләп ҡуй!

Һис бер харам инмәһен өсөн, ирендәреңде йоҙаҡлап ҡуй!

Ихлас ғәмәлдәр генә ҡылһын өсөн, башҡа ағзаларыңды ла мисәтләп ҡуй!».

❁

Әгәр йөрәк яҙыҡтар бысрағы менән тапланһа, ул ғафиллыҡ ҡараңғылығына бата һәм ҡата. Бысраҡ һәм таптар менән ҡапланған көҙгө тора-бара бөтә нәмәне тоноҡ сағылдырған кеүек, гонаһтар бысрағы ла күңел күҙен һуҡырайта, кеше яҡшыны ямандан, изгелекте золомдан айыра алмай башлай. Һәм шундай мәл етә: йөрәккә ғүмер биргән иман нуры ла һүнә.

Бындай халәттең үле тән ятҡан ҡәбер соҡоронан айырмаһы юҡ. Мәхмәд Акиф әйткәнсә:

Иман – илаһи һәм бөйөк нигеҙ ул!

Иманһыҙ тутыҡ йөрәк – күкрәккә ауыр ул!

❁

Әйтәйек, йөрәк – иман, мөхәббәт һәм мәрхәмәт менән тулы таҙа стакан икән, ти. Әгәр ул стаканға бер тамсы ғына нәжес төшһә, ул шундай уҡ матур хәлдә ҡалырмы? Юҡ, әлбиттә!

Уҫаллыҡ, хөсөтлөк, тәкәбберлек, яманлыҡҡа әүәҫлек һәм шөкөрһөҙлөк ише яман сифаттар, һәм шулай уҡ уларҙың ғәмәлдәге сағылышы булған ғәй-

бәт, ялған, яла яғыу һәм исраф ҡәлбебеҙ донъяһын ағыулаған нәжес тамсыһы кеүек.

❁

Исемдәренең береһе Сәттәр (Йәшереүсе, Ғәфү итеүсе) булған Раббыбыҙ Үҙенең ҡолдарының күп гонаһтарын йәшергән һәм уларҙы башҡаларға күренмәҫлек итеп йөрәккә ҡара таптар итеп урынлаштырған. Асылда был Уның сикһеҙ Мәрхәмәтенең кәүҙәләнеше. Әгәр ҙә ки ҡылынған гонаһтарҙың эҙе йөрәктә түгел, ә ҡара тап булып маңлайҙа ҡалһа, кешеләр бер-береһенең йөҙөнә ҡарай алмаҫ ине...

❁

Раббыбыҙ алдында оятҡа ҡалмаҫ өсөн, барса харам һәм мәкруһ нәмәләрҙән ентекле ҡасыу лазым. Беҙҙең көндәрҙә бәндәләрҙе рухи һәләкәткә алып килеүсе оло гонаһтар йәмғиәттә махсус рәүешә таратыла, уларҙы ғәҙәти нәмәләр итеп күрһәтергә тырышалар. Беҙгә Хисап та, Китап та, Әхирәт тә онотолған йәшәү рәүешен көсләп тағырға маташалар. Шуға күрә үҙебеҙгә лә гонаһтарҙан йыраҡ булыу, балаларыбыҙҙы ла шуға күнектереү зарур.

❁

Күҙ яҙыҡтарына бөгөн айырыуса ҙур иғтибар биреү мөһим, сөнки урам, тыҡырыҡтарҙың тышҡы күренеше, төрлө рекламалар, интернет һәм телевизион программалар кешелерҙең рухиәтен ағыулай. Күҙ күрә, әммә ғафиллыҡтың бөтә ауырлығы йөрәккә төшә.

❁

Хәҙистә әйтелә:

«Караш – Иблистең ағыулы уҡтарының береһе. Аллаһтан ҡурҡып харамдан тыйылғанға Аллаһ шундай иман бүләк итәсәк: уның татын ул бөтә йөрәге менән тоясаҡ» (Хаким, IV, 349/7875; Хайсами, VII, 63).

❁

Мөхтәрәм Ғәлигә (радыйаллаһу ғәнһү) мөрәжәғәт итеп, Аллаһ Илсеһе (салләллаһу ғәләйһи үә сәлләм) әйткән:

«Эй, Ғәли, ҡарашың яңылыш харамға төшһә, яңынан ҡарама! Тәүге ҡарашың иһә – һинең өсөн (ғәфү ителгән), ә икенсе ҡарашың – һиңә ҡаршы (йәғни гонаһ булып тора))» (Әбү Дауыд, Никах, 42-43/2149; Тирмизи, Әҙәп, 28/2777; Хайсами, VIII, 63).

Йәғни әгәр күҙебеҙ яңылыш тыйылған нәмәгә төшһә, ул тәүге ҡараш ғәфү ителә, әммә артабан ҡарау тыйыла.

Мәҫәлән, һәр машинаның һан тамғаһы бар. Әммә автомобилде күргән кешеләр ул тамғаларға иғтибар бирмәй. Шуның һымаҡ хәҙерге замандағы ислам хупламаған күренештәрҙе тамаша ҡылыуҙан үҙебеҙҙе һаҡларға тейешбеҙ.

❁

Иманлы әҙәм, нәфесенә хуш килгән нәмәләргә тап булһа, туҡтарға һәм уйланырға тейеш. Ҡылырға ниәтләгәндәрен ул, тәҡүәлек иләге аша иләп, илаһи ҡанундарға тап килеү-килмәүен тикшерергә, фани һәм Әхирәт тормошо өсөн файҙалымы икәнлеген асыҡларға тейеш. Оноторға ярамай: тәү ҡарамаҡҡа бәхет булып тойолған күп нәмәләр мәңгелек бәхетһеҙлек сәбәпсеһе булыуы ихтимал.

Аллаһ Илсеһе (салләллаһу ғәләйһи үә сәлләм) бер хәҙисендә әйткән:

«Йәннәт (өлгөрөп етмәгән) нәфескә хуш килмәгән нәмәләр менән уратылған, ә Йәһәннәм (өлгөрөп етмәгән) нәфескә хуш килгән, ул теләгән нәмәләр менән уратылған» (Бохари, Рикак, 28; Мөслим, Джәннәт, 1).

❁

Мөхтәрәм Ғабдулҡадир Ғәйләни әйткән:

«Эй, улым! Фаниҙы йыйғанда, төндә ҡулына нимә эләккәнен абайламаған сытыр йыйыусы кеүек булма. (Тешләүе, ағыулауы ихтимал булған йылан эләгеүе бар ҡулыңа. Шуға күрә) тапҡан милкең хәләлме, әллә хараммы, законлымы, әллә законһыҙмы икәнлегенә уяу бул. Барса ғәмәлдәреңдә тәҡүәлелек ҡояшы бул».

❁

Иманлы әҙәм шуны онотмаҫҡа тейеш: был донъя – һынауҙар урыны, ә хәҡиҡи тормош – мәңгелек донъялағы тормош. Шул сәбәпле ул нәфесе әүәҫлектәренә эйәреп түгел, ә хәләл һәм харамға иғтибарлы булып ғәмәл ҡылырға тейеш. Лоҡман Хакимға шундай һорау биргәндәр:

«Хикмәткә һин кемдән өйрәндең?» Уның яуабы былай булған:

«Мин хикмәткә һуҡырҙарҙан өйрәндем, сөнки улар, юлды таяҡтары менән тикшермәй тороп, бер аҙым да яһамай».

❁

Фани донъялағы нәмәләргә харам юл менән эйә булырға тырышҡандарҙың йөрәктәре һуҡыр, Ғүмәр ибн Ғабдул Ғәзиз (рәхимәһуллаһ) әйткән:

«Харам – ул ут. Ҡәлбе үлгәндәр генә уға тартыла. Уға тартылғандарҙың ҡәлбе тере булһа, улар, һис шикһеҙ, уттың көйҙөрөүен тойор ине».

❁

Ғафиллыҡ йөрәкте хәҡиҡәтте күрергә ҡамасаулаған пәрҙә менән ҡаплай. Был халәттә кеше ғәмһеҙ рәүештә мина яланы буйлап йөрөй, иҫе лә китмәйенсә текә упҡын ситенән йөрөй.

❁

Мөхтәрәм Ғүмәр (радыйаллаһу ғәнһү) әйткән: «Золомдо белмәгәндәр уның тоҙағына эләгә».

❁

Яхъя ибн Муғаз (рәхимәһуллаһ) Әхирәт тураһында онотҡан һәм яҙыҡтарҙан йыраҡ булырға тырышмаған ғафил кешеләрҙең халәтен тасуирлай:

«Шуныһы ғәжәп: кеше сирҙән ҡурҡып хәләл ризыҡтан баш тарта, әммә ләкин, Йәһәннәмдән ҡурҡып, харамдан тыйылмай».

❁

Мөхтәрәм Бишр Хафи әйткән:

«Әгәр кешеләр Аллаһтың Бөйөклөгө тураһында тейешенсә фекер йөрөтөп ҡараһа, улар Уға итәғәтһеҙ була алмаҫ» (Ибн Кәсир, I, 448).

❁

Ҡасим ибн Мөхәммәд (рәхимәһуллаһ), берәүҙең шундай һүҙҙәрен ишеткән:

«Фәлән-фәлән Аллаһҡа ҡарата ни тиклем әҙәпһеҙ!», һәм уны киҫәткән:

«Әҙәм балаһы Аллаһҡа ҡарата әҙәпһеҙ була алмай! Әммә шулай тип әйтергә була: «…Аллаһты ул ни тиклем әҙ белә!»» (Ибн Әсакир, Тариху Димәшк, том 49, с. 180).

Мөхтәрәм Мәхмүд Сәми Рамазан улы әйткән:

«Үҙенең мәрхәмәтле атаһына итәғәтһеҙ булған әҙәмде “иҫәр”, тиҙәр. Мәрхәмәтлеләрҙән-Мәрхәмәтле Ҡөҙрәтле Аллаһтың әмерҙәренә буйһонмаған кеше тураһында нимә әйтәһең инде!».

❁

Шәйех Сәғди әйткән:

«Минең атайым, йәнен Аллаһтың рәхмәтенә тапшырыр алдынан, миңә шундай кәңәш бирҙе:: «Улым! Аллаһтан ситкә алып киткән нәфесеңдең һәр бер теләге – ҡурҡыныс ут, унан һаҡлан! Үҙеңә Йәһәннәмдә ут дөрләтмә! Әгәр ул ялҡынға түҙерлек көсөң юҡ икән, бөгөн сабырлығың менән уны һүндерергә тырыш!».

ХОЗУРЛЫ ҒАИЛӘ УСАҒЫ

Донъялағы иң бәхетле ғаилә усағы – Пәйғәмбәребеҙҙең (салләллаһу ғәләйһи үә сәлләм) ғаиләһе. Атайҙың, ғаилә башлығының иң күркәм урнәге – Аллаһ Илсеһе (салләллаһу ғәләйһи үә сәлләм). Уның ҡатындары Хәҙисә, Ғәйшә һәм башҡалар, ҡыҙы Фатима – тәкүәле ҡатындарҙың иң юғары урнәге. Рухиәт критерийҙарына ярашлы тәбиәләнгән уларҙың балалары Хәсән һәм Хөсәйен Аллаһ Илсеһе (салләллаһу ғәләйһи үә сәлләм) йөрәге халәтенән үҙ насибын алыусылар. Шулай уҡ беҙҙең балаларыбыҙ ҙа, Аллаһ бойорһа, беҙ баҡыйлыҡҡа күскәс, Раббыбыҙ Аллаһҡа хәмед-ҫәнәләребеҙҙең сәбәбе, беҙҙең лайыҡлы вариҫтарыбыҙ, саҙаҡа-и джәрийә (өҙлөкһөҙ саҙаҡа) булыр.

Никах – пәйғәмбәрҙәр юлы ул, Аллаһ Илсеһе (салләллаһу ғәләйһи үә сәлләм) Сөннәте, кешенең гүзәл рәүештә үҫеше, ир һәм ҡатын өсөн хөрмәт һәм әҙәп, намыҫлылыҡ һәм ғиффәтлек терәге, кешеләрҙе хайуандарҙан өҫтөн ҡуйған шәрәфәт.

❁

Изге аятта әйтелә:

«Үҙегеҙҙән ҡатындарҙы яралтыу ҙа, ул ҡатындар менән (ләззәтләнеп) бергә йәшәүегеҙ ҙә, ир менән ҡатын араһындағы мөхәббәт һәм наҙ, бер-береңдең хаталарын кисерә белеү, һис шикһеҙ, Аллаһтың ҡөҙрәтенә асыҡ дәлилдәрҙер. Хаҡтыр, был эштәрҙә фекерләй белеүсе ҡәүемдәр өсөн ғибрәттәр бар» (әр-Рум (Румиҙар), 21).

Ысынлап та, ике ят кешене ғаилә итеп берләштергән никахҡа бик күп нәсихәттәр һәм йәшерен мәғәнәләр һалынған. Ата-әсә йортон ҡалдырған ике йәш кешенең Аллаһ бүләк итеп биргән мөхәббәт һәм мәрхәмәт ярҙамында бер-береһенә йөрәктәре менән бәйләнеүе, хатта ки бер-береһенә ата-әсәһенә, туғандарына ҡарағанда ла нығыраҡ яҡынайыуы – юғары хикмәт кәүҙәләнеше.

Мөхтәрәм Мухйиддин Ғәраби никахлашырға саҡырыу һәм никахлашыусыларға ярҙам итеүҙең дәрәжәһе тураһында былай тигән: «Иң яҡшы хәйерле ғәмәл – никахлашыусыларға ярҙам итеү. Сөнки [ул никахлаштырғандарҙың] киләсәк быуыны ҡылған һәр изгелек өсөн уға ла сауап тейешле».

❁

Раббыбыҙ Аллаһ Үҙ ҡолдарының ғиффәтле һәм тыныс йәшәүен теләй. Уның өсөн иң яҡшы сара – никах. Шуға күрә, кемдең ғаилә төҙөргә мөмкинлеге бар, быны эшләргә тейеш. Бынан тыш, мөмкинлектәре самалы булғандарға никахлашырға ярҙам итеү – ислам йәмғиәтенә йөкмәтелгән илаһи яуаплылыҡ. Аятта әйтелә:

«Буйҙаҡтарҙы, ҡолдарығыҙҙан, йәриәләрегеҙҙән (ҡатын ҡолдарығыҙҙан) булғандарҙы өйләндерегеҙ, кейәүгә биреген. Фәкир булғандарҙы Аллаһ үҙ ниғмәттәре менән байытыр, иншә Аллаһ. Ниғмәттәре мул булған һәм бар нәмәне лә белеп тороусы – Ул - Аллаһ» (ән-Нур, 32).

Ата-бабаларыбыҙ Аллаһ ризалығы өсөн хәйриә фондтары булдырған. Улар шуны яҡшы аңлаған: йәмғиәттәге тәртип һәм әхлаҡ ғиффәтлек нигеҙе булған имен ғаиләләргә бәйле.

❁

Милләттең терәге, именлеге – дин һәм әхлаҡ. Әхлаҡи паклыҡ иһә никахтарға бәйле. Шуға күрә Аллаһ Илсеһе (салләллаһу ғәләйһи үә сәлләм) никахлашыу ғәмәленә ауырлыҡ тыуҙырмау хаҡында киҫәткән: *«Иң яҡшы никах – ҙур сығым сарыф итеүҙән азат булған никах»* (Әбү Дауыд, Никах, 32).

Тимәк, кәләштең ата-әсәһенә ҡалым рәүешендә аҡса һәм ниндәйҙер ҡимәтле нәмәләр биреүе, кәләш йөҙөн асып күрһәтһен өсөн, кейәүҙең уға ҡимәтле биҙәүестәр бүләк итеүе кеүек йолалар яһилиәт заманынан ҡалған һис бер кәрәге булмаған яһалма ауырлыҡтар, мәшәҡәттәр.

❁

Исраф ҡылып, күп аҡса түгеп туйҙар үткәреү ғаиләләрҙе тарҡатыуы, ҡаҡшатыуы ихтимал, шуға күрә ислам быға ҡырҡа ҡаршы. Ислам бит шарлап ағып ятҡан йылға янында тәһәрәт алыусыны ла хатта һыуға ҡарата һаҡсыл булырға өндәй.

Кейәү һәм кәләштең ата-әсәһе бай булған һүрәттә лә, алтын урталыҡты һаҡлау, тирә-йүндәге фәкирҙәр тураһында онотмау зарур. Туйҙарҙы байлығың менән маһайыу, маҡтаныу сараһына әйләндереү – һис тә килешмәгән исраф, ислам әхлағы принциптарын дөрөҫ аңламауҙың дәлиле.

Бөгөн тәҡүәлелек принциптарынан тайпылыу күбеһенсә туй тантаналарындағы исламдан булмаған йолаларҙа күҙәтелә.

Балаларыбыҙ яңы тормош башлаған ундай йыйындарҙы Ҡөрьән уҡыу, доғалар, рухи әңгәмәләр һәм, рәхмәт доғаларына лайыҡ булыу өсөн, фәҡирҙәрҙе табынға саҡырыу кеүек ғәмәлдәр менән биҙәү яҡшы булыр ине.

Ҡыҙғанысҡа ҡаршы, беҙҙең көндәрҙә ир һәм ҡатындар бергә ултырған, фәҡирҙәр онотолоп, күбеһенсә байыраҡ ҡунаҡтар саҡырылған туйҙар ғәҙәткә инеп бара. Мода күрһәтеүгә оҡшаған ундай саралар исраф һәм байлыҡ менән һауаланыу тантанаһына әйләнә. Былар барыһы ла илаһи мәрхәмәт юғалыуға һәм Аллаһтың асыуына тарыуға сәбәп кенә була.

Никах кеүек хәйерле ғәмәлде Аллаһтың асыуына тарырҙай нәмәләрҙән башлау – сиктән ашҡан ғафиллыҡ һәм наҙанлыҡ.

Онотмайыҡ, ислам – бер бөтөн. Бер өлкәлә уның ҡанундарына эйәреү һәм икенсеһендә уны онотоу ярамай. Аллаһ Сүбхәнәһү үә Тәғәләнең рәхмәте төшһөн өсөн, беҙ тормошобоҙҙо уның юғары ҡанундарына ярашлы ҡорорға тейешбеҙ.

❁

Раббыбыҙ Аллаһ бәндәләренең Үҙенең ризалығы өсөн төҙөлгән никах нәтижәһендә барлыҡҡа килгән имен, бәхетле ғаиләлә тыуыуын теләй. Изге никах институтында ир һәм ҡатындың, ата-әсәнең һәм балаларҙың бер-береһенә ҡарата хоҡуҡтары һәм бурыстары бар.

Хәҙистә әйтелә:

«Һеҙҙең һәр берегеҙ көтөүсе һәм үҙ көтөүе өсөн яуаплы… Ир үҙ ғаиләһендә көтөүсе һәм үҙ көтөүе өсөн яуаплы; һәм ҡатын да көтөүсе - иренең йорто һәм ғаиләһе өсөн яуаплы» (Бохари, Ахҡам, 1; Мөслим, Имарат, 20).

❁

Атай – ғаилә күгендәге Бәхет ҡояшы, әсәй – йөрәк йылыһының нурын таратҡан, ғиффәтлек пәрҙәһе булған Ай, ә балалар – был изгелек күгендге ынйы-йондоҙҙар.

Ғаилә именлеген тәьмин итеүгә, ғаиләһен тәрбиәләүгә бөтә аҡылын, көсөн, ғилемен, ихтыярын һәм тәжрибәһен бағышлаған атай, һис шикһеҙ, хөрмәткә, мөхәббәткә, ихтирамға лайыҡ. Уға итәғәтһеҙлек күрһәтеү, яман һүҙҙәр әйтеү һис тә яраған эш түгел. Әгәр ундай хәлдәр була икән, был – оло бәхетһеҙлек билдәһе.

Пәйғәмбәребеҙ (салләллаһу ғәләйһи үә сәлләм) әйткән:

«Аллаһтың ризалығы атайҙың ризалығына йәшеренгән, ә Уның асыуы һәм язаһы атайҙың асыуына һәм ризаһыҙлығына йәшеренгән» (Тирмизи, Бирр, 3).

❁

Донъялағы иң бәхетле ғаилә – Пәйғәмбәребеҙҙең (саллəллаһу ғələйһи үə сəлləм) ғаиləһе. Атайҙың, ғаилә башлығының иң күркәм үрнәге – Аллаһ Илсеһе (саллəллаһу ғələйһи үə сəлləм). Уның ҡатындары Хәҙисә, Ғәйшә һәм башҡалар, ҡыҙы Фатима – тәҡүәле ҡатындарҙың иң юғары үрнәге. Рухиәт критерийҙарына ярашлы тәбиәләнгән уларҙың балалары Хәсән һәм Хөсәйен Аллаһ Илсеһе (саллəллаһу ғələйһи үə сəлləм) йөрәге халәтенән үҙ насибын алыусылар. Шулай уҡ беҙҙең балаларыбыҙ ҙа, Аллаһ бойорһа, беҙ баҡыйлыҡҡа күскәс, Раббыбыҙ Аллаһҡа хәмед-ҫәнәләребеҙҙең сәбәбе, беҙҙең лайыҡлы вариҫтарыбыҙ, саҙаҡа-и джәрийә (өҙлөкһөҙ саҙаҡа) булыр.

❁

Аллаһ Илсеһенең (саллəллаһу ғələйһи үə сəлləм) йорто - бар йәһәттән дә, уның юғары шәхесе кеүек үк, иң камил һәм үрнәк йорт була.

Был йорт донъяла иң тынысы, иң гүзәле булып тора. Тәүлектәр буйы уға ризыҡ инмәһә лә һәм айҙар буйы усаҡҡа яғылмаһа ла, ул бәхеттең хуш еҫенә күмелә. Йорттоң ҡатын-ҡыҙҙар яғы шул тиклем бәләкәй була, унда һәр кемгә йоҡлап сығырлыҡ ҡына урын табыла. Әммә мөхәббәт, дуҫлыҡ, ҡәнәғәтлек, Аллаһҡа тәүәккәл итеү, сабырлыҡ, күндәмлек, Аллаһҡа тәсбих һәм шөкөр был йорттоң иң татлы ризығы була.

❁

Аллаһ Илсеһенең (саллəллаһу ғələйһи үə сəлləм) ғаилә ағзаларына ҡарата ғәҙәттән тыш әҙәплелеге һәм йомшаҡлығы уға ҡарата сикһеҙ мөхәббәт тойғоһо уята. Шуға күрә:

– Шуға күрә бер ҡатын да үҙенең хәләл ефетен мөьминдәр әсәләре, Аллаһ Илсеһенең (саллəллаһу ғələйһи үə сəлləм) ҡатындары үҙ ирен яратҡан кеүек яратмай.

– Шулай уҡ бер ир ҙә үҙенең ҡатынын Аллаһ Илсеһе (саллəллаһу ғələйһи үə сəлləм) үҙенең мөбәрәк ҡатындарын яратҡан кеүек яратмай.

– Бер ул һәм ҡыҙ ҙа Фатима үҙенең атаһын - Аллаһ Илсеһен (саллəллаһу ғələйһи үə сəлləм) яратҡан кеүек яратмай.

– Бер атай ҙа үҙенең балаларын Аллаһ Илсеһе (саллəллаһу ғələйһи үə сəлləм) ҡыҙы Фатиманы яратҡан кеүек яратмай…

❁

Иң яҡшы ир һәм ҡатын – бер-береһен ихлас рәүештә Аллаһтың ризалығына ирешергә саҡырыусылар. Хәҙистәрҙә әйтелә:

«Әгәр берәү, төндә ҡатынын уятып, бергә йәки айырым ике рәкәғәтле намаҙ ҡылһалар, улар Аллаһты күп зекер иткән ирҙәр һәм ҡатындар араһына яҙылып ҡуйыласаҡ» (Әбү Дауыд, Татавву 18; Витр, 13).

«Төндә тороп намаҙ уҡыған һәм ҡатынын да уятҡан, ә тегеһе тороуҙан баш тартһа, йөҙөнә һыу һипкән ирҙе Аллаһ ярлыҡаһын! Төндә тороп намаҙ уҡыған һәм ирен дә уятҡан, ә тегеһе тороуҙан баш тартһа, йөҙөнә һыу һипкән ҡатынды Аллаһ ярлыҡаһын!» (Әбү Дауыд, Татавву 18, Витр 13).

❁

Мөхтәрәм Муса Әфәнде йәштәргә шундай нәсихәт биргән: «Ир һәм ҡатын бер-береһенә мәрхәмәтле булырға тейеш. Һеҙҙең хәҡиҡи мәрхәмәтлелегеҙ һәм шәфҡәтлелегеҙ бер-берегеҙгә Аллаһ юлында ярҙам итеүеҙҙә асыҡ күренә. Хәләл ефетегеҙҙе сәхәргә[20] һәм иртәнге намаҙға уятыуығыҙ – ул хәҡиҡи мәрхәмәт сифаты».

❁

Сәғәҙәт ғасырында кисен өйгә ҡайтҡан ирҙәренә ҡатындары түҙемһеҙләнеп шундай һорау бирер булған: «Бөгөн ниндәй аяттар төшөрөлдө? Аллаһ Илсеһе (салләллаһу ғәләйһи үә сәлләм) йыйылышында нимә белдең?» Шулай уҡ улар балаларын да Аллаһ Илсеһе (салләллаһу ғәләйһи үә сәлләм) йыйылыштарына ҡушылырға өндәгән.

❁

Ислам әхлағы ҡиммәттәренә эйәрергә ынтылған иманлыларҙың йорто – йәннәттең хозур төйәге. Был фани донъяла нәфесе ҡолона әйләнгәндәрҙең йорто иһә мәрхәмәттән йыраҡ булған ғафил тере мәйеттәр йорто кеүек.

❁

Ғаиләбеҙ усағына мөнәсәбәтебеҙҙе анализлап ҡарау лазым. Был изге төйәк – ҡунаҡхана түгел һәм ғафиллыҡҡа бирелә торған урын да түгел. Ул йөрәк баҡсаһы, унда һөйөү, әңгәмәләр, аралашыу һәм хеҙмәт емештәре Аллаһ ризалығы өсөн йыйыла. Тормошобоҙ яҙ хозурлығына һәм гүзәллегенә ирешһен өсөн, был баҡсаның раузалары, сөмбөлдәре һәм һандуғастары Ҡөрьән һәм Сөннәт рухиәтенә, бәрәкәтенә күмелергә тейеш.

❁

20. Сәхәр – Рамаҙан айында таң атҡанға ҡәҙәр ризыҡланыу.

Ғаилә ныҡлығы ир һәм ҡатындың рухи өлгөргәнлегенә, уртаҡ тел таба белеүенә бәйле. Мөхтәрәм Мәүләнә әйткән:

«Рауза, энәләр менән уртаҡ тел таба белгәне өсөн, хуш еҫле. Был хәҡиҡәтте раузаның үҙенән дә ишетегеҙ. Күрәһегеҙме, ул нимә ти: «Энәләр тип, ниңә миңә бойоғорға, ниңә ҡайғыға батырға? Мин, уларға түҙгәнем өсөн, хәҙер йылмаям. Улар сәбәбендә донъяға матурлыҡ, хуш еҫ бүләк итә алам...»

❁

Йәмғиәттең нигеҙе булған ғаилә тормошондағы ир һәм ҡатын араһындағы аңлашылмаусанлыҡтарҙан арыныуға бәйле Пәйғәмбәребеҙ (салләллаһу ғәләйһи үә сәлләм) шундай кәңәш бирә:

«Кеше үҙенең ҡатынына (шулай уҡ ҡатын да иренә) үпкә һаҡламаҫҡа тейеш! Әгәр ҙә ки уның берәй ғәҙәте оҡшамаһа, икенсеһе оҡшар» (Мөслим, Рада, 61).

❁

Бер кеше, ҡатынының үҙенә оҡшамаған ҡылыҡтарына зарланыр өсөн, Ғүмәр хәлифәгә (радыйаллаһу ғәнһү) килә. Уның сыҡҡанын ишек төбөндә көтөп ултырғанда, ул тауыш ишетә - Ғүмәрҙең (радыйаллаһу ғәнһү) ҡатыны бөйөк хәлифәгә ҡысҡыра башлай. Тегеһе яуап итеп бер ауыҙ һүҙ ҙә әйтмәй.

Ирекһеҙҙән был хәлде тыңлап торған ир, башын эйеп, уйға ҡала: «Бөтә бөйөклөгөнә ҡарамаҫтан, мөьминдәр әмиренең хәле шулай булғас, ул миңә нисек ярҙам итә алһын?». Ул, тороп, инде китергә генә торғанда, Ғүмәр (радыйаллаһу ғәнһү) килеп сыға. Ишеге төбөндәге кешене күреп, килеүенең сәбәбен һорай. Теге әйтә: «Йә, мөьминдәр әмире! Ҡатынымдың яман холҡона һәм мине хөрмәт итмәүенә зарланырға килгәйнем. Әммә һинең ҡатының да һиңә ҡаршы килеүен ишеткәс, ниәтемдән дүнеп китергә уйлағайным».

Быға яуап итеп, Ғүмәр (радыйаллаһу ғәнһү) иргә шулай ти: «Ҡәрҙәшем, ҡатыныма асыуланмайым, сөнки уның хаҡын хаҡлайым, ул бит ризыҡ әҙерләүсем дә, икмәк бешереүсем дә, кер йыуыусым да һәм балаларымды туйындырыусым да. Ул бит быларҙың барыһын да эшләргә тейеш түгел. Өҫтәүенә ул йөрәгемде харамға тартылыуҙан һаҡлай. Шуға күрә мин уның ҡыланыштарына сабырлыҡ күрһәтәм».

Ир ҙә танырға мәжбүр була: «Эй, мөьминдәр әмире! Минең ҡатыным да шундай».

Ғүмәр (радыйаллаһу ғәнһү) уны йыуатып әйтә: «Улайһа, ҡәрҙәшем, ҡатыныңа яҡшы мөғәмәләлә булырға тырыш! Ғүмер тигән нәмә күҙ асып йомғансы үтеп китә ул!» (Захаби, әл-Кәбәир, 179-сы бит).

Бөгөн, матди хәлебеҙҙең үҫешенә ҡарамаҫтан, ғаилә институтының йомшарыуын, айрылышыуҙарҙың күбәйеүен, ғаиләләрҙең тарҡалыуын, конфликттарҙың, күңел төшөнкөлөгөнөң артыуын күҙәтәбеҙ. Былар һәммәһе рухиәттән ситләшкән, нәфес әүәҫлектәрен генә ҡайғыртҡан йәшәү рәүешенең күңелһеҙ эҙемтәһе.

Илебеҙҙәге ҡайһы бер кешеләрҙең рухи халәте хәл өҫтөндә ятҡандың рухи халәтенә оҡшаған, сөнки нәфесте ҡуҙғытҡан, юҡ-бар нәмәләр менән албырғатҡан телевизион программалар, әхлаҡһыҙлыҡты таратҡан сайттар, түбән әүәҫлектәргә этәргән алдатҡыс мода һәм рекламалар кешенең эске донъяһын харабаға әйләндерә.

Физик донъяла ер тетрәүҙәрҙән килгән зыянды ниндәйҙер кимәлдә ҡаплатып була. Әммә ләкин күңелдәрҙәге ер тетрәүҙәргә ҡаршы тейешле саралар күрелмәһә, йәмғиәттәр рухи тарҡалыуҙан ҡотола алмаясаҡ...

❁

Бөгөн һәр ерҙә Ахрызаман алдынан була торған фетнәләрҙе күҙәтәбеҙ. Шайтан кешенең милкендә һәм балаларында уртаҡ компаньон булған көндәр килеп етте. Был ваҡытта хәләлде эҙләү һәм табыу кисәгегә ҡарағанда ҡатмарлыраҡ, әммә быға иғтибар биреү кисәгегә ҡарағанда мөһимерәк һәм ҡиммәтерәк...

❁

Ислам йәмғиәттең нигеҙе булған ғаиләне тарҡатыусы бөтә яманлыҡтарҙан тыя. Ул айырыуса зинанан тыя, сөнки зина - никахтың паклығына, гүзәллегенә, хәҡиҡилегенә һөжүм, бөтә нәҫелде юҡҡа сығарырға һәләтле ҡаты енәйәт.

Ғаилә усағының ләззәтен, хозурлығын фәхешлек бысрағына алмаштырыуҙан ҙурыраҡ иҫәрлек һәм яһиллек бармы икән!

❁

Ҡөҙрәтле Раббыбыҙ Аллаһ Ҡөрьәндә, беҙ һабаҡ алһын өсөн, тәкәбберлектәре, аяуһыҙлыҡтары, Әхирәтте инҡар итеүҙәре, әхлаҡһыҙлыҡтары һәм сауҙалағы алдашыуҙары сәбәле һәләк ителгән ҡайһы бер халыҡтарҙың тарихын миҫал итеп килтерә. Улар ғәд, ҫәмүд, Шөғәйеб пәйғәмбәр (ғәләйһис-сәләм) ҡәүеме халыҡтары.

Улар араһында иң ямандары – Лут пәйғәмбәр (ғәләйһис-сәләм) халҡы. Билдәле булыуынса, улар араһында гомосексуализм – иң әшәке хаттин ашыу, әшәкелек тарала. Ҡыҙғанысҡа ҡаршы, заманыбыҙҙың яһилиәт осоронда уны «кеше хоҡуҡтарын» хаҡлау, тип пропагандалайҙар. Ә бит был хайуандарҙан да түбәнгә төшөү, кешеләрҙең, ғаиләләлрҙең, бөтә йәмғиәттең рухиәтен ағыулаған, кешенең тәбиғәтенә ҡаршы килгән әшәкелек.

Аллаһ Тәғәлә әйткәнсә, улар «Улар дүрт аяҡлы хайуандарҙан да мәхлүгерәк булып аҙашҡандар»[21], ә быны «азатлыҡ» һәм «кеше хоҡуҡтары» тип биҙәп күрһәтергә маташыу – әхлаҡһыҙлыҡтың сиге…

❁

Ғаилә – никах, ғиффәтлелек. Ир һәм ҡатындың ғиффәтлелеген, дәрәжәһен, намыҫын ғаилә яҡлай.

Ғиффәтлелек – кешенең айырым өҫтөнлөгө, хоҡуғы. Ә фәхешлек – кешелек дәрәжәңде юғалтыу, хайуандар һымаҡ, үҙеңдең өҫтөңдән бөтә яуаплылыҡты алыу, хурлыҡҡа ҡалыу. Әммә хайуандар аҡыл, намыҫ һәм рух кеүек сифаттарҙан мәхрүм, шуға күрә бындай йәшәү рәүеше өсөн уларҙы ғәйепләп тә булмай. Ә һуң кешеләр!?

❁

Малик ибн Динар (радыйаллаһу ғәнһү) әйткән:

«Аллаһтың йөрәктәгә һалған иң яман язаһы – хаяһыҙлыҡ, ояттан мәхрүм ҡалыу».

❁

Сәхәбәләрҙең һүҙҙәре буйынса, Аллаһ Илсеһе (салләллаһу ғәләйһи үә сәлләм) бөркәнсек ябынған йәш ҡыҙ бала шикелле оялсан һәм әҙәпле була. (ҡар. Бохари, Әҙәп, 77).

❁

Аллаһ Тәғәлә Ҡөрьәндә “Мәрйәм” исемен 34 тапҡыр телгә ала. Ул уны «ғиффәтлеген һаҡлаусы»[22] тип тасуирлай. Мәрйәм кеүек паклығыңды һаҡлау – ҡатын-ҡыҙ өсөн ҙур дәрәжә.

❁

Мөхтәрәм Ғосман (радыйаллаһу ғәнһү) әйткән:

«Күҙеңде харамдан һаҡлау – ялҡынлы теләктән иң яҡшы кәртә».

❁

Мөхтәрәм Мәүләнә әйткән:

«Ялҡынлы теләк, әүәҫлек ут шикелле, уға өҫтәп торһаң, ул кәмемәй. Әммә теләгәнен бирмәһәң, ул һүнә башлай. Ә утын ташлап торһаң, ут һүнәме ни?».

21. Аль-Араф, 179; аль-Фуркан, 44.
22. Әл- Әнбийә, 91.

Бөгөн төрлө оятһыҙ публикациялар, шайтан витриналары, мода, реклама халыҡҡа, бигерәктә дини тәбиә алмаған йәштәргә, хаяһыҙлыҡты норма һымаҡ итеп килтереп ҡуя. «Бөтәһе лә шулай кейенә, бөтәһе лә шулай эшләй…», - тип, тәрбиәһеҙ йәшәү рәүешен һеңдерергә тырыша.

Ә бит матди һәм рухи проблемаларҙан һаҡланыр өсөн, тотанаҡлы һәм тәрбиәле булыу кәрәк. Әҙәм һәм Һауа, үҙҙәрен үкенес ялмап алғас, Йәннәттә һис кем булмаһа ла, тәүге нәүбәттә оят ерҙәрен ҡаплай. Шуның кеүек беҙҙең заманда ла мөьмингә, илаһи асыуҙан имен булыр өсөн, хаяны юғалтмау зарур.

❁

Ҡиммәтле әйберҙәрҙе һәр ваҡыт ҡәҙерләп һаҡлайҙар. Гәүһәрҙе бөтә кеше күрерлек итеп һалып ҡуймайҙар. Хижаб та - ҡатын-ҡыҙҙың исламдағы ҡиммәтенә дәлил.

Ислам ҡатын-ҡыҙға гүзәллеген хижаб ярҙамында йәшерергә кәңәш бирә. Уның ярҙамында ҡатындың бөтә матурлығы иренә генә асыҡ һәм башҡаларҙан йәшерен. Был уның бәҫен, намыҫын һаҡлай.

❁

Хижабҡа нескә, һаҡсыл мөнәсәбәт юғала барыу – заманыбыҙға хас мөһим проблема. Ул бит баш бөркәнсеге генә түгел. Ҡыҙғанысҡа ҡаршы, бөгөн күп мосолман ҡатын-ҡыҙы хижаб рухиәтенә тап килмәгән тар күлдәк, салбар кейә башланы.

Аллаһ Сүбхәнәһү үә Тәғәлә изге аятта киҫәтә: **«Әй, Пәйғәмбәр! Ҡатындарыңа, ҡыҙҙарыңа һәм барса мөьминәләргә әйт, (йомош менән урамға сыҡҡанда) өҫ кейемдәрен (джилбабтарын) яҡшылап бөркәнһендәр. Был – (уларҙың затлы нәҫел ҡатыны икәнен) таныһындар һәм рәнйетмәһендәр өсөн бик тә ҡулай эш…»** (әл-Әхзәб (Фирҡәләр), 59).

Аятта әйтелгән джилбаб ғәҙәти күлдәк өҫтөнән кейелә, тәнде белендермәйенсә, ҡатын-ҡыҙҙы әҙәпһеҙ ҡараштарҙан һаҡлай. Икенсе һүҙ менән әйтһәк, бында һүҙ башты ғына ҡаплау тураһында бармай.

❁

Аллаһ Илсеһе (салләллаһу ғәләйһи үә сәлләм) Ғәйшәнең йоҡа күлдәктәге һеңлеһе Әсмәне күргәс, башын бора һәм әйтә:

«Эй, Әсмә, ҡыҙ, бәлиғ булғас, уның бер нәмәһе лә күренеп-беленеп тороргә тейеш түгел, бынан һәм бынан башҡа» – һәм ҡул менән йөҙөнә күрһәтә (Әбү Дауыд, Либас, 31/4104).

❁

Аллаһ Илсеһе (салләллаһу ғәләйһи үә сәлләм) «кейенгән яланғастар» тип, үҙҙәрен биҙәр, фигураларын күрһәтер өсөн, матур, сағыу, тәнде ҡыҫып торған үтә күренмәле кейемдәр кейгәндәр тураһында әйтә.

Ҡатын-ҡыҙҙың ҡул суҡтары, йөҙө һәм аяҡ табандарынан тыш бөтә тәне, ә ирҙәрҙең тубығынан алып кендегенә тиклем бөтә тәне ҡаплаулы булырға тейеш. Фигураны һәм тән һыҙаттарын белендереп торған тар һәм йоҡа кейем кейергә ярамай. Әгәр ҙә ки тән һыҙаттарын белендермәйенсә ҡаплап торһа, һәр кем шәхси һәм урындағы әҙәп-йолаларға, шарттарға һәм мөмкинлектәргә ярашлы кейенә ала.

❁

Мода ниндәй генә булмаһын, фекерләй белмәгән, ағым ыңғайына ағып барған бүрәнәләр шикелле кешеләр уға эйәрә. Ирҙәр алҡа таға, ҡыҫҡа шорты кейә, бысраҡ йөрөй. Хатта мосолман йәмғиәттәрендә лә бөгөн ҡатын-ҡыҙҙар һымаҡ сәс йөрөткән ирҙәрҙе һәм ирҙәр һымаҡ сәс йөрөткән ҡатын-ҡыҙҙы күрергә мөмкин. Белдереүҙәренсә, имеш, был - «мода».

Ислам иһә ир-аттың һәм ҡатын-ҡыҙҙың үҙҙәрен үҙ енесенә ярашлы тотоуын талап итә. Аллаһ Илсеһе (салләллаһу ғәләйһи үә сәлләм) ҡатын-ҡыҙҙар һымаҡ ҡыланған ирҙәрҙе һәм ирҙәр һымаҡ ҡыланған ҡатын-ҡыҙҙы ҡарғаған.

❁

Хәҙерге йәһилиәт заманы осоронда ир-ат һәм ҡатын-ҡыҙ араһында махсус уйлап сығарылған «тигеҙлек» өсөн ялған көрәш башланды. Кешенең фитрәтенә һалынған сифаттарға ҡаршы килгән был көрәш ҡатын-ҡыҙҙың ҡатын, әсәй бурыстарына кире йоғонто яһаны. Был иһә үҙ сиратында ғаилә именлеген, тыныслығын юҡҡа сығарҙы, йәмғиәттәге тәртип тә ҡаҡшаны.

Ир һәм ҡатын үҙҙәренең физик, рухи һәм тәбиғи сифаттары буйынса тиң түгел, шуға күрә фактик һәм юридик тигеҙлеккә лә мохтажлыҡ юҡ. Төрлө өлкәләрҙәге тигеҙлек түгел, ә хоҡуҡ һәм бурыстарҙың ғәҙел бүленеше, хоҡуҡ һәм бурыстар араһындағы баланс мөһим.

❁

Ислам ҡатын-ҡыҙҙы, үҙ ихтыяры ғына булмаһа, ғаиләнән ситтә эшләргә мәжбүр итмәй.

Фитрәтенә һалынған үҙенсәлектәр буйынса ир-ат һәм ҡатын-ҡыҙ төрлө-төрлө, шуға күрә уларҙың хоҡуҡ һәм бурыстары ла төрлө-төрлө – һәм был бик тә ғәҙел.

Яратылмыштан килгән үзенсәлектәренә ҡаршы килеп, ҡатын-ҡыҙҙы ир-ат менән тиңләштерергә маташыу – асылда ғәҙелһеҙлек һәм аяуһыҙлыҡ.

Тикшеренеүҙәрҙән күренеүенсә, Көнбайышта ҡатын-ҡыҙ мәктәптә лә, эштә лә йәберләүҙәргә дусар, һәм улар, кәмерәк эш хаҡы алып, ир-ат башҡарған эште эшләргә мәжбүр.

❁

Көнбайыштағы «Тиңлек, конкуренция, карьера, азатлыҡ» лозунгыһы аҫтындағы донъяға ҡараш нигеҙендә ҡатын-ҡыҙҙы ғаилә усағынан ситкә сығарыу ғаилә усағына ҡаты һөжүм булды һәм уны бик ныҡ ҡаҡшатты.

Ҡатын-ҡыҙ яҡлауһыҙ ҡалһа ла, ғаилә проблемалары уның өҫтөндә ҡалды. Ул «әсә» тигән маҡтаулы хәлдән мәхрүм ителде, ир-ат тарафынан матди һәм мораль көс ҡулланыуҙарға дусар булды. Һәм быларҙың һәммәһе «хоҡуҡ» һәм «азатлыҡ» сифатында биҙәп күрһәтелә! Көнбайышта ана шундай ҡаршылыҡтар тәбиғи нәмә тип ҡабул ителә.

❁

Европала, ҡатын-ҡыҙҙың нәфесен хаталы юлға төшөрөп, тәбиғәтенә ҡаршы килеп, аҡса эшләргә мәжбүр итәләр. Һөҙөмтәлә йәмғиәттәге тәртип юҡҡа сығып бара, халыҡ һаны йылдан-йыл кәмей, ғаилә институты көндән-көн көсһөҙләнә бара.

Ҡатын-ҡыҙ, сабыш аты кеүек, аяуһыҙ ир-ат донъяһында улар менән типәтиң йүгерергә мәжбүр. Уларҙың, әйтерһең дә, йәнен һурып алалар, ҡатын-ҡыҙға хас нескәлек, нәзәкәтлелек менән хушлашырға мәжбүр итәләр һәм быны «ҡатын-ҡыҙҙың хоҡуҡтарын яҡлау» тип атайҙар.

Гәлсәрҙе ватып, уларҙы урамға түшәүселәр «ҡатын-ҡыҙҙы хөрмәт иткән йәмғиәт» була аламы?!

Ҡатындарҙы әсәлек бәхетенән мәхрүм итеү, уларҙан эш сәғәте бөткәс тә хеҙмәт түгергә мәжбүр булған «эшлекле ҡатын» яһау, һөйкөмлөләгән эш өсөн файҙаланыу был уға ҡарата мәрхәмәтме?!

❁

Дөйәләр менән сәфәр ҡылған замандарҙа ритмик мелодиялар ярҙамында уларҙы шәберәк барырға мәжбүр иткәндәр. Шундай бер сәфәр ваҡытында Анджәшә (радыйаллаһу ғәнһү) исемле ялсы ҡасидә һамаҡлай-һамаҡлай дөйәләрен ҡыуған. Әммә улай шәп йөрөү ҡатын-ҡыҙға ҙур ҡыйынлыҡ тыуҙырған. Шул саҡ Аллаһ Илсеһе (салләллаһу ғәләйһи үә сәлләм) әйткән:

«Эй, Анджәшә! Һин гәлсәр ҡумталар алып китеп бараһың, улар менән һағыраҡ бул!» (Бохари, Әҙәп, 95; Әхмәд, III, 117).

Йәғни ул ҡатын-ҡыҙға ватылыуҙан һаҡларға кәрәк булған гәлсәргә ҡараған кеүек ҡараған.

Пәйғәмбәребеҙгә (салләллаһу ғәләйһи үә сәлләм) ана шундай нескәлек, мәрхәмәтлелек хас булған.

Ир-ат тимер кеүек ҡаты һәм ныҡ була ала. Әммә ҡатын-ҡыҙ – быяла һымаҡ.

Нескә күңелле һәм шәфҡәтле Пәйғәмбәребеҙ (салләллаһу ғәләйһи үә сәлләм), сәфәр ваҡытында ҡатын-ҡыҙҙы аяп, уларҙы ир-ат күргән ауырлыҡтарға дусар итмәҫкә тырышҡан.

Ә хәҙер нисек? Быяла һәм тимергә бер үк мөнәсәбәт күрһәткәндәй, ҡатын-ҡыҙ һәм ир-атты типә-тиң күреү яраған эшме?!

❁

Ҡыҙғанысҡа ҡаршы, тиңлек, тигеҙлек лозунгыһы аҫтында ҡатын-ҡыҙҙы урамдарға, заводтарға оҙаттылар, улар менән витриналарҙы биҙәй башланылар. Уларҙы әүәҫлек манекенына әйләндерҙеләр. Әгәр элек Көнбайышта ҡатын-ҡыҙ кеше булып һаналмаһа, шайтан һәм гонаһ менән тиң күрелһә, хәҙер ул эшсе көс йәки тауар, баҙар элементы итеп ҡарала.

Әсә һәм йорт хужабикәһе булыу – ҡатын-ҡыҙ өсөн ҙур игелек, ниғмәт. Әммә ләкин йәмғиәт тормошонда ул ир-ат менән ярышырға мәжбүр булғас, ул яйлап ғаилә тормошонан ситләшә һәм хатта әсә булыуҙан екһенә башланы.

❁

Яһилиәт заманында ғәрәптәр балаларын тереләй ергә күмер булған.

Заманыбыҙ яһилиәте осоронда әсә булыуға ихтирам бөттө, хатта кире ҡараш тыуҙы. Әсә булыу ауыр йөк, ҡатындың тышҡы ҡиәфәтен боҙорға һәләтле кәрәкмәгән нәмә тип ҡабул ителә башланы.

Һөҙөмтәлә бик күп балаларҙы, аборт яһатып, әсә ҡарынында уҡ үлтерәләр. Хатта ки был үлтереүҙе «ҡатын-ҡыҙ хоҡуғы һәм азатлығы» рәүешендәге ыңғай күренеш, тип баһалайҙар.

Аборт – ғүмерҙе ҡыйыу, әгәр әсә һәм балаға үлем янамаһа, уны бер нисек тә ыңғай ҡабул итеп булмай!

❁

Тәбиғиндәрҙән булған ғалим Катада хәбәр итеүенсә, яһилиәт заманында, фәкирлектән ҡурҡып, ҡыҙ балаларҙы тереләй ергә күмгәндәр. Шулай уҡ улар, әгәр ҡыҙҙарҙы иҫән ҡалдырһаң, улар әсирлеккә эләгеүе йәки намыҫын юғалтыуы бар, тип ҡарағандар.

Сығанаҡтарҙан асыҡланыуынса, ғәрәптәр ҡыҙ балаларын кескәй генә саҡта үлтергәндәр һәм шул уҡ ваҡытта эттәрен яҡшылап ҡарағандар, ашатҡандар (ҡар. Табәри, Тәфсир, VII, 68, [әл-Әнғәм, 140]).

❁

Яһилиәт заманында, ҡыҙ балаларын тереләй ергә күмеп, кешеләр иҫ киткес аяуһыҙлыҡ күрһәткән. Яманлыҡтан ҡотолам тип, улар тағы ла яманыраҡ ғәмәл ҡылған. Мәңгелек донъялағы Хисап көнөн һүрәтләгәндә, Аллаһ Тәғәлә был үлтерештәрҙе лә иҫкә ала:

«Тереләй ергә күмелгән сабый ҡыҙ баланан: “Ни сәбәпле һине шулай ҡылдылар?”- тип һорар ваҡыт еткәс» (әт-Тәкүир, 8-9).

Бөгөн, етди сәбәптәрһеҙ, уңайлы тормошон, фигураһын юғалтмаҫ, балаға аҡса түкмәҫ өсөн аборт эшләүселәр шундай уҡ аяуһыҙлыҡты ҡыла.

Ул намыҫын юғалтҡандарҙан һорарға кәрәк ине: «Аллаһ биргән ғүмерҙе ҡыйырға һеҙҙең ниндәй хоҡуғығыҙ бар?! Һеҙ йәшеренде беләһегеҙме?! Һеҙ киләсәк нимә алып килерен беләһегеҙме?! Һеҙ үлтергән ул сабый, бәлки, иртәгә һеҙҙең терәгегеҙ, таянысығыҙ булыр ине. Һеҙ яңғыҙ, хәстәрлеккә мохтаж булғанда, ул һеҙҙе ҡарар, тәрбиәләр ине…»

❁

Өйләнешеп, етди сәбәптәрһеҙ бала тапмағандар, йә булмаһа уны әсә ҡарынында төрлө саралар менән юҡ итергә маташҡандар үҙҙәренең киләһе буындарын юҡ итеүгә сәбәпсе була. Аллаһтың иң юғары яратылмышы һаналған кешенең үҙ нәҫелен киҫергә, юҡҡа сығарырға маташыуы башҡа һыймаҫлыҡ хәл, исмаһам үҫемлектәр һәм хайуандарҙан нәсихәт алайыҡ – улар үҙ нәҫелен ҡалдырыр өсөн ни тиклем фиҙакәрлек күрһәтә!

Хатта йылан да үҙ йомортҡаһын аулаҡ урынға йәшерә. Хайуандар үҙ нәҫелен шул тиклем ҡурсалап, яҡлап, ҡәҙерләп торғанда, кешенең – Аллаһтың күркәм яратылмышының шәфҡәттән, мәрхәмәттән мәхрүм булыуы ни тиклем ҡыҙғаныс!

❁

Ғаиләлә ҡатын бөтә йәмғиәтте яҡтыртып торған гәлсәр шәмдәл кеүек. Тарих биттәрен асып, шуны күрәбеҙ: цивилизациялар ҡатын-ҡыҙҙар арҡаһында

сәскә атҡан һәм улар арҡаһында бөлгөнлөккә төшкән. Әгәр ҙә ки ҡатын-ҡыҙҙы, бәхеткә ирешеү сараһы итеп ғаиләнән алып урамға сығарып ебәрһәң, уларҙың ғүмер юлы ватыҡ быяла менән туласаҡ.

❁

Ҡатын-ҡыҙға әхлаҡи тәрбиә бирелмәгән йәмғиәттә кешелеклелек шишмәһе һайығып юҡҡа сыға, ҡатын-ҡыҙ үҙенең хәҡиҡи ҡиммәтен юғалта һәм урамда сүплеккә ырғытылған алмас хәлендә ҡала.

❁

Ҡатын өсөн иң ҙур бәхет – йорт хужабикәһе булыу. Әгәр ул үҙенең төп бурысынан ситләшһә, ғаилә усағы һүнә. Ҡатын-ҡыҙҙың ғаиләнән ситтәге эштәрҙә ҡатнашыуы бик етди ихтыяж тыуғанда һәм уның тәбиғәтенә ярашлы булған өлкәләрҙә генә мөмкин. Бындай ҡатнашыу кәрәклеге дөрөҫ баһаланырға тейеш, йәғни шәриғәт ҡанундарынан ситкә сыҡмайынса, йәмғиәттең ихтяжына ярашлы билдәләнергә тейеш. Нәфес әүәҫлектәренә нигеҙләнгән сәбәптәр иһә беҙҙе ялға юлға төшөрә һәм һөҙөмтәһе лә ҡыуандырмай.

Һуңғы замандағы ғафиллыҡ өйөрмәһенә эләгеп, күпме ҡатын-ҡыҙ әрәм булды.

Хурлығы ялға алтын менән ҡапланған бик күптәр, илаһи хәҡиҡәттәргә һуҡып ҡалып, сәғәҙәттән мәхрүм ҡалды.

❁

Кешелек тарихынан күреүебеҙсә, бары тик исламдың юғары мөхитендә генә ҡатын-ҡыҙ үҙе лайыҡлы булған юғарылыҡҡа күтәрелде. Башҡа ғалимдар ҡатын-ҡыҙҙы хөрмәт итеүе тураһында белдерһә лә, асылда уларҙы демонстрация объекты булараҡ ҡына баһалайҙар һәм уларға нәфескә хуш килгән иҡтисади тауар итеп кенә ҡарайҙар.

❁

Исламға ҡәҙәрге осорҙа кәмһетелгән, йәберләнгән, бер мәсьәлә буйынса ла үҙ фекерен әйтә алмаған ҡатын-ҡыҙ, ислам арҡаһында хөрмәткә лайыҡлы булды, үҙ хоҡуҡтарын яҡлай алды. Аллаһ һәм Уның Илсеһе (салләллаһу ғәләйһи үә сәлләм) әмере буйынса, улар хоҡуғына бағышланған тотош бер тармаҡ барлыҡҡа килде.

❁

Яһилиәт заманы, асылы боҙолған иудаизм һәм христианлыҡ, заманыбыҙ яһилиәте ҡатын-ҡыҙға бахыр, меҫкен бер зат итеп ҡараһа, ислам быларҙың һәммәһен инҡар итә һәм уны үҙе лайыҡ булған юғары дәрәжәгә күтәрә.

Ҡөрьәндә «ән-Нисә» («Ҡатындар») сүрәһе бар. Сүрәлә һәм Изге Яҙманың башҡа урындарында ҡатын-ҡыҙҙың никах, мәһәр, мираҫ, талаҡ, алимент кеүек гражданлыҡ хоҡуҡтары гарантияланыуы исламдың был темаға бик етди ҡарауын дәлилләп тора.

❁

Яһилиәт осоронда ҡатын-ҡыҙға мираҫтан өлөш бирелмәй. Хатта ҡатын-ҡыҙ үҙе лә мираҫ булараҡ берәйһенә тапшырыла ала.

Заманыбыҙ яһилиәте осоронда ҡайһы бер региондарҙа, йолаларға һылтанып, ҡатын-ҡыҙҙың мираҫын башҡалар үҙләштерә. Ҡатын-ҡыҙ иһә, ғәйеп ташлауҙан ҡурҡып, үҙ хоҡуҡтары тураһында ла белдерә алмай.

Ислам донъяһының европалашҡан ҡайһы бер өлкәләрендә, хоҡуҡтарҙың тиң булыуына һылтанып, Ҡөрьән ҡанундары ситкә ҡуйыла һәм ир-аттың хоҡуҡтары боҙола.

«Ән-Нисә» сүрәһендә Аллаһ Тәғәлә мираҫ нисек бүленергә тейешлеген ентекле рәүештә аңлата. Ә аҙаҡ был ҡанундарҙы үтәгәндәргә мәңгелек сәғәҙәт тураһындағы изге хәбәрҙе еткерә. Илаһи ҡанундарҙы боҙғандарға иһә хурлыҡлы яза вәғәҙә итә (ҡар. ән-Нисә, 13-14).

❁

Пәғәмбәребеҙ (салләллаһу ғәләйһи үә сәлләм) үҙенең Хушлашыу хөтбәһендә ҡатын-ҡыҙҙың хоҡуҡтары тураһында ла әйтеп үтә. Унда ул шулай ти: *«Катын-ҡыҙ мәсьәләһендә Аллаһтан ҡурҡығыҙ, сөнки улар һеҙгә Аллаһтан аманат булып тапшырылды, Аллаһ һүҙе менән генә улар һеҙгә хәләл булды. Һеҙ уларҙан ятаҡтарығыҙға үҙегеҙгә оҡшамаған кешеләрҙе ултыртауҙы талап итә алаһығыҙ, әгәр улар бығы эшләһәләр, яза биреҙегеҙ, әммә бик ҡаты булмағыҙ; улар иһә һеҙҙән йола буйынса ризыҡландырыуығыҙҙы һәм кейендереүегеҙҙе талап итә ала»* (Бохари, Хадж, 132, Магази, 78; Мөслим, Хадж, 147; Әбү Дауыд, Манасик, 56, 61; Тирмизи, Тәфсиру әл-Куран, 10).

❁

Аллаһ Илсеһе хәҙистәрендә әйткән:

«Аллаһҡа ғибәҙәттән тыш мөьмин тәкүәле ҡатынынан бәрәкәт ала. Әгәр бойорһа, ул буйһона. Уға ҡарағанда, шатлыҡ тоя. Әгәр ул нимәнелер эшләргә йәки эшләмәҫкә һүҙ бирһә, ҡатыны, талап ителгәнде эшләп, уны антынан ҡотҡара. Әгәр ул (эш менән) ҡайҙалыр китһә, үҙ намыҫын һәм уның милкен һаҡлай» (Ибн Мәджә, Никах, 5/1857).

«Был донъя ниғмәттәре – ваҡытлы ләззәт, тәҡүәле ҡатын шуларҙың иң яҡшыһы» (Мөслим, Рада, 64).

❁

Сәүбән (радыйаллаһу ғәнһү) һөйләй:

«Ошо аят төшөрөлгәндә:

«Алтын-көмөш йыйып та, Аллаһ юлында сарыф итмәгәндәр арағыҙҙа юҡмы ни? Бына һин шуларҙан «һөйөнсө» ал: уларға хәтәр яза биреләсәк» (әт-Тәүбә, 34), беҙ Аллаһ Илсеһе (салләллаһу ғәләйһи үә сәлләм) менән сәфәрҙә инек. Уның ҡайһы бер сәхәбәләре әйтте:

«Алтын һәм көмөшкә килгәндә, аяттар төшөрөлдө. (Беҙ уларҙы йыйманыҡ, сарыф иттек). Әгәр ҙә ки ниндәй милек яҡшыраҡ икәнлеген белһәк, беҙ уны алыр инек!». Һәм шул саҡта Аллаһ Илсеһе (салләллаһу ғәләйһи үә сәлләм) әйтте:

«Бынан яҡшырағы – (Аллаһты) зекер итеүсе тел, рәхмәтле була белгән йөрәк һәм иман юлында ярҙамы тейгән тәҡүәле ҡатын» (Тирмиҙи, Тәфсир, 9/9).

❁

Ҡайһы бер яҡтарҙа ир балалар яҡшыраҡ тигән ҡараш йәшәй. Пәйғәмбәребеҙ (салләллаһу ғәләйһи үә сәлләм) быны тыйҙы һәм әйтте:

«Балаларығыҙға йомартлыҡ һәм мәрхәмәт менән тиң ҡарағыҙ! Әгәр мин кемделер артығыраҡ күргә теләһәм, улар ҡыҙҙар булыр ине» (Хайсами, IV, 153; Ибн Хәджәр, әл-Маталиб әл-Алийә, IV, 69).

❁

Ҡыҙҙар – ғаиләнең ғиффәтлеге, бәрәкәте һәм рәхмәте. Улар ғаилә усағының хакимәһе, хужабикәһе, көтөүсеһе. Улар балаларҙы тәрбиәләй һәм уларҙы хәҡиҡәткә һәм изгелеккә йүнәлтә.

Балалар уҡыған тәүге синыф – ул әсә йөрәге. Шуға күрә әйткәндәр бит:

«الْأُمُّ مَدْرَسَةٌ» «Әсәй – ул мәҙрәсә (мәктәп)».

❁

Балалар өйҙә күберәк әсәһе менән бергә булғанлыҡтан, ул улар өсөн яҡшы үрнәк күрһәткән һәм күңелдәрендә юйылмаҫ эҙ ҡалдырған «тәүге бөйөк тәрбиәсе».

Әсәнең ауыҙынан сыҡҡан һәр бер һүҙ баланың шәхес булып үҫешенә һалынған кирбес булып тора. Әсә йөрәге – бала тәрбиә алған тәүге мәктәп.

Әсәләр – бөйөктәрҙән-бөйөк мәрхәмәт сығанағы. Әсә тәрбиәһен алмаған балаларҙы тәрбиәләүе бик ауыр. Күркәм холоҡло кешеләр – улар, башлыса, тәҡүәле әсәләр тәрбиәһен алыусылар.

❁

Ислам цивилизацияһында ҡатын-ҡыҙҙы хөрмәт итәләр. Бигерәк тә әсә кешенең урыны юғары була. Бер заман Аллаһ Илсеһенә (салләллаһу ғәләйһи үә сәлләм) бер кеше килә һәм һорау бирә:

«Йә Рәсүлүллаһ! Кем иң нығы минең яҡшы мөнәсәбәтемә лайыҡ?»

Аллаһ Илсеһе (салләллаһу ғәләйһи үә сәлләм) әйтә:

«Һинең әсәйең, йәнә һинең әсәйең, йәнә һинең әсәйең, унан һуң атайың, ә унан һуң һинең яҡын туғандарың» (Мөслим, Бирр, 2).

❁

Хәҙистә әйтелә:

«Йәннәт әсәйҙәрҙең аяҡ аҫтында!» (Әхмәд, III, 429).

Исламда бындай бөйөк дәрәжәгә атайҙар түгел, әсәйҙәр лайыҡ. Яратылмыштар араһында улар лайыҡ булған мөхәббәт һәм хөрмәткә тиң булырҙай башҡа зат юҡ. Һөйөү һәм фиҙакәрлеге менән бөтә ғаиләне ҡурсалап торған әсәйҙәр ғүмер буйы ҡылынған доғаларға һәм рәхмәткә лайыҡ.

❁

Әсә күңеленең сиге булмаған мәрхәмәтен баһалап бөтөп буламы? Туғыҙ ай буйы ул балаһын үҙ ҡаны менән туйындыра, ике йыл буйы – һөтө менән. Үҙе ашамай, әммә балаһын ашата, үҙе кейемһеҙ йөрөй, әммә балаһын кейендерә, төндәрен йоҡламай, әммә балаһының йоҡоһон һаҡлай. Ғүмер буйы балаларын тормош ауырлыҡтарынан ҡурсаларға тырышҡан ата-әсәнең фиҙакәрлегенә рәхмәтеңде еткереп бөтөп буламы икән?

❁

Мөхтәрәм Әғзәм Әбү Хәнифә имам, залимдар ҡулындағы ҡоралға әйләнмәҫ өсөн, Бағдадта хөкөмдар (судья) булыуҙан баш тарта. Хәлиф Әбү Джәфәр Мансур яза рәүешендә уны зинданға яптыра һәм ҡамсы менән һуҡтырыуға хөкөм итә. Көн һайын һуҡтырыуҙың иҫәбе арта бара. Әммә Әғзәм имам ҡамсы язаһынан ҡурҡмай, ә был хәлде белеп ҡалһа, әсәһе менән ни булыр, тип бошона. Ул дуҫтарына шундай хәбәр ебәрә:

«Әсәйем минең хәлемде белергә тейеш түгел. Ул минең яфаларымды күтәрә алмаясаҡ, һәләк буласаҡ! Мин уның ғазаптарын күтәрә алмам!».

Ғәбдуррахман Джәми мулла (рахимәһуллаһ) әйткән:

«Нисек инде мин әсәйемде яратмайым, ул бит мине күпмелер ваҡыт үҙ тәнендә йөрөткән, күпмелер ваҡыт – ҡулында һәм ғүмере буйы – үҙ йөрәгендә!».

❁

Мөхтәрәм Мәүләнә әйткән:

«Әсә хаҡына иғтибарлы бул! Хөрмәт ит! Әгәр ҙә ки әсәләр тулғаҡ яфаларына дусар булмаһа, балалар донъяға килә алмаҫ».

❁

Мөхтәрәм Баһауддин Нәҡшбәнд васыят иткән:

«Ҡәберебеҙгә килеүсе тәүге нәүбәттә әсәйебеҙҙең ҡәберен зыярат ҡылырға тейеш!». Шул рәүешле ул әсәһенә ҡарата булған оло хөрмәтен, тоғролоғон һәм мөхәббәтен белдергән.

❁

Тәҡүәле әсәләр – йәмғиәткә йүнәлеш биреүсе билдәһеҙ батырҙар. Көнбайыш, ислам ҡатын-ҡыҙҙы йәберләй, тип әкиәт һөйләгәндә, бындай аҙашыуҙарға ҡаршы улар бик күркәм рәүештә яуап бирә. Был иманлы әсәләр балаларын дингә, ватанға, байраҡҡа һәм бөтә изге нәмәләргә мөхәббәт менән тәрбиәләй һәм балаларын ғәскәри хеҙмәткә туйға оҙатҡандай оҙата.

❁

Тәҡүәле ҡатындарҙың Аллаһ юлындағы төп хеҙмәте – ғаиләһен, Раббыбыҙ ҡушҡанса, яҡлау һәм иманлы балалар тәрбиәләргә ынтылыу. Әһәмиәте буйынса икенсе урында торған уларҙың бурысы – һәр ваҡыт нескә һәм нәзәкәтле рәүештә исламдың бөйөкләгән күрһәтеү. Шундай тәҡүәле ҡатындар йәмғиәттең ысын архитекторҙары.

❁

Ислам цивилизацияһында ҡатын-ҡыҙға, өлкән йәштәгеләргә мөхәббәт һәм хөрмәт хәҙерге кеүек йылдың билдәле көндәре менән сикләнмәй. Һәр көн «әсәйҙәр көнө» була, яйы сыҡҡан һайын, уларҙың ҡулдарын үбәләр, доға ҡылыуҙы һорайҙар һәм уларға ҡарата булған хаталар өсөн ғәфү итеүҙе үтенәләр.

Ислам цивилизацияһында «атайҙар көнө» лә йылына бер тапҡыр түгел, көн һайын булып тора. Ғаиләлә өлкәндәргә тәрән хөрмәт күрһәтәләр.

Туй көнөн йылына бер тапҡыр байрам итмәйҙәр, һәр көн ҡатындарға һөйөү һәм хөрмәт күрһәтәләр. Мөхәббәт ҡиммәтле бүләктәр һәм биҙәүестәрҙә түгел, ә иғтирамлылыҡ, әҙәплелек, яҡшы мөнәсәбәт һәм күркәм холоҡта күренә.

Хәҙерге заман донъяһында ғаилә институты иманһыҙлыҡ, әхлаҡһыҙлыҡ, мөхәббәттән мәхрүмлек тетрәүе сәбәпле емерелеү ҡурҡынысы алдында тора. Раббыбыҙ Аллаһ ғаиләле булыу һәм уны наҡлау һәләтен бирһен. Йорттарыбыҙ, Йәннәт һымаҡ, мөхәббәт һәм тыныслыҡ төйәге булһын! Һуңғы тапҡыр ул йорттоң ишеге мәңгелек Йәннәткә асылһын, Джәмәлүллаһ (Аллаһтың Рәхмәте) менән осрашырға насип итһен.

Амин!

ЯҢЫ БЫУЫН ТУРАҺЫНДА ХӘСТӘРЛЕК

Иманлы әҙәм балалары тураһында үҙенә йыш-йыш шундай һорауҙар бирергә тейеш:

– Аллаһтан аманат булған балаларыңды тәрбиәләү өсөн нимәләр эшләйһең?

– Нимәгә өйрәтәһең, ниндәй әҙәпкә өйрәтәһең уларҙы?

– Был ваҡтылы донъяғаға ҡарағанда уларҙың мәңгелек донъялағы тормошон нығыраҡ ҡайғыртаһыңмы?

– Балаларыңа Ҡөрьәнде өйрәтеү тураһында хәстәрлек күрәһеңме?

– Кесе йәштән үк уларҙы намаҙ ҡылырға, мәсеткә йөрөргә, өммәт менән аралашырға, йомартлыҡҡа һәм хәйрийә эштәренә күнектерәһеңме?

Балалар – илаһи аманат, йәғни улар беҙгә Аллаһтан ышанып тапшырылған. Улар беҙҙең асылыбыҙҙан сыҡҡан ҡиммәтле үҫентеләр. Нескә күңелле кешеләр әйтеүенсә, йортоңдағы тәүге бәхет йыры сабый тауышынан башлана.

Хәҙистәргә әйтелгәнсә, балалар – «Йәннәт сәскәләре», «бәғер емеше», «илаһи рәхмәт һәм нығмәт».

❁

Шулай ҙа була: балалары булһын өсөн, кешеләр бөтәһен дә эшләй, Аллаһҡа өмөт бағлап доға ҡыла, әммә ләкин Раббыбыҙ уларға бала бүләк итмәй. Бының бер хикмәте булыуы ихтимал. Йәшеренде бит бары тик Аллаһ белә. Беҙҙең өсөн нимә нығмәт, нимә золом икәнде Аллаһ яҡшы белә. Һәм, һис шикһеҙ, уның насип иткәне беҙ үҙебеҙгә теләгәндән яҡшыраҡ.

❁

Аллаһ Сүбхәнәһү үә Тәғәлә ҡайһы саҡ ҡолдарын ниндәйҙер нығмәттәрҙән мәхрүм итә. Ул быны ҡолдары илаһи тәҡдиргә шөкөр итһендәр, сабыр булһын-

дар, Раббыһы алдындағы дәрәжәләрен үҫтерһендәр һәм мәңгелек донъяла әжер-сауаптарға лайыҡ булһындар өсөн эшләй. Был йәһәттән беҙгә сабыр булыу, шөкөр итеү, булғанына ҡәнәғәт булыу, Уға хәмед-маҡтауҙар әйтеү һәм Уға буйһоноу лазым.

❁

Аллаһ Тәғәләнең ҡолдарын ниндәйҙер ниғмәттәрҙән мәхрүм итеүе Ул уларҙы яратмай тигәнде аңлатмай. Аллаһ Илсеһенең (салләллаһу ғәләйһи үә сәлләм) саф күңелле ҡатыны Ғәйшәнең дә (радыйаллаһу ғәнһә) балалары булмай. Әммә ул, тәрән ғилемгә, рухи хикмәткә һәм юғары әхлаҡҡа эйә булараҡ, барса иман эйәләренең әсәһенә әүерелә.

Аллаһ Илсеһе (салләллаһу ғәләйһи үә сәлләм) уны ислам хоҡуғы белгесе итеп тәрбиәләй һәм уға әйтә:

«Динегеҙҙең өстән беренә Ғәйшә йортонда өйрәнегеҙ!» (Дайләми, II, 165/2828).

Ғәйшә (радыйаллаһу ғәнһә) сәхәбәләр быуынындағы ете мүджтәһидтең береһе иҫәпләнә. Ир туғандары аша ул мосолмандарға һабаҡ бирә, уның 300 самаһы уҡыусыһы була. Ибн Ғаббас (радыйаллаһу ғәнһү) һүҙҙәре буйынса, уның ижтиһады менән файҙаланмаған бер генә мүджтәһид тә булмай.

❁

Әгәр яҡшы балалар тәрбиәләп үҫтерергә теләһәк, үҙебеҙгә яҡшы булырға тырышыу зарур.

❁

Мөхтәрәм Ғәли (радыйаллаһу ғәнһү) әйткән:

«Сәнскеләр сәселгән баҫыуҙа раузалар үҫеп сыҡмаҫ».

❁

Балаларыбыҙҙың күңел баҡсаһына нимә сәсһәк, ниндәй хис-тойғолар тәрбиәләһәк, уларҙың хәстәрлегенә мохтаж булған ҡартлыҡта шуларҙың емешен татырбыҙ. Әгәр уларҙың күңеленә Аллаһтан ҡурҡыу, Уға итәғәт һәм бөтә барлыҡҡа мәрхәмәт һалһаҡ, уларҙың тоғролоғон, рәхмәтен күрербеҙ. Әгәр ҙә ки беҙ уларҙы рухиәттән мәхрүм итеп тәрбиәләһәк, уларҙың түбән сифаттарының ҡорбаны булырбыҙ. Әгәр ҙә ки ошо фани донъяға мөкиббән китеүҙе, аяуһыҙлыҡты һалһаҡ, һәр нәмәнән файҙа алырға ынтылышты һалһаҡ, тупаҫлыҡ, налҡынлыҡ һәм тәрбиәһеҙлек күрербеҙ.

❁

Хәҙерге көндә бик күптәр бала-сағаһының кеселекһеҙ булыуына зарлана. Әммә ләкин уларҙың үҙҙәренә һорау бирге килә: «Балаларығыҙға нимә бирҙегеҙ һәм уларҙан нимә көтәһегеҙ? Хәләл менән ризыҡландырҙығыҙмы уларҙы? Ҡорьән әҙәбен күңелдәренә һалдығыҙмы? Дини тәрбиә алһын өсөн, мәктәпте ентекле һайланығыҙмы?»

❁

Беҙҙең көндәрҙә тәҡүәле ата-әсә үҙ-үҙенә һорау бирергә тейеш:

– Балаларыбыҙҙы ысын мәғәнәһендә үҙебеҙҙеке итеп тәрбиәләйбеҙме?

– Ниндәй мөхит уларҙың шәхесен, характерын формалаштыра?

– Ниндәй шәхестәр уларҙың йөрәгенә, идеалдарына, маҡсаттарына йоғонто яһай?

– Балаларығыҙ телевизор ҡараймы, интернет, компьютер һәм телефон менән файҙаланамы, әллә был ҡоролмалар балаларығыҙҙы үҙҙәренсә файҙаланамы?

❁

Иртәнән кискә тиклем телефон, телевизор экрандары һәм интернет аша йөрәкте ағыулаған тамашалар күргән һәм иманһыҙлыҡ, әхлаҡһыҙлыҡ һәм рухиәтһеҙлек пропагандаһына дусар булған балаларыбыҙ тураһында уйлайыҡ.

Әгәр ҙә ки балаларыбыҙҙы тәрбиәләргә тырышмаһаҡ, дөрөҫ ғилем, тейешенсә нәсихәт бирмәһәк, балаларыбыҙ башҡаларҙыҡы буласаҡ.

❁

Аятта шайтан тураһында былай әйтелә:

«…малдарына һәм балаларына уртаҡ (ата) бул…» (әл-Исра (Төндә күсереү), 64).

Беҙҙең көндәрҙә биологик ата-әсә генә булыу етерлек түгел. Әгәр улар рухиәтен шайтан ризыҡландыра, әгәр уларҙы кәферҙәр туйындыра икән, балалар ана шуларҙың ул һәм ҡыҙҙарына әүерелә. Уларҙың аң даирәһе, эске донъяһы ата-бабалар юлынан ситләшә, улар үҙ диненә, мәҙәниәтенә сит кешеләргә әүерелә.

Был стадияла инде биологик туғанлыҡтың әһәмиәте бөтә, ата-әсәнең аһтары ла инде файҙа бирмәй.

❁

Әсәнең иң мөһим бурыстарының береһе – сабыйын һөтө менән туйындырыу. Әммә ләкин янғын сыҡһа, бер әсә лә балаһын имеҙеп ултырмаясаҡ. Был мәлдә үҙеңде һәм сабыйыңды уттан ҡотҡарыу мөһим бурыҫҡа әйләнә.

Бөгөн шундай тамашаны күрәбеҙ:

Төрлө яҡтан балаларыбыҙға рухи янғын хәүеф менән янай. Төрлө яҡтан уларға кире йоғонто ябырыла.

Бындай шарттарҙа ата-әсә балаларының биологик ихтыяждарын ҡәнәғәтләндереү менән генә сикләнә алмай.

❁

Балаһы биҙгәк менән ауырыһа, ата-әсә төнө буйы йоҡламай. Улар, табипты көтөп, тәҙрәнән күҙен алмай. Ҡыҙғанысҡа ҡаршы, беҙҙең көндәрҙә рухи фәкирлек һәм ғәмһеҙлек киң ҡолас йәйҙе. Хатта ки дини ғаиләләрҙә лә ата-әсә балаһының мәңгелек донъялағы киләсәгенән бигерәк фани донъялағы киләсәген ҡайғырта.

Шуны күрәбеҙ: ата-әсә, балалары имтихан биргән ергә барып, сәғәттәр буйы тулҡынланып ишек төбөндә көтә. «Балам нисек тулҡынланһа, мин дә шулай тулҡынланам», - тиҙәр улар һәм тыныслана алмайҙар: «Быны эшләй алырмы ул, үтә алырмы ул?».

Ә һеҙ балағыҙҙың рухи үҫеше өсөн ни тиклем көс түгәһегеҙ? Уның был донъялағы яҙмышы өсөн борсолған кеүек, Әхирәттәге яҙмышы өсөн дә борсолаһығыҙмы?!

❁

Балаларыңа хәҡиҡи мәрхәмәт һәм шәфҡәт, ғүмер ошо фани донъя менән генә сикләнә тип иҫәпләп, уларҙы ризыҡландырыу, матур кейемдәр кейҙереү, күңелдәрен күреү һәм физик комфорт менән тәьмин итеү түгел.

Киреһенсә, хәҡиҡи мәрхәмәт һәм шәфҡәт – балаларыбыҙҙың мәңгелек тормошо ғазапҡа әйләнмәһен өсөн, бөтә көсөңдө һалыу. Тәүге нәүбәттә был – уларҙың рухиәтен ниғмәтләндереү, киләсәк тормоштарын мәңгелек сәғәҙәт яҙына әйләндерерлек рухи ҡиммәттәр менән күңелдәрен байытыу.

❁

Әгәр ҙә ки балалары алдында өс көнлөк фани донъяла бәхетле булыумы, әллә мәңгелек донъяламы тигән һайлау ихтыяжы тыуһа, Аллаһҡа инанған мәрхәмәтле ата-әсә, ҡулының һырты менән был донъяны инҡар итеп, һис бер шикләнеүһеҙ мәңгелекте һайлай. Бер тамсыға эйә булып, диңгеҙҙән баш тартыу кеүек иҫәрлекте ҡылмай улар. «Был донъяла балаларыбыҙ туҡ булһан,

ә Әхирәттә ағыу һәм сәнске ашаһалар ҙа ярай!» йәки «Балаларыбыҙҙың был донъялағы тормошо яҡты булһын, ә киләсәк тормошта йөҙҙәре ҡара булһа ла ярай![23]» - тип әйтмәй улар.

❁

Әлбиттә, һәр әсә һалҡын тейҙергән балаһының өҫтөн ябырға, ҡурсаларға тырыша. Ул балаһына матур кейемдәр кейҙерергә теләй. Әммә Әхирәт тормошона инанған әсәне башҡа нәмә күберәк борсой: балаһы Йәннәттең ебәк кейемдәренә кейенгән булырмы, әллә Йәһәннәм ялҡыны уның кейеме булырмы.

❁

Иң мәрхәмәтле ата-әсә — балаһының был донъянан бигерәк мәңгелек донъялағы хәле өсөн борсолған ата-әсә.

«Улымдың был донъялағы киләсәге яҡты булһын, ул яҡшы эш таба алһын, ә киләһе тормошта ул берәй нисек ҡотолор әле!» кеүек уйҙар иман эйәһенә лайыҡлы нәмә түгел.

❁

Барыбыҙ өсөн дә иң мөһим имтихан һәм бурыс – балаларыбыҙҙы заманыбыҙ үҙсүҙәсәләренән аралау һәм уларҙы был фани донъялағы илаһи һынауҙарға әҙерләү. Изге аятта бойорола:

«Эй, иманлы бәндәләр! Утын урынына кешеләр һәм таштар яғылған Йәһәннәмдән үҙегеҙҙе һәм ғаиләгеҙҙе һаҡлағыҙ» (әт-Тәхрим (Тыйыу), 6).

Аятҡа бер хәҙистә шундай аңлатма бирелә:

«Һеҙ уларҙы Аллаһ тыйған нәмәләрҙән тыйылырға һәм Ул әмер биргәндәрҙе үтәргә өндәгеҙ. Ана шул Йәһәннәмдән аралау була ла инде» (Алуси, XXVIII, 156).

❁

Үҫеп еткәнсе, фани донъяла балалар ата-әсәһенә мохтаж. Әммә ғүмеренең аҙағында ата-әсә балаларына, уларҙың «саҙаҡа джәриә» (өҙлөкһөҙ саҙаҡа) булыуына мохтаж. Хатта ки баҡыйлыҡҡа күскәс тә, ата-әсә балаларының доғаларына мохтаж.

Әммә ләкин, балаларға рухи тәрбиә бирмәгән һүрәттә, ата-әсә ҡәберендә яңғыҙ буласаҡ, уларҙы һис кем зыярат ҡылмаясаҡ.

23. «Аллаһ хаҡында ялған һөйләгәндәрҙең йөҙҙәре Ҡиәмәт көнөндә ҡап-ҡара булғанын күрерһең» (әз-Зүмәр, 39/60).

«Ярар инде, әле ул бәләкәй бит әле, тора-бара үҙгәрер!» - тип, йөрәк емештәрен тәрбиәләргә, тура юлға баҫтырырға тырышмаған ата-әсәне Хисап көнөндә балалары яуапҡа тарттырасаҡ һәм зарланасаҡ: «Улар мине исламға өйрәтмәне, минең әхлаҡи тәрбиәмә иғтибар бирмәне, яҡшы мосолман итеп үҫтермәне…»

❁

Беҙ, үҙебеҙ быға иғтибар ҙа бирмәйенсә, йыш ҡына башҡаларҙың хаҡына керәбеҙ. Әммә улар һәммәһе Хисап көнөндә алдыбыҙға килеп баҫасаҡ. Ата-әсә онотмаҫҡа тейеш: Аллаһ аманат итеп биргән бала-сағаңды рухи тәрбиәнән мәхрүм итеү – улдарың һәм ҡыҙҙарыңдың хаҡына кереү ул.

❁

Бөгөн күп кенә ата-әсә, ғафиллыҡҡа сумып, балаларына ислам ҡанундарына тап килмәгән кейемдәр кейҙерә, улар менән мосолмандарҙың йәшәү рәүешенә тап килмәгәнсә мөғәмәлә ҡыла һәм әйтә: «Әйҙә, ләззәтләнһен. Уның нимәһе бар? Тормошҡа ашмаған хыялдары күңелендә таш булып ултырмаһын. Киләсәктә ул улай эшләмәйәсәк». Әммә былар баланың ғәҙәтенә инеп китә, тора-бара ул уларҙан баш тарта алмай башлай. «Татып ҡараһын һәм насар икәнен аңлаһын, башҡаса һис ҡасан тартмаҫлыҡ булһын!» - тип әйтеп, балаһының ауыҙына тәмәке тыҡҡан иҫәрҙәрҙең ғәмәле кеүек инде был.

Бер нәмәне онотмайыҡ: йәш саҡта өйрәнгәндәр мәрмәргә соҡоп яҙылған яҙма кеүек, ул ғүмерлеккә ҡала. Ата-бабаларыбыҙ кесе йәштән балаларға дөрөҫ йүнәлеш бирергә тырышҡан. Улар әйткән:«Ағас йәш саҡта бөгөлә».

❁

Шәйех Сәғди әйткән:

«Йәшләй тәрбиә алмағанды ҙурайғас тәрбиәләү һәм төҙәтеү мөмкин түгел. Һеҙ йәш үҫентене төрлөсә бөгә алаһығыҙ. Әммә ҡоро таяҡты турайтыу өсөн, уны утта тоторға кәрәк».

❁

Ата-әсәгә тәүге кәңәш: балағыҙға мәрхәмәтле булығыҙ. Ата-әсә тағы шуны күҙ уңында тоторға тейеш: «Балағыҙға мәрхәмәтегеҙ ни кимәлдә? Был донъяла балағыҙ үлһә, һеҙ ҡайғыға батаһығыҙ. Әгәр һеҙ иртәгә мәңгелек донъяла балағыҙ менән бергә булырға теләһәгеҙ, тура юлда булырға һәм балағыҙҙы ла ислам әҙәбенә, әхлағына ярашлы тәрбиәләргә тейешһегеҙ».

❁

Был фани донъяла ата-әсә, бала-саға, ир һәм ҡатын, дуҫтар, туғандар, күршеләр бергә көн күрә. Әммә Әхирәттә беҙҙе «Айырылышыу көнө» көтә. Аллаһ Тәғәлә Ҡөрьәндә кешеләрҙең юлдары айырыласағы тураһында хәбәр итә:

«Сикһеҙ Мәрхәмәтле Раббынан уларға «Сәләм!» булыр» (Йә Син, 58). Үҙе риза булған ҡолдарын Раббыбыҙ киң күңел менән Йәннәткә саҡыра. Әммә итәғәтһеҙҙәргә, хатта ки бер ғаиләнән йәки йәмғиәттән булһалар ҙа, Аллаһ әйтәсәк:

«Эй, гонаһлылар, бөгөн һеҙ айырым тороғоҙ!» (Йә Син, 59). Ана шулай Ер тормошондағы бөтә бәйләнештәр өҙөлөр. Гонаһкәрҙәргә Йәһәннәмгә китергә бойоролор.

Бәлки, бик күп ир һәм ҡатын айырылыр. Бик күп ата-әсә һәм балалар төрлө яҡҡа юл тотор. Фани донъяла бергә йәшәгән бик күп туғандар айырылыр. Был хәтәр ғазаплы Көн буласаҡ!

Һәм был Көндә ғазапланмаҫ өсөн, үҙебеҙҙең тура юлдан барыуыбыҙға иғтибарлы булыу ғына аҙ, балаларыбыҙға, Аллаһтан килгән аманат итеп ҡарап, кесе йәштән рухи тәрбиә бирергә тейешбеҙ.

❁

Әхирәттә балаларыбыҙҙың киләсәге ниндәй булыры билдәһеҙ. Мәхшәр майҙанында һәм Хисап көнөндә уларҙың хәле ниндәй булыр? Был хәтәр ауыр көнгә беҙ уларҙы яҡшы итеп әҙерләй алдыҡмы?

Әгәр ҙә ки балаларыбыҙҙы Ҡөрьән һәм Сөннәт рухиәтендә тәрбиәләй алһаҡ, уларҙы хаҡ юлда күреп, үҙебеҙ ҙә хозурлыҡ һәм сәғәҙәт эсендә булырбыҙ. Беҙ ҡәберҙә саҡта улар беҙгә саҙаҡа джәриә булыр, һәм, улар менән бергә Йәннәткә инеп, һәммәбеҙ бәхеткә күмелер.

❁

Тәкүәле балалар ата-әсәһе өсөн - «саҙаҡа джәриә». Йәғни улар арҡаһында ата-әсә, хатта ки үлгәс тә, әжер-сауаптарға лайыҡ була...

Әммә балалар тәкүәле итеп тәрбиәләнмәһә, был йәһәттән тырышлыҡ күрһәтелмәһә, бындай балалар фани донъяла ла, мәңгелек донъяла ла – бәхетһеҙлек!

Гонаһкәр балалар – тейешле тәрбиә бирмәгән ата-әсәһе өсөн «саййиә джәриә» (өҙлөкһөҙ золом)! Йәғни, баҡыйлыҡҡа күсһәләр ҙә, гонаһтар һәм золом ата-әсәһенең ғәмәл дәфтәренә яҙыла барасаҡ!

Тимәк, балаларыбыҙҙы илаһи аманат, һынау итеп күреү һәм уларҙың рухи тәрбиәһенә ҙур иғтибар биреү зарур!

Иң мәрхәмәтле ата-әсә – бер-береһен һәм бала-сағаһын Аллаһҡа хеҙмәткә әҙерләүселәр.

Балалар пак, Йәннәткә лайыҡ булып тыуалар. Әммә ата-әсәһе уларға рухи тәрбиә бирмәһә, был Йәннәт ҡоштары, Аллаһ һаҡлаһын, ярамаған яҡҡа осоп китеүҙәре лә ихтимал!

❁

Нәжип Фазыл Ҡысаҡйөрәк әйткән:

«Емешен ҡайғыртмаған ағас – ул утын». Асылда, ул ҡыҫҡа ғына итеп ата-әсәнең төп бурысын аңлата. Әгәр улар балаларын ислам әҙәбенә ярашлы тәрбиәләһә, иртәгә тегеләр итәғәтле, тоғро мөсолмандар буласаҡ. Әгәр ата-әсә, «мин башҡалар кеүек» принципына нигеҙләнеп, балаһының тәрбиәһен ғәмһеҙлек хөкөм һөргән йәмғиәткә тапшырып ҡуйһа, фани донъяла ла, мәңгелек донъяла ла уларҙы үкенестәр көтә.

❁

Мәрйәмдең мөхтәрәм әсәһе ауырлы саҡта балаһы өсөн борсола. Улы буласағына өмөтләнеп, ул тыуасаҡ балаһын Иерусалим ғибәҙәтханаһына хеҙмәткә бағышлай. Тәҡүәлектең бөйөк кәүҙәләнеше була ул, сөнки беҙ бында шуны күрәбеҙ:

– Балаһының Аллаһтың тәҡүәле, итәғәтле ҡоло булып үҫеү теләгән.

– Балаһының ата-әсәһе өсөн «саҙаҡа жәриә» йәки «хайру әл-халәф» булыуына өмөт бағлауын.

– Шул сәбәпле, балаңды йөрәгеңдән айырып, уны Аллаһ юлына бағышлау – бөйөк иман һәм тәҡүәлек билдәһе.

❁

Ҡөрьәндә хәбәр ителгәнсә, мәмерйәне төйәк итеүселәр, имандарын һаҡлауҙың ни тиклем мөһим булыуын аңлап, бер-береһенә кәңәш бирә:

«Әгәр ҙә улар һеҙҙе тапһа, таш менән бәреп үлтерәсәк йәки үҙ диндәренә кертәсәк. Ул сағында һеҙ мәңге лә Сәғәҙәткә ирешә алмаясаҡһығыҙ» (әл-Кәһәф (Мәмерйә), 20).

Хәҙерге заманда ата-әсә балаларының дине һәм иманы һаҡланыуы өсөн борсолорға тейеш: «Әгәр минең балаларым гонаһкәрҙәр һәм ғафилдар менән аралашһа, улар кеүек фекер йөрөтһә, имандан йыраҡ булғандар йөрөгән ерҙәрҙә йөрөһә, улар үҙҙәренең иманын һәм әхлағын һаҡлай алырмы?». Бына ошоларҙан сығып, һәр иман эйәһе балаларының киләсәген ҡайғыртырға тейеш.

Ғәзәлде тотоп, уны бүреләр, сүл бүреләре араһында ҡалдырыу – иҫәрлектән башҡа нәмә түгел. Бәндәнең үҙенең йөрәк емеше булған балаһын рухи тәрбиә бирмәҫтәй уҡыу йорттарына ебәреүе күңелгә ағыу тултырыу менән бер!

❁

Балаларыбыҙҙа ислам әхлағын тәрбиәләргә теләйбеҙ икән, ҡыҫҡа ваҡытҡа ғына уларҙы мәсеткә йөрөтөү етерлек түгел. Дини ғилем биреү эшенә бик етди ҡарау лазым. Әгәр ҙә рухи тәрбиә биреү бөҙгә бик ябай нәмә кеүек тойола икән, тимәк ислам күңелебеҙҙә ныҡлап тамыр йәймәгән.

Иҫебеҙҙән сығармайыҡ, Аллаһ Илсеһе үҙенең сәхәбәләрен 23 йыл буйы тәрбиәләгән.

❁

Йәйге каникулды динде һәм Ҡөрьәнде өйрәнеүгә бағышларға мөмкин. Әммә баланды ҡыҫҡа ваҡытлы курстарға ебәреү менән генә хушһынырға, шуның менән бурысымды үтәнем, тип уйларға ярамай. Беҙгә, ата-әсәләргә, уларҙың рухи халәтенә иғтибарлы булыу лазым. Уларҙың Ҡөрьән әҙәбен, аҡыланы, ислам хоҡуғын ни кимәлдә үҙләштереүен тикшереп торорға тейешбеҙ. Беҙҙең ҡыҙыҡһынып тороуыбыҙ уларға артабан да ғилемдәрен тәрәнәйтеүгә бер этәргес булыр.

❁

Бөгөн бик күптәр ниндәйҙер бер сит телде өйрәнеү өсөн ҙур тырышлыҡ һала. Ата-әсә балалары менән бергәләп төрлө колледждарҙы сағыштырып ҡарай, иң яҡшыһын һайлай һәм аҡса йәлләп тормай. Ә дини курстарға һәм динде өйрәнеүгә ундай ҙур иғтибар юҡ. Шул рәүешле беҙ балаларыбыҙҙы рухи тәрбиәнән һәм илаһи Ҡәләмдән мәхрүм итәбеҙ. Бик ҡыҙғаныс был хәл!

❁

Һәр ата-әсә балаһының киләсәге тураһында борсола. Ул уға яҡшы белем бирергә, киләсәген ҡайғыртырға тырыша. Әммә шуны ла онотмайыҡ: хәҡиҡи киләсәк, хәҡиҡи тормош Әхирәттә. Балаларына иң ныҡ мәрхәмәтле булған ата-әсәләр балаларының фани донъялағы тормошон ғына түгел, мәңгелек донъялағы тормошон да, мәңгелек ҡотолоуын да ҡайғырта.

❁

Иманлы әҙәм балаһы хаҡында үҙенә йыш ҡына шундай һорауҙар бирергә тейеш:

– Аллаһтан аманат булған балаларыңды тәрбиәләү өсөн нимәләр эшләйһең?

– Нимәгә өйрәтәһең, ниндәй әҙәпкә өйрәтәһең уларҙы?

– Был ваҡытлы донъяға ҡарағанда уларҙың мәңгелек донъялағы тормошон нығыраҡ ҡайғыртаһыңмы?

– Балаларыңа Ҡөрьәнде өйрәтеү тураһында хәстәрлек күрәһеңме?

– Кесе йәштән үк уларҙы намаҙ ҡылырға, мәсеткә йөрөргә, өммәт менән аралашырға, йомартлыҡҡа һәм хәйрийә эштәренә күнектерәһеңме ?

❁

Онотмаҫҡа тейешбеҙ: мөмкинлек барҙа балаларыбыҙҙы Ҡөрьән рухиәтендә тәрбиәләмәһәк, иртәгә ҡәберҙә ауыр үкенестәр менән яңғыҙ ҡаласаҡбыҙ.

Шуға күрә балаларыбыҙға тейешле тәрбиә биреү һәм уларҙың саф күңелдәренә Аллаһҡа һәм Уның Илсеһенә (салләллаһу ғәләйһи үә сәлләм), Ҡөрьән әхлағына һәм Сөннәткә мөхәббәт орлоҡтары һалыу лазым.

Балаларыбыҙ рухи гүзәллектең татын тоя башлаһындар өсөн, илаһи хикмәт маҡтауға лайыҡ икәнлеген күрһәтеп, уларға бүләктәр, күстәнәстәр биреү лазым.

Мөхтәрәм Малик имам хәтирәләре менән бүлешә:

«Берәй хәҙисте ятлап алған һайын, атайым миңә бүләк бирә торғайны. Шундай мәл дә етте: хатта ки атайым бүләк бирмәгән һүрәттә лә, хәҙистәрҙе ятлауҙан ләззәт ала башланым».

❁

Ата-әсә балалары менән бергә бергә булған ваҡыттың ҡәҙерен белергә, һәр мәлде балаларын тәрбиәләүгә бағышларға тейеш.

Улар балаларын телевидение һәм интернеттың яманлығынан араларға, балалары менән күп аралашырға, йөрәк емештәрендә ислам әхлағын, күркәм холоҡ тәрбиәләргә тейеш. Балаларыбыҙҙы ғибәҙәткә күнектереү, Ҡөрьән ярҙамында дингә һөйөү тәрбиәләү, ғилемдәрен арттырыу лазым.

Пәйғәмбәребеҙ (салләллаһу ғәләйһи үә сәлләм) әйткән:

«Намаҙ күҙемдең нурына әйләнде»[24]. Ҡөрьәндә Аллаһ Тәғәлә балаларыбыҙҙың беҙҙең өсөн, иман эйәләре өсөн «күҙебеҙ нуры» булыуын әмер итә.

Шулай булғас, балаларыбыҙ күҙебеҙ нуры, рәхмәт һәм саҙаҡа жәриә булһын өсөн, уларға бәрәкәт һәм рухиәт тулы намаҙҙың әһәмиәтен төшөндөрөү зарур.

24. Нәсаи, Ишарату ән-нисә, 10; Әхмәд, III, 128, 199.

Аллаһтың Хәлиле (дуҫы) булған Ибраһим (ғәләйһис-сәләм) киләсәк быуыны тураһында борсола. Уларҙың рухи ҡиммәттәргә эйә булыуын теләп, ул доға ҡыла:

«Йә, Раббым! Мине һәм минең нәҫелдән булғандарҙың барыһын да өҙлөкһөҙ намаҙлы ит. Йә, Раббым, доғаларымды ҡабул әйлә!» (Ибраһим, 40).

Ибраһим пәйғәмбәрҙең (ғәләйһис-сәләм) улы Исмәғилгә (ғәләйһис-сәләм) мөнәсәбәте – балаһын тәрбиә ҡылған атаның физакәрлегенә гүзәл миҫал.

Илаһи ихтыярға буйһоноп, Ибраһим (ғәләйһис-сәләм) ҡатыны Хәжәрҙе һәм улы Исмәғилде ер эшкәртеүгә яраҡһыҙ булған сүллектәге үҙәндә ҡалдыра. Ул бының сәбәбен: «улар намаҙҙы дөрөҫ уҡыһындар өсөн»[25], - тип аңлата, йәғни Ибраһим (ғәләйһис-сәләм), илаһи үәхигә таянып, башҡа донъянан ситтә булған Хижазда иманлы быуын тәрбиәләп үҫтерергә ынтыла.

Барса нәмәнең хәҡиҡи хужаһы Аллаһ булыуын ныҡлы төшөнөп үҫергә тейеш балаларыбыҙ. Уларҙы йәштән намаҙға күнектергән кеүек, саҙаҡа биреүҙең ләззәтен, мохтаждарға булышыуҙан килгән күңел хозурлығын тойорға ярҙам итеү ҙә лазым.

❁

Балаларға беҙ бирә алған иң ҙур бүләк – яҡшы тәрбиә. Ә беҙ ҡалдыра алған иң ҡиммәтле мираҫ – мәңгелек донъя мираҫы, йәғни ислам шәхесе һәм характеры. Шундай мираҫ ҡалдыра алған ата-әсәләр уларҙы ғүмер буйы рәхмәтле булып иҫкә алыуға лайыҡлы.

❁

Ике төрлө мираҫ бар:

1) Матди мираҫ. Аллаһ урынлаштырған ҡанундар һәм критерийҙар буйынса вариҫтарға милекте тапшырыу.

2) Йәшерен мираҫ. Бәндәнең үҙенең киләсәк быуындарына ислам шәхесен һәм характерын, иман һәм күркәм холоҡ ҡалдырыуы.

Әгәр ҙә ки йәшерен мираҫ тейешенсә ҡалдырылһа, киләһе быуындары матди мираҫты ла дөрөҫ файҙалана аласаҡ, ата-әсәһе өсөн «саҙаҡа жәриә» буласаҡ. Әммә ләкин киләһе быуындары рухи тәрбиәнән мәхрүм ҡалһа, матди мираҫты нисек файҙаланыуҙары билдәһеҙ. Ата-әсәһе өсөн «саййиә жәриә» булып, улар уны кәферлек юлында сарыф итеүҙәре лә ихтимал.

❁

25. Ибраһим, 37.

Бишенсе тәкүәле хәлиф булған Ғүмәр ибн Ғабдул Ғәзиздең (рахимәһуллаһ) вәзире уға әйтә:

– Әфәндем, һеҙ үҙегеҙ өсөн ҡазнанан бик әҙ аҡса алаһығыҙ. Балаларығыҙ, ейәндәрегеҙ ихтыяждары өсөн, бәлки, бер аҙ аҡса бүлеп ҡалдыра барырбыҙ?

Хәлиф уға әйтә:

– Әгәр киләсәк быуындарым тәкүәле булһа, мин уларҙың мохтажлығында ҡалыуынан ҡурҡмайым. Аллаһ Тәғәлә әйткән бит:

«Шик юҡ, минең ярҙамсым – Китап индергән Аллаһ. Ул бөтә изгеләклеләрҙең ярҙамсыһылыр» (әл-Әғраф (Кәртәләр), 196). Раббыбыҙ – ҡурсалаусыбыҙ һәм яҡлаусыбыҙ, шуға күрә мин киләсәгебеҙ өсөн хафаланмайым. Әгәр ҙә ки улар исраф ҡылыусыларҙан булһа, был турала Ҡөрьәндә әйтелә:

«Малығыҙҙы аҡылһыҙҙарға бирмәгеҙ» (ән-Нисә (Ҡатындар), 5). Әгәр ҙә ки Аллаһ быны тыя икән, исраф ҡылыусы киләсәк быуындар өсөн мин байлыҡ тупларға тейешме ни?

❁

Заман яһилиәтенә ҡаршы беҙҙең төп бурысыбыҙ – ауыр шарттарға зарланыу урынына ислам шәхесенә һәм характерына эйә булған, физик йәһәттән дә, рухи йәһәттән дә көслө булған киләһе быуынды тәрбиәләү. Беҙ шундай йәштәрҙе тәрбиәләргә тейеш:

– иманлы, намыҫлы, һиҙгер, физакәр, баҫалҡы;

– нәфесенә ҡаршы тора алған, ныҡлы ихтыяр көсө булған;

– һәр бер юл мәңгелек донъяла ҡайҙа алып барғанын бер ҡарауҙа тоя алған аҡыллыларҙы, зирәктәрҙе.

Быныҡ өсөн пәйғәмбәрҙәр ғилеме һәм тәрбиәһе кәрәк...Быныҡ өсөн ғәҙәттән тыш шәхестәр тәрбиәләгән Дарүл Арҡам һәм Әсхәб-и Суффа кеүек уҡыу йорттары һәм шулай уҡ бөйөк тырышлыҡ кәрәк…

❁

Мөхтәрәм Муса Топбаш (рәхимәһуллаһ) әйткән: «Беҙ, физакәр быуын тәрбиәләһәк кенә, иманыбыҙҙы, ватаныбыҙҙы, флагыбыҙҙы һәм милләтебеҙҙе һаҡлай аласаҡбыҙ».

Бер хикмәт эйәһе әйткән: «Идара итеүсе милләттәр һәм идара ителә торған милләттәр араһындағы айырма – бер грамм. Һәм был – яҡшы тәрбиә алған кескәй бер төркөм».

Шундай төркөмдө тәрбиәләү өсөн, бөтә тырышлыҡты һалыу зарур. Юғары әхлаҡлы, лайыҡлы, иманлы йәштәр, көслө шәхестәр булырға тейеш улар.

❁

Ошондай сифаттарға эйә булған кешене тәрбиәләү өсөн, ҡайһы саҡ меңдәрсә кешенең тырышлығы кәрәк. Әгәр һеҙ бөйөк таланттарға бөтә мөмкинлектәрҙе асһағыҙ, был мотлаҡ үҙен тулыһынса аҡлаясаҡ.

❁

Ер, ҡалалар һәм биналар тейешле сифаттарға эйә булған кешеләрҙе барлыҡҡа килтерә алмай. Әммә тейешле сифаттары булған кешеләр ерҙе йәнләндерә, цивилизациялар барлыҡҡа килтерә…

❁

Пакистандың рухи архитекторы Мөхәммәд Икбал әйткән:

«Эй, зирәк кеше! Милләттең хәҡиҡи капиталы – аҡса, көмөш, тауар һәм алтын түгел. Уның хәҡиҡи капиталы – Ватанын һөйгән, сәләмәт, көслө, ныҡлы ихтыярлы, эшсән һәм дәтле иманлы улдары».

❁

Мөхтәрәм Раббани Имам әйткән:

«Һуғыштарҙы ике ғәскәрҙең союзы еңә. Уларҙың береһе – һалдаттарҙан торған ғәскәр, ә икенсеһе – доғалар ҡылыусы ғәскәр».

Хәҡиҡи еңеүҙәр иманлы, тәҡүәле, телендә доға булған быуынды тәрбиәләүгә бәйле.

ХӘҡИҡИ ҒИЛЕМ, ХӘҡИҡИ БЕЛЕМ

Буш хыялдарға, фәлсәфәи хеҙмәттәрҙәге боҙоҡ идеяларға күмелгән йәмғиәттәр ҡотолоу тапмаҫ.

Кешелекте хәҡиҡи сәғәҙәткә һәм рухи сәләмәтлеккә алып барырға һәләтле берҙән-бер нәмә – пәйғәмбәрҙәр рухиәте, ә уларҙан һуң Ҡөрьән һәм Сөннәт рухиәте менән һуғарылған, тәсауыф хикмәте менән камиллыҡҡа ирешкән Хәҡиҡәт дуҫтары рухиәте. Был - улар сарсап эскән тура юл һәм мәрхәмәт сығанағы

Аллаһ Сүбхәнәһү үә Тәғәлә әйтә:

وَمَا خَلَقْتُ الْجِنَّ وَالْاِنْسَ اِلَّا لِيَعْبُدُونِ

«Мин ендәрҙе лә, кешеләрҙе лә бары тик Миңә сәждә итһендәр, тип яралттым» (әҙ-Ҙәрийәт (Таратыусылар), 56).

Был фани донъяның уҡыу аудиторияһына килгәндәр өсөн иң мөһим дәрес «لِيَعْبُدُونِ» – «Аллаһҡа ғибәҙәт ҡылыу». Тәфсирҙә был ғибәрә «لِيَعْرِفُونِ» – «Аллаһты ҡәлбең менән танып белеү» тип аңлатыла (ҡар. Ибн Касир, IV, 255).

❁

Аллаһты танып белгәндәрҙең фекеренсә, был фани донъя мәктәбендә Аллаһ Тәғәләгә хеҙмәт итеүҙән дә мөһимерәк маҡсат юҡ, Аллаһтың яҡшы ҡоло булыуҙан да юғарыраҡ дәрәжә юҡ.

❁

Беҙ һәммәбеҙ илаһи һынау булған был фани донъя уҡыусылары.

Үлем килгәс, ғилем алыуыбыҙ тамамлана, һәм беҙ ғәмәлдәребеҙ менән баҡыйлыҡҡа күсәбеҙ. Һәммәбеҙ Аллаһ беҙҙән талап иткән «сәләмәт ҡәлб»кә эйә булыр өсөн килә был донъяға.

❁

– Тормоштағы иң мөһим ғилем – Аллаһты танып белеү.

– Иң гүзәл сәнғәт – мосолман булып йәшәй белеү.

– Иң ҡиммәтле һәләт – мосолман булып үлеү.

Аллаһ Тәғәләнең ҡолдарына ғилем бүләк итеүенең маҡсаты – ҡолдарының Уны танып белеүе. Икенсе төрлө әйтһәк, илаһи Көс һәм Ҡөҙрәт алдында үҙеңдең кәмселектәреңде, зәғифлегеңде таныған Аллаһ ҡоло була белеү.

Файҙалы белем – кешегә тәүге нәүбәттә үҙен танып белергә, йәшәү маҡсатын төшөнөргә мөмкинлек бирә, мәғрифәтуллаһ – Аллаһты танып белеү ишектәрен аса.

❁

Ғилем алыуҙың маҡсаты тураһында Юныс Әмре ниндәй гүзәл әйткән:

Ғилем – ул белеү,
Ғилем – үҙеңде танып белеү.
Күпме генә уҡыма -
Үҙеңде танып белә алмаҫһың!

Уҡыуҙан ни мәғәнә?
Бәндә хәҡиҡәтте белһен!
Уҡып ҡына ғилем артмай,
Бушҡа ғына киткән хеҙмәт ул!

❁

Аллаһты танып белеүгә алып килмәгән белем – ваҡытыңды бушҡа сарыф итеү. Алъюҫыҡҡа ваҡытын сарыф итеүселәр, аятта әйтелгәнсә:

عَامِلَةٌ نَاصِبَةٌ

«…михнәтле, йонсоу булыр» (Әл-Ғәшийәһ (Бөйөк ваҡиға), 3).

❁

Аллаһ, Үҙенең Рәхмәте менән, уңайы килгән һайын, бәндәгә тура юлға баҫырға мөмкинлек бирә һәм Үҙенең ҡолдарын Йәннәткә саҡыра. Быныҡ өсөн Ул пәйғәмбәрҙәрен, Китаптарын ебәрә. Әҙәм балаһы ҡайҙа ғына баҡмаһын, иң кескәй генә өлөшсәләрҙән алып тотош Ер шарына тиклем, Раббыбыҙҙың Көсө һәм Бөйөклөк сағылыштары менән тулы Ғаләмдә Уның Ҡөҙрәтенә дәлил булған бихисап хикмәт һәм нәсихәттәрҙе күрә ала. Кеше үҙенә, тупраҡ составына, атмосфераға күңел күҙе менән ҡараһын һәм күҙе күргән һәр нәмәлә тиңһеҙ илаһи сәнғәтте күреп хайран булһын…

Хәкиҡәт ғилем һәм хикмәт – Ҡөҙрәтле Раббыбыҙҙың сикһеҙ ниғмәт-бәрәкәттәрен күрә белеү һәм Уға рәхмәтле булыу, Уға хеҙмәт итеү.

❁

Тере йөрәктәр өсөн һәр бер ғилем – сәбәптәрҙән шул Сәбәптәрҙе тыуҙырыусыға алып бара, яратылмыштан – Яралтыусыға, әҫәрҙән – Оҫтаға.

Тимәк, яһиллыҡ, наҙанлыҡ – фани донъя ғилеменән мәхрүм булыу түгел, хәҡиҡәкә наҙанлыҡ – Йәнәбе Хаҡты белмәү. Икенсе һүҙҙәр менән әйтһәк, Аллаһтың мәрхәмәте менән көн итеп, Уның ниғмәттәренә күмелеп, шул ниғмәттәрҙе Бүләк итеп биреүсене танымау тигән һүҙ.

❁

Үҙеңде танып белеү түбәндәге һорауҙарға яуап табыуҙы аңлата:

– Ни өсөн бар ҡылындың?

– Ни өсөн һин тыуҙың?

– Һин кем биләмәһендә йәшәйһең?

– Был донъянан һин ҡайҙа юл тотасаҡһың?

– Ғүмерең нисек тамамланыр?

– Мәхшәр майҙанындағы хисапҡа әҙерһеңме?

– Мәңгелек тормош өсөн һин нимә әҙерләнең?

❁

Әгәр кеше бер нисә институт тамамлаһа, бихисап китаптар уҡыһа, тиҫтәләрсә заводҡа нигеҙ һалһа, әммә үҙ асылын төшөнмәһә, йәғни Аллаһ юлында хеҙмәт итергә тейешлеген аңламаһа, тимәк ул был донъялағы йәшәү маҡсатын аңламайынса көн итә.

❁

Пәйғәмбәребеҙ (саллəллаһу ғəлəйһи үə сəллəм) Аллаһ Тәғәләгә шулай тип ялбарған:

«Йә Аллаһ! Ҡурҡыу тоймаған йөрәктән, туймаған нәфестән, файҙа бирмәгән ғилемдән һәм ҡабул ителмәгән доғанан Һиңә һыйынам» (Мөслим, Зикр, 73).

❁

Фани тән карабы үлем өйөрмәһендә әйләнгәндә, ихтыяждарыбыҙға яуап бирмәгән, Аллаһты танып белергә ярҙам итмәгән буш ғилемдән файҙа булмаясаҡ.

Сәғди Ширази шәйех әйткән:

«Күпме генә уҡыма, әгәр һин алған ғилемеңә ярашлы тейешенсә ғәмәл ҡылмайһың икән, һин наҙан».

❁

Тормош өсөн кәрәк булған ғилем ҡиммәт, юғиһә ул йонсоҡкос хеҙмәт кенә буласаҡ. Арҡаһында тау-тау китаптар йөрөткән ишәк өсөн дә бит ул файҙаһыҙ. Аллаһ Тәғәлә алған ғилемдәренә ярашлы ғәмәл ҡылмаған йәһүд ғалимдары тураһында былай ти: «(уларҙың) хәле тау-тау китап тейәгән ишәктеке кеүектер»[26].

❁

Ысын наҙан ҡулына ғүмерҙә лә ҡәләм һәм ҡағыҙ алмаған кеше түгел. Ул, портфеле дипломдар менән тулы булһа ла, Раббыһының Бөйөклөгө алдында «һис ни» түгел икәнлеген аңлай алмаған бәндә. Нәфесенең тәкәбберлеге һәм мин-минлеге арҡаһында уның күңел күҙе һуҡырайған.

❁

Сәғди Ширази шәйех әйткән:

«Юлдан яҙған бәхетһеҙ наҙан кеше ғилеме булған, әммә гонаһтан ҡурҡмаған кешенән яҡшыраҡ, сөнки наҙан кеше һуҡырлығы сәбәпле юлдан яҙған, ә ғилеме булғаны, ике күҙе күрһә лә, ҡоҙоҡҡа осоп төшкән».

❁

Кешене ҡағыҙҙа яҙылғанды хәтерендә тотоуы юғары күтәрмәй. Бик күп ғилемле кешеләр бар, улар яңылыш ғәмәл ҡылғандарын аңлай, әммә, нәфестәренә буйһоноп, хатта ки наҙандар ҙа ҡыла алмаған гонаһтарҙы ҡыла.

Тимәк, эске донъяңды үҫтереү, тышҡы донъяны ла онотмайынса, күңелеңде сафлау, паклау кешене юғарыға күтәрә, унан «камил мөьмин» яһай.

❁

Аллаһ Сүбхәнәһү үә Тәғәлә мәғрифәтуллаһтан өлөш алыуыбыҙҙы теләй. Әммә формаль ғилемдәр менән генә быға ирешеп булмай. Бары тик мәғлүмәт файҙаһыҙ, хатта ки зыян килтереүе лә ихтимал.

Аллаһтың билдәләрен «юҡ хаҡҡа»[27] һатҡан йәһүд ғалимдары, мәҫәлән, шундай формаль ғилемдәргә эйә булған.

26. әл-Джума (Йома), 5.
27. Әт-Тәүбә, 9.

Тәкүәлектән йыраҡ булған дини ғилем илаһи хәкиҡәттәрҙе нәфес күҙлегенән баһалаған «дини ғалимдар» аша «емергес дингә» юл һала. Шәһүәт, байлыҡ, дан көҫәү кеүек әүәҫлектәренә барып сығарған фәтүәләрендә улар Ҡөрьән һәм Сөннәткә эйәрмәй, илаһи сығанаҡтарҙы үҙҙәренең уй-фекерҙәренә ҡулайлаштырырға тырыша. Шул сәбәпле әгәр ғалимдың ғилеме бар, әммә изге ғәмәлдәре һәм тәкүәлеге юҡ икән, уның һуңғы нулышы ҡыуаныслы булмаҫтыр.

❁

Айырым алғанда, фикһ ғилеме файҙаһыҙ, сөнки ул йөрәктәге тәкүәлек менән нығытылғанда ғына ҡиммәтле.

Шул сәбәпле мөхтәрәм Мәүләнә үҙенең төрлө ғилемдәрҙе тәрән өйрәнгән осорон «мин сей инем», тип баһалай. Рухи үҫеш процесында, мөхәббәт утында янып, тәкүәлеккә ирешкән осорон «өлгөрҙөм», тип баһалай. Ә илаһи мөхәббәттә янып-көйгән осорон «яндым», тип атай.

❁

Мөхтәрәм Мәүләнә әйткән:

«Рухи хикмәттән һис бер өлөш алмаған бик күп ғалимдар бар. Улар хәтерендә бик күп ғилемдәр булһа ла, (ҡәлебтәре тәрән булмағанға күрә) улар Аллаһтың һөйөклө дуҫтары була алманы!»

❁

Уҡый һәм яҙа башлағандан бирле алған ғилемебеҙ беҙҙе изге эштәргә этәреүгә һәм гонаһтарҙан аралауға етерлек түгел икән, улар хәтеребеҙҙә генә һаҡлана, ә йөрәгебеҙҙә рухи хикмәт була алмай.

❁

Аятында Аллаһ Тәғәлә әйтә:

«…Аллаһтың язаһынан ҡурҡа Аллаһтың хөкөмдәрен белгән ғалим кешеләр…» (Фәтир (Яралтыусы), 28). Икенсе төрлө әйтһәк, тәкүәлек хәкиҡи ғалимдар өсөн мотлаҡ булып тора. Аллаһ Тәғәлә Үҙенең шундай ҡолон ғына ғалим, тип атай. Ә Аллаһтан ҡурҡмаған, Уның Илсеһенән (салләллаһу ғәләйһи үә сәлләм) оялмаған һәм динде, үҙенең камил булмаған аҡыл иләге аша үткәреп, унан үҙе өсөн дөрөҫ тойолғандарҙы ғына алып, ҡалғанын атып бәргән, уйҙырмаларын хаҡ тип иҫәпләгән ғафилдарҙы түгел!

❁

Мәғлүмәт һаҡлағысы ғына булған аҡылдың һис бер ҡиммәте юҡ, сөнки мәғлүмәт кешегә золом ҡылырға ҡамасауламай. Һәм хатта киреһенсә, ерҙәге

хаттин ашҡан золомдар – ана шундай формаль ғилемдәр нәтижәһе. Тимәк, Аллаһтың ризалығына алып барған баҫҡыс булғанда ғына ғилем маҡтаулы һәм файҙалы.

❁

Әгәр ҙә кешенең күңеле ниндәйҙер ғилемгә тартылһа, ул йылдар буйы шул өлкәгә ҡағылышлы мәғлүмәт йыя. Әммә донъя ул ғилем менән генә сикләнмәй, был ғилем уның кескәй бер өлөшө. Өлөшләтә ул ғилем ғафилдарҙа ла, гонаһкәрҙәрҙә лә һәм залимдарҙа ла бар. Ул ғилемдәр ике осло ҡылыс кеүек, уны яҡшылыҡ өсөн дә, яманлыҡ өсөн дә файҙаланырға мөмкин. Һәм залимдар, шулар ярҙамында мәңгелек тормоштарын юҡҡа сығарып, тағы ла ҙурыраҡ золом ҡыла ала.

❁

Хоҡуҡ белгесенең йөрәгендә тәүге нәүбәттә ғәҙеллек тойғоһо урын алырға тейеш булған кеүек, ниндәйҙер ғилем менән шөғөлләнгән һәр кешенең йөрәгендә Аллаһтан ҡурҡыу, Уға мөхәббәт, Аллаһ ҡолдарының хоҡуҡтарына ҡарата һиҙгерлек, имандың тәүге емештәре булған шәфҡәт һәм мәрхәмәт булыуы зарур.

❁

Мөхтәрәм Мәүләнә әйткән:

«Әхлаҡһыҙ кешегә ғилем биреү – юлбаҫар ҡулына ҡылыс тоттороу менән бер».

❁

Мөхтәрәм Шафиғи имам әйткән:

«Үҙен танып белмәгәндәргә ғилем биреүсе ғилемдең хоҡуғын хаҡламай. Ә кем лайыҡлынан ғилемде йәшерә, уға ҡарата ғәҙелһеҙлек ҡыла».

❁

Бөгөн ғилем Аллаһ Тәғәлә йыһанда ҡуйған матди һәм физик ҡанундарҙан йыраҡ китә алмай. Шул рәүешле «мәғрифәтуллаһҡа» - шул ҡанундарҙы бар ҡылған Аллаһ Тәғәләне танып белеүгә, йәғни ғилемдең асылына әһәмиәт бирелмәй. Илаһи яратылмыш сағылыштары менән таныштырғанда, бөтә барлыҡты яралтҡан Аллаһҡа йөрәгең менән тартылыу, һөйөү тәрбиәләнмәй, ғилем тураһында тулы мәғлүмәт бирелмәй.

Рухиәттән алыҫ булған ғилем – тулы ғилем түгел. Ғилем алғанда, материаль һәм рухи баланс үтәлергә тейешле мотлаҡ шарт булып тора. Юғиһә бәндә,

бер ҡанат менән осорға маташып, бесәйҙең табышына әйләнгән ҡош хәлендә ҡалыуы ихтимал.

❁

Мөхтәрәм Мәүләнә әйткән:

«Ғилемдең ике ҡанаты бар, ә шик-шөбһәнең – берәү генә… Бер ҡанатлы ҡош шунда уҡ ергә ҡолаясаҡ».

Рухиәттән йыраҡ ғилем кешеләрҙе мәңгелек донъялағы һәләкәткә алып киләсәк.

❁

Бөгөн фән һәм техниканың үҫеше цивилизация тип иҫәпләнә. Әммә цивилизация ысын мәғәнәһендә цивилизация булһын өсөн, гуманистик ҡиммәттәргә нигеҙләнергә тейеш. Техник прогресс изгелекте арттырманы, киреһенсә, уның менән мауыҡҡандарҙың холҡо яман яҡҡа үҙгәрҙе. Тап гормонлы йәшелсә-емеш кеүек…

❁

Бөгөн, бөтә өлкәләрҙә лә техник ҡаҙаныштар һәм үҫеш күҙәтелһә лә, гуманистик ҡиммәттәр юҡҡа сығыуы сәбәпле, кешелек яңғыҙлыҡ һәм рухи зәғифлек кеүек бихисап проблемаларға дусар.

Бөгөн кешелек эҙләгән тыныслыҡ техник һәм материаль прогресҡа бәйле түгел, сөнки быларҙың һәммәһендә мәрхәмәт тә, мөхәббәт тә, намыҫ та юҡ...

❁

Фән һәм техника юғары күтәрелгән, хатта ки башҡа планеталарҙа йәшәү мөмкинлеге тикшерелгән беҙҙең заманда кешеләр үҙҙәренең зәғифлеген онотто, нәфесен Аллаһ кеүек күрә башланы. Әммә бөтә донъяны ялмап алған короновирус уларҙың мин-минлегенә, тәкәбберлегенә ҡаты һөжүм яһаны. Ғәләмәт ҙур иҡтисадтар ҡыйралды, һаулыҡ һаҡлау системаһы емерелде, илдәр банкрот хәлендә тороп ҡалды…

Шулай итеп, бөйөк наҙанлыҡ ул:

– сәбәптәр менән мауығып, сәбәптәрҙең Сәбәпсеһен, йәғни Аллаһты онотоу,

– ниғмәттәр менән мауығып, Ниғмәттәрҙе бүләк итеп биреүсене, һәр нәмәнең Хужаһын – Раббыбыҙҙы онотоу,

– ғәмәлдәр менән мауығып, һәр нәмәне Үҙ Көҙрәте менән Булдырыусыны иҫтән сығарыу.

Атеистар һәм деистар беҙҙең көндәрҙә «Динме, әллә фәнме?» лозунгыһы аҫтында йәштәрҙең аҡылына һәм йөрәгенә шик һалырға тырыша. Был һорауға яуап ябай: беренсенән, дин һәм фән бер-береһенә антоним түгел. Беҙ фән тип атаған нәмә – Аллаһ Сүбхәнәһү үә Тәғәлә Ғаләмдә урынлаштырған ҡанундарҙы өйрәнеү ул.

Әгәр Аллаһ ул ҡанундарҙы бар ҡылмаһа һәм кешегә уларҙы танып белеү һәләтен бирмәһә, «фән» тип аталған нәмәне кеше нисек барлыҡҡа килтерер ине?! Раббыбыҙ Аллаһ Үҙенең ҡоло булыу йөкмәтелмәгән башҡа йән эйәләренә танып белеү мөмкинлеген бит бирмәгән. Быны ул кешеләргә генә биргән. Раббыбыҙ аятында әйтә:

«…Һеҙ бик әҙ беләһегеҙ бит» (ҡар. Әл-Исра (Төндә күсереү), 85).

Остоҡ ҡына ғилемгә эйә атеистар һәм деистар ғилемде, сикһеҙ һәм абсолют ғилемгә эйә Аллаһҡа ҡаршы ҡуйып илаһлаштыра. Ошо үҙе генә уларҙың ниндәй ахмаҡлыҡ упҡынына ҡолауына дәлил булып тора.

Аллаһ Тәғәләгә кешегә динде һәм фәнде бүләк итеп биргән. Был ике өлкә бер-береһенән айырылмай. Ислам тарихынан күрәбеҙ: ул һәр саҡ ғилемде һәм тикшеренеүҙәрҙе хуплай. Көнбайыш донъяһы наҙанлыҡ һәм хөрәфәттәр ҡараңғылығында булғанда, ислам донъяһы фән һәм цивилизацияны юғары кимәлгә күтәрә. Тап Ҡөрьән фәнни ғилемгә нур тарата. Заманыбыҙҙың барса асыштары бер генә аятты ла инҡар итә алманы, киреһенсә, уларҙы раҫланы.

❁

Ислам – фән менән һис бер проблемаһы булмаған берҙән-бер хәҡиҡи дин. Киреһенсә, Ҡөрьән беренсе булып килә, ә фән, уны раҫлап, уның артынан бара.

14 быуат элек үк Ҡөрьәндә кеше, әсә һөтө, дактилоскопия, дерматология, генетика, профилактик медицина, ботаника, астрономия, геология, физика, география, тарих һәм башҡа шундай фәндәр тураһында мәғлүмәттәр бирелә. Фән был ғилемдәрҙе иһә яңы асты. Шулай итеп, бөгөн Ҡөрьәндең берҙән-бер хәҡиҡи Изге яҙма булыуы ҡат-ҡат раҫланды.

Көнбайышта дин, боҙолғанға күрә, фәнни асыштар менән ҡаршылыҡҡа килә, ә ҡәтғи авторитеты һәм ҙур власы булған сиркәү, был хәлде йәшереү өсөн, фәнде тотҡарларға тырыша. Әммә прогресты туҡтатыу мөмкин түгел, һәм Көнбайышта дингә ҡаршылыҡ һәм фәндәрҙе юғары күтәреү киң тарала. Артабан ул бөтә донъяла популяр булып китә. Ислам донъяһында иһә дингә ундай мөнәсәбәтте аҡларлыҡ күренештәр юҡ.

Шулай итеп, «Динме, әллә фәнме?» тигән һорау – иманлы йәштәрҙең саф күңеленә шик һәм инҡар итеү орлоғон сәсергә маташыусыларҙың бер ағыуы.

Һәр мосолмандың бурысы – шундай вирустарға ҡарата үтә лә иғтибарлы һәм һаҡ булыу.

❁

Бөгөн, дини ғилем етешмәүгә бәйле проблемаларға өҫтәп, деизм тип аталған фетнә ҡалҡып сыҡты. Уның йоғонтоһона эләккәндәр былай тип раҫлай: Аллаһ бар (сөнки быны инҡар итеү мөмкин түгел), Ул һарыҡтарҙы, сәскәләрҙе, таштарҙы, ерҙе барлыҡҡа килтергән, уларға Үҙенә ғибәҙәт ҡылыуҙы йөкмәтмәгән, һәм был кешеләргә лә ҡағыла. Йәғни, Уның алдында кешеләрҙең бер бурысы ла юҡ, улар былай ғына барлыҡҡа килгән...

Яралтыусыны инҡар итеү өсөн, ахмаҡ булырға кәрәк. Деистар Йәнәбе Хаҡты инҡар итмәй ҙә кеүек, әммә Уның Раббыбыҙ булыуын, Ул тыуҙырған тәртипте, Китабын, Пәйғәмбәрен һәм әмерҙәрен инҡар итә. Улайһа кеше башҡа яратылмыштарҙан нимәһе менән айырыла һуң?!

Аллаһ Тәғәлә бындай идеялар менән мауығыусыларҙы киҫәтә:

«Иман килтерҙек (бер Аллаһҡа инандыҡ), тип әйткәндән һуң, ауырлыҡтар аша һыналмайбыҙ, беҙҙе иғтибарһыҙ ҡалдырырҙар, тип уйлайҙармы әллә кешеләр?» (әл-Ғәнкәбут (Үрмәксе), 2).

«Кеше үҙен һис бер сикләүҙәрһеҙ, күҙәтеүсеһеҙ йәшәргә хаҡлы, тип һанаймы әллә?» (әл-Киәмәһ (Ҡиәмәт), 36).

«Беҙ Күкте лә, Ерҙе лә, улар араһындағыларҙы ла шаярыр өсөн генә хасил итмәнек» (әд-Духан (Төтөн), 38; әл-Әнбийә (Пәйғәмбәрҙәр), 16).

❁

Университеттар тамамлаған, юғары ғилем алған, дини булмаған әхлаҡҡа эйә бик күп йәштәрҙе күрәбеҙ. Ҡыҙғанысҡа ҡаршы, улар Ҡөрьән һәм Сөннәт әхлағы тураһында бер нәмә лә белмәй. Улар уйынса, уларҙың ғилеме - Ҡөрьән һәм Сөннәттә маҡталған ғилем.

Ә бит кешенең аҡылын һәм йөрәген Аллаһҡа алып бармаған һәм Уның Ҡөҙрәтен һәм Бөйөклөгөн аңларға ярҙам итмәгән ғилем, бәлки, кешегә был фани донъяла юғары урын биләргә ярҙам итер, әммә мәңгелек батшалыҡта яман яҙмыштан аралай алмай.

❁

Үҙенең вәғәздәрендә мөхтәрәм Сәми Әфәнде хәҡиҡи ғилемдең йөрәгендә Аллаһтың Ҡөҙрәтен һәм Бөйөклөгөн тойорға ярҙам иткән ғилем булыуын әйтә килде. Ул, яйы тура килгән һайын, шундай ғилемдең оло нығмәт булыуын иҫкә төшөрҙө. Бер заман килгән ҡунаҡтарҙың береһе, уландары менән танышты-

рып, мөхтәрәм Сәми Әфәнденең доғаһын алырға теләүен белдерҙе. Уның янына килеп, ҡулын үпте һәм әйтте:

– Әфәндем! Был йәш кешеләр Америкала уҡыны һәм инженерҙар булды. Беҙ һеҙҙең доғаларығыҙҙы һорайбыҙ!

Аҙаҡ ул уландары менән таныштырҙы. Сәми Әфәнде мәғәнәле итеп йылмайҙы һәм әйтте:

– Дарул-Фунунда[28] ғына уҡып сыҡҡан бер фәҡирегеҙ мин. Әммә хәҡиҡи ғилем – Аллаһты танып белеүгә йүнәлтелгән ғилем!

Йәғни, ниндәй генә ғилем алмайыҡ, һәр заманда кәрәкле төп ғилем – мәғрифәтуллаһҡа, йәғни «Аллаһты ҡәлбең менән танып белеүгә» йүнәлтелгән ғилем.

❁

Мөхтәрәм Ғүмәр (радыйаллаһу ғәнһү) вафат булғас, Абдуллаһ ибн Мәсғуд (радыйаллаһу ғәнһү) әйтте:

– Ғилемдең ундан туғыҙы китте.

Сәхәбәләр уға былай тип белдерҙе:

– Беҙҙең арала тағы ғалимдар бар!

Ибн Мәсғуд (радыйаллаһу ғәнһү) шулай тип яуап бирҙе:

– Мин илаһи ғилем тураһында әйтәм.

❁

Аятта әйтелә:

«…Ғалим кеше Аллаһтың язаһынан ҡурҡа…» (әл-Фәтыр (Яралтыусы), 28).

Был илаһи әмерҙән аңлауыбыҙса, йөрәктә Аллаһтан ҡурҡыу һәм Уға тәүәккәлләү тыуҙырмаған ғилем Аллаһ ҡабул иткән һәм аят, хәҙистәрҙә маҡталған ғилем түгел. Һәм әгәр был шулай икән, һылтауҙар табып, Аллаһтың әмер-тыйыуҙарына буйһонмау, шәриғәт күҙлегенән ниндәйҙер рухи кәмселектәрҙе аҡлап була тип иҫәпләү – оло алданыу!

❁

Камиллыҡҡа ирешеү өсөн ике төрлө ғилем кәрәк:

Беренсеһе – уҡытыусыларҙан һәм китаптарҙан өйрәнергә мөмкин булған асыҡ (ҙаһир) ғилем.

28. XIX быуаттарҙа Ғосманлылар империяһында нигеҙ һалынған юғары уҡыу йорто.

Икенсеһе – йәшерен (бәәтын) ғилем. Йәғни йөрәк менән ирешкән ғилем. Уларҙы уҡытыусыларҙан да, китаптарҙан да алыу мөмкин түгел, ҡәлбеңде үҫешергә мәжбүр итеп кенә мөмкин. Был үҫеш ихласлыҡ һәм тәҡүәлек һөҙөмтәһе.

❁

«Ҡайҙа карьера эшләргә?» - тип һорай ҡайһы берәүҙәр. Шундай кәңәш биреү лазым: «Тәүҙә тәҡүәлектә карьера эшлә, аҙаҡ инде үҙең теләгән өлкәлә магистр йәки доктор дәрәжәһен алырға мөмкин».

❁

Беҙҙе был донъяға нәфесебеҙ хуш күргән диплом, юғары вазифа алыу, байлыҡ, капитал йыйыу маҡсаты менән ебәрҙеләрме әллә? Әллә беҙ, сәбәп булаһы аҙымдарҙы маҡсатҡа әйләндереп, ғафиллыҡҡа баттыҡмы?!

❁

Донъяуи ғилемдән алырға мөмкин булған килем барыбер ошо донъяла ҡала. Аллаһты танып белеү ғилеме иһә мәңгелек сәғәҙәт сараһына әйләнәсәк. Шуға күрә, йөрәктә Раббыбыҙҙы танып белеү өсөн тәҙрәләр асылһын өсөн, һәр бер ғилемде нәсихәт алып, иман һәм тәҡүәлек менән Аллаһ ризалығына ынтылып өйрәнеү зарур.

❁

Беҙҙең өсөн ике уҡыу аудиторияһы бар. Береһе - фани донъяла, икенсеһе – киләһе тормошта. Иман эйәһенең бурысы – фани донъя аудиторияһын киләсәк тормош аудиторияһына әйләндереү. Был донъялағы хис-тойғоларыбыҙ сәбәптәрҙән - шул сәбәптәрҙең Сәбәпсеһенә, әҫәрҙән Оҫтаға алып килергә, шул рәүешле был донъяның дәрестәре Әхирәт капиталы булып әүерелергә тейеш. Икеһен бергә яраштырып алып барыу зарур, юғиһә, хикмәт эйәләре әйткәнсә: «Кем был донъяла ғилемен арттырһа, әммә шуға ярашлы тәҡүәлеген арттырмаһа, ул Аллаһтан алыҫлашыр ғына…» (Суюти, Джамиу әс-сәғир, II, 169).

❁

Тормош өҫкә күтәрелеү һәм аҫҡа тәгәрәүҙәрҙән ғибәрәт. Йәшлек һәм ҡартлыҡ, сир һәм сәләмәтлек, байлыҡ һәм фәҡирлек, һуғыш һәм тыныслыҡ… Бәндә был шарттарҙа үҙен нисек тотор, Аллаһтың ризалығына ирешә алырмы? Пәйғәмбәребеҙ (салләллаһу ғәләйһи үә сәлләм) быға 23 йыл буйы өйрәткән. Шулай итеп, ул ислам мәҙәниәтен һәм сәғәҙәт быуаты цивилизацияһын барлыҡҡа килтергән.

Бөгөн һәм һәр даим беҙгә ул мәҙәниәт кәрәк. Беҙгә ул ғилем һәм шуның буйынса ғәмәл ҡылыу кәрәк.

Аллаһ Илсеһенең (салләллаһу ғәләйһи үә сәлләм) сираһын, сифаттарын өйрәнеү, хөрмәт һәм мөхәббәт менән уға буйһоноу – был донъя мәктәбендә беҙ алырға тейешле иң мөһим ғилем. Шул ғилемдән мәхрүм кеше, йәғни Аллаһ Илсеһенең (салләллаһу ғәләйһи үә сәлләм) тормошон өйрәнмәгән кеше, меңдәрсә китап уҡыһа ла һәм меңдәрсә мәғлүмәтте иҫендә тотһа ла, ул наҙан булып ҡаласаҡ.

❁

Мәктәптәрҙә тырышып белем алған балаларыбыҙҙы алған ғилемдәрен файҙаға әйләндерерлек сергә – Аллаһ һәм Уның Илсеһенә (салләллаһу ғәләйһи үә сәлләм) һөйөү менән буйһоноу хәҡиҡәтенә өйрәтергә тейешбеҙ. Юғиһә гүзәл үрнәк миҫалында тәрбиәләнмәгән, мәрхәмәттән, юғары әхлаҡтан мәхрүм быуын ҡаласаҡ, изгелек цивилизацияһы урынына беҙҙән һуң сүп-сар ғына ҡаласаҡ! Аллаһ һаҡлаһын!

❁

Дини тәрбиәгә иғтибарһыҙлыҡ материализм бәләләрен алға сығарасаҡ, йәғни иманһыҙлыҡ сәбәпсеһе булған фани донъя мәнфәғәттәре менән мауығыуҙы арттырасаҡ. Материализм – философия түгел, ә интеллектуаль ғәриплек. Ул хикмәт тә түгел, ә сир.

❁

Буш хыялдарға, фәлсәфәи хеҙмәттәрҙәге боҙоҡ идеяларға күмелгән йәмғиәттәр ҡотолоу тапмаҫ. Кешелекте хәҡиҡи сәғәҙәткә һәм рухи сәләмәтлеккә алып барырға һәләтле берҙән-бер нәмә – пәйғәмбәрҙәр рухиәте, ә уларҙан һуң Ҡөрьән һәм Сөннәт рухиәте менән һуғарылған, тәсауыф хикмәте менән камиллыҡҡа ирешкән Хәҡиҡәт дуҫтары рухиәте. Был - улар сарсап эскән тура юл һәм мәрхәмәт сығанағы.

❁

Дини ғилем менән бергә бирелгәндә һәм уға ҡарата икенсе дәрәжәлә тип ҡаралған осраҡта ғына бөгөн донъяуи ғилем кешелеккә һәм балаларыбыҙға бәхет килтерергә һәләтле. Ҡыҙғанысҡа ҡаршы, киреһенсә булғанда, был балаларыбыҙҙы үҙебеҙҙең ҡиммәттәрҙән ситкә тибәреүгә сәбәп буласаҡ. Улар беҙгә ят булған Көнбайыш модаһы һәм ялған рекламалар ҡорбанына әйләнәсәк, кешелеккә бәхет тә, тыныслыҡ та алып килмәгән системаларҙың роботтарына әүереләсәк.

❁

Белем биреүҙе Көнбайыш илдәрҙең мәғариф системаһына ярашлы үҙгәртергә маташыу ислам донъяһында тейешле һөҙөмтә бирмәне. Тәүге маҡсат

Көнбайышты фән һәм техника өлкәһендә ҡыуып етеү ине. Был процесс барышында Көнбайыштағынан күпкә өҫтөн булған бик күп гүзәл сифаттар юҡҡа сыҡты. Һөҙөмтәлә мосолмандар мосолман булмағандарға оҡшап ҡалды.

Бер аҡыл эйәһе әйткәнсә:

«Дошмандан хәҡиҡи еңелеү - уның һымаҡ була башлауҙа».

❁

Мәрхүм Нәжип Фазыл йәш быуынға шундай киҫәтеү ҡалдырҙы:

«Үҙ тамырын яратмаған ботаҡ һәм үҙ ботағын яратмаған емеш өлгөрөп етмәй тороп серейәсәк!».

❁

Заман-заман, мәғариф темаһы ҡалҡып сыҡҡан һайын, уны яҡшыртыу буйынса тәҡдимдәр индерелә. Ниндәйҙер Европа илдәренең уҡытыу принциптары, ниндәйҙер философтарҙың уҡытыу методтары йәки берәй Көнбайыш мәктәбенең уңыштары тураһында һөйләйҙәр.

Тамырға ялғанған бөтә ботаҡ та үҫеп китмәгән кеүек, цивилизация ла рухи йәһәттән сит булған мәҙәниәттәрҙе күсереп ултыртыуҙан файҙанан бигерәк зыян ғына күрә.

Беҙҙең ислам цивилизацияһы Ҡөрьән һәм Сөннәт нигеҙендә Пәйғәмбәребеҙ (салләллаһу ғәләйһи үә сәлләм) тарафынан төҙөлә. Йәштәребеҙҙең күңеленә һалырға тейешле беренсе һәм иң мөһим мәҙәниәт – Ҡөрьән һәм Сөннәт мәҙәниәте.

❁

Һәр цивилизация уның атрибуттары һәм характеры менән гармонияла булған үҙ кешеһен барлыҡҡа килтерә.

Ислам цивилизацияһы – үҙ тарихында кешелек ирешә алған юғары бейеклек. Бының сәбәбе шунда: был цивилизацияла кешенең тәбиғи сифаттары илаһи ғилем, мәғрифәтуллаһ һәм хикмәт менән биҙәлә. Йәғни, нәфес тыуҙырған проблемаларҙан арынып, мосолмандарға үҙ йөрәктәренә хәҡиҡи ғилем һәм рухи хикмәтте ялғау насип була.

❁

Әлеге заманда, Аллаһҡа шөкөр, элекке менән сағыштырғанда, дини ғилем алыу өсөн күберәк мөмкинлектәр барлыҡҡа килде. Мәктәптәр һәм имам-хатыптар[29] лицейҙары, теология һәм ислам фәндәре факультеттары асылды.

29. Дини һәм донъяуи ғилем биргән урта мәктәптәр.

Әммә мәктәптәрҙә асыҡ ғилем генә бирелһә, әгәр бала шәхесен, характерын, тәртибен, холҡон һәм әхлағын урам, телевидение, интернет, мода һәм реклама ҡарамағына ҡалдырһаҡ, ҡыҙғанысҡа ҡаршы, был мәктәптәрҙә көткән һөҙөмтә булмаясаҡ.

Ә инде яңы быуындарға тәкүәләр рухиәтен, күндәмлеген, шәхесен, әҙәбиәтен, әхлағын, йомартлығын һәм ҡыйыулығын тапшыра алһаҡ, ислам донъяһы яңынан үҫешәсәк, яңы Юныс Әмре, Ғәзиз Мәхмүд Хоҙаи, Зайнулла Рәсүли һәм Ғатаулла ишандар пәйҙә буласаҡ, һәм беҙ эске донъяла ла, тышҡы донъяла ла ҙур еңеүҙәр яулаясаҡбыҙ.

❁

Заманыбыҙ мәғариф системаһы – материализм, позитивизм һәм донъяуи ҡараштар продукты. Был белем биреү системаһында дини ғилем балта оҫтаһына йәки тимерсегә уҡыу һымаҡ бер эш һанала: «Ошо китапты уҡы, ошо имтиханды бир һәм шул етер».

Дини ғилемде улай биреү ярамай. Эйе, асыҡ ғилемдәр кәрәк. Әммә алынған ғилемде йөрәк үҙләштерергә, шәхесең һеңдерергә тейеш. Беҙ ниндәй булһаҡ, уҡыусыларыбыҙ ҙа шундай буласаҡ. Уҡыусыларға мәғлүмәт кенә түгел, халәтебеҙҙе лә тапшырыу лазым. Ул уны ҡабул итә алырға тейеш.

Дини ғилем – балта оҫтаһына, тимерсегә, төҙөүсегә уҡыу түгел. Аллаһ Тәғәләнең динен уҡытҡан кешелә ғилемдән тыш рухи хикмәт, үҙенә башҡа рухи халәт, мөхәббәт тулы йөрәк булыуы зарур. Хәҡиҡи ғилем рухиәте мөхәббәт тулы йөрәктән икенсе йөрәккә күсә. Дингә механикаға өйрәткән кеүек өйрәтмәйҙәр. Былай эшләгәндә, алған ғилем ҡояш нуры аҫтында боҙға яҙылғандар иреп юҡҡа сыҡҡан һымаҡ юҡ буласаҡ.

Дини булыу дин тураһында бөтә мәғлүмәтте белеү тигән һүҙ түгел, ә игелек тулы күңел менән алған ғилемеңә ярашлы ғәмәл ҡылып йәшәү.

❁

Мәҫәлән, Аллаһ Илсеһенең (салләллаһу ғәләйһи үә сәлләм) сираһын өйрәнеү уның ҡоро биографияһын йәки ул ваҡыттағы ваҡиғалар хронологияһын өйрәнеүҙән ғибәрәт түгел. Пәйғәмбәребеҙ (салләллаһу ғәләйһи үә сәлләм) ҡасан тыуған, ҡасан һәм ҡайҙа күскән, ниндәй һуғыштарҙа ҡатнашҡан, ниндәй йәштә һәм ҡайҙа үлгән кеүек мәғлүмәттәрҙе генә үҙләштереү тормошон дин юлына йүнәлтергә ынтылғандарға улар көткән һөҙөмтәне бирмәйәсәк.

Был йәһәттән Аллаһ Илсеһенең (салләллаһу ғәләйһи үә сәлләм) сираһын хәҡиҡи өйрәнеү – уның бишектән алып ҡәбергәсә тормошондағы беҙгә үрнәк булған ваҡиғаларҙан, гүзәл холҡонан, Ҡөрьәнде өйрәнергә һәм уны башҡа-

ларға өйрәтергә ынтылыуынан, дин юлындағы физакәрлегенән нәсихәт алыу, аңлау, уға эйәрергә ынтылыу… Уның хис-тойғолары, йөрәк халәте, хәҡиҡәт юлындағы сабырлығы менән йәшәргә тырышыу.

❁

Китаптағы ғилем орлоҡҡа оҡшаш. Әгәр орлоҡто, ергә ултыртмайынса, амбарҙа һаҡлаһалар, ул йылдар үткәс тә шул орлоҡ ҡына булып ҡаласаҡ. Китаптағы ғилем дә уның биттәрендә йәки кәштәләрҙә ҡала.

Әммә ләкин ергә ташланған орлоҡ үҫә, үҙенсәлектәренә ярашлы сәскә ата. Ҡайһы берҙәре ғәләмәт ҙур чинарҙарға әүерелә.

Шулай уҡ йөрәк түренә сәселгән ғилем орлоҡтары һәм рухи хикмәттәр ҙә уларҙы рухиәт баҡсаларына әүерелдерә. Ана шунда ғына ғилемдең хәҡиҡи емештәре пәйҙә була һәм рухи хикмәт серҙәре асыла.

❁

Барса тере йән эйәләре араһынан кешене тәрбиә ҡылыуы иң ауыры. Аллаһ Сүбхәнәһү үә Тәғәлә кешеләрҙең тәрбиәсеһе сифатында иң һөйөклө ҡолдарын, пәйғәмбәрҙәрен ебәргән. Тимәк, шулай тип тә әйтергә була: уҡытыусы, тәрбиәсе - пәйғәмбәрҙәр профессияһы.

❁

Бер хикмәт эйәһе әйткән: «Әгәр һин яҡшы уҡытыусы булырға теләйһең икән, һин Күк уҡыусыһы булырға тейешһең».

Икенсе һүҙҙәр менән әйткәндә, беҙгә ғүмер буйы Ҡөрьән Һәм Сөннәт уҡыусылары булыу, уларға ярашлы йәшәү һәм уларҙың принциптарын тормошҡа ашырыу лазым. Ана шул саҡта ғына беҙ татлы шәкертлек емештәренән ауыҙ итә һәм хәҡиҡи уҡытыусылар була аласаҡбыҙ.

❁

Һабаҡ биреү етди ғилем талап иткән кеүек, дин мөғәллимдәре үҙҙәре лә Ҡөрьән һәм Сөннәт мәктәбе уҡыусылары булып тора. Йәғни һәр кем был донъяла уҡыусы, һәр кем һуңғы һулышында Аллаһ ҡашына барып баҫасаҡ һәм өлгәшеү табелен аласаҡ.

❁

Беҙ белергә тейеш: бушҡа үткән ғүмер мәңгелек һәләкәткә алып киләсәк. Аманат итеп бирелгәнде һаҡламау исраф булыр ине. Һәм яратылмыштарҙың иң арҙаҡлыһы булған кешегә тейешле тәрбиә бирмәү - иң бөйөк исраф.

❁

Мәхмәд Акиф һоҡландырғыс мөғәллимде шулай тасуирлай:

Үҙен “мөғәллим” тип атаған кеше иманлы булырға,

Үҙен лайыҡлы тоторға, намыҫлы булырға тейеш...

Йәғни, мөғәллим тәүге нәүбәттә иманлы, йөрәге мәрхәмәт менән тулы булырға тейеш.

«Үҙеңде лайыҡлы тотоу» – тимәк, үрнәк характер һәм шәхес булыу тигән һүҙ.

«Лайыҡлы булыу» – тимәк, бурысыңдың уғата мөһим булыуын тойоу һәм уны күркәм рәүештә үтәү.

«Намыҫлы булыу» – тимәк, үҙеңде мәрхәмәтлелек, шәфҡәтлелек һәм физакәрлек кеүек сифаттар менән биҙәү.

❁

Белем биреү – мәғлүмәт биреү түгел, ә рухи халәттәреңде һәм характерыңды биреү, сөнки кешелек шәхескә һәм характерға буйһона.

❁

Кешене тәрбиәләү өсөн физик һәм рухи тырышлыҡ кәрәк:

– Һөйгән һәм һөйөклө тәрбиәсе булыу.

– Физакәрлек күрһәтеү.

– Сабыр һәм түҙемле булыу.

– Тәрбиәңдәгеләрҙе яҡлау һәм ҡурсалау.

– Тырыш һәм йомшаҡ булыу.

– Өмөт һәм доға тураһында онотмау…

Шуны иҫтән сығармаҫҡа кәрәк: ҡиммәтле үҫемлектәр тиҙ үҫмәй, кешене үҫтереү ҙә еңел түгел.

❁

Мөғәллимлек физакәрлек талап итә. Әгәр мөғәллим дәрестәренә ғибәҙәткә ҡараған һымаҡ ҡараһа, уларҙан файҙа күберәк буласаҡ.

Шул сәбәпле бөтә ерҙе мәктәп тип иҫәпләгән, үҙенән һуң вариҫ итеп ғилемле быуын ҡалдырырға һәләтле, үҙен дингә, ватанына һәм халҡына бағышлаған мәғрифәтселәр маҡтауға лайыҡлы.

ИСЛАМҒА САҠЫРЫУ ҺӘМ УНЫҢ ЫСУЛЫ

«Йөрәктәрҙе яулау» – кешене матди йәһәттән бәхетле итеү генә түгел. Хәҡиҡи «йөрәктәрҙе яулау» – уға Аллаһҡа яҡынайырға ярҙам итеү, иман, Көрьән һәм Пәйғәмбәребеҙ (саллəллаһу ғəлəйһи үə сəллəм) менән таныштырыу һәм шул рәүешле уның мәңгелек донъяла бәхетле булыуына сәбәп итеү.

❁

Яҡшылыҡ һәм изгелек – исламға саҡырыуҙың иң гүзәл формаһы, сөнки кеше мәрхәмәтлегә һыйына. Ҡалалар һуғышсылар менән яулана, ә йөрәктәр – яҡшылыҡ һәм изгелек менән.

Әгәр ниндәйҙер бер ваҡытта һәм ниндәйҙер урында дин көсһөҙләнһә, кешеләр ялған маҡсаттар менән мауыҡһа, иман итеүҙән ҡала дәғүәт ҡылыу иң мөһим бурыҫҡа әүерелә. Хәҡиҡәткә һәм изгелеккә саҡырыуҙа уңышҡа ирешмәй тороп, ул урында һәм ул ваҡытта шәриғәт йәһәтенән хәләл булған ғәмәлдәр ҙә харам булып иҫәпләнәсәк.

❁

Ташҡын алып киткән бүрәнәләр кеүек, йәмғиәт иманһыҙлыҡҡа һәм әхлаҡһыҙлыҡҡа сумһа, дәғүәт ҡылыу мөьминдең төп бурысына әйләнә.

❁

Һәр ниғмәттең үҙ хаҡы бар. Беҙгә һис бер түләүһеҙ ислам ниғмәте насип булды. Аллаһ Сүбхәнәһү үə Тәғәләнең ошо ниғмәтенә шөкөр итеп, рәхмәтле булып, тормошобоҙ менән ислам әхлағы гүзәллеген башҡаларға күрһәтеү һәм тапшырыу лазым.

❁

Заман яҙыҡтары өйөрмәһенә эләккән кешене ҡулынан тотоп ҡалыу, үҙебеҙ йәшәгән йәмғиәтте шул упҡындан аралау, мәңгелек һәм хәҡиҡи бәхет тураһында һөйләү – иманыбыҙ һәм намыҫыбыҙ бурысы.

Бөгөн асыҡ рәүештә ҡоллоҡ системаһы булмаһа ла, бик күп ватандаштарыбыҙ күҙгә күренмәгән сылбырҙа, улар ыҙа сигә һәм өнһөҙ йәш түгә. Уларға ярҙам ҡулы һуҙыу, уларҙы фани донъя, нәфес, шайтан сылбырҙарынан аралау – беҙҙең бурыс.

Раббыбыҙ Аллаһ әйтә:

«Унан һуң, әлбиттә, байлығығыҙ тураһында һораласаҡһығыҙ» (әт-Тәкәҫүр (Байлыҡ йыйыуҙа ярышыу), 8). Динебеҙ йөкмәткән бурысыбыҙ – оло ниғмәт булараҡ бүләк итеп бирелгән иманыбыҙ өсөн рәхмәт йөҙөнән ошо ниғмәттән мәхрүм булғандарға ярҙам ҡулы һуҙыу.

❁

Беҙҙең көндәрҙә рухи хәйерселек матди хәйерселектән олораҡ. Рухи хәйерселек, алдатҡыс грим һалынып, ялған бәхет битлеге рәүешендә күрһәтелә, шуға күрә быны күптәр аңлап та бөтмәй. Беҙҙең иң мөһим бурыс – матди хәйерселектән бигерәк рухи хәйерселекте юҡ итеү.

❁

Әҙәм балаһы хатта ки бөтә донъя байлығына эйә булһа ла һәм матди именлек үренә менеп ултырһа ла, хәҡиҡи иман һәм рухи хикмәт юҡлығы тыуҙырған рухи бушлыҡты бер нәмә лә тултыра алмаясаҡ.

Мөхтәрәм Мәүләнә әйткән:

«Иманһыҙлыҡтан ғазап сигеүселәрҙе йәлләргә генә ҡала, сөнки был сирҙән һис бер башҡа дарыу юҡ».

❁

Ҡыҙғанысҡа ҡаршы, бөгөн бик күп ғафил кешеләр үҙҙәренең бәхетһеҙлеген бәхет, тип иҫәпләй, сөнки улар хәҡиҡи бәхетте белмәй. Йығылған йығылғанын аңламай, түбәнгә тәгәрәгән түбәнгә тәгәрәүен тоймай. Яҡтылыҡты белмәгән күҙҙәр нисек итеп ҡояшты белһен?

❁

Иман ҡояшынан мәхрүм йөрәктәр – рухи харабалар. Иман ҡояшы менән нурланған йөрәктәр – яҙғы мәңгелек ләззәт төйәге.

Тирә-йүндә дәғүәт ҡылыуға мохтаж кешеләр булғанда, хаҡ иман эйәһе үҙ иманы менән генә хушһына алмай.

❁

Иң бөйөк хеҙмәт – рухи йәһәттән батырға торғандарға, ҡотҡарыу түңәрәге ырғытып, иманға әйҙәп, йөрәктәрҙе яулау.

Камил заттар һәр ваҡыт тирә-йүнендә ҡотҡарыуға, мәңгелек сәғәҙәткә әйҙәүгә мохтаж булғандарҙы эҙләй.

❁

Әлеге заманда йөрәктәр ислам мәрхәмәтенә, ислам йылыһына мохтаж, сөнки үҙ мөмкинлектәрен, хатта имандарын юғалтҡандар күп. Шуға күрә бөгөн мәрхәмәт матди ярҙамға ғына ҡайтып ҡалмай. Йыуатыу һүҙҙәре, яҡшы нәсихәт, тейешенсә ҡылынған дәғүәт – мәрхәмәтлелектең иң яҡшы кәүҙәләнеше.

❁

Саҙаҡалар һәм йомартлыҡ матди нәмәләр менән бүлешеүгә генә ҡайтып ҡалмай. Аллаһ биргәндәрҙең һәммәһенән саҙаҡа биреү лазым. Исламға ярашлы йәшәп, уны таратыу – саҙаҡаның иң яҡшыһы.

❁

«Йөрәктәрҙе яулау» – кешене матди йәһәттән бәхетле итеү генә түгел. Хәҡиҡи «йөрәктәрҙе яулау» – уға Аллаһҡа яҡынайырға ярҙам итеү; иман, Ҡөрьән һәм Пәйғәмбәребеҙ (салләллаһу ғәләйһи үә сәлләм) менән таныштырыу һәм шул рәүешле уның мәңгелек донъяла бәхетле булыуына сәбәп итеү.

❁

Кешегә иң бөйөк ярҙам – уның мәңгелек ҡотолоуына булышыу. Быға табан юл – Ҡөрьән һәм Сөннәткә нигеҙләнгән Аллаһ хеҙмәтенә йүнәлтеү.

❁

Бөгөн Аллаһ юлындағы хеҙмәт уғата мөһим. Мәҫәлән, һеҙ шишмә буйында тороп, килеүселәргә һыу тәҡдим итәһегеҙ икән – был мәрхәмәтлелек. Әммә ләкин һеҙ сүллектә аслыҡтан, һыуһауҙан үлеп барған кешегә бер стакан һыу бирһәгеҙ, һеҙ уның ғүмерен һаҡлап алып ҡаласаҡһығыҙ. Был уны уттан йолоп ҡалыу менән бер.

Бөгөн иман эйәһенең бурысы – кешеләрҙе Әхирәттәге уттан ҡотҡарыу! Ул быны эшләргә тейеш һәм ул хатта быны эшләргә дусар! Сөнки иман эйәһе – альтруист, ул үҙенең ҡотолоуы башҡаларҙың ҡотолоуына хеҙмәт итеүгә бәйле булыуын яҡшы белә.

❁

Мәрхәмәт төйәгенә әйләнгән йөрәк, иман менән тулып, мәрхәмәт менән тибә башлай. Ул ихлас рәүештә Аллаһ юлында хеҙмәткә ашыға, ҡулындағын ҡорбан итергә ашыға. Иман гүзәллеге һәм ислам әхлағы күңелгә тула. Шундай халәткә еткәс, улар тирә-йүндәгеләргә йән өрә һәм уларҙың йөрәген яулай

башлай. Улар кемделер үҙ артынан эйәртеү тураһында уйламай, ә кешеләрҙе Йәһәннәм ялҡынан ҡотҡарырға ынтыла. Улар Утҡа тартылған нәфес, шайтан, золом һәм ялған әсирҙәренә әйләнгән йөрәктәрҙе азат итеүгә бөтә көсөн һала.

❁

Аятта әйтелә:

«…Бер йәнде ҡотҡарып ҡалған кеше бөтә кешеләрҙе үлемдән ҡотҡарған кеүек булыр…» (әл-Мәәидә (Табын), 32).

Әгәр бәндәнең фани донъялағы ғүмере шундай ҡиммәт икән, Аллаһ ҡашында уның рухи һәм мәңгелек тормошон ҡотҡарыу ни тиклем ҡиммәт икәнен кем белә?

❁

Хәҙистә әйтелә:

«…Әгәр Аллаһ һинең ярҙамың менән кемделер тура юлға баҫтыра икән, был һиңә ҡояш аҫтындағы бөтә нмәнән яҡшыраҡ» (Хаким, Мустадрак, III, 690).

❁

Ислам индивидуализмға саҡырмай, кеше йәмғиәттең бер өлөшө булыуын теләй.

Йәмғиәт менән бергә булыу – Аллаһ ризалығы өсөн берләшеү, изгелектә һәм тәҡүәлектә бер-береңә ярҙам итеү, яҡшы эштәргә - асҡыс һәм золомға йоҙаҡ булыу, Аллаһтың әмеренә буйһоноу.

Аятта әйтелә:

«Һеҙ халыҡ алдына сығарылған иң яҡшы өммәт булдығыҙ. Хупланған эшкә ҡушып, хупланмаған эштән тыйып, Аллаһҡа инандығыҙ…» (Әлү-Ғимран (Мәрйәмдең атаһы), 110).

❁

Һәр иман эйәһе барған юлына, йәғни Ҡөрьән һәм Сөннәткә таянып эш итеүенә иғтибарлы булырға тейеш. Ҡул аҫтындағыларға ҡарата ла уның мөһим бурысы бар. Мәҫәлән, ғаилә башлығының – үҙ ғаиләһе, уҡытыусының – уҡыусылары, эш биреүсенең – хеҙмәткәрҙәре, эшселәре, дәүләт башлығының үҙ граждандары алдындағы бурысы. Рухи халәттәре, һүҙҙәре һәм әхлағы менән улар үрнәк булырға тейеш.

❁

Һәр заманда башҡаларға өлгө, тәкүәлектә алда булған, башҡаларҙы артынан эйәртерҙәй мосолмандарға ихтыяж булған. Бөгөн бындай ихтыяж бик ҙур. Әммә беҙ үрнәк булырҙай ундай кешеләр күктән төшөр, тип көтөп ултыра алмайбыҙ. Бының өсөн тәүге нәүбәттә үҙебеҙ өлгөлө мосолман булырға тырышырға тейешбеҙ. Ә аҙаҡ бурысыбыҙ һанап, фиҙакәрлек менән шундай мосолмандарҙы тәрбиәләү эшенә тотоноу лазым.

❁

Бөгөн бар донъяны башлыса Көнбайыштан килгән яһилиәт ялмап алды. Әммә ләкин мосолман төшөнкөлөккә, өмөтһөҙлөккә бирелә алмай! Беҙгә, был йәһәттән Аллаһ Илсеһенән (салләллаһу ғәләйһи үә сәлләм) һәм уның сәхәбәләренән үрнәк эшкә ҡушыу зарур...

❁

Аллаһтың һәм Уның Илсеһенең (салләллаһу ғәләйһи үә сәлләм) беҙгә ҡарата хаҡтары бар. Раббыбыҙ Аллаһ иман эйәләрен “ҡәрҙәштәр”, тип иғлан итте һәм бер-береһенә ҡарата бурыстар йөкмәтте. Шуға күрә иман ҡәрҙәштәребеҙҙең беҙгә ҡарата хоҡуҡтары бар.

Икенсе яҡтан, етәкселек итеүҙе көткән кешеләр бар. Кеше булараҡ, улар ҙа беҙҙең иптәштәребеҙ. Һәм беҙҙең мөһим бурысыбыҙ – исламдың асыҡ йөҙөн күрһәтеү.

❁

Донъя яһилиәт ҡараңғылығына батҡан әлеге мәлдә, Аллаһ Илсеһенең (салләллаһу ғәләйһи үә сәлләм) тең бер үҙе кешелектә мәңгелек ҡотолоуға алып барыу өсөн ни тиклем ҙур көс түгеүен, дәғүәт алып барыуын онотмайыҡ.

Уйлап ҡарайыҡ, беҙ, өммәт булараҡ, ошо Сөннәтте тотабыҙмы, ни дәрәжәлә «Аллаһтың ерҙәге шаһиттары» булыуға лайыҡлыбыҙ.

Сәхәбәләр, бүләк итеп бирелгән тура юлға баҫыу нигмәтенә рәхмәт йөҙөнән һәм дәғүәт ҡылыу бурысын үтәп, шул замандың ауыр шарттарында донъяның дүрт тарафына юл тота. Улар бөтә уңайлы тормоштарын ҡалдырып китә, ғүмерҙәрен, милектәрен фиҙа ҡыла.

Был факт беҙҙе уйландырырға тейеш. Өҫтөбөҙгә йөкмәтелгән дәғүәт ҡылыу һәм нәсихәт биреү бурысын беҙ ни кимәлдә үтәйбеҙ?

❁

Әйтергә кәрәк булғанда өнһөҙ ҡалыу ҙа, өнһөҙ ҡалырға кәрәк булғанда әйтеү ҙә – хата. Дөрөҫлөк өнһөҙ булғанда, ялған пәйҙә була. Шуға күрә дөрөҫлөк

һәм хәҡиҡәт зыян күреүҙәй хәлдә өндәшмәй ҡалыу, ялғанға кәртә ҡуймау ауыр йөк булыр ине.

Мөхтәрәм Әбү Ғәли әд-Даккак әйткән:

«Хәҡиҡәтте әйтергә тейеш булып өндәшмәй ҡалыусы – телһеҙ шайтанға оҡшаш».

❁

Йөрәген хәҡиҡәткә бағлаусылар хәҡиҡәт көсөнән бәрәкәт ала. Дөрөҫлөккә таянып, улар юғарыға күтәрелә һәм, залимдарға ҡаршы тороп, һәр даим хәҡиҡәт яғында ҡала.

Шуға күрә мөхтәрәм Хәсән Басри аяуһыҙлығы менән дан алған Залим ҡушаматлы Хаджадж алдында өнһөҙ ҡалмай. Үҙе өсөн ни тиклем генә ауыр булмаһын, ул хәҡиҡәткә һәм ғәҙеллеккә өндәй.

Мөхтәрәм Әғзәм Имам, ғәҙелһеҙлек ҡылған Джәфәр Мансур хәлиф ҡулында ғәҙелһеҙлек ҡылыусы ҡорал булмаҫ өсөн, уны төрмәгә ябып, сыбыртҡы менән туҡмауға хөкөм итһәләр ҙә, Бағдадтың баш судьяһы булыуҙан баш тарта.

Хәҡиҡәт һүҙе, иман һүҙе, дөрөҫлөктө әйтеү һәм таратыу – камил иман эйәләре принцибы.

Дөрөҫлөктө әйтеүселәр һәм уға хеҙмәт итеүселәр бар икән, ғәҙелһеҙлеккә юлдар ябыҡ буласаҡ.

❁

Шуныһы ла мәғлүм: дөрөҫлөк һәм хәҡиҡәт яғында булыусылар мотлаҡ ҡаршылыҡҡа, кире реакцияға тап була. Быға сабырлығыңды йыйып түҙергә кәрәк, сөнки киҫәтеүселәргә һәр ваҡыт ғәйеп таҡҡандар. Мәғрифәтуллаһҡа эйә мөьминдәр ундай ғәйепләүҙәрҙе нәфестәрен паклау һәм рухи кимәлдәрен күтәреү сараһы итеп ҡабул итә. Улар ғәйепләүҙәргә иғтибар итмәй. Аллаһтың әмерҙәрен үтәү өсөн бөтә көстәрен һала.

❁

Залимдарға ҡарата өнһөҙ булыу – уларҙы илаһилаштырыу тигән һүҙ. Фирғәүен тирәһендәгеләр, уны «Мин һеҙҙең илаһығыҙ», тип иғлан итергә ҡоторткан Һаман һәм уның кеүектәр кеше ҡиәфәтендәге шайтандар була. Фирғәүендең ғәҙелһеҙлеген бүлешкән был заттар үҙҙәренең «илаһы» менән бергә мәңгелек ғазапҡа дусар була.

Фани донъя мәнфәғәттәре өсөн залимдар алдында ҡойроҡ болғау – мәңгелек кәмһетелеү һәм бәхетһеҙлек сәбәбе. Золомдо яҡлау – был да золом.

Аллаһ Илсеһе (салләллаһу ғәләйһи үә сәлләм) әйткән:

«Ике дин ҡәрҙәшең араһындағы ҡаршылыҡты күрһәң, залимға ла, золомға дусар булыусыға ла ярҙам ит».

Сәхәбәләр һорау биргән:

«Йәә Рәсүлүллаһ! Беҙ аңлайбыҙ, золомға дусар булғанына[ярҙам итергә кәрәк]. Әммә залимға беҙ нисек ярҙам итербеҙ?»

Пәйғәмбәребеҙ (салләллаһу ғәләйһи үә сәлләм) әйткән:

«Уны туҡтатыу юлы менән» (Бохари, Икрах, 7; Мөслим, Бирр, 62).

❁

Иманлы әҙәмдең иң мөһим бурыстарының береһе – яҡшылыҡҡа саҡырыу һәм яманлыҡтан тыйыу. Йәмғиәттәге гонаһтарға һәм әхлаҡһыҙлыҡҡа ҡарата битараф булыу әхлаҡи боҙоҡлоҡтоң сәбәбе булып тора.

Мөьминдәр әсәһе Зәйнәб бинт Джахш бер заман Пәйғәмбәребеҙгә (салләллаһу ғәләйһи үә сәлләм) ошондай һорау бирә:

«Йәә Рәсүлүллаһ! Арабыҙҙа хатта тәҡүәләр булһа ла, һәләкәткә осрарбыҙмы икән?»

Аллаһ Илсеһе (салләллаһу ғәләйһи үә сәлләм) уға әйткән:

«Эйе, гонаһтар һәм яҙыҡтар күбәйһә!» (Бохари, Әнбийә, 7).

❁

Аллаһ Илсеһе (салләллаһу ғәләйһи үә сәлләм) әйткән:

«Аллаһ йәмғиәттә ҡылынған гонаһтар өсөн ғәйепһеҙҙәргә яза бирмәй. Гонаһ ҡылыныуын күреп, уны туҡтатырға мөмкинлеге булып та, быны эшләмәһәләр генә инде» (Әхмәд, V, 192).

❁

Аллаһ Илсеһенең (салләллаһу ғәләйһи үә сәлләм) киләһе киҫәтеүе ифрат та мөһим:

«Миңә ғүмер биргән Аллаһ менән ант итеп әйтәм, һеҙ йә яҡшылыҡҡа өндәйһегеҙ, яманлыҡтан тыяһығыҙ, йә һеҙгә Аллаһ Үҙенән яза ебәрәсәк. Һеҙ ул саҡта доға ҡылырһығыҙ, әммә ул ишетелмәҫ» (Тирмизи, Фитан, 9).

❁

Пәйғәмбәребеҙҙең (салләллаһу ғәләйһи үә сәлләм) киләһе кәлимәһендә ни тиклем оло нәсихәт:

«Һеҙҙән берәйегеҙ насар бер эш күрһә, уны ҡулы менән төҙәтһен. Әгәр ҡулы менән төҙәтергә көсө етмәһә - теле менән, уға ла көсө етмәгән кеше кеше - йөрәге менән, һәм был – имандың иң зәғифелер» (Мөслим, Иман, 78). Шулай итеп, Аллаһ Илсеһе (салләллаһу ғәләйһи үә сәлләм) беҙҙе киҫәтә: яманлыҡтан аралап, кешеләрҙе яҡшылыҡҡа әйҙәү – Аллаһҡа инаныуҙың нигеҙе.

❁

Аллаһ Илсеһе (салләллаһу ғәләйһи үә сәлләм) яҡшылыҡҡа әйҙәү һәм яманлыҡтан тыйыу бурысыбыҙҙы шулай аңлата:

«Аллаһ билдәләгән сиктәрҙе һаҡлаусыларҙы һәм был сиктән сығыусыларҙы карапта (урын алыу өсөн) йәрәбә һалған кешеләргә оҡшатырға мөмкин, һөҙөмтәлә уларҙың берәүҙәре (караптың) өҫкө өлөшөндә урынлаша, ә ҡалғандары − түбәнге. Аҫтағыларға һыуға өҫтәге палубала урынлашҡандар аша йөрөргә тура килә, һәм (ахыр килеп) улар әйтә: «Һыу алыр өсөн өҫтәгеләрҙе борсоп йөрөмәҫ өсөн, (карап) төбөн тишәйекме икән әллә?» Һәм әгәр [караптың өҫкө өлөшөндәге пассажирҙар] уларҙы үҙ яйына ҡалдырһа, һәммәһе һәләк буласаҡ, әгәр ҡулдарынан тотоп ҡалһалар, үҙҙәре лә ҡотоласаҡ, (башҡаларҙың) барыһын да ҡотҡарасаҡ» (Бохари, Шәһәдә, 30; Тирмизи, Фитан, 12).

❁

– Мөьмин хәҡиҡәт юлындағы ныҡлығын мәңгелек ҡотолоу өсөн етерлек, тип иҫәпләмәй.

– Ул үҙ заманындағы хәлдәр һәм тирә-йүнәдәгеләр өсөн яуаплылыҡ тоя.

– Ул юлында осраған ғәҙелһеҙлекте, айырыуса золомдо ҡулы һәм теле менән туҡтатырға тырыша.

– Ул бер нәмәне онотмай: иман йөкмәткән бурысыбыҙ – мөмкин булғанса дәғүәт ҡылыу.

❁

Пәйғәмбәребеҙҙең (салләллаһу ғәләйһи үә сәлләм) әйткән:

«(Бәни Исраил) золом ҡылыусы кемсәне тәүге тапҡыр күргәс, киҫәтер булған: «Кара уны, дуҫҡай! Аллаһтан ҡурҡ һәм был ғәмәләңде ташла! Сөнки был һиңә харам!»

Икенсе көндө, был кемсәне шул уҡ халәттә күреп, бергә ашап-эсеп ултырыу мөмкин булһын өсөн, улар инде нәсихәт бирмәгән. Шунда инде Аллаһ уларҙың йөрәген (гонаһкәрҙең дә һәм уға нәсихәт бирергә теләмәүселәрҙекен дә) бер-береһенә оҡшаш иткән» (Әбү Дауыд, Малахим, 17/4336).

Киң таралған гонаһтар һәм ғәмһеҙлекте лә индереп, заманыбыҙға хас бөйөк бәләләрҙең береһе – яҡшылыҡҡа саҡырыуҙан һәм яманлыҡты тыйыуҙан баш тартыу, йәғни исламға саҡырыуҙа, золомдоң эҙемтәләре тураһында аңлатыуҙа тырышлыҡ күрһәтмәү.

Шуны ла оноторға ярамай: Дауыт пәйғәмбәр (ғәләйһис-сәләм) осоронда бер төркөм кеше, иманлы булһалар ҙа, дәғүәт ҡылыу, иманға саҡырыу бурысын үтәмәгәндәре өсөн, кәферҙәр менән бергә һәләк ителә (ҡар. Әл-Әғрәф (Кәртәләр), 163-166).

❁

Мөьмин иман ҡәрҙәше янында ла, янында булмағанда ла, уға оҡшамаған хәбәр һөйләмәҫкә тейеш. Әммә яҡшылыҡҡа өндәгәндә һәм яманлыҡтан тыйғанда, өнһөҙ ҡалыу ярамай.

Икенсе төрлө әйтһәк, иман ҡәрҙәшеңә нәсихәт бирергә теләһәң, быны итәғәтле итеп, икәүҙән-икәү ҡалғанда эшләү зарур. Был хәлдә әйткәндәреңдең уға оҡшау-оҡшамауы мөһим түгел. Бындай киҫәтеүҙәр күңелгә ятышлы булмаһа ла, асылда ул кеше өсөн бөйөк ниғмәт.

❁

Мөхтәрәм Шафиғи Имам әйткән:

«Әгәр иман ҡәрҙәшеңә икәү генә булғанда, ихлас итеп һәм яҡшылыҡ менән нәсихәт бирһәң, һин, ысынлап та, уға нәсихәт бирәсәкһең. Әгәр, наҡһыҙлыҡ күрһәтеп, кеше алдында теләгәнеңде әйтһәң, һин уны кәмһетәсәкһең йәки оялтасаҡһың».

❁

Мөхтәрәм Суфьян Саури әйткән:

«Әгәр кеше гонаһ эшләһә, ә иман ҡәрҙәше булған икенсе кеше, уны аяп киҫәтмәһә, белегеҙ: ул (икенсе кеше) уны (тәүге кешене) Аллаһ ризалығы өсөн яратмаған. Әгәр ул уны Аллаһ ризалығы өсөн яратһа, Раббыбыҙға итәғәтһеҙлек күрһәтеүсегә ул аңларлыҡ итеп нәсихәт бирер ине».

❁

Оноторға ярамай, Хисап көнөндә бик күп кешеләр беҙгә йәбешеп, былай тип белдереүҙәре ихтимал: «Һин үҙеңә тиклем булғандарҙың ихлас тырышлығы менән ислам менән шәрәфләнгәнһең. Һин исламдың нимә икәнен һәм имандың нимә икәнен белгәнһең. Ниңә һин миңә аңлатманың? Мин Уттан ҡотолһон өсөн, ни өсөн һин мине ярҙамыңдан мәхрүм иттең?».

Дәғүәттән баш тартып, былай тип белдереү дөрөҫ түгел: «Минең халәтем, минең эштәрем, минең ғилемем, минең рухи хикмәтем быға етерлек түгел...» Иман эйәһен былар дәғүәт ҡылыу яуаплылығынан азат итмәй. «Хаж сәфәренә юлланғас, мин инде гонаһ ҡыла алмаясаҡмын», - тип әйтеү менән бер был, фарыз хаж ҡылыуҙы килеү-килмәүе билдәле булмаған ҡартлыҡҡа ҡалдырыу дөрөҫ түгел. Гонаһтарҙан ҡасыу иһә, хаж сәфәренә барһа-бармаһа ла, һәр мөьминдең бурысы булып тора. Шулай уҡ дәғүәт ҡылыуға лайыҡлы булған ислам шәхесе булырға ынтылыу - иман юлына баҫҡан һәр кешенең төп бурысы.

❁

Исламды башҡаларға еткерә алған кеше тәүге нәүбәттә ғәҙел һәм ышаныслы булырға, ислам шәхесен һәм характерын кешеләргә танытырға, йәғни юғары әхлаҡ үрнәге булырға тейеш.

Хатта ки дошмандары ла Пәйғәмбәребеҙҙең (саллəллаһу ғəләйһи үə сəллəм) «əл-Əмин» («Ышаныслы») һәм «əс-Садиҡ» («Тоғролоҡло») кеүек сифаттарын инҡар итә алмаған. Бындай сифаттарға эйә булмаған кеше хəҡиҡәт əһеле була алмай.

❁

Аллаһ Илсеһенең (саллəллаһу ғəләйһи үə сəллəм) рухи тәрбиәһен алған сәхәбәләр һүҙҙә генә түгел, ысын-ысындан уның иптәштәренә әүерелә. Уларҙың һүҙен рухи халәттәре һәм әхлағы раҫлап тора. Ислам ҡанундарына һәм әхлағына эйәреп, улар һүҙҙәре менән генә түгел, рухи халәттәре менән дәғүәт ҡыла, йәғни әйткәндәрен ғәмәл менән раҫлай һәм үҙҙәре ҡылған ғәмәлде һүҙ менән аңлатып бирә. Улар үҙҙәренең бөтә тормошо менән беҙгә «яҡшылыҡҡа саҡырыу һәм яманлыҡтан тыйыу» хәҡиҡи хеҙмәтен нисек алып барырға кәрәклеген күрһәтә...

❁

Һүҙҙәребеҙ кешеләр йөрәгенә ыңғай тәьҫир итһен өсөн, улар әхлағыбыҙ һәм халәтебеҙ менән аһәңле булырға тейеш.

Йөрәктән сыҡҡан һүҙҙәр генә йөрәккә барып етә. Ихласһыҙ, битараф күңел менән әйтелгәндәр, йөрәккә үтеп инмәйенсә, бер ҡолаҡтан инә һәм икенсе ҡолаҡтан сығып та китә.

❁

Ҡөрьәндә Раббыбыҙ күңел халәте, ғәмәлдәр менән раҫланмаған һүҙҙәр һөйләүҙән киҫәтә:

«Эй һеҙ, иман килтергән кешеләр! Нишләп һеҙ үҙегеҙ эшләмәгән нәмәне һөйләйһегеҙ? Эшләмәгән нәмәгеҙҙе һөйләгән өсөн, Аллаһтың нәфрәте һеҙгә бик ҙур» (әс-Сафф (Сафтар), 2-3).

❁

Мөхтәрәм Әбү Бәкер (радыйаллаһу ғәнһү) әйткән:

«Аллаһ ҡолоноң ғәмәл менән раҫланмаған һүҙҙәренән риза түгел».

❁

Мөхтәрәм Мәүләнә әйткән:

«Ғәмәлдә күренмәгән хикмәтле һүҙ үтескә алып торолған байрам кейеме кеүек...»

❁

Үҙе йоҡола булған башҡаларҙы уята алмаҫ.

Шуға күрә, тейешле һөҙөмтә бирһен өсөн, илаһи хәҡиҡәттәр менән үҙебеҙҙең аңыбыҙҙы һәм йөрәгебеҙҙе уятыу, үҙебеҙҙең рухи халәтебеҙҙе һәм ҡылыҡтарыбыҙҙы тәртипкә һалыу зарур.

❁

Ҡунаҡты буш стакан менән һыйлап булмаған кеүек, бер нәмә һөйләп, икенсене эшләгән, һүҙҙәре һәм ғәмәлдәре ярашмаған, күңел ғаләме мәрхәмәт менән тулы булмаған кешеләрҙең киҫәтеүҙәре һәм нәсихәттәре башҡаларға тәьҫир итә алмай, сөнки һүҙ бәрәкәте кешенең был хәҡиҡәтте ниндәй ихласлыҡ һәм тәҡүәлек менән үтәүенә пропорциональ.

❁

Мәрхәмәтлелек, шәфҡәтлелек, физакәрлек, киң күңеллелек, намыҫлылыҡ, изгелек һәм әҙәплелек кеүек сифаттар - ислам рухиәтенә хас игелектәрҙең иң ҡиммәте. Әгәр формаһы һәм тышҡы яғы вазаға оҡшаш булһа, маҡтауға лайыҡлы был гүзәл сифаттар ундағы сәскәләргә оҡшаш. Шул гүзәллектәрҙән мәхрүм дини ғәмәлдәрҙе буш ваза менән сағыштырып булыр ине. Ә ошондай гүзәл сифаттары булмағандарҙың дәғүәте һый рәүешендә табынға ҡуйылған буш туҫтаҡ йәки бүләк итеп бирелгән буш конверт ул.

❁

Һис ни бирмәйенсә, нимәлер көтөү файҙаһыҙ. Орлоҡ сәселмәгән, һыу нибелмәгән, хәстәрлек күрелмәгән ерҙән уңыш көтөп булмаған кеүек, үҙ йөрәгеңде бирмәй тороп, сит йөрәкте яулап алып булмай. Һөймәгән һөйөлә алмай. Шуға күрә уларҙы бар ҡылған Раббыға хөрмәт йөҙөнән беҙ йөрәгебеҙҙе бөтә

кешеләргә һәм хатта ки бөтә яратылмыштарға асырға һәм, исламдың күркәм йөҙөн күрһәтеп, мәрхәмәтебеҙҙе, шәфҡәтебеҙҙе, мөхәббәтебеҙҙе күрһәтергә, йөрәктәрҙе яуларға тейешбеҙ.

❁

Кешеләрҙең иң бәхетлеләре – Ҡөрьән һәм Сөннәт мөхите менән тулған йөрәген рухи төйәк итеп, уны бөтә барлыҡҡа асыусылар.

Кешенең төп ҡиммәте һәм бәҫе – йөрәгеңдә Ҡөрьән һәм Сөннәт бәрәкәте һәм рухиәте менән йәнләндереү һәм шул халәттә дәғүәт ҡылыу. Йөрәгеңдә рухи сәнскеләр бар икән, ислам ниғмәтен кешеләргә тапшырырға маташыу – алағайымға киткән тырышлыҡ.

❁

Мөхтәрәм Ғүмәр (радыйаллаһу ғәнһү) әйткән:

«Кешеләрҙе төҙәтеү өсөн, тәүҙә үҙебеҙҙе төҙәтеү лазым».

❁

Мөмкинлеге булһа ла, тейешле ғилем алмаған, рухи хикмәткә эйә булмаған, үҙенең әхлаҡы һәм рухи үҫеше тураһында хәстәрлек күрмәгән, үҙ эшен ентекле белмәгән кеше ысын мәғәнәһендә ниндәйҙер лайыҡлы эш эшләй алмай. Муса Әфәнде (рәхимәһуллаһ) әйткән:

«Әгәр һеҙ йөҙ ярты кешене йыйһағыҙ, бер (тулы) кешене тапмаҫһығыҙ».

❁

Дәғүәт – мосолмандың ғәҙәттән тыш мөһим бурысы. Әммә был бурыҫҡа илке-һалҡы ҡарау, етди итеп, тейешле кимәлдә атҡармау төҙәтеп булмаҫлыҡ эҙемтәләргә алып килеүе ихтимал. Ҡаш төҙәтәм тип, күҙ сығарыу менән бер инде был.

❁

Дини хәҡиҡәттәрҙе генә тапшырыу аҙ. Бигерәк тә дини фәндәр менән шөғөлләнеүселәр үҙҙәренең тәртибе, әҙәбе, ғибәҙәттәре, әхлағы һәм йәшәү рәүеше менән башҡаларға үрнәк булырға тейеш. Яман үрнәк – башҡаларҙы дөрөҫлөккә, хәҡиҡәткә саҡырыу, әммә рухи халәтең һәм йәшәү рәүешең менән исламда булмау, фани донъя менән мәшғүл булыу. Бындай ғалимдар файҙа урынына зыян ғына һала.

Ғилемдән мәхрүм булған, өлгөрөп етмәгән дин кешеләре лә шундай. Әгәр кешенең ғилеме юҡ икән, ғибәҙәттәрҙә лә, кешеләр менән мөнәсәбәттәрҙә лә һәм әхлаҡта ла хаталар була. Был йәһәттән наҙан, әммә диндар кешеләр мосо-

лман өммәте өсөн үрнәк була алмай. Улар, яңылышлыҡтарын үҙҙәре лә аңламайынса, кешеләрҙе ялған юлдан алып китеп, зыян һалыуҙары ла ихтимал.

❁

Мосолман шәхесендә ислам әҙәбенә тап килмәгән ҡылыҡтарға урын юҡ. Хаҡ иман эйәһе - ҡулынан да, теленән дә берәүгә лә зыян булмаған «мәрхәмәт кешеһе». Ул онотмаҫҡа тейеш: хаталы ҡылыҡтары һәм ғәмәлдәре уның үҙенә генә зыян һалмаясаҡ, ә кешеләр алдында исламдың бәҫен төшөрәсәк һәм киләсәк тормошонда ауыр йөк буласаҡ.

❁

«Йөрәкте йәнләндереү» – оло бер изгелек булһа, «йөрәкте телгеләү» – оло бәхетһеҙлек, быныҡ өсөн Әхирәттә яуап тоторға тура киләсәк. Шул уҡ ваҡытта йөрәкте телгеләүҙе кешене үпкәләтеү, кәйефен төшөрөү, тип кенә аңларға ярамай.

Йөрәк – иман төйәге. Кешене имандан, исламдан, Ҡөрьәндән, Сөннәттән һәм, тимәк, мәңгелек сәғәҙәттән айырған рухи халәттәр һәм ғәмәлдәр йөрәкте харабаға әйләндерә. Үҙҙәренең тәртибе, ғәмәлдәре менән кешеләрҙе исламдан биҙҙереүселәр – йөрәктәрҙе һәләк итеүсе бәхетһеҙҙәр!..

❁

Һәр мөьмин үҙе йәшәгән йәмғиәтте ислам ҡиммәттәре менән таныштырырға ынтылырға тейеш. Шуны оноторға ярамай: ул ҡылған изге ғәмәлдәр – үҙе һөйгән ислам ҡиммәттәрен кешеләргә еткереү сараһы. Икенсе яҡтан, шуныһы ла бар: уның хаталарын кешеләр исламға бәйләүҙәре ихтимал, ә был иһә кемделер хаҡ диндән биҙҙереүе мөмкин.

❁

Изгелектә, мәрхәмәтлелектә, эшсәнлектә һәм намыҫлылыҡта яҡшы үрнәк булыу – мәңгелек сәғәҙәткә ирешеү сараһы. Киреһенсә, яманлыҡта, ялғанлыҡта, гонаһтарҙа һәм ғафиллыҡта үрнәк булыу – Әхирәт банкроты булыу тигән һүҙ.

❁

Кешеләр шәхескә һәм характерға һоҡлана. Сәғәҙәт быуатында мосолман булыусыларҙың күбеһе уҡый-яҙа белмәгән. Ә уҡый-яҙа белгәндәр шуны төшөнгән: ислам – хаҡ дин, һәм тура юлға башлыса Ҡөрьән уҡып түгел, ә Аллаһ Илсеһе (салләллаһу ғәләйһи үә сәлләм) һәм уның сәхәбәләре йөҙөндә Ҡөрьәндең әхлаҡи ҡиммәттәре гүзәллеген күреп баҫҡан. Тимәк, башҡа ке-

шеләр менән мөнәсәбәттәребеҙҙә ислам шәхесе һәм характерының, әхлағының сағылыш табыуы ислам дәғүәтенең иң нәтижәле сараһы.

❁

Кешеләргә абстракт төшөнсәләрҙе аңлауы ҡыйын. Әммә шул уҡ хәҡиҡәттәрҙе улар тере үрнәктәрҙә күрһә, һәммәһен дә бик еңел төшөнә. Шуға күрә илаһи хәҡиҡәттәрҙе ғәмәлдәрең аша еткереү һүҙ менән дәғүәт ҡылыуға ҡарағанда күпкә нәтижәлерәк, отошлораҡ.

❁

Мөхтәрәм Мәүләнә әйткән:

«Үҙенең рухи халәте менән нәсихәт биреүсе һүҙ менән нәсихәт биреүсегә ҡарағанда яҡшыраҡ».

❁

Шуны онотмайыҡ: беҙ ергә хужа булыр өсөн түгел, ә шаһит булыр өсөн килдек. Ғибәҙәттәребеҙ, хеҙмәтебеҙ һәм күркәм холҡобоҙ менән Аллаһтың шаһиттары булыуыбыҙҙы иҫбатлар өсөн, беҙ «ер донъяһы» тип аталған каруан-һарайҙабыҙ.

❁

Бер заман мөхтәрәм Ғүмәр (радыйаллаһу ғәнһү) әйткән:

«Исламға өнһөҙ рәүештә дәғүәт ҡылыусылар булығыҙ!». Уға һорау биргәндәр:

«Йәә хәлиф! Нисек итеп өнһөҙ рәүештә дәғүәт ҡылайыҡ?»

Ғүмәр (радыйаллаһу ғәнһү) әйткән:

«Рухи халәтегеҙ һәм әхлағығыҙ менән…»

Беҙҙең ата-бабалар, мөхтәрәм Ғүмәрҙең (радыйаллаһу ғәнһү) «рухи халәтегеҙ һәм әхлағығыҙ менән…» кәңәшен тотоп, ҙур территорияла исламды таратҡан.

Солтан Мурат I - Косовоны, ә Мәхмәт II Боснияны яулап алғас, улар был ерҙәргә ислам әхлағына, рухи паклыҡҡа эйә булған Анатолия кешеләрен күсергән. 99% албанлы, босниялыларҙың һәммәһе, уларҙың юғары әхлаҡи тормошона хайран булып, ислам ҡабул иткән.

❁

Әгәр диндең тышҡы яғы аҡыл менән бәйле булһа, эзотерик һәм эске яғы, йәғни асылы, йөрәк менән танып беленә. Һәм бары тик йөрәктәр генә быға

башҡаларҙы өйрәтергә һәләтле. Хәҡиҡәткә һәм яҡшылыҡҡа саҡырыу һәм яманлыҡтан тыйыу мәрхәмәтлелек һәм мөхәббәт аша айырыуса уңышлы атҡарыла. Полиция ярҙамы менән дә буйһондороп булмаған, әммә мөхәббәт һәм мәрхәмәткә буйһонған күпме кеше бар!

Шул сәбәпле үҙебеҙҙә мәрхәмәтлелек һәм шуның сағылышы булған саҙаҡалар биреүгә әүәҫлек, етемдәргә, яңғыҙҙарға ярҙам кеүек гүзәл сифаттарҙы үҫтереү лазым.

❁

Йомшартыр өсөн эшкәртелмәгән тимерҙе тәүҙә утта йылытҡан һәм аҙаҡ, тейешле рәүешкә килтерер өсөн, сүкеш менән һуҡҡан кеүек, йөрәктәр ҙә мөхәббәт уты менән йылынғас ҡына дәғүәтте тоя башлай. Мөхәббәт тулы йөрәктән сыҡмаған дәғүәт күңелгә ыңғай тәьҫир итмәй.

❁

Яҡшылыҡ һәм изгелек – исламға саҡырыуҙың иң күркәм формаһы, сөнки кеше мәрхәмәтлегә һыйына. Ҡалаларҙы һуғышсылар яулай, ә йөрәктәр яҡшылыҡ һәм изгелек менән яулана.

Изгелек һәм мәрхәмәт менән мөрәжәғәт итеү хатта ки дошман булған кешене лә йомшарта. Яҡшылыҡ һәм изгелек һиңә дуҫ та, дошман да булмаған кешене дуҫ булыуға этәрә. Ә дуҫҡа ҡарата яҡшылыҡ һәм изгелек дуҫлыҡты тағы ла нығыта.

❁

Дәғүәт ҡылыусы, нәсихәт биреүсе кешене оҫта ҡуллы кеше менән сағыштырырға мөмкин. Уға кешеләр ватыҡ әйберҙәрен алып килә. Әгәр ватыҡ нәмәләр булмаһа, ул үҙ эшен эшләй алмаҫ ине, шуға күрә улар оҫта өсөн ниғмәт.

Шулай уҡ дәғүәт һәм нәсихәт менән шөғөлләнеүсе мөьминдәр, гонаһтарҙан, хата-кәмселектәрҙән арына алмаған кешеләргә асыуланғансы, уларҙы үҙ йөрәге һарайында мөхәббәт уты менән йәнләндереү мөмкин булған рухи табыш тип ҡарарға тейеш.

Бөтә кешелектә үҙенә саҡырған мөхтәрәм Мәүләнәнең «Кил, кил, кем генә булһаң да, кил» дәғүәте – имандың иң юғары кәүҙәләнеше.

Был дәғүәт:

– мәрхәмәт һәм шәфҡәтлелек менән һауыҡтырыу һәм исламдың бөйөк хәҡиҡәттәре менән таныштырыу өсөн, тура юлды эҙләгәндәргә төбәлгән йөрәк дәғүәте.

– Үҙенең бер ҡолон да ситкә типмәгән, киреһенсә, һәр ҡолона сикһеҙ мәрхәмәт менән баҡҡан Раббының бәрәкәте кәүҙәләнеше.

Шулай итеп, иман эйәһенең йөрәге барса ғазап сиккәндәр рухи реабилитация үтә алырлыҡ мәрхәмәт төйәгенә әйләнергә тейеш.

❁

Аллаһты танып белгәндәрҙең, мәғрифәтуллаһҡа эйә булғандарҙың рухи халәте, нәсихәттәре, физакәрлеге кешелектең тура юлға баҫыуына һәм рухи үҫешенә этәргес булып тора. Улар кешеләрҙең аҡылына һәм логикаһына түгел, ә йөрәгенә һәм намыҫына мөрәжәғәт итә. Һис шикһеҙ, рухиәтте нәҡлау, нәсихәт биреү, исламға саҡырыу һәм исламға хас булған гүзәл рухи ҡиммәттәрҙе киләһе быуындарға тапшырыу эшендә тәсауыф юлынан барыусыларҙың тырышлығы әйтеп бөтөргөһөҙ.

Мөхәммәд Хәмидулла, үткән быуаттағы иң күренекле ислам ғалимдарының береһе, был хәлде шулай аңлата:

«Минең тәрбиәм рационализмға нигеҙләнгәйне. Хоҡуҡ фәндәре менән шөғөлләнеүем ышаныслы итеп тасуирланмаған һәм иҫбатланмаған бөтә нәмәнән мине баш тартырға мәжбүр итте. Әлбиттә, мин намаҙ һәм ураҙа кеүек дини бурыстарымды үтәй инем, әммә был тәсауыфҡа эйәреү сәбәпле түгел, динебеҙ талаптары буйынса эшләнә ине. Мин үҙемә шулай тинем: «Аллаһ – минең Раббым, минең Хужам. Ул миңә бойорҙо, һәм мин быны эшләргә тейеш. Ғөмүмән, хоҡуҡтар һәм бурыстар үҙ-ара бәйләнгән. Мин уларҙы файҙаланһын өсөн, Аллаһ миңә уларҙы әмер ҡылды, шуға күрә мин Уға рәхмәтеле булырға тейеш».

Көнбайыш йәмғиәтендә, Парижда йәшәй башлағас, мин бер нәмәгә хайран ҡалдым: христиандарҙы исламды ҡабул итергә фиҡыһ йәки ҡәләм менән шөғөлләнгән мосолман белгестәренең ҡараштары түгел, ә Ибн Ғәраби һәм Мәүләнә кеүек тәсауыф юлынан барыусылар быға этәрә. Быға шәхсән үҙем шаһит булдым. Ислам менән бәйле берәй мәсьәлә буйынса яуап биреүемде hораһалар, рациональ дәлилдәргә нигеҙләнгән минең яуабым hорау биреүселәрҙе ҡәнәғәтләндермәне. Әммә тәсауыфҡа ярашлы аңлатмалар һөҙөмтәле була ине. Яйлап был мәсьәләләр буйынса минең йоғонто юҡҡа сыҡты. Ә хәҙер мин шуға ышанам: Хулагуның бөлдөргөс ябырылыуынан һуң Ғазан-хан заманы етһә, хәҙер исламдың таралыуына, кәм тигәндә Европала һәм Африкала, ҡылыс йәки аҡыл түгел, ә йөрәк, йәғни тәсауыф ярҙам итәсәк».

❁

Мөхтәрәм Мәүләнәнең йортондағы сөхбәтенә иҫерек кеше килә. Дәрүиштәр көс менән уны сығарып ебәрергә уйлай. Мәүләнә уны хәкиҡәт

эҙләп килеүсе кеше тип ҡабул итә һәм уны ҡыуып сығарырға ниәтләүселәргә әйтә:

«Ул шарап эскән, ә һеҙ иҫергәнһегеҙ!».

❁

Тәсауыф алымы буйынса, гонаһкәрҙәргә асыуланырға түгел, ә уларҙы йәлләргә кәрәк. Тәүге нәүбәттә иман бәрәкәтенән мәхрүм ҡалып, нәфес әсирлегендә булғандарға һалҡын, ағыулы йылан теле менән түгел, мәрхәмәт теле менән мөрәжәғәт итеү, йөрәктәрен яулау лазым.

❁

Ислам ҡәрҙәшлеге биологик ҡәрҙәшлектән юғары. Гонаһ ҡылған туғанынан баш тартыу ярамаған кеүек, хата һәм гонаһтары өсөн иман ҡәрҙәшеңдән дә тулыһынса баш тартыу килешмәй. Иң яҡшыһы – йығылғанға торорға ярҙам итеү зарур.

Шул сәбәпле Раббыбыҙ Аллаһ туғандары тураһында Пәйғәмбәребеҙгә (саллəллаһу ғəләйһи үə сəлләм) былай ти:

«Әгәр улар, инҡар юлына баҫып буйһонмаһалар, әйт: «Мин һеҙҙең был эштәрегеҙҙән йыраҡ торам» (әш-Шүғәрә (Шағирҙар), 216).

Бында Аллаһ Тәғәләнең әйткәненә иғтибарлы булырға кәрәк, Ул шулай тип әйтергә бойора: «Мин һеҙҙең был эштәрегеҙҙән йыраҡ торам», әммә ул әйтмәй: «Минең һеҙгә ҡатнашым юҡ»!

Шулай итеп, гонаһҡа ҡарата булған нәфрәтте гонаһкәргә күсерергә ярамай. Киреһенсә, гонаһкәргә, яралы ҡош кеүек, мәрхәмәтле шифаланыуға мохтаж итеп ҡарарға кәрәк.

❁

«Кәмселекһеҙ дуҫ эҙләүсе дуҫһыҙ ҡала», тигәндәй, мосолмандың бурысы - хата-кәмселектәрҙән һаҡлана алмаған ҡәрҙәшеңде, үҙ яйына ҡалдырып, уға арҡаң менән боролоу түгел, ә рәхимле булып, уға лайыҡлы тормошҡа ҡайтырға ярҙам итеү.

❁

Тырышлыҡ һалмайынса, яҡшы һөҙөмтә көтөп булмай. Хәҡиҡәт тураһында һөйләмәйенсә, дәғүәт ҡылмайынса, кемгәлер асыуланырға хоҡуғыбыҙ юҡ. Әгәр ҙә ки беҙ асыуланырға мөмкин тип уйлаһаҡ, тәүге нәүбәттә үҙебеҙгә асыуланырға тейешбеҙ.

❁

Мөхтәрәм Ғәли (радыйаллаһу ғәнһү) әйткән:

«Ғалимдарҙан: «Ни өсөн һеҙ өйрәтмәнегеҙ?», - тип һорамай тороп, «Ни өсөн һеҙ өйрәнмәнегеҙ?» - тип наҙандарҙан һорамаясаҡтар».

❁

Мутарриф ибн Абдулла (рәхимәһуллаһ), тәбиғиндәр быуынынан хәҙистәр һәм фиҡыһ белгесе әйткән:

«Кем гонаһкәрҙәргә ҡарата шәфҡәтле түгел, исмаһам уларҙың тәүбә ҡылыуы һәм ярлыҡаныуы өсөн доға ҡылыу лазым, сөнки ерҙәгеләрҙе ғәфү итеүҙе Аллаһтан үтенеү фәрештәләрҙең бер сифаты булып тора».

❁

Кеше, Ҡара таш кеүек үк, ҡасандыр Йәннәттән сыҡҡан. Гонаһтары сәбпле ул ни тиклем генә түбән тәғәрәмәһен, уның асылының юғары хәле һәм ҡиммәте һаҡлана. Шуға күрә гонаһҡа ҡарата нәфрәтте гонаһкәргә күсерергә ярамай. Әммә гонаһкәргә ҡарата шәфҡәтлелек гонаһҡа күсергә тейеш түгел.

❁

Тапшырыуҙарынса, мөхтәрәм Ибраһим ибн Әҙһәм эскесенең һаҫыҡ, бысраҡ ауыҙын йыуа. Быны ни өсөн эшләүе тураһында һорағас, ул әйтә:

«Раббыбыҙ Аллаһты маҡтар өсөн яратылған тел һәм ауыҙҙы бысраҡ килеш ҡалдырһам, был зекергә ҡарата итәғәтһеҙлек булыр ине…»

Иҫерек айныҡас, уға әйтәләр:

«Хөрәсәндән Тәкүәле Ибраһим ибн Әҙһәм һинең ауыҙыңды йыуҙы…» Оятҡа ҡалған был кешенең йөрәге уяна, һәм ул әйтә:

«Улайһа, мин дә тәүбә иттем…»

Уның тәүбәгә килеүенә сәбәпсе булған Ибраһим ибн Әҙһәм төшөндә Аллаһтың шундай һүҙҙәрен ишетә:

«Һин Беҙҙең өсөн уның ауыҙын йыуҙың! Һәм Беҙ һинең өсөн уның йөрәген йыуҙыҡ!».

❁

Аллаһтың күҙәтеүе аҫтындағы төйәк булған йөрәкте кәферлек ҡараңғылығынан, ширктән, монафиҡлыҡтан һәм ғафиллыҡтан арындырыу һәм, уны Раббыбыҙ Аллаһтың мөхәббәт тулы ҡарашы төшкән урын булырлыҡ дәрәжәлә сафландырырға тырышыу – кеше ҡыла алған иң бөйөк хеҙмәт.

ӘХЛАҠЛЫЛЫҠ ҺӘМ ӘҖӘПЛЕЛЕК

Тарихтан күреүебеҙсә, Фирғәүен, Нәмруд, Атилла, Александр Македонский, Хулагу кеүек үҙҙәренең сикле аҡылына таянған тәкәбберҙәр бөтә кешелектең нәфрәтенә дусар булған. Ҡасандыр уларҙың һоҡланғыс һарайҙары өҫтөнә ҡалҡҡан ҡояш хәҙер инде уларҙың харабалары өҫтөнә ҡалҡа.

Икенсе яҡтан, Мәүләнә, Шах Нәҡшбәнд, Абдулҡадир Ғәйләни һәм улар һымаҡ һымаҡ йөрәген мәрхәмәт төйәгенә әйләндергәндәр һәм иланы дуҫлыҡ һәм мөхәббәт сығанағына ирешкәндәр кешеләр араһындағы тыныслыҡ һәм бәхет сығанағына әйләнде. Кешелектең уларға ҡарата мөхәббәте Хисап көнөнә саҡлы һаҡланасаҡ.

Мосолман бер юлы дини ҙә һәм әхлаҡһыҙ, тупаҫ, мәғәнәһеҙ, тәрбиәһеҙ ҙә була алмай, сөнки исламдың асылы, рухиәте – Бер Аллаһҡа инаныу, башҡа кешеләргә ҡарата әҙәпле һәм ихтирамлы булыу.

❁

Мөьмин, раузаларҙың, сөмбөлдәрҙең һәм үҫемлектәр донъяһының хайран ҡалырлыҡ төрлөлөгөнөң тәрән мәғәнәһе тураһында уйланып, шул сәскәләр кеүек нәзәкәтле һәм нескә, емеш ағасары кеүек йомарт булырға тейеш.

❁

Әҙәплелек раузаларҙың күңелгә ҡыуаныс биргән хуш еҫе кеүек. Был хуш еҫ йөрәгебеҙгә үтеп инергә һәм тормошобоҙҙоң һәр мәлендә үҙен һиҙҙереп торорға тейеш.

Алтын һәм көмөштән торған байлыҡ бер заман юҡҡа сығасаҡ, әммә әҙәп байлығы мәңге беҙҙең менән ҡаласаҡ…

❁

Рухи мәктәптәр диуарын биҙәгән «әҙәпле бул» кәлимәһенә күпме нәсихәт һалынған.

«Әҙәпле бул» күркәм холоҡло булырға өндәгән киҫәтеү генә түгел, ул доға ла булып тора: «Йәә Аллаһ! Әҙәпле булыуҙы насип әйлә миңә!

Мөхтәрәм Мәүләнә әйткәнсә: «Кемдең әҙәптән өлөшө юҡ – ул кеше түгел, сөнки кеше һәм хайуан араһындағы айырма – әҙәп. Күҙеңде ас һәм иғтибар менән Аллаһ китабына – Ҡөрьәнгә ҡара! Шунда күрерһең: һәр аят әҙәптән тора».

❁

Иң оло әҙәп – сиктәрҙе белеү. Хикмәт эйәләре әйткән: «Ғалимдар янында телеңә иғтибарлы бул, әүлиәләр янында – йөрәгеңә, табын артында һәм ҡунаҡта булғанда – ҡулдарыңа!».

❁

Мөхтәрәм Әбү Бәкер Варраҡ әйткән: «Әҙәплелек шулдыр: һөйләгәндә – телеңде һаҡлау, яңғыҙ ҡалғанда – йөрәгеңде, урамға сыҡҡанда – күҙеңде, нимәгәлер ынтылғанда – ҡулыңды, атлағанда – аяғыңды, бөтә ғәмәлдәреңдә – ваҡытыңды. Әгәр кеше ағзаларын һаҡламай һәм ваҡытын әрәм итә икән, уның үҙ ағзалары үҙен бәләгә алып киләсәк...»

❁

Мөхтәрәм Мөхәммәд Мәғсум әйткән:

«Әҙәптән мәхрүм бер кеше лә Аллаһ Тәғәләне танып белә алмаған».

❁

Динебеҙ иман эйәһенең тупаҫ һәм тәкәббер булыуын хупламай. Ислам мосолмандарҙың эгоист булыуын түгел, ә фиҙакәр һәм альтруист булыуын, һаран түгел, ә йомарт булыуын, тупаҫ түгел, әҙәпле булыуын талап итә.

❁

Мөхтәрәм Юныс Әмре әйткән:

Йөрәк – Раббым тәхете,
Баҡты Раббым йөрәккә,
Йөрәктәрҙе рәнйетеүсе -
Ике донъя бәхетһеҙе!

❁

Һәр ваҡыт үҙеңде әңгәмәләшеүсең урынына ҡуйып ҡарау зарур:

– Үҙебеҙгә ниндәй мөғәмәлә теләйбеҙ, уға ҡарата ла шундай мөғәмәләлә булыу лазым.

– Үҙебеҙҙе ихтирам итеүҙәрен теләйбеҙ икән, әңгәмәсебеҙҙе лә ихтирам итергә тейешбеҙ.

– Беҙҙең яҡшылығыбыҙ башҡаларҙан көткән яҡшылыҡтан кәм булмаҫҡа тейеш.

❁

Исламдың юғары ҡиммәттәрендә тәрбиә алған ата-бабаларыбыҙ әҙәптә шундай кимәлгә еткән: улар рухи йәһәттән сирлеләрҙе «мөхтәрәм мохтаждар», тип атаған. Сирлеләрҙең кешелек бәҫен төшөрмәҫ өсөн, уларҙы «мөхтәрәм», тип атағандар, ә Раббыбыҙҙың яратылмышына мәрхәмәт йөҙөнән «мохтаж» тип.

Көнбайыштың христиан донъяһында иһә ул замандағы психик ауырыуҙарҙы "ен эйәләшкән", тип иҫәпләгәндәр һәм утта яндырғандар.

Ике цивилизация араһында кешелеклелеккә һәм игелеклелеккә бына шундай ике төрлө ҡараш!

❁

Ата-бабаларыбыҙ шундай әҙәп ҡағиҙәһен индергән: әгәр йортта сирле кеше булһа, тәҙрә төбөнә билдәле бер төрҙәге гөл ҡуйыр булғандар. Урамда сауҙа итеүселәр был тирәнән шым ғына үткән, ә балалар шауламаған.

Был игелеклелек һәм нескәлек хәҡиҡи цивилизациямы, әллә заманыбыҙҙың ҡатылығымы?

❁

Тарихтан күреүебеҙсә, Фирғәүен, Нәмруд, Атилла, Александр Македонский, Хулагу кеүек үҙҙәренең сикле аҡылына таянған тәкәбберҙәр бөтә кешелектең нәфрәтенә дусар булған. Ҡасандыр уларҙың һоҡланғыс һарайҙары өҫтөнә ҡалҡҡан ҡояш хәҙер инде уларҙың харабалары өҫтөнә ҡалҡа.

Икенсе яҡтан, Мәүләнә, Шах Нәҡшбәнд, Абдулҡадир Ғәйләни һәм улар һымаҡ һымаҡ йөрәген мәрхәмәт төйәгенә әйләндергәндәр һәм илаһи дуҫлыҡ һәм мөхәббәт сығанағына ирешкәндәр кешеләр араһындағы тыныслыҡ һәм бәхет сығанағына әйләнгән. Кешелектең уларға ҡарата мөхәббәте Хисап көнөнә саҡлы һаҡланасаҡ.

❁

Мөхтәрәм Әғзәм Әбү Хәнифә Имам әйткән:

«Бел, әгәр һин кешеләр менән килешеп йәшәмәһәң, улар һинән ситләшәсәк һәм хатта ата-әсәң дә һинән риза булмаясаҡ. Әгәр кешеләр менән килешеп йәшәһәң, хатта туған булмағандар ҙа ата-әсәң кеүек буласаҡ».

❁

Шәйех Сәғди әйткән:

«Тиҫкәрелектә, ғәҙелһеҙлектә һәм дошманлыҡты күрһәң, йомшаҡ бул. Үткер ҡылыс бит йомшаҡ ебәкте киҫә алмай. Кеше, йомшаҡлыҡ күрһәтеп, филде лә үҙенең артынан эйәртә ала».

❁

Мөхтәрәм Мәүләнә әйткән:

«Әгәр берәйһенең зарар һалыуын теләмәһәң, насар һөйләүселәрҙән, насарға өйрәтеүселәрҙән һәм насарҙы уйлаусыларҙан булма!».

❁

Шағир ни тиклем гүзәл әйткән:

“Әҙәплелек – илаһи нурҙан таж,

Кей шул тажды һәм һәр бәләнән яҡлау ал”.

❁

Шәйех Сәғди әйткән:

«Әҙәплелек, тәрбиәлелек һәм яҡшы холоҡ – Аллаһ нурынан таж. Кей ҙә шуларҙы һәм теләгән ереңә юл тот – һине һәр ерҙә хөрмәт итәсәктәр».

❁

Рауза кеүек булыу мөһим – хатта сәнскеләр араһында ла донъяға матурлыҡ таратыусы һәм яралы йөрәктәрҙе һауыҡтырыусы.

❁

Хәҙистә әйтелә:

«Еңеләйтегеҙ, тик ауырайтмағыҙ; шатландырығыҙ, тик биҙҙермәгеҙ» (Бохари, Ғилем, 11).

❁

Кешенең йөҙө һәм күҙе, тышҡы ҡиәфәте – үҙенә күрә бер витрина. Барса йән эйәһенең, һәммәбеҙгә мәғлүм булған телмәре һәм теленән тыш, рухи халәт теле бар. Йәғни кеше, ауыҙ асып бер һүҙ әйтмәһә лә, үҙенең халәте

менән нимәлер белдерә. Кешенең йөҙөндә йөрәк халәтенең билгеһе бар. Күңел күҙе күргәндәр өсөн һәр йөҙ хужаһының эске донъяһының сағылышы булып тора. Был йәһәттән йөҙҙәге яҡты йылмайыу – йөрәктәге именлектең яҡшы сағылышы.

❁

Хәҙистә әйтелә:

«Бер генә игелекле ғәмәлде лә аслан ситкә ҡуйма, хатта ки ҡәрҙәшеңде асыҡ йөҙ менән ҡаршы алыу [тураһында һүҙ барһа ла]» (Мөслим, Бирр, 144).

❁

Мөхтәрәм Ғәли (радыйаллаһу ғәнһү) әйткән:

«Мөьминдең йөҙөндә – йылмайыу, ә йөрәгендә - һағыш».

❁

Ҡысҡырып көлөү – бер сиктән сығыу, һәр саҡ ҡараңғы йөҙ менән йөрөү – икенсеһе. Йылмайыу – алтын урталыҡ һәм иң яҡшы ғәмәл.

❁

Мөхтәрәм Мәүләнә әйткән:

«Мин кешенең көлөүенә ҡарап, уның әҙәп кимәлен аңлай алам, ә нимәнән көлөүенә ҡарап - аҡыл кимәлен».

❁

Хаҡ мосолмандың ғәмәле исламдың яҡшылығын һәм рухиәтен сағылдырырға тейеш. Мосолмандың иң бөйөк дәғүәте, һүҙҙән тыш, уның рухи халәте, холҡо, әҙәбе һәм тәрбиәлелеге. Уны күреп, һәр кеше: «Ниндәй һоҡланғыс кешеләр!» - тип, мосолмандар менән һоҡланырлыҡ булһын.

❁

Пәйғәмбәребеҙ (салләллаһу ғәләйһи үә сәлләм), әңгәмәселәренең ихтыяждарына ҡарап, төрлө кәңәштәр биргән. Әбү Хани (радыйаллаһу ғәнһү) шундайыраҡ бер хәл тураһында һөйләй:

«Мин Пәйғәмбәребеҙгә (салләллаһу ғәләйһи үә сәлләм) һорау бирҙем:

«Мине Йәннәткә индерергә нәләтле берәй нәмә тураһында әйтегеҙ әле?» Ул әйтте:

«Яҡшы һүҙгә һәм һыйға һаран булма!» (Бохари, Халҡу афали аль-ибад, Рияд: Дару аль-мааариф, 68-се бит).

Һәр һүзегеҙ әңгәмәсегеҙҙең йөрәгенә тыныслыҡ алып инерлек итеп өндәшегеҙ. Мөьминдең тауышы, һандуғас моңо шикелле, йөрәктәргә шатлыҡ килтерергә тейеш.

❁

Раббыбыҙ Аллаһ Ҡөрьәндә телмәр әҙәбе тураһында нәсихәт бирә.

Беҙгә хыянатһыҙ, ихлас, ғәҙел һәм тәҡүәле булырға ҡушып, ул әмер бирә: «لدِّيدِسَ لَاوْقَ», йәғни **«хаҡ һүҙле һәм ғәҙел»** булырға (ән-Нисә (Ҡатындар), 9; әл-Әхзәб (Төркөмдәр), 70).

Ул ата-әсәгә үпкәләтерлек һүҙ әйтмәҫкә, хатта ки «Уф!» тип әйтеп тә ризаһыҙлыҡ белдермәҫкә, уларға «لمَّيرِكَ لَاوْقَ», йәғни «итәғәтле өндәшергә» бойора (әл-Исра (Төнгө сәфәр), 23).

Әгәр фәҡиргә бирергә бер нәмәң дә булмаһа, унан йөҙөңдө бормаҫҡа, рәнйемәҫлек бер нисә «اًروسُيْمَّ لَاوْقَ», йәғни **«күңел йыуатырлыҡ бер нисә һүҙ»** әйтергә ҡуша (әл-Исра (Төнгө сәфәр), 28).

Аллаһ әйтә: «فٌورُعْمَّ لٌوْقَ», йәғни кешеләрҙең күңелдәрен тынысландырырҙай һәм башҡалар алдында уларҙың бәҫен төшөрмәҫтәй **«яҡшы һүҙ»** әйтеү, рәнйетеп, теләр-теләмәҫ бирелгән хәйерҙән артығыраҡ (әл-Баҡара (Һыйыр), 263).

Раббыбыҙ бойора: «لًّيَيِّلَ لَاوْقَ», йәғни, залимдарҙың йөрәктәрен йомшартыу өсөн, **«итәғәтле һөйләшергә»** (Та-ha, 44).

Шулай уҡ Аллаһ дәғүәт ҡылғанда шулай тип әйтергә бойора: «لغًّيلِبَ لَاوْقَ», йәғни **«күңелгә һәм йөрәккә үтеп инерҙәй хикмәтле, ышандырырлыҡ һүҙ әйтергә»** (ән-Нисә (Ҡатындар), 63).

❁

Ҡөрьәндең күп кенә аяттарында Аллаһ Тәғәлә мөьминдәргә, әйтелгән һүҙҙәре таҙа ағым һыу кеүек күңелдәргә еңеллек бирһен өсөн, яҡшы һүҙҙәр һөйләргә, йылмайырға кәңәш бирә.

Раббыбыҙ ҡаты һәм тупаҫ һүҙҙәрҙең кире һөҙөмтә биреүе тураһында киҫәтә. Ул әйткәнсә, иман эйәһенә тупаҫ, әҙәпһеҙ һүҙҙәр төҫ түгел.

Ул шулай уҡ хәбәрҙе ниндәй тауыш менән һөйләү ҙә ҙур әһәмиәткә эйә булыуы тураһында белдерә:

«Атлағанда ипле баҫып йөрө, әкрен тауыш менән һөйләш. Тауыштың иң имәнесе – ишәк тауышы» (Лүҡмәән (Лоҡман), 19).

❁

Башланғыс дөйөм белем биреү мәктәптәренән алып университеттарға тиклем барса уҡыу йорттарында сит телдәр өйрәнелгәндә, беҙ Ҡөрьән һөйләшергә өндәгән нәзәкәтле телмәр менән танышбыҙмы? Изге Китабыбыҙ өйрәткән телмәргә, телмәр алымдарына әһәмиәт бирәбеҙме?

❁

Хис-тойғо, уй-фекер сығанағы булған йөрәк һәм уларҙың тәржемәсеһе була алған тел уғата мөһим. Теге йәки был һүҙҙең ниндәй эҙемтәләргә алып килеүен күҙҙаллау, хаталы телмәрҙән ентекле ҡасыу мөһим. Пәйғәмбәребеҙ (салләллаһу ғәләйһи үә сәлләм) әйткән:

«Хаҡтыр, (Аллаһ) ҡоло һис бер әһәмиәт бирмәйенсә берәй һүҙ әйтер һәм көнсығыш (һәм көнбайыш) араһына тиң (Йәһәннәм) Утына ҡолар» (Бохари, Рикак, 23).

❁

«Ул сирҙе еңде!» ғибәрәһе ислам әҙәбенә һәм телмәренә ярашлы түгел, сөнки ул һауалы, хатта ки әҙәпһеҙ, сөнки мосолман тәрбиәһе һәр ниғмәтте һәм уңышты Аллаһ менән бәйләргә өйрәтә. Һауыҡҡан кеше тураһында һүҙ барғанда, шулай тип әйтеү дөрөҫ булыр: «Аллаһ уға шифаланыу бүләк итте».

❁

Бер яҡтан, официантҡа ҡаты итеп шулай тип әйтергә мөмкин: «Йәһәт кенә миңә бер стакан һыу килтер!», итәғәтле итеп былай тип әйтергә лә була: «Ҡыйын булмаһа, миңә бер стакан һыу килтермәҫһегеҙме икән?».

Ике осраҡта ла кеше һыу һорай. Әммә тәүге осраҡта ул, әңгәмәсеһен кәмһетеп, тупаҫ, үпкәләтерлек итеп һорай, икенсе осраҡта иһә – кешелек бәҫен төшөрмәйенсә, әҙәпле итеп.

Бынан тыш, кем генә, ниндәй генә халәттә килтерһә лә, был бер стакан һыу уны эскән кешегә мотлаҡ йоғонто яһай. Тупаҫ рәүештә һорап алынған һыу кешегә файҙа бирмәйәсәк, сөнки уны теләр-теләмәҫ, йәндәре көйөп килтереп бирәсәктәр. Киреһенсә, әҙәпле итеп һорап алынған, һөйөү тулы күңел менән килтерелгән һыу шифа бирәсәк.

❁

Әгәр кешенең рухи халәтен итәғәтлелек, нескәлек, әҙәплелек һәм баҫалҡылыҡ кеүек сифаттар биҙәһә, тимәк уның йөрәге рауза баҡсаһына әйләнгән. Әммә инде бәндәнең ауыҙынан тупаҫ, мыҫҡыллы, кәмһетеүле һүҙҙәр, ялған, ғәйбәт, яла, һүгенеүҙәр яуһа, тимәк уның йөрәген сәнскеләр баҫып алған.

❁

Ауыҙҙан сыҡҡан һәр һүҙ уларҙы әйтеүсенең йөрәк халәтен сағылдырған көҙгө кеүек, шуға күрә иман эйәһенә телмәрен Аллаһты зекер итеү менән биҙәү һәм күркәм итеп, хикмәт менән һөйләүҙе ғәҙәтенә индереү лазым. Былар йөрәктәге хозурлыҡ, бәрәкәт һәм рухиәт сифаты булып тора. Иманлы әҙәм телмәрен ғәмһеҙ рәүештә әйтелгән буш, әҙәпһеҙ һүҙҙәрҙән ентекле араларға тейеш, сөнки улар һәммәһе телмәр фәҡирлеге, йөрәктәге яҙыҡтар һәм яман сифаттар билдәһе.

❁

Бәғерҙәрҙе яралаған яман, тупаҫ һүҙҙәр ғафиллыҡтан ҡатҡан йөрәктән генә сыға.

❁

Мөьмин – ул башҡаларҙа ышаныс уятҡан кемсә. Хәҙистәренең береһендә Аллаһ Илсеһе (салләллаһу ғәләйһи үә сәлләм) әйткәнсә, «Мосолмандар уның ҡулынан да, теленән дә имен»[30]. Тимәк, ялған, яла, яманлау, ғәйбәт кеүек кешене рәнйетерлек һүҙҙәр мосолманға төҫ түгел.

❁

Сәлмән әл-Фәриси (радыйаллаһу ғәнһү) әйткән:

«Хисап көнөндә иң күп гонаһ Аллаһ тыйған телмәрҙәр менән мауығыусыларҙа буласаҡ».

❁

Кеше әйткән һәр һүҙе өсөн яуаплы булыуын онотмаҫҡа тейеш.

Был турала аяттарҙа әйтелә:

«Кешенең ауыҙынан сыҡҡан бер генә һүҙ ҙә күҙәтеүсе (йәғни фәрештә) тарафынан яҙылмай ҡалмай» (Ҡаф, 18).

«Һеҙҙең өҫтөгөҙҙә Хәкиҡәт һаҡсылары (фәрештәләр) тора. (Аллаһ хозурында) бик тә ышаныс ҡаҙанған, намыҫлы рәүештә яҙып барыусылар бар. Улар, һеҙ нимә ҡылһағыҙ, шуны белеп тора» (әл-Инфитар (Ярылыу), 10-12).

Шуға күрә иманлы әҙәм белергә тейеш: уның һүҙҙәре лә, ғәмәлдәре лә илаһи көстәр тарафынан яҙыла бара.

❁

Мөхтәрәм Ғәли (радыйаллаһу ғәнһү) әйткән:

30. Бохари, Иман 4, 5, Рикак 26; Мөслим, Иман 64, 65.

«Һүҙҙәре яҙыла барыуын белгән кеше аҙ һөйләй, һәм һөйләй икән, үҙен ҡыҙыҡһындырған нәмә тураһында ғына һөйләй».

❁

Шәйех Сәғди әйткән:

«Хикмәт эйәһе, өндәшмәй ҡалһа, был зыянға икәнен белгән тәҡдирҙә генә хәбәр һөйләй башлай. Артабан да ураҙа тотһа, ул һаулығына зыян килтерәсәген белгән тәҡдирҙә генә ашай башлай. Һис шикһеҙ, ундай кешенең һүҙе – хикмәт, ә ейгән ризығы – шифа».

❁

Мөхтәрәм Ғәли (радыйаллаһу ғәнһү) әйткән: «Аҡыллы кеше күп һүҙ һөйләмәҫ…»

❁

Аллаһ бәндәләренә ике ҡолаҡ һәм бер ауыҙ бүләк иткән. Бының мәғәнәһе шунда: тыңла, нимә тураһында һүҙ барғанын яҡшылап төшөн, шунан ҡыҫҡа итеп, тейешен генә һөйлә.

❁

Кешенең ауыҙынан сыҡҡан һүҙе уны бәхеткә лә, бәхетһеҙлеккә лә алып килеүе ихтимал. Ҡарыныбыҙға эләккән ризыҡ хәләлме, әллә хараммы икәненә иғтибар итеү мөһим булған кеүек, әйткән һүҙебеҙ файҙағамы, әллә зыянғамы икәнен уйлау, шунан һуң ғына йә һөйләү, йә өндәшмәй ҡалыу зарур.

Хәҙистә әйтелә:

«Аллаһҡа һәм Һуңғы Көнгә инанған кеше яҡшыны һөйләһен йәки өндәшмәһен!» (Бохари, Әҙәп 31, 85, Рикак 23).

❁

Әйтәләр бит: «Яҡшы һүҙ – йән аҙығы, яман һүҙ – баш ҡаҙығы». Йәғни, әгәр кеше яҡшыны һөйләмәй икән, өндәшмәҫкә тейеш, әммә әгәр уға әйтергә кәрәк булһа, ул өнһөҙ ҡалыуҙан яҡшыраҡты әйтергә тейеш.

❁

Хәҙистә әйтелә:

«…Яҡшыны һөйләү өнһөҙ ҡалыуҙан яҡшыраҡ. Ә өнһөҙ ҡалыу яман һөйләүҙән яҡшыраҡ» (Хаким, III, 343).

❁

Сәғди Шәйех әйткән:

«Наҙан өсөн иң яҡшыһы – өндәшмәү. Әммә, әгәр ул быны белһә, ул наҙан булмаҫ ине».

❁

Мөхтәрәм Ғәли (радыйаллаһу ғәнһү) әйткән:

«Һорағансы өнһөҙ тороуың һине туҡтарға мәжбүр иткәнсе хәбәр һөйләүҙән яҡшыраҡ».

❁

Йософ Хас Хаджиб үҙенең «Ҡутадғу билиг» («Бәрәкәтле ғилем») әҫәрендә былай ти: «Файҙаһыҙ һүҙҙәр ут кеүек. Уларҙы ауыҙҙан сығарырға ярамай, юғиһә бешәсәкһең!».

❁

Мөхтәрәм Ғүмәр (радыйаллаһу ғәнһү) әйткән:

«Кем кем күп һөйләй, шул күп хаталана. Кеше күп хаталанһа, уның оят тойғоһо кәмей. Оят тойғоһо кәмегән кеше, гонаһҡа батыуҙан ҡурҡып, ҙур тырышлыҡ менән шикле нәмәләрҙән ҡасырға тырышмай. Шикле нәмәләрҙән һаҡланырға тырышмаған кешенең йөрәге үлә».

❁

Сәғди Ширази Шәйех һүҙҙәре ни тиклем хикмәтле:

«Ике нәмә аҡыл ҡытлығы ғәләмәте: һөйләр ерҙә – өндәшмәү, өндәшмәҫ ерҙә – хәбәр һөйләү».

❁

Имам Ағҙам (рәхимәһуллаһ) әйткән:

«Әгәр Аллаһ ниндәйҙер халыҡҡа яманлыҡ теләһә, Ул уларға мәғәнәһеҙ бәхәстәр ишеген асыр һәм изге ғәмәлдәр ҡылыу юлын ябыр».

❁

Мөхтәрәм Ғәли (радыйаллаһу ғәнһү) әйткән:

«Яман һүҙгә яуап биреүҙән һаҡлан! Уны әйтеүселә ундай яман һүҙҙәр бихисап. Һәм ул уларҙы һиңә әйтәсәк. Яһил менән шаярма! Теле ағыулы булғанлыҡтан, уның йөрәге лә сирле».

❁

Аятта әйтелә:

«Кемдәр Ер йөҙөндә итәғәт менән йөрөй, шулар мәрхәмәтле Ярлыҡаусы (Аллаһ) бәндәләре булыр. Һәм улар наҙан ахмаҡтарҙың әҙәпһеҙлегенә ҡаршы сәләм менән яуап бирер» (әл-Фуркан (Яҡшыны ямандан айырыусы Китап), 63).

❁

Мөхтәрәм Мәүләнә әйткән:

«(Тиҫкәре) яһил кешеләр янында китап кеүек өнһөҙ бул! (Һил урын тап!)».

❁

Шәйех Сәғди әйткән:

«Әгәр кеше нәсихәтте тыңламай икән, тимәк уға (бәхетһеҙлек менән) яза биреүҙәрен теләй».

❁

Зия Паша әйткән:

Кем юлға нәсихәтттәр менән сыҡмай – уны бәхетһеҙлек көтә,

Ә кемде бәхетһеҙлек аҡылға ултыртмай – сыбыҡлауға лайыҡ!

❁

Шәйех Сәғди әйткән:

«Көрьән һәм хәҙистәр ярҙамында ауыҙҙарын йомдороп булмаған яһилдарға иң яҡшы яуап – өнһөҙ булыу».

❁

Ғафил кеше теле һөйләгәнде ҡулы эшләгән эш кеүек мөһим тип иҫәпләмәй. Әммә йөрәктәге һүҙ яраһын бер нисек тә бөтәштереп булмай. Шуға күрә, «Тел һөйәкһеҙ» тип, ауыҙҙан сыҡҡан һүҙгә иғтибар бирмәү – киләһе тормошта яуап тоторға тура киләсәк ауыр гонаһ.

❁

Зәйд ибн Сабит (радыйаллаһу ғәнһү) әйткән:

«Йөрәге теленә хужа була алмаған кеше мәрхәмәт эйәһе була алмай».

❁

Бөгөн йәмғиәттәге күп кенә проблемалар телде дөрөҫ файҙаланмау сәбәпле килеп тыуа. Тел бит ике осло бысаҡ кеүек. Уны дөрөҫ файҙаланғанда, ул яҡшылыҡҡа асҡыс була, дөрөҫ файҙаланмағанда — яманлыҡҡа.

Әйткән һүҙ атҡан таш кеүек. Баштан уҡ уның ҡайҙа барып төшөрөн яҡшылап самаларға кәрәк.

Аллаһ Илсеһе (салләллаһу ғәләйһи үә сәлләм), әйтерҙән алда һәйбәтләп уйлау кәрәклеген аңлатып, былай тип бойорған:

«...һине ғәфү үтенергә мәжбүр итерҙәй бер һүҙҙе лә әйтмә!..» (Ибн Мәджә, Зуһд, 15).

❁

Телдәребеҙ йөрәктәрҙе яраларҙай сәнскегә әйләнмәһен өсөн, беҙгә бик һаҡ булыу кәрәк. Ата-бабаларыбыҙ әйткән: «Ҡылыс яраһы уңалыр, тел яраһы уңалмаҫ». Ватылған быяланы йәбештереп булыр, әммә эҙе мәңгегә ҡалыр.

❁

Сирҙәрҙе лә, йөрәктәрҙе лә науыҡтырған мөхтәрәм Лоҡман Хәкимгә һорау биргәндәр:

«Әфәндем, сирлеләргә ниндәй ризыҡ аштайыҡ? Ниндәй кәңәш бирерһегеҙ?»

Лоҡман Хәким шундай күркәм һәм йөкмәткеле кәңәш биргән:

«Сирлеләрҙе әсе һүҙҙәр менән ашатмағыҙ. Бынан тыш ниндәй генә ризыҡ ашатһағыҙ ҙа, зыяны булмаҫ, Аллаһ бойорһа...»

❁

Мөхтәрәм Әбү Бәкер (радыйаллаһу ғәнһү) әйткән:

«Кемгә нимә әйтерең тураһында бик ныҡлап уйла».

❁

– Ни әйтереңде уйлап тормайынса, башыңа килгән һәр бер һүҙҙе әйтмә!

– Ярамаған һүҙҙәрҙе хәтереңдән, телмәреңдән юй!

– Һәр һүҙҙе үлсәп, урынлы ҡуллан!

– Әйткән һүҙҙәрең урынлы булһын, әңгәмәселәреңдең халәтенә тап килһен! Мөхтәрәм Мәүләнә һүҙҙәре менән әйтһәк: «Һуҡырҙар баҙарында көҙгөләр һатма, һаңғырауҙар баҙарында ғәзәл һөйләмә!».

– Һәм, иң мөһиме: яһилдар шикелле, һис ҡасан йөрәктәрҙе яралай торған тупаҫ һәм яман һүҙҙәр әйтмә!

МӘРХӘМӘТ ИНСАНДАРЫ

Аллаһтың Мәрхәмәте – океан, йөрәктәребеҙгә мәрхәмәт тулһын өсөн, уның бер тамсыһы ла етә. Ул тамсы, йөрәгебеҙгә инеп, океан тәмен татый башлау менән, йөрәгебеҙ уның менән берләшә.

Ундай йөрәктәр, «йәллә беҙҙе» тип ғазап сиккәндәрҙең аһтарын ишетә, үҙҙәренең фани донъяға килеү серен аңлай алмаған ғафилдарҙың халәтен тоя һәм етәкселеккә мохтаж булғандарҙың ихтыяжын төшөнә башлай. Улар хозурлыҡҡа ирешә һәм тирә-йүндәге бәхетһеҙҙәрҙе һауыҡтырыуҙан рухи ҡәнәғәтлек таба.

Имандың иң тәүге емеше – мәрхәмәтлелек. Мәрхәмәтлелектең иң яҡшы дәлиле – үҙеңдә булған ниғмәт менән бүлешеү, йәберләнгәндәрҙең ихтыяжын ҡәнәғәтләндереү.

❁

Мәрхәмәтлелек – Аллаһтың бөйөк бәрәкәте. Ошо гүзәл сифатҡа эйә булғандар тураһында ғына «уның йөрәге, аҡылы һәм намыҫы бар», тип әйтергә мөмкин.

Мәрхәмәтле иман эйәһе – йомарт, тотанаҡлы, тырыш, намыҫлы. Мәрхәмәт һәм шәфҡәт булмаған йөрәктә бәрәкәт тә, рухиәт тә юҡ.

❁

«Аллаһ» тип әйткән йөрәктә мәрхәмәт, шәфҡәт, киң күңеллелек һәм ғәфү итә белеү кеүек сифаттарҙың булмауы мөмкин түгел.

❁

Мәрхәмәт – иманлының йөрәгендәге мәңге һүнмәй торған ут. Мәрхәмәтлелек – был фани донъялағы кешегә хас булған иң юғары тойғо, ул беҙҙе Аллаһтың ризалығына, мөхәббәтенә, Уның менән ҡауышыуға алып бара.

Иман эйәһенең әкрен генә иҫкән ел кеүек шәфҡәтле, ләйсән ямғыр кеүек йомарт булыуы һәм, тирә-йүнгә тыныслыҡ таратып, һәр ваҡыт Аллаһтың ризалығын эҙләүе зарур.

❁

Мөхтәрәм Мәүләнә әйткән: «Мәрхәмәт һәм шәфҡәттә ҡояш кеүек бул!».

❁

Ҡояш нурҙары ерҙә көн иткәндәрҙең һәммәһе өсөн яҡтылыҡ, йылылыҡ, ризыҡланыу сығанағы булып, иң аулаҡ, йәшерен урындарға ла барып еткән кеүек, иманлы әҙәмдең йөрәге лә иң киң һәм юғары офоҡтарға күтәрелеүҙе маҡсат итеп ҡуйырға тейеш. Шуны оноторға ярамай: ул тирә-йүнгә ни дәрәжәлә яҡтылыҡ тарата алһа, нуры ла шул тиклем арта.

❁

Аллаһтың Мәрхәмәтле (Әр-Рахмәән) һәм Рәхимле (Әр-Рахиим) Исемдәре Ҡөрьәндә йышыраҡ ҡабатлана. Ғаләмдәргә рәхмәт булараҡ ебәрелгән Пәйғәмбәребеҙ (саллəллаһу ғələйһи үə сəллəм) «рауф үə рəхим» тип атала, йәғни мәрхәмәтле һәм рәхимле.

Тимәк, Аллаһ Илсеһе (саллəллаһу ғələйһи үə сəллəм) өммәтенән булған, илаһи һәм пәйғәмбәребеҙ (с.ғ.с) ҡиммәттәре менән биҙәлгән Аллаһ ҡоло ҡулы, теле һәм йөрәге менән мәрхәмәт һәм шәфҡәт таратыусы «мәрхәмәт инсаны» булырға тейеш.

❁

Аллаһтың Мәрхәмәте – океан, йөрәктәребеҙгә мәрхәмәт тулһын өсөн, уның бер тамсыһы ла етә. Ул тамсы, йөрәгебеҙгә инеп, океан тәмен татый башлау менән, йөрәгебеҙ уның менән берләшә.

Ундай йөрәктәр, «йәллә беҙҙе» тип ғазап сиккәндәрҙең аһтарын ишетә, үҙҙәренең фани донъяға килеү серен аңлай алмаған ғафилдарҙың халәтен тоя һәм етәкселеккә мохтаж булғандарҙың ихтыяжын төшөнә башлай. Улар хозурлыҡҡа ирешә һәм тирә-йүндәге бәхетһеҙҙәрҙе науыҡтырыуҙан рухи ҡәнәғәтлек таба.

❁

Мәрхәмәт барса фани эҫенеүҙәрҙән юғары булырға тейеш. Аллаһтың Рәхмәтенә һәм Ҡөҙрәтле Раббыбыҙҙың Мәрхәмәтле (Әр-Рахмәән) сифатынан бәрәкәт алыу өсөн, Уның мәхлүҡтәренә мәрхәмәтле булайыҡ.

❁

Аллаһтың Рәхмәтенә ирешергә теләһәк, тирә-йүнгә йөрәгебеҙ мәрхәмәтен таратайыҡ. Хәҙистә әйтелгән:

«Мәрхәмәтле булғандарға Рәхимле лә (Аллаһ) мәрхәмәтле булыр. Ерҙәгеләргә мәрхәмәтле һәм шәфҡәтле бул, һәм һеҙгә лә күктәгеләр мәрхәмәтле булыр» (Тирмизи, Бирр, 16/1924).

❁

Мәрхәмәтлелек – фани донъялағы таҙа намыҫ һәм баҡыйлыҡтағы мәңгелек сәғәҙәт тураһындағы изге хәбәр.

Иман эйәһе белә: *«Мәрхәмәтле булмағанға мәрхәмәт булмаҫ»* (Бохари, Әҙәп, 18). Үҙен генә ҡайғыртыусылар һәм һарандар, төрлө мөмкинлектәр табып, мохтаждарҙан йөҙ бороусылар үҙҙәре лә мохтаж булғанда мәрхәмәт күрмәҫ.

Шик юҡ, Хисап көнөндә Аллаһ ҡоло кескәй генә мәрхәмәткә лә мохтаж буласаҡ. Был көндә илаһи мәрхәмәткә эйә булыр өсөн, беҙ бөгөн Аллаһ ҡолдарына ҡарата мәрхәмәт һәм шәфҡәт ҡыла алыу мөмкинлеген оло ниғмәт тип ҡарарға тейешбеҙ.

❁

Мөхтәрәм Мәүләнә әйткән:

«Ҡайҙа шишимә, шунда йәшеллек. Йәштәр тамған ергә мәрхәмәт килә. Рухиәт баҡсаң йәшеллеккә күмелһен өсөн, субырлып йәштәреңә аҡһын, һыу ҡуласаһы кеүек аһтарын таралһын. Йәштәреңә тамыуын теләһәң, күҙ йәштәре аҡҡандарҙы йәллә. Мәрхәмәт һәм шәфҡәткә лайыҡ булыуҙы теләһәң, көсһөҙҙәргә һәм фәкирҙәргә мәрхәмәтле бул».

❁

Мәрхәмәт инсаны:

– Тәүге нәүбәттә иман ҡәрҙәшең, шунан үҙең уйлай. Үҙенән алда уның бәхетен ҡайғырта.

– Ул йомарт, физакәр һәм тырыш.

– Ямғыр кеүек, ул торомбашҡа әйләнгән йөрәктәрҙе йәнләндерергә ынтыла.

– Ул үҙен бөтә мосолмандар өсөн яуаплы, тип иҫәпләй.

– Ул йөрәген бөтә барлыҡ тыныслыҡ табырлыҡ мәрхәмәт һәм шәфҡәт төйәгенә әйләндерергә ынтыла.

❁

Кешеләргә ҡулың, телең, рухи халәтең һәм әҙәбең менән файҙа килтереү – иман эйәһенең рухи кимәлен күрһәтеп тороусы мөһим сифат түгелме ни? Әгәр шулай икән, бындай хәл бөйөк сәғәҙәткә юл асыусы сәбәп, Аллаһ дуҫтарына хас төп сифат. Раббыбыҙ Аллаһ тәҡүәле ҡолдары өсөн изге хәбәр еткерә: **«Аллаһтың дуҫтарына ҡурҡыныс юҡ, улар хәсрәттә ҡалмаҫ…»** (Юныс, 62).

❁

Кеше иманда камиллаша барған һайын, уның ҡәлбе киңәйә һәм бөтә яратылмыштарҙы ҡоса. Кем Раббыһы менән дуҫ, ул Уның яратылмыштарының да дуҫына әйләнә. Беҙҙең өсөн үрнәк булған, барса яратылмыштарға Хаҡ мәрхәмәте менән ҡараған Мәүләнә, Юныс Әмре, Ғабдулҡадир Ғәйләни, Шаһ Нәҡшбанд һәм мөхтәрәм Хоҙайи кеүек бөйөк шәхестәр иман эйәләренең йөрәгендә йәшәүҙе дауам иткән кеүек, бөгөн дә, улар эҙенән барып, кешелектең мәңгелек бәхетенә, тыныслығына һәм бөтә яратылмыштарҙың именлегенә хеҙмәт иткән «йөрәк инсандарына» ихтыяж бар.

❁

Бик күптәр рухи бушлыҡҡа дусар булған, психологик һәм психик тайпылыштар көндән-көн арта барған бөгөнгө көндә Аллаһ дуҫтарына, ғалимдарға һәм мәғрифәтуллаһҡа ирешкәндәргә ихтыяж арта бара, сөнки улар:

– Ялған ғилемдәр һәм фекерҙәр ҡараңғылығында ҡалғандарҙың йөрәктәрен нурландыра һәм иман яҡтылығын тарата,

– Йөрәктәрҙә Аллаһҡа мөхәббәт уята,

– Барса яратылмыштарға мәрхәмәт һәм шәфҡәт менән ҡарарға өндәй.

Аллаһ дуҫтарының рухи тыныслығынан ҡотолоу эҙләгәндәргә әйтер һүҙе күп. Бөгөн бөтә кешелек Юныс мөхтәрәм Юныс Әмрегә әйләндергән әҙәпкә, тәрбиәгә, рухи хикмәткә, намыҫ һәм рухи ҡиммәттәргә мохтаж.

❁

Беҙҙең замандағы бик йыш булып торған бәхәстәр, талаштар, тынғыһыҙлыҡ, ғаиләләрҙең тарҡалыуы йәмғиәттәге физакәр, булғанына шөкөр итә, рәхмәтле була белгәндәрҙең, изге күңелле кешеләрҙең кәмей барыуы менән бәйле.

Рухи тәрбиә күрмәгән нәфестәр шаша, боҙола һәм кешеләр үҙҙәренең мәнфәғәтен генә ҡайғыртҡан, ләззәттәр тураһында ғына уйлаған, мәрхәмәттән мәхрүм эгоистарға әүерелә. Былар иһә йәмғиәтте бер бөтөн итеп берләштергән ҡәрҙәшлек, дуҫлыҡ һәм берҙәмлеккә кәртә булып тора.

❁

Шуны онотмайыҡ: эске донъябыҙ ни тиклем йомартыраҡ һәм мәрхәмәтлерәк булһа, беҙ шул тиклем байыраҡ, ә ул ни тиклем һаныраҡ һәм аяуһыҙыраҡ булһа, беҙ шул тиклем фәкирерәк.

❁

Был фани донъяла ярлы, яңғыҙ һәм йәберләнгәндәрҙе йәлләү кәрәк булһа ла, мәрхәмәттән мәхрүм залимдар йәлләүгә күберәк мохтаж. Киләсәк тормош күҙлегенән баҡһаҡ, был донъялағы рәхимһеҙ шул залимдар иң ауыр хәлдә.

Киләсәктәге яман хәлдәрен аңлап, уларҙы йәлләргә генә ҡала:

– Аҡылын, намыҫын һәм миһырбанлығын юғалтҡан ҡырағай капиталисты.

– Рухиәттән мәхрүм материалисты.

– Үҙ мәнфәғәтен генә ҡайғыртҡан, йәлләүҙе белмәгән, күҙ йәштәре лә күңелен йомшарта алмаған бәндәне.

– Ҡанундарҙы, хеҙмәткәрҙәрҙең һәм эшселәрҙең хоҡуҡтарын боҙған аяуһыҙ етәксене.

– «Беҙҙе йәлләгеҙ!» тигән аһтарҙы тоймаған, йөрәктәре тупаҫланған кешеләрҙе.

❁

Мәрхәмәт һәм шәфҡәттән мәхрүмдәр мәңгелек сәғәҙәт ишеге асҡысын юғалтҡан кешеләр. Шуға күрә залимдарҙың йәлләү тигән тойғоно онотҡан тупаҫ йөрәктәрен нығыраҡ йәлләргә кәрәк.

❁

Иң бәхетһеҙ кеше – мәрхәмәттән мәхрүм ҡалған кеше, сөнки мәрхәмәт – кешелелектең был донъялағы төп билдәһе. Мәрхәмәт китһә, кешелелектән бик әҙ нәмә ҡала.

❁

Илаһи хәҡиҡәттәрҙе белмәгән һәм имандың тәүге емеше булған мәрхәмәттән мәхрүм кешеләр гуманизмды битлек итеп кенә файҙалана. Асылда уларҙың идеялары хәҡиҡәтте үлтерә. Әгәр улар шағир булып китһә, күңелдәрҙе һәләк итә. Әгәр әхлаҡ һағында тороусылар булмаһа, улар уны емерә.

Мөхтәрәм Мәүләнә әйткән:

«Әгәр ундай кешеләр ҡулына раузаны алһа, рауза башҡалар өсөн сәнскегә әйләнәсәк. Әгәр дуҫына яҡын килһә, улар, йылан шикелле, уны тешләп ала-саҡ».

Бер һүҙ менән әйткәндә, улар йөрәктәрҙе һәләк итеүселәр…

❁

Ҡайҙа ғына булһа ла:

– Әгәр берәй йәмғиәттә кешеләрҙең йөрәктәрен берләштереүсе бөйөк мөхәббәтте тойһағыҙ,

– Әгәр байҙар, мәрхәмәт күрһәтеп, фәҡирҙәргә ярҙамға килһә, әгәр көслөләр көсһөҙҙәр тураһында хәстәрлек күрһә,

– Әгәр власть башында торған һәм мөмкинлектәре булғандар көсһөҙҙәргә ярҙамға килһә, әгәр байҙар етемдәр тураһында хәстәрлек күрһә һәм тол ҡатын-дарҙы ашатһа, белегеҙ: был изгелектәр Изге Яҙмаларҙың «тәржемәсеһе» булған пәйғәмбәрҙәрҙән һәм улар эҙенән барған мәрхәмәт инсандарынан мираҫ булып күскән.

❁

Мәхмәд Акиф яһилиәт осоро аяуһыҙлығын шулай тасуирлай:

Һыртландар килде, кеше ҡиәфәтендәге йыртҡыстар,

Тешһеҙҙе үҙ ағай-эненe ашап ҡуйҙы…

Кешелек тарихындағы ҡараңғы яһилиәт заманынан һуң, мәрхәмәт дине – ислам нигеҙ һалған «изгелек цивилизацияһы»нда кеше үҙе лайыҡ булған хәҡиҡи ҡиммәткә эйә була.

Мосолмандар, еңеү яулап Бәдер һуғышынан Мәҙинәгә ҡайтҡанда, әсир итеп алған мөшриктәр менән сиратлап аттарында һыбай ҡайта. «Мөшрик булһалар ҙа, кеше булараҡ улар беҙҙең ҡәрҙәштәребеҙ», - тиҙәр улар миһырбан-лыҡ күрһәтеп. Бындай киң күңеллелекте күргән әсирҙәрҙең күбеһе тура юлға баҫа, йәғни мосолман булып китә.

Ислам цивилизацияһында кеше ана шундай ҡиммәткә эйә!

❁

Мәрхәмәт дине, ислам күҙлегенән ҡарағанда, кеше – хоҡуҡтарын хөр-мәт итеү тейешле булған мөбәрәк йән эйәһе. Бына ни өсөн, гонаһкәр яныңда булмаһа ла, уның яман ҡылыҡтарын, хаталарын иҫкә алыу – “ғәйбәт” тип аталған ауыр гонаһ. Кәфер булһа ла, ислам ғәҙелһеҙлек ҡылынған кешенең бәд-доғаһынан һаҡланырға бойора.

Дине, расаһы ниндәй генә булмаһын, ислам һәр ваҡыт йәберләнгәндәр яғында. Испанияла Андалусияны христиандар баҫып алғандан һуң, йәһүдтәрҙе эҙәрлекләүҙән, ҡырылыуҙан аралау шуның асыҡ бер миҫалы булып тора. Был йәһүдтәрҙе ғосманлылар Стамбулға килтерә. Стамбул мосолмандары, ислам әхлағының бөйөклөгөн күрһәтеп, уларға ярҙам ҡулы һуҙа, булған ризыҡтары менән бүлешә һәм улар әйтә: «Улар ҡаты эҙәрлекләүҙәргә дусар булды. Мосолман булмаһалар ҙа, кеше бураҡ улар туғандарыбыҙ». Шул рәүешле улар насибы булғандарҙың исламға килеүенә сәбәпсе була, сөнки кешене мәрхәмәт ярҙамында еңел генә еңеп була.

❁

Бөгөн миллиондарса иман ҡәрҙәшебеҙ йорттарын ташлап китергә һәм ҡасаҡтар лагерҙарында ғүмерҙәрен һаҡлап ҡалыр өсөн көрәшергә мәжбүр. Уларҙың ауыр хәлен күреп, ишетеп, беҙ борсолабыҙ. Әммә был мөһажирҙар өсөн беҙ ансарҙар[31] булырға һәләтлеме? Мәрхәмәт – борсолоу һәм выждан ғазабы ғына түгел! Хәҡиҡи мәрхәмәт – ул үҙеңдә булғаны менән йомарт рәүештә йәберләнгәндәр менән бүлешеү…

❁

Ғәҙеллек, мәрхәмәт, шәфҡәт кеүек гүзәл нигеҙгә ҡоролған мосолмандар төҙөгән Ғосманлылар дәүләте хатта ки мосолман булмағандарҙы ла үҙенә тартып тора.

Европалағы инквизиция судының аяуһыҙ эҙәрлекләүҙәренән ҡасҡандар Ғосманлылар дәүләтендә тыныс төйәк таба, сөнки бында уларҙы «вәдиәтуллаһ» рәүешендә, йәғни Аллаһ был илгә аманат итеп тапшырған кешеләр итеп ҡабул итәләр.

Польшала хатта шулай тип әйтәләр: «Ғосманлыларҙың аттары Висланан һыу эсмәй тороп, был ил азатлыҡ һәм бойондороҡһоҙлоҡ яулай алмаясаҡ».

Немец реформисы, протестантизмға нигеҙ һалыусы Мартин Лютер, христиан сиркәүенең логикаға һыймаған ғәҙелһеҙлегенә ҡаршы сыға. Ул әйтә: «Йә Раббым! Һинең илаһи ғәҙеллегең менән файҙаланыр өсөн, йәһәтерәк мосолмандарҙы килтер!»

❁

Ислам – кешенең яңынан тыуыуы. Кешенең фитрәтенә һалынған иң күркәм сифаттар исламда асыла, сәскә ата.

31. Ансарҙар – [Пәйғәмбәребеҙ с.ғ.с.] ярҙамсылары, ислам ҡабул иткән һәм Пәйғәмбәребеҙ Мөхәммәдтең (саллəллаһу ғələйһи үə сəллəм) сәхәбәләре булып киткән Мәҙинәнең Аус һәм Хазрадж ҡәбиләләренә ҡараған аҫаба халҡы.

Шуға ҡарамаҫтан, исламдың ҡайһы бер дошмандары заманыбыҙҙың бәләһе булған «террор»ҙы беҙҙең гүзәл динебеҙ менән бәйләй. Әммә террор и анархия аяуһыҙлыҡҡа нигеҙләнә, уны һайлаусылар юғары хистәр, күркәм холоҡтан йыраҡ. Ислам иһә, яла яғыуҙарына ҡарамаҫтан, үҙе барлыҡҡа килгәндән бирле терроръың бөтә төрҙәренә, анархияға, йәберләүҙәргә һәм ғәҙелһеҙлеккә ҡаршы һәм һәр ваҡыт кеше хоҡуғы һағында тора.

Ғаләмдәргә рәхмәт булараҡ ебәрелгән Пәйғәмбәребеҙҙең (саллəллаһу ғələйһи үə сəлləм) 23 йыл ғүмере тап кешеләргә, хайуандарға, үҫемлектәргә ҡарата ҡылынған террор менән көрәшеп үтә…

❁

Ислам кешеләргә ҡарата ғына түгел, бөтә мәхлүктәгә ҡарата йәберләүҙәргә ҡырҡа ҡаршы. Ул хайуандарға ҡарата аяуһыҙлыҡты тыя, хатта ағасты ла ҡаты итеп һелкетеүҙе ҡабул итмәй, сөнки ислам – мәрхәмәт, шәфҡәт, әҙәпле-лек һәм йомшаҡлыҡ дине. Ислам рухиәте әхлаҡлы, тотанаҡлы булыуҙы хуплай һәм барса көс ҡулланыуҙарҙың дошманы булып тора.

❁

Кешеләргә йөкмәтелгән бурыстарҙың береһе тере йән эйәләренә ҡағыла, сөнки Раббыбыҙ уларҙы беҙҙең өсөн бар ҡылған. Улар Аллаһтың Әл-Бәәри (Һәр нәмәне Үҙ Көҙрәте менән Булдырыусы) һәм әл-Мүсәууир (Һәр йән эйәһен ҡабатланмаҫ йөҙ-ҡиәфәт менән Бар итеүсе) Исемдәре сағылышы. Ғаләм китабын биҙәгән төрлө-төрлө йән эйәләре беҙгә аманат итеп тапшырылған. Бесәйҙәр, туҙһаларыбыҙ төбөндәге эттәр, ҡанаттары һынған ҡоштар... Беҙ уларҙың һәр береһенә миһырбанлы булырға, ас ҡалдырып бикләп йәки алдарына һыу ҙа ултыртмай ташлап китергә тейеш түгелбеҙ. Һәр мәхлүккә Аллаһтың мәрхәмәт күҙе менән бағыу лазым.

❁

Һәр цивилизация үҙенә хас кешене барлыҡҡа килтерә. Ислам цивилизацияһы тыуҙырған кешегә йөрәген бөтә барлыҡ өсөн мәрхәмәт төйәгенә әйләндереү лазым, сөнки ислам барлыҡ иман эйәләренә мәрхәмәт һәм шәфҡәт кеүек иң гүзәл сифаттарҙы күңеленә һала.

Аллаһ Илсеһе (саллəллаһу ғələйһи үə сəлləм) мәрхәмәте һәм шәфҡәте, бөтә йән эйәләрен ҡосоп, барса ғаләмдәрҙе үҙ эсенә ала. Бер заман ул шулай тип бойора:

«Йәнем ҡулында булған Аллаһ менән ант итеп әйтәм, һеҙ, бер-берегеҙгә мәрхәмәтле булмай тороп, Йәннәткә инә алмаясаҡһығыҙ».

Сәхәбәләр һорай:

«Йә Рәсүлүллаһ! Беҙ бөтәбеҙ ҙә мәрхәмәтле булырға тырышабыҙ».

Аллаһ Илсеһе (салләллаһу ғәләйһи үә сәлләм) әйтә:

«(Мин күҙ уңында тотҡан) мәрхәмәт – һеҙ аңлағанса, бер-берегеҙгә ҡарата булған мәрхәмәт кенә түгел. Киреһенсә, был мәрхәмәт бөтә барлыҡты, бөтә яратылмыштарҙы ҡосҡан мәрхәмәт!» (Хаким, IV, 185/7310).

❁

Хәҡиҡи мәрхәмәт, шәфҡәтлек һәм йомартлыҡ – кешенең үҙ ғаиләһенә, яҡындарына ҡылған яҡшылығы ғына түгел, ә яҡындарынан башлап, бөтә ғаләмдәргә рәхмәт булып килгән һөйөклө Пәйғәмбәребеҙ (салләллаһу ғәләйһи үә сәлләм) әйткәнсә, Раббыбыҙға сикһеҙ мөхәббәткә нигеҙләнгән «Уның бөтә яратылмыштарына» ҡарата мәрхәмәт һәм шәфҡәт.

❁

Аллаһ Илсеһе (салләллаһу ғәләйһи үә сәлләм), кешеләргә мәрхәмәтле һәм шәфҡәтле булған кеүек, хайуандарға һәм үсемлектәргә ҡарата ла шундай уҡ миһырбанлыҡ күрһәтә. Көсөктәрен ашатҡан этте ҡурҡытмау, оялағы ҡоштарҙы борсомау һәм йәш ботаҡтарҙы һис бер кәрәкһеҙгә һындырмау кеүек уның күп һанлы киҫәтеүҙәре - Йәнәбе Хаҡтың Үҙ мәхлүктәренә ҡарата мәрхәмәт күҙе менән ҡарауы кәүҙәләнеше.

❁

Бер заман Пәйғәмбәребеҙ (салләллаһу ғәләйһи үә сәлләм) янып бөткән ҡырмыҫҡа ояһын күрә. Был хәл уның йомшаҡ күңелен тетрәндерә. Ул, хафаланып, былай ти:

«Кем яндырған уны?! Һис кем, Ут Хужаһы Раббыбыҙҙан тыш, башҡаларҙы ут менән ғазапларға тейеш түгел!» (Ҡар. Әбү Дауыт, Йыһат, 112/2675).

❁

Икенсе юлы Пәйғәмбәребеҙ (салләллаһу ғәләйһи үә сәлләм) ихрам хәлендә Мәҙинәнән Мәккәгә юл тота. Усайя тип аталған ергә барып еткәс, ул күләгәлә йоҡлап ятҡан ғәҙәлде күреп ҡала. Пәйғәмбәребеҙ (салләллаһу ғәләйһи үә сәлләм) сәхәбәләрҙең береһенә, уны борсомаһындар өсөн, бөтәһе лә был тирәнән үтеп киткәнсе хайуан янында һаҡлап торорға ҡуша (ҡар. Муватта, Хадж, 79; Нәсаи, Хадж, 78).

❁

Раббыбыҙ Аллаһ, кешеләр файҙаланһын өсөн, бик күп йән эйәләрен бар ҡылған һәм уларҙың хоҡуҡтарын һаҡлауҙы илаһи имтихан иткән.

Аллаһ Илсеһе (салләллаһу ғәләйһи үә сәлләм) хәбәр итеүенсә, гонаһкәр ҡатын, сүллектә сарсауҙан йонсоған эттең ҡомдо ялағанын күргәс, ҡулында һауыты булмағанлыҡтан, ҡоҙоҡтан хайуанға ҡатаһы менән һыу алып эсерә. Шул бер миһырбанлығы өсөн, ул ярлыҡана һәм Йәннәткә лайыҡ була.

Бесәйен ас тотоп, уның үлеменә сәбәпсе булған бер ҡатын иһә, аяуһыҙлығы өсөн,[32] Йәһәннәмгә ташлана.

Бер нәмәне онотайыҡ: Раббыбыҙҙың ризалығы һәм асыуы ҡайһы саҡ ҙур булып күренгән, ҡайһы саҡ кескәй, ҡайһы саҡ уртаса күренгән ғәмәлдәребеҙгә йәшеренгән.

Шуға күрә бер генә изге ғәмәлде лә, бер генә гонаһты ла әһәмиәтһеҙ тип иҫәпләргә ярамай.

❁

Намыҫыбыҙ ҡушҡан төп бурысыбыҙ – Аллаһтың мәхлүктәренә ҡарата иғтибарлы, йомшаҡ булыу. Ҡулыбыҙҙан килгәнсә бәләгә ҡалған кешеләргә ярҙам иткән кеүек, бесәйҙәр, эттәр, ҡоштар һәм башҡаларға ла хәстәрлекле булыу зарур. Уларҙы һыу, ризыҡ менән тәьмин итергә онотмайыҡ.

Ғаләмдәргә рәхмәт булып килгән Пәйғәмбәребеҙ (салләллаһу ғәләйһи үә сәлләм) үҙен барса йән эйәләре өсөн яуаплы итеп тойған һәм мотлаҡ рәүештә хайуандарҙың хаҡын хаҡларға бойорған. Ғәскәре менән Мәккәне яулап алыу өсөн походҡа сыҡҡас, ул юлда балаларын имеҙеп ятҡан этте күрә. Аллаһ Илсеһе (салләллаһу ғәләйһи үә сәлләм), Сураканы (радыйаллаһу ғәнһү) этте һәм көсөктәрен һаҡларға ҡуйып, кешеләргә, хайуандарҙы борсомайынса, икенсе юл менән китергә әмер бирә.

Пәйғәмбәребеҙҙең (салләллаһу ғәләйһи үә сәлләм) тормошо ана шундай мәрхәмәт һәм шәфҡәт менән тулы була, һәм былар беҙгә, өммәтенә, күркәм үрнәк булып тора.

❁

Онотмайыҡ: барса йән эйәләре беҙгә аманат булараҡ тапшырылған. Ишек алдындағы бесәйҙәр һәм эттәр өсөн беҙ яуаплы, сөнки улар беҙҙең һымаҡ уҡ Аллаһ мәхлүктәре. Улар беҙҙең һымаҡ яратылыуы, ә беҙ улар һымаҡ уҡ яратылыуыбыҙ ҙа ихтимал ине бит…

❁

Иман эйәһе, тап кеше булып яратылғаны өсөн, Аллаһтың барса мәхлүктәренә мәрхәмәт, шәфҡәт, йомшаҡлыҡ, миһырбанлыҡ күрһәтергә тейеш.

32. Ҡар. Боҡари, Әнбийә, 54; Мөслим, Сәләм, 151-152.

Сәғәҙәт осоронда бер фәҡир ҡол көнлөк ризығы булған өс көлсәһен ас эткә ашата. Шундай ғәмәле менән ул, әйтерһең дә, әйтә: «Был мәхлүкте лә, мине лә Аллаһ бар ҡылған. Ул мине кеше итеп яралтҡан, тимәк мине уның өсөн яуаплы илткән…»

❁

Мөхтәрәм Фудәйл ибн Ияз әйткән:

«Әгәр Аллаһ ҡоло үҙе хужа булған тауыҡҡа ҡарата насар мөғәмәләлә булһа, бик күп изге ғәмәлдәр ҡылып, хәйрийә эштәре менән шөғөлләнһә лә, ул изге күңелле булып яҙылмаясаҡ».

❁

Хәкиҡи мәрхәмәткә эйә булған йөрәк һис бер кәрәкһеҙгә ҡырмыҫҡаны үлтерә лә, сәскәне өҙөп ала ла алмай.

❁

Фирдәүси «Шахнәмә»һендә әйтә:

«Ризығын ташыған ҡырмыҫҡаға ла зыян һалма! Ул – тере йән эйәһе. Ә тере йән эйәһе татлы һәм күңелгә хуш».

❁

Мөхтәрәм Баязит Бистами, рухи хикмәткә эйә булған солтан, бер заман, сәфәр ваҡытында тамаҡ ялғап алыр һәм аҙаҡ юлын дауам итер өсөн, ағас күләгәһендә туҡтай. Был урындан байтаҡ ара киткәс, ул биштәрендә ҡырмыҫҡаны күреп ҡала. «Мин Аллаһың был мәхлүген йортонан алыҫҡа алып киттем!» - тип уйлап, ул кире борола һәм бөжәкте үҙе ял иткән ағас төбөндә ҡалдырып китә[33].

❁

Хисап көнөндә кешеләр менән бергә башҡа йән эйәләре лә тереләсәк һәм ерҙә үҙҙәрен рәнйеткән кешеләрҙе яуапҡа тарттырасаҡ. Шуға күрә динебеҙҙә кешеләрҙе генә түгел, хайуандарҙы ла рәнйетеү тыйыла. Уларҙы кәрәгенән артыҡ эшләтеү ҙә рөхсәт ителмәй. Һәм хатта ки һис бер кәрәкһеҙгә йәш боҡтаҡтарҙы һындырыу ҙа хупланмай.

❁

Ғосманлылар дәүләте мосолмандары хәйрийә йәмғиәте төҙөй. Хатта ҡоштар ҙа уларҙың мәрхәмәте аҫтында була. Шуға барып етәләр: мәсеттәрҙең

33. Kuşeyrî, Risâle, s. 229; Sâdî, Bostan, s. 78.

диуарында улар өсөн оялар эшләйҙәр һәм яраланған күсмә ҡоштар тураһында хәстәрлек күргән хәйрийә ойошмалары фонды булдыралар.

❁

Ғосманлылар ҡылыс менән ғәләмәт ҙур территорияны ғына яулап алмай, улар йөрәктәрҙе лә яулап ала. Яңы ерҙәрҙе матди йәһәттән тәртипкә һалыу менән бергә рухи йәһәттән дә уларҙы тәртипкә һала. Уларҙың мөбәрәк ҡулдары менән кешеләргә генә түгел, хайуандарға, хатта үҫемлектәгә лә мәрхәмәт таратҡан цивилизация төҙөлә. Йәмғиәттә ҡәрҙәшлек нығына, мөхәббәт нигеҙендә йөрәктәр яҡыная. Байҙар һәм ярлылар, элита һәм крәҫтиәндәр араһында упҡын ятмай. Һәр кварталда етемдәр, тол ҡатындар тураһында хәстәрлек күрәләр.

Мөхәббәт һәм мәрхәмәт хөкөм һөргән шундай йәмғиәттә, әлбиттә, фажиғәләр, үҙ-үҙеңә ҡул һалыуҙар булмай…

❁

Кешелек тарихынан күрәбеҙ: һуғышырға ынтылғандар – емергән, ә йөрәктәрҙе яуларға теләгәндәр – төҙөгән, аяҡҡа баҫтырған. Улар йәберләнгән, хафаға ҡалған йөрәктәргә шифа булған. Улар астарҙы ризыҡландырған хәйрийә ашханаларынан тыш мохтаж йөрәктәрҙе рухи азыҡ менән тәьмин иткән дәрүиш төйәктәре лә төҙөгән. Тән бысрағынан арындырған мунсаларҙан тыш улар тапланған йөрәктәрҙе паклаған мәсеттәр һәм рухи мәктәптәр ҙә төҙөгән. Үҙҙәренән һуң улар күккә төбәлгән манаралар, ә күктәрҙә үҙҙәре тураһында яҡшы хәтирәләр ҡалдырған...

Изгелеккә ҡоролған ислам мәҙәниәтендә солтандар - Аллаһ ҡолдары һәм дуҫтары, ғәскәрҙәре игелек принциптарында ныҡ торған дәрүиштәр булған, һөнәрселәр ғәҙеллек принциптарына нигеҙләнгән «ахи» ҡәрҙәшлеге төҙөгән, байҙар йомарт һәм тыйнаҡ булған, фәкирҙәр иһә булғанына шөкөр иткән һәм үҙ бәҫен төшөрмәгән, ғалимдар – ихлас һәм изге күңелле, судьялар — мәрхәмәтле һәм ғәҙел, ирҙәр - һөйөүсән һәм тоғро, ҡатын-ҡыҙ – ғиффәтле һәм нескә күңелле. Юғары әҙәп хөкөм һөргән шундай йәмғиәттә, әлбиттә, психик һәм психологик тайпылыштар күҙәтелмәгән. Үрмәкүс ауы һымаҡ, мәрхәмәт һәм шәфҡәт таянысы булған хәйрийә фондтары менән уратып алынған илдә ниндәй сәбәп менән депрессия, күңел төшөнкөлөгө булһын инде?!

❁

Был йәһәттән Абдул-Мәжит I солтандың әсәһе Безмиәл Солтан төҙөгән фонд бик ҡыҙыҡлы. Был фонд эш урынында хеҙмәтсәндәр ватҡан йәки боҙған әйберҙәрҙең хаҡын түләр булған. Шул рәүешле хеҙмәтсәндәрҙең хоҡуҡтары

яҡланған, уларҙы әрләү, мыҫҡыл итеү, уларҙың бәҫен төшөрөү кеүек кире күренештәргә кәртә ҡуйылған.

Туҡтауһыҙ матди яҡты ҡайғыртҡан, үҙенең мәнфәғәттәрен генә уйлаған заманыбыҙ кешеһе шундай юғары рухи нескәлек, һиҙгерлек офоҡтарына күтәрелә аламы?

❁

Мосолмандар мәрхәмәтле элекке быуындар төҙөп ҡалдырған бик күп хәйрийә фондарынан әле булһа файҙа күрә. Ә беҙҙең ниндәй хеҙмәттәребеҙ ейәндәребеҙгә файҙа килтерер икән? Беҙҙән һуң мин-минлек, һауаланыу, яман ғәҙәттәр харабалары ҡалырмы? Әллә һоҡланғыс мәсеттәр, мәҙрәсәләр, мохтаждарға ярҙамға килергә әҙер булған хәйрийә фондары ҡалырмы?!

❁

Онотмайыҡ: заманыбыҙ мосолмандары – элекке быуындар төҙөгән изгелек, мәрхәмәт цивилизацияһын дауам итеүселәр, шуға күрә беҙҙең бурыс - улар һымаҡ уҡ, ҡулынан да, теленән дә, рухи халәтенән дә бөтә барлыҡ файҙа күргән «мәрхәмәт инсаны» булыу.

РУХИ ҮРҘӘРҘЕҢ ИҢ ЮҒАРЫ БАҪҠЫСЫ - ХЕҘМӘТ

Дин өсөн хеҙмәт һәм Аллаһ юлындағы тырышлыҡ – кешенең юғары намыҫ эйәһе булыуын сағылдырыусы иң күркәм көҙгө. Икенсе һүҙ менән әйтһәк, намыҫлылыҡтың визит карточкаһы.

❁

Аллаһ дуҫтары йәмғиәт өсөн үҙҙәрен һәр ваҡыт яуаплы итеп тоя, мохтаждар һәм йәберләнгәндәр тураһында хәстәрлек күрә. Мәҫәлән, солтан әүлиә Шаһ Нәҡшбәнд тәүге рухи үҫеш йылдарында ете йыл буйы сирлеләргә ярҙам итә, яралы хайуандарҙы дауалай, кешеләр йөрөгән юлдарҙы тәҙәрта. Үҙе әйтеүенсә, ошо хеҙмәте арҡаһында ул бөйөк рухи үҫеш кисерә.

Имандың тәүге емеше – мәрхәмәт. Мәрхәмәт күрһәтеү – ул дин юлындағы хеҙмәт һәм йомарт рәүештә булғаны менән бүлешеү. Дин юлындағы хеҙмәт һәм Аллаһ юлында тырышлыҡ күрһәтеү – Раббыбыҙ Үҙенең ҡолдарына йөкмәткән ғибәҙәт.

❁

Дин өсөн хеҙмәт һәм Аллаһ юлындағы тырышлыҡ - кешенең юғары намыҫ эйәһе булыуын сағылдырыусы иң күркәм көҙгө. Икенсе һүҙ менән әйтһәк, намыҫлылыҡтың визит карточкаһы.

❁

Сәғди Шәйех әйткән: «Дин юлындағы хеҙмәттең изгелеге – көслө һәм һау булып, рәхмәтле булып, көсһөҙҙәрҙең йөгөн күтәрешеү».

❁

Дин юлындағы хеҙмәт – Аллаһтың ризалығына ирешеү өсөн ғәйрәт итеү, мин-минлектән арынып, бөтә яратылмышҡа мәрхәмәт һәм эскерһеҙлек менән булышыу.

Бары тик Аллаһ ризалығы өсөн ҡылынған һәр бер ихлас, эскерһеҙ хеҙмәт - Раббыбыҙ менән осрашыу теләгенең ғәмәлдәге сағылышы.

❁

Мөхтәрәм Мәүләнә әйткән: «Кем хаж ҡылырға китә, Аллаһ Йорто Хужаһын эҙләргә тейеш. Әгәр ул Уны таһа, ул Ҡәғбәне теләһә ниндәй урында ла таба аласаҡ».

Йәғни һәр ваҡыт һәм һәр ерҙә Аллаһтың ризалығына ирешергә ынтылыу мөһим. Шундай ынтылыш менән янған йөрәк өсөн һәр урын, Ҡәғбә кеүек үк, рухи энергия сығанағына әүереләсәк.

❁

Нисә тере йән эйәһе булһа, Аллаһҡа юлдар ҙа шул саҡлы. Беҙҙе Раббыбыҙға илтеүсе шул юлдарҙы белеү һәм, уларҙан файҙа алыу өсөн, уяу йөрәк булыуы мөһим. Аятта әйтелә:

«Эй, мөьминдәр, гонаһ эшләп, Аллаһ ҡаршыһында яуап биреүҙән ҡурҡығыҙ. Уға яҡынлашырға юлдар эҙләгеҙ. Уның юлында йыһат ҡылығыҙ – бәхеткә ирешерһегеҙ!» (әл-Мәәидә (Табын), 35).

❁

Мөхтәрәм Муса Әфәнде әйтә торғайны:

«Намаҙ уҡыйым, ураҙа тотам, дини бурыстарымды үтәйем, тип, күптәр тыныслана. Әммә был ғына етерлек түгел, Аллаһтың әмерҙәрен үтәү, тыйғандарынан тыйылыу, уларға хөрмәт менән ҡарауҙан тыш Раббыбыҙҙың мәхлүктәренә мәрхәмәт менән ҡарау лазым. Быға дин юлындағы физакәрлек һәм ихлас хеҙмәт менән генә ирешергә мөмкин.

Аҡылы камил булған һәр мосолман дини ҡанундарҙы үтәү менән бергә исламға, йәмғиәткә һәм бөтә барлыҡҡа хеҙмәт итеүгә ынтылырға тейеш, сөнки һанап кителгәндәрҙең һәммәһе – Аллаһ Илсеһе (саллəллаһу ғələйһи үə сəллəм) Сөннәтенең бер өлөшө…»

❁

Ғүмәр (радыйаллаһу ғәнһү), хәлиф булғанда, төндәрен Мәҙинә урамдары буйлап йөрөй. Юғары яуаплылыҡ, дин юлындағы физакәрлектең сағылышы була ул: «Иҫән булһам, Аллаһ бойорһа, йыл буйы халыҡ араһында буласаҡмын. Кешеләрҙең бит һәммәһе нимәгәлер мохтаж, ә мин быны белмәүем ихтимал. Урындағы идара башлыҡтары уларҙың мохтажлыҡтарын миңә еткермәй, ә кешеләр миңә үҙҙәре килеп әйтә алмай.

Мин Дамаскка барасаҡмын һәм унда ике ай буласаҡмын.

Аҙаҡ Джәзираға китәсәкмен һәм унда ике айға буласаҡмын.

Аҙаҡ Египетҡа китәсәкмен һәм унда ике айға буласаҡмын.

Унан һуң Бәхрейнға китәсәкмен һәм унда ике айға буласаҡмын.

Аҙаҡ Куфаға китәсәкмен һәм унда ике айға буласаҡмын.

Аҙаҡ Басраға китәсәкмен һәм унда ике айға буласаҡмын.

Аллаһ менән ант итеп әйтәм, был гүзәл йыл буласаҡ!» (Табәри, Тарих, IV, 201-202).

❁

Үҙен дин юлындағы хеҙмәткә бағышлаған кеше йөрәге барып еткән һәр нәмәгә үҙен яуаплы итеп тоя.

Муса Әфәнде (рәхимәһулла), хатта үлем сире менән ятҡанда ла, шундай ынтылышта булды: «Их, әгәр ҙә ки көсөм булһа, ҡаланан ҡалаға йөрөр, ҡәрҙәштәремдең матди һәм рухи проблемаларын хәл итергә ярҙам итер инем!».

Ул мәрхәмәт һәм шәфҡәт ҡанаттарын барып етә алған һәр бер яралы йөрәккә, һәр бер йән эйәһенә һуҙыр ине.

Урта Азияға барыу мөмкинлеге тыуғас, оло йәшенә ҡарамаҫтан, ул шунда уҡталды.

Мосолман йөрәгенең, рухиәтенең күркәмлеген, ислам социаль ҡанундарының юғарылығын еткерергә ынтылып, ул Көньяҡ Африкаға ла, Европаға ла юл тотто.

Бер һүҙ менән әйткәндә, ул ғүмер буйы Ҡөрьәндә маҡталған «(Аллаһтың) яҡшы ҡоло» булырға ынтылып йәшәне, фани донъяла гүзәл эҙ ҡалдырҙы…

❁

Мосолманға иман ҡәрҙәшенә йылмайыу, уға сәләм биреү, кешеләргә ҡамасаулап ятҡан таштарҙы юлдан алыу, ситтәргә юл күрһәтеү, тормош ауырлыҡтарын күтәрә алмағандарға ярҙам итеү, ғилемһеҙҙәргә ғилем биреү, ғаиләһен хәләл ризыҡ менән тәьмин итеү, яҡындарын юғалтҡандарға булышыу, ҡайғыға батҡандарҙы йыуатыу, саҙаҡалар биреү, гүзәл үрнәк күрһәтеү, мәсеттәргә йөрөү зарур. Барса ошондай изге ғәмәлдәр – ғибәҙәт һәм дин юлындағы хеҙмәт.

❁

Пәйғәмбәребеҙ (салләллаһу ғәләйһи үә сәлләм), өммәте Аллаһ ризалығы өсөн ғәмәл ҡылыуҙа тырышлыҡ күрһәтһен, ваҡытын юҡҡа сарыф итмәһен өсөн, шундай нәсихәт биргән:

«Эй, минең өммәтем!

• *Бөгөн етемдең башынан һыйпаныңмы?*

• *Бөгөн ас кешене ашаттыңмы?*

• *Бөгөн ауырыу кешенең хәлен белдеңме?*

• *Бөгөн йыназала булдыңмы?»* (Ҡар. Мөслим, Фәдаилу әс-сәхәбә, 12).

Шул рәүешле ул мосолмандарҙың йыуаныс сығанағы булыуын, үҙ-ара кәңәшләшеп эш итеүен, дин юлындағы хеҙмәтен хуплаған.

❁

Раббыбыҙ Аллаһтың ризалығы ҡайһы саҡ ҙур бер ғәмәлгә йәшеренә, ҡайһы саҡ – кескәй, ә ҡайһы саҡ – уртаса. Ҡайһы саҡ фәкирҙең йөҙөндә йылмайыу тыуҙырған бәләкәй генә изгелек Уның ризалығын алыуға сәбәпсе була. Бер ҡолдоң ҡотолоуына кемдең доғаһы сәбәпсе икәнен беҙ белмәйбеҙ.

❁

«Һәр төндө - Ҡәҙер кисәһе, ә һәр осрағанды Хызыр тип бел» принцибына ярашлы кемдең доғаһы бәрәкәтендә теләктәребеҙ ҡабул булырын белмәйбеҙ. Шуға күрә бер нәмәне күҙ уңынан төшөрмәҫкә тейешбеҙ: кешеләр һанға һуҡмаған, хатта кәмһетеп ҡараған бик күп көсһөҙ кешеләр аша Аллаһ Тәғәлә мөғжизәһен индереүе ихтимал. Шуға күрә Аллаһтың шундай ҡолдарын эҙләү һәм уларҙың ихлас доғалары аша файҙа алырға тырышыу лазым.

❁

Аллаһтың ризалығын эҙләгән мөьмингә ҡайғылы кешеләр араһында булыу, мохтаждарға ярҙамға ашығыу зарур. Муса пәйғәмбәр (ғәләйһис-сәләм) бер заман былай тип ялбарған:

– Йә Раббым! Мин Һине ҡайҙан эҙләргә тейеш?

Аллаһ Тәғәлә уға әйткән:

– Мине йөрәктәре яралы кешеләр янында эҙлә! (Әбү Нуғайм, Хилйә, II, 364).

❁

Аллаһҡа яҡын булыу өсөн, яралы йөрәктәрҙе терелтеү һәм уларға мәңгелек сәғәҙәткә юл күрһәтеү лазым.

❁

Иң бөйөк еңеү — йөрәктәрҙе яулау. Үҙ йөрәген мәрхәмәт төйәгенә әйләндерә һәм рухиәте һарайында яралы йөрәктәрҙе һауыҡтыра алғандар бәхетле.

Бөйөк остаз Әмин Күләл үҙенең шәкерте Шаһ Нәҡшбәндкә шундай кәңәш биргән: «Йөрәктәрҙе яула, көсһөҙҙәргә хеҙмәт ит! Йөрәктәре яралы көсһөҙҙәрҙе яҡла! Улар башҡаларҙан бер нәмә лә алмаған кешеләр. Әммә уларҙың күбеһе хозурлыҡта, күндәмлектә, ғазапта. Шундай кешеләрҙе тап һәм уларға хеҙмәт ит!».

❁

Ҡәғбә Ғаләмдең рухи үҙәге булған кеүек, кеше тәненең үҙәге - Аллаһтың ҡарашы төбәлгән йөрәк. Раббыбыҙ Аллаһҡа яҡынайыуҙың иң ҡыҫҡа юлы – йөрәктәрҙе яулау, йыуатыу, бойоҡ йөҙҙәрҙе йылмайырға мәжбүр итеү, иң мөһиме – йөрәктәрҙе ғәфләт йоҡоһонан уятыу һәм уларҙы иман нуры менән йәнләндереү.

❁

Сәғди Шәйех әйткән:

«Фани нәмәгә эйә булыу – ниндәйҙер ҡиммәткә эйә түгел, Аллаһты танып белеү ҙә түгел. Хәҡиҡи һәләт һәм Аллаһты танып белеү – йөрәктәрҙе яулау».

❁

Шуны оноторға ярамай: проблемалары хәл ителгән кешенең генә йөрәген яулап була.

❁

Сәғди Шәйех әйткән:

«Улым, изгелек ҡыл! Ҡырағай хайуандарҙы ҡапҡан ҡороп аулайҙар, ә кешеләрҙең йөрәген мәрхәмәт менән яулайҙар».

❁

Мөхтәрәм Мәүләнә әйткән:

«Әгәр һин беҙҙе, беҙҙең ризалыҡты теләһәң, былар йөрәктәрҙе яулауға бәйле икәнлеген онотма! Ҡулыңда булғандың барыһын да бир һәм йөрәкте яула! Шул йөрәк ҡараңғы төндә ҡәбереңде яҡтыртһын!».

❁

Йәберләнгәндәрҙең, ғазап сиккәндәрҙең, мохтаждарҙың, фәҡирҙәрҙең доғаһына лайыҡ булыу – Әхирәттә бай хазинаға эйә булыу ул.

❁

Физакәрлегебеҙгә, дин юлындағы хеҙмәтебеҙгә ярашлы рәүештә, беҙҙең тормошобоҙ фани донъялағы ғүмеребеҙ тамамланғас та дауам итәсәк.

Сәғди Шәйех әйткән:

«Әгәр ҙә ки һин форма ғына икән, үлем килгәс, тәнең дә, исемең дә үләсәк. Әгәр ҙә ки киң күңелле һәм хеҙмәт кешеһе икәнһең, физакәрлек менән ҡылғандарың, һин яулаған йөрәктәр һаҡлана икән, тәнең үлгәс тә ғүмерең дауам итәсәк».

❁

Мөхтәрәм Әхмәд Кәсани әйткән:

«Ер донъяһы – хеҙмәт урыны, әхирәт – Аллаһҡа яҡынайыу урыны. Кешенең Аллаһҡа яҡынайыуы дин юлындағы хеҙмәтенә пропорциональ буласаҡ».

❁

Иртәгә әхирәттә көлә алыр өсөн, бөгөн күп йәш һәм тир түгеү лазым. Бер ни эшләмәйенсә, әжер-сауап көтөү – иҫәрлек.

Тырышлығыбыҙ шәм-сыраҡ булып иртәгә ҡәберебеҙҙе яҡтыртһын өсөн, был донъяла көндәре төн кеүек ҡараңғы, ғазаплы булғандарҙы эҙләргә, юл табырға тырышҡандарға юл күрһәтеп өлгөрөргә, мохтаждарға ярҙам итергә кәрәк...

❁

Хәҙистә әйтелә:

«Аллаһ ҡайһы бер кешеләрҙе башҡалар уларға мохтажлыҡтары менән килһен өсөн, уларҙың ихтыяждарын ҡәнәғәтләндерһен өсөн бар ҡылған. Улар Аллаһтың язаһынан имен булған кешеләр» (Хайсами, VIII, 192).

❁

Илаһи күҙәтеү аҫтында булыуын тойған, Аллаһты күреп торғандай, Уның Бөйөклөгө, Көҙрәте һәм өҫтөнә йөкмәтелгән бурыс, яуаплылыҡ ауырлығы алдында тетрәнеп йәш түккән иман эйәһе булырға тырышыу зарур...

Ҡул аҫтындағыларҙың матди һәм, бигерәк тә, рухи һыҙланыуҙарын тойған, өҫтөнә йөкмәтелгәндәрҙең ауырлығын тойған һәм был хеҙмәттә тир түккән, күҙ йәше түккән иман эйәһе булыу лазым...

Йәһәннәм утынан йыраҡ буласаҡ иманлылар сифаты ул былар.

❁

Аятта әйтелә:

«Аллаһ мөьминдәрҙең малдарын, йәндәрен (үҙҙәренә биреләсәк) Йәннәт биреп һатып алды…» (әт-Тәүбә, 111).

Был донъя – Аллаһ юлындағы хеҙмәткә ғүмереңде, милкеңде һәм, Раббыбыҙ бүләк итеп биргән бөтә ниғмәттәрҙе бағышлап, Йәннәт һатып алыу мөмкин булған баҙар.

Йәнәбе Хаҡ беҙҙең ҡәбергә барып ингәнсе үк уяныуыбыҙҙы һәм Йәннәт һатып алыу мөмкин булған баҙарҙа булыуыбыҙҙы төшөнөүебеҙҙе теләй...

❁

Ни өсөн пәйғәмбәрҙәр, сәхәбәләр, әүлиәләр илаһи хәҡиҡәттәр алдында тетрәнгән?

Ни өсөн улар, фани донъя рәхәтлектәренән ваз кисеп, физакәрлек менән үҙҙәрен тулыһынса Аллаһ дине юлына бағышлаған?

Ниндәйҙер етди ҡорбан килтермәйенсә, беҙ киләсәк тормошта нисек улар менән бергә булырға өмөтләнәбеҙ?

❁

Хеҙмәт һалмайынса, именлеккә ирешеү мөмкин түгел. Тырышлыҡ һалмаһаҡ, ниғмәттәр үҙенән-үҙе килмәйәсәк. Әйтәләр бит: «Рухи ярҙам – атайҙан, тырышлыҡ – улдан!». Йәғни рухи ярҙам ихлас рәүештә тырышлыҡ һалғандарға килә. Ҡыл да ҡыбырҙатмайынса ярҙам көтөү – орлоҡ сәсмәйенсә уңыш көтөү кеүек үк буш хыял.

❁

Аллаһтың рәхмәтенә, ризалығына ирешеү өсөн, Раббыбыҙҙы танып белеү өсөн, Аллаһ юлында физакәрлек күрһәтеү, исламға ярашлы намыҫ менән йәшәү лазым. Яфа-ғазаптар аша, ауырлыҡтар аша сабырлыҡ менән үтмәйенсә, тырышлыҡ һалмайынса, мәңгелек сәғәҙәткә, именлеккә өмөтләнеп булмай.

Пәйғәмбәребеҙ (салләллаһу ғәләйһи үә сәлләм), Аллаһтың язаһынан имен булыр өсөн, хатта ки ҡыҙы Фатимаға ла изге ғәмәлдәр ҡылыу зарур булыуы тураһында киҫәткән.

❁

Ваҡыт-ваҡыт диндән йыраҡ булған, аҙашҡан ҡайһы бер кешеләр әйтә: «Ә минең олатайым дини остаз булған, ә атайым хаж ҡылған...» Әммә хәҙистә әйтелгәнсә: *«...Ғәмәлдәре артҡа ҡалдырған кешене нәҫеленең шәжәрәһе генә алға сығара алмаҫ»* (Мөслим, Зикр, 38; Ибн Мәджә, Мүҡаддим, 17).

Бәндә ата-әсәһе ейгән ризыҡ менән туйына алмаған кеүек, мәңгелек ҡотолоуға юлды ла һәр кем үҙе ярырға тейеш.

❁

Раббыбыҙ Аллаһ әйтә:

«Һәр кемдең үҙе тапҡаны - үҙенә» (ән-Нәджм (Йондоҙ), 39).

❁

Аллаһ юлында бөтә көсөбөҙҙө һалып тырышыу, Раббыбыҙҙың ризалығын ҡаҙаныу мөмкинлегенә һөйөнөп, был фани донъяла арыу-талыуҙы онотоу зарур. Шундай тырышлыҡ һалған һүрәттә генә беҙ илаһи мәрхәмәткә өмөтләнә алабыҙ, юғиһә беҙ үҙебеҙҙе буш өмөттәр менән генә йыуатабыҙ.

❁

Мөхтәрәм Абдуллаһ Дәхләүи әйткән:

«Элекке остаздар уҡыусыларына дингә хеҙмәт итеүҙе йөкмәткән, сөнки был рухи үҫеш һәм илаһи әжер-сауаптар алыу сәбәбе».

❁

Дини хеҙмәттең рухи тәрбиә эшендәге әһәмиәте ифрат ҙур, сөнки ул нәфес теләктәренән арынырға һәм рухи һәләттәрҙе үҫтерергә ярҙам итә. Рухи ярҙам бары тик шундай хеҙмәт бәрәкәтендә генә килә.

Бурса ҡазыйы Мәхмүт дин юлындағы сабыр һәм баҫалҡы хеҙмәте сәбәпле мөхтәрәм Ғәзиз Мәхмүт Хоҙаи булып китә. Мөхтәрәм остазы Уфтада ҡушыуы буйынса, ул дәрүиштәр төйәген йыйыштыра һәм үҙенең бай кейемендә баҙарҙа бауыр һата.

❁

Аллаһ дуҫтары йәмғиәт өсөн һәр ваҡыт үҙҙәрен яуаплы тоя, йәберләнгәндәр һәм мохтаждар тураһында хәстәрлек күрә.

❁

Бер яҡтан, дин юлындағы хеҙмәт – башҡаларға ярҙам итеү мөмкинлеге, икенсе яҡтан, тырышлығыңа һәм ихласлығыңа ярашлы рухи кимәлеңде күтәреү мөмкинлеге. Шуға күрә алған файҙаң башҡаларға күрһәткән файҙаңдан күберәк.

❁

Мөхтәрәм Мәүләнә әйткән: «Ғибәҙәт ҡылып, мәрхәмәт ҡылып, бүләктәр биреп һәм башҡаларға хеҙмәт итеп яуланған күрә торған күңел күҙе һиңә бөтөнләй яңы төҫтәрҙе күрергә мөмкинлек бирәсәк. Ғәҙәти таштар урынына һин ынйылар һәм ҡиммәтле таштар күрәсәкһең. Ынйы нимә ул, һин үҙең йыһан юлы буйлап осҡан диңгеҙгә, ҡояшҡа әйләнәсәкһең».

Аллаһ юлындағы хеҙмәт – йөрәкте үрҙәргә күтәрә торған ғәҙәттән тыш юғары кимәл. Шундай хеҙмәттең рухи бөйөклөгөн аңлаған иман эйәһе уны ҡылыу сараһын да, мөмкинлеген дә таба белә.

❁

Ҡояш йылылыҡҡа һәм яҡтылыҡҡа мохтаж булғандарҙың үтенесен һәм доғаһын көтөп тормағандай, һиҙгер йөрәкле иман эйәләре лә кешеләрҙең ихтыяжын һүҙһеҙ ҙә аңлап тора.

❁

Мөьмингә, Аллаһ насип иткән һәр бер мөмкинлектән файҙаланып, Уның ризалығы өсөн ғәмәл ҡылырға ашығыу лазым. Ул аҡланыу юлдарын түгел, киреһенсә, хеҙмәт итеү мөмкинлеген эҙләргә тейеш, сөнки хеҙмәт – ул ниғмәт. Иманлы әҙәмде һәр ваҡыт шундай уйҙар борсорға тейеш: «Аллаһ миңә ниндәй мөмкинлектәр биргән һәм шул мөмкинлектәр бәрәкәтендә мин Аллаһ юлында нисек хеҙмәт итә алам?». Мөьмингә, яуаплылыҡ тойоп, кемгә булһа ла ярҙам итеү уйы менән яныу зарур.

❁

Ун дүрт быуат элек сәхәбәләр, ул замандың ауыр шарттарында исламға саҡырып дәғүәт ҡылыу өсөн, сүллектәр аша үтә. Улар, яза биреү әмерен генә көтөп торған йәлләттәрҙең ауыр һулышын тойоп, хакимдар алдына барып баҫа. Уларҙың физакәрлеге менән ҙур еңеүҙәр яулана һәм Атлантик океандан Ҡытайға тиклем һуҙылған дәүләт төҙөлә.

Уйлап ҡарайыҡ: әгәр сәхәбәләрҙә заманыбыҙға хас техника, бәйләнеш тоторо һәм матди мөмкинлектәр булһа, шул ҡәҙәр физакәр хеҙмәттәре менән улар ниндәй еңеүҙәр яулар ине икән...

❁

Хушлашыу хажында ҡатнашҡан 120 мең сәхәбәнең 20 меңе генә үҙ ватанында һуңғы төйәген тапҡан. Күпселеге, ул замандың ауыр шарттарында ҡала һәм ауылдарға йән өрөү, нәсихәт биреү, йыһат ҡылыу, йөрәктәрҙе йәнләндереү маҡсатында сәфәр ҡылған урындарында баҡыйлыҡҡа күскән.

Бөгөн беҙгә шаулы диңгеҙҙәр ҙә, үтеп сыҡҡыһыҙ тауҙар ҙа, бейек-бейек диуарҙар ҙа кәртә түгел. Йәберләнгәндәргә, рәнйетелгәндәргә, ярҙамсыһыҙ ҡалған иман ҡәрҙәштәребеҙгә, тура юлды таба алмай ҡаңғырып йөрөгәндәргә ислам тураһында хәбәр биреү өсөн нәфесебеҙҙән башҡа һис бер кәртә юҡ!

❁

Сәхәбәләрҙән үрнәк алһындар өсөн, Аллаһ Тәғәлә беҙгә уларҙы өлгө иткән. Дин юлындағы тырышлығыбыҙҙы иманы зәғиф булған хәҙерге заман йәмғиәте халәтенә ҡарап баһаларға һәм үҙ-үҙебеҙҙе тыныслandырырға тейеш түгелбеҙ. Халәтебеҙҙе сәхәбәләрҙең фиҙакәрлеге менән сағыштырыу һәм тырышлығыбыҙҙы арттырыу зарур.

❁

Әнәс ибн Малик (радыйаллаһу ғәнһү), сәхәбәләрҙең береһе, әйткән:

«Хаҡтыр, һеҙ үҙегеҙ өсөн сүп кенә кеүек күренгән ғәмәлдәр ҡылаһығыҙ, беҙ иһә Аллаһ Илсеһе (салләллаһу ғәләйһи үә сәлләм) заманында уларҙы ауыр гонаһ тип иҫәпләй инек!» (Бохари, Рикак, 32).

Йәғни иман эйәһе, рухи йәһәттән үҙен йәмғиәттең дөйөм кимәле менән сағыштырып, рухи кимәлен етерлек тип иҫәпләп хаталанмаҫҡа тейеш. Критерий итеп ул Аллаһ Илсеһен (салләллаһу ғәләйһи үә сәлләм) һәм уның сәхәбәләрен алырға тейеш.

❁

Беҙ – Пәйғәмбәребеҙ (салләллаһу ғәләйһи үә сәлләм) өммәте, унан һуң 1400 йыл үткәс был фани донъяға килдек. Беҙ уның сәхәбәләре булыу мөмкинлегенән мәхрүм. Әммә беҙ Ҡөрьәндә әйтелгәндәрҙең береһе була алабыҙ: «Мөһажирҙарҙан һәм әнсарҙарҙан, элек килгән һәм уларға эйәреүселәрҙән Аллаһ ҡәнәғәт ҡалды»[34], Ҡиәмәткә ҡәҙәр Мөхәммәт (салләллаһу ғәләйһи үә сәлләм) өммәтенең шундай мөмкинлеге һаҡланасаҡ.

Әгәр ҙә ки беҙ остаз-мөһажирҙарыбыҙ кеүек ялғандан хәкиҡәткә, яманлыҡтан яҡшылыҡҡа, мин-минлектән фиҙакәрлеккә күсә алһаҡ;

Әгәр беҙ, остаз – әнсарҙарыбыҙ кеүек, Аллаһ юлындағы хеҙмәткә бөтә көсөбөҙҙө туплай алһаҡ, булған ниғмәттәребеҙ менән йәберләнгән иман ҡәрҙәштәребеҙ менән йомарт рәүештә бүлешә алһаҡ;

Ул саҡта, Аллаһ бойорһа, беҙ сәхәбәләр эҙенән барған иман эйәләре иҫәбенән булырбыҙ.

❁

Пәйғәмбәребеҙ (салләллаһу ғәләйһи үә сәлләм) әйткән:

«Минең өммәтем ямғыр кеүек. Һәм уның башы яҡшыраҡмы, әллә аҙағымы икәнен белмәҫһең» (Тирмизи, Әҙәп, 81).

34. Ат-Тауба, 9/100.

Улайһа, шул бәрәкәтле ямғырҙың мәрхәмәт тамсыһы булыу – Ҡиәмәткә ҡәҙәр беҙҙең өсөн асыҡ булған сәғәҙәт һәм именлек ҡапҡаһы.

❁

Аллаһ Тәғәлә беҙгә үрнәк итеп бар ҡылған сәхәбәләр быуыны өсөн:

– Милек һәм тормош Аллаһ ризалығына ирешеү сараһы була.

– Улар иман тәмен тоя.

– Улар сикһеҙ мәрхәмәткә эйә була.

– Дин юлындағы хеҙмәт, тырышлыҡ, фиҙакәрлек асыл маҡсат була.

– Улар шәхесендә исламдың гүзәл сифаттары күренә.

– Аллаһ Илсеһенең (салләллаһу ғәләйһи үә сәлләм) халәтенә төрөнөү уларҙың асыл маҡсаты була.

– Исраф, һаранлыҡ, байлыҡ, убырлыҡ сәхәбәләр быуынына ят була, сөнки улар иртәгә төйәктәре ҡәберҙә буласағын яҡшы төшөнә.

❁

Сәхәбәләрҙе шундай мәсьәләләр генә борсой: «Аллаһ минән ризамы?Аллаһ Илсеһе (салләллаһу ғәләйһи үә сәлләм) Ҡиәмәт көнөндә миңә ҡәнәғәтһеҙлеген белдермәҫме? Хисап көнөндә мин уның янында була алырмынмы?»

Беҙ ҙә үҙебеҙҙән хисап алырға, һорарға тейеш:

«Аллаһ юлында саҙаҡа бирһәк, «Ah, минең милкем кәмене!» - тип үкенмәйбеҙме? Әллә күберәк бирә алғанға күңелебеҙҙә хозурлыҡ пәйҙә буламы? Аллаһ юлында тырышлыҡ күрһәткәндә арыйбыҙмы? Әллә көсөбөҙ еткән тиклем иман һоҡланыуы, фиҙакәрлек менән хеҙмәт итергә әҙербеҙме?»

❁

Сәхәбәләр иге-сиге булмаған фиҙакәрлек күрһәтә.

• Бәдр һуғышында улар шәһит китер өсөн ярыша. Улар Аллаһ һәм Уның Илсеһе (салләллаһу ғәләйһи үә сәлләм) өсөн үҙҙәренең ғүмерен ҡорбан итергә ант итә.

• Мәҙинәләге аслыҡ һәм хәүеф хөкөм һөргән мәлдәге Хәндәк алышында улар иҫ киткес фиҙакәрлек күрһәтә.

• Мосолман ғәскәренең башлыҡтары Мута алышына, шәһит китәсәктәрен белеп, байрамға барғандай ашҡынып бара.

• Исламға саҡырып дәғүәт ҡылыу һәм Аллаһ Ҡәләмен таратыу өсөн улар физакәрлек менән донъяның дүрт тарафына юл тота һәм берәү ҙә үҙ-үҙенә шундай һорау бирмәй: «Сүллектәр аша мин нисек үтермен? Мин ҡайҙан ризыҡ табырмын? Йәлләттәрҙән мине кем ҡотҡарыр?» Шундай бөйөк рухи юғарылыҡ менән улар мәңгелек еңеү яулай.

❁

Пәйғәмбәребеҙ (саллəллаһу ғələйһи үə сəллəм) сираһында сәхәбәләрҙең уға ант биреүе тураһында бәйән ителә.

Улар Аллаһ Илсеһенә (саллəллаһу ғələйһи үə сəллəм) Акабала ант итә.

Бәдрҙә улар шулай тип ант итә: «Йә Рәсүлүллаһ! Әгәр һин диңгеҙгә инһәң, беҙ ҙә һинең арттан инәсәкбеҙ!».

Өхөттә Пәйғәмбәребеҙҙең (саллəллаһу ғələйһи үə сəллəм) борсоулы йөҙөн күргәс, улар шәһит китергә ант итә.

Хоҙайбиәлә улар уға тулыһынса буйһоноуҙарын белдерә: «Беҙ һин ниәт ҡылғанға тоғро булырға ант итәбеҙ, йә Аллаһ Илсеһе (саллəллаһу ғələйһи үə сəллəм)!».

Беҙгә лә, сәхәбәләр үрнәгенә эйәреп, улар һымаҡ Пәйғәмбәребеҙгә (саллəллаһу ғələйһи үə сəллəм) биргән антыбыҙға тоғро булыу зарур. Тоғролоғобоҙҙо Аллаһ юлындағы ғибәҙәттәребеҙ, итәғәтлелегебеҙ, йомартлығыбыҙ, физакәрлегебеҙ менән нығытыу зарур.

❁

Бәшир ибн Хасасиййә (радыйаллаһу ғәнһү) тапшыра:

«Мин Аллаһ Илсеһенә (саллəллаһу ғələйһи үə сəллəм) уға ант биреү өсөн килдем. Ул Аллаһының Берлегенә һәм Мөхәммәд пәйғәмбәрҙең рәсүллегенә шәһәдә килтереүемде, намаҙ ҡылыуымды, зәкәт түләүемде, исламға ярашлы хаж ҡылыуымды, Рамаҙан айында ураҙа тотоуымды һәм Аллаһ юлында йыһат ҡылыуымды талап итте. Быға яуап итеп мин әйттем:

«Йә Рәсүлүллаһ! Аллаһ менән ант итеп әйтәм, икеһенә – йыһат һәм саҙаҡаға - минең көсөм етмәҫ. Кешеләр, йыһаттан йыраҡ булған һәр кемгә Аллаһ асыулана, тиҙәр. Һуғыш яланына барһам, үлемдән ҡурҡып ҡасырмын, тип ҡурҡам. Саҙаҡаға килгәндә, милкем ҙур булмаған һарыҡ көтөүенән һәм тиҫтәләгән дөйәнән ғибәрәт. Улар ғаиләмдең йәшәү сығанағы, шулай уҡ беҙ улар ярҙамында ризыҡланабыҙ».

Шул саҡ Аллаһ Илсеһе (саллəллаһу ғələйһи үə сəллəм) ҡулымды алды, уны ҡыҫты һәм һорау бирҙе:

«Йыһат юҡ, саҙаҡа юҡ, улайһа һин нисек Йәннәткә инмәксе булаһың?!»

Мин шунда уҡ әйттем:

«Йә Рәсүлүллаһ! Мин ант итәм» һәм Рәсүлүллаһ ҡуйған бөтә шарттар менән килешеп ант бирҙем» (Әхмәд, V, 224).

❁

Ҡөрьән йәберләүҙәргә һәм ғәҙелһеҙлеккә ҡаршы көрәште «йыһат» тип атай.

Йыһат «һуғыш» төшөнсәһенән күпкә киң. Йыһат ҡылыу зарурлығы мосолмандарҙың әле етди хәрби көсө булмаған, һуғыш тураһында һүҙ ҙә булмаған Мәккә дәүерендә үк төшөрөлөүе бының ныҡлы бер дәлиле булып тора. Раббыбыҙ әйтә:

«Бер миҙгелгә лә кәферҙәргә бил бирмә һәм шуның менән (Ҡөрьән менән) уларға ҡаршы булдыра алғансы ҡаты көрәш (йыһат ҡыл)!» (әл-Фурҡан (Яҡшыны ямандан айырыусы Китап), 52).

Мәккә дәүерендә иман эйәләре яһилдарҙың йәберләүҙәренә ҡаршы тора. Берҙән-бер ҡаршы тороу сараһы ислам шәхесе, ислам характеры, йәғни Ҡөрьән хәҡиҡәте, күркәм холоҡ, ғәҙеллек, бер һүҙ менән әйткәндә, хәҡиҡи кешеләклелек була. Бер Аллаһҡа инанып, улар бөйөк сабырлыҡ һәм ныҡышмалылыҡ менән йыһат ҡыла.

❁

Йыһат ҡылыу ҡылыс тотоп алышыуҙы ғына күҙ уңында тотмай. Ҡылыс – ихтыяж тыуғанда файҙаланыла торған тимер киҫәге генә. Йыһат ты ниндәйҙер территорияны яулап алыу өсөн ҡан түгеү тип аңларға кәрәкмәй. Йыһаттың маҡсаты – йәберләнәндәргә ярҙамға барыу һәм тура юлды табыу өсөн етәкселек көткәндәрҙең йөрәктәрен яулау.

❁

Асыл маҡсат – исламдың күркәмлеге менән йөрәктәрҙе яулау. Яңы территорияларҙа исламдың мәңгелеккә нығынып ҡалыуының төп сәбәбе лә шунда. Мосолмандарҙың еңеүҙәре ялтлап балҡып һүнә, онотола торған еңеүҙәр түгел, улар мәңгелеккә ҡала.

Яуланған күп ерҙәрҙең халҡы мосолмандары ҡыуанып ҡаршы ала. Сүриәлә, Анатолияла, Балканда, Боснияла һәм башҡа урындарҙа ислам ғәскәрҙәре халыҡты йәбер-золомдан азат итә, шуға күрә ислам унда нығына.

❁

Ҡөрьән талап иткән йыһат:

• Түге нәүбәттә иман эйәһенең йөрәк именлеген Ҡөрьән һәм Сөннәт энергияһы, рухиәте менән ҡайтанан яңыртыу.

• Мөьминдең Аллаһ юлында милке, мөмкин булған саралары менән ғәҙеллектең, яҡшылыҡтың еңеүе өсөн тырышлығы.

• Исламдың йөҙө, таратыусылары булған мөсолмандарҙы тәрбиәләү, Ҡөрьәнде һәм Сөннәтте өйрәнгән Дарүл-Арҡам һәм Әсхәб әс-Суффа кеүек институттарҙы булдырыу, тергеҙеү.

• Донъяның төрлө мөйөштәрендә булып, тура юлға әйҙәүселәр булыу.

• Ислам буйынса йәшәү һәм башҡаларҙың да ислам буйынса йәшәүе өсөн вәғәздәрҙе, китаптарҙы, төрлө сараларҙы файҙаланыу.

• Ислам һәм кешеләр араһында булған кәртәләрҙе, фетнәләрҙе, йәберләүҙәрҙе юҡ итеү өсөн тырышлыҡ һалыу.

❁

Бөгөн төрлө яҡлап исламға һөжүм яһала. Әхирәт тураһында хәтергә төшөргән һәм ғәҙеллеккә саҡырған берҙән-бер дин булғанға күрә, ялғанды хуп күргәндәр һәр уңайлы мәлде файҙаланып уға һөжүм итә. Уларға ҡаршы тороу өсөн, иман эйәләре исламдың киләсәге өсөн үҙҙәрен яуаплы итеп тойорға һәм был юлда тырышлыҡ күрһәтергә тейеш.

❁

Әгәр ҙә ки беҙ бөгөн ислам бәрәкәте менән бүләкләнәбеҙ икән, уның сәбәбе – дәғүәт ҡылыу өсөн үҙҙәрен яуаплы итеп тойған, башҡаларҙың да тура юлға баҫыуына сәбәпсе булыуҙы ниәт итеп алыҫ-алыҫ яҡтарға юл тотҡан сәхәбәләр һәм, изге ғәмәлдәр ҡылып, уларҙың үрнәгенә эйәргән ата-бабаларыбыҙ.

Әгәр ҙә ки улар тырышлыҡ, физакәрлек күрһәтмәһә, тыныс ҡына донъялары, баҡсалары менән мәшғүл булһа, беҙ иман бәрәкәтенән мәхрүм ҡалыр инек.

Шуға күрә беҙгә лә пакланырҙай, тура юлға баҫырға лайыҡлы булырҙай кешеләр хаҡында уйлау, уларҙы ҡайғыртыу зарур. Кешеләрҙе, йәмғиәттәрҙе ислам ниғмәтенән мәхрүм итмәҫ өсөн, үҙеңде генә аяп ултырыуҙан ҡасырға, физакәрлектән ҡурҡмаҫҡа кәрәк.

Әхирәтебеҙҙе, хисаплама биреү зарурлығын да уйлау лазым - тәрбиәләүгә, тура юлға баҫыуҙарына өлөш индергәндәр өсөн әжер-сауаптарҙы, Аллаһ бойорһа, унда мотлаҡ аласаҡбыҙ. Шулай уҡ хәкиҡәткә эйә булырға теләгәндәрҙе ярҙамсыһыҙ ҡалдырған өсөн яза ла барлығын онотмайыҡ.

Бөгөн етди рәүештә динебеҙгә хеҙмәтебеҙ тураһында уйланыу мөһим. Еңеүҙәре менән дан ҡаҙанған сәхәбәләр, ата-бабаларыбыҙ физакәрлеге менән сағыштырғанда беҙҙең тырышлығыбыҙ ниндәй кимәлдә? Халәтебеҙҙә, ғаиләбеҙҙәге мөнәсәбәттәрҙә, хеҙмәтебеҙҙә Раббыбыҙ Аллаһ һөйгән ихласлыҡ, тәҡүәлек, мәрхәмәтлелек бармы?

❁

Ислам ниғмәте, 1400 йыллыҡ ғазап-яфалы юл үтеп, беҙгә тапшырылған. Һәм беҙҙең изге бурысыбыҙ – шундай уҡ физакәрлек, нескәлек менән ул аманатты киләһе быуынға тапшырыу. Был йәһәттән, яҡшылыҡ һәм ғәҙеллектең еңеүе өсөн, заманыбыҙ уғата ҙур тырышлыҡ талап итә. Әгәр ҙә ки машина быраҡҡа батһа, тура юлдан этеүгә ҡарағанда һикәлтәле юлдан барыусы күберәк көс сарыф итергә тейеш бит.

Шуны ла иҫтә тотоу лазым: бындай мөһим мәлдә хатта бәләкәй баланың тырышлығы ла мөһим булыуы бар. Икенсе яҡтан, ябай булмаған ошо заманда бурысын үтәмәй ситтә тороусының ғәйебе күпкә ауырая.

Йәштәр, ялғанды пропагандалаусы телепрограммалар, интернет-публикациялар, телевидение һәм киң мәғлүмәт саралары кеүек төрлө факторҙар йоғонтоһонда булғанда, кешелек, нәфесенә эйәреп, ағым ыңғайына йөҙгәндә, иман көсһөҙләнгән хәҙерге донъяла бәләкәй генә тырышлыҡ өсөн дә оло-ғара әжер-сауаптарға лайыҡ булырға мөмкин, ә кескәй генә илке-халҡылыҡ бөйөк бәләләргә сәбәпсе булыуы ихтимал...

❁

Раббыбыҙ Аллаһ ауыр замандарҙа һәм ауыр шарттарҙа ҡылынған хәйриә эштәренә, физакәрлеккә айырым әжер-сауаптар бирә. Заралы шарттарҙа хеҙмәт иткәндәргә төрлө ташламалар ҡаралған кеүек, Аллаһ та дин юлындағы физакәрлек өсөн әжер-сауаптарҙы күпкә арттыра.

Аятта әйтелә:

«…(Кәферҙәрҙе) еңеп, (Мәккәне) алғанға ҡәҙәр (дин юлында мал) сарыф иткән һәм һуғышҡан кеше менән еңеүҙән һуң сарыф итеп һуғышҡан кеше тиң булмаҫ…» (әл-Хәдид (Тимер), 10).

❁

Сәхәбәләр ауыр замандарҙа исламда йәшәп, исламды йәшәтеү өсөн тырышлыҡ һалған кеүек, беҙҙең Ҡиәмәт алды заманы ауырлыҡтары осоронда оло физакәрлек күрһәткәндәргә лә Аллаһ сәхәбәләр ирешкән әжер-сауаптарҙы бирәсәк.

Исламдың күтәрелеүе ғазапһыҙ булмаған кеүек, Ҡиәмәттең кесе һәм ҙур билдәләре инде күренә башлаған беҙҙең заманда, үҙен аямаған, үҙен фиҙа ҡылған сәхәбәләрҙе иҫтә тотоп, беҙ ҙә Аллаһ юлындағы тырышлығыбыҙҙы арттырырға тейешбеҙ. Ошо юлыбыҙҙағы осраған ауырлыҡтарҙы, яфаларҙы нәфесебеҙҙе тәрбиәләү, паклау сараһы итеп ҡарарға тейешбеҙ.

❁

Үткән яһилиәт заманында сәхәбәләр Ҡытайға, Сәмәрҡәндҡа, Кайруанға юл тота. Улар исламдың рәхмәтен, уның мәрхәмәт елен донъяның кеше йәшәгән күп урындарына алып барып еткерә. Сәхәбәләр, сәфәрҙәренең ауырлығына ла, хәүефле булыуына ла зарланмайынса, ялҡауланмайынса юлға сыға һәм теләктәренә ирешә.

Бөгөн донъя йәнә яһилиәт осоронда йәшәй. Кешеләр Әхирәт ҡурҡыныстарын иҫкә төшөрмәйенсә көн итергә теләй. Был заманда беҙҙең өҫтә үҙенә башҡа бер яуаплылыҡ.

Ул шунан ғибәрәт:

– Төрлө саралар ярҙамында дин юлында ҡаҡшамаҫлыҡ ныҡлыҡ менән торған Ҡөрьән, Сөннәт әһелдәрен тәрбиәләү.

– Аллаһтың ерҙәге шаһиттары, йәғни ислам вәкилдәре булған тәҡүәле заттарҙы тәрбиәләү.

– Ҡиәмәт Көнөндә Аллаһ Илсеһе (саллəллаһу ғələйһи үə сəллəм) йылмайып ҡарарлыҡ тоғро өммәт тәрбиәләү.

– Пәйғәмбәребеҙҙең (саллəллаһу ғələйһи үə сəллəм) Хушлашыу хөтбәһендә: «…(Гонаһтар ҡылып,) мине оялырға мәжбүр итмәгеҙ!..» тигән әмеренә ихлас буйһонған йөрәктәр тәрбиәләү.

❁

Пәйғәмбәребеҙгә (саллəллаһу ғələйһи үə сəллəм) Аллаһ юлында таштар аталар, уға ватанын ташлап китергә тура килә, аслыҡтан ыҙалағанда, эсенә таш бәйләп йөрөгән мәлдәре лә була. Әммә ул төшөнкөлөккә бирелмәйенсә арымай-талмай дәғүәт ҡылыуын дауам итә. Пәйғәмбәребеҙ (саллəллаһу ғələйһи үə сəллəм): «Ошо ағас төбөндә бер өс көн ял итәйем, бер аҙнаға ял алайым, миңә әлегә килмәй тороғоҙ», - тип әйтмәй, үҙенә бер генә көн дә ял бирмәй. Ул ғибәҙәт ҡылып, Аллаһты зекер итеп, дәғүәт ҡылып, нәсихәт биреп күңеленә хозурлыҡ таба.

❁

Ялҡаулыҡтың ниндәй ауыр эҙемтәләргә килтереүен өммәте белһен өсөн, Пәйғәмбәребеҙ (салләллаһу ғәләйһи үә сәлләм) шулай итеп доға ҡылған:

«Йәә Аллаһ! Мин хәлһеҙлектән, ялҡаулыҡтан, ҡурҡаҡлыҡтан, артыҡ ҡартлыҡтан һәм һаранлыҡтан Һиңә һыйынам. Тормош һәм үлем үәсүәсәләренән Һиңә һыйынам» (Мөслим, Зикр, 50).

❁

Раббыбыҙ Аллаһ әйтә:

«…Үҙ ҡулдарығыҙ менән үҙегеҙҙе ҡурҡыныс язаға ташламағыҙ!» (әл-Баҡара (Һыйыр), 195). Ул киҫәтергә теләй: «Фани донъяға әсир булып һәм уның матурлыҡтары, ялғаны, уңайлыҡтары менән мауығып, фәҡирлектән ҡурҡып йәки Минең ризалығымды ҡаҙанырға мөмкинлек булғанда, ниндәйҙер үҙегеҙҙең мәнфәғәттәрегеҙҙе ҡайғыртып, ғәмһеҙлеккә батмағыҙ! Юғиһә һеҙҙең киләсәк тормошоғоҙ хәүеф аҫтында ҡаласаҡ!».

❁

Аллаһ Илсеһенең (салләллаһу ғәләйһи үә сәлләм) яҡын туғаны булған мөхтәрәм Әбү Әйүб әл-Әнсари Константинополгә походта ике тапҡыр ҡатнаша һәм, 80 йәшен үткәс, уның янында шәһит китә. «Аллаһ диненә беҙ етерлек хеҙмәт иттек инде, ситкә китәйек, башҡалар йыһат ҡылһын», - тип әйтмәй ул. Һуңғы һулышына тиклем иман һоҡланыуы менән Пәйғәмбәребеҙҙең (салләллаһу ғәләйһи үә сәлләм) дәғүәтен, иманға саҡырыуын кешелерҙең йөрәгенә алып барып еткерергә тырыша.

Пәйғәмбәребеҙҙең (салләллаһу ғәләйһи үә сәлләм) тормошо сәхәбәләр өсөн үрнәк, һабаҡ була, улар уның әхлағы менән әхлаҡланалар. Икенсе һүҙ менән әйткәндә, улар һуңғы һулыштарына тиклем Аллаһ Илсеһенең (салләллаһу ғәләйһи үә сәлләм) тоғро шәкерттәре булып ҡалалар һәм үҙҙәрен аямай исламға хеҙмәт итәләр.

❁

Мөхтәрәм Әбү Хәсән Хараҡани әйткән:

«Иң бөйөк мөғжизә – арыу-талыуҙы белмәйенсә, Аллаһ яратылмыштарына хеҙмәт итеү».

❁

Аллаһ юлындағы хеҙмәт – ваҡытлыса булған мауығыу түгел. Ул һуңғы һулышыңа тиклем һөйөү һәм физакәрлек менән ҡылыу зарур булған бурыс.

❁

Дин өсөн хеҙмәт – пәйғәмбәрҙәр һәм салих заттар ҙур әһәиәт биргән изге ғәмәл. Был бөйөк заттар үҙҙәренең хеҙмәтен сирләгәндә һәм үлергә ятҡанда ла ҡалдырмай.

Фани донъялағы ғазап-яфаһыҙ мәңгелек бәхеткә ирешеп булмай. Был донъя – ял урыны түгел. Камил мөьминдең ялы ҡолашала башлана.

❁

Мөхтәрәм Әбү Хатим әйткән:

«Ҡәрҙәшем! Әгәр һин дүрт эшеңде дүрт ергә ҡалдырһаң, Йәннәткә инерһең:

• Йоҡоно – ҡәбергә,

• Маҡтаныуҙы – Мизанға,

• Ғәмһеҙлекте – Сиратҡа,

• Нәфес әүәҫлектәрен – Йәннәткә».

❁

Бөгөн беҙ рухи янғын эсендә. Күпме балаларыбыҙ утта янып үлде, күпме бәхетһеҙ кеше, күпме бәхетһеҙ быуын! Уларға ярҙам кәрәк.

Мосолман быларҙың һәммәһен күреп, ситкә китә һәм шулай тип әйтә аламы: «Миңә ял итергә ваҡыт». Әллә ул, намыҫы һәм иманы талап иткәнсә, ҡулынан килгәнсә фиҙакәрлек күрһәтергә тейеш түгелме?

Сәхәбәләр тап шулай эш иткән. Донъя рәхәтлектәрен ситкә ҡуйып, дәғүәт ҡылыу маҡсаты менән улар бөтә донъяны урап сыҡҡан. Ә үҙебеҙ тураһында беҙ нимә әйтә алабыҙ?

❁

«Аллаһ ризалығы өсөн мин етерлек хеҙмәт иттем! Инде миңә етеп торор!» - тип, тыныс күңел менән әйтә алабыҙмы?! Беҙ нисаб, йәғни зәкәт биреү өсөн тейешле булған мөлкәт кимәлен беләбеҙ. Әгәр бәндәнең, билдәле миҡдарҙа матди байлығы булып, ул уның ҡырҡтан бер өлөшөн саҙаҡа итеп бирә икән, зәкәт бурысын түләгән булып иҫәпләнә. Әммә ул Раббыбыҙ Аллаһ бүләк итеп биргән барса ниғмәттәрҙең, айырыуса имандың хаҡын түләп бөтә аламы? Уның бит минималь кимәле юҡ. Был бурысты ғүмерең буйы, тырышлығыңды арттыра барып Аллаһ юлында хеҙмәт иткән һүрәттә генә бер ни тиклем ҡаплатыраға мөмкин.

❁

Бер заман Аллаһ Илсеһе (салләллаһу ғәләйһи үә сәлләм) сәхәбәләренең береһе тау юлы буйлап китеп бара. Юлында уға сылтырап ағып ятҡан бик күп шишмәләр осрай. Был ерҙәр күңеленә хуш килә һәм ул әйтә:

«Мин, кешеләрҙе ҡалдырып, ошо үҙәндә йәшәргә теләр инем. Әммә Аллаһ Илсеһенең (салләллаһу ғәләйһи үә сәлләм) рөхсәтенән башҡа мин быны эшләмәйәсәкмен». Аҙаҡ ул Пәғәмбәребеҙгә (салләллаһу ғәләйһи үә сәлләм) үҙенең теләге тураһында һөйләп бирә.

Аллаһ Илсеһе (салләллаһу ғәләйһи үә сәлләм) уға былай тип белдерә:

«Быны эшләмә! Һеҙҙең өсөн, өйөндә ултырып, етмеш йыл буйы намаҙ ҡылыуға ҡарағанда, Аллаһ юлында тырышып хеҙмәт итеү ҙурыраҡ изгелек. Аллаһ һеҙҙе ғәфү итеп, Йәннәткә индереүен теләмәйһегеҙме ни? Улайһа, Уның юлындағы йыһатҡа сығығыҙ. Кем Аллаһ юлында ваҡытлыса ғына булһа ла, дөйәне һауыуға киткән ваҡыт арауығында булһа ла тырышлыҡ күрһәтә, ул мотлаҡ Йәннәткә инәсәк» (Тирмизи, Фадаилу әл-джихад, 17).

❁

Раббыбыҙ Аллаһ дин юлында беҙҙе артыҡ көсәнеп хеҙмәт итергә мәжбүр итмәй. Әммә хәлебеҙҙән килгәнсә беҙ хеҙмәт итергә бурыслы[35].

❁

Һәр бер Аллаһ ҡолона үҙенә тәҡдир ителгән мөмкинлектәргә һәм һәләттәргә ярашлы һынау бирелә. Мөмкинлектәре һәм һәләттәре артҡан һайын, кешенең яуаплылығы ла арта.

❁

Аллаһҡа хеҙмәтебеҙ һәм дин юлындағы тырышлығыбыҙ кимәлен үҙ-үҙебеҙгә һорауҙар биреп анализлайыҡ:

– Намаҙыбыҙ һәм изге ғәмәлдәребеҙ халәте Раббыбыҙҙың ризалығына ирешерлек кимәлдәме?

– Тәҡүәлегебеҙ илаһи асыуҙан араларлыҡмы?

– Сират күперен үтерлек физакәрлек күрһәтәбеҙме?

– Мизанда йөҙөбөҙ яҡты булһын өсөн, изге ғәмәлдәребеҙ етерлекме?

– Йәннәт әһелдәре ғәмәлдәрен ҡылып йәшәйбеҙме?

35. Ҡар. әл-Баҡара, 286.

– Ике донъяһын да кәферлек һәм гонаһтар утында яндырғандар тураһында беҙгә һорау биргәс, шулай тип әйтә алырбыҙмы: «Йәә Раббым! Мин ҡулымдан килгәндең барыһын да эшләнем…»?

❁

Йәнәбе Хаҡ әйтә:

يَا اَيُّهَا الَّذِينَ اٰمَنُوا اِنْ تَنْصُرُوا اللّٰهَ يَنْصُرْكُمْ وَيُثَبِّتْ اَقْدَامَكُمْ

«Һәй, иман килтергән кешеләр! Әгәр һеҙ, Аллаһҡа буйһоноп, ярҙам итһәгеҙ, Ул да һеҙгә ярҙам итер һәм теҙ быуындарығыҙҙы нығытыр» (Мөхәммәд, 7).

Шуға күрә, әгәр беҙ һуңғы һулышыбыҙҙа ла иман ныҡлығын теләһәк, ҡулыбыҙҙан килгәнсә, Аллаһ диненә ярҙамға ашығырға тейешбеҙ.

❁

Раббыбыҙ Аллаһ әйтә:

فَاِذَا فَرَغْتَ فَانْصَبْ . وَاِلٰى رَبِّكَ فَارْغَبْ

«Бер эште тамам итеүгә үк, икенсеһен башларға тырыш. Һәр ғәмәлеңдә ихластан бары тик Аллаһыңа бағышла!» (әл-Инширах (Асылыу), 7-8).

❁

Мөхтәрәм Әбү Бәкер (радыйаллаһу ғәнһү) әйткән:

«Әгәр ниндәйҙер бәрәкәтте ҡулыңдан ысҡындырһаң, уны эләктереп ҡалырға тырыш, әгәр эләктереп алһаң, тағы ла яҡшыраҡ итеп эшләргә тырыш!».

❁

Мүғәҙ ибн Джәбәл (радыйаллаһу ғәнһү) улына шундай кәңәш биргән:

«Улым! Иманлы әҙәмгә ҡылған ике изге ғәмәле араһында үлеү лазым. Йәғни мөьмин ниндәйҙер изге ғәмәл ҡылғанда, араһында яман ғәмәл ҡылмайынса, икенсе бер ғәмәл ҡылырға ниәте булырға тейеш».

❁

Кеше ни тиклем генә ас булмаһын, ике-өс туҫтаҡтан артыҡ ашай алмай. Бынан һуң уның алдына ниндәй генә тәмле ризыҡтар ҡуйма, туҡ көйө ул уларҙы ашай алмаясаҡ. Был фани донъя ләззәттәре лә тап шундай. Әммә мәңгелек донъя нығмәттәренән туйыу мөмкин түгел. Шул сәбәпле Аллаһ юлын-

дағы тырышлыҡтарҙың ләззәтен татыған мөьмин ҡылған изге ғәмәлдәрен бер ваҡытта ла етерлек тип иҫәпләмәйәсәк.

Хәҙистә әмер ителә:

«Мөьмин, төйәге Йәннәт булмай тороп, ҡолағы ишеткән бер генә изге ғәмәлдән дә ҡәнәғәт булмаясаҡ» (Тирмизи, Ғилем, 19/2686).

❁

Иман эйәһенең Аллаһҡа мөхәббәте артҡан һайын, Уның юлындағы физакәрлеге лә арта. Уның өсөн ауырлыҡтар – рәхмәткә, ғазаптар шатлыҡҡа әүерелә.

❁

Мәғрифәтуллаһҡа эйә булған йөрәктәр өсөн Аллаһ юлындағы һәр хеҙмәт арыу-талсығыу түгел, ә хозурлыҡҡа эйә булыуға сәбәп.

❁

Физакәрлектән рухи ләззәт алыу йөрәк үҫешен талап итә. Нәфес һәм был донъя теләктәре өйрөлтмәгенә батҡан кешеләр өсөн физакәрлек бик ауыр бирелә.

Табук походына әҙерлек барғанда, йөрәктәре хәстәле монафиҡтар кире пропаганда алып бара: «Был эҫелә яуға баралармы ни!».

Әммә Раббыбыҙ Аллаһ физакәрлектән тайшанғандарҙы киҫәтә: «…Тамуҡ уты бынан да хәтәр эҫе буласаҡ!..» (әт-Тәүбә, 81).

❁

Әйҙәгеҙ, Табук һуғышы тураһында фекер йөрөтөп ҡарайыҡ.

Бер яҡтан, Раббыбыҙҙың һәм Уның Илсеһенең (салләллаһу ғәләйһи үә сәлләм) үҙен Аллаһ юлында ҡорбан итергә әҙер булғандарға рәхмәте…

Икенсе яҡтан, ғафилдарға ҡарата Аллаһтың янауы, киҫәтеүе һәм язаһы!

Шулай булғас, Аллаһ юлында тырышлыҡ күрһәтмәһәк, беҙҙең хәлебеҙ ниндәй булыр?

Бер нәмәне онотмау лазым: беҙҙең һәммәбеҙ Табук походында ҡатнаша. Шул уҡ ваҡытта һуңғы һулышыбыҙға тиклем Аллаһ юлында ҡылған ғәмәлдәребеҙгә ҙур әһәмиәт бирмәҫкә, кескәй генә нәмәгә ҡараған һымаҡ ҡарарға тейешбеҙ.

❁

Уңыш - Аллаһтан. Бары тик Ул ғына уны бүләк итә ала.

Онотмайыҡ, Аллаһ юлында тырышлыҡ һалып та, уңыш ҡаҙанмаһаҡ, беҙҙең өҫтә яуаплылыҡ юҡ. Әммә ләкин, мөмкинлегебеҙ була тороп, һис бер ғәмәл ҡылмаһаҡ, яуап тоторға тура киләсәк.

❁

Түҙемлек менән исламға хеҙмәт итеү, сәбәп итеү һәм һөҙөмтәһен Аллаһтан көтөү – мөһиндең бурысы. Тырышлыҡ күрһәтеп, маҡсатыбыҙға ирешә алмаһаҡ та, мөмкин булғанды ҡылып, өҫтөбөҙҙән яуаплылыҡты төшөргән өсөн, Аллаһҡа хәмде-ҫәнәләр әйтеү зарур.

❁

Изге ғәмәлдәр ҡылырға ниәтләгәндә, төшөнкөлөккә бирелмәү, эштең уңышлы булыуына шикләнмәү лазым. Аллаһ насип итһә, бөтөнләй өмөтһеҙ тойолған эштәр ҙә уңышлы тамамлана. Ул хатта ҡаты таштар араһынан гәлсәр шарлауыҡтарҙы ағырға мәжбүр итмәйме ни? Ул теләһә, янған утты рауза баҡсаһына әйләндерә. Әгәр Ул теләһә, бөтөнләй мөмкин булмаған нәмә лә тормошҡа аша.

Бер һүҙ менән әйткәндә, мосолман һис ҡасан төшөнкөлөккә бирелергә тейеш түгел, ул оптимист булырға тейеш.

❁

Үҙенең һүлпәнлеген, ялҡаулығын аҡлап, өмөтһөҙлөккә бирелеп әйтеүселәр бар: «Ни эшләйем һуң, минең һәләтем юҡ, заманалар ауыр, бер кем дә миңә килмәй!», Раббыбыҙ Аллаһ ундайҙарға, таш диуарҙан инжир үҫтереп, емешләндереп, ғаләм китабынан хикмәтле һабаҡ бирә.

❁

Мөхтәрәм Мәүләнә әйткән:

«Ҡараңғылыҡ ни тиклем генә тәрән булмаһын, уны яҡтыртыр өсөн бер шырпы етә!».

❁

Ислам юлындағы хеҙмәттең ҡиммәте уны ҡылыу өсөн һалынған физакәрлеккә бәйле.

❁

Аллаһҡа хеҙмәт юлына баҫҡандарҙың ризығы – сабырлыҡ, ә таяныстары – Йәнәбе Хаҡ. Бындай хеҙмәттең төп уңыш асҡысы – сабырлыҡ һәм ныҡышмалылыҡ.

Бүләк итеп бирелгән бәрәкәттәр һәм мөмкинлектәргә ҡарамаҫтан, төрлө сәбәптәр табып, үҙ уңайлыҡтарын уйлап, Аллаһ юлында хеҙмәт итмәгәндәр ҡыҫыр ҡалған емеш ағасы кеүек.

❁

Мин-минлектән арына алмағандар дин юлында хеҙмәт итә алмай. Кем шундай хеҙмәттән тайшана, рухи үҫештән мәхрүм ҡала.

❁

Хикмәт эйәләре әйтә:

«Кешеләрҙең өс төрө Аллаһтан йыраҡ:

• Үҙ уңайлыҡтарын уйлап, хеҙмәттән баш тартыусылар.

• Артыҡ хис-тойғо нескәлеге ғазап-яфалар күренешен күтәрә алмауға һылтанып аҡланыусылар: «Мин быны күтәрә алмайым!».

• Залимдарға һәм ғафилдарға теләктәш булыусылар».

❁

Аллаһ юлындағы ихлас хеҙмәттең бөйөк сере бар. Раббыбыҙ - үҙ диненә хеҙмәт итеүселәрҙе һәм ҡолдарының бәләләренә хафаланыусыларҙы бәләләрҙән аралаусы. Әммә үҙ мәнфәғәттәрен һәм проблемаларын ғына ҡайғыртыусы эгоистарҙы Ул шул бәләләре менән яңғыҙ ҡалдыра.

❁

Аллаһ ризалығы өсөн сикһеҙ ҡыйынлыҡтар диңгеҙенә сумырға йөрьәт итмәгәндәр бер көн килеп үҙҙәре кескәй генә күләүеккә батыуҙары ихтимал.

❁

Ислам юлындағы мөхәббәтһеҙ һәм мәрхәмәтһеҙ хеҙмәт йөрәктәрҙе генә яралай.

❁

Ислам юлындағы нескәлекһеҙ, әҙәпһеҙ, әхлаҡһыҙ хеҙмәт изгелек булыуҙан туҡтай һәм кәмселеккә әйләнә, сөнки бәндә ярҙам итергә маташҡан кешеләрҙең күңелен яралай.

❁

Абдуллаһ ибн Мүнәзил әйткән:

«Дин юлы хеҙмәтендәге тәрбиәлелек хеҙмәттең үҙенән юғары».

Рухи энергиянан мәхрүм килеш дин юлында хеҙмәт итеү сүллеккә түгелгән бер биҙрә һыуға тиң. Ҡоро ергә сәселгән орлоҡ ҡыр сысҡанына ризыҡ ҡына була ала. Саф күңел менән сәселгән хеҙмәт емештәре – буласаҡ чинарҙар.

❁

Раббыбыҙ Аллаһ дин юлындағы хеҙмәтебеҙгә ихласлығыбыҙға ярашлы бәрәкәт бирә. Ихлас йөрәктән ҡылынған хеҙмәт һис ҡасан бушҡа булмай.

❁

Хеҙмәт ихласлығына лайыҡ булыу – Аллаһтың ҡолона бүләк итеп биргән бөйөк бәрәкәте. Иманлы әҙәмгә уның ҡиммәтен белеү һәм, рәхмәтле булып, саф күңел менән хеҙмәт юлында тырышлыҡ күрһәтеү зарур. Был ниғмәттең теләһә ниндәй мәлдә тартып алыныуы ихтималлығын ул онотмаҫҡа тейеш.

❁

Муса әфәнде әйткән:

«Дин юлында хеҙмәт иткән кешегә рухи йәһәттән үҫеү лазым. Лайыҡлы рәүештә йөрәген Раббыһына тапшырып, ул үҙенең ҡоллоҡ бурысын ихласлыҡ, әҙәплелек һәм күндәмлек менән үтәргә тейеш.

Юғиһә, әгәр дин юлында хеҙмәт иткән кешеләр тейешле рухиәт һәм алымдарҙы һаҡлай алмаһа, рухи йәһәттән үҫешмәһә, уларҙың хеҙмәте рухи донъяһына зыян ғына һалаҫаҡ… Ниәттәренең зәғифлеге сәбәпле, улар Аллаһтың ярҙамынан мәхрүм ҡаласаҡ».

❁

Үҙеңдең «мин»еңде һәм дәғүәләреңде күтәрергә маташыу – яман шеш һымаҡ, дин хеҙмәте юлындағы сир улар. Әгәр кеше шундай хеҙмәт менән мәшғүл икән, ул үҙ «мин»ен мөхәббәткә һәм энтузиазмға алмаштырырға тейеш.

❁

Муса Әфәнде (рәхимәһуллаһ) әйткән:

«Беҙҙең маҡсат – хеҙмәт, әммә рядовой булып!».

❁

Дин юлындағы хеҙмәтте етәкләүсе, үрнәк күрһәтер өсөн, ҡул аҫтындағыларға ҡарағанда егәрлерәк булырға тейеш.

❁

Дин юлында хеҙмәт итеүселәр фарман биреп кенә ултырмаҫҡа, ә башҡаларҙы дәртләндереп, улар менән бергә хеҙмәт итергә тейештәр. Эшкә шәхсән

үҙҙәре егелмәйенсә, әмер бирәп кенә ултырырға ниәтләгәндәр эштең асылын аңламай.

❁

Дин юлындағы хеҙмәтте дистанцион идара итеү пульты аша атҡарыу мөмкин түгел. Эш башында тороусыларға физакәрлек һәм һәр эштә алда булыу лазым.

❁

Пәйғәмбәребеҙ (салләллаһу ғәләйһи үә сәлләм) әйткән: *«Халыҡ араһындағыларҙың иң яҡшыһы – уға хеҙмәт итеүсе…»* (Дайләми, Мүснәд, II, 324).

Йәғни дин юлындағы ниндәйҙер хеҙмәт өлкәһен етәкләүсе ситтән ярҙам көтөп торорға түгел, ә үҙе ярҙам күрһәтергә ынтылып торорға тейеш.

❁

Пәйғәмбәребеҙҙең (салләллаһу ғәләйһи үә сәлләм) тәүлектәге бөтә 24 сәғәте Раббыбыҙҙың әмеренә буйһоноп һәм өммәтенә хеҙмәт итеп үтә. Ул Суффа һәм башҡа сәхәбәләрҙең остазы була, йәғни йәне-тәне менән башҡаларға ярҙам итеү уның ғәҙәти халәтенә әйләнә. Ул Кубала һәм Мәҙинәлә үҙенең мәсетен төҙөгәндә башҡалар һымаҡ уҡ таш ташый.

Уға:

«Ташымағыҙ, һеҙҙең өсөн беҙ ташырбыҙ!» - тиҙәр, ә ул былай тип яуап бирә:

«Һеҙ Аллаһҡа минән күберәк мохтаж түгелһегеҙ» һәм эшен дауам итә. (Ҡар. Самхуди, I, 333).

❁

Мөхтәрәм Әбү Бәкер (радыйаллаһу ғәнһү) хәлиф булғас, уның тәрбиәһендәге етем ҡыҙҙар әйтә: «Әбү Бәкер хәлиф булды, ул хәҙер беҙҙең хайуандарҙы һауа алмай инде, ә беҙҙең быға көсөбөҙ етмәй, беҙҙең бер кемебеҙ ҙә юҡ …»

Әммә мөхтәрәм Әбү Бәкер (радыйаллаһу ғәнһү) етемдәрҙе ҡалдырмай һәм элеккесә хайуандарҙы һауыуҙы дауам итә.

Раббыбыҙ Аллаһ Үҙенең юлында ихлас тырышлыҡ күрһәткәндәргә ана шундай бәрәкәт бирә, шуға күрә ҡыҫҡа ғына ваҡыт эсендә улар күп эш эшләп өлгөрә...

❁

Муса Әфәнде (рәхимәһуллаһ) әйткән:

«Ниндәйҙер ҙур эш менән мәшғүл булған өсөн генә бәләкәй ғәмәлдәрҙе ҡалдырырға ярамай, сөнки бәләкәй ғәмәлдәр, тупланып, ҙурға әйләнә…»

«Мөьмин изге ғәмәлдәренең ҙурмы йәки бәләкәйме булыуына иғтибар итмәҫкә, әммә, мөмкинлек булғанда, уларҙы ихлас ҡылырға тырышырға тейеш. Дин юлында оло эштәр менән мәшғүл булған күпселек кешеләр әһәмиәтheҙ күренгәндәренә иғтибар итмәй. Әммә ләкин Аллаһтың ризалығы нимәгә йәшеренгәнен һис кем белмәй».

МОСОЛМАН ӨММӘТЕНЕҢ ПРОБЛЕМАЛАРЫ ТУРАҺЫНДА БОРСОЛОУ

Беҙҙең бөйөк динебеҙ ислам мохтаждарға мөрәжәғәт итә: «Баш эйеүсән булмағыҙ, Аллаһтан башҡа һис кемдән һорамағыҙ!», ә мөмкинлектәре булғандарға әмер бирә: «Мохтаждарҙы эҙләгеҙ һәм уларға ярҙам итегеҙ!».

❁

Хәжәттәре тураһында хәбәр иткән мохтаждарҙы табыуы еңел. Әммә беҙгә баҫалҡылығы һәм ғиффәтлеге арҡаһында үҙ хәле тураһында һөйләмәгәндәрҙе лә табырға ынтылыу зарур.

Ҡояш яҡтыртмай тора алмағандай, юғары рухиәтле кеше лә башҡа кешеләрҙе һәм төрлө йән эйәләрен йәлләмәй, йомартлыҡ, киң күңеллелек күрһәтмәй булдыра алмай, йәберләнгәндәрҙең яфаларына ғәмһеҙ ҡалып, яҡшылыҡ таратмай тора алмай.

❁

Аллаһтың рәхмәтенә һәм мәрхәмәтенә лайыҡ булырға өмөтләнгән бер генә мөьмин дә ҡаты йөрәкле һәм мәрхәмәттән мәхрүм була алмай. Ул, кешеләрҙән башлап, ишетелгән һәм ишетелмәгән төрлө йән эйәләренең ярҙам һорап саҡырыуына битараф ҡала алмай. Иман эйәһе ҡулынан килгән яҡшылыҡты ҡылыуҙан баш тарта алмай.

❁

Хәҙистә әйтелә:

«Бер-береһенә мөхәббәттә һәм мәрхәмәттә иман эйәләре бер тән кеүек: әгәр ниндәйҙер бер ағза ауыртһа, тәндең ҡалған өлөшө лә ҡалтырана һәм йоҡоһонан яҙа» (Бохари, Әҙәп, 27; Мөслим, Бирр, 66).

❁

Мөьмин заманы өсөн үҙен яуаплы тойорға тейеш. Үҙенең фани көн итмешенән бигерәк уны мосолман өммәтенең тормошо, һаулығы һәм именлеге борсорға тейеш. Иман камиллығына ирешергә ынтылған мөьминдең йөрәге ана шундай хәстәрлек менән янырға тейеш.

Хәҙистә әйтелә:

«Мосолмандарҙың бәләләренә көймәгән уларҙан түгел» (Хаким, IV, 352; Хайсами, I, 87).

❁

«Мин улар урынында була, ә улар минең урында була алыр ине» тип, мохтаждарҙы һәм яфа сиккәндәрҙе күргән мөьмингә үҙенең халәтенә хисаплама яһау лазым.

❁

Ниндәйҙер бәләне күрһәк, уйларға тейешбеҙ: «Беҙ ҙә был бәләгә тарыуыбыҙ ихтимал ине».

Шундай уйҙа булып, беҙгә һаулыҡ һәм именлек бүләк иткән Аллаһҡа хәмде-ҫәнәләр әйтеү һәм рәхмәт йөҙөнән мохтаждарға ярҙамға ашығыу зарур.

❁

Хәҙистә әйтелә:

«[Иман] ҡәрҙәшенә үҙенә теләгәнде теләмәй тороп, [ысын-ысындан] һис кем иманға килмәҫ» (Бохари, Иман, 7).

❁

Һәр нәмәлә: ашыу-эсеү булһынмы, кейем-һалым булһынмы алтын уртылыҡты тотоу зарур. Табын артында ултырғанда, беҙ залимдар ҡул аҫтында аслыҡтан, һыуһауҙан интеккәндәр, айырыуса йәберләнгән иман ҡәрҙәштәребеҙ тураһында уйларға, шул рәүешле ризыҡ менән артыҡ мауығыуҙан үҙебеҙҙе араларға тейешбеҙ.

❁

Үҙ уңайлыҡтарыңды ғына уйлау һәм ғазап-яфа сиккәндәргә ҡарата битарафлыҡ физакәр һәм мәрхәмәтле булырға тейеш булған иман эйәһенә хас сифат түгел.

❁

Хаҡ иман эйәһе – альтруист. Ул белә: мәңгелек ҡотолоу башҡаларҙың да ҡотолоуы өсөн сәбәп булған хеҙмәттә һәм тырышлыҡта, сөнки Раббыбыҙ үҙ мәнфәғәтен генә ҡайғыртҡан тупаҫ, һауалы һәм һаран кешеләрҙе инҡар итә.

❁

Үҙебеҙгә теләмәгән бәләне иман ҡәрҙәштәребеҙгә лә теләмәү зарур. Ислам беҙҙән юғары намыҫ һәи физакәр йөрәк талап итә. Ул үҙебеҙҙе фәҡир, йәберләнгән, мохтаж һәм яңғыҙ кешеләр урынына ҡуйып ҡарарға әмер бирә.

❁

Әгәр ҡаршылағы бинала янғын сыҡһа һәм ярҙам һорап ҡысҡырған тауыштар ишетелһә, беҙ: «Сәйемде эсеп бөтәйемме икән, шунан һуң барайыммы икән»? - тип уйланып торорбоҙмо?! Хәҙер беҙ бөтә донъянан йөрәкте ярырлыҡ тауыштар ишетәбеҙ: «Беҙ яфа иленә әйләнеп ҡайттыҡ, беҙ бында сит-ят, яныбыҙҙа һис кем юҡ, беҙ янабыҙ, беҙ юҡҡа сығабыҙ!».

Йөрәге мәрхәмәт менән тулы мөьмин, тирә-йүндә шундай янғын ҡоторғанда, өнһөҙ ҡалырмы?

❁

Египетта аслыҡ башланғас, мөхтәрәм Йософҡа (ғәләйһис-сәләм) һорау бирәләр:

«Һеҙҙең ҡулығыҙҙа дәүләт ҡазнаһы. Ни өсөн һеҙ үҙегеҙҙе аслыҡ менән йонсотаһығыҙ?» Пәйғәмбәр шундай яуап бирә:

«Әгәр ҡарыным тулы булһа, астарҙың хәлен аңлай алмам, тип ҡурҡам!..»

❁

Раббыбыҙ Аллаһтың ҡушыуы буйынса, иман эйәләренең бер-береһе алдында бурыстары бар. Уның һөйөклө ҡоло булыу өсөн, иман ҡәрҙәшеңә ярҙамға ашығыу, уның ауырлыҡтарын бүлешеү, проблемаларын хәл итергә тырышыу, яҡшы һүҙ менән йыуатыу, исар ҡылыу, йәғни уның ихтыяждарын алға ҡуйыу һәм «тәүге нәүбәттә үҙем» урынына шулай тип әйтә белеү лазым: «Тәүге нәүбәттә минең иман ҡәрҙәшем».

❁

Раббыбыҙға итәғәтлек йөҙөнән уның мәхлүктәренә мәрхәмәт Аллаһтың ризалығына ирешеүгә сәбәп була, киреһенсә, мохтаждарҙың ярҙам һорауына битарафлыҡ бәндәне илаһи асыуға дусар итә.

❁

Сәғди Шәйех әйткән:

«Ишегеңә мохтаж килһә, хәжәтен үтә. Аллаһ һаҡлаһын, бәлки, берәй заман үҙең дә мохтаж булырһың һәм ишектән ишеккә йөрөрһөң!..

Һәм әгәр бөгөн һоранып ишектән ишеккә йөрөмәйһең икән, шуға рәхмәт йөҙөнән ишек төбөңә килгән мохтажға ярҙам ит!..»

❁

Хәҙистә әйтелә:

«Мөьмин икенсе мөьмингә ҡарата бинаның өлөштәре кеүек – бер өлөшө икенсеһен нығыта» (Бохари, Саләт, 88).

❁

Аллаһ ризалығы өсөн хәҡиҡи дуҫлыҡ ике кешеләге бер йөрәк һымаҡ. Раббыбыҙ Үҙе ҡәрҙәштәргә әйләндергән мөьминдәренең бер-береһен йыуған ике ҡул һымаҡ булыуын теләй, һәм Ул уларҙы бер-береһе өсөн яуаплы иткән:

– Көслөләрҙе – көсһөҙҙәр өсөн...

– Байҙарҙы – фәҡирҙәр өсөн…

– Тура юлдан алып барырға һәләтлеләрҙе – тура юлдан алып барыуҙарын көтөп торғандар өсөн.

Шул уҡ ваҡытта көслөләр, байҙар, ғилемлеләр мохтаж, фәҡир ҡәрҙәштәренең доғаларына мохтаж.

❁

Ата-бабаларыбыҙ, етемдәр һәм тол ҡатындар өсөн фондтар булдырып, йәмғиәттең көсһөҙ ағзалары тураһында хәстәрлек күргән.

Онотмайыҡ, бөгөн дә етемдәр, тол ҡатындар, фәҡирҙәр һәм йәберләнгәндәр беҙгә Аллаһ тарафынан тапшырылған аманат булып тора. Дин һәм ватан – шулай уҡ беҙҙең өсөн аманат!

Бер һүҙ менән әйткәндә, беҙ һәммәбеҙ бер-беребеҙгә аманат!..

❁

Был донъяға етем булып килгән Аллаһ Илсеһе (салләллаһу ғәләйһи үә сәлләм) өммәтенең етемдәре тураһында шәхсән үҙе хәстәрлек күргән. Киләһе хәҙисе уның бөтә кешелеккә иң гүзәл үрнәк, иң изге зат булып килеүен күрһәтеп тора:

«Мин һәр иман эйәһенә уның үҙенән дә яҡыныраҡмын. Әгәр берәү милек ҡалдырһа, ул вариҫтарына ҡалырға тейеш. Әммә кемдеңдер бурысы йәки хәстәрлек күреүселәре булмаған балалары ҡалһа, был хаҡта миңә мөрәжәғәт

итеү кәрәк. Минең бурысым – етемдәр тураһында хәстәрлек күреү» (Мөслим, Йома, 43; Ибн Мәджә, Мукаддима, 7).

❁

Урамға йолом итеп ташлаған ябыҡ балалар, наркотиктар ҡулланған йәштәр, балалар йорттарындағы етемдәр – улар беҙҙең балалар…

Күбеһе үҫмер генә булған яҙғы саф үҫентеләр кеүек был балалар йәмғиәттең сүплек ямдарында яйлап-яйлап тамыр ебәрә. Улар, мейеһен һәм йөрәк эшмәкәрлеген боҙоп, үпкәләрен ағыу менән яндыра, сиктәрҙе белмәйенсә, йәмғиәттең дошмандарына әйләнә, бандаларға ойоша.

Уларҙа дини тойғолар, әҙәп, патриотлыҡ тәрбиәләй алмаған өсөн яуаплылыҡ тоябыҙмы?

❁

Үҙ уңайлыҡтары тураһында ғына хәстәрлек күргән, исламды нығытыу, тәкүәле йәштәр тәрбиәләү өсөн һис бер көс һалмаған, бер һүҙ менән әйткәндә, Аллаһ юлында фиҙакәрлек күрһәтмәгән аңһыҙ кешенең Раббыбыҙҙың ризалығына һәм мәрхәмәтенә ирешергә өмөтләнеүе бушҡа ғына. Мәрхүм Нәжип Фазылдың шундай әйтеме бар ине: «Сәскә төймәһе тураһында хәстәрлек күрмәгән ағас – утын!» Был әйтем ғүмерҙәрен заяға уҙғарған ғафил кешеләрҙең халәтен бик яҡшы сағылдыра.

Ысынлап та, сәскә төймәләре, емеш биреү һәм уларҙы Аллаһ бында хужа иткән кешеләргә бүләк итеү тураһында хәстәрлек күрмәгән ағастан ни файҙа? Уны ҡырҡып, утын итеп яғырға ғына ҡала.

❁

Сәғди Шәйехтең шундай юлдары бар:

«Бер тән кеүек барса Әҙәм нәҫеле,

Бер тупраҡтан ул тән яралған.

Яра алһа тәндең өлөшө,

Бөтә тән тетрәй, бөтә тән – һыҙлауыҡ.

Бәндәне йәлләп йәшең түкмәһәң,

Ул – кеше, тип әйтерме халыҡ?»

❁

Пәйғәмбәребеҙ (салләллаһу ғәләйһи үә сәлләм), Мәккәнән Мәҙинәгә күскәс, мөһажирҙар һәм ансарҙар араһында ҡәрҙәшлек тураһында донъя та-

рихында тиңе булмаған килешеү төҙөй. Ансарҙар, милектәренә ревизия эшләгәндәй, уның ҡартыһын мөһажир ҡәрҙәштәренә бүлеп бирә. Икенсе яҡтан, йөрәктәре шөкөр хазинаһына оҡшаш булған мөһажирҙар, үҙҙәренең рухи юғарылығын күрһәтеп, тағы ла ҙурыраҡ изгелек менән яуап бирә һәм әйтә: «Милкең бәрәкәтле булһын, ҡәрҙәшем, һин миңә баҙарға юлды ғына күрһәт – шул етә!». Хәҡиҡи ҡәрҙәшлек бына ошо була ла инде.

❁

Беҙҙең юғары динебеҙ ислам фәкир-фоҡараға мөрәжәғәт итә: «Баш эймәгеҙ, Аллаһтан башҡа һис кемдән һорамағыҙ!», ә төрлө мөмкинлектәре булғандарға әмер бирә: «Мохтаждарҙы эҙләгеҙ һәм уларға ярҙам итегеҙ!».

❁

Хәжәттәре тураһында хәбәр иткән мохтаждарҙы табыуы еңел. Әммә беҙгә баҫалҡылығы һәм ғиффәтлеге арҡаһында үҙ хәле тураһында һөйләмәгәндәрҙе лә табырға ынтылыу зарур.

❁

Мөьмин, **«…Һин уларҙы (үҙҙәренә генә хас) ғәләмәттәренән танырһың…»** (әл-Баҡара (Һыйыр), 273) аятының серенә төшөнөп, мохтажлыҡтарын һөйләргә ҡыймағандарҙы танырҙай һиҙгерлеккә эйә булырға тейеш.

Икенсе һүҙ менән әйткәндә, мөьмин йөрәге, рухи рентген һымаҡ, мохтаждарҙың халәтен танырҙай һиҙгер булырға һәм уларҙың проблемалары тураһында борсолорға тейеш.

❁

Пәйғәмбәребеҙҙе (салләллаһу ғәләйһи үә сәлләм) ихлас һөйгәндәр һәм уның мәрхәмәтлелегенән һәм шәфҡәтлелегенән өлөш алғандар – ерҙә туңып ҡалтыранған ҡәрҙәштәре булғанда, йылына, күршеләре ас булғанда, туҡ килеш йоҡлай алмаған юғары рухиәтле заттар. Улар дин ҡәрҙәштәренең ғазабынан ғазаплана, золом күргәндәр, фәкирҙәр, етемдәр һәм яңғыҙҙар өсөн үҙҙәрен яуаплы тоя, йөрәктәрен мәрхәмәт төйәгенә әйләндерә.

❁

Мөхтәрәм Мәүләнә әйткән:

«Шәмс (рәхимәһуллаһ) мине ҡайһы бер нәмәләргә өйрәтте. Ул мине киҫәтте: «Әгәр ерҙә туңып барған кеше бар икән, һинең, Йәләлетдин, йылынырға хаҡың юҡ!». Мин ерҙә өшөгән кешеләр барлығын беләм, һәм инде миңә йылыныу юҡ!..»

Хаҡ мөьмин өсөн үҙ ҡарынын тултырыуға ҡарағанда башҡа бер кешене туйындырыу ҙурыраҡ ләззәт. Янында астар булғанда, ул ризыҡтың тәмен тоя алмай. Тирә-йүндәге бәхетһеҙҙәрҙең ғазаптарын еңеләйтмәй тороп, ул тыныслыҡ таба алмай.

❁

Мөьмин – мохтаждарҙы бәхетле итә алыуына шатланыусы кеше.

❁

Мөхтәрәм Мәүләнә әйткән:

«Экстаз хәленә ингәс, үҙ яраларыңа мазь эҙләмәһәң, һин сит яралар өсөн мазь булырһың!» («Диван кәбир»).

Бындай халәттең үрнәген, һис шикһеҙ, Аллаһ Илсеһе (саллəллаһу ғəләйһи үə сəлləм) үрнәгендә күрәбеҙ. Ҡатындарының үҙе лә шунда көн иткән бәрәкәтле йорттарына ғәнимәттәр һәм бүләктәр килтерәләр, әммә уларҙа бер нисә көн буйы ризыҡ булмай, айҙар буйы ут яғылмаған ваҡыттар була. Өс көн рәттән бойҙай икмәге бешерелеп, уны туйғансы ашаған саҡтар һис ҡасан булмай.

Бының сәбәбе шунда: Аллаһ Илсеһе (саллəллаһу ғəләйһи үə сəлləм) тәүге нәүбәттә мохтаж мосолмандар тураһында хәстәрлек күрә һәм әйтә: *«Тәүге нәүбәттә – минең өммәтем»*.

❁

Хикмәт эйәләре әйтә: *«Кеше тәне ашаған ризығы менән туйына, ә рухы – башҡаларҙы ашатҡаны менән…»*

Пәйғәмбәребеҙ (саллəллаһу ғəләйһи үə сəлləм), өммәтен ашатмай тороп, үҙе ашауҙы мөрхәтһенмәгән. Өммәте, аслыҡты тоймаҫ өсөн эсенә бер таш бәйләһә, ул икәүҙе бәйләгән. Ҡулына был фани донъяның ниғмәттәре инһә, бурыс түләрлек кенә алып ҡалып, йәһәтерәк таратып бөтмәйенсә тыныслanмаған.

Мохтаждарға ярҙам итеү, әйтерһең дә, уны үҙ бәләләренән йолоп ҡалған. Астарҙы ашатыу уға шундай рухи ләззәт биргән, хатта үҙенең дә ас булыуын онотҡандай булған.

❁

Ғаләмдәргә рәхмәт булып килгән Пәйғәмбәребеҙ (саллəллаһу ғəләйһи үə сəлləм) күңелдәрҙе яуларға ынтылған. Мәрхәмәт төйәгенә әйләнгән ихлас йөрәге менән ул өммәтен барса бәләләрҙән йолоп ҡалырға тырышҡан.

Ошо оло маҡсат өсөн, ул таштар менән бәргеләүгә лә, мыҫҡыллауҙарға лә түҙгән, күҙ йәштәрен, тирен түгеп, ғазап сигергә лә, төндәр буйы йоҡламаҫҡа ла әҙер булған.

❁

Мәрхәмәт төйәге булған Пәйғәмбәребеҙҙең (саллəллаһу ғələйһи үə сəллəм) йөрәгендә һәр саҡ:

– Аҙашып йөрөгəндəрҙе мәңгелек сәғәҙәткә алып барыу ынтылышы булған. Ул, йөрәктәрҙе яулап, уларҙы мәңгелек бәхетһеҙлектән аралап ҡалырға теләгән.

– Тура юлға баҫҡан, әммә әлегә тәкүәлек үрҙәренә күтәрелеүгә лайыҡ булмаған мосолмандарға нәсихәт бирергә ынтылған.

– Йөрәктәр араһына ҡаҡшамаҫ һөйөү күперҙәре һалырға, дошманлыҡты ҡәрҙәшлек тойғолары менән алмаштырырға тырышҡан.

– Залимдарҙың золомон туҡтатырға, йәберләнгəндəргə ярҙам итергə һəм дөрөҫлөктөң, ғəҙеллектең тантана итеүенə ирешергə ынтылған.

– Ғазап сиккəндəрҙе бəлəләрҙəн аралау сəбəпсеһе булыу теләге көслө булған. Айырым алғанда, өммәтендәге бәхетһеҙҙәр, етемдәр, сирлеләр, фәкирҙәр тураһында хәстәрлек күреүҙе үҙенең бурысы һанаған.

– Һис бер ғəйепһеҙ көйө йəш түккəндəр, ярҙамсыһыҙ ҡарттар, тол ҡатындар, ғазап-яфаларҙан ыңғырашҡандар, ҡанаттары һынғандар өсөн йыуаныс сығанағы булырға ынтылған...

❁

Йөрәге мәрхәмәт һəм шəфҡәт менəн тулы булған, өммәтен имен һəм бəхетле итеү ниәте менəн янған Пәйғәмбәребеҙҙең (саллəллаһу ғələйһи үə сəллəм) гүзəл сифаттарынан өлөш ала алдыҡмы? Мин-минлектән арынып, иман ҡәрҙәштәребеҙҙең проблемаларын хәл итергә тырышабыҙмы?

Пәйғәмбәребеҙгə (саллəллаһу ғələйһи үə сəллəм) мөхəббəтебеҙҙең асыҡ дəлиле – уның өммәтенə ҡарата булған мәрхәмәтлелегебеҙ һəм шəфҡәтлелегебеҙ.

❁

Бөгөн ислам донъяһының күп кенә регондары ҡайғы һəм матəм эсендə. Меңдәрсə мосолман үлə, йөҙҙәрсə меңе йорт-еpһеҙ, дарыуһыҙ ҡала, аслыҡтан интегə. Был улар өсөн генə түгел, беҙҙең өсөн дə һынау. Улар өсөн – түҙемлек, сабырлыҡ, ə беҙҙең өсөн – иман ҡəрҙəштəребеҙгə тоғролоҡ һынауы.

❁

Сәғди Шәйех әйткән:

«Дуҫтар ауыр минутта кәрәк. Ул саҡта ысын дуҫлыҡ асыҡ күренә. Юғиһә табын артында хатта дошмандар ҙа дуҫ һымаҡ тойола».

❁

Иман эйәләре бер-береһенә бурыслы. Мөьмин иман ҡәрҙәше хаҡында: «Минең унда ни эшем бар!» - тип әйтмәҫ. Иман ҡәрҙәшенең матди һәм рухи проблемалары – был уның да проблемаһы. Ҡәрҙәшенең аслығы – был уның да аслығы. Әгәр ҡәрҙәше тәҡүәлектән мәхрүм икән, был да уны уйландыра.

Раббыбыҙ Аллаһ хәбәр итеүенсә, бер-береһен Аллаһ ризалығы өсөн һөйгән иман ҡәрҙәштәре һис бер башҡа күләгә булмаған хәтәр ҡурҡыныс Хисап көнөндә Ғәреш күләгәһе аҫтында буласаҡ (Ҡар. Бохари, Аҙан, 36).

Әммә был дуҫлыҡты именлек ваҡытындағы сәй табыны артындағы дуҫлыҡ менән бутарға ярамай. Был ҡәрҙәшлек мосолмандарҙың ауыр заманда бер-береһенең матди һәм рухи проблемаларын хәл итергә әҙер тороуы.

❁

Һис бер донъяуи бүләк көтмәйенсә, иман ҡәрҙәштәребеҙҙе һөйөү, имен саҡта – шатлыҡтарын, ҡыйын саҡта ҡайғыларын бүлешеү һәр ваҡыт мөһим булһа ла, ислам донъяһы ауырлыҡтар кисергән хәҙерге заманда был бигерәк тә бөйөк изге ғәмәл булып тора.

❁

Миссионерҙар, мосолмандар бер-береһенән ситләшкән, көсһеҙ булған регионда ҙа, барса матди һәм рухи мөмкинлектәрен туплап, ҡыҙыу эш алып бара. Улар, юғары белем алыуға студенттарға стипендиялар бүлеп, Африкала миссионерлыҡ эше менән шөғөлләнеү өсөн уларҙан йөкләмә ала. Шул рәүешле улар өммәтебеҙҙең бер өлөшөн айырып алырға тырыша.

Бөгөн донъяның төрлө мөйөштәренән ярҙам һорап ҡысҡырған тауыштар ишетелә. Улар беҙгә мөрәжәғәт итә: «Ҡайҙа һеҙ? Ни өсөн һеҙ бында килмәйһегеҙ? Һеҙ бөгөн килһәгеҙ ҙә, беҙ шат булыр инек! Зинһар, беҙҙе онотмағыҙ!..»

❁

Беҙҙең регионда ла, исламдың башҡа урындарында ла проблемалар етерлек. Ас, бәхетһеҙ, йәберләнгән, етем булып ҡалған мосолмандар күп. Әгәр Аллаһтың беҙҙән ҡәнәғәт булыуын, ризалығын, рәхмәтен, Уға яҡын булыуыбыҙҙы өмөт итәбеҙ икән, үҙебеҙҙән һорарға тейешбеҙ: «Иман ҡәрҙәштәребеҙҙең проблемаларын уйлап йөрәктәребеҙ тетрәнәме? Бүләк итеп бирелгән ниғмәт-

тәрҙең күпмеһен үҙебеҙгә сарыф итәбеҙ, ә күпмеһен мохтаждарға, фәкирҙәргә, йәберләнгәндәргә?»

❁

Раббыбыҙ Аллаһ әйтә:

«Шунан ул көндө һеҙҙән донъяла ваҡыттағы Аллаһының ниғмәттәренән һорарҙар» (әт-Тәкәәçур (Байығыуҙа ярышыу), 8).

Мосолман илдәрендә йәшәгәндәргә Аллаһтың ҙур ниғмәте бирелгән. Шул уҡ ваҡытта был уларға ҙур бурыстар ҙа йөкмәтә. Һәм уларҙың береһе – бөтә ислам донъяһындағы йәберләнгән мосолман ҡәрҙәштәребеҙҙең ҡанһыраған яраларына шифалы май булыу, уларҙың проблемалары хаҡында борсолоу һәм, мөмкин булғанса, матди һәм рухи саралар менән ярҙам күрһәтеү.

❁

Данлы ата-бабаларыбыҙ исламдың «барса яратылмыштарға Раббыбыҙҙың рәхмәт күҙе менән бағыу» принцибына таянып эш иткән.

Адмирал Хайреддин-паша, Стамбулға караптарға тейәп, Испаниянан ҡыуылған йәһүдтәрҙе килтергәс, ҡала халҡы уларға ярҙамға ашыға һәм әйтә: «Былар йәберләүгә дусар булған кешеләр».

Шул турала уйлап ҡарау ҙа зарур: беҙ, Аллаһҡа итәғәт күрһәтеп, уның бәндәләренә мәрхәмәт йөҙөнән Испания католиктары ойошторған һуйыштан ҡотолған, мосолмандарҙың мәрхәмәтенә өмөтләнгән йәһүдтәргә ишектәрен асҡандарҙың, ризыҡтары менән бүлешкәндәрҙең ейәндәре.

Хәҙер иһә ислам ҡәрҙәшлеге йөкмәткән беҙҙең бурыс – беҙҙең илдәрҙә төйәк тапҡан Сүриә ҡасаҡтарына ярҙам итеү.

❁

Шулай ҙа булыуы мөмкин ине: бөгөн беҙ һуғыштан, үлемдән ҡотолоу эҙләп килгән сүриәле ҡәрҙәштәребеҙ урынында булыуыбыҙ ҙа ихтимал ине. Әгәр ҡулдарыбыҙҙы һоноп, уларҙың ишек төбөндә торһаҡ, беҙҙе нисек ҡаршы алыуҙарын теләр инек һәм бөгөнгө хәлдәргә ниндәй күҙ менән ҡарар инек?

❁

Элек Мәккә ҡасаҡтары Аллаһ тарафынан Мәҙинә әнсарҙарына тапшырылған кеүек, бөгөн беҙ Сүриә ҡасаҡтары өсөн әнсарҙар булырға тейеш. Беҙҙең бурыс – уларҙың матди һәм рухи ихтыяждары тураһында хәстәрлек күреү, ә иң мөһиме улар үҙҙәренең яңғыҙ түгел икәндәрен тойорға тейеш.

❁

Аятта әмер бирелә:

«…кем дә кеше кеше йәнен ҡыймағанды үлтерһә йәки донъяла боҙоҡлоҡ-фетнә ҡылмағанды үлтерһә, бөтә кешеләрҙе лә үлтергән кеүек булыр. Бер йәнде ҡотҡарып ҡалған кеше бөтә кешеләрҙе үлемдән ҡотҡарып ҡалған кеүек булыр…» (әл-Мәәидә (Табын), 32).

Кем, бәндәнең йәшәүгә хоҡуғын боҙоп, ғәйепһеҙҙең ҡанын ағыҙып, ғәҙелһеҙ рәүештә кешене үлтерһә һәм башҡаларҙы ла быға этәрһә, ул бөйөк енәйәт эшләй. Шуға күрә, кем бер кешене үлтерһә, ул, бөтә кешене үлтергәндәй, Аллаһтың асыуына тарый.

Ә кем бер кешене ҡотҡарһа, йәғни ғәфү итеп, ғәҙелһеҙ һәләк булыуына ҡамасаулаһа йәки, хәүефтән һаҡлап, ғүмерен оҙайтһа, әйтерһең, бөтә кешене лә ҡотҡара һәм Аллаһтың ризалығына лайыҡ була. Ошо күҙлектән ҡарап, Сүриә ҡасаҡтарына матди һәм рухи ярҙамдың Аллаһ алдындағы ҡиммәтен аңлау лазым…

❁

Аллаһ Илсеһе (салләллаһу ғәләйһи үә сәлләм) әйткән:

«Ябраил миңә күршеңә яҡшы мөнәсәбәт тураһында шул тиклем оҙаҡ нәсихәт бирҙе, хатта ул уларҙы минең вариҫтарым иҫәбенә индерә, тип уйлай башланым» (Бохари, Әҙәп, 28; Мөслим, Бирр, 140-141).

Беҙ шуны ла уйларға тейеш: транспорт һәм коммуникация технологиялары үҫеше һөҙөмтәһендә донъя кесерәйҙе, ә алыҫтағы яҡынайҙы. Шуға күрә беҙ, донъяның икенсе мөйөшөндә булһалар ҙа, аралаша алған иман ҡәрҙәштәребеҙ менән күршеләр булып киттек. Был шарттарҙан сығып, бөгөн беҙгә үҙебеҙҙең бурыстарыбыҙҙы һәм яуаплылығыбыҙҙы аңлау зарур.

❁

Абдуллаһ бин Мөбәрәк (рәхимәһуллаһ) хаж ҡылған һәм Ҡәғбәлә булған саҡта, ике фәрештә килә. Уларҙың береһе икенсеһенә әйтә: «Быйыл 600 мең кеше хаж ҡылды. Дамасктан, хажға барырға ниәтләп, быны ҡыла алмаған Ғәли ибн Муваффак атлы итексенең изге ғәмәле сәбәпле, барыһының да хажы ҡабул булды».

Хайран ҡалып, Абдуллаһ ибн Мөбәрәк тәүге каруан менән Дамаскыға юл тота, теге әҙәмде таба һәм һорай: «Хаж ҡыла алмаһаң да, һин ниндәй изге ғәмәл ҡылдың?» Ғәли бин Муваффак уға һөйләп бирә: «Мин 30 йыл буйы хажға барыу тураһында хыялландым һәм быныҡ өсөн аяҡ кейемдәрен ремонтлап 300 дирһәм йыя алдым. Мин шуны ниәтләп кенә торғанда, ауырлы ҡатыным әйтте: «Күршеләрҙән ит еҫе килә. Минең өсөн берәй киҫәк һорап алып

килә алмаҫһыңмы икән?». Мин күршемә киттем һәм хәлде аңлатып бирҙем. Әммә ул, илап ебәрҙе һәм әйтте: «Ете көн инде балаларым ас. Мин, юлда үлгән хайуанды табып, унан бер киҫәк ҡырҡып алдым. Хәҙер шуны бешерәм һәм балаларымды йыуатам. Әгәр хәләл ризыҡ таба алмаһам, уларға ошо итте ашатырға тура киләсәк. Теләһәң, мин һиңә уны бирә алам, әммә мин бешергән был ит үлем хәлендәге балаларыма, бәлки, хәләлдер ҙә, әммә һеҙ ундай ауыр хәлдә булмағас, ул һеҙгә харам».

Быны ишеткәс, йөрәгем өҙөлгәндәй булды. Мин уға ауырлыҡ менән йыйған 300 дирһәмде бирҙем һәм Аллаһҡа ялбарҙым: «Йәә Раббым, минең хаж ҡылыу ниәтемде ҡабул ҡыл!».

❁

Хәҙистә әйтелә:

«Күршеһе ас булғанда, туҡ килеш ятып йоҡлаусы иман эйәһе түгел» (Хаким, II, 15).

Пәйғәмбәребеҙҙең (салләллаһу ғәләйһи үә сәлләм) ошо киҫәтеүенә ярашлы күршеләребеҙ булған Сүриә ҡасаҡтарына ҡарата яуаплылығыбыҙ тураһында йышыраҡ уйланыу лазым.

Беҙ йөрәгебеҙ менән Сүриәләге, Ғазалағы, Палестиналағы, Африкалағы, Мьянмалағы, Көнсығыш Төркөстандағы, бер һүҙ менән әйткәндә, иң яҡындарҙан башлап, бөтә донъялағы иман ҡәрҙәштәребеҙҙең ғазап-яфаларын тойорға тейешбеҙ.

Иман эйәләре булараҡ, ни кимәлдә үҙебеҙ, ни кимәлдә башҡалар тураһында уйлауыбыҙ хаҡында үҙ-үҙебеҙҙән ҡаты хисаплама алырға тейешбеҙ!

❁

Мөхтәрәм Әбү Хәсән Хәракәни мосолман өммәтенә ҡарата булған физакәрлек тойғоларын шулай белдергән:

«Төркөстандан Дамаскыға ҡәҙәр (йәғни бөтә ислам донъяһында) кемдеңдер бармағына ҡаҙалған сәнске минең дә бармағыма ҡаҙала, кемдеңдер аяғына төшкән таш минең дә аяғымды яралай. Әгәр ниндәйҙер йөрәктә ҡайғы булһа, ул йөрәк – минеке».

❁

Һаран һәм ғәмһеҙ кешеләр тирә-йүнендә ярҙам һорап: «Йәлләгеҙ беҙҙе! Эй, мәрхәмәт, һин ҡайҙа?!» - тип ҡысҡырғандарҙы ишетмәй.

Улар үҙ-үҙҙәрен шулай тип йыуата: «Моғайын, берәйһе ишетер һәм ярҙам итер».

Әммә иманы көслө булғандар ҡәрҙәшенең ярҙам һорап саҡырыуын донъяның икенсе мөйөшөнән дә ишетә. Ул өшөһә, улар йылына алмай, ул бәләгә ҡалһа, улар шатлана алмай.

❁

Ислам ғалимдары бер үк фекерҙә: донъяның ниндәйҙер бер өлөшөндә залимдар ҡулына эләккәндәргә, йәберләүҙәргә дусар булғандарға, әсирлеккә эләккән иман ҡәрҙәштәренә мөмкинлеге булып та ярҙам ҡулы һуҙмағандар ауыр гонаһ ҡыла.

Сүриәләге, Ғазалағы, Палестиналағы, Мьянмалағы, Көнсығыш Төркөстандағы һәм башҡа региондарҙағы иман ҡәрҙәштәребеҙҙең ауыр хәле – илаһи һынау, был һынау үҙ-үҙебеҙҙән, үҙ намыҫыбыҙҙан хисаплама алырға мәжбүр итергә тейеш!

❁

Изге хәҙистә әйтелә:

«Көҙрәтле һәм Бөйөк Аллаһ Ҡиәмәт көнөндә әйтәсәк: «Эй, Әҙәм балаһы, Мин сирләнем, әммә һин Минең хәлемде белмәнең». [Кеше] һораясаҡ: «Раббым, мин нисек Һинең хәленде беләйем, Һин бит — Ғаләмдәр Раббыһы?!» [Аллаһ] әйтәсәк: «Минең фәлән ҡолом сирләгәнен һин белмәнеңме ни, ә әгәр һин уның хәлен белһәң, унда Мине табыр инең?» (Мөслим, Бирр, 43).

Ошо изге хәҙискә таянып, илдәребеҙҙә төйәк эҙләгән һәм бөтә донъяла йәберләнгән иман ҡәрҙәштәребеҙ тураһында хәстәрлек күрәйек. Ихлас йөрәктән доға ҡылайыҡ һәм доғаларыбыҙ ҡабул булһын өсөн тырышайыҡ, сөнки иман ҡәрҙәшлеге – илаһи һынау һәм яуаплылыҡ, уның өсөн беҙ киләһе тормошта хисап бирергә мәжбүр буласаҡбыҙ.

❁

Иман ҡәрҙәшеңдең һыҙланыуҙарына битараф булыу – етди кәмселек. Мөхтәрәм Сарий ас-Саҡати бер заман ғәмһеҙлеккә батҡаны өсөн ғәфү үтенеүен шулай тип һөйләй:

«Багдад баҙары янғас, кемдер миңә йүгереп килде һәм әйтте:

«Бөтә баҙар янып бөттө, һеҙҙең кибет кенә имен ҡалды. Бәхетегеҙ бар икән!».

Һәм мин кибеттәре янып бөткән ҡәрҙәштәрем тураһында онотоп әйттем:

«Аллаһҡа шөкөр!». Бына утыҙ йыл инде мин шул мәлдәге ғәмһеҙлегем өсөн Аллаһтан ғәфү үтенәм» (Хатиб әл-Багдади, Тарих, IX, 188; Зәһәби, Сийар, XII, 185, 186).

Бер генә мәлгә үҙе тураһында уйлағаны һәм бәләгә тарыған иман ҡәрҙәштәренең ғазаптарынан ситтә ҡалғаны өсөн утыҙ йыл тәүбә ҡылыу… Иман ҡәрҙәшлеген ни тиклем тәрән аңлау был!

❁

Аллаһ Илсеһе (салләллаһу ғәләйһи үә сәлләм) әйткән:

«Мосолман мосолманға ҡәрҙәш, һәм ул уны йәберләргә, уға хыянат итергә тейеш түгел. Кем мохтаж ҡәрҙәшенә ярҙам итһә, Аллаһ тегеңә мохтаж сағында ярҙам итер; кем мосолманды ҡайғынан азат итһә, Аллаһ Ҡиәмәт көнөнөң бер ҡайғыһынан азат итер…» (Бохари, Мазалим, 3; Мөслим, Бирр, 58).

❁

Аллаһ Илсеһе (салләллаһу ғәләйһи үә сәлләм) әйткән:

«Аллаһ ҡоло үҙенең (иман) ҡәрҙәшенә ярҙам итә икән, Аллаһ та ул ҡолона ярҙам итер» (Мөслим, Зикр, 37-38).

❁

Бер заман мөхтәрәм Дауыт әт-Таиҙа хеҙмәттә булған шәкерте уға әйткән:

«Мин бер аҙ ит бешерҙем, ауыҙ итегеҙ!». Остазы өндәшмәһә лә, шәкерте барыбер итте алып килгән. Әммә мөхтәрәм Дауыт әт-Таи алдындағы һыйға ҡарап һорау биргән:

«Фәләән-фәләән етемдәр тураһында ниндәй хәбәрҙәр бар, улым?» Шәкерте әйткән:

«Шул уҡ хәлдәләр, әфәндем!». Шул саҡта Аллаһтың бөйөк дуҫы былай тигән:

«Улайһа, был итте уларға алып бар!».

Әҙерләгән ризығы менән хужаһын һыйларға теләгән шәкерте ныҡышып өгөтләй башлаған:

«Әфәндем, һеҙ ҙә бит күптән ит ашаманығыҙ!..» Әммә мөхтәрәм Дауыт әт-Таи ризалашмаған һәм әйткән:

«Улым! Әгәр мин был итте ашаһам, ул бер аҙҙан кире сығасаҡ, әгәр инде теге етемдәр ашаһа, улар, мәңгегә ҡалыр өсөн, Аллаһ Ғәршенә күтәреләсәк!».

Бөгөн ислам географияһының төрлө мөйөштәрендә золомға дусар булғандар, фәкирҙәр, ғазап сигеүселәр һәм астар бар, беҙ ебәргән һыйҙар, бәлки, Аллаһ Ғәршенә күтәрелгән иң яҡшы күстәнәскә әүерелер, һәм беҙ киләһе тормошта улар өсөн сикһеҙ әжер-сауаптар алырбыҙ.

❁

Әгәр ҙә ки беҙ, мәрхәмәт, шәфҡәт күрһәтеп, йәмғиәтебеҙҙәге мохтаждар һәм ғазап-яфа сигеүселәрҙе яҡлаһаҡ, ин шәә Аллаһ, был илебеҙгә илаһи ҡурсалау, мәрхәмәт, бәрәкәт булып ҡайтыр.

Хәҙистәрҙә әйтелә:

«Миңә көсһөҙҙәрҙе күрһәтегеҙ, сөнки һеҙгә ярҙам һәм йәшәү өсөн ниғмәт шул көсһөҙҙәр арҡаһында килә» (Әбү Дауыт, Йыһат, 70/2594; Әхмәт, V, 198).

«Аллаһ был өммәткә улар араһындағы көсһөҙҙәрҙең доғалары, ғибәҙәттәре һәм ихласлығы сәбәбендә ярҙам итә» (Нәсаи, Йыһат, 43).

❁

Мөьмин – заманы өсөн үҙен яуаплы тойған һәм мосолман өммәтенең проблемалары өсөн борсолған кеше. Шул сәбәпле иман эйәһенә ҡулынан килгәнсә был проблемаларҙы хәл итергә ынтылыу, йәғни милкен, ғүмерен ошо юлда сарыф итергә тырышыу лазым. Әгәр ҡулы менән ярҙам итә алмай икән, теле менән ярҙам итеү, йәғни был эштәрҙе атҡарырға ҡулынан килгәндәрҙе ҡуҙғатып ебәреү лазым. Әгәр был да ҡулынан килмәй икән, ыҙа сиккән мосолмандарҙы исмаһам ихлас доғаларың менән еңеләйтергә ынтылыу зарур.

❁

Хәҙистә әйтелә:

«Бер мөьминдең янында булмаған икенсе мөьмин өсөн ҡылған доғаһынан да тиҙерәк ҡабул була торған доға юҡ» (Тирмизи, Бирр, 50).

❁

«Мин улар өсөн нимә эшләй алам?» тип, золомға дусар булған иман ҡәрҙәштәребеҙ тураһында уйланыу – һәммәбеҙҙең намыҫ бурысы. Әгәр бер бер нәмә лә эшләй алмаһаҡ, таңда үҙебеҙҙе бәләләрҙән йолоп ҡалыуҙы һорап доға ҡылған һымаҡ, мәрхәмәт йөҙөнән улар өсөн дә доға ҡылыу зарур.

❁

Мосолман өммәтенең именлеге өсөн күп доға ҡылыу лазым. Хәҙистә әйтелә:

«Аллаһ өсөн ҡолоноң шулай тип ҡылған доғаһынан да һөйөклөрәге юҡ:

اَللّٰهُمّ ارْحَمْ أُمَّةَ مُحَمَدٍ رَحْمَةً عَامّةً

«Йә Аллаһ! Мөхәммәт өммәтен бөтә барлыкты ҡоскан Үҙеңдең рәхмәтеңә ал!» (Ғәли әл-Мүттаки, №: 3212, 3702).

Әгәр беҙ Пәйғәмбәребеҙ (салләллаһу ғәләйһи үә сәлләм) өммәте тураһында уйлаһаҡ һәм ошо рәүешле доға ҡылһаҡ, Аллаһ Илсеһенең дә (салләллаһу ғәләйһи үә сәлләм) ризалығына ирешербеҙ.

❁

Изге заттарҙан булған мөхтәрәм Маруф Ҡархи әйткән:

«Кем көнөнә унар тапҡыр ошо доғаларҙы әйтһә:

اَللّٰهُمّ أَصْلِحْ أُمَّةَ مُحَمْدٍ

اَللّٰهُمّ فَرِّجْ عَنْ أُمَّةِ مُحَمِدٍ

اَللّٰهُمّ ارْحَمْ أُمَّةَ مُحَمِدٍ

«Йә Аллаһ, Мөхәммәт өммәтенең хәлен яҡшырт!

Йә Аллаһ, Мөхәммәт өммәтен бәләләрҙән арала!

Йә Аллаһ, Мөхәммәт өммәтен ярлыҡа!», Аллаһ уны Үҙенең дуҫтары араһына теркәп ҡуйыр» (Әбү Нүғайм, Хилйә, VIII, 366).

❁

Мөхтәрәм Әбү Бәкер (радыйаллаһу ғәнһү) әйткән:

«Дүрт кеше Аллаһтың салих ҡолдарынан булыр:

1. Тәүбә ҡылған кешене күреп шатланыусы.

2. Раббыһынан гонаһкәрҙәрҙе ярлыҡауҙы ялбарып һорап доға ҡылыусы.

3. Мохтажға ярҙам итеүсе.

4. Үҙе юҡта иман ҡәрҙәше өсөн доға ҡылыусы».

❁

Бөгөн, экрандарҙа, социаль селтәрҙә ҡыҙғаныс ваҡиғаларҙы күҙәтеп, гәзиттәрҙә уҡып, беҙ ҡайғырабыҙ, хатта йәш түгәбеҙ һәм доға ҡылабыҙ: «Аллаһ ярҙам бирһен уларға!» - тибеҙ. Әммә ысын мәрхәмәт күрһәтергә һәләтлебеҙме?

«Ғазап сигеүсе иман ҡәрҙәштәремә мин нисек итеп ярҙам итә алам?» - тип үҙ-үҙебеҙгә һорау бирәбеҙме?

Был ауыр замандарҙа иман ҡәрҙәшлеге принцибы йөкмәткән бурысты үтәү физакәрлек талап итә. Мөхәммәт (салләллаһу ғәләйһи үә сәлләм) өммәтенең золом күргән, ғазап сиккән ағзалары өсөн ҡылған доғаларыбыҙ, биргән саҙаҡаларыбыҙ, дин юлындағы тырышлығыбыҙ – Аллаһҡа иң гүзәл хәмде-сәнәбеҙ, рәхмәтебеҙ һәм шулай уҡ Аллаһ Илсеһенә (салләллаһу ғәләйһи үә сәлләм) тоғролоғобоҙ, мөхәббәтебеҙ.

ӘХИРӘТТЕ АРТЫҒЫРАҠ КҮРЕҮ

Беҙ йәшәү кимәле бығаса күрелмәгән бейеклеккә күтәрелгән осорҙа йәшәйбеҙ. Әммә ләкин күңелдәр сирле, йөрәктәр ас! Рухи аслыҡ арҡаһында кешелек бөгөн көрсөктә!

Ә сәғәҙәт быуатына күҙ ташлаһаҡ, күрәбеҙ: ни тиклем генә ауыр шарттарҙа йәшәһәләр ҙә, рухи көрсөк булмаған. Ул осорҙа йәшәүселәр хәҡиҡи донъя һәм сәғәҙәт асылын, хәҡиҡи тормош әхирәттә икәнлеген төшөнгәндәр.

Заманыбыҙ кешеләренең уңайлыраҡ һәм оҙағыраҡ йәшәү ынтылышына ҡаршы сәхәбәләрҙең иң ҙур теләге баҡыйлыҡҡа сәләмәт ҡәлб һәм таҙа намыҫ менән күсеү булған.

Аллаһ Илсеһе (салләллаһу ғәләйһи үә сәлләм) һәр саҡ: именлектә лә, мохтажлыҡта ла, шат мәлдәрендә лә, ҡайғылы сағында ла, бәхетле мәлдәрендә лә һәм бәхетһеҙ сағында ла әйтер булған:

اللَّهُمَّ لَا عَيْشَ إِلَّا عَيْشُ الآخِرَةِ

«Йә Аллаһ! Хәҡиҡи тормош – ул әхирәттәге тормош»[36].

Шул рәүешле ул өммәтен ауыр замандарҙа – төшөнкөлөккә бирелеүҙән һәм Раббыбыҙға итәғәтһеҙ булыуҙан, ә имен саҡта ғафил һәм һауалы булыуҙан киҫәткән. Ул фани донъялағы шатлыҡ-ҡайғылар ваҡытлы булыуын һәм улар менән алданмаҫҡа кәрәклеген хәтергә төшөргән.

❁

Аллаһ Илсеһе (салләллаһу ғәләйһи үә сәлләм) һәр ваҡыт әхирәткә өҫтөнлөк биргән, шуға күрә ул әйткән:

«Иң мөһиме – киләсәк тормошоңдо юғалтыуҙан ҡурҡып борсолорға кәрәк».

36. Бохари, Рикак, 1.

«Иң мөһиме – киләсәк тормошоңдо ҡотҡарыуыңа шатланырға кәрәк».

Уның ҡайғы һәм шатлыҡтарға мөнәсәбәте сәхәбәләр өсөн төп критерийға әйләнә. Уларҙы бер генә нәмә борсой: был тормоштағы Аллаһ Илсеһе (саллəллаһу ғəләйһи үə сəлләм) менән бергә булыу ләззәтен киләһе тормошта ла тойоу.

Йөрәктәребеҙ ниндәй маҡсатҡа йөҙ тота? Нимәгә шатланабыҙ һәм нимәгә борсолабыҙ? Ҡайғы-шатлыҡтарыбыҙ әхирәт менән бәйлеме, әллә ошо ваҡытлы, фани донъя менәнме?

Пәйғәмбәребеҙ (саллəллаһу ғəләйһи үə сəлләм) тәрбиәһен алған һәм мәңгелек үрнәк быуыны булған сәхәбәләр өсөн донъяуи мәнфәғәттәрҙең һис бер әһәмиәте булмай. Шуға күрә уларҙың береһе лә фани донъялағы тормоштарына зарланмай.

Уларҙың барса хәстәрлеге әхирәт менән бәйле була: «Аллаһ минән разыймы? Киләһе тормошта мин Аллаһ Илсеһе (саллəллаһу ғəләйһи үə сəлләм) менән бергә була алырмынмы?».

Беҙ йәшәү кимәле бығӑса күрелмәгән бейеклеккә күтәрелгән осорҙа йәшәйбеҙ. Әммә ләкин күңелдәр сирле, йөрәктәр ас! Рухи аслыҡ арҡаһында кешелек бөгөн көрсөктә!

Ә сәғәҙәт быуатына күҙ ташлаһаҡ, күрәбеҙ: ни тиклем генә ауыр шарттарҙа йәшәһәләр ҙә, рухи көрсөк булмаған. Ул осорҙа йәшәүселәр хәҡиҡи донъя һәм сәғәҙәт асылын, хәҡиҡи тормош әхирәттә икәнлеген төшөнгәндәр.

❁

Заманыбыҙ кешеләренең уңайлыраҡ һәм оҙағыраҡ йәшәү ынтылышына ҡаршы сәхәбәләрҙең иң ҙур теләге баҡыйлыҡҡа сәләмәт ҡәлб һәм таҙа намыҫ менән күсеү булған.

❁

Бер заман иң бөйөк сәхәбәләрҙең береһе булған Абдуллаһ ибн Мәсғуд (радыйаллаһу ғәнһү) тәбиғиндәр быуынынан булған дуҫтарына әйтә:

«Һеҙ Аллаһ Илсеһе (саллəллаһу ғəләйһи үə сəлләм) сәхәбәләренә ҡарағанда нәфел ураҙаларҙы, намаҙҙарҙы һәм изге ғәмәлдәрҙе күберәк ҡылаһығыҙ. Әммә улар һеҙҙән яҡшыраҡ ине».

Унан һорайҙар:

«Нисек инде улай?» Абдуллаһ ибн Мәсғуд (радыйаллаһу ғәнһү) әйтә:

«Уларҙа был донъяға ҡарата заһитлыҡ (был донъя рәхәтлектәренән ваз кисеү) көслө ине, һәм улар әхирәтте һеҙгә ҡарағанда нығыраҡ теләне» (Хаким, Мустадрак, 4/135).

❁

Әбү Дарданың (радыйаллаһу ғәнһү) киләһе киҫәтеүендә күпме тәрән мәғәнә ята:

«Кешеләрҙе әүрәткән донъяуи нигмәттәр менән мауығып, һин йәшерен шәһүәткә төшөп китерһең, тип ҡурҡам. Был шәһүәт, ғилем (һәм ғирфан – Аллаһты танып белеү) йәһәтенән ас булһағыҙ ҙа, ҡарынығыҙҙы тултырғанда барлыҡҡа килә.

Иң яҡшығыҙ дуҫына шулай тип кәңәш биреүсе:

«Үлем килгәнсе, әйҙә ураҙа тотоп ҡалайыҡ».

Иң яманығыҙ дуҫына шулай тип кәңәш биреүсе:

«Үлем килгәнсе, әйҙә ашайыҡ-эсәйек, күңел асайыҡ һәм тормош менән ләззәтләнәйек...» (Әбү Нуғайм, Хилйә, I, 218).

❁

Пәйғәмбәребеҙ (салләллаһу ғәләйһи үә сәлләм), уның сәхәбәләре һәм улар эҙенән барған Аллаһ дуҫтары, хәҡиҡи тормош әхирәттә булыуын аңлап, Аллаһ юлында бик ҙур тырышлыҡ күрһәтә, фани донъяға күңел бағламай.

Шулай булғас, мәңге үлмәҫтәй булып, әхирәтте инҡар итеп, фани донъя каруан һарайын биҙәү менән генә мәшғүл булыу – үҙ-үҙеңде алдау!

❁

Йәннәттең кескәй генә нигмәте менән сағыштырғанда, ер донъяһының хатта иң ҙур ләззәттәре - һис ни түгел.

Фани донъяның барса яфа-ғазаптары Йәһәннәмдең күҙ асып йомғансы бирелгән ҡыҫҡа ваҡытлы ғына ғазабы менән сағыштырғанда - һис ни түгел.

❁

Мөхтәрәм Усман (радыйаллаһу ғәнһү) әйткән:

«Хаҡтыр, был донъя фани, ә әхирәт мәңгелек. Фани тәнеңә, үҙеңә баш булып, мәңгелектән айырырға рөхсәт бирмә!».

«Һеҙ фаниҙы мәңгелектән өҫтөн күрәһегеҙ. Ғүмер сикле, һәм беҙҙе Аллаһҡа ҡайтыу көтә. Аллаһтан ҡурҡығыҙ».

Аҡыл эйәһе ни тиклем гүзәл әйткән: «Әгәр донъя алтындан яһалған, әммә фани булһа, ә әхирәт бысраҡтан яһалған, әммә мәңге булһа, хикмәт эйәһе мәңгенән фаниҙан өҫтөн күрер ине. Ә әгәр асылда хәлдәр киреһенсә булһа: донъя бысраҡтан яралһа һәм фани булһа, ә әхирәт алтындан һәм мәңге булһа, ул саҡта ни ҡылыу кәрәк?!».

❁

Мөхтәрәм Ғүмәр (радыйаллаһу ғәнһү) әйткән:

«Ер донъяһы әхирәт менән сағыштырғанда нимә ул?! Ул ҡуяндың бер һикереүенән артыҡ түгел».

❁

Был фани донъя каруан һарайы туҡталҡаһында үҙебеҙгә уңайлыҡтар тәьмин итеүгә күпме ваҡыт бүләбеҙ? Икенсе яҡтан, мәңгегә ҡаласаҡ әхирәтебеҙгә әҙерлек өсөн көнөнә нисә сәғәт бүләбеҙ?

Онотмайыҡ, йәмәғәт, әҙ йәки күп йәшәүе әхирәттә берәүҙе лә борсоуға һалмаясаҡ. Һәр кемгә ҡылған яҡшылығы һәм яманлығы ғына мөһим буласаҡ...

❁

Мөшриктәрҙең зитына тейгән исламға ҡаршы тәүге һүҙе әхирәт барлығына инаныу менән бәйле була. «Йә Мөхәммәд! Мәңгелек тормош тураһында һөйләүҙән туҡта! Беҙҙең поттарға ла теймә! Ул саҡта беҙ һинең арттан барырбыҙ!» - тип белдерә улар.

Йәғни мөшриктәрҙе ҡабат тереләсәктәре һәм барса ғәмәлдәре тураһында хисап бирәсәктәре бик ныҡ хафаға һала.

Бөгөн дә кешелек яһилиәт осоро кисерә. Түбән сифатлы телепрограммалар һәм интернет-контенттар, боҙоҡлоҡҡа этәреүсе мода һәм кешеләрҙе алдаусы реклама, халыҡты әхирәт тураһында онотороп, аҡыл һәм йөрәктәрҙе буйһондороп алырға тырыша.

Хәҙерге замандағы яһилиәттең ныҡлы терәге булған глобаль көстәр, донъяны әхирәтһеҙ күҙ алдына баҫтырырға тырышып, бер золомдан икенсе золомға күсә. Илаһи хисап тураһында уйламаған көслөләр ҡот осҡос аяуһыҙлыҡ менән көсһөҙҙәрҙе йәберләй, сөнки илаһи хәҡиҡәттәрҙән йырағайған кеше кешелеклелеген юғалта. Илаһи Ҡәләмгә нигеҙләнгән тәрбиәнән йөҙ сөйөрөп, ул намыҫы ҡороған аяуһыҙ һәм яһил йән эйәһенә әүерелә. Бындай кеше ҡырағайлыҡ һәм аяуһыҙлыҡта һыртландар менән ярыша ала!

❁

Кеше Аллаһты, әхирәтте һәм үзенең фанилығын онотмаҫҡа тейеш. Юғиһә бәндә йөрәге үтә торған әүҫлектәр сүплегенә, нәфес әсиренә әүерелә.

❁

Әгәр кеше йәйге болот кеүек юҡҡа сыға барған фани донъялағы тормошон әхирәте тураһында хәстәрлек күрмәй үткәрә икән, көн үткәс, төн килмәй ул, тип алданыу менән бер был.

❁

Был фани донъя - бер тамсыға, ә әхирәт икһеҙ-сикһеҙ океанға оҡшаш. Әгәр, баҡыйлыҡҡа сәфәр ҡылыусы икәнлегеңде онотоп, бер тамсы хаҡына океанды ҡорбан итһәң, фани тормошоңа алданһаң, ярыҡ ялғашҡа ҡарап ҡаласаҡһың.

Мәрхүм Нәжип Фазыл ғәмһеҙ үтән ғүмере хаҡында шулай тип яҙа:

Утыҙ йыл сәғәт һуҡҡан, ә мин торғанмын;

Һауа йыланын осорғанмын, күкте белмәгәнмен...

❁

Әхирәтте онотоу, баҡыйлыҡтағы тормошоңдо имен итергә ынтылыу урынына, бөтә көсөңдө һалып, ҡомһоҙланып, иртәме-һуңмы үлем менән тамамланасаҡ был фани донъялағы ғүмереңде уңайлыраҡ итеү менән мәшғүл булыу – бәндәнең мәңгелек көн итмешен ғазапҡа әйләндереүсе ҡыҙғаныс бер үҙ-үҙеңде алдау!

❁

Мөхтәрәм Мәүләнә әйткән:

Эй, бер телем икмәк өсөн иман хазинаһын атып бәргән, байлыҡтарын арпаға алмаштырған (йәғни фани донъя өсөн ғүмерен һәләк иткән) фәкир! Иҫеңдә тот, Нәмруд йөрәген Ибраһимға бирмәне, әммә ғүмерен бер себенгә тапшырҙы…»

❁

Мөхтәрәм Ғүмәр (радыйаллаһу ғәнһү) әйткән:

«Кешеләрҙең иң яһилы был донъя рәхәтлеге өсөн әхирәтен һатып ебәреүсе».

❁

Фаниҙы биреп, мәңгелеккә эйә булыусы – зирәк кеше. Мәңгелек тормошон һатып, был донъяға әсир булыусы – иҫәр кеше.

Бер заман кешеләр йән-фарман кемдәндер ҡасып барған мөхтәрәм Ғайса ғәләйһис-сәләмде күреп ҡала. Кемдән ҡасыуы тураһында унан һорағас, ул әйтә:

«Мин иҫәрҙән ҡасам!» Унан һорайҙар:

«Бәй, һин һулышы менән һуҡырҙарҙы һәм һаңғырауҙарҙы һауыҡтырған, доғаһы менән үлеләр терелгән Мәсих түгелме ни? Ниңә ҡасаһың, ни теләһәң, һин шуны эшләй алаһың бит?» Быға ҡаршы Ғайса (ғәләйһис-сәләм) әйтә:

«Мин һуҡырҙарға һәм һағырауҙарға (Аллаһҡа хас) Бөйөк Исемдәрҙе (Исми-и Әғзам) уҡыным, һәм улар һауыҡты. Мәйеткә уҡыным, һәм ул терелде. Фәҡиргә уҡыным, һәм ул байыны. Әммә иҫәрҙең йөрәгенә мең тапҡыр уҡыһам да, был ярҙам итмәне. Мин аңланым: иҫәрлек – илаһи яза булған сир!».

❁

Хикмәт эйәләре әйтә:

«Өс кеше Аллаһтың дуҫы була алмай: тәкәббер, ҡомһоҙ һәм иҫәр».

Тәкәбберлек – үҙеңдең мөһим кеше булыуыңды күрһәтеү теләгенә нигеҙләнгән сир. Был кешене мин-минлеккә этәрә һәм үҙ-үҙеңдәге кәмһенеү тойғоһон еңергә маташыу булып тора.

Ҡомһоҙлоҡ – үҙең өсөн милек йыйыу, үҙең өсөн йомарт һәм башҡалар өсөн һаран булыу.

Иҫәрлек - рухи тормоштоң яман шеше. Был халәттә кеше үҙ күҙҙәрен үҙ ҡулдары менән яба һәм илаһи хәкиҡәттәргә һуҡыр килеш ҡала.

❁

Иҫәр кеше бихисап үлем-китемде күрә, ҡәбер таштарынан үҙенән дә йәшерәк булғандарҙың баҡыйлыҡҡа күсеүе хаҡында яҙмалар уҡый, әммә бер көн үҙенә лә үлем килер, үҙен дә ҡәбер һәм мәңгелек донъя көтә, тип уйланмай. Ул әхирәтһеҙ, фани донъяла ғына йәшәргә теләй. Күҙе томаланғанға күрә, ул бәхетһеҙлеген бәхет тип күрә.

❁

Мөхтәрәм Мәүләнә әйткән:

«Кешене нимә эҙләгәненә ҡарап баһалайҙар».

«Әгәр ишәк берәй нәмә алырға китһә, ул, әлбиттә, бешмәгән ҡауын һатып алыр ине».

❁

Тормош теге донъя һатылған баҙарға оҡшаш. Әммә ул баҙар ҙа һынау урыны. Был донъяға килеү маҡсатын онотторған меңдәрсә үәсүәсә менән тулы ул. Шуға күрә Аллаһ ҡолона хәҡиҡи тормош үлемдән һуңғы тормош икәнлеген иҫендә тотоу һәм был донъя баҙарында тап шуны эҙләү лазым.

❁

Мөхтәрәм Әбү Бәкер (радыйаллаһу ғәнһү) әйткән:

«Донъя – иманлылар баҙары, көн һәм төн – капиталы, изге ғәмәлдәр – тауары, Йәннәт – уларҙың килеме, ә Йәһәннәм – уларҙың ҡазаһы».

❁

Беҙ был донъяға киләһе тормошҡа имтихан тотор өсөн килдек. Быны онотоу һәм донъя шәһүәттәренә күмелеү, фани ләззәттәр өйөрмәһенә батыу, үтә торған әүәҫлектәр менән йыуаныу – ҡыҙғаныс бер алданыу.

❁

Һуңғы һулышыбыҙҙа, ҡәберҙә, Ҡиәмәт көнөндә, хисап биргәндә, Сират күперендә, бер һүҙ менән әйткәндә, баҡыйлыҡта беҙгә файҙа бирерҙәй нәмәләр тураһында оноторға ярамай. Улар сүллектәге сағым кеүек үтә торған әүәҫлектәр түгел, ә Раббыбыҙ Аллаһ разый булырҙай дин юлындағы хеҙмәтебеҙ, тырышлығыбыҙ.

❁

Бәндәнең асылына фанилыҡҡа ҡаршы бунт һәм әхирәткә көслө ынтылыш һалынған. Ә иман эйәләрендә Аллаһ ризалығына ирешеү теләге унан да көслөрәк.

Аллаһтың ризалығына ирешкәс, үткенсе әүәҫлектәрҙең һис бер әһәмиәте ҡалмай. Етеш тормош, юғары исем, вазифа һымаҡ нәмәләр нәфес өсөн ҡыҫҡа ваҡытлы бәхет һәм тән өсөн уңайлыҡтар тәьмин итә. Әммә ләкин улар даими хозурлыҡ һәм таҙа намыҫ бүләк итә алмай.

Мәңгелек төйәге булған әхирәткә иман менән киткәндәргә генә мәңгелек сәғәҙәт бүләк итеп биреләсәк.

❁

Фани байлыҡтарҙы һаҡларға тырышып, мәңгелек менән бәйле мөмкинлектәрҙе ҡулдан ысҡындырыу ислам, Ҡөрьән әхлағы менән ярашмай.

❁

Күп кешеләр, был фани донъяға килеүебеҙҙең маҡсаты булған Аллаһ ҡоло бурыстарын ситкә ҡуйып, нәфесенең әсиренә әйләнә, ҡиммәтле ваҡытын

ризыҡ табыуға, юғары урын биләүгә, байлыҡ йыйыуға, әүәҫлектәренә, даншөһрәт ҡазаныуға сарыф итә.

Әммә беҙ ер донъяһы тип аталған ваҡытлы каруанһарайҙа йәшәйбеҙ. Ғүмерлеккә ошо донъяла ҡаласаҡбыҙ һәм ошондағы бихисап эштәребеҙҙе тамамлай аласаҡбыҙ тип алданып, Аллаһты зекер итеүҙән, намаҙҙан, дини бурыстарыбыҙҙы үтәүҙән тайшаныу һәм тәүбәләребеҙҙе, ярлыҡау һорап ҡылған доғаларыбыҙҙы килеү-килмәүе билдәһеҙ булған иртәгәгә ҡалдырыу – оло һәләкәттең сәбәбе булыуы ихтимал.

❁

Әгәр кеше үлем еле туҡтауһыҙ иҫеп торған был ваҡытлы ер төйәгендә Аллаһҡа ҡарата ғафил булһа, фани донъя уны илап оҙатып ҡалмаясаҡ, ҡаршыһына килеп баҫҡан әхирәт ихлас йылмайып ҡаршы алмаясаҡ...

❁

Мөхтәрәм Усман (радыйаллаһуғәнһү) әйткән:

«Ер донъяһы тураһындағы уйҙар – йөрәктәге ҡараңғылыҡ, Әхирәт тураһындағы уйҙар – йөрәктәге яҡтылыҡ».

❁

Был донъяға ҡарата әүәҫлек һәм әхирәткә ҡарата ынтылыш араһындағы көрәш кешене һуңғы һулышына тиклем ҡалдырмаясаҡ. Фани донъялағы насибыбыҙҙы эҙләгәндә, донъя әүәҫлектәре йөрәгебеҙҙе ялмап алмаһын тиһәк, йөрәгебеҙҙе киләһе тормошҡа йүнәлтеү лазым.

❁

Аятта әйтелә:

«Кемдер Әхирәт өсөн иген сәсергә тырышһа, Беҙ уның игенен арттырырбыҙ; кемдер донъялыҡ өсөн генә сәсергә тырышһа, Беҙ уға ла бирербеҙ, ләкин Әхирәттә уға өлөш булмаҫ» (әш-Шура (Кәңәш), 20).

❁

Лоҡман Хәким әйткән:

«Был донъяны киләсәк тормош өсөн ҡорбан ит, һәм һин уның бығыһына лә, тегеһенә лә эйә булырһың. Киләсәк тормошоңдо был донъя өсөн ҡорбан итмә, юғиһә тегеһен дә, бығыһын да юғалтырһың».

❁

Йософ Хас Хаджиб әйткән:

«Был донъя байлығы иманға нәфрәт бағлай. Донъя байлыҡтарына эйә булғандарҙың күбеһе дингә әһәмиәт бирмәй. Һаҡ бул, шулар иҫәбенән булма!».

❁

Хикмәт эйәләре әйтә:

«Иманды һөйгән әҙәмдәр фани донъяны ташламаны. Әммә йөрәген был донъяға бағлағандар һәм нәфестәренең әсиренә әйләнгәндәр динде ташланы».

❁

Аҡыл-мәғәш - ул ашау-эсеү, йәғни донъяуи мәнфәғәттәр тураһында ғына уйланыусы аҡыл. Нәфесенә буйһонған хайуан аҡылы тип тә аңлау мөмкин.

Аҡыл-мәғәд - ҡурҡыу тойоусы һәм тойған ҡурҡыу нәтижәһендә Диндең әмерҙәренә үә тыйғандарына буйһонған, йәғни хәҡиҡи тормош әхирәттә булыуын танып белгән аҡыл.

Хәҙистә хәҡиҡи аҡылға эйә булғандар шулай тасуирлана:

«Аҡыллы – нәфесен контролдә тотоусы һәм әхирәт өсөн тырышыусы. Иҫәр – нәфесенә буйһонған көйө (Аллаһтың) рәхмәтенә өмөт бағлаусы» (Тирмиҙи, Ҡиәмәһ, 25/2459)

❁

Мөхтәрәм Ғәли (радыйаллаһу ғәнһү) әйткән:

«Йәннәтте теләүселәр изгелек ҡылырға ынтыла. Уттан ҡурҡыусылар әүәҫлектәрҙән ҡаса. Үләсәген белеүселәр нәфесенең теләктәренән ләззәт тапмай. Фани донъяны белеүселәргә уның бәләләре асыҡ (сөнки уларҙа әүлиәлек һәләте асыла)».

❁

Беҙҙең хәҡиҡи киләсәгебеҙ булған әхирәт өсөн тәғәйенләнгәнде нәфес әүәҫлектәренә һәм фани донъя хәстәрҙәренә сарыф итеүҙән дә ҙурыраҡ бәлә юҡ.

Бөгөн был донъя ығы-зығыһында Аллаһты онотоусылар иртәгә, иланһи ниғмәттәр бүленгәндә, үҙҙәре онотолоп ҡаласаҡ.

❁

Мөхтәрәм Ғәли (радыйаллаһу ғәнһү) әйткән:

«Әгәр Аллаһ ҡоло үҙ ҡулындағыға ҡарағанда Аллаһ ҡулындағыһына күберәк өмөт бағламаһа, иманы тулы булмаҫ!».

Киләсәк тормош тураһында онотҡан һәм был донъяға алданғандарҙың аңлау ҡеүәһе, меңдәрсә ризыҡ тураһында белмәйенсә, ҡулындағы һуған иң тәмлеһе, тип уйлаған бала аҡылынан артыҡ түгел.

❁

Мәңгелек донъяға иман һәм изге ғәмәлдәр менән күсә алмаған кеше – меҫкен банкрот. Ошо донъя ләззәтәренә күмелеп йәшәһә лә, ләззәт-шатлыҡтарға күмелеп ошо донъяла идара итһә лә, ул Ҡиәмәт көнөң хәйерсеһе.

Был донъяла һис бер милке булмаған һәм ҡол кеүек йәшәгән кеше иһә, әгәр иманлы булһа һәм ғүмерен изге ғәмәлдәр менән йәнләндерһә, ул асылда киләсәк тормоштоң солтаны.

❁

Был донъялағы мохтажлыҡтар ваҡытлыса. Беҙ хәстәрлек күргә тейеш булған иң мөһим проблема - иман кәмселеге, сөнки ул мәңгелек мохтажлыҡтарҙың сәбәпсеһе.

Шуны күҙ уңында тотоп, уйланыу зарур: был донъяла ниндәйҙер ниғмәткә эйә булһаҡ, ни тиклем шатланабыҙ һәм беҙҙе мәңгелек сәғәҙәткә алып барыусы иман ниғмәте менән шәрәфләнеүебеҙ өсөн ни дәрәжәлә рәхмәтлебеҙ?

❁

Мөхтәрәм Мәүләнә әйткән:

«Эй, әҙәм, был донъянан ҡапма-ҡаршы ике тауыш килә. Белге килә, күңел тауышың шуларҙың ҡайһыһын тыңлай икән?

Был тауыштарҙың береһе – Аллаһҡа яҡын булғандар (тәҡүәләр) халәте, ә икенсеһе – (әхирәтте онотҡан һәм гонаһтарға батҡан) аҙашҡандар халәте.

Һин шуларҙың береһен тыңлай башлаһаң, икенсеһен ишетмәй башлаясаҡһың! Нимәнелер һөйгән кеше бит һөймәгәненә ҡарата һуҡыр һәм һаңғырау.

❁

Иман эйәһенең бурысы шунда: донъя үҫүҫәләренә алданмау һәм тормошо, милке һәм булған барса нәмәһе менән әхирәтте һатып алыу. Уның бурысы: бөтә фани донъяны тәҡдим итһәләр ҙә, әхирәтен һатмау, сөнки мөьмин – зирәк, алдан күрә белеү һәләтенә эйә, ул бер минутлыҡ ләззәттргә ҡыҙыҡмай, мәңгелек сәғәҙәткә ынтыла.

❁

Мөхтәрәм Ғәли (радыйаллаһу ғәнһү)әйткән:

«Һеҙҙең йәндәрегеҙ өсөн Йәннәттән башҡа хаҡ юҡ. Шулай булғас йәндәрегеҙҙе Йәннәт хаҡына ғына һатығыҙ!».

❁

Беҙ был һынауҙар донъяһына фани ниғмәттәргә эйә булыр өсөн генә килмәнек, мәңгелек ғүмеребеҙҙе ҡотҡарыр өсөн дә килдек. Шуға күрә фани донъя һәм әхирәт араһында һынау торғанда, йөрәгебеҙ компасы һәр ваҡыт әхирәткә йүнәлергә тейеш.

❁

Бәхетле булыуҙың иң беренсе шарты – Аллаһ ҡоло булыу. Әгәр ҙә ки Раббыбыҙҙан йыраҡ булған ғафил кешеләр бәхетте, үҙҙәре теләгәнсә, «ошо донъя менән ләззәтләнеү», тип аңлаһа, йөрәктәрендә иман булғандар быныҡ ҡаты яңылышыу һәм бәлә икәнен аңлай.

❁

Киләсәк тормошта беҙ фани донъяла ҡылған ғәмәлдәребеҙҙең әжерен күрәсәкбеҙ. Бөгөн фани донъя баҫыуына сәскәндәребеҙ киләһе тормош урағында йыясаҡ берҙән-бер уңышыбыҙ буласаҡ.

Хәҡиҡи тормош - әхирәттә, ә был донъя әхирәт баҫыуы булыуын төшөнөп йәшәү - фани донъяны һәм киләһе тормошто Йәннәттең рауза баҡсаһына әйләндереүҙең берҙән-бер сараһы.

❁

Быуаттар һәм быуындар – киләһе тормошҡа һижрәт каруаны. Шулай булғас, беҙ юламсылар ғына булған фани донъяла бында ғүмерлеккә килгән һымаҡ көн итмәйек!

❁

Мөхтәрәм Усман (радыйаллаһу ғәнһү) әйткән:

«Хаҡ иман эйәһендә алты ҡурҡыу бар:

1. Аллаһтың имандан мәхрүм итеүенән ҡурҡыу.

2. Хисап көнөндә фәрештәләр ғәмәлдәрен теркәп барған яҙмаларҙың уны рисуай итеүенән ҡурҡыу.

3. Шайтандың уның изге ғәмәлдәрен юҡҡа сығарыуынан ҡурҡыу.

4. Үлем фәрештәһе Ғазраил көтмәгәндә, ул ғәмһеҙ саҡта килеүенән ҡурҡыу.

5. Балалар мәшәкәте менән мәшғүл булып, Аллаһты зекер итеүгә, Уға итәғәтле булыуға тейешенсә иғтибар бирә алмауҙан ҡурҡыу.

6. Был донъяға алданып, мәңгелек донъяға ҡарата ғафил булыуҙан ҡурҡыу».

❁

Был донъяла ғүмер ҡыҫҡа. Һәм ошо ҡыҫҡа ғына осорҙа беҙҙең төп бурысыбыҙ:

– Аллаһ ризалығы өсөн бер-беребеҙҙе һөйгән ҡәрҙәштәр булыу;

– Үҙ ризығын үҙе тапҡан, кешеләр менән һөйкөмлө булған өлгөлө мосолман булыу;

– Йөрәктәрҙе яулап, уларҙың рәхмәтенә, доғаларына лайыҡ булыу;

– Һис кемгә йөк түгел, ә дуҫ булыу;

– Быларҙың һәммәһен үтәп, Аллаһ хозурына Раббыбыҙҙың ерҙәге шаһиттары булған иман эйәләренән “ул яҡшы мосолман” тигән раҫлама менән барып баҫыу.

❁

Хикмәт эйәләре әйткән:

«– Был фани донъяла күпме ҡалыуыңа ҡарап, уға хеҙмәт ит!

– Киләсәк тормошоң өсөн уның йәшәү мөҙҙәтенә ярашлы хеҙмәт ит!

– Мохтажлығың Уға ни кимәлдә булһа, шул кимәлдә Аллаһҡа буйһон!

– Йәһәннәмдә ни саҡлы түҙә алаһың, шул саҡлы гонаһ ҡыл!».

❁

Йә Мәрхәмәтлеләрҙән-мәрхәмәтле булған Раббым!

Беҙҙе, был донъя менән мауығып, үҙен бер стакан һыуға батырып һәләк иткәндәрҙең яҙмышынан арала! Ғүмеребеҙҙе һәм үлемебеҙҙе тәкүәле ҡолдарыңа бүләк итеп биргән тыныслыҡ, сәғәҙәт, именлек һәм Үҙеңдең ризалығың менән биҙә!

Амин!..

БАҡЫЙЛЫҠҠА СӘФӘР

«Нимә ул тормош?» һорауына иң тулы яуап ҡәберҙәрҙең дымлы таштарына йәшеренгән. Тынлыҡҡа күмелгән һәр бер ҡәбер ташы – халәт теле менән һөйләүсе ялҡынлы остаз. Бөгөн ҡәбер таштарының өнһөҙ нәсихәтен алыу һәләте – иртәгә мәңгелектә сәғәҙәткә ирешеүҙең иң яҡшы сараһы…

❁

Ғүмер баҙарының иң күркәм кейеме булған кәфен үтә торған сауҙаларҙы, ләззәттәрҙе, туймаҫ теләктәрҙе юҡҡа сығарыусы түгелме?

Ҡояш һәм ай – күк көмбәҙе буйлап юл тотоусы ике календарь. Кеше үҙенең тормошон шуларға ярашлы көйләй.

Әммә кеше үҙе лә календарь менән тыуа. Тормошобоҙ – һанаулы көндәрҙән торған беҙгә бирелгән мөмкинлектәр календары. Шулай уҡ ул йәмғеһе нисә метр икәнлеге билдәһеҙ булған уралған епкә лә оҡшаған – ҡасан һәм ҡайҙа уның бөтөүе билдәһеҙ. Бына ни өсөн ҡәбергә һәр ваҡыт әҙер булыу мөһим…

❁

Күренмәгән ҡул көн һайын календарыбыҙҙан бер битте йыртып ала һәм үлем елдәре ихтыярына ҡалдыра. Һәр һулышыбыҙ донъялыҡтан алыҫҡараҡ алып китә һәм бер аҙымға беҙҙе ҡәбергә яҡынайта.

Шулай булғас мәңгелек тормош өсөн беҙ ни тиклем тырышлыҡ күрһәтәбеҙ, ә ни кимәлдә үҙебеҙ ташлап китәсәк фани донъя өсөн тырышабыҙ?

❁

Ғүмер капиталын ғәмһеҙ рәүештә сарыф иткәндәр әхирәттә тағы бер шанс биреүҙе талап итер. Әммә ғүмер – бер генә тапҡыр алып була торған ниғмәт. Уны яңынан ҡайтарып булмай. Әгәр был фани донъяла беҙ имтиханыбыҙҙы бирә алмаһаҡ, уны ҡабат биреү мөмкинлегебеҙ бар. Әммә ғүмер ниғмәтен ҡайтанан алып булмай, уның имтихандарын да ҡайтанан биреп булмай.

Бынан тыш Раббыбыҙ Аллаһ һәр төн беҙгә үлемдең туғаны булған йоҡо ебәрә һәм һәр иртә һайын «бәғҫү бәғдәл-мәүт» миҫалын, йәғни «үлемдән һуң терелеүҙе» күрһәтеп уята. Шул рәүешле Раббыбыҙ һәр иртә ғүмеребеҙ календарының яңы битен аса һәм беҙгә яңы мөмкинлектәр һәм шанс бирә.

Был илаһи тәртип беҙҙе, үлгәндән һуң кире фани донъяға ҡайтып, әхирәт өсөн хеҙмәт итергә теләгәндәрҙең ҡаты үкенесе тураһында уйланырға саҡыра.

❁

Мөхтәрәм Хәсән әл-Басриҙың нәсихәте беҙгә гүзәл үрнәк. Үҙе ҡатнашҡан йыназанан һуң, ул шунда булған бер әҙәмгә һорау бирә:

«Белге килә, был әруах, хәҙер үк кире донъяға ҡайтып, күберәк изге ғәмәлдәр, зекер ҡылырға һәм гонаһтары өсөн ғәфү үтенергә теләр инеме икән?» Уның менән әңгәмәләшкән кеше әйтә:

«Эйе, әлбиттә». Быға ҡаршы мөхтәрәм Хәсән әл-Басри былай ти:

«Улайһа, донъянан киткән был кеше теләгәнде беҙ ни өсөн теләмәйбеҙ?».

❁

Һәр иртә, уянғас, шулай тип фекер йөрөтөү лазым:

«Раббым Аллаһ миңә ғүмер календарының яңы бер битен асты. Кисә генә иҫән булған, ә бөгөн баҡыйлыҡҡа күскән бик күп кешеләр бар. Иртәгә иҫән булыуым билдәһеҙ.

Кисә ғәмәлдәремде яҙып барыусы фәрештәләрем минең турала нимә яҙҙы, әхирәттәге ғәмәл дәфтәремә нимә теркәп ҡуйҙы икән? Илаһи хисап мәлендә был бит өсөн яуап бирә алырмынмы? Киәмәттә үҙем уҡыясаҡ ғәмәл дәфтәремә бөгөн нимә яҙылыр?».

❁

Үҙ-үҙебеҙгә һорауҙар биреп, хисаплама алыр өсөн, бына бер нисә кәңәш:

• Бөгөн иртән Ғәмәл дәфтәреңде нимә менән астың?

• Яңы көн бүләк иткән өсөн, Раббыңа рәхмәтеңде белдерҙеңме?

• Яңы көндә Раббыңа хеҙмәт антын яңырттыңмы?

• Әгәр бөгөн үлһәм, мине кәфенгә ураҙар, ҡәбергә һалырҙар, йыназала ҡатнашҡан бөтә ғаиләм, туғандарым һәм дуҫтарым ҡайтып китер, һәм ҡәберҙә иманым, ғәмәлдәрем менән яңғыҙ ҡалырмын, тип берәй ваҡыт уйлағаның булдымы?

❁

Әгәр әҙәм ҡулына алтын кеүек ҡиммәтле нәмә килеп инһә, уны, әрәм итмәйенсә, миллиграмына тиклем файҙалана. Алыусы ла, һатыусы ла уны иң теүәл үлсәү менән үлсәй.

Ваҡыт – кешегә бүләк итеп бирелгән иң ҡиммәтле нығмәт. Әгәр кеше һәр көндө, һәр сәғәтте, һәр минутты Аллаһ риза булырлыҡ итеп файҙалана икән, ул был нығмәттең ҡиммәтен аңлай. Былар һәммәһе уның Ғәмәл дәфтәренә киләсәк тормоштоң килеме рәүешендә яҙыла.

❁

Ваҡыт – иң ҡиммәтле актив. Һеҙ уны бурыҫҡа ала алмайһығыҙ, бурыҫҡа ла бирә алмайһығыҙ, тотош мөлкәтегеҙҙе биреп тә, кисәге көндө ҡайтара алмайһығыҙ. Шундай әйтем бар: «Бер ваҡыт эсендә ҡыҙыл яҡут һатып алырға була, әммә ҡыҙыл яҡут биреп, ваҡытты һатып алып булмай».

❁

Ғүмеребеҙҙең һәр мәле ни тиклем ҡиммәт булыуын аңлайбыҙмы икән? Раббыбыҙ Аллаһ киҫәтә:

«Ант итәм эңер менән! Ысынлап та, әҙәм балаһы хәсрәттәлер. Иман килтереп, изгелек эшләп, хаҡлыҡҡа өйрәтешеп, бер-береһен сабырлыҡҡа өндәгәндәренән башҡаһы!» (әл-Ғаср (Киске ваҡыт), 1-3).

❁

Ғүмер бер генә бирелә. Бер тапҡыр юғалтҡас, уны һис ҡасан кире ҡайтарып булмай. Әгәр кеше бөтә байлығын биреп тә лә, Аллаһ насип иткән үлем сәғәтен бер секундҡа ла кисектерә алмай. Бына ни өсөн иң ҙур исраф – ваҡытты исраф итеү!

❁

Аятта әйтелә:

«Ҡиәмәт көнөн күргәс, уларға донъяла өйләгә саҡлы – ярты көн, өйләнән һуң ярты көн торған кеүек тойолор» (ән-Нәзиғәт (Йолҡоп алыу), 46).

Уйлап ҡарайыҡ, әгәр Аллаһ беҙгә мең йыл ғүмер биреп, мәҫәлән, 1000 йылда тыуһаҡ һәм донъя менән 2000 йылға тиклем идара итһәк, инде 20 йылдан ашыу беҙ баҡыйлыҡта булыр инек.

Йәғни, ни тиклем генә оҙаҡ йәшәһәк тә, төп һәм мәңгелек йәшәйешебеҙ булған әхирәт менән сағыштырғанда, был донъялағы көн итмешебеҙ бик ҡыҫҡа ғына бер мәл.

❁

Беҙ, үлемгә дусар икәнлегебеҙҙе иҫтә тотоп, һәр ваҡыт үлемгә һәм унан һуң баласаҡ нәмәләргә әҙер булырға тейешбеҙ.

Онотмайыҡ, әгәр беҙ Нух (ғәләйһис-сәләм) кеүек оҙон ғүмерле булһаҡ та, Сөләймән (ғәләйһис-сәләм) кеүек бай булһаҡ та йәки Йософ (ғәләйһис-сәләм) кеүек сибәр булһаҡ та, әммә үҙебеҙҙең фани булыуыбыҙҙы төшөнмәһәк, отолошта булырбыҙ.

❁

Мөхтәрәм Усман (радыйаллаһу ғәнһү) әйткән:

«Иң зур юғалтыу – әхирәт өсөн ризыҡ әҙерләнмәйенсә бушҡа үткән оҙон ғүмер».

❁

Мәңгелек әхирәт менән сағыштырғанда, бер тамсы һыу кеүек кенә ғүмер – бишектән ҡәбергәсә булған юлдан ғына тормаған юғары хәҡиҡәт.

Һәр кемдең юлында осраясаҡ үлем барса фани ләззәттәргә, шәһүәттәргә һәм был донъяның ялған ялтырауыҡтарына сик ҡуя. Бынан һуң инде мәңгелек киләсәк өсөн һис ни ҡылып булмаясаҡ, үткәндәргә үкенеү ҙә файҙа бирмәйәсәк.

❁

Иң ҡиммәтле ваҡыт – әлеге, үткән менән киләсәк араһындағы ваҡыт, сөнки булып үткән ғәмәлдәр китабы ябыҡ, ә киләсәктә ни булыры билдәһеҙ.

❁

Мөхтәрәм Джүнәйд Бағдади әйткән:

«Фани донъялағы бер көн әхирәттәге мең йылдан яҡшыраҡ, сөнки был донъяла бер көн эсендә Аллаһтың ризалығына ирешергә мөмкин. Әхирәттә, ер донъяһындағы кеүек изге ғәмәлдәр ҡылып, әжер-сауап алыу мөмкин түгел. Унда беҙҙе иҫәп-хисап ҡына көтә».

❁

Фани донъялағы ҡыҫҡа ғына мәл дә иҫ киткес мөһим, сөнки унда мәңгелек сәғәҙәт йәки мәңгелек ғазап орлоҡтары булыуы ихтимал. Моһмингә һәр көндө әхирәт ризығы әҙерләү өсөн табыш итеп ҡарау зарур. Бер генә изге ғәмәлде лә иртәгәгә ҡалдырырға ярамай, һинең ул иртәгәң буламы-юҡмы – билдәһеҙ. Изге ғәмәлдәрен һуңға ҡалдырғандар, тырышлыҡ күрһәтмәгәндәр тураһында әйтелә: «Иртәгә эшләрмен тигәндәр һәләк булды».

❁

Үлем – ҡарттар ғына саҡырыла торған осрашыу түгел. Тыуымдан ҡалмаған һәр кем үлемдән ҡалмаҫ. Шуға күрә әхирәткә йәшкә ҡарап әҙерләнмәйҙәр.

Ҡәбер таштарын ҡарап, зыярат буйлап китеп барғанда, шуны күрәбеҙ: баҡыйлыҡҡа күскәндәрҙең күбеһе беҙҙең йәштә йәки беҙҙән йәшерәк, улар фани донъяны ҡалдырған һәм үҙҙәренең әхирәттәге яҙмышы өсөн инде һис ни ҡыла алмай.

Шуға ла намаҙҙарҙы, ураҙаларҙы һәм хаж ғәмәлдәрен, хаҡлы ялға сыҡҡас, тип кисектереү, тәүбәләрҙе, изге ғәмәлдәрҙе һәм Аллаһҡа хеҙмәтте тыуыры билдәһеҙ булған иртәгә ҡалдырыу кешене тәрән үкенестәргә алып килеүе ихтимал. Иртәгәһе булмаған көн һәр кемгә киләсәк!

❁

Мөхтәрәм Усман (радыйаллаһу ғәнһү) әйткән:

«Үлем килгәнсе, ҡулығыҙҙан килгән изге ғәмәлдәрҙе һуңлатмайынса ҡылығыҙ».

❁

Мөхтәрәм Ғүмәр (радыйаллаһу ғәнһү) әйткән:

«Бөгөнгө эште иртәгәгә ҡалдырмағыҙ! Бер эште ҡалдырһаң, артабан барыуы ауыр буласаҡ».

❁

Бөгөн беҙҙең изге ғәмәлдәр ҡылырға һәм, тәүбә ҡылып, халәтебеҙҙе яҡшыртырға мөмкинлегебеҙ бар. Онотмайыҡ, хатта ки был мөмкинлектән файҙаланмаһаҡ та, үлем мәле еткәс, Ғазраил үҙ бурысын үтәүҙе ситкә ҡуймаясаҡ.

❁

Мөхтәрәм Усман (радыйаллаһу ғәнһү) әйткән:

«Эй, Әҙәм балаһы! Тыуған көнөңдән бирле үлем фәрештәһе артыңдан йөрөгәнен онотма. Бына ул, елкәңдән һикереп төшөп, икенсе берәүҙе эләктереп ала. Һин фани донъяла булғанда, был хәлдәр һәр даим дауам итә. Әммә шундай көн дә килер: ул башҡа берәүҙең елкәһенән һикереп төшөп, һине эләктереп алыр.

Был хәл һин бөтөнләй көтмәгәндә булыуы ла ихтимал. Шуға күрә һуңғы һулышыңа ҡәҙәр әҙер тор, ул һине иҫкәрмәҫтән тотоп алмаһын. Үлем фәрештәһе һине һис ҡасан онотмаясаҡ...

Эй, Әҙәм балаһы! Бел, әгәр нәфесеңә ҡарата ғәмһеҙ булһаң һәм үҙең өсөн бер нәмә лә әҙерләмәһәң, башҡа берәү быны һинең өсөн эшләмәйәсәк. Онотма, һин мотлаҡ Аллаһ ҡашына барып баҫасаҡһың, шуға күрә алдан уҡ юл хәстәрен әҙерлә. Был эште минең өсөн башҡа берәү эшләр, тип уйлама!» (Ғәли әл-Муттаки, № 42790).

❁

Һуңғы һулыштан һуң, Аллаһ ҡоло булараҡ һынауҙарыбыҙ тамамлана. Беҙ ҡәберҙә лә, Ҡиәмәт көнөндә лә, Мәхшәр майҙанында ла ниндәйҙер изге ғәмәлдәр ҡыла алмаясаҡбыҙ… Ә унда беҙҙе ниндәй тормош көтөүен фани донъя мәктәбендә алған өлгәш табеле һөҙөмтәләребеҙ күрһәтер.

Мөхтәрәм Ғәли (радыйаллаһу ғәнһү) әйткәнсә:

«Бөгөн хисап булмаған ғәмәлдәр көнө. Иртәгә – хисап, һәм изге ғәмәлдәр ҡылыу мөмкинлеге юҡ».

❁

Хәҙистә әйтелә:

«Кеше үлгәс, өсәүҙән ҡала бөтә ғәмәлдәре туҡтала, ә үлгәндән һуң да килеп торған әжер-сауаптар: өҙлөкһөҙ саҙаҡа, кешеләр файҙалана алған ғилем; уның өсөн Аллаһҡа доға ҡылып торған тәҡүәле балалар» (Мөслим, Васиййа, 14).

❁

Хәҙистә әйтелә:

«Алмашҡа йәнә биш нәмә килгәнсе, тормошоғоҙҙағы биш нәмәнең ҡәҙерен белегеҙ: Ҡартлыҡ килгәнсе, йәшлегегеҙҙең ҡәҙерен белегеҙ. Сирҙәр килгәнсе, һаулығығыҙҙың ҡәҙерен белегеҙ. Донъя хәстәре килеп баҫҡансы, буш ваҡытығыҙҙың ҡәҙерен белегеҙ. Фәкирлек килгәнсе, байлығығыҙҙың ҡәҙерен белегеҙ. Үлем килгәнсе, ғүмерегеҙҙең ҡәҙерен белегеҙ!» (Бохари, Рикак, 3; Тирмизи, Зуһд, 25).

❁

Риүәйәттәрҙә хәбәр ителгәнсә, үлем фәрештәһен күргәс, Ильяс пәйғәмбәрҙең (ғәләйһис-сәләм) ҡото оса. Ғазраил (ғәләйһис-сәләм), ҡыҙыҡһынып, унан һорай:

«Йә Аллаһ пәйғәмбәре! Һин үлемдән ҡурҡтыңмы?» Ильяс (ғәләйһис-сәләм) уға шундай яуап бирә:

«Юҡ! Минең был халәтем үлемдән ҡурҡыуҙан түгел, ә был донъя менән хушлашыуҙан. Был донъяла йәшәгәндә, мин Раббыма хеҙмәт итергә ты-

рыштым, яҡшылыҡҡа саҡырҙым, яманлыҡтан тыйҙым, ғүмеремде ғибәҙәттәр, изге ғәмәлдәр ҡылып үткәрҙем, күркәм холоҡло булырға ынтылдым. Былар күңелем хозурлығы сығанағы булды, йөрәгем иман һоҡланыуы, рухи шатлыҡ менән тулды. Үлгәс, мин был ләззәттәрҙән мәхрүм буласаҡмын, Ҡиәмәткә саҡлы ҡәберемдә аманат булып ҡаласаҡмын!».

❁

Тәбиғиндәр быуынына ҡараған Әмир ибн Әбдиҡайс (рәхимәһуллаһ), үлеме яҡынлашҡас илай башлай. Бының сәбәбен һорағас, ул әйтә:

«Мин үлемдән ҡурҡып һәм был донъяға күңел бағлап иламайым. Эҫе көндәрҙә ураза тотоуҙан һәм төнгө ғибәҙәттәрҙән (тәһәджуд намазынан) мәхрүм булам, тип илайым» (Зәһәби, Сийар, IV, 19).

❁

Һәр мөьмин Аллаһ уны һөйгән һәм унан разый булған халәткә ынтылырға һәм бының өсөн Хаҡ Тәғәләгә доғалар менән мөрәжәғәт итергә, Уға һыйынырға тейеш. Бындай ниәттән һәм бындай ынтылыштан мәхрүм булған ғәмһеҙ халәт – сүплеккә ырғытылған ғүмер календарының алтын биттәре. Аллаһты онотҡан ваҡыт – кешене киләһе тормошта яндырасаҡ үкенес ялҡыны…

❁

Беҙгә фекерләп ҡарау лазым:

– Йәшәлгән ғүмеребеҙ Аллаһ риза булғандарға ярашлы үткәнме?

– Ваҡытыбыҙҙы алъюҫыҡҡа телевидениеға һәм интернетҡа, уйындарға һәм күңел асыуҙарға, файҙаһыҙ шөғөлдәргә, айырыуса, модаға эйәрергә тырышып, кәрәкмәгән нәмәләр һатып алыуға, исраф менән тулы ялтырауыҡ сараларға сарыф итмәйбеҙме? Әллә ваҡытыбыҙ Аллаһ риза булған нәмәләргә бағышланғанмы? Әгәр күп ваҡытыбыҙ бушҡа үтһә, быны төҙәтергә тырышабыҙмы?

– Әлеге мәлдә тәүбәләр ҡылып, Аллаһты зекер итеп, Ҡөрьән уҡып, изге ғәмәлдәр ҡылып, Аллаһ юлында хеҙмәт итеп, тырышлыҡ һәм фиҙакәрлек менән әхирәт өсөн әҙер-сауаптар әҙерләйбеҙме?

– Донъяның бөткөһөҙ мәшәкәттәре, ығы-зығыһы араһында һуңғы һулышыбыҙҙың ниндәй булыуын, ҡәберҙә һәм мәңгелек донъяла беҙҙе нимә көтөүен уйлайбыҙмы?

❁

Онотмаҫҡа тейешбеҙ: беҙ был донъяға киләһе тормош өсөн килдек. Беҙгә фекерләп ҡарау зарур:

– Бөтә барлыҡтың юлы ҡайҙан һәм ҡайҙа бара?

– Ни өсөн был донъяға тереләр килә һәм унан китә, бер яҡтан – тыуым, икенсе яҡтан китем булған нәсихәт тулы был тәртип ни өсөн кәрәк?

– Ни өсөн килдек беҙ был донъяға, кем биләмәһендә йәшәйбеҙ һәм ҡайҙа юл тотабыҙ?

– Беҙ ҡәберҙәге һәм Ҡиәмәттәге хисапҡа әҙерме? Бөгөн әхирәт мизанына һалыр өсөн нимә әҙерләнек?

❁

Һәр сәфәрҙең үҙ ауырлығы була. Әммә, яҡшы итеп әҙерләнеп, бәндә уны еңеләйтә ала. Мәңгелек сәфәренә әҙерләндекме беҙ?

Бер нәмәне онотмайыҡ: иман эйәһенең бөтә тормошо – был фани донъянан мосолман булып китә алыу өсөн әҙерлек ул.

❁

Ер тормошо – ул мәңгелек тормошҡа әҙерлек. Ҡәбергә һәм әхирәткә ауыр күсеште еңеләйтеү, мәңгелек донъяла имен булыу өсөн, моһмингә Раббыбыҙға ихласлыҡ менән тулы ғибәҙәттәр, изге ғәмәлдәр, дин юлындағы фиҙакәр хеҙмәт менән ҡайтыу зарур.

❁

Әгәр ҙә ки мәңгелеккә сәфәребеҙҙең иң ауыр ваҡыттарында – һуңғы һулыш мәлендә, ҡәберҙә, Хисап көнөндә, Мизан янында, Сират күперендә – Раббыбыҙҙың беҙгә ярҙам итеүен теләһәк, бөгөн Уның ҡушҡандарын ентекле үтәп, тыйғандарынан тыйылып, быға лайыҡ булырға тырышырға тейешбеҙ.

Ауырлыҡтар һәм мохтажлыҡтар килгәндә Раббыбыҙ беҙҙе илаһи ярҙамынан ташламаһын өсөн, имен саҡта Аллаһты күберәк зекер итеү, дин юлында тырышып хеҙмәт итеү лазым.

❁

Үлемгә табан һуңғы боролмабыҙ, йәғни һуңғы һулышыбыҙ бик текә һәм ҡурҡыныс, сөнки был мәлдә бер яҡтан үҫешмәгән нәфес, икенсе яҡтан шайтан Аллаһҡа хеҙмәт юлынан тайпылдырыу өсөн бөтә көстәрен һала. Шуға күрә Аллаһ Тәғәлә аятта әйтә: **«Эй, иман килтергәндәр, Аллаһтың язаһынан нисек ҡурҡырға кәрәк булһа, шулай ҡурҡығыҙ! Һаҡ булығыҙ, мосолманлыҡтан башҡа хәлдә йән бирмәгеҙ (мосолман булып үлегеҙ)!»** (Әлү Ғимран (Мәрйәмдең атаһы), 102).

Бына ни өсөн Раббыбыҙ Аллаһҡа һуңғы һулышыбыҙҙа иманыбыҙҙы һаҡлай алыуҙы һорап ябарған доғаларыбыҙ ҙур әһәмиәткә эйә.

❁

Бәндә ниндәйҙер донъяуи диплом алһа, ул ғүмере буйына ғәмәлдән сыҡмай. Әммә рухи тормошта улай түгел. Тәкүәлек уны һаҡлау өсөн тырышлыҡ талап итә. Әгәр ғәмәл ҡылмаһаң, Аллаһ һаҡлаһын, унан мәхрүм ҡалыуың ихтимал. Икенсе төрлө әйтһәк, ирешкән рухи халәтеңде һәм дәрәжәңде теләһә ниндәй мәлдә юғалтыуың ихтимал.

Ҡөрьәндә, Бәлғәм ибн Баура һәм Ҡарун кеүек, ғүмерҙәре һуңында тура юлдан тайпылғандар тураһында һүҙ бара.

Был йәһәттән һуңғы һулышыңа саҡлы уғата уяу булыу зарур. Раббыбыҙ Аллаһ аятта әйтә:

«Әжәлең килгәнгә ҡәҙәр, Раббыңа ғибәҙәт ҡыл» (әл-Хиджр (Хижр иле), 99).

❁

Мөьмин өсөн был һынау донъяһындағы иң мөһим диплом – һуңғы һулыштағы иман шәһәдәһе.

❁

Мөхтәрәм Суфьян Сауриҙың арҡаһы йәш саҡта бөкрәйеп ҡала. Бының сәбәбен һорағас, ул әйтә: «Мин ғилем алған остазым бар ине. Ул үлем хәлендә саҡта, тәүхид кәлимәһен ни тиклем генә әйттерергә тырышһам да, ул әйтә алманы. Был хәл минең арҡамды бөкрәйтте».

❁

Һуңғы һулышыңды иман менән алыу өсөн, быға ғүмерең буйы әҙерләнергә кәрәк. Тәүхид кәлимәһен әйтеп кенә тынысланып, был кәлимәгә ярашлы Аллаһҡа тейешенсә хеҙмәт итмәйенсә, һуңғы һулышымды иман менән алырмын, тип уйлау – ҙур яңылышлыҡ. Изге аятта әйтелә бит:

«Иман килтерҙек (бер Аллаһҡа инандыҡ)», тип әйткәндән һуң, ауырлыҡтар аша һыналмайбыҙ, беҙҙе иғтибарһыҙ ҡалдырырҙар, тип уйлайҙармы әллә кешеләр?» (Әл-Ғәнкәбут (Үрмәксе), 2).

Шуға күрә Аллаһ ҡолона, иман талап иткән тейешле талаптарҙы үтәп, ғүмерен ғибәҙәттәр һәм изге ғәмәлдәр менән биҙәп йәшәү лазым.

❁

Пәйғәмбәребеҙ (салләллаһу ғәләйһи үә сәлләм) Аллаһҡа йыш ҡына шулай тип доға ҡылған һәм өммәтенә лә уны ҡылырға нәсихәт биргән:

يَا مُقَلِّبَ الْقُلُوبِ ثَبِّتْ قَلْبِى عَلٰى دِينِكَ

«Йә Йөрәктәрҙе Күндереүсе, минең йөрәгемде Үҙеңдең динең менән нығытсы!» (Тирмизи, Дәғүәт, 89/3522; Әхмәд, IV, 182, VI, 91).

❁

Пәғәмбәрҙәрҙән һәм изге хәбәр менән һөйөндөрөлгәндәрҙән ҡала һуңғы һулышында иманын һаҡлап ҡалыуына һис бер Аллаһ ҡолоноң ныҡлы ышанысы юҡ. Күпме кеше, был хәҡиҡәтте онотоп, ғәмһеҙ рәүештә шулай тип белдерә: «Мин әхирәттә фәлән кешенең итәгенә йәбешермен, һәм ул мине ҡотҡарыр!». Эйе, шәфәғәт ҡылыу – хаҡ. Әммә шәфәғәтте Аллаһ Тәғәлә рөхсәт иткән кешеләр генә ҡыла аласаҡ, ә кем ул кешеләр – билдәһеҙ.

❁

Заһитлығы һәм ғибәҙәттәргә тоғролоғо менән билдәле булған сәхәбәләрҙең береһе Усман бин Мәғзун (радыйаллаһу ғәнһү) вафат булғас, бер ҡатын былай тип белдерә:

– Йә Усман, шаһитлыҡ ҡылам, Аллаһ хәҙер һиңә бәрәкәттәрен бирә инде!

Аллаһ Илсеһе (салләллаһу ғәләйһи үә сәлләм) шул саҡ һорау бирә:

– Аллаһ уға бәрәкәттәрен биргәнен һин ҡайҙан беләһең?

Ҡатын шунда уҡ һүҙҙәренән баш тарта:

– Аллаһ менән ант итеп әйтәм, мин быны белмәйем!

Аллаһ Илсеһе (салләллаһу ғәләйһи үә сәлләм) әйтә:

– Ҡарағыҙ, Усман донъя ҡуйҙы. Шәхсән үҙем уға Аллаһтан яҡшылыҡ булыр, тип өмөтләнәм. Әммә, пәйғәмбәр булһам да, үҙем менән дә, һеҙҙең менән дә ни булыры миңә билдәле түгел…» (Бохари, Табир, 27).

Беҙҙең бурыс – һәр ваҡыт әруахтарыбыҙ өсөн доғалар ҡылыу һәм Аллаһтың мәрхәмәтенә һыйыныу.

❁

Сәлмән Фәриси (радыйаллаһу ғәнһү) бөтә шәхесе һәм айырыуса Аллаһ юлындағы физакәрлеге менән барса мосолмандарға үрнәк булырҙай дәрәжәгә күтәрелә. Ансарҙар һәм мөһажирҙар, уны ҡайһы төркөмгә индерергә белмәйенсә, хатта бәхәсләшеп китә. Һәр төркөм әйтә:

«Сәлмән – беҙҙән». Шунан һуң Аллаһ Илсеһе (салләллаһу ғәләйһи үә сәлләм) әйтә:

«Сәлмән - беҙҙән, ул минең йортом әһелдәренән!» (Хаким, III, 691/6541; Хайсами, VI, 130).

Аллаһ Илсеһе (салләллаһу ғәләйһи үә сәлләм) уның тураһында шулай телгә алһа ла, был фатихалы сәхәбәнең йөрәге һуңғы һулышы һәм әхирәттәге яҙмышы өсөн ҡурҡып тетрәнә. Сәлмән Фәриси (радыйаллаһу ғәнһү) ана шулай һәр даим хәүеф һәм өмөт араһында була.

Бер заман ике кеше, мөхтәрәм Сәлмән Фәрисиҙе (радыйаллаһу ғәнһү) сәләмләп, уға һорау бирә:

«Һин Аллаһ Илсеһенең (салләллаһу ғәләйһи үә сәлләм) сәхәбәһеме?» Ул әйтә:

«Мин белмәйем». Яңылыш килдекме икән әллә тип, килеүселәр аптырап ҡала. Сәлмән (радыйаллаһу ғәнһү) һүҙен шулай тамамлай:

«Мин Аллаһ Илсеһен (салләллаһу ғәләйһи үә сәлләм) күрҙем, мин уның йыйылыштарында булдым. Әммә Аллаһ Илсеһенең (салләллаһу ғәләйһи үә сәлләм) хаҡ сәхәбәләре – уның менән бергә Йәннәткә инә алыусылар» (Хайсами, VIII, 40-41; Зәхаби, Сийар, I, 549).

❁

Мөхтәрәм Ғәли (радыйаллаһу ғәнһү) әйткән:

«Иң тулы бәрәкәт – исламда донъя ҡуя алыу».

❁

Был фани донъяла яратылып, Аллаһтың Әл-Һәәди (Тура юлға күндереүсе) Исеме йоғонтоһо менән шәрәфләнеп, исламда булыуыбыҙ өсөн күпме генә рәхмәттәребеҙҙе белдерһәк тә, был әҙ. Хатта ки ошо ҙур ниғмәткә эйә булһаҡ та, һуңғы һулышыбыҙҙа уны һаҡлай алыуыбыҙға гаратия юҡ.

Шуға күрә әхирәттә ҡотолоуҙың берҙән-бер капиталы булған был фани донъяла Аллаһҡа һуңғы һулышыбыҙҙы иман менән алыу тураһындағы доғаны (хусн-и хатимә)[37] иҫтән сығармау лазым.

❁

Һәр саҡ, үҙебеҙҙең көсһөҙлөгөбөҙҙө танып, Йософ (ғәләйһис-сәләм) ялбарып мөрәжәғәт иткән доғаны ҡылып, Аллаһтың мәрхәмәтенә һыйыныу зарур:

تَوَفَّنِى مُسْلِمًا وَاَلْحِقْنِى بِالصَّالِحِينَ

37. Хусн-и хатимә – исламда тыуыу, мосолман кеүек йәшәү һәм иман менән йән биреү.

«…(Йә, Раббым!) Мосолман булған хәлемдә йәнемде ал, зинһар. Һәм мине изгеләр рәтенә ҡуй!» (Йософ, 101).

❁

Үбәйҙуллаһ Ахрар (рәхмәтуллаһи ғәләйһи) бәйән итеүенсә, бер салих зат төшөндә баҡыйлыҡҡа күскән Баһауддин Нәҡшбәндте (рәхмәтуллаһи ғәләйһи) төшөндә күрә һәм уға һорау бирә:

«Мәңгелек ҡотолоуым өсөн миңә ни эшләргә?» Ул шундай яуап ала:

«Һуңғы һулышыңда ни ҡылырға кәрәк булһа, шуны ҡыл».

❁

Фани донъялағы һәр һулышыбыҙ һуңғы һулышыбыҙ өсөн компас кеүек. Шул уҡ ваҡытта ул, үҙенә күрә тәржемәсе һымаҡ, әхирәттәге халәтебеҙ ниндәй буласағын алдан иҫкәртә.

Хәҙистә әйтелә:

«Һеҙ нисек көн итһәгеҙ, (шул халәттә) шулай үләсәкһегеҙ, һәм нисек үлһәгеҙ, (Ҡиәмәт көнөндә) шулай тергеҙеләсәкһегеҙ» (Мүнәви, Файзу әл-ҡадир шәрху әл-джәми әс-Сәғир, V, 663).

❁

Тормош стаканды тултырған тамсыларға оҡшаш. Һыуҙың таҙалығы тамсылар таҙалығына бәйле. Һуңғы һулыш стакандан ашып түгелгән һуңғы тамсы кеүек.

❁

Мөхтәрәм Бәхлүл Дана, юл ҡырындағы ташландыҡ йорттоң ауырға торған диуарын күреп, был күпме торор икән, тип уйлай. Һәм бер көндө, ул, хәүефләнеп уға ҡарап торғанда, диуар ҡапыл ишелеп төшә. Бәхлүл Дананың йөҙө ҡыуаныстан балҡый. Уның шатлығын аңлай алмаған кешеләр, ҡыҙыҡһынып, уға һорау бирә:

«Диуар үҙе ауышҡан яҡҡа ауҙы! Бының нимәһенә шатланаһың инде?!», Бәхлүл Дананың яуабы тәрән мәғәнәле була:

«Әгәр донъяла бөтә нәмә үҙе ынтылған яҡҡа ауа икән, мин әл-Хәҡҡ яғына ынтылғанлыҡтан, үлгәс, Аллаһ бойорһа, әл-Хәҡтың ризалығына ирешәсәкмен».

Эй, кешеләр, башҡа яҡҡа аумаҫ өсөн, үҙебеҙҙең сәждәләребеҙ һәм рөҡуғтарыбыҙ менән Хәҡиҡиға ынтылышты арттырайыҡ!

Хәкиҡәт дуҫтары, әйтерһең дә, донъяға әхирәт тәҙрәһенән баға. Хатта ки, иртәгә үләсәкһең, тип хәбәр итһәләр ҙә, уларға көндәренең тәртибен үҙгәртеү кәрәкмәҫ. «Хуш килдең!» - тип, үлем фәрештәһен сәләмләй алыр өсөн, улар, Аллаһҡа хеҙмәт итеп, һуңғы һулыштарына һәр ваҡыт әҙерлек халәтендә.

❁

Әхирәте өсөн ҡурҡып, был донъяла күп йәш түккәндәр һуңғы һулышында, ҡәберҙә, Хисап көнөндә, Мизан янында һәм Сират күперендә йылмайыусылар араһында булыр.

Нәжип Фазыл Аллаһтың тәкүәле ҡолдарының һуңғы һулышын шулай тасуирлай:

Ҡорғандар алмашына был мәл:

бәғзеләре төшә, бәғзеләре күтәрелә...

«Хуш килдең, Ғазраил!» - тип әйтергә генә ҡала...

❁

Мөьмингә был донъяның фани булыуын һәр ваҡыт күңеле менән тойоп йәшәү зарур. Ғүмер ебе теләһә ниндәй мәлдә өҙөлөүе ихтимал, шуға күрә быға әҙер булыу кәрәк. Күптәрҙең ҡотон алған үлемде лә тәкүәлек ярҙамында гүзәл рәүештә ҡаршы алырға мөмкин...

❁

Рухи йәһәттән әҙәм ғүмере ниндәй булһа, үлеме лә шуға ярашлы булыр. Иман эйәһе өсөн ул имен байрам иртәһе кеүек булыр, ә кәфер өсөн – ҡурҡыныс ғазап менән тулы...

❁

Әбү Хазим (рәхимәһуллаһ) әйткән:

«Аллаһтың күндәм ҡолоноң Раббыһына китеүе үҙен түҙемһеҙләнеп көтөп торған йорто, ғаиләһе һәм яҡындары менән осрашыу шатлығына оҡшаш булаҫаҡ, әммә Аллаһҡа итәғәтһеҙҙең китеүе инә - ҡаҫҡан ҡолдоң хужаһына ҡайтарылыуы һымаҡ».

❁

Ғүмер спектакленең һуңғы акты булған үлем мәңгелек яҙмышыңды күҙәтергә мөмкин булған көҙгө һымаҡ. Шулай булғас, үлем беҙҙең өсөн бәлә түгел, ә шатлыҡлы ҡауышыу мәле булһын тиһәк, һуңғы һулышыбыҙҙың көҙгөһөн гонаһтар бысрағы һәм ғәмһеҙлек менән ҡараңғылатмайыҡ.

Әбү Хазим (рәхимәһуллаһ) әйткән:

«Үлемгә ҡарата нәфрәт тыуҙырырҙай эштәреңде асыҡла һәм уларҙан баш тарт! Бынан һуң, ҡасан ғына донъя ҡуйһаң да, һиңә зыян булмаҫ».

❁

Хикмәт эйәләре әйткән:

مُوتُوا قَبْلَ اَنْ تَمُوتُوا

«Үлемгә ҡәҙәр үл». Икенсе төрлө әйтһәк, мәжбүри рәүештә баш тартҡансы, иҫән саҡта, үҙ ихтыярың менән нәфесең теләктәренән баш тарт!..

❁

Аллаһтың теләгенә ярашлы булғанса, үлемдең ҡайҙа, ҡасан һәм нисек килере беҙгә билдәле түгел. Шул сәбәпле йөрәктәребеҙ үлем серенә үлемдән алда төшөнөргә һәм теләһә ниндәй мәлдә Раббыбыҙ менән ҡауышыуға әҙер булырға тейеш.

Юғиһә һуңғы һулыш: «Аһ, ҡайғы! Был ниңә улай булды һуң әле!» - тигән аһ-зар, күңел төшөнкөлөгө менән тулы буласаҡ. Был хаҡта аятта әйтелә:

«Көндәрҙән бер көндө үлем иләҫлеге килер. Һинең ғүмер буйы ҡасып йөрөгән нәмәң шул (әжәл) булыр» (Ҡаф, 19).

❁

Аллаһ Илсеһенә шундай һорау биргәс:

«Иман эйәләренән ҡайһыһы иң аҡыллыһы?», ул әйтә:

«Үлем тураһында күп уйлаусы һәм уға әҙерләнеүсе...» (Ибн-и Мәджә, Зүһд, 31).

❁

Илаһи Яҙмалар яҡтылығы менән нурланып йәшәп, ныҡлы иманға эйә булғандар һәм әхирәткә таҙа намыҫ, тере ҡәлб һәм яҡты йөҙ менән күскәндәр өсөн генә мәңгелек сәғәҙәт ҡояшы ҡалҡа.

❁

Мөхтәрәм Усман (радыйаллаһу ғәнһү) әйткән:

«Иң аҡыллы кеше нәфесенән хисап алыусы, уны контролдә тотоусы, әхирәт өсөн хеҙмәт итеүсе һәм, ҡәбер ҡараңғылығын яҡтыртыу өсөн, Аллаһ нурынан файҙаланыусы».

❁

Был фани донъяла ғүмереңде - иманһыҙлыҡҡа, тәнеңде – зинаға, байлығыңды юҡ-барға сарыф итеүҙән дә ҙурыраҡ бәхетһеҙлек юҡ. Аҡылы булған кеше үҙенән һуң был фани донъяла иман, ғибәҙәттәр, юғары әхлаҡ, игелектәр кәүҙәләнеше булған изге ғәмәлдәр, саҙаҡалар, саҙаҡа джәриә һәм үҙе хаҡында яҡшы хәтирәләр ҡалдыра.

❁

Һис шикһеҙ, иман яҡтылығынан һәм йөрәктең рухи энергияһы менән ҡылынған ғибәҙәттәрҙән мәхрүм булған, юҡ-бар күңел асыуҙар, аяуһыҙлыҡ һәм ғәҙелһеҙлек менән үткән ҡараңғы фани донъя мәңгелектең яҡты иртәһе менән тамамланмаҫ.

Нәфес әүәҫлектәрен ҡәнәғәтләндереүгә бағышланған ғүмер – уның яман бөтөүенә, ә ғәмһеҙ көлөүҙәр Йәһәннәмдең ыржайыуына ишара.

❁

Мөхтәрәм Ғәли (радыйаллаһу ғәнһү) әйткән:

«Күгән орлоҡтары сәселгән баҫыуҙан рауза гөлләмәләре йыйып булмай».

❁

Бәндә бары тик ҡылған ғәмәлдәре өсөн йә сауап, йә яза алыуын төшөндөрөп, мөхтәрәм Мәүләнә һорай:

«Һин, бойҙай сәсеп, арпа үҫкәнен берәй заман күргәнең булдымы?»

Әҙәм ерҙән бар ҡылынған кеүек, йөрәк донъябыҙ ҙа уңдырышлы тупраҡҡа оҡшаш. Әгәр уға рауза ултыртһаң, рауза үҫә. Әгәр сәнскеле кактус ултыртһаң, кактус үҫә. Был айырыуса ғүмер яҙын кәүҙәләндергән йәшлеккә ҡағыла. Ошо бәрәкәтле һәм уңдырышлы йылдарҙа нимә сәсһәк, һуңғы һулышыбыҙ мәлендә һәм әхирәттә шуны йыйып аласаҡбыҙ.

❁

Мөхтәрәм Мәүләнә әйткән:

«Нимәң бар, нимәгә ирештең? Диңгеҙ төбөнән ниндәй ынйы таптың? Вафат булған көнөңдә былар ап-асыҡ билдәле буласаҡ…»

❁

Мөхтәрәм Имам Раббани әйткән:

«Үлем – ул бәлә түгел. Хәҡиҡи бәлә – үлгәндән һуң үҙең менән ни булырын белмәү».

❁

Үлем – ул ҡапҡа, уның артында мәңгелектә тыуыу. Ҡояш батышын һәм уның яңынан ҡалҡыуын күреп, шул турала уйлан!

❁

Мөхтәрәм Мәүләнә әйткән:

«Әгәр орлоҡ ергә төшкән икән, ул үлде, тип әйтеп буламы?».

❁

Тыуымды ғәҙәти хәл итеп ҡабул иткән кеүек, үлемде лә, йәғни әхирәттә тыуыуҙы, шулай ҡабул итеү лазым.

Мөхтәрәм Мәүләнә был хаҡта әйткән:

«Бел, үлем – йәнеңдең яңы донъяла һыҙланып тыуыуы. Йәғни был фани донъяла ул «үлем», тип атала, ә мәңгелек донъялағы уның атамаһы – «тыуым!».

«Ғөмүмән, йәнде Аллаһ алмаймы ни? Бел, Уның пак ҡолдары өсөн үлем шәкәрҙәй татлы».

«Шулай уҡ үлем, Аллаһ дуҫына әйләнгәндәр өсөн, хатта ки ут булһа ла - рауза баҡсаһы, тере һыу».

❁

Үлем – хәҡиҡәт. Үҙенә насип һулыштарҙы һулап бөткәс, үлемгә дусар һәр бәндә уны татыясаҡ. Фани донъяла йәшәп, бер көн килеп төйәгең ҡәбер буласағы тураһында уйланмау – көндән һуң төн килмәҫ, тип уйлау кеүек үк иҫәрлек.

❁

Үлемдән ҡурҡып ҡасҡандарҙың береһе лә ҡотола алғаны юҡ әле. Ҡурҡыу үлемде кисектерә алмаған кеүек, патологик ҡурҡыу ҙа ярҙам итмәй, кешене әүҙемлектән мәхрүм генә итә. Шуға күрә үлемдән ҡурҡып ҡасыу урынына Аллаһ ҡоло уға һәр мәл әҙер булырға тейеш.

❁

Донъяның - фани, ә хәҡиҡи тормош әхирәттә булыуын, Раббыбыҙ алдындағы бурыстарын, доғаларын, тәүбәләрен, бер һүҙ менән әйткәндә, Аллаһ юлындағы хеҙмәтен онотҡандар иҫәрләнә һәм ғазаптар баҙарында бәхет эҙләй башлай. Һәр кешенең ҡотолғоһоҙ киләсәге булған үлемгә һәм унан буласаҡ нәмәләргә әҙерләнер урынға ул үлемдән ҡасып ҡотолорға маташа.

❁

Мөхтәрәм Мәүләнә үҙенең «Мәснәүиҙәр»ендә ғибрәтле ваҡиға тураһында бәйән итә:

«Сөләймән пәйғәмбәргә (ғәләйһис-сәләм), ҡурҡып һәм тулҡынланып, бер кеше килә һәм әйтә:

«Бөгөн иртән Ғазраил алдыма килеп баҫты һәм миңә асыуланып ҡараны. Шунда уның ғүмеремде аласағын аңланым. Эй, ҡөҙрәтле пәйғәмбәр! Барсаһы һиңә буйһона. Елгә мине бынан алыҫҡа, Һиндостанға алып китергә ҡуш. Ул саҡта Ғазраил мине, бәлки, таба алмаҫ!».

Сөләймән (ғәләйһис-сәләм) был бер ҡатлы кешене йәлләй һәм, теге ныҡышып ялбарғас, елгә әмер бирә:

«Был кешене Һиндостанға алып бар!». Ел, ирҙе алып, уны шундағы алыҫ утрауға алып барып ҡуя.

Һуңғараҡ Сөләймән (ғәләйһис-сәләм) Ғазраилды осрата һәм теге кешегә ни өсөн асыуланып ҡарауы тураһында һорай. Ғазраил (ғәләйһис-сәләм) әйтә:

«Мин уға асыуланып түгел, аптырап ҡараным, сөнки Аллаһ бөгөн кис уның йәнен Һиндостанда алырға бойорғайны. Аптыраным, был бәндәнең йөҙ ҡанаты булһа ла, ул бөгөн кис Һиндостанда була алмаясаҡ, тип уйланым».

❁

Ысын ғафиллыҡ шунда: билдәһеҙ яҙмыштан ҡасам, тип уйлаһағыҙ ҙа, һеҙ асылда хәҡиҡи яҙмышығыҙға йүгерәһегеҙ. Үлем сәғәте теүәл билдәләнгән ваҡытта килә, бер мәлгә иртә лә, һуң да түгел, унан ҡасып ҡотолор урын да юҡ.

❁

Онотмайыҡ, был донъяла үлемдән ҡасып ҡотолор урын юҡ, ҡәберҙән кире ҡайтыр мөмкинлек юҡ, Ҡиәмәт көнө ҡурҡыныстарынан һыйыныр урын да юҡ! Был донъялағы һәр урын Аллаһтыҡы һәм һәр ваҡыт илаһи ихтыярға буйһона. Шуға күрә мәңгелек ҡотолоуҙың берҙән-бер сараһы, Уның әмеренә буйһоноп:

« فَفِرُّوا إِلَى اللَّهِ »

«Барығыҙ ҙа Аллаһҡа һыйынығыҙ» (әҙ-Ҙәрийәт (Таратыусылар), 50) аятына ярашлы, берҙән-бер терәгебеҙ һәм һыйыныр урыныбыҙ булған Аллаһҡа уҡталыу.

❁

Үлем тураһында уйланыуһыҙ үткән тормош, әйтерһең дә, бәлә тулы ҡара төн. Әгәр йөрәк үлем серен асырға теләмәй икән, ул үҙенең киләсәктәге төйәгенең серен дә аңлай алмаясаҡ. Үлемдән ҡасыу – бушҡа ғына, ә ул турала белергә лә, ишетергә лә теләмәү – бөйөк иҫәрлек.

❁

Үлем мәлендә һәр бәндә ҡотолғоһоҙ рәүештә илаһи ихтыярға буйһонасаҡ. Хатта илаһи тәртипкә ҡаршы барған залимдар һәм иҫәрҙәр ҙә ҡаршы һис бер һүҙ әйтә алмаясаҡ. Бихисап пәрҙәләр юҡҡа сыҡҡас, һәр бер ғафил бәндә аңлаясаҡ: барса Ғаләмдең хәҡиҡи Хужаһы – Бөйөктәрҙән-Бөйөк Аллаһ. Әммә инде бәндәгә бынан файҙа булмаясаҡ!

❁

Был донъяға килеүебеҙҙең маҡсаты – үлемдән ҡасыу йәки әхирәттең юҡлығына үҙебеҙҙе ышандырыу түгел. Киреһенсә, төп маҡсатыбыҙ изге ғәмәлдәребеҙ, һәр бер һулышыбыҙ менән һуңғы һулышыбыҙға әҙерлек булырға тейеш. Үҙебеҙгә ҡәбер әҙерләү түгел, ә үҙебеҙҙе ҡәбергә әҙерләү.

❁

Кеше тормош юлында ваҡыты менән ауырлыҡтарға ла осрай. Шул саҡта ул ярҙам, терәк-таяныс эҙләй. Кеше өсөн фани донъялағы иң ауыр мәл – һуңғы һулышы, был донъя менән хушлашыу мәле. Кем был һыналышлы мәлгә әҙерләнеп өлгөрә – улар Раббыһына ҡайтыу шатлығы менән ләззәтләнә, әйтерһең, тәүге никах төнөн кисерә.

Әгәр ҙә ки инде бәндә ғәмһеҙ рәүештә иң ҡиммәтле капиталын – тормошон – нәфес әүәҫлектәре әсирлегендә үткәрһә, үлем сәғәтендә һөйләп аңлатырлыҡ үкенес эсендә буласаҡ.

❁

Пәйғәмбәребеҙ (салләллаһу ғәләйһи үә сәлләм) бер заман әйткән:

«Үлем мәлендә үкенесһеҙ булған һис кем булмаясаҡ». Был үкенестең сәбәбен һорағас, ул әйткән: «Әгәр (үлгән) кеше салих заттарҙан булһа, ул изге ғәмәлдәрҙе күберәк ҡылмағаны өсөн үкенер. Әгәр ул яман кеше булһа, яманлыҡтан баш тартып, хәлен яҡшырта алмағаны өсөн үкенер» (Тирмизи, Зуһд, 59/2403).

❁

Баҡыйлыҡҡа күскәс, хатта әүлиәләр ҙә изгелектәрҙе күберәк ҡылмағаны өсөн үкенер. Ә ғафилдарҙың үкенесен тасуирлап бирер өсөн һүҙҙәр ҙә етмәҫ!

❁

Әйтелгән бит: «Кешеләр серем итә. Ә үлгәс, улар уяна!» (Кәшф әл-хафа, II, 312).

Үлем – һәр кемдең шәхси Хисап көнө. Мәңгелек бәлә сәбәпле уянғандар араһында булмаҫ өсөн, әйҙәгеҙ, иртәрәк уянайыҡ!

Ғүмер спектакленең һуңғы күренеше булған һуңғы һулыш мәле һәр кемдең йәшәү һөҙөмтәһе сағылған саф, таҙа көҙгө һымаҡ. Һәр кем унда яҡшы һәм

яман яҡтары менән барса тормошон күрер. Был мәлдә күҙҙәрҙә һәм ҡолаҡтарҙа итәғәтһеҙлек һәм ғафиллыҡ ҡолаҡһаһы булмаҫ. Киреһенсә, бөтә пәрҙәләр күтәрелер, аңһыҙлыҡ юғалыр, бәндәнең зиһенен, намыҫын үкенес ялмап алыр.

Йә Аллаһ, ғүмеребеҙҙең иң хәйерле ваҡыты – ахыры, ғәмәлебеҙҙең иң хәйерле өлөшө – аҙағы, иң гүзәл көндәребеҙ Һинең ҡаршыңда торасаҡ көндәр булһын. Амин!

❁

Хәҙистә әйтелә:

«Ғафу үтенеүҙең иң насары – үлем хәлендә әйтелгәне» (Киваму ас-сунна, әт-Тарғиб үә әт-Тархиб, II, 106).

❁

Һәм әгәр бөгөн беҙҙең Аллаһ ризалығы өсөн ғәмәл ҡылырға мөмкинлегебеҙ бар икән, унан файҙаланып ҡалырға кәрәк, сөнки Раббыбыҙҙың әмере төшөрөлгәс һәм үлем сәғәте векселенең мөҙҙәте үткәс, «Аһ, эх, әгәр ҙә ки...» тип һамаҡлап зарланыуҙан файҙа булмаҫ…

❁

Кем ғүмер капиталын фани донъя ниғмәттәре өсөн генә сарыф итә, әхирәттә банкрот һәләкәтенә дусар булыр.

Мәрхүм Нәжип Фазыл шундайҙарҙы киҫәтеп нәсихәт биргән:

Һыҡмыр сарраф, тиндәреңә икенсе янсыҡ тек -

Гүрҙәге кәсебеңә кәрәген, файҙа бирәсәген!

/Сарраф – аҡса алмаштырып кәсеп итеүсе/

❁

Һуңғы һулышынан һуң, һәр кем, йөрәкһенеп, ҡулын тубығына һуғып, үкенеп әйтергә теләр: «Шул хатаны эшләмәгән булһам икән, берәй яҡшы ғәмәл ҡылған булһам икән…» Әммә һуң инде! Башҡаса ҡулдар ҙа, тубыҡтар ҙа юҡ!

Һуңғы һулышынан һуң ғына был хәҡиҡәтте аңлаусылар ни ҡәҙәр йәл! Был хәҡиҡәтте бөгөн аңлаусылар һәм мәңгелек тормошона әҙерләнеүселәр ни тиклем бәхетле!

❁

Аллаһты танып белгән салих зат әйткән:

«Ваҡыты менән зыяраттарға барғыла. Халәт телендә ҡәберҙәрҙән килгән өнһөҙ аһтарҙы тыңла. Ваҡытыңдың ҡәҙерен бел – ғүмер ниғмәтеңде юғалтҡас, үкенестәрҙән һиңә һис ниндәй файҙа булмаясаҡ».

❁

Мөхтәрәм Ғәли (радыйаллаһу ғәнһү) әйткән:

«Һеҙгә был донъя ниғмәте булараҡ ислам етер, шөғөл булараҡ – ғибәҙәттәр һәм итәғәтлелек, ә нәсихәт булараҡ – үлем».

❁

Ғүмер баҙарының иң күркәм кейеме булған кәфен үткенсе сауҙа эштәрен, ҡыҫҡа ваҡытлы ләззәттәрҙе, бөтмәҫ әүәҫлектәрҙе һәм теләктәрҙе юҡҡа сығармаймы?

❁

Аллаһ Илсеһе (салләллаһу ғәләйһи үә сәлләм) әйткән:

«Барса ләззәттәрҙе өҙәсәк үлем тураһында күберәк уйлағыҙ!» (Тирмизи, Зуһд, 4/2307).

❁

Билдәле теле булмаһа ла, үлем шул тиклем өнһөҙ, һүҙһеҙ нәтижәле нәсихәтсе, нескә, һиҙгер йөрәклеләргә ул хикмәте, нәсихәте менән иң оҫта дәғүәт ҡылыусыларға ҡарағанда ла нығыраҡ тәьҫир итә.

Үҙенең серен үлем әруахтарҙың өнһөҙ ирендәренә мисәтләгән.

Был фани донъяның үлемдең оҫта нәсихәтенә яуабы – бары тик ҡайнар күҙ йәштәре һәм һыҡтауҙар ғына.

❁

«Тормош нимә ул?» һорауына иң мәғәнәле яуап дымлы ҡәбер таштарына йәшеренгән. Тәрән тынлыҡҡа күмелгән һәр бер ҡәбер ташы – халәт теле (лисан әл-хәл) менән бәйән итеүсе ялҡынлы остаз. Бөгөн өнһөҙ ҡәбер таштарының нәсихәтен ала белеү – иртәгә мәңгелектә сәғәҙәткә ирешеүҙең иң яҡшы сараһы.

❁

Юныс Әмре ҡәбер таштарын тамаша ҡылғандарҙың рухи халәтен ҙур нескәлек менән асып һалған:

Баҡыйлыҡҡа күскән әҙәмдәрҙең тәне
Өнһөҙ-телһеҙ һәм серҙәре үҙе менән.
Өҫтәрендә күпереп үҫкән йәшел үләп
Өнһөҙ-телһеҙ һәм серҙәре үҙе менән.

Өçтәрендә теҙелеп киткән кипаристар
Өнһөҙ-телһеҙ һәм серҙәре үҙе менән.
Фанилыҡта улар һалып киткән эҙҙәр
Өнһөҙ-телһеҙ һәм серҙәре үҙе менән.

Сабыйҙарҙың, егеттәрҙең үле тәне
Өнһөҙ-телһеҙ һәм серҙәре үҙе менән.
Ҡарынына, үҙ ҡуйынына алған ер ҙә
Өнһөҙ-телһеҙ һәм серҙәре үҙе менән.

Һыҙылып киткән ҡаштар һәм керпектәр
Өнһөҙ-телһеҙ һәм серҙәре үҙе менән.
Баш һөйәге уртаһында күҙ соҡоро
Өнһөҙ-телһеҙ һәм серҙәре үҙе менән.

Күр һәм аңла ҡотолғоһоҙ тәҡдиреңде,
Төшөн, зинһар, Юныс биргән нәсихәтте:
Туғанҡайым, улар һиңә һабаҡ бирә
Өнһөҙ килеш, ә серҙәре үҙе менән.

❁

Йөрәгебеҙ һәр ваҡыт уяу, тере булырға тейеш. Мәҫәлән:

– матәм процессияһын күргәндә, уйланыу лазым: «Был кәфенгә уралып, мин дә ятыуым ихтимал ине…»

– һәләкәтте күреп тә уйланыу кәрәк: «Мин дә улар араһында була алыр инем…»

– зыяратҡа ингәс, шулай тип фекер йөрөтөү зарур: «Берәй заман мин дә шул ҡәберҙәрҙең береһендә ятасаҡмын, был әруахтар тарыған хәлдәр минең менән дә буласаҡ…»

❁

Бер заман мөхтәрәм Ғәлигә (радыйаллаһу ғәнһү) һорау бирәләр:

«Һиңә ни булды, эй, Ғәли, ниңә ҡәберҙәрҙе үҙеңә күрше иттең?!», ул әйтә:

«Мин уларҙың тоғро күршеләр булыуын күрҙем! Улар һис ниндәй яманлыҡ ҡылмай һәм миңә әхирәт тураһында иҫкә төшөрә!» (Ибн Әби Шәйбә, Мүсаннәф, VII, 102/34514).

❁

Мөхтәрәм Хатам Әсамдан шулай тип һорайҙар:

«Беҙ нисек һәм ҡасан был донъяға нәсихәт алып баға башларбыҙ икән?», ул әйтә:

«Был донъялағы һәр нәмәнең аҙағы – хараба, һәммәһенең бара торған урыны ер икәнен күргәс тә! Әгәр кешенең яҡындарынан берәйһе үлһә, һәм ул бынан һабаҡ алмаһа, ғилем дә, хикмәт тә, вәғәздәр ҙә уға файҙа бирмәйәсәк».

❁

Үлем тураһында уйланыуҙар йөрәкте рухи йәһәттән терелтә, сөнки бер көн килеп баҡыйлыҡҡа күсәсәген аңлаған мөьмин:

– Ваҡытлы төйәге мәңгелек, тип иҫәрләнмәй.

– Һәр бер халәте һәм ғәмәле өсөн яуап бирергә тура киләсәген ул белә.

– Ул гонаһтар һәм мәкруһ ғәмәлдәр ҡылмай, иман ҡәрҙәшенә аяҡ салмай, берәүҙең йөрәгенә сәнске ҡаҙамай, кәрәкһеҙгә ботаҡты һындырмай һәм сәбәпһеҙ хатта ҡырмыҫҡаны ла үлтермәй.

– Ул белә-күрә илаһи тыйыуҙарҙы боҙмай һәм Аллаһҡа хеҙмәт бурысына яуаплы ҡарай.

– Ул һәр һулыштың ҡиммәтен аңлай һәм ғүмер капиталын юҡ-барға сарыф итмәй.

❁

Үлем тураһында фекер йөрөтөү – тәфәккр әл-мәүт – тәсауыф тәрбиәһендә ҙур урын биләй. Был, үҙеңдең фани икәнлегеңде иҫтә тотоп, фекер йөрөтөүҙән ғибәрәт: йүргәктә килеш күҙеңде астың, тәҡдиреңә яҙылғанса ғүмер кисерҙең, кәфенгә уралып баҡыйлыҡҡа юл тотаһың. Йөрәгеңде нәфес әүәҫлектәренән азат итеү өсөн был иң нәтижәле сара.

❁

Үлем тураһында фекер йөрөтөү күтәргән кимәлдән мәхрүм булмаҫ өсөн, ата-бабаларыбыҙ зыяраттарға мәсет алдарында урын бүлгән.

Был уларға үҙҙәренең хәҡиҡи киләсәген, фани икәндәрен онотмаҫҡа ярҙам иткән. Улар сығанағы ғафиллыҡ булған, был донъяла мәңге ҡалабыҙ тигән уйҙырмаларҙан йыраҡ торорға ынтылған, йәшлектәре, һаулыҡтары һәм көстәре менән алданмаған, донъяның юҡ-бар ығы-зығыһынан алыҫ булырға тырышҡан һәм мәңгелек сәғәҙәт капиталы йыйып ҡалырға тырышҡан. Ошо донъяла ла улар әхирәт һулышын тойоп йәшәгән.

“Ундай уйҙар төшөнкөлөккә батыра” тигән һылтау менән заманыбыҙ яһилиәте кешеләрҙән үлем, ҡәбер һәм әхирәт тураһында онотоуҙы талап итә. Улар

уйынса, быларҙан арынғас ҡына, кешегә тыныслыҡ һәм бәхет килә. Йәғни улар бәхетте ғафиллыҡ иҫереклегенән, хәйерселек баҙарынан эҙләй.

❁

Мәңгелек булған әхирәт күҙлегенән ҡарағанда, фани донъя хәстәрлектәре юҡҡа сыға торған күләгәләр генә. Хәҡиҡи һәм мәңгелек тормош – ул үлемдән һуңғы тормош.

Шуға күрә фани донъялағы беҙҙең төп хәстәрлек шул турала булырға тейеш:

– Мәңгелек төйәгебеҙҙең ниндәй булырына тәүге ишаралар сағылған һуңғы һулышыбыҙ ниндәй булыр?

– Ҡәберҙәге һорау алыуға ни кимәлдә әҙер булырбыҙ?

– Хисап көнөн көтөп, беҙ йәшәгән барзах донъяһы, хәҙистә әйтелгәнсә, Йәннәт баҡсаларынан бер баҡса булырмы, әллә, Аллаһ һаҡлаһын, Йәһәннәм соҡорҙарынан бер соҡормо?

❁

Һәммәбеҙ илаһи һынау төйәге булған ошо донъя уҡыусылары. Аллаһ ҡолдары булараҡ беҙҙең ғилем алыуыбыҙ үлем килгәс тамамлана, һәм беҙ иманыбыҙ һәм ғәмәлдәребеҙ менән ер ҡуйынына инеп ятасаҡбыҙ.

❁

Ҡәбер һәм Йәһәннәм ғазаптарына түҙеү мөмкин түгел. Аллаһ Илсеһе (саллəллаһу ғəлəйһи үə сəллəм) киләһе доғаны йыш ҡылған һәм өммәтенә лә уны ҡылырға нәсихәт биргән:

اَللّٰهُمَّ إِنِّي أَعُوذُ بِكَ مِنْ عَذَابِ الْقَبْرِ وَمِنْ عَذَابِ النَّارِ

وَمِنْ فِتْنَةِ الْمَحْيَا وَالْمَمَاتِ وَمِنْ فِتْنَةِ الْمَسِيحِ الدَّجَّالِ

«Йә Аллаһ, хәкикәттә, мин Йәһәннәм ғазабынан үә ҡәбер ғазабынан, тормош үә үлем фетнәләренән, Дәджәлдең фетнәһенән Һиңә һыйынанам!» (Бохари, Джәнәиз, 88; Мөслим, Мәсәджид, 128-134).

Шуға күрә Аллаһтың асыуына тарытырҙай яман сифаттарҙан, нәфес әүәҫлектәренән, харам һәм мәкруһ нәмәләрҙән, ғафиллыҡтан һәм итәғәтһеҙлектән уттан ҡасҡандай ҡасыу һәм Аллаһтың мәрхәмәтенә һыйыныу зарур.

❁

Ҡиәмәт хатта гонаһһыҙ балаларҙы сал сәсле ҡарттарға әйләндерергә һәләтле хәтәр көн буласаҡ. Залимдарҙың күҙҙәре атылып сығасаҡ, йөрәктәрҙе тетрәтәсәк көн буласаҡ ул. Был ҡурҡыныс көндө ҡатындар үҙҙәренең имеҙгән сабыйҙарын онотасаҡ, ауырлы ҡатындарҙың бәпәйҙәре төшәсәк, кешеләр, ҡайҙа ҡасырға белмәйенсә, иҫеректәр һымаҡ йөрөйәсәк...

Был көн – «يَوْمُ الْخُلُوْدِ» («мәңгелек көн»), йәғни иртәгәһе булмаған икһеҙсикһеҙ көн!

Был көн, әгәр Аллаһтың рәхмәте төшмәһә, бәндәнең арҡа һөйәген һындырырға һәләтле ғазаптар, бәләләр менән тулы буласаҡ!

Шуға күрә, ошо хәтәр көндә имен булыу өсөн, әҙәм балаһына һәр ваҡыт ялбарып доғалар ҡылыу лазым. Ул фани донъялағы үҙенә насип үткенсе яфаларҙан аралауҙан бигерәк мәңгелек тормошон һәләк итерҙәй нәмәләрҙән ҡурсалауҙы һорап йәш түгергә тейеш.

❁

Ғазали имам шундай хәлде бәйән итә:

«Бер ир ҡысҡырып көлгән ҡустыһына әйтә:

«Бәрәкәт булһын һиңә! Тамуҡтан ҡотолорһоң тигән хәбәр килдеме әллә һиңә?». Ҡустыһы әйтә:

«Юҡ». Ир, аптырауын белдереп, былай тип әйтә:

«Улайһа һин нисек итеп һис бер хәсрәтең булмағандай көләһең!».

❁

Был донъя көлә, күңел аса, ғафил рәүештә көн итә торған урын түгел. Әммә күпселек кешеләр, был ваҡытлы каруанһарайҙа торғанда, үҙҙәрен бында мәңге ҡаласаҡ кешеләр итеп күрә. Улар үлем, ҡәбер, Ҡиәмәт көнө, ҡубарылыу, хисап, Сират кеүек ауыр һынауҙар тураһында онота һәм борсолоу кәрәк булған мәсьәләләргә ғәмһеҙ ҡарай. Кешеләргә хас булған шундай ғәмһеҙлек тураһында Раббыбыҙ Аллаһ Ҡөрьәндә әйтә:

«көлөүен көләһегеҙ, (яза килеп тип) иламайһығыҙ» (ән-Нәджм (Йондоҙ), 60-61).

❁

Донъя ниғмәттәренә артыҡ шатланыу, ҡысҡырып көлөү бәндәнең был фани донъяла бары тик әхирәт юламсыһы ғына булыуын, алда үлем, ҡәбер, ҡубарылыу, хисап, Сират кеүек ауыр туҡталҡалар көтөп тороуын оноттора. Ә был иһә рухиәтте нескәлектән мәхрүм итә, ағыу таратып, йөрәктең рухи энергияһын юҡ итә.

Мөхәммәд ибн Вәси (радыйаллаһу ғәнһү) әйткән:

«Йәннәттәге кешенең илап тороуы ғәжәп, шулай уҡ ҡайҙа барып юлығырын (Йәннәткәме, әллә Йәһәннәмгәме) белмәгән кешенең күп көлөүе ғәжәп» (Ихья, III, 289).

❁

Был донъя – һынау урыны, ике ишеге булған каруанһарай – уның бер ишегенән туҡтауһыҙ инеп торалар, икенсеһенән сығалар. Һуңғы кеше имтиханын биреп бөткәс, фани донъяның кәрәге бөтә, Ҡиәмәт сәғәте етә.

Ҡиәмәт сәғәте еткәс, һәр кем үҙенең фани донъялағы өлгәш табеле менән танышасаҡ. Ваҡ ҡына нәмәләрҙе лә үҙ эсенә индереп, бөтә һынау донъяһындағы тормошобоҙ йәнә күҙ алдыбыҙҙан үтәсәк. Шунда барыһы ла асыҡ күренеп торасаҡ. Аллаһ юлындағы хеҙмәтебеҙ кәмселектәрен, зекерҙәребеҙҙең, бүләк итеп бирелгән бихисап ниғмәттәр өсөн хәмде-ҫәнәләребеҙҙең һәм тырышлығыбыҙҙың әҙлеген күреп бик ныҡ ояласаҡбыҙ.

❁

Хәҙистә әйтелә:

«Хисап көнөндә (Аллаһ) ҡоло тормошо тураһында хисап бирмәй тороп, урынынан да ҡуҙғала алмаясаҡ: нисек көн иткән; һәм ғилеме хаҡында: уны нимәгә файҙаланған; һәм милке хаҡында: нисек уны тапҡан һәм нимәгә сарыф иткән; һәм тәне тураһында: уны нисек файҙаланған» (Тирмизи, Хисап көнө, 1/2417).

❁

Ҡиәмәт көнөндә, ғәмәл дәфтәребеҙ ҡулыбыҙға бирелгәс, үҙебеҙҙең белгән хаталарыбыҙҙы ла, үҙебеҙ аңлап етмәгәндәрен дә күрәсәкбеҙ.

Бәлки, беҙ ғәйбәт һатҡанбыҙҙыр, иман ҡәрҙәштәребеҙгә өҫтән ҡарағанбыҙҙыр, кемдеңдер артынан ым-ишара менән мыҫҡыл итеп көлгәнбеҙҙер, аҫтағы ҡаттағыларҙы йәки үтеп барыусыларҙы борсоп, балаҫтарыбыҙҙы ҡаҡканбыҙҙыр. Бәлки, ишегебеҙ төбөндәге ас бесәйгә йәки эткә битараф булғанбыҙҙыр. Йә булмаһа, алға үтер өсөн, юл хәрәкәте ҡағиҙәләрен боҙғанбыҙҙыр. Ә бәлки, тротуарҙа торған кешеләрҙең өҫтөн бысратып, ҙур тиҙлек менән күләүектәр өҫтөнән үткәнбеҙҙер йәки, юл хәрәкәте ҡағиҙәләрен боҙоп, кемдемдер ғүмерен хәүеф аҫтына ҡуйғанбыҙҙыр һ.б.

Белгән һәм белмәгән гонаһтарыбыҙ, бөтә ауырлығы менән өҫтөбөҙгә аумаһын өсөн, беҙ тәүбә итергә һәм ғәфү үтенергә тейеш. Ҡайһы бер хаталарыбыҙҙы аңлап етмәһәк тә, яныбыҙҙағы фәрештәләр уларҙы яҙа бара. Беҙ онотһаҡ та, ғәмәл дәфтәребеҙ бер нәмәне лә онотмай.

Илаһи хисап көнөндә шәхсән һәр кем үҙ-үҙенә төп шаһит буласаҡ. Был турала аяттарҙа хәбәр ителә:

«Уҡы китабыңды! Бөгөн үҙеңә-үҙең хисапсы бул!» - тиербеҙ» (әл-Исра (Төнгө сәфәр), 14).

«Бөгөн Беҙ уларҙың ауыҙын томаланыҡ. Ҡылған эштәре тураһында беҙгә уларҙың ҡулы һөйләр, аяғы шаһит булыр» (Йәә Сиин, 65).

«Ут ҡаршыһына барғас, уларҙың ҡолағы, күҙе, тирәһе ҡылған гонаһ эштәре хаҡында үҙҙәренә ҡаршы шаһитлыҡ итер. Улар үҙҙәренең тирәһенә әйтер: "Нишләп һеҙ беҙгә ҡаршы шаһитлыҡ итәһегеҙ?" Тегеләр әйтер: "Һәр нәмәгә тел биргән Аллаһ беҙгә лә тел бирҙе. Ул һеҙҙе тәү башлап донъяға яралтҡан. Һуңынан һеҙ Уға ҡайтаһығыҙ» (Фуссыиләт, 20-21).

Был донъяла беҙҙең телебеҙ берәү, әммә Ҡиәмәт көнөндә беҙҙең барса ағзаларыбыҙ һөйләйәсәк һәм шаһитлыҡ ҡыласаҡ. Хатта йөрөгән ерҙәребеҙ ҙә шаһитлыҡ ҡыласаҡ.

Ул көндө беҙ уҡыясаҡ ғәмәл дәфтәребеҙ өтөрөнә, нөктәһенә, кескәй генә нәмәләренә тиклем ғүмеребеҙҙең һәр мәлен күрһәтәсәк.

Был донъяла һәммәһе яҙыла бара… Кирамән Кәтибин фәрештәләре һымаҡ, урындар һәм илаһи камералар һәммәһен яҙа бара…

❁

Әгәр ҙә ки енәйәтселәр мең хәйлә менән был донъяла енәйәттәребеҙҙең осон йәшерҙек, тип уйлайҙар икән, Бөйөк Хисап көнөндә хөкөмдарҙарҙың Хөкөмдары булған Аллаһ Сүбхәнәһү үә Тәғәлә ҡашында енәйәттәрен йәшерә, алдаша, үҙҙәренең хәҡиҡи йөҙөн төрлө битлектәр кейеп йәшереп ҡала алмаясаҡ.

❁

Мөхтәрәм Ғүмәр (радыйаллаһу ғәнһү) әйткән: «Һеҙҙе хисапҡа саҡырғансы, үҙегеҙҙе үҙегеҙ хисапҡа саҡырығыҙ. Үҙегеҙҙе (Аллаһ Тәғәлә менән) бөйөк осрашыу алдынан (изге ғәмәлдәр менән) биҙәгеҙ! Хаҡтыр, фани донъяла үҙенән хисап алып торған кешенең Ҡиәмәт көнөндәге хисабы еңел булыр» (Тирмизи, Ҡиәмәт көнө, 25/2459).

Изге аятта әйтелә:

«Улар шунда [Йәһәннәмдә]: «Раббыбыҙ! Зинһар, беҙҙе сығар бынан, әүәл ҡылған (изгелекһеҙ) эштәребеҙ урынына изгелекле эштәр башҡарыр инек», - тип үкереп ялбарырҙар. [Уларға әйтеләсәк:]«Һеҙгә уйлап аңларлыҡ ғүмер бирмәнекме? Һеҙгә киҫәтеүсе (Ҡөрьән, Пәйғәмбәр) килмәне-

ме? (Ни өсөн инанманығыҙ!) Хәҙер инде (язаһын) татығыҙ! Залимдарға ярҙам итеүсе булмаҫ» (әл-Фәтыр (Яралтыусы), 37).

Был аяттың мәғәнәһе тураһында тәрән уйланыу лазым. Асылда ваҡыт беҙгә шуның өсөн бирелгән, киҫәтеүсе Пәйғәмбәребеҙ ҙә (саллəллаһу ғəлəйһи үə сəлләм) килде. Бөгөнгө көнгә ҡәҙәр Пәйғәмбәребеҙ (саллəллаһу ғəлəйһи үə сəлләм) һәм уға төшөрөлгән Китап тураһында бихисап китаптар баҫылып сыҡты. Шул рәүешле Раббыбыҙ Аллаһ алдында беҙ аҡлана алырлыҡ барса ишектәр ябылды.

Хисап көнөндә тәрән үкенестә булмаҫ өсөн, бөгөн иман, тәҡүәлек, Ҡөрьән айырылғыһыҙ юлдашыбыҙ булырға тейеш…

❁

Хәҙистә әйтелә:

«Иң яман тәүбә – Хисап көнөндәгеһе» (Суюти, әл-Джәмиү әс-сәғир, №3164).

❁

Әхирәттә Йәннәт әһелдәре йыраҡтан Тамуҡ әһелдәренән шулай тип аптырап һораясаҡ:

«Һеҙ нисек Сәҡәргә килеп эләктегеҙ?» (әл-Мүддәҫҫир (Бөркәнгән), 42).

Тегеләре әйтер:

«Беҙ намаҙ уҡыманыҡ. Фәкирҙәрҙе ашатманыҡ. Кәфер һөйләгәндәр араһында беҙ ҙә кәфер һөйләнек. Ҡиәмәт көнөн ялған тинек. Ниһайәт, беҙҙе ҡәтғи киләсәк яза яҡаланы» (әл-Мүддәҫҫир (Бөркәнгән), 43-47).

❁

Мөхтәрәм Мәүләнә әйткән:

«Зирәк кеше ғәмәленең аҙағын башта уҡ күрә, ә иҫәр бары тик һуңынан ғына! Әммә инде һуң була…»

«Аҡыллылар башта илай. Яһилдар, киреһенсә, баштарын бәреп, аҙаҡ һамаҡлай. Ниндәйҙер эште башлаһаң, Хисап көнөндә үкенестә булмаҫ өсөн, уның нисек тамамланырын уйла!».

Ҡөрьәндә әхирәттәге кәферҙәрҙең һәм гонаһкәрҙәрҙең халәтен тасуирлағанда, «يَا لَيْتَ» «Эх, шулай иткән булһам ине» кеүегерәк фраза йыш ҡулланыла:

«Эх, Раббыға итәғәт иткән булһаҡ, Пәйғәмбәргә эйәргән булһаҡ!» (әл-Әхзәб (Төркөмдәр), 66).

«Эх, Пәйғәмбәргә эйәреп (Аллаһ) юлы буйлап киткән булһам!» (әл-Фурҡан (Яҡшыны ямандан айырыусы Китап), 27).

«Аһ, фани донъяла алдағы тормошом өсөн изгелектәр ҡылған булһам» (әл-Фәджр (Таң), 24).

«Ни аяныс миңә, ни үкенес, теге мөртәтте (һынды) дуҫ итмәгән булһам ине» (әл-Фурҡан (Яҡшыны ямандан айырыусы Китап), 28).

Һәм «Эх, шулай булһа ине…»ләрҙең береһе шул:

Мәхшәр майҙанында, үс ҡайтарып иҫәпләшеү, ғәҙеллектең еңеүе өсөн, кемдәндер зыян күргән хайуандар ҙа хатта тергеҙеләсәк. Ә аҙаҡ улар юҡҡа сығасаҡ. Кәферҙәр был хәлде күргәс, ошо хайуандар шикелле илаһи язанан ҡотолорға теләрҙәр һәм әйтерҙәр:

يَا لَيْتَنِي كُنتُ تُرَابًا

«Их, нисек аяныс, тупраҡ булып ҡына ҡалған булһа инем» (ән-Нәбә (Хәбәр), 40).

Ҡиәмәт көнөндә шундай үкенестә булмаҫ өсөн, Раббыбыҙ Аллаһтың әмер-тыйыуҙарын үтәп, барса яратылмыштарҙың хоҡуҡтарын һаҡлауға үтә лә иғтибарлы булыу зарур.

❁

Аллаһ Илсеһе (салләллаһу ғәләйһи үә сәлләм) әйткән:

«Хаҡтыр, һеҙҙең ғәмәлдәрегеҙ яҡын әруахтарығыҙға һәм туғандарығыҙға күрһәтелә, һәм әгәр улар яҡшы булһа, улар һөйөнә, ә киреһе булһа, улар ялбара: «Йә Аллаһ, Һин беҙҙе тура юлға баҫтырған кеүек, уларҙы ла тура юлға баҫтырмай тороп, йәндәрен алма» (Әхмәд, III, 164; Хаким, Мустадрак, IV, 342/7849).

❁

Раббыбыҙ Аллаһ изге аятында әйтә:

«Эй, иман килтергән бәндәләр! Аллаһтың язаһынан ҡурҡығыҙ, һәм һәр кем киләсәк өсөн нимә әҙерләгәне тураһында уйланһын» (әл-Хәшер (Ҡыуып сығарыу), 18).

Был аятта Аллаһ Тәғәлә киләсәк тормошто «иртәгә» тип атай. Кәферҙәргә Ҡиәмәт көнө һәм әхирәт һис ҡасан килмәҫ кеүек тойола. Ул тиҙ генә булмаҫ, тип уйлай ғафилдар. Әммә ваҡытҡа һәм урынға мохтаж булмаған Раббыбыҙ уның бик яҡын булыуын күрһәтә һәм уны «иртәгә» тип тасуирлай.

Шуға күрә беҙгә, асылда иртәгәһе көн кеүек яҡын булған мәңгелек тормошҡа әҙерелекте һуңлатмаҫ өсөн, бөтә тырышлығыбыҙҙы һалыу лазым.

❁

Раббыбыҙ Аллаһ әйтә:

«Ул көндө йөҙҙәре балҡып торғандар ҙа булыр. Көлөп, һөйөнөп йөрөүселәр. Ул көндө туҙан ҡаплаған (ҡара йөҙлөләр ҙә) булыр. Ҡап-ҡара көйгән йөҙҙәр. Бына шулар инде кәферҙәр һәм енәйәтселәр» (әл-Ғәбәсә (Һытыҡ йөҙ), 38-42).

Йәғни Хисап көнөндә һәр кемдең тышҡы ҡиәфәте был донъялағы эске йөкмәткеһенә, халәтенә ярашлы булыр. Беҙҙең бөгөнгө холҡобоҙ тышҡы ҡиәфәтебеҙҙә сағылыш табасаҡ. Шуға күрә онотмайыҡ: беҙҙең бөгөнгө көн итмешебеҙ киләһе тормоштағы йөҙөбөҙҙө формалаштыра!

❁

Беҙҙең баҡыйлыҡҡа сәфәребеҙҙә физик көсөбөҙ йәки матурлығыбыҙ, вазифабыҙ, фани донъялағы хәлебеҙ һәм байлығыбыҙ түгел, ә иманыбыҙ һәм изге ғәмәлдәребеҙ генә файҙа бирәсәк. Тимәк, уйланырға тейешбеҙ:

– Баҡыйлыҡҡа сәфәребеҙ өсөн сумаҙаныбыҙға нимә йыйҙыҡ?

– Физакәр тырышлығыбыҙҙы һалдыҡмы беҙ унда?

– «Йә Раббым! Сират күперендә утҡа ҡолауҙан арала, мин бит Һинең ризалағың өсөн шуны-шуны эшләнем!» - тип әйтә алырлыҡ ғәмәлдәребеҙ бармы?

Әллә беҙ әхирәткә, Аллаһ һаҡлаһын, ғәмһеҙлегебеҙ, хаталарыбыҙ, гонаһтарыбыҙ менән барабыҙмы?!

❁

Баҡыйлыҡҡа күскән һәр әҙәм был фани донъянан үҙе менән йә бәхет, йә бәхетһеҙлек алып китә. Фани донъя баҫыуҙарына нимә сәсһә, әхирәттә шуны ура. Бөгөн баҫыуын буш ҡалдырғандар әхирәттә үҙе бик тә мохтаж буласаҡ әжер-сауаптарҙан мәхрүм ҡаласаҡ. Баҫыуына гонаһ, итәғәтһеҙлек осрлоҡтары сәсһә, ғазаплы язанан башҡа һис нәмәгә эйә булмаҫ.

❁

Тамуҡ уты кешеләрҙең яман халәттәре һәм сифаттарынан дөрләп яна, ә Йәннәт баҡсалары кешеләрҙең иманында, күркәм холҡонда һәм изге ғәмәлдәрендә үҫә.

❁

Әгәр көслө ер тетрәү булһа йәки нимәлер шартлаһа, беҙ әйтәбеҙ: «Әйтерһең, Ҡиәмәт көнө еткән!». Ысын Ҡиәмәт етеүе, йондоҙҙарҙың ҡойолоуы, күктең төргәк кеүек төрөлөүе, ә тауҙарҙың сәселеүе – кеше аңы һыйҙыра алмаған хәтәр ҙур тетрәнеү.

Был көндө сабыйҙар ҡурҡыуҙарынан сал сәсле ҡарттарға әүереләсәк, ауырлы ҡатындарҙың бәпәйҙәре төшәсәк, күҙҙәр атылып сығасаҡ, кешеләр ҡурҡыштарынан иҫерек кеүек буласаҡ.

Ҡурҡыу һәм ҡайғы менән тулы был хәтәр көндә, илаһи яҡлау аҫтындағы, ҡурҡыуҙан азат булған бәхетле ҡолдарына Раббыбыҙ Аллаһ шундай яҡшы хәбәр бирә:

«Хаҡтыр, Аллаһтың дуҫтарына ҡурҡыныс юҡ, улар хәсрәттә ҡалмаҫ. Улар – иман килтереп, тәҡүәлеккә ирешкән кешеләр» (Юныс, 62-63).

❁

Тәндәребеҙҙең тормошо – юҡҡа сығыуға дусар күләгәләр кеүек. Әммә Аллаһтың салих ҡолдарының исемдәре һәм шәхестәре улар фани донъянан киткәс тә онотолмай. Улар Ҡиәмәткә саҡлы кешеләрҙең күңелдәрендә һаҡланасаҡ.

Мөхтәрәм Ғәли (радыйаллаһу ғәнһү) әйткән:

«Был донъяла саҡта, кешеләр һине һағынырлыҡ камил тормош менән йәшә. Һин үлгәс, улар һине юҡһынырлыҡ булһын...»

❁

Иман эйәләренән “ул игелекле кеше ине” тигән танытма алып әхирәткә күсеү – бөйөк бәхет. Сәғди Шәйех әйткән:

«Игелек ҡылып йәшә, һин үлгәс, кешеләр һине яҡшы итеп, һағышланып иҫкә алһын һәм әйтһен: «Ҡояш батты, йондоҙ һүнде!»».

❁

Үлем килгәнсе, Раббыһына ҡайта алыусылар бәхетле!

Аллаһы Тәғәләгә буйһоноп, мәңгелек бәхеттең рухи ләззәтендә, йөрәгендәге иман һоҡланыуы, таҙа намыҫ һәм Ҡөрьән рухиәте менән йәшәүселәр бәхетле!

Мәңгелеккә фани донъяла яҡты эҙ ҡалдырып китеүсе тәҡүәле ҡолдар бәхетле!

ЙӨКМӘТКЕЊЕ

ТӘҠДИМ 5
ИНЕШ ЊҮҘ 7
ҒАЛӘМ СЕРЕ ЊӘМ ХИКМӘТЕН КҮҢЕЛ КҮҘЕ МЕНӘН УҠЫУ 11
АЛЛАЊ МЕНӘН БЕРГӘ БУЛЫУ 32
ҠӨРЬӘН КӘРИМ 48
БЕҘҘЕҢ ПӘЙҒӘМБӘРЕБЕҘ (саллəллаһу ғələйһи үə сəллəм) 62
МӨХӘББӘТ МЕНӘН СӨННӘТКӘ БӘЙЛӘНЕҮ 80
ЫСЫН БАЙЛЫҠ - ЙОМАРТЛЫҠ 92
ИСРАФТАН, ҠОМЊОҘЛОҠТАН ЊӘМ ТУЙМАҪ ТЕЛӘКТӘРҘӘН ҠАСЫУ 111
ТӘСАУЫФ – ШӘРИҒӘТ – ИСТИҠӘМӘТ 128
НӘФЕСЕҢДЕ ТӘРБИӘЛӘҮ ЊӘМ ЙӨРӘГЕҢДЕ ПАКЛАУ 142
ТӘҮБӘ ЊӘМ ЯРЛЫҠАУҘЫ ЊОРАП ЯЛБАРЫУ 153
ТАҢ АЛДЫ СӘҒӘТТӘРЕН ҒИБӘҘӘТ МЕНӘН ЙӘНЛӘНДЕРЕҮ 161
ҒИБӘҘӘТ 166
ҮҘЕҢДЕҢ МЕҪКЕНЛЕГЕҢДЕ ТАНЫУ, БАҪАЛҠЫЛЫҠ 190
ТӘКӘББЕРЛЕКТӘН ЊӘМ ЊАУАЛАНЫУҘАН ҠАСЫУ 201
ҒӘФҮ ИТӘ БЕЛЕҮ ЊӘЛӘТЕ, ТҮҘЕМЛЕҠ, АСЫУҘЫ БАҪЫУ 208
РӘХМӘТЛЕ БУЛЫУ 222
САБЫРЛЫҠ ЊӘМ ҠӘНӘГӘТЛЕ БУЛЫУ 230
ЛАЙЫҠЛЫҒА - МӨХӘББӘТ, ЗАЛИМҒА - НӘФРӘТ 247

ТӘҠҮӘЛӘР МЕНӘН БЕРГӘ БУЛЫУ,
ГОНАҺКӘРҘӘРҘӘН ҺАҠ БУЛЫУ 257

ХАРАМДАН ҺАҠЛАНЫУ 274

ХОЗУРЛЫ ҒАИЛӘ УСАҒЫ 300

ЯҢЫ БЫУЫН ТУРАҺЫНДА ХӘСТӘРЛЕК 319

ХӘҠИҠИ ҒИЛЕМ, ХӘҠИҠИ БЕЛЕМ 332

ИСЛАМҒА САҠЫРЫУ ҺӘМ УНЫҢ ЫСУЛЫ 348

ӘХЛАҠЛЫЛЫҠ ҺӘМ ӘҘӘПЛЕЛЕК 366

МӘРХӘМӘТ ИНСАНДАРЫ 378

РУХИ ҮРҘӘРҘЕҢ ИҢ ЮҒАРЫ БАҪҠЫСЫ - ХЕҘМӘТ 391

МОСОЛМАН ӨММӘТЕНЕҢ ПРОБЛЕМАЛАРЫ
ТУРАҺЫНДА БОРСОЛОУ 417

ӘХИРӘТТЕ АРТЫҒЫРАҠ КҮРЕҮ 434

БАҠЫЙЛЫҠҠА СӘФӘР 446